# Ағиҙел

Өфө,
ғинуар
2011

1(1053)


ӘҘӘБИ-НӘФИС ҺӘМ ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ ЖУРНАЛ
ЛИТЕРАТУРНО-ХУДОЖЕСТВЕННЫЙ
И ОБЩЕСТВЕННО-ПОЛИТИЧЕСКИЙ ЖУРНАЛ


Ойоштороусылары:

Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте,
Башҡортостан Яҙыусылар берлеге,
Редакция коллективы.

Учредители:

Правительство Республики Башкортостан,
Союз писателей Республики Башкортостан,
Коллектив редакции.

1923 йылдың март айынан башлап сыға.
Башҡорт телендә айына бер тапҡыр баҫыла.
Издается с марта 1923 года.
Выходит один раз в месяц на башкирском языке.


АҒИҘЕЛ ● АГИДЕЛЬ

***Баш мөхәррир***

Әмир ӘМИНЕВ

***Мөхәрририәт:***

Мөхәмәт БАҒЫШАЕВ,
Рауил БИКБАЕВ,
Рәмил ЙӘНБӘК *(баш мөхәррир урынбаҫары)*,
Марат ҠӘРИМОВ,
Фәнил КҮЗБӘКОВ *(бүлек мөхәррире)*,
Ноғман МУСИН,
Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ,
Сабир ШӘРИПОВ *(бүлек мөхәррире)*,
Әмир ЮЛДАШБАЕВ.

***Редакция хеҙмәткәрҙәре:***

Гөлназ Ҡотоева *(яуаплы сәркәтип)*,
Мәхмүт Хужин *(бүлек мөхәррире)*,
Ләйсән Мараҡанова *(өлкән мөхәррир)*,
Харис Сәғитов (баш мөхәррирҙең хужалыҡ эштәре буйынса урынбаҫары),
Гүзәлиә Тутаева, Әлфиә Махиянова *(корректорҙар)*,
Рәйсә Ҡамалетдинова, Ләйсән Ишембәтова *(компьютерҙа йыйыусылар)*,
Роза Шәйнурова *(компьютерҙа нәшергә әҙерләүсе)*,
Рима Нәзифуллина, Зөлфиә Биктимерова *(бухгалтерҙар)*.

Журнал Элемтә, мәғлүмәт технологиялары һәм масса коммуникациялары өлкәһендә күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттә 2009 йылдың 14 авгусында теркәлде.
Таныҡлыҡ ПИ № ФС-37206.

---

Журнал редакцияла компьютерҙа йыйылды һәм биттәргә һалынды.
Баҫырға ҡул ҡуйылды 12.01. 2011. Офсет ҡағыҙы. Форматы 70х100 1/16.
“Times” гарнитураһы. Офсет ысулы менән баҫылды.
Шартлы баҫма табаҡ 15,6. Иҫәп нәш. табаҡ 18,1.
Тиражы экз. 4 300 Һатыуҙа хаҡы ирекле. Заказ № 2.0003.11.

---

**Беҙҙең адрес:** 450001, Башҡортостан Республикаһы,
Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2, 4-се ҡат.
«Ағиҙел» журналы редакцияһы.
**Наш адрес:** 450001, Республика Башкортостан,
г.Уфа, проспект Октября, 2, 4-й этаж.
Наш адрес в Интернете: Agideljurn@mail.ru.
http://agidel.pressarb.ru.

---

Баҫма Матбуғат һәм киң мәғлүмәт коммуникациялары буйынса федераль агентлыҡтың финанс ярҙамында сығарылды.
Выпуск издания осуществлен при финансовой поддержке
Федерального агенства по печати и массовым коммуникациям.

---

Башҡортостан Республикаһының «Өфө полиграфкомбинаты»
дәүләт унитар предприятиеһында баҫылды.
(450001, Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2).
Отпечатано в Государственном унитарном предприятии
Республики Башкортостан «Уфимский полиграфкомбинат».
(450001, г.Уфа, пр.Октября, 2).

---

Банкыла беҙҙең реквизиттар: журнал «Агидель» ИНН 0274014887
р/с 40602810200830000004, к/с 30101810600000000770
филиал ОАО «Урало-Сибирский» банк г.Уфы, БИК 048073770

**© «Ағиҙел», 2011 (1,1053)**

# БЫЛ ҺАНДА:


СӘСМӘ ӘҪӘРҘӘР

**Иҙрис Ноғоманов.** Һаҡмарбаш. Т а р и х и  р о м а н . *Башы.* ............5

ШИҒРИӘТ

**Фәнил Күзбәков.** Йыһан үлсәмдәре. Ш и ғ ы р ҙ а р . ........................84
**Зөһрә Алтынбаева.** Башҡортостан – тыуған ергенәм!
Ш и ғ ы р ҙ а р . ..........................................................................93
**Мөнир Вафин.** Ғүмер һуҡмағы. Ш и ғ ы р ҙ а р . ..............................97

СӘСМӘ ӘҪӘРҘӘР

**Наил Ғәйетбай.** Бәхет сере. Э с с е . *Башы.* ...................................103

БЕҘҘЕҢ КАЛЕНДАРЬ

**Баязит Бикбай.** Онотолмаҫ ғүмер
*(Ғәлимов Сәләмдең тыуыуына 100 йыл).* .....................................124
**Сабир Шәрипов.** Йылмайып баҡты донъяға
*(Марсель Искәндәрҙең тыуыуына 50 йыл).* ..................................127

*Башҡортостан яҙыусыларының сираттағы съезы алдынан*

Әҙәбиәт тормош дәреслегеме бөгөн?
**Фәнил Күзбәковтың Зәки Әлибаев, Азамат Юлдашбаев,**
**Әхмәр Ғүмәр-Үтәбай** менән әңгәмәһе. .......................................128

ӘҘӘБИ ТӘНҠИТ

**Гөлнур Ҡасҡынова.** Һәҙиә Дәүләтшинаның шиғри мираҫы. .......145
**Сәриә Рамазанова.** Рамаҙан Өмөтбаев хикәйәләрендә
замандаш образы. ..........................................................................149

ПУБЛИЦИСТИКА

**Мәхмүт Хужин.** «Ҡуян йылы»на ла аяҡ баҫтыҡ. ............................151
**Рауил Бикбаев.** Халыҡтың хәтер көсө. .........................................157
**Миҙхәт Саҙрыев.** Хәҙерге ғаиләнең социаль-философик
нигеҙҙәре. .......................................................................................162
**Венер Сәхәүетдинов.** Ағиҙел буйлап төшкәндә. ...........................168

РУХИ МӘҘӘНИӘТ

**Рәшит Шәкүр.** Хәҙерге башҡорт матбуғаты һәм тел мәҙәниәте. ..181

СӘНҒӘТ

**Нина Турицына.** Яҙға һәм яҡтылыҡҡа ғашиҡ рәссам. .................187

ӘҘӘБИ-МӘҘӘНИ МӨХИТ

# В НАШЕМ НОМЕРЕ:

ПРОЗА И ПОЭЗИЯ

**И. Нугуманов.** Сакмарбаш. Исторический роман. *Начало.*
**Ф. Кузбеков, З. Алтынбаева, М. Вафин.** *Стихи.*
**Наиль Гаитбай.** Секреты людского счастья. *Эссе. Начало.*

НАШ КАЛЕНДАРЬ

**Баязит Бикбай.** Кречет поэзии *(100 лет со дня рождения Г. Саляма).*
**С. Шарипов.** С улыбкой на лице *(50 лет со дня рождения Марселя Искандара).*

*Встречая съезд писателей Башкортостана*

Является ли литература учебником жизни? **Интервью Ф. Кузбекова с З. Алибаевым, А. Юлдашбаевым, Ахмер Гумер-Утябаем.**

ЛИТЕРАТУРНАЯ КРИТИКА

**Г. Каскинова.** Поэтическое наследие Х. Давлетшиной.
**С. Рамазанова.** Образ современника в рассказах Р. Уметбаева.

ПУБЛИЦИСТИКА

**М. Хужин**. Вступая в Год кролика.
**Р. Бикбаев.** Сила памяти народной.
**М. Садрыев.** Социально-философские основы образования современной семьи.
**В. Сахаутдинов.** Сплавлялись мы по Агидели.

ДУХОВНАЯ КУЛЬТУРА

**Рашит Шакур.** Современная пресса и языковая культура.

ИСКУССТВО

**Нина Турицына.** Художник Борис Домашников.

ЛИТЕРАТУРА, КУЛЬТУРА…

---

**Телефондар:**
Баш мөхәррир — 277-76-88 (факс)
Баш мөхәррир урынбаҫары һәм яуаплы сәркәтип — 274-89-65
Баш мөхәррирҙең хужалыҡ эштәре һәм подписка буйынса урынбаҫары —292-77-60 (факс)
Шиғриәт һәм сәнғәт, тәнҡит, публицистика бүлектәре —277-87-73
Проза бүлеге — 277-87-50
Бухгалтерия — 277-78-90 (факс)

● Редакция фекере авторҙар фекере менән тап килмәҫкә лә мөмкин.
● Редакцияға килгән ҡулъяҙмалар рецензияланмай һәм кире ҡайтарылмай.
● Журналда сыҡҡан яҙмаларҙы күсереп баҫҡанда «Ағиҙел»дән алынғанлығын күрһәтеү мотлаҡ.
● Нәшриәт ғәйебе менән киткән етешһеҙлектәр өсөн редакция яуап бирмәй. Улар хаҡында 223-76-62 телефоны менән хәбәр итергә кәрәк.



Иҙрис
НОҒОМАНОВ

# ҺАҠМАРБАШ

## ТАРИХИ РОМАН

### I. Йәнкәй-йәнәш

*Саҡыра ла кәкүк, һайрай былбыл,*
*Талдар араһында ҡағынып.*
*Ауырып та ятып һарғайманым,*
*Мин һарғайҙым һине һағынып.*

(Башҡорт халыҡ йыры "Томан")

Йәйге самаһыҙ оҙон көндәрҙең тағы берeһе тамамланыуға тарта. Мәғрип[1] күҙгә күренеп айғуралана[2] башлауға, тауҙарҙың күк йөҙө менән ҡауышҡан офоҡ ситендә унда-бында күренгән ҡыйғас болоттар серле лә, шомло ла ҡан-ҡыҙғылт төҫкә мансыла. Түҙеп торғоһоҙ бөркөүлек иҙеүенән ахыр сиккә етеп әлһерәгән ярым үлек тәбиғәткә ҡабаттан йән керә. Ана, иртәнән бирле өн сығармаған кәкүк тауыш бирҙе, һандуғас киске йырын башлауы булды, уға башҡа былбылдар ҙа ҡушылды. Шул рәүешле, дәртләндермәккә, күмәк ауаз менән күтәреп алдылармы ни илаһи моң оҫтаһын!

Иртәнән кискәсә еләҫ ояларында боҫоп ятыуҙан ярайһы уҡ асҡаҡһырға өлгөргән балапан менән балаяндарына тәғәм эҙләп һауаға күтәрелгән сал

[1]Мәғрип— көнбайыш.
[2]Айғураланыу — киске шәфәҡтең балҡып китеүе.

*Иҙрис Ноғоманов (1952) Әбйәлил районы Әхмәт ауылында тыуған. Совет Армияһында хеҙмәт итә, Баймаҡ ауыл хужалығы техникумын, Башҡортостан ауыл хужалығы институтын тамамлай. Егерме йылдан ашыу агроном булып эшләй. Хәҙер ул — Ҡыҙрас ауыл хакимиәтендә ер төҙөлөшө буйынса белгес.*

*Ҡулъяҙмалары 2002 йылда Стәрлетамаҡта уҙғарылған йәш прозаиктарҙың республика семинарында ыңғай баһаланды. Шунан бирле уның повестары, хикәйәләре матбуғатта баҫылып тора. "Һаҡмарбаш" — авторҙың тәүге романы.*

бөркөт бер тирәлә талғын ғына әйләнергә тотондо. Унығына саңҡылдаҡ һар эйәрҙе. Йоҡомһорап ятҡан Ҡөҙрәтҡол тумарлығын тартай тауышы уятты, Һаҡмар туғайында бүҙәнә ҡысҡырҙы.

Киске һалҡын төшөп, һауа еләҫләнеү менән, ана шулай бөтөнләй башҡа төҫ ала ла кинәт үҙгәрә лә китә Һаҡмар буйы. Томра ҡыуан елгә бирешеп баш эйгән үлән ҡабат турайып баҫа, эҫегә ҡурылып төҫһөҙләнә башлаған япраҡтар әүәлгесә сағыулана. Борғаланып-борғаланып тыныс ҡына ағып ятҡан Һаҡмарҙың да йөҙө баҙыҡланып киткәндәй була хатта. Барлыҡ тереклеккә тын алыуы иркенәйеп, уйһыу үҙән буйҙарында саңыт төҫмөрләнә. Оҙаҡламай ул аҡ томанға әйләнер. Унан сал башлы ҡылған, арышбаш, башҡа үләндәр ҙә, был юлы инде ысыҡтан һәлмәкләнеп, йәнә һығыла башлар.

Ошо илаһи һиллекте боҙоп, тирә-йүнде кинәт һиҫкәндергән сыбыртҡы тауышы ишетелде. Тимәк, Әхмәтйән бейәләрҙе киске һауынға алып ҡайта. Үҙе әйтмешләй, сереп байыған Биксәнтәй ағайҙың йылҡыһын көтә ул. Ҡарап тороуға һис бирмәҫһең ун дүртте Әхмәтйәнгә, торғаны еткән егет инде: урта буй, ныҡ, мыҡты кәүҙә, ҡоңғорт сырай, соғол[3] холоҡ. Үҫмерҙең олпат-ҡалын, бер-берәһенә тоташып тигәндәй торған ҡаштарына, ҡыйғыр ҡарашлы һоро күҙҙәренә байтаҡ ҡыҙҙар ғашиҡ Һаҡмарбашта. Тик өлкән йылҡы көтөүсе Әхмәтйән (эйе, эйе, үҙе йәш булһа ла, аң-фиғеленә ярашлы, бай уны өлкән көтөүсе итеп ҡуйҙы) шул сибәрҙәр араһынан берәүһен генә үҙ итә, уға арнап йырҙар сығара, әммә әлегә йөрәк түрендәге саф тойғоларын белдерергә бер нисек тә тәүәккәлләй алмай. Шул ҡара ҡашты осратһа, бигерәк тә аулаҡ урында тап иткәнендә, күп тапҡырҙар ҡабатлап, күңелгәре әҙерләп ҡуйған барлыҡ һүҙҙәрен онота ла ҡуя, гүйә, телһеҙ ҡала. Ҡыҙ, әлбиттә, һиҙенә, тик белмәмешкә-күрмәмешкә һалыша һымаҡ, өндәшмәй генә, аҫтыртын йылмайып үтә лә китә. "Шулай булырға тейештер ҙә ул. — Ҡашлы эйәрҙә сайҡала-сайҡала килгән Әхмәтйән татлы уйҙарға бирелеп киткәнен һиҙмәй ҙә ҡала. — Баҫалҡы, тыйнаҡ булыуы яҡшылыр ҡыҙ кешенең..."

Йәйен дә, ҡышын да бер сама теш ҡамаштырырлыҡ һалҡын һыулы Ҡаран йылғаһы башындағы иркен яланда тыныс ҡына утлап йөрөгән, дүрт быуынлы сыбыртҡы тауышына инде күнегеп бөткән төрлө төҫтәге йылҡы малы, таныш сартылдау ишетелеү менән, өс һуҡмаҡлы арба юлына төшөп, ҡайтыу яғына ыңғайланы. Күмәк тояҡ аҫтында ҡалып ныҡ тапалыуҙан иҙгесләнгән оло юл өҫтөндә ойоҫҡоп туҙан күтәрелде. Башта тыныс ҡына барған көр бейәләр, сарсап көткән ҡолондары янына тиҙерәк ҡайтып етергә ашҡыныуҙан, деһерләшеп һәлмәк юртыуға күсте. "Һауырға алып килгәндә ҡабаландырып ярһытма", — ти ҙә ул Биксәнтәй ағай, әммә ләкин нисек итеп аңһыҙ хайуанды тотмаҡ кәрәк? Ҡыҙа башланылармы, һис туҡтатып алырмын тимә. Ни өсөн тигәндә, уларға һауым алдынан тәмле һоло эләкһә, аҙағынан бәрхәт ише йомшаҡ ирендәре менән ҡымтып-ҡытыҡлап ҡолондары тылҡый. Бәләкәстәр бераурыҡ әсәләренә иркәләнеп, наҙланып ҡала. Шуға күрә лә өҙләкһеҙ ашаныуҙан йоп-йомро булған бейәләр Һаҡмар бөгөлөндәге тоҡан кәртәгә тиҙерәк ҡайтып етә һалырға ашҡынып тора. Айырыуса тәүгә ҡолонлағандары тынғыһыҙ.

Йәш көтөүсе уксәһе менән менгеһенең ҡабырғаһына ҡағылып алды ла, әкренләп ҡыҙа барған өйөр ихтыярына бирелеүҙән, юртыуға күсте. Шул рәүешле, ырамлы ат аҙымы ыңғайына һәлмәк һикерә-һикерә барышлай, бая өҙөлөп ҡалған уйҙарын ялғаны...

[3]Соғол — етди, тыныс.

“Эйе, баҫалҡы ҡыҙ — матур ҡыҙ. Эстән дә, тыштан да күркәм булырға тейеш ҡыҙҙар. Сөнки улар — буласаҡ әсәләр“. Атайһыҙ үҫһә лә, белә Әхмәтйән: ир заты көндәлек мәшәҡәттәрҙән бушап, бөтмәҫ эштәрҙән арынып һәр ваҡыт та өйҙә тора алмай. Ә әсәй кеше булырға мәжбүр. Юҡ, шөғөлө юҡлыҡтан түгел! Әсәйҙәрҙең мәшәҡәттәре тауыҡ сүпләһә лә осона сығырлыҡ түгел. Уға емерелеп ятҡан башҡа эшен дә мәлендә башҡарып өлгөрөргә, балаһын да бағырға кәрәк. Баланың киләсәктә ниндәйерәк кеше булыуы күберәгеен әсәйҙән торалыр. Хаҡ әйтә Биксәнтәй ағай. Һәр кем үҙе ише кеше тәрбиәләй, ти ул. Дөрөҫө шул да баһаң! Атайҙарыбыҙ, ағайҙарыбыҙ — ил тотҡаһы, кәрәк сағында илдең ҡалҡаны ла. Ғаиләне аҫрау, ер-һыуыбыҙҙы ҡурсыу күберәген, күберәген генә түгел, тулыһынса улар иңендә. Тәрбиә эшенә ирҙәрҙең бөтөнләй форсаты ҡалмай. Түҙемле, аҡыллы әсәйҙәр тап ошондай мәлдә кәрәк тә инде. Алама холоҡло, шаҡшы ҡатын бер ваҡытта ла яҡшы ҡыҙ, егәрле ир-егет тәрбиәләй алмайҙыр. Быныһы көн кеүек асыҡ. Иншалла, Әхмәтйәндең күҙ атып йөрөгәне инсафлы, тәрбиәле заттан. Ата-әсәһе ауылда абруйлы кешеләр. Ауылда ғынамы?!

Биксәнтәй ағай, серегән бай булһа ла, ифрат ябай әҙәм. Хеҙмәтселәре, ялсылары алдында бер ваҡытта ла күкрәк һуғып, һауаланып тормаҫ, тупаҫ ҡыланмаҫ, һәр саҡ үҙенсә итәғәт менән мөғәләмә итер. Типә-тиң күрмәһә лә, алағайымға йәберләп, нахаҡҡа намыҫына теймәҫ. Хәйер, бай менән хеҙмәтсе араһында ниндәйҙер арауыҡ булыуы зарурҙыр. Үтә ныҡ сөсөләнеп китергә лә ярамайҙыр баймын тигән байға: ялсыларындың елкәнә менеп ултырыуы бар. Әлеге арауыҡты тейешле кимәлдә тота һәм һаҡлай белеү кәрәк. Ана шундай кеше инде Биксәнтәй ағай. Буй етмәҫлек итеп йыраҡлашып та китмәй ул ауыл халҡынан, башына менгәндәй самаһыҙ шаштырып та ебәрмәй. Теҙгенде ныҡ тота, ҡыҫҡаһы. Ҡаты ҡуллы, бер һүҙле булһа ла – ғәҙел. Шуның өсөн дә уны халыҡ ярата, ихтирам күрһәтеп үҙ итә. Бәғзе түрәләр ише бушалйыҡҡа бер кемде лә йәбергә бирмәҫ. Ят бауыр булһынмы, яҡынмы – һәр урында, һәр саҡ тигеҙ күрергә тырышыр. Әхмәтйәндең йәшертен генә ғишыҡ тотоп йөрөгән Гөлбикәһе ана шул Биксәнтәй байҙың ҡыҙы була инде...

Буйтым ярһый төшкән бейәләр, деһерләшеп, ике яғы янлап сабылған сауҡа һайғауҙан тотолған ҙур тоҡон кәртәгә килеп тулдылар ҙа бүрәнә улаҡтарға һалынған туҡ һолоға йомолдолар. Йәнәш бүлемдәге ереле-ваҡлы ҡолондар, ымһындырғыс һөт еҫен һиҙеү менән, тыпырсынып-сыйҡылдашып кешнәшергә тотондо. Бейә һауған ҡатын-ҡыҙҙың үҙ-ара мәрәкәләшеп көлөшкәненә ҡушылып ағас күнәктәрҙең бер-берeһенә бәрелеп дыңғырҙашҡаны, мөңгөрмөңгөр һөйләшкән ирҙәр тауышы ишетелеп ҡала, ара-тирә аттар ҡуршылдашып ҡуя. Уларына ҡолонсаҡтары яуап бирә. Әле генә тып-тын ятҡан туғай ҡапыл ғына һәр төрлө ауаздарға күмелә. Күңелле булып ҡала Һаҡмар буйында.

Мәңге туйыу белмәҫ бәйләнсек күгәүендән, ҡанэскес серәкәй-себендән, күҙгә инеп килгән оңҡот ләпәктән, ат йонсотҡос бөгәләктән ҡотолоу өсөн төтөнлөктәр һалынып, тирә-яҡҡа янған тиҙәк еҫе ҡатыш күгелйем төтөн таралыуға, бейәләр, ниһайәт, тыныслана. Шуны ғына көткән һауынсылар дәррәү эшкә тотона. Тәүҙә буш күнәк төбөнә бәрелеп селтерәгән һөт тауышы тора-бара гөбөрләүгә күсеп, һауыттар йылдам тула. Бер аҙ эйендеһен ҡалдырып, һауылған бейәләрҙе түҙемһеҙләнеп көткән ҡолондары янына индерә торалар. Улары, махсус эшләнгән һирәк кәртә аша һонолоп, ярылып торған кинәнес менән хәләл өлөштәрен имә. Бейәләр ҙә, ҡолондары ла көндәлек ошо

эшкә күнегеп бөткәндәр, барыһы көйләнгән бында. Бер ниндәй ығы-зығы ла, буталсыҡ та юҡ, ҡарап тороуҙары рәхәт...

— Шунан, Әхмәтйән ҡусты, хәлдәр нисек?

Баянан бирле күнәген беләгенә элеп, кеҙәһен[4] йәтешләп тотҡан килеш бер бейәнән икенсеһенә күсеп шифалы һөт һауған Гөлбикәнән ҡарашын айыра алмай торған үсмер тертләп ҡуйҙы. Янына әллә ҡайһы арала килеп баҫҡан Биксәнтәй бай барлыҡ уй-хистәрен, кисерештәрен белеп ҡалғандай тойолдо уға. Уңайһыҙланып китте хатта.

— Аллаға шөкөр әлегә, Биксәнтәй ағай, — тигән булды.

— Айғырҙар һыйышмай, өйөрҙө бүлгесләп аҙапламаймы?

— Тәүҙәрәк бер аҙ маҙаға тейәләр ине. Хәҙер Ҡарайғыр еңеп алды. Ҡола буйһондо, әллә ни ярып инеп бармай.

— Яҡшы. Өйөрҙә бер генә башлыҡтың булғаны һәйбәт. Ике тәкә башы бер ҡаҙанға һыйып бөтмәй ул...

— Шунан, теге Сысҡанһырт бейәнең көнө етәлер, аулаҡ тартып, ҡасып китеү яғын ҡайыра ла тора, мәлғүн.

— Бөгөн үк айырып ҡалдырығыҙ. Ҡолонон Ҡарайғырҙың тәләфләп ҡуйыуы бар. Ҡолаға яткайны ул, яңылышмаһам.

— Айырырбыҙ.

— Төнгөләккә ҡайһығыҙ сыға?

— Ғәлимйән ағай. Хәҙер килеп етергә тейеш.

— Мәгәр мин тап итмәһәм, ныҡлап әйтерһең.

— Әйтермен, үҙем айырышырмын, Биксәнтәй ағай.

Аҡ йөҙлө, йөнтәҫ яҫы ҡашы өҫтөнә күпереп торған ҡара сәсле, йыуантыҡ булыуға ҡарамаҫтан, килешле, төҙ кәүҙәле Биксәнтәй бай ҡайҙалыр үҙ эштәре менән китте. Туҙанлы юлда саң ултырған ялтыр хором итектәренең табан эҙҙәре асыҡ беленеп ҡалды.

Әхмәтйәндең ҡолағына Һаҡмар үрендәге бөгөл яғынан ишетелгән ҡурай тауышы салынды. “Олатай ҡайттымы әллә?”– Һағайыуҙан ҡолағы ҡарпая төшкән көтөүсе моң килгән тарафҡа ашыҡты. Йыуан булмаған муйыл ағасынан еүеш ергә ҡағып әтмәләнгән һөйәнгесеҙ йәтеш ултырғыста бөкрәйә бирерҡерәп ултырған Ҡолтой ҡарт дәртләнеп китеп ҡурай һыҙҙыра ине.

Ҡолтой олатай Әхмәтйән белә-белгәндән тома һуҡыр. Барымтаға килеп сыҡҡан ҡаҙаҡтар шулай күҙһеҙ ҡалдырған уны, тип һөйләйҙәр. Ғәжәп үткер булған, имеш, олатайҙың күҙҙәре йәш сағында, баҫҡынсыларҙың килә ятҡанын әллә ҡайҙан шәйләп ҡалыр булған. Шуның өсөн дә ҡаҙаҡтар яҡты донъяны күреп йәшәүҙән мәхрүм иткән, йәнәһе. Әммә ҡарт үҙе был турала ауыҙ асып бер ваҡытта ла һөйләгәне юҡ. Ҡыҙыҡһынып һүҙ ҡуҙғатҡандарға: “Булды инде, уландар, булды”, — тиеү менән генә сикләнә. Күҙҙәре ҡарап торалар үҙенең, ә күрмәйҙәр.

Әхмәтйән йөрәкте елкендереп, күңелдәрҙе арбаған, йәндең эсен тышҡа әйләндерер аһәңле моңдан иләҫ-миләҫ хистәргә бирелеп тора. Ҡарт ҡурайсының тешһеҙ ауыҙы ипле генә итеп ҡымтып алған таҡыя ҡурай һыҡрап-һыҡрап моңая, гүйә, нимәгәләр һығылып илап, зар сәсә. Ауыҙында бөртөк тә теше булмағанлыҡтан, ҡурайҙы олатай өҫкө иренә һалып уйнай. Шундай шәп килеп сыға, ҡәһәрең, улай-былай ғына сыйылдатҡан тешле ҡурайсың ары торһон. Тәү ҡарауға килбәтһеҙ күренгән кәкре бармаҡтар ҡыу ҡурай

[4] Кеҙә — еңел ҡороҡ.

өҫтөндә етеҙ бейей, улары ыңғайына хәрәкәтсән ирендәр елберләшә. Бар донъяһын оноткандай тойола ҡарт ошо минуттарҙа...

— Әссәләмәғәләйкүм, Әхмәтйән улым!

Илаһи моң ҡайһы аралалыр өҙөлөп тә ҡуйған да баһаң! Шуны ла аңғармаған үтә хисләнеп киткән егетең.

— Вәғәләйкүмәссәләм, Ҡолтой олатай! — Бабай менән ихласлап, ике ҡулын биреп күреште Әхмәтйән. Ултырып бата ҡылдылар. Егет, һоҡланыуын йәшерә алмайынса: — Мин икәнде ҡайҙан белә алдың? Тауыш-тын сығармаған инем дә, — тип аптыраны.

— Аяҡ баҫышыңдан таныйым мин һине, улым. Үлән ҡыштырлатып атлап килеүең үҙе бер башҡа. Йәнә лә һинән бүтән бер кем дә шул тиклем мөкиббән тыңлай белмәй ҡурайҙы. Бына тағы ҡолаҡ һал әле.

*Һаҡмар ҙа буйы ҡара урман,*
*Тирә-ягы ҡуйы талдарҙан,*
*Һаҡмар һыуы,*
*Буйлап йөрөнөм Һаҡмарҙың буйҙарын,*
*Йырлап үттем халыҡ уйҙарын.*

*Боролоп аҡҡан беҙҙең Һаҡмар*
*Ташып ята бейек ярҙарҙан,*
*Һаҡмар һыуы,*
*Үҫәлер талдар Һаҡмарҙың буйында,*
*Йөҙәм дә йөҙәм Һаҡмар һыуында-а-айй.*

— Әһелә-ә-әйй! Ҡурайың бигерәк моңло, үҙең һәләк зарлы. — Егет, ҡартты ҡупайтып, арҡаһынан ҡаҡты. — Ә икегеҙ бергә үҙәкте өҙөп бараһығыҙ ҙа баһаң!

— Айышына төшөнөп, үҙ иткән кешегә генә шулай ул.

— Ҡурайҙы ярып сыҡҡан башҡорт көйөн яратмаған кеше буламы икән?

— Була, кем... Әхмәтйән улым, була... Таш йөрәктәр етерлек ул. Ҡана һуң һәр ҡайһыһы, һинең ише, йырыбыҙҙы һүжәләп кенә торғанда. Юҡ шул, башҡорт моңо бер башҡортҡа ғына аңлайышлы, шуныһы йәл.

– Үҙеңдең хәл-торош нисек һуң, олатай? — Әхмәтйән самаһыҙ әҫәрләнеп киткән ҡартты ҡыҙғандымы, һүҙ йырҙаһын ҡапыл ғына икенсе юсыҡҡа йүнәлтә һалды. — Ошо арала, нишләптер, күренмәнең дә, тойолманың да.

— Иҙел башы ерҙәрен гиҙеп йөрөп ҡайттым, балаҡай, илдең, халыҡтың тын алышын тыңланым.— Бабай төҫһөҙ ҙә, йәнһеҙ ҙә күҙҙәрен ҡайҙалыр, бер үҙенә генә билгеле нөктәгә төбәгән килеш, уйланып ултырҙы, тамаҡ ҡырып алды. — Күңелем менән генә лә байтаҡты күрергә насип итте миңә Хаҡ Тәғәлә. Хәтәр хәлдәр тураһында ишетеп белдем, улым, һеҙҙең быуын өлөшөнә төшкән көмөш булыр, ахыры...

Төйнәлгән фекерен ахырынаса әйтеп бөтөрмәгән Ҡолтой ҡарт шул урында шым булды. Әхмәтйән артабан ныҡышып төпсөнөп тороуҙы урынһыҙ һананы. Шул рәүешле олатайҙың «өлөшкә төшкән көмөшө» уның өсөн әлегә бер серле йомаҡ булып ҡалды.

Бер-береһен танһыҡлап киткән ҡарт менән егет оҙаҡ ҡына сөкөрләшеп гәп һатты. Икенсе йылҡысы — Әхмәтйәндең уҙағы — эңер төшә башлағанда ғына килеп күренде.

— Ҡайҙа юғалдың, Ғәлимйән ағай? — тип шелтәләп ҡаршы алды уны өлкән көтөүсе. — Нимәһенә шул ҡәҙәре ығышлайһың?

— Еңгәң ауырыҡһып тора.— Тегеһе аҡланғандай итте.— Ташлап сыға алмай оҙаҡлап кителде.

— Нимә, әллә ныҡ ауырыймы?

— Кендек төйнәргә Аҡбикә инәй барып ҡалды былай.— Ғәлимйәндең ауыҙы ҡолағына етте.— Ҡурҡынысы юҡтыр, шәт.

— Кендек төйнәргә, тинеңме? Тимәк...

— Эйе, ҡустым, ағаң инде атай булды.

— Ярай, имен-аман ғына ҡотолғас, хуп,— Ҡолтой ҙа әлеге хәбәргә битараф ҡалманы.

— Аллаға шөкөр, апа, ҡотолдо! Тупылдап торған баһадир малай бүләк итте миңә!

Ҡолтой ҡарт тәғәйен доғаһын ҡылып, бит һыпырҙы:

— Алланүммә — жғәлһү бәрран үә әнбитһү филлисләми нәбәтән хәсәнән үә — жғәлһү мәғсүдән фиддүнйә үә — әһираһ. Йә, Раббым! Был сабый динебеҙҙе ҡеүәтләүсе, ата-әсәһенә игелекле, миһырбан-шәфҡәтле, тәүфиҡлы зөрриәт[5] булһын ине. Ата-әсәһенә тигеҙлек, һаулыҡ-сәләмәтлек менән үҫтерергә насип ит. Амин. Аллаһу әкбәр.

— Амин, шулай була күрһен.

— Ул сағында, Ғәлимйән ағай, һин ҡайт, урыныңа мин көтәйем бөгөнгә, — тип йөрәкһене Әхмәтйән.

— Әлләсе... йонсомаһаң... — Ғәлимйән икеләнеүен икеләнә, әммә үҙенең бар ҡиәфәтенән әле генә яҡты донъяға баҡҡан малайы янына ашҡынғаны күренеп тора.

— Йонсоуын йонсота инде ул. Тик, кәрәк булғас, ни хәл итәһең.

— Эйе шул, — Әхмәтйәнде ҡеүәтләне Ҡолтой олатаһы ла. — Бер төнгә нисек тә түҙер. Йәш кешегә ни...

— Мин хәҙер, йомролай ғына йотоп тамаҡ ялғап киләйем дә. — Өлкән көтөүсе өтәләнеп һикереп торҙо. — Ә һин, ағый, теге мөстән Сысҡанһыртты айырып бикләй тор әле. Биксәнтәй ағай ҡушты.

Матур ҙа һуң әсәд нәжмеһе[6] осорондағы сихри төндәр!

Илаһи хозурлығы өҫтөнә, әкиәти тылсымлыҡ менән солғап алынған төндәрен ошолай әшәк[7] тоҡандырып, уның иҙрәткес йылыһында төрлө уй-хыялдарға бирелеүҙән онотолоп ултырырға ярата Әхмәтйән.

Мөләйем йөҙлө ай әле ҡалҡырға өлгөрмәгән, шунлыҡтан бар донъя дөм-ҡараңғы. Ошо аулаҡ ҡараңғылыҡта туйғансы уйнап-көлөп ҡалырға ашыҡҡан оялсан ҡыҙҙар һымаҡ, баш осонда меңәрләгән йондоҙ емелдәшә. Шулар араһында иң баҙығы — Асыҡ йондоҙ[8], Сулпандан ҡала, әлбиттә. Сулпан әлегә күренмәй. Уныһы таң алдынан ғына айҙаһар[9] менән ҡушарлап күтәрелер. Шимал[10] йүнәлешендә, гүйә, ҡойроғо менән соғол Тимерҡаҙыҡҡа беркетеп ҡуйылған тиерһең, Кесе Етегән әйләнә. Йондоҙҙарҙың ҡай берҙәре ҡапыл атылып китә лә, ҡыҫҡа ғына сағыу эҙ ҡалдырып, ҡайҙалыр юҡ була. «Һәр әҙәмдең үҙ йондоҙо бар», – ти Ҡолтой олатай. Ана шул берҙән-бер йондоҙсоғо йылт итеп янып юҡҡа сыҡҡандан һуң кеше лә йәшәүҙән туҡтай, имеш. Уның

---

[5] *Зөрриәт — сабый бала.*

[6] *Әсәд нәжмеһе — иртә йәй.*

[7] *Әшәк — усаҡ.*

[8] *Асыҡ йондоҙ — Сириус.*

[9] *Айҙаһар — тулған ай.*

[10] *Шимал — төньяҡ.*

йәне тәненән айырыла ла, икһеҙ-сикһеҙ йыһанға ашып, ғәләмдәрҙе барлыҡҡа килтереүсе янына олаға икән. Дөрөҫтөрмө был, юҡтырмы — уныһын Әхмәтйән белмәй, шулай ҙа ышана: Ҡолтой бабай юҡты һөйләмәҫ...

Күмергә әйләнә башлаған торонбаштарға еңелсә генә ҡағылыуың була, күңелле сытырлашып һауаға иҫәпһеҙ-һанһыҙ ваҡ саҡҡылар күтәрелә. Кинәт ҡайнашып киткән осҡондарҙың ғүмерҙәре ҡыҫҡа, күҙ асып йомғансы ғына. Әшәк яҡтыһынан ҡараштарыңды айырып ситкә баҡһаң, ҡапылғара бер ни күрә алмаҫһың. Тик бер аҙҙан, күҙҙәрең күнеккәс кенә, беленер-беленмәҫ һыҙылып киткән офоҡ һыҙатын, тулҡынлы тау һырттарын, шомло ағас шәүләләрен шәйләргә була.

Ҡайҙалыр шырлыҡта һирәк-һаяҡ төн бесәйе — өкө асыулы уһылдап ҡуя, ҡуян артынан уңышһыҙ һунарға сыҡҡан төлкө сәңкелдәгәне ишетелеп ҡала. Асыҡлыҡ уртаһындағы ыҡсым ҡулҡы эсендә туҡ бәйел аттарҙың ҡәнәғәт бышҡырғаны ҡолаҡҡа салына. Киске һалҡында ашап туйған йылҡы рәхәтләнеп юшап тора. Ҡаран һаҙының үтеп сыҡҡыһыҙ тығыҙ бөҙрә таллығында баянан бирле яңғыҙ һандуғас өҙгөләнһә, унан арыраҡ, елбер уҫаҡтар араһында, әллә ҡайҙағы ишен саҡырып һаҡ зарыға. Йәйҙең ошо танһыҡ тауыштарына ҡушылған күп һанлы сиңерткә соролдашыуын иҫәпкә алмағанда, тирә-йүндә ғәжәйеп һиллек хөкөм һөрә. Һис ялҡыу белмәҫ мыжыҡ сиңерткәләр һаман тынысланa алмай, әллә ҡасан башланып, әллә ҡасан осланыр йырҙарын кемуҙарҙан һуҙалар ҙа һуҙалар. Уларға күңелле, улар күмәк. Сиңерткә халҡы иҫәпһеҙ-һанһыҙ, ә Әхмәтйән яңғыҙы. Ошо уйынан егет ҡапыл ғына яманһыулап китә. Их, янында Гөлбикәһе булһа икән! Өйөрҙө көнөн-төнөн көтөргә лә риза булыр ине ул сағында. Һис һүҙһеҙ көтөр ине. Тик... ярамай шул ҡыҙ кешегә төндәрен йөрөп ятырға. Хәйер, Гөлбикә һылыуға өмөт бағлап йөрөгән була ла ул, ашҡыныу-яныуҙары буш хыял ғына түгелме икән? Ни тиһәң дә, уныһы — бай ҡыҙы. Дөрөҫ, Әхмәтйән дә төшөп ҡалғандарҙан түгел. Ул буйһын, ирҙәрсә көс-ғәйрәт, ул аҡыл-зиһен тигәнең. Ошоларына ҡушып донъя көтөүгә ынтылышы ла етерлек. Барыһы ла бар унда, хатта артығы менән. Ә инде мәленән алда һыҙыла башлаған килешле генә мыйығы егет ҡорона инеп килгән үҫмергә үҙенә күрә күркәмлек, хатта мөһабәтлек өҫтәп ебәрһә, һәр ваҡыт йылмайып ҡына торған мөләйем йөҙө теләһә кемде арбап, үҙенә ылыҡтыра. Әммә йәл: Әхмәтйән ҡыҙҙар алдында бер аҙ баҙнатһыҙыраҡ. Киске уйын ваҡытында ҡаршыларына сыҡтымы — юғала ла ҡала. Гөлбикә барында бигерәк инде. Күпме тапҡыр йыйынып ҡараны ул һөйөү тулы хистәрен асып һалырға, тик һылыуҙың килеп күренеүе була — ҡойола ла төшә. Бар үткенлеге юҡҡа сығып, торғаны бер мәүеш малайға әүерелә лә ҡуя. Шул рәүешле үҙенә үҙе яман йәне көйә. Ә Гөлбикә уның ҡаушағанын күрә лә матур итеп көлә. Юрый көлә! Их, уның көлөүҙәре! Гүйә, Ҡаран шишмәһе селтерәй! Бер ишетһәң, ғүмере онота алмаҫһың...

Татлы хыялдарға бирелеп ултырған көтөүсене һиҫкәндереп, Ҡарайғыр тоноҡ кешнәп ҡуйҙы. Уның күкрәк төпкөлөнән гөрһөлдәп сыҡҡан ғәйре тауышын Әхмәтйән әллә ҡайҙан айыра һәм сәбәпһеҙгә бәлә һалып, юҡҡа тыныс-һыҙланмаҫын да яҡшы белә. Берәйһе йөрөй, тимәк, ошо тирәлә. Шул хаҡта иҫкәртеүе аҫау айғыр — уяу башлыҡтың.

Әхмәтйәндең уйҙарын ҡеүәтләгәндәй, алыҫ түгел ат тояғы тауышы ишетелде. Күп тә үтмәҫтән, тилбер ут яҡтыһында һыбайлы ҡарайсығы күренеп ҡалды ла, төн ҡосағынан айырылып, әшәккә яҡынлашты. Ул Биксәнтәй бай ине.

— Йоҡо баҫмаймы, ҡустым? — Бай, эйәрҙән еңел генә айырылып, төнгө ысыҡтан һүлләнә башлаған сирәмгә һикереп төштө.

— Юҡ, әлегә. Иртә бит. — Көтөүсе, байға хөрмәт йөҙөнән, аяғүрә баҫты. — Әйҙә, түрҙән уҙ, ағай, түрҙе табалһаң...

— Күңелең киң икән, бар ерең дә түр ул, Әхмәтйән. — Теҙген осон эйәр ҡашына бәйләгән Биксәнтәй атын ирекҡә ебәрҙе. Унының шунда уҡ мырт-мырт килеп бүтәгә өҙөргә кереште. — Бына әшәк яҡтыһын шәйләнем дә юл ыңғайы һуғылып китергә булдым.

— Байтаҡ йөрөгәнһең, ахыры, ағай, Аҡбәкәл аҫҡаҡһыған, үләнгә йомолоп ята...

— Олоҫто урап ҡайттым. Күҙ-колаҡ булып тормаһаң... — Биксәнтәй бай ярты һүҙҙә туҡтап ҡалды ла, башҡа был юҫыҡта һөйләшкеһе килмәгәнлеген аңғартҡандай, һүҙҙе ҡырҡа икенсегә борҙо: — Ғәлимйән сираты түгелме бөгөн? Ҡайҙа һуң үҙе?

— Уның ҡатыны ҡапыл ғына ауырып киткән, бая килгәйне – кире ҡайтарҙым.

— Яңғыҙыңа ауыр түгелме? Икенсе тәүлек бит инде.

— Әллә ни беленмәгән һымаҡ былай. Таңға табан ғына серемгә тартып ауырайта торған.

— Өсөнсө кеше ҡуяйыммы әллә?

— Унының үҙең хәл итәһең инде, ағай. — Башын баҫып ултырған Әхмәтйән ҡалҡынып байға ҡараны. — Еңелгә тура килер ине лә...

Ошо мәл һаҡколаҡ Ҡарайғыр йәнә тауыш бирҙе. Йоҡо ҡалдырып тағы ҡайһыһы йөрөп ята икән тигәндәй, әшәк янындағылар, ни ҙә булһа күрергә өмөтләнеп, төпһөҙ ҡараңғылыҡҡа төбәлде.

— Һа-а-ай, һеҙ ни икәүләшеп ултыраһығыҙ икән! — Төн эсенән таныш тауыш ишетелде. — Ә мин бына, Биксәнтәй ағай, шул арала атай булырға өлгөрҙөм.— Һүрән ут яҡтыһына шарҙыуан Ғәлимйән һыбай килеп сыҡты.

— Бик мәслихәт, ҡусты. Ҡотлайым үҙеңде! — Тегеһе йәш атайҙың ҡулын ҡыҫты. Сабый тыуғандағы доғаны уҡып бит һыпырғас: — Малаймы, ҡыҙмы? — тип ҡыҙыҡһынды.

— Малай, ағый, малай! —тине Ғәлимйән, оло шатлығын йәшерә алмай. Хәйер, йәшерергә тырышмай ҙа, ахыры. Күҙҙәрендә үҙенең, әшәк яҡтыһы сағылып, осҡон уйнай. — Улым булһын тип теләгәйнем, бирҙе Аллам!

Ә Биксәнтәй бай үҙ сиратында мәғәнәле итеп:

— Исемде матурҙан һайла. Исем-ат ғүмерлеккә ҡушыла, — тип ҡуйҙы.

Хуш еҫле мәтрүшкә төнәтмәһенә ҡарағат япрағы ҡушып ҡайнатылған сәй эстеләр. Үҙенсәлекле тәме менән һушыңды алыр сәйҙе шөрпөлдәтә-шөрпөлдәтә көңгөр-ҡаңғыр килеп ултырғанда ваҡыттың үткәне беленмәй ҙә ҡала бит ул. Йәйге сонтор төндөң ғүмере ҡыҫҡа. Ана, ни арала тиһең, тарафтары һиҙелерлек алһыуланырға өлгөрөп, буйтым яҡтыра ла төшкән.

Таң яҡынлашыуын тойған аттар ҙа әкрен-әкренләп ҡуҙғала башланы, берәм-һәрәм асыҡҡа сығып, бүтәгә утларға кереште. Ҡарайғырҙың муйынына тағылған еҙ ҡыңғырау баҙыҡ зыңлап ҡуйҙы. Ошо ябай ғына аһәңһеҙ бер зың, тыуып килгән яңы көндө сәләмләп, уяна башлаған оло яланға үҙенсә йәм өҫтәне лә ебәрҙе. Биксәнтәй менән Әхмәтйән, Ғәлимйәнгә уңышлы эш көнө теләп, ҡайтыу яғына ҡуҙғалдылар.

Ир һүҙе бер: Биксәнтәй әйткәнен онотманы, иртәгәһенә үк өсөнсө көтөүсе сығарҙы. Ғүмере буйы тамағы икмәккә туймаған, өҫтө йүнле кейем күрмәгән

---

[11]*Мәшрик — көнсығыш.*

ете бала атаһы Ҡотлобай ине ул. Эшкә үшәнерәк, йыптыр, хатта ялҡауыраҡ, йәше лә инде ырап барған ирҙе байҙың шундай яуаплы эшкә яллап ҡуйыуына Әхмәтйән аптырай төшһә лә, өндәшмәне. “Бай үҙе беләлер әле. Бәлки, аслытуҡлы балалары хаҡына шулай иткәндер”, — тип үҙенсә фекер йөрөттө. Ә тегеһенең үҙ төшөнсәһе, яңы көтөүсегә ул тәүге көндә үк:

— Һин, Ҡотлобай ағай, Әхмәтйәнгә күҙ-ҡолаҡ булыңҡырап тор әле. Бигерәк малай ғына, юғиһә, өҫтәүенә — самаһыҙ ауан, — тигән сәйерерәк үтенес белдерҙе.

— Ярай, бай, һин әйтһәң — беҙ башҡарырбыҙ, — тине тегеһе. — Кәүҙәгә дәү булһа ла, бала ғына шул әле.

Был юлы Биксәнтәй бай хәйләләште, әммә хәйләһе эскерһеҙ ине. Уның Әхмәтйәнгә ҡарата булған йылы мөнәсәбәтенең төп сәбәбе үҫмерҙең йәш булыуында ғына түгел. Сәбәп бөтөнләй икенсе. Быны Биксәнтәйҙән башҡа бер кем дә белмәй. Һәр хәлдә үҙе шулай уйлай...

...Биксәнтәйҙең дә булды күкрәп торған йәш саҡтары.

Урта хәлле бер туған Биксура ағаһы өйөндә һирәк торҙо. Күп ваҡытын ҡайҙалыр ситтә үткәрә ине ул. Бигерәк тә йәй осоро етеп, йәшәйеш-көнкүреш иркенәйеүгә, шыпырт ҡына сығып китеп юғалыр ине. Аҙаҡ һөйләүҙәренә ҡарағанда, боласы бағиҙар[12] менән бәйләнештә йөрөгән икән, Уралтауға, аҫаба башҡорт ерҙәренә, ҡанығышып, һөмһөҙ рәүештә инеп килгән баҫҡынсы килмешәктәргә ҡаршы тиңһеҙ көрәштәрҙә ҡатнашҡан. Ә ҡырыҫыраҡ холоҡло атайҙары — Ҡорманай ҡарт, үҙе әйтмәксе, йөрөмтәл Биксураһы өйҙә юғында, уның донъяһын ҡараштырып тороуҙы Биксәнтәйгә йөкмәтер ине. Оҙон йәй буйына ағай донъяһы тулыһынса Биксәнтәй иңендә. Ана шул мәлдә еңгәһенең күрше ҡыҙы Зөлхәмирәгә күҙе төштө егеттең. Күҙ төшөрлөк тә ине шул ҡыҙ, һылыуҙарҙың һылыуы ине ауылда. Хәҙер инде, атай иҫкәртеп тормаһа ла, еңгәй өйөнә үҙенән-үҙе тартыла егеттең күңеле. Мал-тыуар тәрбиәләгәндә лә, башҡа эш менән булашҡанда ла үҫмерҙәр бер-береһенә күҙ атышып, ҡаш һикертеп ала. Күнәктәрен сайҡай-сайҡай һыуға киткән Зөлхәмирәне һағалап ҡына торған Биксәнтәй, аттарын етәкләй һалып, шунда уҡ һуғарырға алып сыға.

— Эй, шәп тә минең ҡәйнеш! — тип еңгәһе кинәйә менән төрттөрөп мәрәкәләй. — Бер юлы атын да һуғара, ҡыҙҙар күҙләп тә өлгөрә...

Гөлзәйнәп еңгәһенең дә һөйөр, һөйөлөр сағы ине ул заманда. Сибәрлеге яғынан да иң һуңғылар рәтендә түгел ине. Ағайының йәш, матур еңгәһен ҡалдырып, шулай оҙаҡ ваҡыттарға ғәйеп булып тороуына Биксәнтәй таң ҡала торғайны.

Тәүге мәлдәрҙә, тап булышҡандарында, бер-береһенә йылмайышып, сәләм биреп кенә үттеләр. Биксәнтәй һүҙҙе ниҙән башларға белмәй аҙапланды. Ҡыҙҙар оялсан була, шуның өсөн әүәл егет кеше өндәшергә тейеш. Тик нимә тип? Башҡа саҡта шаян, үткен Биксәнтәй Зөлхәмирә алдында торғаны бер быҙауға әйләнә лә ҡуя. Байтаҡ ваҡыт йөрөнөләр шулай, әммә ошо рәүешле гелән дауам итеүе мөмкин түгел ине. Һәм Биксәнтәй, бар ҡыйыулығын туплап, ниһайәт, тәүәккәлләргә булды: ғәйепкә алып, ауыҙына һуҡмаҫ әле Зөлхәмирә.

Бер көн, ғәҙәттәгесә, пар атын кисеүгә төшөрҙө лә, улары һыуһын ҡандырғас, теҙгендәренән ҡарт ерекккә көрмәне, үҙе Һаҡмарҙың ҡаршы яҡ

---

[12] *Бағи — баш күтәреүсе.*

ярына сығып, әле генә ҡыҙ үткән яҡҡа атланы. Зөлхәмирә, ишетелер-ишетелмәҫ кенә көй көйләп, йыуан ярҡаларҙан һалынған киң баҫма өҫтөндә кер сайҡай ине. Егеттең яр буйында үҫкән ҡыуаҡлыҡ араһынан көтмәгәндә-уйламағанда килеп сығыуынан тертләп киткән һылыу уңайһыҙланыуҙан алһыуланған матур йөҙөн яулыҡ осо менән ышыҡлай һалды.

— Һаумы, теге, кем... Зөлхәмирә... — Биксәнтәй ыҡ-мыҡ итте. – Н...нимә эшләйһең бында?.. Йәғни, бына мин к…килдем әле...

— Арыу ғына. Кеше ҡурҡытып нимәһенә айыу апа ише һаҙ кисеп йөрөп ятаһың? — Зөлхәмирә зыңғырлатып көлгән булды, ә үҙе оялышынан тағы ла нығыраҡ ҡыҙарынды. Уның үҙенә төбәп әйтелгән саф, яғымлы тауышын шунда тәүләп ишетте егет. Ошо сихри тауыш былай ҙа ҡолаҡтарына тиклем ғашиҡ Биксәнтәйҙең йөрәгенә ут булып ҡапты. Һәм әлеге ут, ялҡынланып-дөрләп китеп, егеткә ҡыйыулыҡ өҫтәне.

— Һине күрергә килдем, — тине ул, үҙенең тапҡырлығына үҙе аптырай биреп.

— Мине күрергә?! — Ҡыҙ ҡапланған битен асты. Сөм-ҡара ҙур күҙҙәрҙә ғәжәпһенеү билдәләре сағылып үтте. Әсир иткес ҡараш!

— Эйе, Зөлхәмирә... Күргем килә лә тора нишләптер...

— Күргең килеп торорға мин һиңә...

— Оҡшайһың миңә, Зөлхәмирә!

— Кит, әҙәпһеҙ. Әллә нимә һөйләп торасы! — Ҡыҙ туҙып ятҡан керҙәрен ҡапыл-ҡапыл ғына йыйып алды ла тапалған йомро һуҡмаҡтан йүгерә-атлай ҡайтты ла китте. Артына боролоп бер ҡараһасы, исмаһам! Һөйләшә белмәгән көйө үпкәләттем шикелле, тип үртәнде Биксәнтәй. Оҡшайһың, имеш! Уйынсыҡмы ни Зөлхәмирә кемгәлер оҡшап торорға?! Тапты әйтер һүҙ.

Ошо осраҡтан аҙаҡ, егет өмөтләнеп күпме генә күҙәтһә лә, Зөлхәмирә байтаҡ ваҡыт күҙенә салынманы. Быҙың сәбәбен Биксәнтәй бер аҙҙан ғына аңланы: һыуға икенсе урынға йөрөй икән ҡыҙ! Хәҙер егет тә аттарын шунда алып барып "һуғара" башланы.

— Ни өсөн шул ҡәҙәре ергә киләһең? Бигерәк алыҫ бит, — тине ул бер осрашҡанда, ҡыҙға өтөп ҡарап.

— Алыҫ булһа… Миндә ни эшең бар? — тип әрепләште сибәр, әммә тауышында тамсы ла уҫаллыҡ тойолманы.

— Былай ғына әйтәм... Ҡыйындыр... Күнәктәрең оторо ҙур бит...

— Һи-и. Бына тағы! — Ҡыҙ, ғәҙәтенсә, көлгән булды. — Һуң, бик йәлләгәсең, алып ҡайтыш.

— Бир! Алып ҡайтам! — Биксәнтәй, бар донъяһын онотоп, көйәнтәгә йәбешмәксе итте.

— Нишләйһең, тиле?! Юрый ғына әйттем бит! Һыу көйәнтәләп килгәнеңде күрһәләр, бөтә ауыл көләсәк. — Көйәнтәне тартып алған Зөлхәмирәнең ғәжәп йомшаҡ усы Биксәнтәйҙең ҡулына ҡағылып китте. Иҫерткес ҡағылыуҙан иҫен юя яҙған егет ҡыҙҙы ҡосоп алыуҙан үҙен саҡ тыйып ҡалды.

— Бер һыу алып ҡайтҡандан ни булыр тиһең?

— Булмаҫ та ул... — Зөлхәмирә күҙҙәрен тултырып Биксәнтәйгә тура ҡараны. — Кешенең әллә нимә уйлауы бар.

Быҙа быныһы, ысынлап та, башына һис килмәгән дә баһаң Биксәнтәйҙең. Икәүләшеп ҡайтып килгәндәрен күрә ҡалһалар, ҡыҙ намыҫына тап төшәсәк. Кеше һүҙе кеше үлтерә, ти, ғишыҡ эшендә һағыраҡ ҡыланыуың зарурҙыр ул.

— Зөлхәмирә! — Егет ялбарыу ҡатыш өндәште.

— Кем тейә? — Ҡыҙ йәнә пырхылдап көлдө. Нимәһе ҡыҙыҡтыр инде? Тапҡан ҡытҡылдар сәбәп! "Ҡыҙҙарҙы, бармаҡ күрһәтһәң дә шырҡылдай, тиҙәр, дөрөҫ икән", — тип уйлаған Биксәнтәйҙең хәтере ҡала биреп ҡуя. Әммә дөрләп янған ғишыҡ уты менән эскерһеҙ мөхәббәтте ул ғына еңә аламы һуң?!

— Зөлхәмирә!

— Әү.

— Әйҙә көн дә осрашып торайыҡ... Һаҡмар буйында, ошо урында.

— Кит, әҙәпһеҙ!..

— Осрашыу әҙәпһеҙлек була тиме? Һине күргем килә лә тора, тейем бит. Әллә ышанмайһың?

— Ҡыҙҙар өсөн аулаҡта осрашыу әҙәпһеҙлек һанала.

— Ә һин мине әҙәпһеҙ тиһең бит.

— Юҡҡа ҡотортоп торғасың һуң.

— Беҙ берәүгә лә һиҙҙермәй генә осрашырбыҙ, Зөлхәмирә: һин һыуға бараһың, мин ат һуғарам...

— Әлләсе... Уңайһыҙ бит әле.

Ана шул "әлләсе", аңлы кеше өсөн, ҡыҙҙың риза булыуына асыҡ ишара ине.

Ике йәш йөрәктең йәшертен генә ғишыҡ тотоуын Гөлзәйнәп еңгәйҙән башҡа ауылдың бер әҙәме лә, бер эте лә һиҙмәне. Һирәкләп булһа ла осрашып-күрешкәндәрендә һөйләшеп һүҙҙәре бөтмәне. Ҡайтыр сәғәт һуҡҡандан һуң айырылыша алмай бер булырҙар ине. Берәһе алам, икенсеһе барам тип вәғәҙәләшеп тә бөттөләр хатта. Уларҙан да бәхетлерәк кеше юҡ һымаҡ ине шул мәлдә. Әммә... Әҙәмдең уйында, Хоҙайҙың ҡулында. Был осраҡта ла ғашиҡтарҙың изге теләк-ниәттәре фәрештә аминына тура килмәне. Хыялдары күҙ асып-йомған арала селпәрәмә килеп, донъялары баш түбән әйләнде лә ҡуйҙы. Юҡ, бер кемдең дә уҫал шойҡаны ла ҡағылманы, яуызлығы ла теймәне уларға. Яҙмыш шулай ҡушты, тәҡдир үҙенекен итте, бары шул ғына.

...Ул көндө лә Биксәнтәй менән Зөлхәмирә, бер-береһенән ҡараштарын айырып ала алмайса, һуңға тиклем серләшеп ултырҙы. Иртәгәһен төштән һуңға ошо уҡ бөгөлдә осрашырға һүҙ ҡуйышып, ҡыҙ алдан, егет бер аҙға һуңлаңҡырап ҡайтырға сыҡтылар. Их, белһәләр икән шунда ошо хушлашыу улар өсөн һуңғыһы булғанын...

Ел ҡапҡаны асып инеүгә болдорҙа буҫлығып илауҙан шешенгән еңгәһен күргән Биксәнтәйҙең йөрәгә жыу итте.

— Ҡайҙа баттың, ҡәйнешем?! Ҡайҙа юҡ булдың да ҡуйҙың? — тип өҙгөләнеп, ул һығылып төштө. — Ҡайным баянан бирле һине таптыра!

— Ни... ни булған һуң, е...еңгә? —Ҡаушап киткән Биксәнтәй этенеп-төртөндө.

— Ағаҡай ғынаңдың башын ашағандар! — Еңгәй кеше, йөҙөн ҡаплап, оторо сеңләргә тотондо.

Биксәнтәй, ҡолағы ишеткәне аңына барып етмәгән аураҡ[13] кешеләй, ауыҙын асып, бер талай аңшайып торҙо. Шунан кинәт асылына ҡайтты, ҡапҡа шыйҙаһына бәйләп ҡуйылған теҙгенде сисеп, эйәрһеҙ атын һыбайланы ла, хайуандың яшыҡ ҡабырғаһын үксәһе менән төйгөсләй-төйгөсләй, өйҙәренә ҡарай сапты. Башын ишеккә тығыр-тыҡмаҫтан:

— Еңгәм ни һөйләй ул, атай!? — тип ярһып ҡысҡырҙы. — Хаҡмы уның хәбәре? Ышанмайым, ялғандыр!

---

[13]*Аураҡ — иҫәүән, аңра.*

— Еңгәйең дөрөҫтө һөйләй, балам. — Шул арала нисектер ҡартайып киткәндәй күренгән атаһы тыныс булырға тырышты. Тик уның йән иҙгес кисерештәрен иңенә емерелеп төшкән оло ҡайғыны эсенә йәшерергә маташыуынан ҡалтыранған ҡулдары менән йәмерәйгән сырайы һата ине. Ә бала ҡайғыһынан ҡапыл ғына аяҡтан яҙып түшәккә йығылған әсәһе йөрәген тотҡан килеш ыңғырашып ята.

— Ныҡыша торғас, мораҙҙарына иреште вафаһыҙ[14] кафырҙар, әрәм иттеләр балаҡайымды. — Әсә артыҡ һыр бирмәҫкә тырышҡан була, ә үҙенең һыҡтарлыҡ та хәле ҡалмаған. — Аллаһының ҡаты ҡәһәре төшмәне бит үҙҙәренә. Яраббы!

— Атай, кем ағайымдың йәнен ҡыйған?! — Биксәнтәй йоҙроҡ төйнәп үрһәләнде. — Ҡон ҡайтарырға кәрәк!

— Аһ, улым, ҡон ҡайтарыу менән ағайың кире ҡайтырмы? Ундайы һинең менән минең генә хәлдән дә килә торған эш тә түгел. Күмәк бит ул ҡанэскестәр. Бөтә ил менән еңә алмағанды...

— Кемдәр һуң улар?

— Караттар инде, баҫҡынсылар. – Ҡорманай ҡарт, өндәшмәй бераууыҡ шымып торғандан һуң: — Аттарҙы парлап ек, улым, алып ҡайтайыҡ ағайыңды. Бик тә килеп сыҡмаһа, урынында ғына ерләрбеҙ. Тик был турала бер кемгә лә ауыҙ асып бер һүҙ өндәшәһе булма. Ишетһен ҡолағың,– тип аҡыл өйрәтеп ҡуйҙы.

Биксәнтәй шунда бөтөнләй аптырауға ҡалғайны, атаһын һис аңлай алманы. Нисек инде ул: һинең ғәзиз ағаңды үлтерһендәр, ә һин бер ни ҡыла алма. Ҡайҙа ғәҙеллек?!

— Апҡайтырға тырышығыҙ инде өлкәнемде. — Мөйөштән әсәһенең мөсһөҙ тауышы ишетелде. — Бәлкем, яңылыштыр ҙа әле ул хәбәр, ә? — Күпме ялбарыу, күпме өмөт бар ине ошо һүҙҙәрҙә.

Йәл, нисек кенә теләһәләр ҙә, алып ҡайта алманылар ағаһының кәүҙәһен. Биксәнтәйҙәр барғанда әлеге хәтәр яуҙа себен урынына ҡырылған яугирҙарҙы ер ҡуйынына тапшырып бөткәндәр ине инде. Хатта Биксураның ҡәбере ҡайҙа икәнлеген дә белергә насип булманы. Ул ғынамы әле, урындағы хәҙрәт үтә һаҡ булырға ҡушты: “Яуҙа баш һалған туғанығыҙҙы юллап йөрөгәнегеҙҙе караттар белеп ҡала күрмәһен, — тип иҫкәртте. — Үҙ затығыҙҙы ғына түгел, бөтә ырыуығыҙҙы һәләк итеүегеҙ бар, Аллам һаҡлаһын”.

Кискелеккә үҙ йортона ҡуна алып ҡайтҡан хәҙрәттең һөйләгәндәрен Биксәнтәй йөрәкһенеп тә, ғорурланып та тыңланы.

...Эйе, Биксура ағаһы илем-ерем тип баш һалған. Ҡараһаҡал ҡушаматлы Юрматы уҙаманы Миңдеғол Юлаев етәкселегендә ирек-азатлыҡ даулап, халҡын ҡурсалап йөрөгән ул. Есаул дәрәжәһендә һуғышҡан.

“Ҡараһаҡал” сиреүе йәй баштарында, ҡойма ямғырҙарҙан ташҡан Ҡыҙыл йылғаһы буйында, көтмәгәндә подполковник Павлуцкийҙың баштан-аяҡ ҡоралланған карат әтрәтенә тарый. Дошман, яҡшы ҡоралланыу өҫтөнә, һан яғынан да байтаҡҡа өҫтөнөрәк. Шунда ла рухи яҡтан күпкә көслө бағиҙар былай ғына бирешмәй, һуғыша-һуғыша барып, Яйыҡты кисәләр. Төп сиреүҙең икенсе ярға сығыуын ҡаплап тороу өсөн йөҙ илле кешелек тап[15] ҡуйыла. Есаул Биксура Ҡорманаев та улар араһында була. Шаулап ятҡан оло

[14]*Вафаһыҙ — иманһыҙ.*
[15]*Тап — хәрби төркөм, отряд.*

даръяны ҙур юғалтыуҙар менән аша сыҡҡан төп сиреү сикһеҙ-ҡырыйһыҙ ҡаҙаҡ далаларына китеп өлгөрә, ә һуңғы яугирына ҡәҙәр сая алышҡан ышыҡлау әтрәте тулыһынса юҡ ителә. Ана шулай ҡаһармандарса шәһит китте Биксәнтәйҙең бер туған ағаһы. Тик малайға был турала бер кемгә лә һөйләмәҫкә ҡушылды.

Биксураның үлем сәбәбе менән күрһәткән батырлығы хаҡында ауылдаштары бихисап замандар уҙғандан һуң ғына беләсәк. Биксәнтәй ҙә бит ул ваҡиғаларҙың теүәл әтнәкәһен йылдар үтеп, башына аң керә башлағанда ғына тулы мәғәнәһендә төшөнә алды. Баҡһаң, атай кеше, ғаиләһенең Урусов тигән йыртҡыс йәлләд ҡулына эләгеүҙән һаҡланып, алдан сараһын күргән булған икән. Улының ихтилалда ҡатнашҡанлығын Урусов белеп ҡалған хәлдә, Ҡорманай ғаиләһе төбө-тамырынан ҡорор ине. Ул ғынамы, ҡан көҫәгән карателдәр бөтә ауылды ҡырып-һуйып сығырҙар ине. Ана, ихтилал баҫтырылғандан һуң нужаның ниндәйен генә күрһәтмәнеләр башҡортҡа. Ете йөҙҙән ашыу ауылдың үртәлеп, нигеҙенә тиклем юҡ ителеүе генә һуң! Әүҙем бағиҙарҙы, ихтилал етәкселәрен ҡабырғаларынан аҫҡандар, осло таяҡтарға ултыртҡандар, ағзаларын ҡырҡып-киҫеп ғазаплағандар. Тереләрен йорт-ҡураһыҙ, ас-яланғас ҡалдырып, оҙайлы үә аҙаплы үлемгә дусар иткәндәр. Башҡорт халҡы халыҡ булараҡ юҡҡа сығырға тейеш булған. Әммә илбаҫарҙар яңылышты. Ныҡ яңылышты. Башҡорт ҡәүеменең рухы һынманы, үҙе лә юҡҡа сыҡманы. Ҡанһыҙ йәлләдтәргә нәфрәтләнеп, тирә-яҡлап ябырылған үләткә үс итеп һаман бар ул, һаман йәшәй. Бөйөк халыҡ иле, ере, Уралы хаҡына йән аямай һаман көрәшә, һаман яғалаша...

Хәҙрәттең һөйләгәндәренән оло хистәргә бирелеп киткән Биксәнтәй, ярһыған йөрәген баҫырға тырышып, йоҡлап китә алмай оҙаҡ ятты...

Биксура ағаһы шулай итеп мәңгелек төйәген алыҫта-алыҫта, Яйыҡ буйының ҡылғанлы далаһы ҡуйынында, тапты. Кем уйлаған инде, йә. Ҡорманай ҡарт шәһит рухына бағышлап, урын еренә еткереп йыназаһын, өсөн, етеһен бер юлы уҡытты. Әлеге ғәмәлдәрҙең барыһын да, әлбиттә, йәшертен рәүештә башҡарҙылар. Өлкән улына күрһәткән һуңғы ҡәҙер-хөрмәте ошо булды атай кешенең. Хәйер, мәрхүмдәргә шул Ҡөрьән аяттары менән доғаларҙан башҡаһы кәрәкмәй ҙә. Тереләрҙән башҡаса ни өмөт итә ала улар...

— Ерем, һыуым, халҡым тип баш һалған шәһитте йөрәге һуғыуҙан туҡтаған урынға ҡуйыу хәйерле, Ҡорманай ҡустым, — тине ҡарт хәҙрәт мосафирҙарҙы оҙатҡанда. — Ата-олатабыҙ йолаһына ҡаршы, ҡайтып еткәнегеҙсә нисәмә йылға кисектерергә кәрәк буласаҡ. Йәмиғил әруахтың рухы рәнйеү өҫтөнә, үҙегеҙгә лә сауабын насип итмәҫ. Туғаныбыҙ әллә ҡайҙа ятып ҡала, тип бошоноп һис зар яңыртаһы булмағыҙ. Бынһы ла барыбер үҙ еребеҙ...

Аҙна-ун көн тирәһе йөрөп ҡайттылар. Ире менән кесе улының ихатаға ҡаҡ арбала икәүһе генә ҡыптырлашып килеп ингәнен күргән әсәйҙең һуңғы өмөтө өҙөлгәндер. Эйе, баш малайының һәләкәтенә шунда ғына тамам ышанды ул, әммә үрле-ҡырлы һикереп, ер тырнап аҡырманы, фажиғәне мосолман ҡатындарына хас тыныслыҡ, баҫалҡылыҡ менән ҡабул итте. Улы кәүҙәһенең сит ерҙәрҙә ятып ҡалыуына өҙгөләнеүен дә артыҡ белдермәҫкә тырышты. Бер аулаҡта ҡалғанында күңеле бушанғансы иланы-иланы ла шуның менән баҫылды: үлгән артынан үлеп булмай...

— Ярай, иманы юлдаш булһын балаҡайымдың. Ҡалай итәһең, Хаҡ Тәғәлә шулай бойорғандыр. Пәйғәмбәребеҙҙең шәфәғәттәренә ирешергә яҙһын ғәзиз

өмматҡа. Тәфсир иткән аят-доғаларыбыҙҙың әжер сауаптары рухына өлгәшеп, рухын шат ҡылһын бахырҡайымдың... — Күҙгә күренеп ҡапыл ғына ҡартайып киткән әсә, яулыҡ осон ҡайырып, ирекһеҙҙән сырҡырап сыҡҡан күҙ йәштәрен һөртә: — Инде һин һау була күр, бәләкәсем, һинең ҡайғыңды күрһәтмәһен Хоҙай, — тип һығылып Биксәнтәйҙең арҡаһынан һөйҙө. Һуңынан да ошо хәл йыш ҡабатланыр ине. Малайҙың шундай мәлдәрҙә ҡысҡырып илағыһы килә торғайны, тик ярамай ине шул. Ир-ат, нисек кенә ауыр булмаһын, түҙергә тейеш.

Биксураһы вафатына ҡырҡ көн тигәндә Ҡорманай ҡарт барлыҡ туғантыумасаһын йыйҙы, дин әһелдәрен дә саҡырып аят уҡытты, Ҡөрьән бағышланы. Хәйер-саҙаҡаны йәлләмәне. Муллалар үҙ ғәмәлдәрен атҡарып ҡайтып киткәс тә, йорт хужаһы туғандарға таралышмай торорға ҡушты. Көңгөр-ҡаңғыр килеп оҙаҡ ҡына мәжлес ҡороп ултырҙылар, мәрхүмде ҡәҙимгесә иҫкә алдылар. Мәжлес ахырында хужа һүҙ тотто:

— Ағай-эне, туғандар! — тине ул, гүйә, ишетмәй ҡалмаһындар тигән һымаҡ, һәр өнгә баҫым яһап, һәр һүҙен үлсәп әйтте. — Фани донъяла бөтәбеҙ ҙә бары хөрмәтле сауын[17] ғына. Мөҙҙәте етеп, күрәһеләребеҙ тамам булғас, һәммәбеҙ ҙә мәғшүк[18] Биксурабыҙ янына юлланырбыҙ. Эйе, бигерәк иртә китте арабыҙҙан Биксура, унһы хаҡ. Хаяһын юғалтҡан ҡабаған[19] әҙәмдәр һәләк итте балабыҙҙы. Тик мәрхүм артынан эйәреп булмай, тереләргә нисек тә йәшәргә, көн итергә кәрәк. Бөгөн мәртәбәле йыйын алдында шуны әйтмәк булам. — Ҡорманай ҡарт туҡтап, тамаҡ ҡырып алғандан һуң, дауам итте: — Ата-бабаларыбыҙ йолаһы буйынса, шулай уҡ ғөрөф-ғәҙәткә ярашлы, бер туған ағай вафат ҡыла икән, еңгәй ҡәйнешкә ҡалырға тейешле. Төшөнәһеңдер, Биксәнтәй улым, ғафил[19] көндәрең инде тамам. Ағайың мәрхүмдең тәүлеге үтеү менән, әллә ни шаштырып ебәрмәй генә, туй ғәмәле үткәрербеҙ, Алла бирһә...

— Амин, шулай була күрһен...

— Һаулыҡ бирһен үҙенә, ғүмер бирһен...

— Яҙмыштары шулдыр, ҡалай итәһең...

— Еңгәһе лә ҡарт түгел, иншалла...

Мәжлестәгеләр, хужа һүҙен йөпләп, геүләшеп алдылар. Атаһының ошо көтөлмәгән һүҙҙәренән шаңҡып өнһөҙ ҡалған Биксәнтәй генә ни тиергә лә, ни ҡылырға ла белмәй һеңгәҙәп ултырҙы.

Ағай-эне таралышҡас та, Биксәнтәй Һаҡмар буйына йүгерҙе. Туғай уртаһында йәйрәп үҫкән ялбыр сауыл төбөнә ҡапланды һәм ауҡанлап иланы ла иланы. Был юлы ул үҙенең ир-ат затынан икәнлеген дә онотто, буғай. Ошоға тиклем дә, бынан һуң да уның башҡаса шул ҡәҙәре күҙ йәштәре түккәне булмағандыр.

Шулай итеп, Зөлхәмирә менән үткәргән көндәре-сәғәттәре, бирешкән вәғәҙәләре лә матур бер сағым[20] ғына булып тороп ҡалды. Йола алдындағы ғәжизилыҡтан[21] үҫмерҙең йәне ныҡ әсене, әммә ни ҡылмаҡ кәрәк. Өмөттәре өҙөлөп бөткән һымаҡ булһа ла, йәйге матур көндәрҙең береһендә ятраҡан бөгөлдәрендәге ҡарт тирәк янында йәнә осрашырға насип итте уларға.

---

*[16]Сауын — ҡунаҡ.*
*[17]Мәғшүк — яҡын, яратҡан кеше.*
*[18]Ҡабаған — үҫал, боҙоҡ, яман.*
*[19]Ғафил — ғәмһеҙ, хәсрәтһеҙ.*
*[20]Сағым — мираж.*
*[21]Ғәжизилыҡ — көсһөҙлөк.*

— Ҡасайыҡ, йәнем! — Йомшаҡ ҡулдарынан ҡыҫып тотҡан Биксәнтәй ҡыҙҙың хәсрәт тулы күҙҙәренә ҡараны.

— Юҡ, Биксәнтәй! Ярамаған эш булыр был, хәрәмләшеү булыр, — тип ҡырҡа ҡаршы төштө Зөлхәмирә. – Мин ризалыҡ бирә алмайым.

— Бер-беребеҙгә тилмерешеп, ҡауыша алмайса, ғүмер баҡый бәхетһеҙ булып ҡалайыҡмы шунан?! — Егет ярһып уҡ китте.

— Үҙебеҙҙе генә уйлап, ата-әсәйҙәребеҙҙе, туғандарыбыҙҙы оятҡа ҡалдырмаҫбыҙмы? Йолабыҙҙы мәсхәрә итмәйек, ҡәҙерлем. — Зөлхәмирә, күҙ йәштәренә быуыла-быуыла, үҙенекен һөйләне. — Буйһонайыҡ яҙмышҡа! Аңла, башҡаса юлы юҡ!

— Һин мине яратмайһың, Зөлхәмирә!

— Яратып та ни ҡылайым, Биксәнтәй?! Былай ҙа яралы йөрәгемде һин өҙгөсләмә, исмаһам! — Ҡыҙ егеттең күкрәгенә ҡапланды. — Маңлайыңа яҙылғаны шулдыр...

— Һәр кем үҙ яҙмышына үҙе хужа булырға тейеш.

— Тик ҡыҙ кеше түгел... Хәстәле әсәйемде ҡара ҡайғыға һалғым килмәй! Күпме генә көнө ҡалған тиһең...

— Тимәк, яҙмышҡа бағынабыҙ?.. — Биксәнтәй, ахыры, өмөтһөҙлөккә бирелде, һөйгәне алдында башын эйгән көйө, һынағас ише ҡатты ла ҡалды.

— Башҡаса хәлебеҙ юҡ, Биксәнтәй, аңла, тинем бит...

— Мин аңлармын да ул, бына йөрәк... Уға бойороп та, аңлатып та булмай шул.

— Икебеҙгә лә еңел түгел, әммә шулай кәрәк. Хуш, Биксәнтәй!

– Хуш, Зөлхәмирә! Бәхетле бул. Рәнйеткән саҡтарым булһа, бигәйбә. Мин һине онотмам. Онота алмам!

– Һиңә лә бәхет теләйем, Биксәнтәйем.

Башҡаса осраша алмабыҙ инде, тип мәңгелеккә хушлашҡандай хәсрәтләнешеп айырылдылар ул көндө. Шулай ҙа тәҡдир тигәнең ғашиҡтар һуҡмағын йәнә бер тапҡыр киҫештерҙе. Был юлы һис көтмәгәндә Зөлхәмирәләрҙең ҡарындыҡ тәҙрәле тәпәш өйөндә осраштырҙы. Сәйер, әммә ләкин быныһына ла әлеге бәхетһеҙлек сәбәпсе булды...

Көҙ етеп, ҡырпаҡ ҡар яуған мәл. Урман төпкөлөндә ятҡан күрше ауылдың хәлле генә кешеһе ҡайғы-хәсрәттән алйып йөрөгән Зөлхәмирәне икенсе бисәлеккә һоратып яусы ебәрҙе. Уныһы, сырхау әсәһе ни тиклем генә йәл булмаһын, көн дә Биксәнтәйен күреп өҙгөләнмәҫ өсөнмө, әллә икенсе сәбәбе булдымы, ҡапыл ғына ризалыҡ бирҙе лә ҡуйҙы. Ҡыҙ кешенең ваҡытында башлыкүҙле булыуы хәйер тип, әсәһе лә ҡаршы килеп торманы. Зөлхәмирә, күрәһең, сит-ят ерҙәрҙә ҡайғы-хәсрәте йәһәтерәк онотолоп, һөйгәненән тиҙерәк төңөлөрмөн, тип өмөтләнде. Ошо, тиҙ арала бөтә ауылға таралып өлгөргән, үҙе өсөн әллә ни ҡыуаныслы булмаған хәбәрҙе ишетеп ҡалыу менән, алйыуҙан зиһене буталыр хәлгә еткән егет, барлыҡ ғөрөф-ғәҙәттәрҙе, тыйыуҙарҙы ла инҡар итеп, Зөлхәмирәләргә килде лә инде. Тегеһенең ике күҙе дүрт булды. Ярай әле, әсәһе өйҙә юҡ. Уныһы ҡыҙының килен булып төшәсәк йортон күреп, буласаҡ ҡоҙа-ҡоҙағыйҙары менән танышып-күрешеп ҡайтырға тип киткәйне. Эйе, әллә бәхеттәренә, әллә бәхетһеҙлеккә күрә, өй аулаҡ.

— Иргә сығаһың, тимәк?! — Биксәнтәй эре сирттергән булды, эреләнеүе ышаныслыҙ күренде. Шул уҡ ваҡытта һүҙҙәрендә ишетелеп ҡалған үпкә ғәләмәте яһалма түгел ине. Ҡыҙ ҙа юғалып ҡалманы, мөмкин тиклем ҡатыраҡ һуғылырға тырышҡан һымаҡ, аҫтыртын кинәйә менән:

— Һин дә бит еңгәңә өйләнергә тейешһең, — тип һалды.

Егет, телен тешләп, бәс булды. Нимә тиһен?

– Кисер, һөйөклөм! — Ҡәҙерле кешеһенең йөрәгенә иҫ итмәҫтән утлы бысаҡ ҡаҙағанын ҡапыл төшөнгән Зөлхәмирә, асырғанып, Биксәнтәй ҡосағына ташланды. — Аңлаһаң ине мине лә, башҡаса сарам юҡ та баһаң!

— Аңлайым... Хәҙер аңланым.— Йыуашайып ҡалған егет ҡыҙҙы ҡосағына алды, күкрәгенә ҡыҫып, маңлайынан үпте. — Тик тәҡдир алдындағы ғажизилыҡ йәнемде көйҙөрһә, һине бәхетле итә алмауыма үртәләм. Аһ, хыянатсыл көсһөҙлөк!

— Һин тип сауығып кибермен инде, Биксәнтәй! — Зөлхәмирәнең ҡайнар һулышы егеттең сикәһен өттө. — Ал мине, бәгерем! Ал да өҙөлөп һөйгәнемде, шашынып ятратҡанымды бел! Кисер мине, әҙәпһеҙҙе! Кисер. Мөхәббәтемде башҡа юл менән иҫбат итер хәлем юҡ. Ҡыҙ намыҫым, исмаһам, һиндә ҡалһын, Биксәнтәй, тик ҡарыу ойотма, үтенәм...

Урындыҡҡа ауҙылар...

Ғүмеренең иң татлы минуттары ошо булғандыр Биксәнтәйҙең. Башҡаса бер ваҡытта ла уның ише бәхет тә, уның ише юғары тойғолар ҙа кисергәне булманы.

“Уңмағанды ҡыума”, — тип юҡҡа ғына әйтмәйҙәрҙер, Зөлхәмирәнең дә эштәр шулайыраҡ килеп сыҡты. Яҙғы ташҡын осоронда Әүжән диләнкәһенә ҡыуғынға тип сығып киткән ире әйләнеп ҡайтманы, һыуға төшкәндәй ғәйеп булды ла ҡуйҙы. Ошонан аҙаҡ Зөлхәмирәгә көн бөттө, былай ҙа ҡырынмырын ҡараш ташлап, өтөп ашарҙай булып йөрөгән оло бисә бөтөнләй шашынып, оторо һыйҙырмай башланы. Киләһе йәйгә Зөлхәмирә, әсәһенең сырхауы көсәйеүен һылтау иткән булып, Һаҡмарбашҡа кире ҡайтырға мәжбүр булды. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, уның ҡәйнеше юҡ ине шул...

Күп тә үтмәҫтән Зөлхәмирә бәпәй тапты. Быға, әлбиттә, бер кемдең дә иҫе китмәне: ирҙә булып ҡайтты, тәбиғи хәл. Малайға Әхмәтйән тип исем ҡыҫҡырттылар. Һаман онота алмаған Зөлхәмирәһенең улы булғангамы, Биксәнтәй уны нык тартты, һәр саҡ үҙенекеләй күреп, йәбер-золомға бирмәне, ауыр һүҙ тейҙермәне. Ҡасан ғына әле бите-башы туҙанға буялып, арт яғын ялтыратып ыштанһыҙ йөрөгән шуҡ малай егет ҡорона инде. Хәҙер, ана, яңғыҙ әсәһенә терәк булып ир етеп килә. Әй, үткән ғүмер! Йылдар уҙып, кешеләре менән бер ҡатарҙан тирә-яҡ мөхит, ғөмүмән, ҡырыҫ йәшәйеш кире ҡайтмаҫлыҡ булып үҙгәрә барыуға ҡарамаҫтан, Биксәнтәйҙең Әхмәтйәнгә ҡарата мөнәсәбәте шул килеш ҡалды. Элеккесә яҡын күрә ул егетте. Ирекһеҙҙән тол ҡалған еңгәһе менән теш-тырнаҡ күрһәтешмәй, шөйлә генә татыу ғүмер кисерһә лә, күңеле һәр ваҡыт Зөлхәмирәлә булды. Ә Әхмәтйәндә Зөлхәмирә ҡаны аға...

Яр аҫтынан яу сыҡҡандай кинәт ҡупҡан шау-шыу Биксәнтәйҙең осһоҙҡырыйһыҙ уйҙарын бүлдерҙе. Бейә һауған ҡатын-ҡыҙҙың сарғалап соролдашҡанына ҡушылып, шатыр-шотор ҡыу кәртә һынғаны ишетелде.

— Бай ағай! Сыҫҡанһырт шыйҙаны онтап сығып ҡасты! — тип һөрән һалды кемдер.

— Саҡ тапап китмәне, ен ботағы!

— Ҡасҡан ҡасҡан инде, нимәһенә шул ҡәҙәре ғауғалашырға? Өйөрҙән айырылып ҡайҙа барыр тиһең? — Биксәнтәй һәр саҡтағыса тыныс ҡалды. — Күңеле булғансы йөрөр ҙә ҡайтыр. Иртәгә айырырһығыҙ, кем... Ҡотлобай ағай. Ҡолонларға күп ҡалмаған уға.

Их, белгән булһа икән...

Иртәгәһен таң һарыһы менән уянған Әхмәтйән ятып түҙмәне: Ҡотлобай

ағаһы, оло кеше булһа ла, тәжрибәһеҙ көтөүсе, бер нәмәгә ҡарамай барып бейәнең хәлен белеү кәрәк.

Йәйрәп ятҡан ҙур асыҡ уртаһындағы Ҡарағайҡыуаҡ тирәһендә бейәләр утлап йөрөй. Ә бер ситтә, өйкөмләнеп үҫкән һонтор әремлек араһында, ниндәйҙер аңлайышһыҙ ығы-зығы бара. Үлән эсендә зыр әйләнгән йәтеш кәүҙәле Сыҫҡанһырттың ял-ҡойроғо йәлп-йөлп иткәне яҙа-йоҙа күренгеләп ҡала. Муйынын хәтәр дуғаландырған Ҡарайғыр, уҫал бышҡырынып, уның тирәләп саба.

Ҡапылғара хәлдең айышына төшөнә алмаған Әхмәтйән атын ҡабаландырҙы. Етеҙ елдереп килгән Ҡотлобай ҙа пәйҙә булды ошо мәл. Аттарҙың сәйер ҡыланышына ғәжәпһенеүҙән юрғаһының теҙгенен ҡайыра тартып туҡтап ҡалды ла, артабан ни эшләргә белмәй, аптырап ҡарап тора башланы. Уҫлаптай кәүҙәле айғырҙың ҡиәфәте бигерәк ҡурҡыныс: былай ҙа ялбыр ялы елгә туҙғый, ҡойроғо өҫкә сәнселгән, күҙҙәре атылып сығырҙай булып аҡшайған. Әллә ярһыуҙан, әллә арыуҙанмы үҙе ушылдап йыш-йыш тын ала. Морон ярпылары таржайған хайуандың асыулы кешнәп, ҡуршылдаған ыңғайға томшоғонан быу бөркөлә. Торғаны бер януар! Ни булған айғырға? Уның үҙен ошолай тотоуын Әхмәтйән тәүләп күрә. Шулай уҡ Сыҫҡанһырт ҡыланышын да һис аңларлыҡ түгел.

Өлкән йылҡысы, бөтөнләй яҡынлашҡанда ғына, тапалып иҙгесләнгән ҡарағура ҡатыш киҫкен еҫ бөркөп ултырған аҡ әрем араһында һоро йомғаҡты шәйләне. Ҡолон бит! Сыҫҡанһырт ҡолонлаған! Аналыҡ ҡабығын йыртып тәүге һулышын алырға ла өлгөргән ҡолон, ҡалтырана-ҡалтырана, быуынһыҙ, оҙон-нәҙек аяҡтарына баҫырға маташып тәнтерәкләй. Әле генә яҡты донъяға килгән бәләкәсте күргән Әхмәтйәндең күңеле күтәрелеп, ауыҙы йырылды. Ә Ҡотлобай көтмәгәндә:

— Ҡапылыраҡ булайыҡ, улым! Ҡолондо харап итә айғыр, юғиһә! — тип борсолоу белдерҙе.

Нимә һөйләй Ҡотлобай апа? Ни сәбәптән шундай аҡыллы айғыр ҡолондо күрәләтә харап итергә тейеш? Вәт һиңә оло, тәжрибәле кеше! Ҡарт көнөндә әллә алышынып бара? Ә аҫау айғыр күҙ алдында ярһығандан-ярһый...

Әхмәтйән менгеһенең башын шаҡара тартты ла, сыбыртҡыһын сартылдата-сартылдата, айҡашып мәж килгән аттарға табан сапты. Әммә күҙе тонған Ҡарайғыр, һырт биреп ҡасаһы урынға, әйләнә килде лә, ажарланып, Әхмәтйән өҫтөнә ташланды. Ҡарап тороуы ҡот оҫҡос ине уға. Яһиллыҡтың былдайын кемдән-кемдән, тик айғырҙан һис көтмәгәйне Әхмәтйән. Ярай әле, аҫтындағы аты сос булып сыҡты, өҫтәренә менеп килгән ҡара-йылтыр януарҙан ниндәйҙер мөғжизә менән ялтанып өлгөрҙө. Эйәр ҡашына сат йәбешкән Әхмәтйән, көтөлмәгәнлектән, саҡ осоп ҡалманы. Хоҙай араланы, күрәһең, егетте. Ҡотороуҙан күҙе тонған айғыр иҙмәһен иҙә ине, юғиһә.

Уңышһыҙ һөжүмдән оторо енләнеп киткән дәһшәтле өйөр башлығы ҡолаҡтарын хәтәр шымырайтты ла ҡурҡышынан дер ҡалтырап, алан-йолан ҡаранып торған Сыҫҡанһыртҡа уҡталды. Йәтеш кенә, йомро ғына ҡола бейә, бар хәленсә айбарланып, үҙенән байтаҡҡа дәү, купкә ғәйрәтле айғырға ҡаршы тороп булаша, теше-тырнағы менән мөсһөҙ сабыйын ҡурсалап ҡалырға тырышып, тегеләй-былай борғолана, уны кәүҙәһе менән ышыҡлап маташа. Үҙ ҡарамағындағы бейәләрҙең бер һүҙһеҙ буйһоноуына күнеккән Ҡарайғырҙың ярһыуы ахыр сиккә етте. Тояҡтары аҫтынан эре-эре кәҫ киҫәктәре ырғытып, ул сабып барған көйөнә, һонола биреп, күкрәге менән тыңлауһыҙ бейәне төртөп

осорҙо. Меҫкен Сысҡанһырт, тәкмәс атып, сатай-ботай әллә ҡайҙа барып төштө. Төштө лә, тыпырсынып ҡуйғандан һуң, тороп китә алмайынса, бер килке һеңгәҙәп ятты.

— Харап итте бейәне! Үлтерҙе! – Ҡотлобай яр һалып ҡысҡырҙы. Шулай ҙа ул яңылышты, ер һелкетеп сабып барған ҡыҙрас айғырҙың аунап ятҡан бейәлә эше лә булманы. Киреһенсә, ҡырҡа боролдо ла, иллалла менән тороп баҫып, саҡ ҡына елгә лә йығылырға әҙер ҡолондо елкәһенән эләктереп алды. Тешенә ҡыҫҡан килеш, ауыр эш башҡарғандай уһылдап, бер нисә тапҡыр ҡаты итеп һелккәндән һуң, ялпылдатып һауаға сойорғотто. Бәләкәс ҡолон, осар ҡош урынына, йәлп-йөлп итеп кенә ҡалды. Уны ҡыҙғаныуҙан йәне сыға яҙған Әхмәтйән күҙҙәрен сытырлатып йомдо. Шунда уҡ гөрҫ иткән тауыш ишетелде. “Бөттө!” — тип уйланы егет, әкрен генә күҙҙәрен асты. Ҡыҫҡа ялы менән ҡуша елкәһе умырып алынып, ер ҡыртышына лыпым килеп төшкән ҡолон хәрәкәтһеҙ ята ине. Мәхлүҡ шунда уҡ йән бирҙе, шикелле. Ә Ҡарайғыр, айырата мөһим эшен ослағандай әллә кем булып, инде тынып ҡалған балаһын еҫкәштереп торған Сысҡанһырт тирәләй әйләнеп сыҡты ла, бер ни булмағандай, арт һанын ырғыта-һикертә уйнаҡлап, өйөр яғына ҡарап сапты. Ҡапыл ғына йыуашайып ҡалған бейәнең ас яңаҡтары буйлап күҙ йәштәре тәгәрәне, ә моңһоу ҡараштары һағыш менән тулы ине.

— Үәт хәйерһеҙ, ә! Нимә тип яуап бирәбеҙ инде хәҙер бай алдында? — тип үртәнде борсолоуы йөҙөнә сыҡҡан Ҡотлобай. — Эш башлаған көндө бит әле, ҡәһәрең. Бына бер бәлә. Ярай бейәһе ҡазаланманы, шөкөр.

Әле генә күҙ алдында булып үткән фажиғә шауҡымынан тетрәнеп, һушын йыя алмайса ҡобараһы осоп торған Әхмәтйән Ҡотлобай һүҙҙәренән иҫенә килгәндәй булды. Эйәренән етеҙ генә һикереп төштө лә йәнгә талашып ятҡан ҡолон янына килде. Үлемесле яраланыу өҫтөнә ҡаҡ ергә бәрелеүҙән өҙгөсләнгән бисара бер-ике тартышып ҡуйҙы ла тынды. Уның яҡты донъя матурлығын күреп тә өлгөрмәгән йәшкелт күҙҙәре ярым асыҡ килеш ҡалды.

Әхмәтйән шымтайып ҡалып башын эйеп торған Сысҡанһырттың ҡырас ялынан һыйпаны, тирле шыма муйынынан наҙлап һөйҙө.

— Бөтөрөнмә, малҡай, ҡолонсағың тағы булыр, — тип йыуатҡан кеше булды. — Ярай үҙең һау ҡалдың...

— Тиген ауһар[22] түгел икән дә баһаң был Ҡарайғыр, ә! — Ҡотлобай ярһыуын баҫып, һаман тынысلана алмай. — Ҡоторған тиерһең, иблис тоҡомо!

— Бындай хәлде тәүләп күрәм, апа. Ни сәбәптән һәләк итте һуң ул үҙ балаһын? — тип һорамай булдыра алманы Әхмәтйән.

— Бөтә ғилләһе лә ана шунда шул, шәт үҙ яралғыһы булмаған. Тимәк, ҡолон икенсе айғырҙан, — тип аңлатты Ҡотлобай ябай ғына итеп: — Иҫләйһеңме, теге мәлде Ҡола менән өс көн ғәйеп булып торғандар ине? Ят бауырҙы айғыр малы ла ҡабул итмәй...

“Бына һиңә тәжрибәһеҙ Ҡотлобай! Һин белмәгәнде белә әле ул. Оло кеше — оло кеше инде. Өлкән көтөүсемен, тип маһайып йөрөүең ҡороһон, шуны ла белмәгәстен...”

— Йә, ҡалай итеп аҡланабыҙ, улым? — Ҡотлобай, үрһәләнеп, үҙенекен тылҡый. — Хәйер, минең сират, мин көтә инем. Яуапты ла үҙем тотормон. Тик мына кеше алдында уңайһыҙ. Ҡаҫта эслеләр, шуҡтә, бер көн дә йүнләп көтә алманы, тип артын тырнап көлөрҙәр инде.

[22]*Ауһар — алйот, аҡылһыҙ.*

— Бөгөнгә өндәшмәй торғанда? Иртәгә үҙем әйтер инем. — Әхмәтйән Ҡотлобайҙың күҙҙәренә ҡараны. — Миңә көймәç Биксәнтәй ағай, үҙең беләһең.

— Юҡты һөйләп торма, егет! Мин яҙыҡ эшемде кешегә һылтап өйрәнмәгәнмен. — Ҡотлобай, үпкәләгәндәй, йәнә Әхмәтйәнгә боролдо ла: — Мына, һин әле йәшһең, атаң рәтле кеше булараҡ, шуны кәңәш итәм: бер ваҡытта ла үҙ ғәйебеңде икенсегә япһарырға тырышма. Ҡулың башҡарғанды иңең менән күтәрергә өйрән, улым. Төшөндөңмө? – тип өгөт-нәсихәт уҡып ташланы.

Әхмәтйән өндәшмәй ҡалыуҙы хуп күрҙе.

— Малдың яҙғаны ауыҙ шаҡарып керер, яҙмағаны күпме ҡурсалаһаң да яҙмаç, — тип ҡул һелтәп ҡуйҙы иртәнге хәлдәрҙе ишеткән Биксәнтәй бай. — Ҡалғаны ҡазаға юлыҡмай ғына имен торһон. Баш һау булһа, малы табылыр, иншалла.

— Тәүге көндө үк... Уңайһыҙ һымаҡ нисектер...

— Башҡа берәү көткән саҡта икенсе төрлө булыр ине, тип уйлайһыңмы? Кем менән иртәгә ни булырын бары Хоҙай белә. Булған – бөткән, онотайыҡ.

Күңелде ҡырған ваҡиға шуның менән осланды. Әхмәтйәнде ҡыуандырып, Ҡотлобай апаһы эшендә ҡалды.

***

Йәйектүбә тауы артынан үҙәк өҙгөс ауаз ишетелде.

— А-а-ай!!!

Тауыш, йәйелә барған алһыу сатыр төҫлө һыҙылып килгән йәйге иртәнең илаһи тынлығын ярып, әүәл Уралтау һырты яғына үтте. Зифа ҡайындарға, шыптыр уçаҡтарға, йөҙйәшәр ҡарағастар менән һомғол ҡарағайҙарға һуғылып йөрөнө-йөрөнө лә, ҡаянан-ҡаяға ҡаҡлығып, тоташ шаңдауға әүерелде, ахырҙа өҙөк-йыртыҡ шау булып кире әйләнеп ҡайтты. Уның артынса күмәк ат тояғы деһерләгәне, Ҡарайғырҙың асыулы кешнәгәне ҡолаҡҡа салынды. Ошо күмәк тауыш болғанышынан еңелсә ер һелкенеп киткәндәй булды. Шунан һуң кинәт йәнә һиллек урынлашты.

Таң һарыһынан үҙ йомошо менән тышҡа сыҡҡан Биксәнтәй сәйер ауаздарҙың барыһын да ишетте. Тынлыҡ урынлашҡас та, бер килке ҡолаҡ һалып, көсөргәнеп тыңлап торҙо, әммә башҡаса бер шипкерт тә тойолманы.

Йөрәк ярып сыҡҡан ауаздың да, туптырлашып ап-асыҡ ишетелгән тояҡ тауыштарының да тигенгә түгеллеген бар булмышы менән һиҙгән Биксәнтәй инеп ятҡас та һис йоҡлап китә алманы. Күңеленә ҡапыл шом йүгереүҙән йөрәге ҡабынып, ул йомшаҡ күпмәһе өҫтөндә әйләнде лә тулғанды. Ләкин шул рәүешле, билдәһеҙлектән икеле-микеле уйҙарға бирелеп, оҙаҡ ятырға тура килмәне. Күп тә үтмәçтән, ярһып сапҡан яңғыҙ ат тояғы тауышына һиçкәнеп киткән бай йәнә атылып тышҡа сыҡты. Инде шөйлә яҡтырырға өлгөргән ине. Ихата алдындағы аҡ ысыҡҡа мансылған күк үлән өçтөндә сыбар эҙ ҡалдырып һыбайлы тыпырсына. Күҙе-башы ҡанға буялған Әхмәтйән оторо ҡыҙып киткән, айыл аçтында аҡ күбек хасил булып, шыбыр тиргә батҡан атын тынысландыра алмай маташа. Ауыҙлығы шаҡара тартылған саптар үрһәләнеп-үрәпсеп китә.

— Ни булды, Әхмәтйән?! Баштан-аяҡ ҡанға туҙғанһың да баһаң!

— Барымта, Биксәнтәй ағай, барымта! Ҡаҙаҡтар баçты!

— Егеттәрҙе аяҡландыр! Мин хәҙер.

Биксәнтәй бай, оло йыйындарҙа ғына сабышыр, мәртәбәле бәйгеләрҙә ал бирмәç Тимеркүк арғымағын эйәрләргә тип, һарай яғына ашыҡты. Ә яралы Әхмәтйән, ауыртыныуҙарын да онотоп:

— Барымта! Уянығыҙ, барымта-а!!! — тип тамаҡ ярып һил урамдан сабып уҙыуға, тиҙ арала егермеләп аҫыл ир-егет йыйылырға ла өлгөрҙө. Ҡыйғыуаҡлап баҫҡынсыларҙы юллап остолар. Арттарынан шыйыҡ өйөрмә булып саңтуҙан күтәрелде.

— Ҡуңғыра-а-ат!!!

— Барымтаға — ҡарымта-а! – Һыҙғырыу ҡатыш күмәк оран тирә-йүнде тетрәтте.

Әллә ни ырап алыҫ китергә өлгөрмәгән илбаҫарҙар шыр урманлы Ирәндек һыртына етә алмай ҡалдылар. Һөтай иртәһенең йәйенке томанына уралып ятҡан Күгиҙел йылғаһының мал тояғы теймәгән асығына ярһып килеп сыҡҡан ҡарымтасылар шундай күренештең шаһиты булды: шәп аттарға атланып алған алты һыбайлы пыран-заран туҙған йылҡы өйөрөн ян-яҡлап ҡайырып маташа. Ғәжәп, ҡараҡтарҙың айбарланып яман ҡысҡырыша-ҡысҡырыша ҡамсы шартылдатыуына ҡарамаҫтан, өйөр һис алға барырға теләмәй, күберәген бер тирәлә өйөрөлөп-сөйөрөлә. Сәйер күренештең сәбәбен тегеләргә яҡынлашҡас ҡына белә алды ауыл егеттәре. Баҡһаң, ыша бирмәҫ Ҡарайғыр яңғыҙы күмәк ҡыуғынсыларға ҡаршы тиңһеҙ алышҡа сыҡҡан икән! Беренбере тапарҙай булып деһерләшеп сапҡан өйөрҙөң әле был, әле теге яғына сығып, ҡурҡыштарынан күҙҙәре аҡшайған бейәләрҙе кире яҡҡа ҡайырып маташа. Бына ни өсөн ырап китә алмаған баҫҡынсылар. Уларҙың юлына арҡыры төшөп, өйөр айғыры ҡамасаулаған! «Юғиһә, Ирәндекте артылып өлгөргән булһалар, тотор инең ҡойроҡтарын...» — тигән уй үтте Биксәнтәйҙең башынан.

Яҡлау килгәнен күреп ҡанатланған Ҡарайғыр, ажарланып китеп, күкрәге менән һыбайлыларҙың береһен төртөп осорҙо. Хас та анауы көнгө, Сысҡанһырт бейәне бәреп йыҡҡандағы кеүек. Тегеһе аты-ние менән ҡуша баштүбән тәкмәс атты. Ошоно күргән башҡа барымтасылар был тирәнән йәһәтерәк һыпыртыу яғын ҡайырҙы. Бәләгә тарыған иптәштәре ҡайғыһы юҡ ине уларҙа: урлашырға барғанда һәр кем үҙе өсөн, һәр кемгә үҙ йәне ҡәҙерле. Илбаҫарҙа – бүре тормошо...

Аяғын ҡосаҡлап шар-шор ятҡан баҫҡынсыны башҡорттар ҡамауға алды. Бер сосорағы ҡай яҡҡа сабып китергә белмәй ҡаңғырып йөрөгән атының теҙгененән эләктерергә өлгөрҙө. Уларҙың алдында ун биш-ун алты йәштәр тирәһендәге күсә ҡырғыҙ-ҡайсаҡ үҫмере тыпырсына ине. Күҙ йәштәрен субырлатып, үҙ телендә әллә нимәләрен һөйләй-һөйләй ялбара. Унын уң аяғы тубыҡтан түбән һынған булып сыҡты. Үҫмерҙең сенсегенә ҡыу таяҡтан сирәк һалдылар ҙа, ай-вайына ҡарамай, эйәренә арҡыры һалып ҡайтыу яғына ҡуҙғалдылар. Ә иртәнге һауын мәле еткәнен тойоп, тыныс һыҙланыуҙан өҙләкһеҙ бышҡырышып-кешнәшкән бейәләрҙе төйәктәренә өйөр айғыры әйҙәне. Уларҙың тиртешкән елендәре һыҙлай, түҙемһеҙләнеп ҡолондары көтә. Ҡамсы осо тейеүҙән һырт буйы, ҡабырғалары телгеләнеп бөткән ҡурҡыу белмәҫ Ҡарайғырҙың яраларынан ҡан һарҡа ине.

— Көтмәгәндә башҡа емерелеп төшкән лүшә[23] ише, ҡайҙан килеп сыҡты төн шайтандары? — тип ҡыҙыҡһынды юлда Биксәнтәй. — Абайламай ҡалдыңмы хастыҡтарҙы?

— Әшәк янында ултыра инем, — Әхмәтйән ашыҡмай ғына һөйләй башланы. — Сәй ҡайнап сыҡҡас, ҡомғанды алырға тип һоноларғанда, ҡаршыма төн

[23]*Лүшә — ағас ботағында ятҡан ҡар.*

убырылай бераү килеп басты. Күтәрелеп йөҙөнә ҡарарға була турайғайным, арттан килеп баш аша тоҡ кейҙерҙеләр. Айҡаша башланыҡ. Көстәре етмәҫтәй булдымы, әллә ныҡ ашыҡтылармы, түбәмә килтереп тондорғандан һуң үләнгә ташланылар ҙа оноттолар. Иҫһеҙ ята, тип уйланылар, ахыры. Сайҡала-сайҡала тороп аяғыма баҫыуға өйөр юҡ ине. Әллә ҡайҙарҙа Ҡарайғырҙың шөңгөрө[24] генә ишетелә. Күп уйлап торор мәл түгел ине, йәһәтләп ауылға саптым.

— Дөрөҫ эшләгәнһең, улым. — Ҡотлобай егетте ҡупайтып алды. — Яңғыҙың бер эш тә ҡыла алмаҫ инең, юғиһә. Ул ғына ла түгел, тиктомалға һәләк булыуың бар ине.

— Тоҡ кейҙереп маташҡастары, рәһенгә[25] алып китергә самаламанылармы икән? — Ғәлимйән үҙенсә шундай һығымта яһаны. — Ҡулдарынан килмәҫтәй булғас, шаңҡытҡандарҙыр.

— Нисек тә Хоҙай араланы, ҡустым. Иң мөһиме, юғалып ҡалманың, мәрҙәс![26] — Биксәнтәй Әхмәтйәндең арҡаһынан атайҙарса ҡаҡты.

Төш ауышыуға старшина дөйөм ҡор йыйҙы. Тәрән йыраҡа ситендәге ышыҡ урынға, ҡатын-ҡыҙҙарҙан башҡа, барыһы ла килде.

— Ағай-эне! — тип һүҙ башланы Биксәнтәй элекке ғәҙәтенсә. Үҙ-ара мөңгөрләшкән ир-ат тына төштө. — Сахради[27] йәндәр һуңғы осорҙа бик йышлай башланы. Был барығыҙға ла мәғлүм. Бөгөн килеп аҫыл егетебеҙҙе саҡ һәләк итмәнеләр. Үҙҙәренең ҡарибен[28] ҡалдырып ҡастылар өҫтәүенә. Уны юллап, оҙаҡ көттөрмәй, йәнә киләсәктәр, тимәк.

— Бына быныһы хаҡ, старшина, һис шикһеҙ ябырыласаҡтар. — Кемдер Биксәнтәйҙең һүҙҙәренә ҡеүәт бирҙе.

— Эйе, ҡыйғыр ҙа, ҡыҙыу ҙа дала халайығы. Өҫтәүенә, күмәктәр. Барыһы бер булып ябауылға килә ҡалһалар, көпә-көндөҙ ҡыран һалып китмәҫтәр тимә. Мал-тыуар, мөлкәт хаҡына улар бер нәмә алдында ла туҡталып ҡаласаҡ түгел.

– Раҫ әйтәһең, Биксәнтәй. Дөрөҫө шул!

– Шуға күрә икеләтә уяу булыу лазым беҙгә, ағай-эне.

Тыңлап ултырыусылар еңелсә геүләшеп, ғәм өҫтөнән елбер тулҡын үтеп китте.

— Сүп өҫтөнә сүмәлә: бер яғынан урыҫы ҡыҫымға алды, — тип дауам итте Биксәнтәй. — Ҡаҙағы ат- ужа менән малыбыҙға ҡаҙарылһа, аскернә кафырҙар уларынан уҙғарып ебәрә: иң ҡәҙерле нәмәбеҙгә — еребеҙгә ҡаныға, үҙенекеләй күреп аҫыл таштарға, ҡиммәтле мәғдәнгә дәғүә итә. Ҡырғыҙ-ҡайсаҡ ҡабаған[29], әммә бер ҡатлы булһа, урыҫ ҡыян[30] боҙоҡлоҡ менән алдыра. Әллә күпме йылғыһын алдан уйлап эш итә ул. Үҙен генә түгел, киләсәк быуынын — уландарын, хатта ейәндәрен бөгөн ҡайғыртып ятҡан көнө.

— Ауыртмаған башҡа тимер таяҡ булды инде, суҡынғандар, — тип һүҙгә ҡыҫылды Ҡотлобай. — Бигерәк әрһеҙ нәҫел, иблис тоҡомо.

— Ошо бәйән ителгәндәрҙән сығып, йәкүн[31] ҡылам... — Аҙға ғына тынып

---

[24]*Шөңгөр — ҡыңғырау тауышы.*
[25]*Рәһен —тотҡонлоҡ.*
[26]*Мәрҙәс — молодец.*
[27]*Сахради — дала кешеһе.*
[28]*Ҡариб — яҡташ, ерҙәш.*
[29]*Ҡабаған — уҫал.*
[30]*Ҡыян — хәйләкәр, аҫтыртын.*
[31]*Йәкүн — һығымта яһау.*

торған Биксәнтәй, ярым түңәрәк яһап, ауыҙына кереρҙәй булып текәлеп ултырғандарҙы берәм-берәм күҙҙән үткәрҙе. — Һуңғы осорҙа онотола барған ата-бабаларыбыҙ ғөрөф-ғәҙәтен аяҡҡа баҫтырмай булмаҫтыр, тиеүем, йәмәғәт.

— Йә, йә...

— Ыҙмабыҙҙа ғына түгел, олоҫ-ырыуыбыҙ менән ҡортобоҙҙа элек-электән килгән йола — һағауыл әтрәттәре булдырып, ҡабау урындарға ҡаланса-тамдар ҡуйып сығыу ниәтем. Тирә-яҡ ус төбөндәгеләй күренеп торһон ул ҡалансаларҙан, хатта боҫоп, ҡорһағында шыуышып килгән дошманды әллә ҡайҙан күреп ҡалырлыҡ булһын. Быны өсөн, әлбиттә, шәйләктә[32] тороусыларға үтә уяу булыу кәрәк. Кем нимә тиер?

— Хаҡ һөйләйһең! — Таяғына таянып аяғүрә баҫҡан Ҡолтой ҡарт хәрәкәтһеҙ күҙҙәрен Уралтау һырты яғына төбәне. — Ҡарыуҙы ойотто ҡаҙағы ла, урыҫы ла. Тамам йекһеттеләр. Байлыҡ, ер тип һаман сауығалар. Иман да, оят та юҡ үҙҙәрендә. Ярай, кешеләребеҙ юғалған осраҡ ишетелмәй, иншалла, Хоҙай аралайҙыр. Ян-яҡтарҙа бит мал ғына түгел, әҙәми заттар ҙа ғәйеп булғылап тора. Биксәнтәй улымдың һүҙҙәренә ҡадир[33] яман серкеүҙән һаҡланыу сараһын бөгөндән күрә башлау лазым.

Һис һүҙһеҙ боронғоса әтрәт-таптар ойошторайыҡ! Хәлемдән килһә, шәйләккә әүәл үҙем сығып баҫыр инем дә ҡалансаның[34] иң бейегендә торор инем.

— Һай, сахир[35] олатаң!

— Үҙе сүсәнде һымаҡ булһа ла, ҡәлбе[36] йәш, әй...

— Йөҙгә етеп барам, тип тормай!

Уҡалы түбәтәй кейеп, оҙон еләне осонан сарығы саҡ күренеп торған бәләкәй кәүҙәле ил ағаһын йөпләгән ҡәүем оҙайлы шаулашып алды. Старшина, уң ҡулын күтәрә биреп, халыҡты тынысландырҙы ла:

— Тағы әйтеүселәр булырмы? — тип, күҙҙәренән осҡон сәсеп тағы ауылдаштарына ҡараны.

— Миндә бер тәҡдим бар! — Әхмәтйән һикереп торҙо шунда.

— Йә. Бер кесене, бер олоно тыңла, ти...

Башы уралған егет, тартына биреп, һүҙ башланы:

— Ҡалансаларға урын һайламаҡҡа арабыҙҙан абруйлы, тәжрибәле, бер аҙ булһа ла хәрби эште белгән кешеләрҙән торған баш төркөм төҙөргә кәрәктер, тип уйлайым. Сөнки ҡуйыласаҡ ҡалансалар беҙҙең хәүефһеҙлекте ышаныслы тәьмин итергә тейешле. Уларҙы орҙом-бәрҙем көйө, ҡайҙа етте шунда торғоҙоп ҡуйырға ярамай. Бар тирә-яҡ, бай әйткәнсә, ус төбөндәгеләй күренеп торһон. Шул уҡ ваҡытта үҙҙәрен тиҙ генә шәйләп ҡалырлыҡ булмаһын. — Әхмәтйән күңел биреп ихлас тыңлаған ауылдаштарына бер аҙ һынап ҡарап торҙо. — Шунан, һәр төрлө мәғәнәһеҙ тыйыуҙарға ҡарамай, йәтеш кенә тимерлек төҙөп алғанда ла ҡамасау итмәҫ.

— Дөрөҫ! Бына быныһы урынлы тәҡдим! — Ҡолтой бабай йәштәрсә дәрт

[32]Шәйләк — һаҡ, пост.
[33]Ҡадир — көс, ҡеүәт.
[34]Ҡаланса — каланча, вышка.
[35]Сахир — шәп мәғәнәһендә.
[36]Ҡәлбе — йөрәк.

менән урынынан йәнә ҡалҡына биреп ҡуйҙы.— Юғиһә, тимерлек тип, ваҡтөйәк өсөн дә Сатраға һәлпәнләргә тура килә.

— Эйе, заманалар тыныс̌һыҙ, бер килеп ҡылыс-ҡырманың[37] да кәрәге тейеп ҡуйыуы бар. — Ошоғаса өндәшмәй ултырған Ҡотлобай ҙа һүҙгә ҡушылды.

— Әйтерең бөттөмө, Әхмәтйән? — тине Биксәнтәй.

— Бөттө.

— Тәҡдимдәрең урынлы. Ә шул тәҡдимдәрҙе йәп-йәш егетебеҙ ауыҙынан ишетеүе, әлбиттә, айырата ҡыуаныслы. — Старшина, тулҡынлана биреп, һүҙен дауам итте: — Тик, ҡустым, тимерлек төҙөп, аҙағынан тотола ҡалһаҡ, беҙгә ни янағанын беләһеңме?

— Бүренән ҡурҡып урманға бармаҫҡамы шунан? — тип саяланды Әхмәтйән. Ә Биксәнтәй, хәйләкәр йылмайып:

— Ярай, ауылдаштар, бөгөнгә һүҙ тик ҡалансалар хаҡында ғына бара, — тип ҡуйҙы. Аңлы кешегә был: “Тимерлеккә ҡағылышлы һорауҙар киләсәккә ҡалып торһон”, — тигәнгә асыҡ ишара ине. Тимерлек мәсьәләһе сетерекле лә, ҡурҡыныслы ла, ундайы бөтә ғәм алдында хәл ителергә тейеш түгел. Ауыл кешеһе араһында ниндәйе юҡ. Шул иҫәптән теленә хужа була белмәгәндәре лә етерлек... Рөхсәтһеҙ ҡыҙаш ҡороп, тимер һуғып ятҡаныңды власть әһелдәре белә ҡалһа, баштан һыйпамаҫтар.

Ҡарауыл тамдарын ҡуйырлыҡ ҡулай урындар һайлау өсөн ете кешенән торған мәртәбәле төркөм һайланды. Шул көндө үк аттарын эйәрләгән төркөм ағзалары ике-өс көнлөк тәғәм менән юлға сыҡты.

Улар йөрөп ҡайтып, тағы бер кәңәш-төңәш иткәндән һуң, ҡарауыл тамдарын ике урынға ҡуйырға ҡарар ҡылынды. Береһен — төп ҡалансаны — тарихҡа бай Ҡаҙаҡҡар түбәһендә, икенсеһен — Оло Сусаҡ тауы башында. Әйтергә кәрәк, Һаҡмарбаш ауылы ирҙәренең әлеге ҡарары урынлы һәм иҫ киткес уңай ине: һәр саҡ күкшелләнеп ятҡан мөһабәт Ҡаҙаҡҡарҙан Бөрйән, Ҡыпсаҡ тарафтарын бер ҡаршылыҡһыҙ күҙәтергә булһа, Оло Сусаҡтан Ирәндек буйҙары ап-асыҡ күренеп ята. Ҡасандыр, әле татар-монгол яуы ҡара болот булып ябырылған замандарҙа ла, ҡалансалар тап ошо урындарҙа торған булған.

Күмәк ҡулға эш төтәме?! Әлеге изге ғәмәлдә бар ауыл ҡатнашып, һәр кем хәленән килгәнсә үҙ өлөшөн индереп ҡалырға тырышып ятты. Тәүҙә быға са күрелгәне булмаған оҙон күкрәк арбалар әҙерләп алдылар. Тәү ҡарашҡа ифрат килбәтһеҙ күренгән арбаларға алтышар атты албалап[38] егеп, яҡын-тирәләге иң һырғый, иң төҙ һайланты ҡарағастарҙы тау түбәләренә ташынылар. Эштәрҙең барыһынан да ауыры ошоноһо булғандыр. Алып киленгән әҙер ағас ҡабығынан таҙартылғандан һуң матурлап йышыла барҙы. Йәш-елкенсәк, хатта малайҙар ҙа, бағана төптәре ҡаҙыуға йәлеп ителде. Шауҙырҙап ятҡан саҡматашлы тау түбәләрен соҡоуы еңелдән булманы. Соҡорҙарҙы, һуҡҡан саҡта киркә осонан осҡон сәсрәтеп торған тау тоҡомон ваҡлап ватып, бөртөкләп тигәндәй ҡаҙырға тура килде. Ҡыҙыу ҡояш аҫтында шаҡтай һурығып, һиҙелерлек еңеләйергә өлгөргән һырғауылдар күмәк көс менән торғоҙоп ултыртылды. Ай самаһы ваҡыт үтеүгә урын-еренә еткереп эшләнгән ике ҡаланса ла аяҡҡа баҫтырылды. Уларҙың һәр ҡайһыһы ике өлөшкә бүленеп, әүәл урта тирәһендә, унан иң осонда ҡалын ярҡаларҙан иҙән йәйелде. Әсе елдән,

[37] Ҡырма — уҡ башағы.

[38] Албалау — аттарҙы аллы-артлы егеү.

яуындан ышыҡланыр өсөн шундай уҡ ярҡанан буралар бурап, ҡарт ҡарағайҙан һыҙырып алынған трансаларҙан ҡыйыҡ ябылды. Ҡаланса өҫтөндәге ҡоролмалар улай-былай өйөңдән бер ҙә кәм түгел ине. Уларынан тыш, һағауылда тороусыларға ашап-эсеү, ял итеү өсөн тип ер өҫтөндә йәтеш кенә аласыҡтар ҙа эшләнде. Арамъяламай, һыҙыҡ алып, мүкләп күтәрелгән торлаҡтар ҡышҡы ыжғыр һыуыҡтарҙа ла нужа күрмәй йәшәрлек килеп сыҡты.

Эштәрҙең һуңында тамдарға йәнәш итеп бәләкәй кәбән ҙурлыҡ ҡоро ботаҡ, сытыр-сатыр араһына үлән, йәшәргән мүк, ҡарағай лапыһы, ҡарағас ылыҫы ҡушылған сүмәләләр өйөлдө. Уларын ҡапыл ғына тоҡандырып ебәреү өсөн байтаҡ туҙ әҙерләп ҡуйылды.

Һынап ҡарау маҡсатында, ауылға яҡыныраҡ Оло Сусаҡ түбәһендә йәнә бер бәләкәйерәк сүмәлә өйөп, шунда уҡ үрт һалдылар. Урғылып күтәрелгән ҡара төтөн ауыл менән Ҡаҙаҡҡар һағауылына ғына түгел, уларҙан ары тағы әллә ҡайҙарға ҡәҙәре асыҡ күренә ине. Күҙәтеп торған Биксәнтәй ҙә, башҡалар ҙа эштәренән буйтым ҡәнәғәт ҡалды. Хоҙайға тапшырып, киләһе йоманан һағауылды башлап ебәрергә лә тейешле сират буйынса шәйләккә баҫырға килешеп таралыштылар.

Түңгәүерҙәрҙән күрмәксе, Ҡыпсаҡтар ҙа, Тамъян-Ҡатай ырыуы менән Бөрйән яҡтары ла тиҙ арала үҙҙәре тирәһендәге күҙгә күренерҙәй бейек түбәләргә һағауыл ҡалансалары ҡуйырға тотондо. Шулай итеп, ырыуҙар араһында көтөлмәгән ябауыл, көндәлек янаған ҡурҡыныс хаҡында бер-береһен көнәлгәре иҫкәртеү мөмкинселеге булдырылды.

Хәҙер, ҡатын-ҡыҙҙарҙан башҡаһы, ҡулына ҡорал тота алғандай ир-ат, алдан төҙөп ҡуйылған сиратҡа ярашлы, икешәрләп-өсәрләп, һис ҡарышып тормайса, һағауылға йөрөй. Хатта ун – ун ике йәшлек малайҙар ҙа, олаталары менән бер ҡатарҙан шәйләккә баҫып, ил һаҡларға теләк белдереп тора. Быға эстән генә ҡыуанып бөтә алмаған Биксәнтәйҙең йәне бер аҙ тынысланып ҡалғандай булды.

Һаҡмарбашта көллөһө лә белә: Биксәнтәй, мин баймын, тип бот күтәреп өйҙә тик ятмай. Йылҡыһын барлап та, ерҙәрен байҡап сығырға ла, башҡаһын да күҙҙән үткәрергә өлгөрә. Әллә ҡайҙарға йәйрәп ятҡан дәү хужалығын көнөнә бер тапҡыр әйләнеп сыҡмаһа, күңеле тынысланмай. Мәшәҡәттәре нисек кенә тулып ятмаһын, ил именлеге булған ҡарауылдарҙы тикшереп торорға ла форсатын таба.

...Етеҙлеге менән тирә-йүндә дан тотҡан тарлан буҙын, бер аҙ ҡан яҙып килһен әле, тип эйәрләп сыҡҡан Биксәнтәй Оло Сусаҡ һағауылына килеп еткәндә, төш ауышҡайны. Ағалы-ҡустылы йәш егеттәрҙең там[39] башында торғаны атын ашыҡтырмай ғына килгән яңғыҙ һыбайлыны әллә ҡайҙан уҡ күреп алды ла:

— Биксәнтәй ағай килә! Сәйеңде тиҙләт, Айтуған!— тип әшәк янында булашҡанына ҡысҡырҙы.

— Әссәләмәғәләйкүм, егеттәр! — Ваҡ уҫаҡлыҡ араһынан тауыш-тынһыҙ ғына килеп сыҡҡан бай һағауылдағыларға асыҡ сырай күрһәтте.— Йәшерен генә яҡынлашмаҡ инем, барыбер шәйләнегеҙ. Афариндар! Шулай һәр ваҡыт уяу булыр кәрәк.

— Вәғәләйкүмәссәләм! Һөйләмәй генә йөрөп ятаһың, Биксәнтәй ағай.

[39]*Там— ҡарауыл вышкаһы.*

— Йылы һүҙҙән күңеле күтәрелгән үҫмер байҙы табынға саҡырҙы. — Әйҙүк, сәй эсергә.

— Бөгөн ниндәй көн икәнлеген иҫегеҙҙән сығарманығыҙмы? — тине Биксәнтәй, кинәт етдиләнеп.

— Йома бит. Нисек онотмаҡ кәрәк йоманы.

— Шулай булғас, сәй бер аҙға көтөп торор. Йома ғәмәлен башҡарып алайыҡ әүәл.— Биксәнтәй атын тышап ебәрҙе лә йәнәшәлә селтерәп ятҡан инешкә тәһәрәткә төштө. — Йәмәғәт менән сәхрәләрҙә уҡылған намаҙҙың сауабы ҙур була, үә Аллаһы Тәғәлә тарафынан шунда уҡ ҡабул ителә. Әйҙәгеҙ, тәһәрәтләнегеҙ ҙә баҫығыҙ намаҙлыҡҡа.

— Беҙ, төшкө сәйҙән аҙаҡ уҡырбыҙ, тигән инек...

— Тулы ҡорһаҡҡа башҡарылған намаҙ — намаҙмы ул, ҡустылар, йәгеҙ, ығышламағыҙ.

Бай һынлы бай шулай тип торғас, егеттәр башҡаса һүҙ көрәштереп булашманы. Оҫта ҡул менән һуғылған семәрле намаҙлыҡтарын йәшләүеккә йәйеп, яланғас табандарын терәнеләр ҙә, өсәүһе бер булып ҡиблаға йөҙ йүнәлткәндән һуң, илаһи ниәт ҡылдылар. Артабан, араларында иң оло кеше булараҡ, ғәмәлде Биксәнтәй башланы, тегеләре уға эйәрҙе. Сәнә аҙағынан дүрт рәҡәғәт фарыз башҡарылды, салауат уҡып доға ҡылынды.

— Бына, ошо рәүешле һис ҡалдырмағыҙ изге ғибәҙәттәрҙе,— тине Биксәнтәй, ҡәнәғәт ҡалып.

— Бар хәлсә тырышып ятыла инде, бай ағай, — егеттәрҙең өлкәне икеһе өсөн дә яуап бирҙе. — Ҡалдырған юҡ былай.

— Дөрөҫ эшләйһегеҙ. Үҙен мосолман тип һанаған һәр мөьмин бәндәгә тәүлек эсендә биш ваҡыт намаҙ фарыз. Араларҙы өҙмәҫтән, Аллаһы Тәғәлә менән йышыраҡ аралашып тороғоҙ, Мөхәммәт Мостафа саллалаһу ғәләйһиссәләмде онотмағыҙ. Шулай иткәндә генә Хоҙай ярҙамынан ҡалдырмаҫ, ә пәйғәмбәребеҙ рухы шәфәғәтенән яҙҙырмаҫ, иншалла.

Һәр төрлө шифалы үлән ҡушып, татлы инеш һыуынан ҡайнатылған хуш еҫле сәйҙән һуң ҡалансаға күтәрелгән Биксәнтәй Оло Урал, Ирәндек буйҙарының, еҙ йылан ише борғоланып ятҡан Һаҡмар үҙәненең күҙ күреме киңлектәренә ҡараш ташлап торҙо. Ул ошолай, ҡош осар бейеклектән, оҙон-оҙаҡ тирәяҡты байҡап, тыуып үҫкән йәнтөйәгенең гүзәллегенә һоҡланып бөтә алмай, хыялдарға бирелеп торорға ярата. Ҡарап торған һайын яңы асыштар яһай, электән таныш ҡалҡыулыҡтарға, ағаслыҡтарға ла иғтибар итә. Бына әле лә, Ирәндеккә етәрәк, әүәл нисектер иғтибарҙан ситтә ҡалып, күҙгә эленмәгән йомро түбәгә текәлеп торҙо. Ярты битләсе ағас менән ҡапланған түбәләстең ян-яғы мал көтөү өсөн ифрат уңай күренә лә баһаң. Шул тирәгә йәйләү ҡорғанда... Улай тиһәң, хәйерһеҙең, Ирәндек шырлыҡтарына артыҡ яҡын икән. Әҙер мал артынан темеҫкенеп йөрөгән барымтасы-баҫҡынсылар өсөн һәләк ҡулай урын. Мал-тыуарҙы һай-һайтлап урманға индереп алдың киттең һәм вәссәләм, артабан эт менән дә эҙләп таба алмаҫһың. Уның ҡарауы, ер аяғы ер башы ерҙә ятҡан Сатра ише алыҫ түгел, ана, бөтөнләй йәнәшәлә. Уҙа барһа ярты көнлөк юл. Тирә-яғы үҙенең йәйрәп ятҡан ҙур-ҙур асыҡтар. Саҡ ҡына арыраҡ ялтырап ятҡан йылғаһы ла күренә. Ҡуйы таллыҡтар, үтеп сыҡҡыһыҙ ҡамышлыҡ менән сорнап алынған шөйлә ҙур йылға, күрәһең, түбәндәрәк Һаҡмарға барып ҡушыла. Уның йүнәлешенә ҡарап Биксәнтәй шулай самаланы. Тоғро бәндәләре өсөн әлеге урынды Хаҡ Тәғәлә махсус әҙерләп

ҡуйған, тип уйларһың. Бигерәк тә тауҙың һирәк ҡайынлыҡ менән ышыҡланған арғы итәге сатыр-тирмә ҡуйырға уңайлы икән...

Барыһын алдан ҡайғыртырға күнеккән йүнсел бай күргәндәрен зиһененә һеңдереп, хәтер һандығына һалып ҡуйҙы. Бер кәрәкмәһә, бер кәрәге тейеүе бар...

— Ирәндек тарафтарына, Һаҡмар буйы сағылдарына айырым иғтибар итегеҙ. Берегеҙ ял иткәндә икенсегеҙ мотлаҡ шәйләктә булһын. Алмаш килмәй тороп һағауылды ҡалдырып китә күрмәгеҙ, был енәйәткә бәрәбәр булыр. Саҡ ҡына шикле нәмә күҙегеҙгә салынһа ла, кисекмәҫтән, шунда уҡ хәбәр итеп, яр һалығыҙ. Кәрәк икән, сытырҙы йәлләмәгеҙ. Урманда ҡыу ботаҡ менән иҫке мүк бөтмәгән. Дошманды мәлендә шәйләмәй ҡалып бөтә ырыу яҙмышын ҡурҡыныс аҫтына ҡуйыуығыҙ бар. Ауылдаштарыбыҙ, туғандарыбыҙ именлеге һеҙҙән тора, шуны хәтерегеҙҙән сығармағыҙ...

Ҡайтып китер алдынан һаҡсыларға ошолай итеп оҙаҡ ҡына өгөт-нәсихәт уҡыған Биксәнтәй:

— Аңлашыламы барыһы ла, үтенес-фәләнегеҙ юҡмы? — тип ҡыҙыҡһынырға ла онотманы.

— Биксәнтәй ағай, — тине егеттәрҙең береһе, кесерәге, — төндәрен айыу апа тәҡәтте ҡорота бит әле. Дошман киләме, януар йөрөймө – һис айырырлыҡ түгел. Берәй сараһын күрергә ине.

— Шулай ныҡ бимазалаймы ни?

— Ана, анауы таллыҡҡа уҡ килеп етә лә таңға ҡәҙәре ер тырнап, яман үкереп йөрөй. Аласыҡҡа баҫып инә яҙа. Иҫ итмәҫтән берәй хәсарәт яһап ҡуймағайы тиеүебеҙ. – Өлкән егет тамдан ун – ун биш аҙымда күпереп ултырған ҡыуаҡлыҡҡа төртөп күрһәтте.

— Эҫенгән төйәге ошонда булған, тимәк. Бәлки, йөрөр һуҡмағы ошонан үтәлер.— Биксәнтәй үҙенсә һығымта яһаны. — Күрәгеҙме, сит-яттарҙың һөмһөҙләнеп йөрөгәнен януарҙың януары яратмай, ана.

Иртәгәһенә үк бай, йыуан ҡайын бүрәнәләрҙе бер-береһенә арҡан менән беркетеп, ауыр таҙғаҡ яһатты. Көс еткеһеҙ һалмаҡ “ылашты” унлаған әзмәүер бер яҡ ситенән көскә күтәреп таяуҙарға терәтте лә “тел”гә элде. Сыҫҡан тәпеһенә оҡшаш ябай ҡоролма килеп сыҡты. Ҡәҙимге тәпенән бары ҙурлығы менән генә айырыла. Ҡаҡ ҡайындың борош ялынан йоҡартып сабылған “тел”гә еҫләнә башлаған ит киҫәге бәйләгәндән һуң, тәпене тотоп торған таяуҙарҙы алдылар. Яп-ябай таҙғаҡ тигәнең шунда уҡ үлемесле ҡоралға әүерелде. Хәҙер инде, һаҡһыҙ ҡыланып, абайламай “тел”гә саҡ ҡына ҡағылыуың да етә – күҙ асып йомған арала ҡоймаҡҡа әйләнәсәкһең. Ҡаланса башында һағауылда тороусыларға бер юлы әлеге тәпегә лә күҙ-ҡолаҡ булып торорға ҡушылды.

“Урман хужаһы” быҒаса күрелмәгән ят ҡоролма тирәһендә ике төн ажғырып, ер аҡтарҙы, ҡыу ағастарҙы шарт-шорт һындырып, енләнеп йөрөнө. Унда ҡуйылған итте ашағыһы килә, мәгәр яҡын барырға шөрләй. Өсөнсө төн ахырына яҡынлашҡанда ғәләмәт ауыр ҡоролма гөрҫ итеп айыуҙы баҫыуға хатта ер һелкенеп китте. Ошонан һуң һағауылда тороусылар бер аҙға тынсып ҡалды. Әммә оҙаҡҡа түгел. Ай самаһы ваҡыт та үтмәне, әлеге төбәккә икенсе “хужа” табылды. Тәүгеһе һымаҡ, быныһы ла теге бәләле тал ҡыуағы тирәһенә эйәләште. Айыу бер үҙ иткән төйәген ташламай икән шул. Һаҡсыларҙың тәҡәтен нығ ҡорота башлағас, әҙер тәпене йәнә эшкә “ҡуштылар”. Был мәғҡулһыҙ холоҡло тайыш табандың да яҙмышы тәүгеһенеке һымаҡ барып осланды.

# II. Сатра

*Арғымаҡҡайҙарға, ай, атланып,*
*Йөрөһәң ине Урал буйлатып.*
*Ағай-эне, дуҫ-иш бергә килеп,*
*Ултырһаң ине ҡурай уйнатып.*

(Халыҡ йырынан)

Жәүҙә урталары етеп йәшләүек ҡалҡына башлаған мәлдә ауыл халҡы йәйләүгә күсенә башлай. Йәйләүҙәре даны сыҡҡан Яманйылға буйында. Йөклө ылау менән ашыҡмай ғына барғанда ике көнлөк юл. Тирә-яғы бейек тауҙар, ҡая ташлы һырттар менән уратып алынып, дөм-ҡараңғы ҡарағай урманы менән ышыҡланған Сатра – ҙур, асыҡ, сикһеҙ-ҡырыйһыҙ язы[40] уртаһындағы вәһәне[41] хәтерләтә. Ҡай тарафҡа ҡарама, күҙ күреме ерҙә – тауҙар ҙа тауҙар. Урманына төрөнөп, тулҡын-тулҡын булып эленеп торған шыйыҡ томанын бөркәнеп, күгәрешеп-күкшелләнеп ятҡан Башҡорт тауҙары[42] — ер йөҙөндәге иң боронғо һәм иң бай тауҙар. Бында ғәйрәтле йырткысы менән сатай мөгөҙ мышыһы ла, һаҡаллы һуйыры менән һылыу ҡоралайы ла тулып йөрөгән үтеп сыҡҡыһыҙ эләгет-шырлыҡ. Төпһөҙ күгендә, бөҙрә болоттарға ашып, сал бөркөтө йөҙһә, унан түбәнерәк, йылғыр ыласыны менән уҙышып, ҡыйғыр ҡарсығаһы шыҡыйып үтә. Ләкин, күпме генә тырышып ҡарамаһын, уҙып китә алмай. Яҙ айҙары етеүгә, яман үкереп ташып, юлында осраған барлыҡ кәртәләрҙе ҡырып-емереп алып китер Яманйылғаһында батша балығы — бәрҙе лығырҙап ята. Йыбанмаһаң, бар, эйел дә ал. Яҡын-тирәләге уңышынан һығылып ултырған емеш-еләге тураһында әйтеп тораһы ла түгел. Тәңре ихтыяры менән хозур Башҡорт иле эсендәге Уралтау буйҙарында бар ителгән кескенә ожмах мөйөшө ул — Сатра. Был ғәжәп төпкөлдөң эклиме[43] лә үҙенсәлекле. Һаҡмар буйҙарында инде һалҡын елдәр иҫеп, шауҙыр ҡырауҙар төшә башлаған мәлдә Сатрала әле ҡотороноп үҫкән йәшеллек хөкөм һөрә. Ҡаты һыуыҡтары менән даны сыҡҡан Һаҡмар үҙәнендә һис тамыр йәйеп китә алмаған имән, саған, йүкә ише ағастар бында ирәйешеп үҫеп ултыра. Ҡышы йомшаҡ, йәйе дымлы Сатраның. Әлбиттә, урман – урман инде, үләне ялан үләненә етмәй. Шыйыҡ япраҡлы булғанлыҡтан, туҡлыҡлылығы ла самалыраҡ. Шулай ҙа, ауыл тирәһендәге асыҡтар үтә ныҡ тапантыға әйләнеп китмәһен өсөн, сөнбөлә[44] аҙаҡтары еткәнсе һаҡмарбаштар ошонда йәйләп ята. Йәй мәле булыуға ҡарамаҫтан, мөһабәт тауҙар артынан шәмесе[45] лә ныҡ һуңлап ҡалҡҡандай тойола, иртәнге ысыҡ кибеп тә өлгөрмәҫтән байып та ҡуя. Шуның өсөнмө бында дым яҡшы һаҡлана һәм һәр төрлө йәшеллеге күпереп үҫә.

Быйылғы яҙ ғәҙәттәгенән күпкә алдан килде. Әлеге күренеште был яҡтарҙа, яҙ миҙгеле ашыҡты, хәйерлегә булһын, тип юрайҙар. Шул сәбәптән йәйләүгә лә элеккегә ҡарағанда байтаҡҡа иртәрәк ҡуҙғалдылар. Оҙон ҡыш буйына тибендә йөрөгәнлектән, үткән йылғы ҡауландан ныҡ ялҡып, яңы күтәрелә башлаған һутлы үләнгә сат йәбешеп ятҡан йылҡы малы ситкә китә һалып

---

[40] *Язы — сүллек.*
[41] *Вәһә — оазис.*
[42] *Башҡорт тауҙары — Урал тауҙары.*
[43] *Эклим — климат.*
[44] *Сөнбөлә — август айы.*
[45] *Шәмес — ҡояш.*

бармай. Арлы-бирле күҙ-колаҡ булып торһаң — шул еткән. Йылҡы ул, йәй урталары етеп, үләнгә туйына башлағас, башы һуҡкан яҡка олағыу яғын ҡайыра ла тора. Айғырың ышаныcһыҙ икән — ат эҙләүҙән арына алмайһың. Ул яҡтан, әлбиттә, Һаҡмарбаш табунсыларына борсолор урын юҡ. Һәр ергә өлгөр Ҡарайғыр өйөргә туҙып китергә бер ваҡытта ла ирек бирмәй. Айыу-маҙар эйәләшкән хәлдә лә Биксәнтәй йылҡыһы өсөн тыныс. Айғыры ажғырып торған теләһә ниндәй януарыңа бирешмәйәсәк. Шулай ҙа... Тәңре лә бит, һаҡланғанды һаҡлармын, тигән, ти: уяулыҡ менән һиҙгерлекте юғалтып ебәрмәү һис яҙыҡ булмаç. Ҡырағай кейеге булмаһа, кейектең ике аяҡлыһы күбәйҙе һуңғы осорҙа. Алпауыттарынан эҙ яҙлыҡтырмаҡҡа аҙып-туҙып йөрөгән ҡасҡындар йышланы Урал буйҙарына. Шуларынан айырата абай булыу кәрәк. Йылҡыңа көсөнән килмәгән хәлдә лә, башҡа мал-мөлкәтеңә яғыныуы бар.

Кем нисектер, ә Әхмәтйән йәйләүгә күсенер көндө түҙемһеҙлек менән ашҡынып көтөп ала. Тәбиғәт ҡосағына, аҡ сатырлы сәхрәләргә тартылыуҙан тыш, был ашҡыныуҙың башҡа сәбәбе лә бар: йәйләүҙә саҡта Гөлбикәһе менән йышыраҡ күрешеп-осрашып торор мөмкинселек тыуа. Аулаҡ та, ышыҡ та, ауылдағы һымаҡ, кеше күреп ҡалыр, тип шөбһәләнәһе юҡ. Ғашиҡтар үҙҙәре һөйләшеп ҡуйған тәғәйен урында көн дә тиерлек осрашалар. Ғәжәп матур, аҡ сәскәле түңәрәк аҡландың ҡап уртаһында йөҙйәшәр ялбыр ҡарағас үçә. Әйләнә-тирәһендәге барлыҡ ағастарҙан аша ҡарап, бәләкәс ҡустылары араһындағы өлкән ағайҙай ғорур баçып тора ул. Ҡарағас төбөндә ҙур, йәйенке Һарыҡташ ята. Был мөғжизә мөйөшө, әйтерһең, ғашиҡтар өсөн махсус булдырылған.

Көн үҙәге яҡынлашыуға эçе төшөп, күгәүен көсәйә, бөгәләк әүҙемләшә башлағанда, Әхмәтйән йылҡыларын тоҡон кәртәле саңдауға индереп яба ла аҡсәскәле аҡландарына ашыға. Беләгенә тырыз аçҡан булып, көртмәле һылтауы менән сығып киткән Гөлбикә лә оҙаҡ көттөрмәй, йәлп-йөлп итеп һомғол ҡарағайҙар араһынан йүгерә-оса килеп тә сыға. Әхмәтйәндең көтөү сираты еткән һайын ошолай ҡабатлана. Бына әле лә, унан да, бынан да ишетелеп ҡалған серле ҡыштырлауҙарға ҡолаҡ һала-һала, күҙенә салынып ҡалған һәр хәрәкәткә һиçкәнгән егет таш өçтөндә ултыра. Ике күҙен дүрт итеп ул һөйгәнен көтә. Уныһы бөгөн уйламаған-көтмәгән яҡтан пәйҙә булды. Йыш-йыш тын алыуына ҡарағанда ҡабаланып, шәп йүгергәнгә оҡшай. Ҡыҙ, килеп еткәс тә, аяғүрә баçҡан егеттең ҡосағына ташланды.

— Көттөрҙөммө, Әхмәтйән?

— Юҡсы.

— Ҡыҙҙарҙың күҙен яҙлыҡтыра алмай оҙаҡлап киттем. Элек улай ҡыланмағандарын, тотам да ҡалышмай эйәреп тик йөрөйҙәрсе,— тип аҡланғандай итте Гөлбикә, — әллә һиҙенәләр инде...

Егет уның ымһындырғыс тығыҙ кәүҙәһен күкрәгенә ҡыçып, хуш еçле ҡәнәфер аңҡып торған сәстәренә сикәһен тигеҙҙе. Мөхәббәттән илергән йәш йөрәктәр шулай ҡауышты ла бер бөтөн булып типте.

— Теге юлы мин көттөргәйнем, — тип йылмайҙы Әхмәтйән.

— Ә мин һине күпме көтөргә лә риза, — Гөлбикә хисләнеп китте. – Ҡатынҡыҙға яҙған тәҡдирҙер ул — көтөү.

— Яратам да һуң үҙеңде, Гөлбикәм!— Егет ҡыҙҙың ҡолағына шыбырлай.

— Мин дә! – Ҡыҙ егеткә нығыраҡ һыйына.

— Ҡауыша ғына алмабыҙ шул... Күңелем һиҙә.

— Ниңә улай тиһең?! — Гөлбикә Әхмәтйәнде этәрә биреп, ҡуңыр күҙҙәренә төбәлә.
— Үҙең аңлайһыңдыр, аҡылһыҙ түгелһең...
— Мине бай ҡыҙы тип әйтмәксеһеңме әллә?
Егет, ниндәйҙер ғәйепле ғәмәл ҡылған кеше һымаҡ, өндәшмәй генә башын эйә.
— Белгең килһә, атайым минең өсөн барыһын да эшләргә әҙер.
— Әллә инде...
— Фатихаһын бирмәç, тиһеңме?
Әхмәтйән йәнә шымып ҡала.
— Ниңә өндәшмәйһең? — Гөлбикә уға нығыраҡ ҡаҙарыла.
— Нимә тием һуң?
—Тағы шуны бел: атайым һине лә ярата. Яратмаһа, гелән маҡтап телгә алмаç ине.
— Шулай уҡмы?! — Осоноп киткән Әхмәтйән Гөлбикәне нығыраҡ ҡыҫа.
— Абау! Ҡабырғамды һындыраһың бит, айыу! — Тегеһе көлә-көлә юрый бәлә һалған була. Шунан кинәт етдиләнеп: — Әллә, әсәйең ҡаршы булыр, тип уйлайһыңмы тағы?
— Әсәй кешегә ни, килен булһа булды. Кем балаһы икәнлеге уның өсөн артыҡ әһәмиәткә эйә түгелдер ул.
— Үҙең әйтмешләй, әллә инде...
— Ауылдың беренсе байы, өçтәүенә старшинаһы менән ҡоҙалашырға кем генә ҡаршы булыр икән, ҡәҙерлем?
Бәхетле Гөлбикә йәнә сырҡылдап көлөп ҡуя.
— Нисек итеп ураған һайын урманға ебәрәләр үҙеңде? — Әхмәтйән шунда уйынлы-ысынлы ҡыҙыҡһына ҡуйҙы. — Аҙашып китереңдән ҡурҡмайҙармы икән?
— Күсә көйө һиңә йылҡы көтөүен ышанып тапшырғанды, мине нишләп емеш-еләккә ебәрмәçкә ти? Көләһеңме әллә?
— Юҡсы. Уйламайым да.
— Ике йәшкә өлкәнмен тигәс тә, үҙеңде әллә кем урынына тояһың, буғай. Эй, ошо егеттәрҙе...
— Шыпа улай түгел, Гөлбикә. Беҙ бит — ирҙәр.
— Ә-ә, бына нисек! — Әхмәтйәндең ҡосағынан кинәт айырылған Гөлбикә ситкә тайшанды. — Ир икән берәү! Һинеңсә, ҡатын-ҡыҙ затынан булған өсөн генә мин, көнәш[46] күрмәйсә, ҡараңғы тирмәлә бикле ултырырға тейешме? Аҡылың алтын икән!
Осҡалаҡ ҡыҙ, керпек сәнсеп, егеттең йылмайған күҙҙәренә йәнә текәлде.
— Улай тимәйем бит, Гөлбикә — Әхмәтйән һөйгәненең йомшаҡ ҡулдарын усына йомдо. — Ҡыҙ кеше — нәфис кеше, көсһөҙ кеше, ә урман тулы януар...
— Юҡ инде, бүренән ҡурҡып урманға бармай ятылмаç, — Гөлбикә танау сөйҙө. — Ирҙәре менән йәнәш яу сапҡан ҡатындар хаҡында ишеткәнем бар. Үҙемдең дә шулай булаһым килә.
— Ул бит яуҙа, Гөлбикә...
— Аптырайым мин, Әхмәтйән, ни сәбәптән ир-ат беҙгә шул ҡәҙәре йәлләп, хатта кәмһетеп ҡарай икән? Беҙҙең һеҙҙән ҡай еребеҙ кәм?
— Мин, мәçәлән, һис улай итмәйем. Уйламайым да.

[46]*Көнәш — көн яҡтыһы.*

— Итмәйһең?! — Гөлбикәнең ҡыйғас ҡаштары өҫкә һикереп, тулышҡан муйыл ише сөм-ҡара күҙҙәрендә осҡон уйнап китә, иҫ киткес матур аҡ йөҙөндә тантаналы йылмайыу ғәләмәте сағылып ҡала. — Әле генә әйтеп тораһың бит!

— Ул һинең өсөн борсолғандан ғына ла баһаң.

— Өҫтөмдән хакимлыҡ ҡылғандарын йәнем һөймәй.

— Ҡатын-ҡыҙ барыбер ҡатын-ҡыҙ булып ҡалырға тейешле.

— Эйе, ҡатын-ҡыҙ булып! Тик иренең ялсыһы, олтораға, кем өсөндөр сепрәк ҡурсаҡ булып түгел!

— Бына ниндәйһең икән һин, Гөлбикә! Белмәгәйнем. — Хайран ҡалған Әхмәтйән һоҡланыуын йәшерә алмай торҙо. – Тик шуны хәтереңә киртеп ҡуй, бергенәм: мин һине бер ваҡытта ла олтораҡ та, ялсы ла итмәм, ҡурсаҡ итеп тә уйнатмам!

Ун алтыһы тулыр-тулмаҫ, ир ҡорона яңы инеп килгән егет менән яңы асыла башлаған сәскә ише ун дүрт йәшлек ҡыҙ, бар донъяларын онотоп, бер-береһенең ҡайнар ҡосағына сума. Үткән ҡыш ҡына менгегә өйрәтелгән, шырт ҡырас яллы, тигеҙ итеп киҫелгән кикелле[47] аҡбәкәл туры тай мырт-мырт үлән ҡырҡа. Яҡында ғына, һағышланып, кәкүк ҡысҡыра, Яманйылға таллығында һайрар ҡошсоҡтар сутылдаша. Тумарлыҡтың арғы башында нимәгәлер яр һалған сарға барҡылдаҡ тауышы ишетелеп ҡала.

Ғашиҡтарҙың ҡолаҡтарына ҡыҙҙар соролдашҡаны салынды. Улар ауҡылдашып ҡысҡырыша, мәж килеп, урман яңғыратып Гөлбикәне эҙләй. Тауыштары торған һайын яҡыныраҡ ишетелә. Ә Әхмәтйән менән Гөлбикә, айырыла алмайса, бер-береһенә һырығып, күкшел мүк менән ҡапланған, эргә-тирәһендә муйыл, мышар ҡыуаҡтары күпереп үҫкән Һарыҡташ янында һаман торалар. Ниһайәт, егет, борсола биреп:

— Ярай, бар, ҡаршыларына йүгер, — тине. — Юғиһә, үҙеңә һүҙ тейер.

— Яратҡан кеше мөхәббәтен нишләп икенселәрҙән йәшерергә тейеш икән? — Гөлбикә муйырылып Әхмәтйәнгә ҡараны. — Ҡолдарҙың ғына һөйөүгә хоҡуғы булмаған да баһаң. Беҙ ҡолдармы ни?

— Беҙ барыбыҙ ҙа йола ҡолдары, Гөлбикә. Яратам, һөйәм, тип һөрән һалырға йола ҡушмаһа, әҙәп тигәнен дә онотоп китергә тейеш түгелбеҙ.

— Ярай, Әхмәтйән, хуш! Тағы ҡасан осрашырбыҙ?— Әленән-әле яҡыныраҡ яңғыраған тауыштарҙы ишеткән Гөлбикә тиҙерәк һаубуллашыу яғын ҡайырҙы.

— Ике көндән, Алла бирһә!

Әхмәтйән атының алғы бәкәленә уралған теҙгенде сисә һалып, аяғын өҙәңгеләне.

— Мин һинһеҙ йәшәй алмайым, һөйгәнем! Онотма шуны! – тине ул китеп барышлай.

— Мин дә!

Һыбайлы йөҙйәшәр ҡарағайҙар араһына инеп юғалыуға, Гөлбикә үҙен эҙләүҙән күҙҙәре аларған ҡыҙҙарға ҡаршы йүгерҙе.

— Уф, Аллам, Гөлбикә, йөрәкте ала яҙып ҡайҙа ғәйеп булдың да ҡуйҙың, ә?!

— Бер-бер хәлгә тарынымы әллә, тип ҡот ҡалманы ла баһаң!

[47] *Кикел — аттың маңлай сәсе.*

— Япа-яңғыҙың нисек ҡурҡмайһың ул?

Алыҫая барған Әхмәтйәндең ҡолағына ҡыҙҙарҙың шатлыҡ ҡатыш һоҡланыу ауаздары ишетелеп ҡалды.

Ғәлимйән бөгөн Әхмәтйәнде алмаштырырға көндәгенән байтаҡҡа иртәрәк килде.

— Киске һауынға тиклем ваҡыт бар әле, Ғәлимйән ағай. Нимә ҡарап йөрөйһөң был мәлдә? — тип ҡаршылаңы уны өлкән табунсы, — ҡыуышта тик ятыуы әллә ялҡытты ламы?

— Яҡты күҙҙә саңдау кәртәһен ҡараштырмаҡ инем.

— Кәртәгә бер ни ҙә булмаған, әле генә әйләнеп килдем. Һайғауҙар ныҡлы, аша һикереп тә, емереп-онтап та сыҡҡандай түгел.

— Барыбер көн үткәреп булмай, ҡустым. Йоҡо һимертеп ятҡансы хәрәкәтләнеп йөрөгәнең хәйерле.

— Уныһы шулай, ағый, хәрәкәттә — бәрәкәт.— Әхмәтйән һөйләшеүҙе вайымһыҙ ғына икенсе юҫыҡҡа борҙо: — Малай ни хәлдә, үҫәме?

— Шәбәйеп килә Ғәлийәнем, собханалла. Бик шуҡ булмаҡсы, шилма, әллә кемгә оҡшаған.

— Малайҙарҙың шулай сос булғаны хәйерле.

— Эйе, булыр бала биләүҙән. Әле үк күренеп тора: олатаһы мәрхүм яғына тартҡан, хур булмаç.

— Ай-һай! Тора ла башлағандыр?

— Тырышып-тырмашып бер-ике ҡәдәм[48] яһап ҡуя хатта! — Бер ҡатлы Ғәлимйән бөтөнләй маһайып китте.

— Атлап та, йүгереп тә китер. Ҡул аҫтыңа керә башлаһа, үҙеңә бер ярҙамсы булыр. — Әхмәтйән ағайының һалпы яғына һалам ҡыҫтырып ебәрергә лә онотманы.

— Эйе шул, һау-сәләмәт булһын, — уйсанланып киткән Ғәлимйәндең алсаҡ йөҙө ҡапыл етдиләнде. — Эй, ғүмер тигәнең. Әллә ҡайһы арала егет булып та еткәнһең. Йәл, атайың ғына йәшләй әрәм булды, ҡыуанысыңды күрә алманы.

— Әсәйемдең ике ҡуллап һауаға сөйгәне, мине ҡосағына алып илап ултырғандары хәтерҙә өҙөк-йыртыҡ ҡына уйылып ҡалған. Атайым тураһында, нишләптер, бөтөнләй һөйләмәй ул. Һораша башлаһам, һүҙҙе йәһәтләп икенсегә бороп ала ла китә.

— Эш тип янды атаң. Тирләп йөрөгән ерҙән һалҡын һыу эсеп күкһәүгә әйләнде, аҙаҡ инде күҙ алдында сауығып хәлдән тайғас, урманға сығып китеп ғәйеп булды. Оҙаҡ эҙләнеләр уны. Һыуға баттымы, йыртҡыс тырнағына тарынымы, әллә башҡа сәбәбе килеп сыҡтымы – бер кем дә белмәй. Исмаһам, ҡалдыҡтары ла табылманы. Әсәйең, күрәһең, хәтер яңыртып йөрәк яраһын ҡуҙғатаһы килмәгәнгә һөйләмәй. Еңел эшме ҡайғы-хәсрәт йотоп йәшәү. Үпкәләмә уға.

Һүҙгә мауығып китеп, ул көндө киске һауынға саҡ һуңламанылар.

Әхмәтйән, өйөрҙө Ғәлимйән ағаһына тапшырғандан һуң, хуш еҫле бесән түшәлгән иркен ҡыуыштарына инеп ятҡас та еҫер үҫкән бала сағын уйлап бер килке бойоғоп алды. Уҙағының һөйләгәндәре, үҙе әйтмәксе, ҡапыл ғына хәтерен яңыртып, еңелдән булмаған үткәндәрҙе иҫенә төшөрөп ебәрҙе. Эйе, дуҫҡушаға һаналып йөрөгән ауылдаштары "етем башмаҡ"тан һалдырып, башҡа

[48] *Ҡәдәм — аҙым.*

ҡушаматын да тағып, əҙ рəнйетмəнеләр уны. Буҫығып илар ине малай шул мəлдəрҙə. Юҡ, етем булғанлыҡтан түгел, бергə уйнап йөрөгəн дуҫтарының вафаһыҙ бəғерһеҙлегенə йөрəге əрнеп хəтере ҡала торғайны. Ə еҫерлеккə килгəндə инде, шыпа белмəгəс, атайҙың нисек булыуын күҙ алдына ла килтерə алмай ине. Əсəһе əсəй ҙə, атай ҙа булды уның өсөн. Бəлəкəс сағында Əхмəтйəнгə унан башҡа бер кем дə кəрəкмəй ине. Үҫə төшөп, башына аң керə башлағанда атай кеше тураһында, атайҙың был донъялағы урыны, əһəмиəте хаҡында уйланып ултырыр булды. “Инəле бала иркəле, аталы бала арҡалы”, тигəндəренең асылына ул егет ҡорона инə башлағанда ғына төшөндө...

Кискə ҡарай кинəт һалҡынайтып, күк йөҙөн ҡурғаш ише ауыр, əкрен ҡуҙғалған болоттар ҡаплап алды. Төн урталарында быҫҡаҡлай башлаған сирҡандырғыс ваҡ ямғыр таңға тиклем шыңшыны. Тамсыларҙың япраҡтарға бəрелеп ҡыштырлашҡан тауышына уянып киткəн Биксəнтəй осо-ҡырыйы булмаҫтай тойолған илаҡ ямғырҙы хəтһеҙ генə тыңлап ятты. Бер мыжый башланымы, яуындың бындайы оҙон-оҙаҡҡа китə торған инде ул. Ямғыры туҡталғандан һуң да əле байтаҡ ваҡыт аяҙытмай, ҡояш йөҙө күрһəтмəй ыҙалата торған. Урман-ҡырҙы ҡуйы томан баҫып алыр, аяҡ аҫты лысҡылдаҡ батҡаҡҡа əйлəнер. Бигерəк тə көтөүселəргə ҡыйынға тура килə ошондай мəлдə: еүешлек менəн һалҡын үҙəктəренə үткəрə. Ярай əле, ауылдағыларға, бесəнгə төшмəйерəк тороғоҙ, тип əйтеп китергə башы еткəн. Юғиһə, көс түгеп сапҡан бакуйҙарың күҙ алдында сереп юҡҡа сығасаҡ. Сарыф ителгəн ваҡытың менəн бергə күпме мал аҙығы əрəмгə китер ине. Артыҡ күп булмаһа ла, егерме биш баш һауын һыйыры бар Биксəнтəйҙең. Уларына ун бишлəп тана-торпо, башмаҡ эйəреп, шул сама быҙауы булһа, йəнə лə ғүмерҙə туя белмəҫ аскернə ҡуйҡуҙыларын ҡушһаң... Шулай, барыһын да һанай китһəң, ҡышҡылыҡҡа байтаҡ бесəн кəрəк буласаҡ. Шуның өсөн дə Һаҡмар түбəнендəге оло асыҡтарҙы тапаттырмай, сабып алыр өсөн, йылдан-йылы ҡалдыра килə бит. Бай малына ла, ауыл халҡының барлыҡ тереклегенə лə етерлек ундағы емерелеп үҫкəн бесəн. Көнө торғанда бары иренмəй-йыбанмай ғына əҙерлəп өлгөр.

Биксəнтəй ялҡытҡыс аҡ ямғырҙың арыу-талыу белмəй өҙлөкһөҙ шыптырлағанын тыңлап ята торғас, үҙе лə һиҙмəҫтəн ойоп китеп, күҙҙəрен йомдо. Онотолоп барғанында һыйыр көтөүе йөрөгəн Муйыллы ҡыр тарафтарынан йөрəк өшөткөс яман ауаз ишетелде. Ҡапыл тертлəп уянған Биксəнтəй, һикереп тора һалып, көпөһөн яурынына яба-яба тирмəнəн сыҡты ла бер көсəйеп, бер һүрелə биреп бөтə урманды яңғыратҡан тетрəндергəс тауышҡа ҡолаҡ һалып торҙо. Күрше тирмəлəрҙең дə ауыҙы һаҡ ҡына асылып, һүрəн яҡтылыҡта тағы бер нисə баш күренде. Шул арала бишмəтен бөркəнгəн Əхмəтйəн дə ҡабалан-ҡарһалан килеп етте.

— Ни булды икəн, ағай? — тине ул, хəүефлəнеп.

— Ни булһын, һыйырҙы айыу һуҡты. — Биксəнтəй тыныс ҡына яуап ҡайтарҙы, əйтерһең дə, уның бура ҙурлыҡ тоҡомло һыйыры түгел, ə ниндəйҙер бер йолҡош тауығы ҡазаланған. — Күптəн тейгəне юҡ ине дəжжəлдең. Һай, юҡ менəн була...

Ə был ваҡыт əлеге ялбарыу ҡатыш ауазға төрлө тауышлы башҡа һыйырҙарҙың үкергəне ҡушылды. Улар, гүйə, үлемесле бəлəгə тарыған ҡəрҙəштəрен йəллəп илаша. Ə тауыштың тегеһе əкренлəп баҫыла барҙы һəм, бер аҙҙан ҡапыл өҙөлөп ҡалыуға, боғаҙ ярып үкерешеүҙəр ҙə ишетелмəҫ булды. Урманда ғəҙəти тынлыҡ урынлашты.

— Күкрәк шаршауын ярҙы, оңҡот, — тип ҡуйҙы ҡараңғылыҡҡа төбәлеп торған Биксәнтәй. — Йыҡты апарып.

— Йәне сыҡмаç элекме? Шаршауын әйтәм, — тип аптыраны Әхмәтйән.

— Эйе, ҡорбаны оҙаҡ аҡырып, артыҡ тауыш сығармаһын өсөн әүәл уның эсен ҡоя, унан шаршауҙы яра.

— Башы эшләй икән...

— Аңра түгел тайыш табан. — Биксәнтәй урманлы тау яғына текләп шаҡ ҡатҡан Әхмәтйәнгә йөҙ борҙо. — Тик бына кеше малына ҡағылып ныҡ яңылыша, үҙенең дә аҙағы шул рәүешле барып бөтөрөн уйлай белмәй. Тамаҡ тамуҡҡа илтә, шуны төшөнә алмай аңһыҙ януар.

Ошо мәл ҡурҡышынан күҙҙәре түбәһенә сыҡҡан көтөүсе ҡайтып етте. Тирмә алдында өймәкләшкән ирҙәр янына йүгереп килгән ыңғайға байҙы абайлап алды:

— Биксәнтәй ағай! Айыу баçты! Ярҙам итегеҙ! — тип этенә-төртөнә ярһыны. – Быҙауларға йөрөгән тананы...

— Атаң башы! – Асыуланды уға бай, шулай ҙа кеше алдында тауыш күтәреп ҡысҡырынманы.— Ниңә ташлап киттең көтөүеңде?

— Үҙемде лә ашай яҙҙы!

— Ҡурҡҡанға шулай күренә, ҡустым. Бар, тиҙ генә кире сап. Тик йыртҡысты ҡыуып ебәрәм тип маташма, табышын ҡыҙғаныуҙан ысынлап та ташланыуы бар.

— Ҡурҡыта бит әле.

— Уҙағыңды уят. Икәүләшеп барығыҙ ҙа яҡтырғансы бергә булығыҙ. Ә беҙ һуңыраҡ килербеҙ. Айыу үҙ юлы менән киткән тип, емтеккә аслан яҡын юлайһы булмағыҙ. Ишетһен ҡолағығыҙ.

Биксәнтәйҙең ниәте: емтек янына тағараҡ ҡороп, малға ҡаныҡҡан айыуҙы йәһәтерәк атып алыу. Юғиһә, йылы ҡан менән йәш ит тәмен бер тапҡыр татып ҡараған йыртҡыс артабан да тынғылыҡ бирмәйәсәк. Унан ҡотолоу юлы бер: юҡ итеү.

Тирә-яҡҡа даны сыҡҡан Батырхан һунарсыға йәүкә һалғандан һуң, йыйынып ҡуҙғалғансы таң да һыҙыла башланы. Йылы кейемдәргә ҡушып балта, бау, башҡа кәрәк-яраҡ алдылар. Фажиғә урынына еткәндә көн буйтым яҡтырырға өлгөргәйне.

Йыртҡыс төн уртаһы ауышҡанда, һыйырҙар кәртәлә саҡта, иç итмәçтән һөжүм иткән. Уçлаптай тананы ялан кәртә эсендә үк йыҡҡан, йәнен алғандан һуң тышҡа һөйрәп сығарған, әммә алыç алып китә алмаған. Яҡындағы ҡыуаҡлыҡ эсенә индереп өçтөнә арлы-бирле сытыр ырғытҡан да ҡайҙалыр ары юлланған. Эре табыш аулаған айыу, ғәҙәттә, алыç китмәй. Был юлы ла шулайҙыр, боçоп ятҡан ятағы ошо тирәлә булырға тейеш. Ҡояш нурҙары үтеп инә алмаçлыҡ ышыҡта шарлы ҡарағай ылыçын түшәк итеп ятырға ярата ул.

Емтек янына әлегә яҡын барманылар. Эҙ ҙә, еç тә ҡалдырырға ярамай. Ситтән генә ҡараштырып, урынды ентекләп өйрәнгәндән һуң, яҡын үçкән ауышыраҡ ҡайынды һайлап, тағараҡты шунда ҡорорға ҡарар ҡылдылар.

Һунарсы тағарағын тәү тапҡыр яһамай Биксәнтәй менән Батырхан. Шуның өсөн дә эштәре йылдам барҙы. Ә Әхмәтйән өлкәндәрҙең һәр әйткәнен, һәр кәңәшен күңеленә һеңдерә барып, күрһәткәндәрен өйрәнеп тағараҡ ҡороу ғилемен үҙләштерҙе: киләсәктә кәрәге теймәй ҡалмаç. Уның бит үҙ ғүмерендә айыуға тәүге һунары.

Ике-өс кеше ауырлығын еңел күтәргәндәй таяҡтар ҡырҡып, ялбыр ҡайындың урта тошондағы ботаҡтарҙың береһенән икенсеһенә һалғандан һуң, нығытып бәйләп, уларын арҡыры таяҡсалар менән ышаныслы беркетеп ҡуйҙылар. Ахырҙа дәү ылашҡа тартым ҡоролма килеп сыҡты. Ылашҡа киҫелгән ағастарҙың йәш ботаҡтары түшәлеп, япраҡлы ботаҡ өҫтөнән беше кейеҙ йәйелде.

— Мына ошонда үтәсәк төнөбөҙ, — тине Биксәнтәй, ял итергә ултырғас. — Ә, бәлки, ике-өс төнөбөҙҙөр ҙә...

— Шунда уҡ килмәйме ни ул?— тип ҡыҙыҡһынды Әхмәтйән.

— Тәү ҡарауға йыптыр һымаҡ күренһә лә, ғәжәп хәйләкәр, ифрат сос үә аҡыллы кейек ул айыу тигәнең. – Һунар ҡомарына бирелеп киткән Батырхан һәр кемгә билдәле йыртҡыс хаҡында мауығып һөйләй башланы.— Саҡ ҡына бер шипкерт һиҙҙеме, ас булыуына ҡарамаҫтан, ҡорбаны янына ҡабат әйләнеп килмәүе лә мөмкин. Шуның өсөн тағараҡты һәр әтнәкәһен иҫәпкә алып, ҙур һаҡлыҡ, теүәллек менән эшләү кәрәк.  Аңдып ултырғанда тауыштын сығарырға ярамай. Емтеккә яҡынлар алдынан тирә-йүнде һәләк ентекләп, күп тапҡыр тикшерә ул, мәлғүн.  Ә үҙенең килеп сыҡҡанын һиҙмәй ҙә ҡалаһың...

Ғәҙәттә аҙ һүҙле, йомоҡ Батырхан, шулай асылып китеп, байтаҡ аҡыл өйрәтеп ташланы. Егет тә һунарсыны, ҡыҙыҡһыныуҙан, онотолоп  тыңланы. Биксәнтәй уларҙы бүлдереп ултырманы.

Кәрәкле урынға яҡты күҙҙә үк килеп, әҙер тағараҡҡа  йәтешләп урынлаштылар. Биксәнтәйҙең ҡулында ауылда булған берҙән-бер һыҙма мылтыҡ, ә һунарсы Батырхан, Әхмәтйән дә уҡ-һаҙаҡ менән ҡоралланған. Әле иртә булыуға ҡарамаҫтан, өн сығарып һөйләшмәйҙәр, кәрәк саҡта ым-ишара менән генә аңлашалар.

Шау-шыулы киске һауын тамамланыуға, ҡомһарылып эңер төштө. Шуны ғына көткән көтөүсе һыйырҙарҙы төнгө үрешкә ҡыуҙы. Ана, ҡайҙалыр Яманйылға үҙәнендә һай-һайтлап ҡысҡырғаны, һыҙғыра-һыҙғыра сыбыртҡы шартылдатҡаны ишетелеп ҡала унын. Ҡотлобай көткән йылҡы өйөрө тарафтарынан һирәк-һаяҡ еҙ ҡыңғырау сыңы, бейәләр кешнәгәне ҡолаҡҡа салынып китә. Барыһы ла ғәҙәттәгесә, барыһы ла көндәгесә. Урманда күҙгә төртһәң күренмәҫлек ҡараңғы. Үтә һаҡ яҡынлашҡан кейекте түгел, йәнәшәндәге кешене абайларлыҡ түгел. Нисек итеп һунар итмәк кәрәктер инде бынауы ҡараңғыла?..

Мәлһеҙ башланып, тағы туҡтауһыҙ мыжырға тотонған ямғырҙың шыбыр-шыбыр “хәбәр”ен тыңлап ята торғас, иҫ итмәҫтән онотолоп киткән Әхмәтйән, ҡабырғаһына ҡаты ғына ҡағылыуҙан тертләп, йоҡоло күҙҙәрен асты. Ямғыр баҫылған.  Яҡтырып килә. Ҡаршылағы ҡалын шырлыҡ эсендә ниндәйҙер сипылдаҡ турғай тауыш бирә. Әхмәтйәндең эсенә йылы йүгереп, йөрәге ярһып тибергә тотондо. Бая бит Батырхан, айыу яҡынлашыуын бәләкәй генә һаҙ турғайы белгертә, тигәйне. Шул ҡошсоҡ түгелме? Егет тулҡынланыу ҡатыш һораулы ҡарашын һунарсыға йүнәлтеүгә, тегеһе мәғәнәле итеп күҙ ҡыҫып,  баш ҡаҡты. Һунарсылар телендә был ишара, әҙер булығыҙ, йыртҡыс яҡынлаша, тигәнде аңлата.

Әхмәтйәнгә хәҙер яҡын-тирәлә күренгән һәр шәүлә ҡыбырлап торғандай тойола. Уны һәр ҡыштырлау һағайтып, шик тыуҙыра. Бына-бына алпан-толпан баҫып дәү януар килеп сығыр ҙа ҡомһоҙланып һыйыр түшкәһенә ташланыр һымаҡ. Көсөргәнеш арта. Мөгөҙҙән яһалған янын ҡыҫыбыраҡ тотҡан

егет, үҙе лә һиҙмәҫтән, билендәге кәкре хәнйәрен һәрмәштереп ҡуя. Ямғырҙа һыуланмаһын өсөн кейеҙ аҫтына йәшерелгән һыҙмаһын ҙур һаҡлыҡ менән сығарып ҡулына алған Биксәнтәйҙең ошо ғәмәле эргәһендәгеләргә лә бер ишара ине: әҙерләнегеҙ.

Күҙгә күренмәҫ серле турғайҙың тоноҡ сырҡылдағаны көсәйә барған һайын тын алырға ла ҡурҡып ятҡан һунарсылар ҙа һағыраҡ булырға тырышты. Күҙҙәре ауыртҡансы ҡараңғылыҡҡа текәлеп, туп-тура ҡаршыларына килеп сығыр айыуҙы көтөп ятҡанда Әхмәтйәндең ҡолағына ниндәйҙер тауыш салынып ҡалды. Сәп-сөп иткән сәйер генә тауыш бөтөнләй яҡындан ишетелә һымаҡ. Ул, бар иғтибарын туплап, ҡарашын емтек тирәһенә йүнәлтте һәм ҡапыл... тәне эҫеле-һыуыҡлы булып китте. Тағараҡтан ун – ун биш аҙым арауыҡта ятҡан һыйыр түшкәһен уҫлаптай айыу өҙгөсләй ине. Асыҡ күренмәһә лә, уның айыу икәнен яңылышмай төҫмөрләргә була. Бер тауыш-тынһыҙ, күҙгә лә салынмайса нисек килеп сыҡҡан тиһең?! Батырхан ағай әйтә ине бит: “Айыу төнөн йөрөгәнендә бер ботаҡты һындырмаҫ, бөртөк сыбыҡҡа ла яңылыш баҫмаҫ “, — тип. Шулай ҙа яҡынлашҡанда үтә абай ҡыланған оңҡот, ауыҙына танһыҡ ит тейеү менән, һаҡлыҡтың ни икәнлеген онотто ла ҡуйҙы, буғай, ана, шап-шоп килә. Хәрәмдән төшкән һимеҙ ҡалъяны һолдап һоғона ғына, кинәнестән хатта ырылдап-ғырылдап ала. Тамаҡ тип мөкиббән киткән йыртҡыс бер аҙға бар донъяһын онотто. Ә һунарсыларға шул ғына кәрәк тә.

Һалҡын ҡанлылыҡ һаҡларға тырышҡан Биксәнтәй әкрен генә мылтығын күтәрҙе. Ҡабаланмай ҙа, өтәләнмәй ҙә, әммә аныҡ һәм тиҙ эш итә ул. Яңылыштан ғына шылт иткән тауыш сығарҙыңмы, бар тырышлығың әрәмгә китеп, төнө буйына ҡалтыранып-өшөп ултырыуың тиккә булыуы бар. Биксәнтәй эре йәҙрә менән яһалған һыҙмаһын тоҫҡаған көйө ҡатып ҡалһа, тегеләре ян керешен көсәнеп тартҡан килеш көтәләр. Ошондай мәлдәрҙә ҡыҫҡа ғына минутың да сәғәттәй тойола башлай бит ул. Әхмәтйәндең кереш ҡырҡып барған ҡулы талып, быуындары ҡалтырана. Нимәһен көтә икән, йә, Биксәнтәй ағай?! Былайтып торһаң, айыу өсөн махсус эшләнгән ҡырмалы уғыңды яҙа ебәреүең дә бар. Һунарҙа ҡулың ҡалтыранымы?..

Ҡолаҡ тондорғоҫ шартлау Әхмәтйәндең барлыҡ шик-шөбһәһен “һә” тигәнсе юҡҡа сығарҙы. Көбәк осонан бөркөлгән ут көлтәһенә күҙҙәре сағылып киткән егет бер мәлгә томана һуҡырайып ҡалғандай булды. Шулай ҙа икеһе бер булып тарамыш керештәрҙе ысҡындырып ебәрҙеләр. Тоҫмал менән тиерлек атылған уҡтарҙың шыйлап-һыҙғырышып сәпкә осҡаны ғына ишетелеп ҡалды. Көн йонсоуынан ауырайған йоҡоло урманды тетрәндергән мылтыҡ шаңдағы тыныуға айыуҙың, юлында осраған ҡыуаҡтарҙы һындыра-һындыра, ах-вах килеп алыҫлаша барғаны асыҡ ишетелеп торҙо. Тағы бер аҙҙан тауыштар баҫылып, тынлыҡ урынлашһа ла, ҡолаҡтар әле оҙайлы ғына сеңләшеп аптыратты.

— Китте, ҡәһәрең! — тип бошондо Биксәнтәй. — Яраланды, әммә китте.

— Әлеге мәлдә уны йығыу шарт түгел, өркөтөп көтөү тирәһенән биҙҙерһәк, шул еткән. — Батырхан Биксәнтәйҙе тынысландырмаҡсы итте.

— Айыуы бысағыма ла кәрәк нәмә түгел дә, мәжрүх[49] йыртҡыстың мәкерлеген үҙең беләһең...

— Уныһы шулай инде. Бер юлы йәнен алған хәйер булыр ине лә...

Тамам яҡтырып, яҡын-тирә асыҡ күренә башлағанда ғына тағараҡтан ергә

---

[49]*Мәжрүх — яралы, йәрәхәтле.*

төштөләр ҙә шунда уҡ төнгө һунар һөҙөмтәләрен тикшерергә тотондолар. Ямғырҙан ауырайып ыҡҡан үләнде ярып уҙған айыу һаҡмаһы[50] буйлап ундабында һибелеп ҡалған ҡарағусҡыл ҡан тамсылары асыҡ күренә ине. Биксәнтәй, еңел һулап:

— Эс-бауыр ҡаны аҡҡан. Ҡара ҡан. Тимәк, йәрәхәте үлемесле, — тигән һығымта янаны. — Алыҫ китә алмаҫ, шәт.

— Уҡтар күренмәй. Икеһе лә тейгән, күрәһең. — Батырхан ҡәнәғәт ҡалды. —Эҙәрләйбеҙме әллә?

— Эҙәрләйбеҙ? Йәшәүҙән туймағанһыңдыр бит, — тине Биксәнтәй мәғәнәле итеп. — Уйнап һөйләһәң дә, уйлап һөйлә. Тәү тапҡыр сығыуың түгел дә баһаң айыуға. Уның ҡарауы, ахырғыһы булыуы бик мөмкин...

Уңайһыҙланып киткәндәй булған Батырхан:

— Иҫ итмәҫтән берәйһенең өҫтөнә барып сығыуы йә булмаһа яңғыҙ-ярым мал-тыуарға тарыуы бар, — тип аҡланғандай итте.

— Ҡуй, юҡ менән булмайыҡ. — Биксәнтәй ҡул һелтәне. — Үҙе барып дөмөгөр әле.

— Ә нисек һуң шундайын да һиҙгер кейек ниндәйҙер бер ун аҙымдан беҙҙе һиҙмәне икән? — тип ҡыҙыҡһынды һунар тәьҫораттарынан һаман арынып бөтә алмаған Әхмәтйән ҡайтып барышлай.

— Тере йәндән дә таралған еҫ, ҡустым, һалҡын һауаға ҡарағанда күпкә еңелерәк. Шуның өсөн дә һәр саҡ өҫкә тартылыусан. Айыуҙың, уның ғына түгел, башҡа кейектең дә, ағас башындағы һунарсыны һиҙә алмауының сере тап ошонда. Үҙеңә тура ҡарап торған хәлдә лә, тауыш-тын сығармай хәрәкәтһеҙ ултырһаң, ул һине бер ваҡытта ла шәйләмәҫ. Бының өсөн, әлбиттә, ҙур тотанаҡ-сыҙамлылыҡ кәрәк... — Үҙенә ҡарата көсәйә төшкән иғтибарҙы тойоп йәнә әҫәрләнгән Батырхан, артабан, ҡайтып еткәнсе, тағы һунар серҙәренә өйрәтергә тотондо. Үҙ башынан үткән бихисап мажаралы хәлдәр тураһында ла һөйләп шаҡ ҡатырҙы. Шулай ҙа күпте күргән аусы, ауыр яраланып, үлемгә дусар ителгән ғәйрәтле януар артынан эҙ юллап яңғыҙ-ярым көйө барырға һис ярамағанлығы хаҡында әйтергә нисектер онотто.

Һунар ҡомарынан ярһып ҡайтып ингән Әхмәтйәндә ял итеп алыу ҡайғыһы булманы. Еүеш кейемен алмаштырғас, ҡабалан-ҡарһалан ғына ҡапҡыланы ла, ҡыҫҡа һөңгөһөн ҡулына алып, тимерсе-ҡыҙаштан бер ҡаҙаҡ май әжеренә һуҡтырып алған оҙон хәнйәрен биленә ҡыҫтырҙы. Бая Биксәнтәй ағаһының Батырханға ҡарата: “Йәшәүҙән туйҙыңмы? Туйһаң, бар, эҙәрлә мәжрүх йыртҡысты”, — тигәне егеткә үҙен ҡурҡытып, ҡурсалар өсөн генә әйтелгән һымаҡ ишетелгән ине.

Тупһаны ашатлап сығыуына әсәһе осраны:

— Арманһыҙ булып ҡайтып инеүеңә әле генә, тағы ҡайҙа бараһың инде? — тип бошондо ул.

— Хәҙер әйләнәм, әсәй, борсолма берүк! Үҙең әйтәһең бит, ҡалған эшкә ҡар яуа, тип. Ослайһы эштәр бар. — Әхмәтйән ихатанан тиҙерәк сығып китеү яғын ҡайырҙы.

— Донъяңды онотма, бөгөн бит һиңә көтөүгә. — Ҡапылғара көҙөкләнә төшкән Зөлхәмирә улын киҫәтеп ҡалды. Уныһы күҙҙән юғалғас:— Берәй нәмәне алдына алһа, өҙмәҫ тә ҡуймаҫ, — тип һуҡранғандай итте. – Атаң балаһы...

[50] Һаҡма — бейек үләнде йығып уҙған эҙ.

— Онотмам да, һуңламам да, әсәй! Борсолма, тинем бит! —Күңеле күтәрелеп киткән Әхмәтйән, атын эйәрләп-нитеп тормаҫтан, йүгереп барған килеш еңел генә һикереп һыбай атланды ла, үксәһе менән уның ҡабырғаһына ҡағылып, теҙгенде тартты:

— Әйҙә, малҡай! Остоҡ Муйыллы ҡырға!

Юшап торған туры тай, көтөлмәгән тупаҫлыҡтан тертләп, үрәпсеп китте лә, бәләкәс ҡолон ише ҡойроҡ сәнсеп, алға уҡталды.

Яманйылға кисеүен үткәс атын ышыҡ урынға бәйләп ҡалдырған Әхмәтйән артабан йәйәү атланы. Йыртҡыс еҫен һиҙгән йәш малдың, кәрәкмәгән мәлдә биленләп, өркөп китеүе ихтимал. Унықын ғына белә егет.

Оҙон үлән араһына килеп инеүгә әле генә алмаштырған киндер ыштан балаҡтары тиҙ арала лысма һыу булды. Әхмәтйәндең төнгө өшөүҙән саҡка йылына башлаған тәне йәнә, был юлы тулҡынланыу ҡатыш дан-табыш көҫәп йөрәкһеүҙән, ҡалтырана: ҡанһырап ятҡан януарҙы тиҙерәк табып, тиреһен тунап алғанда!.. Тәүге айыуы буласаҡ бит! Гөлбикәһе, башҡа ауылдаштары алдында көс еткеһеҙ тирене йөкмәп ҡайтып инеүе үҙе ни тора! “Әхмәтйән айыу алған! “ — тип йәше-ҡарты шаҡ ҡатасаҡ та баһаң. Ә йыртҡыстың ялбыр тиреһен тунап алып ҡайта алырына уның шиге юҡ. Ҡабырғаһын ҡурғаш йәҙрә өңөп инеү өҫтөнә, үткер башаҡлы ике уҡ ҡаҙалған кейек ҡайҙа барһын? Эйе, алыҫ китә алмағандыр ул, яталыр, шәт, ошо тирәлә боҫоп. Бәлки, дөмөккәндер ҙә әле. Ул сағында инде эш бөтөнләй еңеләйә...

Ҡорһағы бүҫелеп, эсәк-ҡарыны ҡойолоп төшкән тана емтеге янына еткәндә ҡояш байтаҡ күтәрелергә өлгөргәйне инде. Мең ғазап менән йәне алынған малҡайҙың әлегә ҡарға-ҡоҙғон суҡырға өлгөрмәгән ярым асыҡ күҙҙәрен, һәлберәп төшкән шыраулы телен, эске ағзаларын иҫәпһеҙ-һанһыҙ йәшел себен һырып алған. Яҡын-тирәлә өҙләкһеҙ геү тора.

Өс көн тоташ яуындан аҙаҡ ҡояшы ла бер төрлө танһыҡ булып киткән һымаҡ. Уның алһыу нурҙары ботаҡтар араһынан нисектер ек табып, шыйыҡ томан аша үтеп инә лә әйтеп бөтөргөһөҙ матур, уҡалы һыҙаттар барлыҡҡа килтерә. Әйтерһең дә, кемдер, әкиәт донъяһынан килеп, ағастарҙан ергә үтә күренмәле төп-төҙ ебәк ептәр тартып сыҡҡан. Шыҡһыҙ һонтор ҡурай ботаҡтарында леберләшкән үрмәксе ауҙары семәренә ысыҡ тамсылары ҡунған да үҙҙәрендә ҡояш нурҙарын сағылдырып уйната. Гәлсәр киҫәксәләр ише улар, күҙ яуын алырлыҡ күкле-йәшелле-зәңгәрле төҫтәр сәсеп ем-ем итә. Япраҡтарҙан эре, тос тамсылар тама. Әйләнә-тирә һәр төрлө ҡош тауыштарынан гөрләп тора. Аһ, сихри урман! Ошондай булған өсөн дә ғашиҡ бит уға егет.

Әхмәтйән кисә генә ҙур тырышлыҡ һалып ҡорған тағараҡтарына бер ҡараш ташлап алды ла, әйләнеп, айыу киткән яҡҡа йүнәлде. Ана, уның бейек үләнде иҙеп үткән һаҡмаһы ярылып, ап-асыҡ күренеп ята. Йәнен аярға маташҡан йыртҡыс хуш еҫле еркеүләнде йырып, йыуан, тарбаҡ айыу ҡурайҙарын, һары сәскәле, һонтор андыҙ һабаҡтарын һындыра-имгәтә барып, үтеп сыҡҡыһыҙ шырлыҡҡа тартҡан. Һунарсы ла шунда ыңғайланы.

Шырлыҡ эсендәге беренсе талға ҡағылыу менән Әхмәтйәндең өҫтөнә һибелгән ғәжәп һалҡын ысыҡ, йоҡа күлдәге аша ҡапыл сирҡандырып, тәнен ҡорошторооп алды. Ул, яурындарын йыйыра биреп, тоҡос һөңгөһөн әҙерләп тотҡан көйө, ҡанлы эҙ буйлап китте. Бысҡыл урындарҙа ғәйрәтле януарҙың оҙон тырнаҡлы уҫлаптай эҙҙәре асыҡ күренеп ята. Барған һайын Әхмәтйәндең тулҡынланыуы көсәйеп, ярһыуы арта. Дарҫлап типкән йөрәге бына-бына күкрәк ситлеген йыртып килеп сығыр һымаҡ.

Башта һағыраҡ атлаһа ла, һуңға табан, лапыға эләгә-йығыла барғанлыҡтан, йөҙәй башлаған егет уяулыҡты юғалта төштө. Бығырлап ятҡан батҡаҡ һаҙлыҡты үтеп, мәғшиәтте еңеләйтер асыҡ урынға сығырға күп тә ҡалманы инде...

Әхмәтйән көтмәгәндә ҡапыл үҙенән артта ҡупҡан шау-шыуға, сытырлап-сарпылып ҡоро ағас һынған тауышҡа әйләнеп ҡараны. Йә Хоҙай! Ҡолаҡтары шымтайышып, ҡан һауған күҙҙәре хәтәр янып торған башмаҡ дәүмәллек бысраҡ-һоро ғифрит, ҡот осҡос ҡаҙыҡ тештәрен ыржайтҡан да йән фарманға уға табан саба. Сабып килгән ыңғайға аяҡтары аҫтынан тирә-яҡҡа бысраҡ һыу ҡатыш мәте сәселә. Бер мәлгә генә ҡаушап киткән егеттең бар тәнен эҫе тулҡын өтөп алғандай булды, әммә ул юғалып ҡалманы. Бәлйеп төшөү был осраҡта һәләкәткә тиң.

Дәһшәт сәсеп, күҙенә аҡ-ҡара күренмәй килгән енле айыу үҙенә йүнәлтелгән һөңгөнө шырпы бөртөгөндәй күреп һындыра һуҡты ла бар ҡеүәтенә Әхмәтйәнгә киҙәнде. Йылғыр егет ниндәйҙер мөғжизә менән йәнәшәһендәге ҡайын аҫтына ышыҡланырға өлгөрҙө. Шулай ҙа үлем менән янаған кәкре тырнаҡ остары сикәһен сыйып үтте. Ғәйрәтле һуғыуҙан баҫырау йыуанлыҡ ҡайын урталай һынып төштө. Әжәле яҡынлашыуын тойоуҙан, ярһыуы сиктән ашҡан йыртҡыс күҙ асып йомған арауыҡҡа тотҡарланып баҙап ҡалды. Ә сос һунарсы, ошо мәлдән файҙаланып, үткер хәнйәрен ҡулына алырға өлгөрҙө. Өлгөрөүен өлгөрҙө, ләкин, аяҡ аҫтындағы тамырға эләгеп, ҡамыш яллы тумарлыҡ араһына салҡан барҙы ла төштө, күҙгә ҡарап торған үлемдән уны бары ошо ғына ҡотҡарҙы шикелле. Айыу заты, ғәҙәттә, ергә йығылған ҡорбанын башҡаса туҡмап-һуҡҡылап маташмай, ә эшкә тештәрен ҡуша. Был юлы ла шулай булды. Күҙ асып йомған арала ул Әхмәтйәндең һул ҡулынан матҡып эләктереп алды. Һунарсы ҡыҙыулыҡтан башта ауыртыуҙы һиҙмәне, бары ҡаҙыҡ тештәр ҡыҫымына эләккән һөйәктәрҙең шығырлашҡанын ғына тойҙо. Хәҙер инде үҙе йыртҡыска әйләнеп, ҡурҡыуҙың ни икәнлеген дә онотҡан һунарсы, ни аралалыр яйын килтереп, иғтибарын юғалтҡан айыуҙың ҡултыҡ аҫтына хәнйәрен ҡаҙаны. Самалап йөрәк тәңгәленә тура килтерергә тырышты һәм яңылышманы. Ажғыра-үкерә дошманының ҡулын сәйнәп маташҡан аяу белмәҫ януар "уһ" итте лә ҡапылғара хәлһеҙләнә төштө. Шулай ҙа аҫтында әле тыпырсынған кешенең баш ҡойҡаһының бер өлөшөн һыҙырып алырға, ә үҙен тағы ла байтаҡ ҡына иҙгесләргә көс тапты. Ахырҙа әлһерәп китте һәм, бөтә ауырлығы менән, ҡанға батып салҡан ятҡан һунарсының өҫтөнә ауҙы. Емтек еҫе аңҡып торған, ғәйәт ауыр, бысраҡ кәүҙә аҫтында ҡалып, инде аңы томалана башлаған егеттең ҡыбырларлыҡ та әмәле юҡ. Ҡаты һуғыуҙан шаңҡып, зәғифләнә барған мейеһен: "Әжәлем ошолор, ахыры, аһ, ниндәй мәғәнәһеҙ үлем!" – тигән хәтәр ҙә, аянныслы ла уй ярып үтте. Юҡ, ул әжәлдән ҡурҡманы ла, уның алдында теҙ сүгеп ялбарырға ла йыйынманы. Уға бары, хәҙер инде ауһыҙ ысынбарлыҡ менән күҙгә күҙ ҡарашып, япа-яңғыҙы ҡалырға тейешле әсәһе йәл ине. Ныҡ йәл ине. Әсәһе йәл булһа ла, нишләптер күҙ алдына Гөлбикә килеп баҫты. Баҫты һәм ниндәйҙер ят тауыш менән: "Беләһеңме, Әхмәт, мин бит һиңә иң яҡын һеңле тейеш кеше булам. Эйе, эйе, аптырама, беҙ – туғандар. Шул сәбәпле фанилыҡта бергә булыу беҙгә яҙмаған. Ошоно онотма!" – тип йылмайғандай итте. Ә үҙе... илай ине. Әллә һаташа башланы Әхмәтйән?..

Егет, яралы башы менән ҡулының сатнап һыҙлай башлауына ла иғтибар

итмәй, бар көсөнә өҫтөндәге йәнһеҙ түшкәнән ҡотолорға тырышып, уны алып ташларға маташты. Тик бушҡа ғына. Ныҡ көсәнеүҙән ҡалдыҡ көсө кәмеп, хәле бөтә бара һәм былай ҙа шәп аҡҡан ҡанын күберәк юғалта. Айыуҙың йәнһеҙ кәүҙәһе ҡымшанмай ҙа.

Шул рәүешле аҙапланып ятҡан Әхмәтйән хәленең һаман мөшкөләйә барыуын тойҙо. Ахырҙа, аяныслы яҙмышына тамам буйһонған һымаҡ, бәлйеп төштө. Шул арала күҙ алдары ҡараңғыланып, бар ғәләм түңкәрелеп киткәндәй булды. Тағы бер аҙҙан аңы юйылған һунарсы мөсһөҙ генә тартышып ҡуйҙы ла бөтөнләйгә хәрәкәтһеҙ ҡалды. Ә урманда ғәжәп һиллек урынлашты. Ошо илаһи тынлыҡты, һайрар ҡошсоҡ йырына ҡушылып, ҡан көҫәүҙән ҡоңғолдап уҙған ҡоҙғон тауышы менән яңғыҙ һайыҫҡандың тынысһыҙ шыҡырлағаны боҙҙо.

…Төшкө сәйгә ултырғас та алағайымға йөрәге сыҡҡан Зөлхәмирәне кинәт шомло уйҙар солғап алды. Балаҡайы менән бер-бер хәл булдымы әллә? Булғандыр, әсә йөрәге тиктомалға хәүефләнмәҫ.

Башында мең төрлө уй буталып, хафалы кисерештәргә бирелеүҙән түҙеп ултыра алмаған Зөлхәмирә кисекмәҫтән Биксәнтәй байға барып урарға ҡарар итте. Бәлки, шундалыр әле Әхмәтйәне. Берәй төрлө эшкә ҡушыуҙары бар.

Зөлхәмирә ауыр ҡапҡаны баҙнатһыҙ ғына асып ингәндә Биксәнтәй ихатала булаша ине. Борсолоуы йөҙөнә бәреп сыҡҡан Зөлхәмирәне күргән бай ҡапылғара аптырап китте. Нисәмә йыл инде уларҙың ошолай күҙгә күҙ ҡарашып осрашмағандарына. Эйе, күпме ваҡыт, күпме дәүер үтеп киткән икән дә баһа бер-береһенә эс серҙәрен һөйләп, берен-бере күреп туя алмай йөрөгән саҡтарына! Шул мәлдәр ҡапыл ғына иҫенә төшөүҙән күңеле иләҫ-миләҫ килеп ҡуйған Биксәнтәйҙең башынан: “Ә Зөлхәмирә һылыулығын һаман төшөрмәй”, — тигән уй уҙҙы. Шунан, үҙ уйынан үҙе уңайһыҙланғандай, усына йүткереп тамаҡ ҡырған булды ла ҡапҡа төбөндә тапанған Зөлхәмирәгә ҡаршы атланы.

— Биксәнтәй, һаумы.

— Шөкөр әле, Зөлхәмирә. Ни йомош? Төҫөң ҡасҡан...

— Ней... Әхмәтйәнде ҡайҙа ебәрҙең икән, тип белешергә килгән инем. Ни ғәләмәттер, баянан бирле ырымланып, йөрәгем сығып тик торасы... — Зөлхәмирә ялбарыу ҡатыш талапсан өмөт менән Биксәнтәйҙең йәшкелт-зәңгәр күҙҙәренә ҡараны. — Төнөн дә эшләне, юғиһә...

— Төнөн беҙ бергә булдыҡ...— тине бай, ниҙер һиҙенеп. — Тәғәйен эш ҡушманым, йомошҡа ла ебәрмәнем. Уға бит кискелеккә көтөүгә.

— Ҡайҙа булдығыҙ һуң, сер түгелдер бит?

— Һунарҙа... Айыу аттыҡ, яраланыҡ...

— Уф, Аллам! — Зөлхәмирә, асырғанып, йөрәген усына йомдо. Ә Биксәнтәйгә шунда уҡ барыһы ла аңлашылды.

— Ҡасаныраҡ сығып киткәйне?! — тип ярһып ҡысҡырҙы ул, үҙ-үҙен белмәй. Соланға инеп, һыҙмаһын ҡулына ала һалды. – Ниңә ебәрҙең һуң?

— Ҡайтып сәй эсте лә... Тотоп буламы уны...

— Һин Батырханға йүгер! Бер аяғың бында, икенсеһе тегендә булһын! Әйт, атын екһен дә айыу атҡан урынға барһын. Ҡапылыраҡ ҡуҙғалһын!

...Йөҙө аҡ сепрәк ише булған Әхмәтйән ярым үлек хәлдә ине. Ҡалаҡ-һөйәгенә ҡуш уҡ ҡаҙалған йыртҡыстың ифрат ауыр кәүҙәһен Биксәнтәй уның

өҫтөнән көскә һөйрәп төшөрә алды. Егеттең бәлйерәгән быуынһыҙ кәүҙәһен күтәреп еүеш шырлыҡ араһынан көн битендәге сағыл урынға сығарып һалғандан һуң, барлау тамырын[51] ҡапшап, йөрәк тибешен самаланы, һаҡлыҡ менән аяҡ-ҡулдарын ҡыбырлатып ҡараны. Әхмәтйәндең ҡанға сарсаған йөрәге нык тулап, кәрәгенән артыҡ йыш тибә, һул беләгендәге ыржайып торған йыртыҡ яранан, башының ҡойҡаһы һыҙырылған урындан туҡтауһыҙ ҡан һарҡа. Шулай ҙа һөйәктәре теүәл һымаҡ, һынған-йәнселгән ағзаһы тойолмай.

Биксәнтәй өҫтөндәге ҡалын күлдәген йырта һалып, Әхмәтйәндең яралы ҡулын терһәк өҫтөнән һыҡтырып бәйләне, һәлберәп төшкән баш тиреһен рәтләп, матҡып урап ҡуйҙы. Нисек тә ҡан ағыуҙы туҡтатырға кәрәк ине. Ә яралары былай, ҡарап тороуға ҡурҡыныс күренһә лә, үлемесле түгел. Конфедераттарға ҡаршы һуғышып йөрөгән саҡтарында ҡот осҡос әжәлдәрҙе күп күрҙе, быныһы нимә генә. Ошолай уйлап, ул тыныслана төштө лә хәлһеҙ ятҡан Әхмәтйән янына сүгәләне.

Оҙаҡ көттөрмәй, хан заманғы арбаһында ҡыптырлап, Батырхан да килеп етте. Башы етеп, үҙе менән тағы ике кеше алған. Быныһы, әлбиттә, һәйбәт: күмәкләгән – яу ҡайтарған.

Оҙон-оҙаҡҡа һуҙмай ғына кәңәш ҡорҙолар.

— Батырхан, беҙ Әхмәтйәнде ауылға илтә һалайыҡ, унда ҡараштыра торорҙар, ә һеҙ айыуҙы һыҙырығыҙ ҙа тиреһен минең ат менән алып ҡайтырһығыҙ. —Ҡаҡ арба төбөнә үҙенең көпөһөн йәйеп һалған Биксәнтәй нык ҡабаланды.— Тик аслан ығышлап йөрөйһө булмағыҙ.

Һаман булһа иҫенә килә алмаған Әхмәтйәндең өҙгөсләнеп бөткән кейемен һалдырып, бит-башын сайғансы Аҡбикә әбей килеп етте. Түңгәүер ерендә генә түгел, унан ситтә лә даны таралған им-том оҫтаһы әбей, тәғәйен доғаларын уҡып, шыбыр-шыбыр Әхмәтйән тирәһендә уралды. Һаҡлыҡ менән башындағы ҡанға ҡатып бөткән сепрәкте тағатып алды. Ҡан ағыуҙан туҡтаған ине, тик һыҙырылған ҡойҡа баш һөйәгенә яңылыш йәбешкән. Аҡбикә, ағас һауытҡа йылы һыу һалып, ниндәйҙер, бер үҙе генә белгән, үлән онтағы һипте лә, йәнә быш-быш килеп болғатҡандан һуң, буръяҡлана төшкән төнәтмә менән егеттең йәрәхәттәрен сылатты. Беләгенә һеңеп инеп киткән сепрәк сираҡты[52] бушатҡас, инде ебергә өлгөргән баш тиреһен ипкә килтереп, урынына шылдырҙы. Ошо мәлгәсә йәшәү билгеһе бирмәгән Әхмәтйән мөсһөҙ генә итеп ыңғырашып ҡуйҙы.

– Иҫеңә киләһеңме, балаҡай? Тимәк, йәшәйһең. Ауыртыуҙы тояһың икән, тимәк, йәнең бар. Баҡыйлыҡтан әкренләп фани донъяға әйләнеп ҡайтаһың, — тип һөйләнде ҡәнәғәт Аҡбикә. – Сираҡты мәлендә һәм урын-еренә еткереп һалған кешегә рәхмәт әйт. Һиңә икенсе ғүмер бүләк иткән фәрештәң шул булыр...

Баянан бирле телһеҙ ҡалып, һынташ ише ултырған Зөлхәмирә еңел һуланы. Эске кисерештәр ташҡынынан уның ҡапыл башы әйләнеп китте. Ярай әле, урындыҡ ситенә таянырға өлгөрҙө. Шул арала үҙенең күҙ йәштәре сырҡырап килеп тә сыҡты.

— Яманға юрап, буш алйыюҡҡа шәмәреп ултырма, Зөлхәмирә! — тине әбей, уға күтәрелеп ҡарамай ғына, — ҡурҡырлыҡ та, иларлыҡ та бер ни күрмәйем.

---

[51]*Барлау тамыры — пульс.*
[52]*Сираҡ — бында жгут мәғәнәһендә.*

— Мин бит ҡыуаныстан ғына, инәй, йәнең бар икән, тигәнгә...

— Егет ныҡ. Йәш тән бирешмәç. Миндә шифалы үлән күп, дауаларбыҙ, иншалла.

Күп тә үтмәçтән, уçлаптай айыуҙың көс еткеһеҙ тиреһен алып ҡайтып еткерҙеләр. Үлән төнәтмәләре ҡушып иретелгән һары майҙы йәлләмәй мул итеп йәрәхәттәргә һөртөп, тәнен ыуғандан һуң Аҡбикә Әхмәтйәнде шәрә көйө сей айыу тиреһенә төрөргә ҡушты. Ошоларҙы башҡарып бөткәс, барыһына ла сығып торорға бойороп, тирмәлә яңғыҙы ҡалған әбей ҡиблаға йөҙ йүнәлтеп оҙаҡ итеп намаҙ ҡылды, әттәхиәт уҡыны: “Әттхиәттү *лилләһи* үәссалауату үәттәибәт...”

— Бына булды, — тине шунан, ишек төбөндә көтөп торған Зөлхәмирәгә боролоп. — Аҙна эсендә булмаһа ла, ун – ун ике көндән аяғына баçыр, Алла бирһә. Шуға өмөт итәйек. Иртәгәгә хәтлем ошолай уралған килеш ятһын, теймәгеҙ. Уға хәҙер ныҡ итеп тирләү кәрәк.

— Иншалла, шулай була күрһен инде, эй Хоҙайым! — тип иламһыраны йөҙө һурылып киткән Зөлхәмирә.

— Хәйеренә бер ҡуй бирермен, Аҡбикә инәй, — Биксәнтәй, ҡапҡа тышына сыҡҡас та, им-томсоно ризалыҡҡа ҡалдырмаҡсы итте.

— Хәйергә хәләл мал ғына фарыз.

— Ә мин уның эш хаҡы әжеренән тапшырырмын. Фарыз буламы шулай иткәндә?— тине аптырай төшкән Биксәнтәй.

— Ярай, әләйһәң, — тип килеште Аҡбикә әбей, уйланып торғандан һуң. — Тик аяғына баçып, йөрөрлөк булғас, Әхмәтйән улым үҙ ҡулдары менән килтереп бирер.

Муйыл таяғына таянып, йоҡа, йәтеш кәүҙәһен алға эйә биреп, бөксәңләп, ауырлыҡ менән йыбыр-йыбыр атлаған ил инәһен Биксәнтәй ҡарашы менән оҙатып ҡалды.

Төнө буйы ыңғырашып, һаташып сыҡҡан Әхмәтйән, шыбыр тиргә батып, таң һарыһында аңына килде. Ауыр ҡабаҡтары көслөк менән күтәрелгәс тә, әүәл күҙенә ташланғаны һуҡыр шәм яҡтыһында, урындыҡ ситендә, баҙыян сеүәтәләге һыуҙа сепрәк сылатып ултырған әсәһе булды.

— Әсәй, мин ҡайҙа? — тип көскә һығып сығара алды ул.

— Өйҙә ятаһың, балам. Үҙ өйөңдә. — Тертләп киткән Зөлхәмирә өтәләнергә тотондо. Улының шулай көтмәгәндә һүҙ ҡушып өндәшеүенә сикһеҙ ҡыуанып, йөрәкһеүҙән тауышы ҡалтыранды. – Тыныс ҡына ятып тор...

— Ни булды миңә? Нишләп аяҡ-ҡулым бәйле?

— Бәйле түгел, улым. Айыу тиреһенә уралғанһың һин. Ҡымшанмай ғына ят. Аҡбикә өләсәң шулай ҡушты...

— Аҡбикә өләсәй? Ни өсөн?

Әхмәтйән, үткән ваҡиғаларҙы хәтеренә төшөрөп, үҙе менән ни булғанлығын һаман иçләй алмай ине. Әсәһе уның кибеп ярылған ирендәрен һыуға мансылған ҡаурый менән сылатып алды ла ут булып янған маңлайына еүеш сепрәк япты.

— Бигерәк ауанһың, балаҡайым. Япа-яңғыҙы көйө яралы йыртҡыс артынан сығамы аҡылы бар кеше? — тип улын еңелсә шелтәләп тә алды. Уның һүҙҙәрендә әрнеү ҡатыш үпкәләү ғәләмәте лә сағыла ине. Бер аҙҙан иçе ҡайта төшкән Әхмәтйәндең зиһене лә яҡтырып киткәндәй булды.

— Тимәк, мин уны үлтергәнмен, — тине ул, һыҙланыуҙан сытырая биреп.

— Үҙең дә саҡ ҡалдың инде, ҡолонсағым. — Зөлхәмирә ситкә ҡарап күҙ йәштәрен һөрттө.— Йә, тыныс ҡына ят, һауыҡҡастын һөйләшербеҙ.

Дәү айыуҙың ғәләмәт һимеҙ ите ун биш бот тартты ла ҡуйҙы. Сауҙа эшенә маһир Ҡотлобай уны Ҡағы буйында ағас ҡырҡып, һал ағыҙып ятҡан урыҫтарға алып барып, һолоға алыштырып ҡайтты. Йыртҡыстың былдайын тәүләп күргәнлектән, иҫ-аҡылдары киткән урыҫтар ап-аҡ ҡыртышлы түшкәне ҡыуана-ҡыуана алып ҡалдылар. Әжеренә, гәрәбә ише һолоға өҫтәп, арыш оно ла бирҙеләр.

Ярҡалары шығырлашып торған ҡаты урындыҡта байтаҡ ҡына әйгәҙәргә тура килде Әхмәтйәнгә. Йәш тән менән таҙа ҡан үҙенекен итте: ун бер көн тигәндә ул аяғына баҫты. Аҡбикә инәйҙең төнәтмәләренән, үлән онтаҡтарынан әҙерләнгән шифаяттарҙың ярҙамы теймәй ҡалманы, әлбиттә. Тәүге осорҙа соңҡаһы зыңҡып, башы бер аҙ әйләнеп ыҙалатһа ла, үҙаллы тороп йөрөү егет өсөн оло бәхет булды.

Башын күтәреп алалмай, бәҫһеҙ булып түшәктә ятҡан мәлдә Әхмәтйән янына, көн яҙлыҡтырмай, Гөлбикә килеп-китеп йөрөнө. Ҡыҙҙың тулған айҙай мөләйем йөҙө, шишмә сылтырағандай тауышы, айырым йылы мөнәсәбәте Әхмәтйәнгә дарыуҙарыңдан былайыраҡ тәьҫир итә. Йәнәшәһендә Гөлбикәһе булғанда ул үҙен күпкә еңелерәк тойҙо. Ҡыҙ барында, йөрәк әрнеүенә ҡушылып, үҙәккә үткәргән яраларҙың һыҙлағаны баҫыла төшкәндәй. Гөлбикә көн дә тиерлек тәмле һурпа алып килә, ә Әхмәтйән уңайһыҙлана. Уға ошолай итеп кеше ризығы ейеп ятыуы әллә нисек һымаҡ.

— Атайым әйтә, тартынмаһын, ашаһын-эсһен, ти, йылҡы һурпаһы ифрат файҙалы була ул, хәл өҫтәй, ти. — Гөлбикә, хәлһеҙ егетте ҡыҫтай-ҡыҫтай, ҡатыҡлы һурпа эсерә.

— Һин бигерәк! — Тегеһе ризаһыҙлыҡ белдергән була. — Бәләкәй бала ҡарағандай тәрбиәләйһеңсе мине...

— Хәстәле кеше бала менән бер инде ул.

Зөлхәмирә егет менән ҡыҙҙың шулай эскерһеҙ сөкөрләшеүҙәренә ҡолаҡ һалмаҫҡа тырыша, әммә бәләкәй генә өйҙә барыһы ла ишетелеп тора.

Тәүге мәлдә Зөлхәмирә Гөлбикәнең шулай йышлауына әллә ни иғтибар бирмәгән ине. Һуңға табан йәштәрҙең бер-береһенең ауыҙына инерҙәй булып серләшкәндәрен, буштан ғына сәбәп табып пырх-пырх көлөшөп алыуҙарын, күҙҙәренә ҡарашып донъяларын онотоуҙарын күреп йөрәге "өлп" итте лә, күңеленә шөбһә йүгерҙе. Шунан: "Бушҡа хафаланамдыр, шәт. Бала ғына бит әле улар. Һөйләшеп һүҙҙәре бөтмәҫ, мәрәкәләшеп танһыҡтары ҡанмаҫ саҡтары. Торам инде шунда юҡҡа көйәләнеп",— тип уйлап үҙен тынысландырырға тырышты. Тик күңел төбө менән йөрәк түренә инеп ояларға өлгөргән көҙөк үҙенекен итеп, тыныслығын алды, әйләнгән һайын үткәндәрҙе иҫенә төшөрөп, булмышын борсоп тик торҙо.

Гөлбикә һылыулыҡ яғынан әсәһе Гөлзәйнәпкә тартҡан, ә холоҡ-фиғеле нәҡ атаһы Биксәнтәйҙеке. Тиңһеҙ гүзәллек менән тос атаслыҡтың шулай бер тәнгә һыйып, хатта килешеп йәшәүенә ғәжәпләнмәҫлекме. "Хәйер, заманында үҙебеҙ ҙә шулай булғанбыҙҙыр ул. Бер ҡайғыһыҙ сағыбыҙҙа беҙҙең дә донъя теүәл ине". Ошолай уйлаған Зөлхәмирә Гөлбикәгә ҡарай ҙа ихлас йылмая, үҙенә лә иптәшкә Хоҙай тарафынан уның ише бер йырпысыҡ ҡына ҡыҙ бала ла бүләк ителмәүенә үкенеп ҡуя. Ошо селт-аҡ йөҙө өҫтөнә ҡарлуғас ҡанатылай ҡыйылып киткән сөм-ҡара ҡашлы, оҙон, ҡалын толомдары бөгәренә төшкән, ут ҡарашлы, сикә остарын соҡорайтып һәр саҡ көлөп-йылмайып ҡына торған ҡурсаҡ ише ҡыҙыйға ҡарата йылы хистәре көндән-көн көсәйә, уны үҙ балаһындай күреп ныҡлап ярата бара.

Йән тетрәнеүҙәре баҫылып та өлгөрмәгән Әхмәтйән шулай уҡ тән йәрәхәттәре уңалып бөтөр-бөтмәҫтән көтөүгә сыҡты. Ҡотлобай ағаһының: “Тағы бер аҙ дауаланһаң ни була, Ғәлимйән менән икәүләп көтөп торор инек әле,”— тигәнен ишеткеһе лә килмәне. Тиктормаҫ Әхмәтйән ай һуҙымында өйҙә ятып ныҡ биҙҙе. Башҡаса сыҙап ятыр тәҡәте ҡалманы уның. Елбер Туры тайын, уҫал булһа ла аҡыллы Ҡарайғырҙы, йыуаш, әммә оҫкон ише етеҙ Тарлан буҙҙы, һәр саҡ үҙенә әйҙәп торған урман-ҡырҙарын, ярһыу Яманйылғаһын өҙөлөп һағынды. Ваҡыты-ваҡыты менән башы зыңҡып һыҙлаштырып ҡуя ҡуйыуын, әммә унығына ғына түҙерлек. Ә ҡулындағы яраһы инде тулыһынса тиерлек тартылып та бара.

Ана, ул сираты буйынса көтөүгә китеп бара. Эңер төшөп, күҙ бәйләнә торған мәл. Сей ҡайыштан өр-яңы сыбыртҡы ишеп алмаҡ булып, бер аҙға һуңлап киткәйне. Яманйылғаның аҡ ташлы кисеүен сығып асыҡты үткәс тә дөм-ҡара ҡарағай урманы башлана. Шул ҡарағайлыҡ ситендә эленеп торған күкшел томан араһында берәүҙең туйтанлап китеп барғаны күҙенә салынды. Йыртҡыланып бөткән алама кейемле әҙәми зат Әхмәтйәнде күҙгә лә элмәй кеүек. Кемдең йөрөп ятыуы бар һуң ошо мәлдә? Тиҙҙән бит ҡараңғы төшә. Уралдың был тирәһендә аҙашып китеүе лә оҙаҡ түгел.

— Әһә-һә-әәй! — Уны-быны уйламаған Әхмәтйән урман яңғыратып ҡысҡырып ебәрҙе. Теге, шәүлә ише бәндә, ҡапыл боролоп ҡараны ла шырлыҡ араһына инеп ғәйеп булды. Егет Туры тайын ҡабаландырҙы. Шуны ғына көтөп барған йәш мал һонолоп алға уҡталды. Әле генә йәйәүле кеше күренеп ҡалған урында бер кем дә юҡ ине. Һыбайлы, атын туҡтатып, бер ғауым ҡолаҡ һалып торҙо. Тауыш-тын да ишетелмәй, бер шипкерт тә тойолмай. Аптырап ҡалған Әхмәтйән: “Теге, айыуҙан ҡалған серкеү касафатымы әллә? — тип хәүефләнеп ҡуйҙы. — Төҙәлеп бөтмәҫ элек йөрөп ятҡанға күҙемә теләһә нәмә күренәләр. Ана, Гөлбикәһе лә көн дә тиерлек төшөнә керә. Керә лә: “Әхмәтйән, беҙ бит туғандар. Һин минең ағайым. Шунлыҡтан беҙҙең мөнәсәбәттәр ҙә туғандарса ғына булырға тейешле. Ә һин миңә яратам тиһең дә ҡалаһың“, – тип киҫәтә тора. Был сәйер төшмө, әллә һаташыумы – Әхмәтйән һис аңлай алмай. Төштөң шулай һәр бер ваҡлыҡтарына ҡәҙәр тура килеп, көн һайын ҡабатланып тороуы мөмкинме? Юҡ, ул һаташалыр. Әллә ниндәйҙер тылсымлы көс уны шулай көнәлгәре иҫкәртә киләме? Бәлки, Гөлбикә менән улар ысынлап та туғандарҙыр? Ә нишләп ул сағында Биксәнтәй ағай ҙа, әсәһе лә был хаҡта белгертмәйҙәр? Хәйер, улар үҙҙәре ҡыҙ менән егет араһындағы мөнәсәбәтте белә тиһеңме...”

Әхмәтйәндең бая ғына тыныс күңеле әле килеп болоҡһой башланы: кәйефен боҙоп, ҡайҙан осраны теге төн ҡараҫҡыһы... Бәлки, ул Яманйылға һаҙлығының өрәге булғандыр? Юҡ, ҡараҫҡыға ла, өрәккә лә оҡшамаған. Ул — әҙәми зат ине.

Ағарынып киткән йөҙөнә ҡарау менән уҙағының хәле мөшкөл икәнлеген шунда уҡ һиҙеп алған Ғәлимйән шелтәләй һалды:

— Йөрөйһөң үҙеңде үҙең аҙаплап. Әйттек бит, тулыһынса һауыҡмайынса сыҡмай тор, тип.

— Ни булған, Ғәлимйән ағай? — Әхмәтйән ыша бирмәгән булып ҡыланды.

—Һантыйға һалышма. Ана, бөтөнләй төҫөң ҡасып, ҡаулан ише ҡыуарғанһың.

— Ауырымайым мин, ағай. Нишләптер саҡ ҡына баш әйләнеп, күңел болғанып тора. Бары шул ғына, — тип аҡланған егет бая күҙенә өрәк күренеүе

хаҡында өндәшмәй ҡалдырҙы. Дөрөҫөрәге, ышанмай, көлөрҙәр, тип уйланы. Хәйер, көлөрҙәр инеме? Ни өсөн тигәндә, уның ише имеш-мимештәр электән ишетелә. Ул өрәкте йыш ҡына күрәләр. Күрәләр һәм күнегеп тә бөткәндәр шикелле...

Ҡарағайлыҡта күренеп ҡалған сәйер ҙә, серле лә шәүлә төнө буйына, иртәгәһен көн оҙоно егеткә тынғылыҡ бирмәне. Уның ни булырына, бәлки, кем икәнлегенә төшөнөргә тырышып ул туҡтауһыҙ баш ватты. Әгәр күҙенә күренгәне йәнһеҙ ҡараҫкы икән, ҡыҫҡырған тауышҡа боролоп ҡарар инеме? Ә был ҡараны. Китеп барған еренән хатта туҡтала биреп торҙо. Ара алыҫ булһа ла, Әхмәтйән шуны төҫмөрләп өлгөрҙө: йөҙө уның кешенекенә тартым ине. Оҙаҡ ваҡыт ҡырынмай йөрөгән әҙәм йөҙө. Өҫтөндәге ылҡаһы ҡалмаған кейемен дә асыҡ күрҙе. Мәгәр, әҙәми зат булһа, ер йоттомо уны шул урында? Күҙ менән ҡаш араһында юҡҡа сыҡты ла ҡуйҙы ла баһаң. Ҡасып китеүе мөмкин түгел. Үлән үҫмәгән ҡарағай араһы әллә ҡайҙарҙан ап-асыҡ күренеп ята. Шәп атҡа атланған һыбайлы уны шунда уҡ ҡыуып етер ине. Тиген хәл түгел был, ай-һай...

Ни уйлап, ниндәй фараз ҡорорға ла белмәй аптыранған Әхмәтйән, ахырҙа, был турала әлегә бер кемгә лә өндәшмәй торорға кәрәк, тигән ҡәтғи ҡарарға килде.

...Сатра йәйләүенә күсенеп, һыйыр теленә үлән әләгеүҙән һөт бермә-бер арта башлау менән, Аҡбикә инәйгә эш өҫтәлә. Дарыу үләндәрен танып белеүҙән тыш, ул ауылда бер үҙе генә телеңде йотмалы итеп ҡыҙыл эремсек — әжекәй бешерә белә.

Аҡбикә әбейгә йылдың-йылы әләгет араһынан селтерәп ағып ятҡан сафтан-саф һыулы, тирмәләр торған ерҙән бер аҙ түбәндәрәк Яманйылғаға ҡушылған Айыубаҫҡан шишмәһенең һөҙәк ярына ҡыуыш ҡороп бирәләр. Шишмәгә яҡын итеп әшәк урыны әҙерләнә, бөтә ауылға бер бөртөк булған оло сөгөн ҡаҙан аҫыла. Йомро төплө ундай ҡаҙан, ауылда түгел, яҡын-тирәлә башҡаса юҡ. Шуға күрә уны күҙ ҡараһылай һаҡлайҙар: яңылыштан бәрелеп-һуғылып онталып ҡуймаһын йә иһә уғрылар алып китә күрмәһен. Ана шул ҡаҙанда ауыл инәһе бөтә ауылға тиерлек әжекәй ҡайната. Нисә ҡарама, шуның тирәһендә бөксәнләп, төтөн кереүҙән әсеткән күҙҙәрен ыуа-ыуа эремсек болғата. Шулай кәрәк. Юғиһә, берәй нәмәгә әүрәп, саҡ ҡына онотолоп киттеңме, эремсегеңдең тәме бөтөнләй икенсе буласаҡ.

Ауылдаштары ла өйрәнеп бөткән: әжекәй өсөн тәғәйен аҡ эремсекте көнәлгәре сират буйынса ғына алып киләләр, әҙер булғанын алып китә торалар. Әлбиттә, игелекле аҡ инәйҙе бер кем дә әжерһеҙ ҡалдырмай, һәр ҡайһыһы үҙ белдегенсә, аҙмы-күпме булһа ла, өлөш сығарырға тырыша. Дөрөҫ, Аҡбикә әбей көндәр буйына төтөндә ыҫланып, утта янып-бешһә лә, хеҙмәте өсөн хаҡ һорамай. Шулай ҙа бәйәһен ризалыҡ менән биргәндәргә ҡуй ҙа тимәй. Һыйыр тоторға хәленән килмәгәнлектән, һөтөн дә, май-ҡаймағы менән ҡоротон да ул ошо рәүешле, эремсек ҡайнатып эшләп ала һәм шуның менән көн итә. Йәйгелектә ҡаҡлап-ыҫлаған ҡорото, иретелгән майы һәм башҡаһы ҡышҡылыҡҡа етә. Ә сирле ауылдаштарын бушлай дауалай, шуның менән оло ҡәнәғәтлек кисереп, уларҙың фатихаһын ала.

Аҡбикә тал ситәнде ике яҡлап, һыйыр тиҙәгенә ваҡ үлән ҡушылған ҡыҙыл балсыҡ һылап эшләнгән, ауыл осондағы мунса ҙурлыҡ ҡына өйөндә япаяңғыҙы йәшәй. Уныһы инде ваҡыт уҙыуҙан яртылаш ергә һеңешеп бөткән. Яңғыҙы тиһәк тә, йәнә бер баш аҡ кәзәһе менән Биксәнтәй бай, Әхмәтйәнде

әжәлдән ҡурсып алып ҡалған хаҡына, саҙаҡаға биргән бәрәсле һарығы бар. Ғаиләһе булмаған түгел ҡарсыҡтың, булған. Ире, өс улы ҡот оСҡос фажиғәгә тарыған: йотлоҡ йылды яман ҡырғынға эләгеп, барыһы ла бер юлы тиерлек үлеп бөткәндәр. Йәп-йәш көйө тол ҡалып, ғүмерен ошолай саяҡ[53] көйө үткәргән ул. Шулай ҙа етемлеге менән һатыу итеп, кешегә бәләһен дә һалып йөрөмәгән, зарын һөйләп бөлөнмәгән дә. Күп тапҡырҙыр яусылап килеүселәр булһа ла, ғәзиздәренең ҡәберен ташлап бер яҡҡа ла китмәгән. Шым ғына күҙ йәштәрен түгә торғас, күҙҙәренә ҡылау төшкән, егерме бише лә тулмаҫтан сәстәре ағарған. Хәтеренән мәңге юйылмаҫ, һәр өйгә һуғылып сығырға өлгөрөп, ярты ауылды ҡырып һалған үләт-фажиғәгә ҡаршы дауа эҙләп ғүмере уҙған. Нисәмә кешене һауыҡтырып, күпме рәхмәт ишетте, күпме фатихасауап алды икән ул үҙ ғүмерендә? Быныһын инде мәғшиәтте яралтып, үҙебеҙҙе бар ҡылған ғәләмдәр эйәһенән башҡа берәү ҙә белмәй.

Аҡбикә инәй бөгөн дә, ғәҙәтенсә, ҡояштан байтаҡҡа алда торҙо. Тәһәрәтләнеп ғөсөлләнгәндән һуң, ҡабаланмай ғына иртәнге намаҙын башҡарып алды. Тәңре алдындағы олуғ бурысын еренә еткереп үтәгәндән аҙаҡ, яйлап ултырып сәй эсте. Ҡаҙан аҫтындағы кистән әҙерләп ҡуйылған ҡоро-һары сытырҙы тоҡандырҙы ла әшәге гөлт итеп, күңелле дөрләп киткәнсе ҡарап торҙо. Бер аҙҙан, ҡоро ерек утындан йыуанырағтарын һайлап, ут өҫтәне. Эшенең шул рәүешле ыңғай ғына башланып китеүенән ҡәнәғәт ҡалған әбей, һалҡын урынға ҡуйылған эремсекле ҡоштабағын алырға тип, ергә ҡаҙып эшләнгән өркөттө асты. Әҙер әжекәй менән яртылаш тултырылған ҡоштабаҡ урынында юҡ ине. Кинәт аптырауға ҡалған әбей тегеләй, былай ҡаранып алды:

— Аһ-аһ, кистән сығарып ултыртырға оноттоммо әллә? — тип ыуаланып яңынан ҡыуышҡа инеп, байҡап сыҡты. Әммә ағас һауыт унда ла күренмәне, ҡулына ла һуғылманы.

Ни уйларға ла белмәгән Аҡбикә инәй ҡабат килеп ҡаҙан тирәһен, ҡашығаяҡ араһын ҡараштырҙы. Юҡ ҡоштабаҡ, ғәжәп. Ҡайын ороһонан соҡоп яһалған ҡоштабаҡты мәрхүм иренең төҫө итеп кенә күрә ине. Шул ҡомартҡыны ла һаҡлап, ҡәҙерләп тота алманы, шаҡшы. Ҡартайып һиңмайлана барыуы ошолор, күрәһең. Хәтере мөшкөләйеүгә бошоноп ҡуйған ҡарсыҡтың, күпме тырышһа ла, сөңкә ағас һауытты ҡайҙа ҡуйғанлығы иҫенә төшмәне.

Ошо мәл тулы күнәк эремсек күтәргән Гөлбикә күренде.

— Һауғынамы, Аҡбикә өләсәй! — Көләмәйләп, әллә ҡайҙан уҡ иҫәнлекһаулыҡ һорашты ҡыҙ. — Хәлкәйҙәрең нисек? – Үҙе, яуапты көтөп тә тормаҫтан: — Мына ошоно донъялағы иң тәмле, иң татлы әжекәйгә әйләндереп бир әле, зинһар, әжеренә яртыһын үҙеңә ҡалдырырһың,— тип ағас күнәкте ҡаҙан янына килтереп тә ултыртты.

— Һаулыҡҡа зарланмайым да ул, ҡыҙым...

— Һуң...

— Күҙ менән ҡаш араһында ҡоштабағымды юғалттым, суҡынған. Олатаң мәрхүмдең берҙән-бер ҡомартҡыһы ине, шуға эсем бошоңҡорап тора. Эй, хәтереңә төкөрәйем.

— Атаҡ, атаҡ, ҡайҙа булып ҡуйҙы икән ул? — Әле генә көлөп торған Гөлбикә кинәт етдиләнде.

— Һис башым етмәй. Кисә кис өркөткә[54] ҡуйған һымаҡ инем.

— Башҡа урындарҙы ҡараныңмы һуң?

---

*[53]Саяҡ — яңғыҙ, һыңар, ишһеҙ.*
*[54]Өркөт — ер баҙ.*

— Ҡарамаған ҡайҙа! Бет урынына эҙләнем, күренмәй.— Аҡбикә инәй аптырап бот сапты.— Бүтәнсә йүнле һауыты ла юҡ бит әле, ҡәһәрең.

Бәләкәс кенә сибек кәүҙәле, көмөрөрәк Аҡбикә өләсәһе һәләк йәл булып китте ҡыҙға.

— Һин, өләсәй, ҡаҙаның тирәһендә булаша тор, мин хәҙер! — Ул йәлп бороldо ла үҙҙәре йәшәп ятҡан аҡ тирмәләренә ҡарап йүгерҙе.

— Әй, сос та инде балаҡай!— Аҡбикә үҙ алдына һөйләнеп ҡалды. — Бәхетле була күр инде, изге йән.

Ҡаҙанға ауҙарылған эремсек лырҡылдап ҡайнай башлауға Гөлбикә кире килеп тә етте. Леп-леп осҡан күбәләк ише талпынған ҡыҙ ҡулына ҙур ағас туҫтаҡ тотҡан ине.

— Бына, өләсәй, һиңә әпкилдем! Бәләкәйерәк, шулай ҙа бөтөнләйгә һауытһыҙ һымаҡ булмаҫ әле.

Инде бешә башлаған эремсекте ҡаҙан төбөнә йәбешеп күмһемәһен өсөн болғаштырып маташҡан Аҡбикә инәй ҡыҙға боролоп ҡараны.

— Ҡуй, ҡуй, балам, кәрәкмәй, — тине ул, ҡулын һелтәштереп. — Нисек тә итермен әле.

— Ал, өләсәй, ал, һауыт-һабаһыҙ ҡыйын бит ул.

— Оло кеше һин беләһең инде уны, ҡыҙым. — Аҡбикә әбей, ауыҙындағы берҙән-бер һары тешен күрһәтеп, кеткелдәп көлдө. — Әсәң орошмаҫмы һуң?

— Әсәйемдән һорап алдым, борсолма.

— Әллә нисек һымаҡ бит әле, балам.

— Әллә нисек булмаһын өсөн, беҙҙән бер йәдкәр итеп ҡабул ит. Үҙебеҙ игелегеңде күп күрәбеҙ ҙә баһаң.

— Әжекәйҙе әйтәһеңме? Уныһы бит ярҙам йөҙөнән генә, балаҡай.

— Туҫтаҡ шуның әжеренә булыр.

— Әй ҡыянһың да инде, ҡыҙым! — Әбей йәнә кеткелдәп алды. Ошо минутта уның йөҙөн ҡаплап алған тәрән йыйырсыҡтар яҙылып, сикәләре гөлтләп киткәндәй: — Хаҡ Эйәбеҙ, тәүфиҡ менән таҙалыҡҡа өҫтәп, ғүмер бирһен үҙеңә. Бәхетле була күр.

Аҡбикә оҙаҡ тотоноуҙан йышылып бөткән туҫтаҡты ҡулына алып, әйләндергеләп ҡарап торғандан һуң:

— Минең бабай эшләгән нәмә түгелме икән әле быныһы ла? — тип ҡуйҙы.

— Шулай оҫта инеме ни олатай?

— Әйтәм бит, ағас эшенә һәләк маһир булды. Ағас ороһо, ялланып үҫкән ҡайын эҙләп йөрөп көндәр буйына урмандан ҡайтмаҫ ине, бахыр. Ҡайһы ғына өйгә инмә, ул соҡоп яһаған семәрле баҙыянын да, ярты ауыл туйыр ит һыймалы ҡоштабағын да, йәтеш кенә туҫтағын да күрергә була. Күрше ауылдарҙан килеп ала торғандар ине хатта. Үҙ һөнәренә әкренләп уландарыбыҙҙы ла өйрәтә башлаған ине лә бит...

Башлаған һүҙен ослай алмаған Аҡбикә әбей, ирекһеҙҙән сырҡырап сыҡҡан күҙ йәштәрен күрһәтмәҫ өсөн, йөҙөн ситкә бора һалды.

— Рәхмәт, Гөлбикә балаҡайым. Ҡәҙерләп-һаҡлап ҡына тотормон инде туҫтағыңды. Ә ҡыҙыл эремсегеңде төштән һуңға килеп алырһың. Бар, уйна.

— Бәй, уйнап йөрөмәгә бәләкәй балалыр шул мин?! — Гөлбикә останлап көлдө.— Миңә хәҙер – ун дүрт йәш!

— Шулай уҡмы ни?! — Аҡбикә әбей юрый ғына аптырап киткән була. — Аһ-аһ, бөтөнләй еткән ҡыҙ икәнһең дә баһаң! Шәп кейәү ҙә табылһа үҙеңә...

— Оялтма әле, өләсәй!

Һүҙ ҡеүәһенән әллә кем булып киткән Гөлбикә, бушаған күнәген эләктереп, шишмә буйына йүгерҙе. Шулай, бер юлы ике ҡуян тотоп, ул юл ыңғайы һыу ҙа алып ҡайта. Тапалған һуҡмаҡтан елеп төшөп китеүенә күп тә үтмәне, ҡыуаныстан сәрелдәгән тауышы ишетелде.

— Аҡ өләсәй! Ҡоштабағың бында ултыра ла баһаң!

— Аһ-аһ, ысынмы? Бына әкәмәт! — Ҡарсыҡ йәнә бот саба.— Кисәге көн ул тирәгә бармаған инем дә...

Эйе шул, тулыр-тулмаҫ ҡоштабағын ҡыуыш янындағы ҡотан өркөткә ултыртҡан һымаҡ, әммә уның нисек итеп һыу ала торған урынға барып сыҡҡанлығын һис әйтә алмай.

— Ҡыҙым, һиңә бер бәләкәй генә үтенесем бар ине. — Гөлбикәне ҡапыл туҡтатҡан Аҡ өләсәһе сәйер генә өндәште.

— Ниндәйерәк үтенес ул, өләсәй? Әйт.

— Ней.. Ҡоштабаҡ менән ҡаңғырып йөрөгәнде берәүгә лә һөйләмәй торһаң ине...

— Ярай, һөйләмәм. Ә нимәһенә шул тиклем борсолаһың һуң?

— Аҡбикә әбей бер көйләрәк була башлаған, тиеүҙәре бар...

— Бушҡа ҡурҡаһың да, өләсәй. — Гөлбикә эскерһеҙ сырҡылдап көлдө. — Кем әйтһен инде, йә, шулай тип?

— Әҙәмдең төрлөһө була, кем, ҡыҙым. Үҙ иткәне лә, күрә алмағаны ла бар. Һәр етешһеҙлегеңдән көлөргә торғандары ла юҡ түгел. — Уйсанланып киткән ҡарсыҡ тураһын әйтте: — Шөғөлөмә зыян килеп ҡуймағайы, тиеүем. Хәлем етеп, үҙ аяғымда йөрөгән саҡта кешеләргә барынса ярҙам итеп, көсөмдән килгәнсә хәстә ҡылып ҡалаһым килә. Ә "яңылыша башлаған икән" тигән һүҙ тарала ҡалһа, үҙең беләһең... Ҡыҫҡаһы, ғүмерем ахырында кеше көнлө булып ятырға теләмәйем.

— Кемгә һанайһың һин мине, Аҡ өләсәй? — Гөлбикә күнәген ергә ҡуйҙы ла, останлап килеп, әбейҙең тарамыш муйынынан һыға ҡосаҡлап алды. — Ҡурҡырлыҡ нимәһе бар һуң уның? Тапҡанһың көйәләнер сәбәп. Шәпһең бит әле һин, шөкөр. Тағы әллә күпме кешене дауалап ҡыуандырырһың әле, мына күреп тор.

— Шулай ҙа...

— Ярай, өләсәй, берәүгә лә һөйләмәм. Һүҙ бирәм: антым-шантым! Мына, изге һыу өҫтө.

Хозур йәй миҙгелкәйе бигерәк ҡыҫҡа шул. Әле генә беренсе сәскәләргә ҡыуанып, тәүге былбыл тауышына һоҡланып йөрөгән һымаҡһың, әйләнеп ҡарауыңа гүзәл мәлдең ахыры ла яҡынлашҡан. Ана, инде алтын көҙҙөң һалҡынса һулышы тойола: аҡ күлдәкле һылыу ҡайындарға урыны-урыны менән бөҙрә сал ҡуна башлаған, өлгөргән емен ҡойғандан һуң башағы бушап ҡалған үлән ҡыуарып бара.

Йәйләү инде ныҡ тапалып киткәнлектән, Биксәнтәй бай әлүк баштан ауылға күсенә башларға ҡарар ҡылды. Йылҡы малынан башҡаһы иртәгәнән үк ҡуҙғаласаҡ. Бейә һауған бер нисә ҡатын-ҡыҙ менән көтөүселәр генә, ҡар күҙе төшә башлағансы, бында ятырға тейеш. Ҡыҙыл балсыҡтан сығарылған көлдөксәле мейестәре булған тирмәләрҙә йәшәп торорҙар. Урал буйҙарында, һыйыр теленә эләккәндәй үк булмаһа ла, ат малы тибенеп сүпләнерлек үлән бар әле.

Көндәр ихлас һыуыта башлап, ҡар ятыу менән, һауынсылар ҙа ҡайтып китәсәк. Ҡышҡылыҡҡа һыуалдырылған бейәләр янында көтөүселәр генә тороп

ҡала. Ҡар тубыҡҡа еткәнсе тау биттәрен иңләп тибендә йөрөгән йылҡыға айырата күҙ-ҡолаҡ булып тороу зарур.

***

Халыҡ Сатра яланынан күсенеп ҡайтыуға ауылда сәйер хәлдәр булғыланы. Йә берәйһенең ыҫларға тип ылашҡа йәйелгән ҡоротон, йә баҙыян менән һалҡын баҙға төшөрөп ҡуйылған һары майын алып китәләр. Тора-бара хатта ваҡ мал юғала башланы. Ҡырҙа йөрөгән кәзә-һарыҡ кисен теүәл ҡайта ла төнгөлөккә ҡотанға бикләп ҡуйылған ерҙән һирәкләп юҡ була. Ошоғаса берберенең сүбенә лә ҡағылмаған ауылдаштар яурын йыйырып аптырауға ҡалды. Серле юғалыуҙарҙы кем менән бәйләп, кемгә япһарырға белмәй баш ватты. Аҡылға һыйған эшме ни бер-береңдең хәләл малына ҡул һуҙыу?! Хәйер, урлашыумы был, әллә берәй ҡара көстөң этлегеме? Аҡбикә әбей теге ваҡыт ҡоштабағының юғалып, көтмәгәндә кире табылыуын ошо булып ятҡан ғәжәп хәлдәр менән нисектер бәйле икәнлеген хәҙер инде һиҙенә биреп ҡуя. Әммә уғрының йә иһә ҡара көстөң кем булырын аныҡ ҡына күҙ алдына килтерә алмай. Ә һәр төрлө уйҙырмаларға маһир ауыл халҡы барыһын да йә албаҫты, йә өй эйәһе менән аңлатырға маташа. Бурҙың араларында булыуы уларҙың аҡылдарына һыймай.

Ир-ат сиратлап уғрыны аңдып ҡараны, тик бушҡа ғына. Кәзә-һарыҡтың берәм-берәмләп юғалыуы дауам итте. Һаҡмарбаштар инде бер-береһенә ҡырын ҡарап, ағаһы ҡустыһынан, күршеһе күршеһенән шикләнә башланы.

Аҡрап баштары етеүгә епшек ҡар яуып һалып ҡуйҙы. Һунарсымын тигән һунарсы нисек итеп түҙеп ятһын ошондай мәлдә. Ана, ошоғаса йорт-ҡура мәшәҡәттәренән шыпа бушана алмай һунарға һыуһаған Батырхан да барыһын күтәреп һуҡты ла таң һарыһы менән аяғына баҫты. Ниәте – төнгө эҙҙәр иҫкермәҫ элек ҡоралай ҡыуып, бер ыңғайға бауыр аҫтынын ел үткәреп, ерһыу гиҙеп ҡайтыу. Ерҙән йөрөгән йәнлеккә ауға сыҡһа, ул, үҙенән былайыраҡ, этенә арҡалана. Ялбыр йөнлө, еңел кәүҙәле, һонтор Дүрткүҙе йәнлекте эҙе буйлап ҡыуырға һәләк шәп. Эҙгә бер юлыҡтымы – яҙлығыу белмәй. Ҡуян булһынмы ул, хәйләкәр төлкөмө, башҡаһымы – барыбер хужаһының ҡаршыһына ҡыуалап сығара. Ә Батырхан үҙе һирәк яҙа атыр. Эйе, уның үҙ ҡулдары менән әҙерләп алған үткер башаҡлы, шырт ҡаурыйлы уҡтары һәр ваҡыт сәпте таба. Беше ҡарағастан мөгөҙ бәйләп яһалған янының тарамыш керешен тартырға Һаҡмарбашта барыһының да хәленән килмәй. Ә үҙе ҡолас киреп атып ебәргәндә уғы ат муйынын үтә сығыр.

Ауға йөрөгәндә Батырхандың яратҡан йәнлеге — ҡоралай. Ите мул өҫтөнә, тейҙереүе лә анһат. Иң мөһиме — һәләк күп ҡоралай был тирәлә, төйәкләгән урындарында көтөүе менән йөрөйҙәр. Йыбанмай аула ғына. Дүрткүҙ ише этең барында эштәр бөтөнләй көйлө китә.

Яңғыҙ ала кәзәһенә бер услам бесән ырғытып китмәк булып, ситән оя яғына ыңғайлаған Батырхан, ҡапҡаны асып инеүгә, ҡар өҫтөндә ярылып ятҡан уҫлаптай эҙҙәрҙе күреп баҙап ҡалды ла, ҡапылғара ни уйларға белмәй, аптырап торҙо: төн убыры ише кемдең йөрөп ятыуы бар шулай? Әллә теге уғрымы?.. Ниҙер һиҙенеп, күңеленә шик йүгергән Батырхан йәһәт атлап кәзәһе торған ҡотан яғына барҙы. Кистән ябып, үҙ ҡулдары менән арҡыры ағас һалып ингән ҡотан ауыҙы шар асыҡ ине: ике балаһын нисек тә аҡтан мәхрүм итмәй, күҙ терәп торған кәзәһе ғәйеп булған да баһаң!

— Тфү, ләғнәт төшкөр нәмәкәй! — Асыуы ҡабарған Батырхан асырғанып

төкөрөндө: — Сират миңә лә еттеме ни, йәлсемәгер?! Кемдекенә тейгәнеңде белмәһәң әле...

Ҡапыл ғына һарыуы ҡайнап киткән сәмсел һунарсы шунда уҡ күпте күргән ҡалъянын алып сыҡты. Көлсә киҫәген сепрәккә төрөп ҡуйынына тыҡты ла, кистән ашатылмай, ас көйө тотолған Дүрткүҙен эйәртеп, әле һыуынырға ла өлгөрмәгән эҙгә баҫты. Уның эре аҙымдар менән етеҙ атлап сығып киткәнен ауылда бер кем дә күрмәй ҡалды.

Ошо йәшенәсә күпме һунар итте Батырхан, ә әлегәсә кеше эҙен ҡыуып йөрөгәне юҡ ине. Ә епшек ҡар өҫтөндәге бормалы сылбыр булып теҙелгән эҙҙәрҙең кешенеке булыуында аусының шиге юҡ.

Көн яҡтыра барған һайын, аусы үҙ уйының дөрөҫлөгөнә ныҡыраҡ инанды. Ул ғына ла түгел, әлеге әҙәм аҡтығының аяғында ҡояҡ-сабата булыуын да асыҡ төҫмөрләне. Шуның өсөн ошо көфрана эшкә был тирә кешеһенең ҡулы күтәрелә алыуына шикләнә биреп ҡуйҙы: башҡорт сабата кейеп йөрөр булырмы? Бик икеле. Алама сарыҡ кейһә кейер, әммә сабата урамаҫ. Сабатаны, ғәҙәттә, ҡыҙыл урыҫ кейә. Тик тағы һорау тыуа: бөтөнләй белмәгән ҡара урманда япаяңғыҙ көйө урыҫ ни ҡарап йөрөргә тейеш? Нисек итеп ул кеше күҙенә бер салынмай йәшәп ята? Батырхандың башында шул рәүешле бөтмәҫ-төкәнмәҫ уйҙар ҡайнашты, яуапһыҙ һорауҙарҙан хатта зиһене бутала башланы.

Ә эҙҙәр ысынлап та урманға тарта. Ырамлы аҙымдар менән атлап барған Батырхан: "Вәт ғәйрәтле әҙәм, әй! – тип хайран ҡала. — Кәзә һынлы кәзәне шул тиклем араға йөкмәп китсе әле! Бына ни өсөн ошо көнгә тиклем юғалған малдарҙың бөртөк һөйәген дә таба алмағандар. Ә бит күпме эҙләп ҡаранылар, байҡамаған ерҙәре ҡалманы һымаҡ".

Эҙҙәр көнбайыш йүнәлешендәге ауылдан сама менән биш-алты саҡрым арауыҡта ятҡан ҙур аҡланға сығарҙы. Батырхан ошо урында этенең тынысһыҙлана башлағанын шундуҡ һиҙеп алды. Ана, ялағайланып ҡойроғон болғайболғай, хужаһы янынан китешмәй. Ғәҙәттә, әллә ҡайҙарға олағып ғәйеп булыр Дүрткүҙҙең сәйер ҡыланышына шунда уҡ иғтибар иткән аусы, һағайып, уҡ-һаҙағын ҡулына алды: һаҡланғанды һаҡлармын, тигән. Тоғро дуҫының үҙен шулай тотоуының сәбәбен ул тәрән үҙәк эсенә төшкәс тә аңланы. Үҙәк эсендәге сыбырлап ултырған ваҡ уҫаҡлыҡ араһында ботарланған мал ҡалдыҡтары ята ине. Ала тире менән баш-тояғы бер яҡта, эс-ҡарыны икенсе урында. Батырхан, тиреһен күреү менән, үҙ кәзәһен таныны. Ҡараҡ иттән башҡаһын алмаған, тәләф итеп быраҡтырып киткән. "Тимәк, мал һуйып өйрәнмәгән әҙәм, — тип фекер йөрөтә Батырхан. — Әллә үҙенеке булмағанға ҡәҙерен белмәйме? Тәрбиәләп алһаң, эс-ҡарыны ла байтаҡҡа етә бит уның, ә баш-тояҡтың һурпаһы ниндәй тәмле була..."

Эсе бошоп киткән Батырхан, хәләл малының ҡалдыҡтары менән ҡар өҫтөнә һибелгән көрәнһыу ҡанға оҙаҡ ҡына ҡарап торғандан һуң, йығылған ағас олонона йәтешләп ултырҙы ла, икмәк һыныҡын ҡуйынынан сығарып, семтемләп-тәмләп кенә ашай башланы. Ә мөлдөрәп күҙҙәренә ҡарап, сыйылдай биреп торған Дүрткүҙенә, йомартланып, кәзә ҡалдыҡтары менән һыйланырға рөхсәт итте. — "Әйҙә, тартынма, Дүрткүҙ. Беҙҙең ризыҡҡа яҙмағанды, исмаһам, һин ашап ҡыуан", — тине, икмәкте ҡоролай сәйнәй-сәйнәй. Һунарҙа саҡта бер ваҡытта ла ашарға бирмәгән хужаһының ошо ҡыланышына ышаныр-ышанмаҫ торған эт, башта баҙнатһыҙ ғына килеп, кәпәйеп ятҡан ҡарынды тартҡыслап ҡараны. Хужаһы өндәшмәгәс, артабан ихласлап ашарға керешде.

"Ә ни өсөн теге әҙәм минең кәзәне ер аяғы ер башы ергә килтереп һуйған?

— Батырхан, бауыр-йөрәкте өҙгөсләп һоғонған этенә ҡарап ултырған көйө, йәнә уйҙарға бирелә. — Күпме көс, күпме ғәйрәт кәрәк тә баһаң кәзә һынлы кәзәне ошо тиклем араға йөкмәп килер өсөн! Ай-һай, үтә тәғәнле күренә был эш. Үҙем бит ошо асыҡҡа күптәнән лайыҡлы атама таба алмай бер була инем. “Кәзәһуйған!” Шәп бит, ә! Беҙҙән дә бер исем ҡалһын әле.

Батырхан, тамаҡ ялғағандан һуң, яҡындағы шишмәгә төшөп һыуһын ҡандырҙы. Күп ашауҙан эсе кәпәйгән Дүрткүҙ ҙә һыуға йомолдо. Һунарсы шунда үҙ-үҙенән көлөп ҡуйҙы: илек аулайым тип сығып кит тә бер уғры эҙен ҡыуып йөрөсәле...

Көн үҙәге яҡынлашыуға кинәт йылы ел иҫеп үтте лә, мамыҡ ише ҡырпаҡ ҡар күҙгә күренеп ирей ҙә башланы. Батырхан ала ҡарҙа аяҡ эҙҙәрен бер юғалта, бер таба бара. Ғәжәп, эҙҙәр ҡапыл боролоп, кирегә табан, ауыл яғына, ыңғайлаған. Тик был юлы Һаҡмар буйлатып ҡыуаҡтан-ҡыуаҡҡа тарта. Йөрөгән бит, ә, мәлғүн! Күрәһең, үҙенсә эҙ яҙлыҡтырып маташҡан. Ҡарҙың тиҙ арала иреп бөтөрөн белгән булһа, былай аҙапланмаҫ ине, шәт...

Беленер-беленмәҫ ятҡан эҙҙәр бер мәлде Һаҡмарбаштан өс саҡрым самаһы өҫтәрәк, үтеп сыҡҡыһыҙ йырынға алып килде лә тәрән һикәл[55] тирәһендә юҡ булды. Һикәл ҡарсыҡтарҙың сал сәсе ише ҡыуарған, ялбыр оҙон үлән менән ҡапланған. Күнекмәгән күҙгә тәү ҡарауҙа аңғарырлыҡ та түгел. Батырхан ҙур һаҡлыҡ менән ҡауланды ҡайырҙы. Текә һикәл ситендә өңөрәйеп ҙур мәғәрә[56] күренә. Еүешлек, бәшмәк еҫе аңҡып торған мәғәрә эсе ҡараңғы һәм шомло, шылт та ишетелмәй. Хужаһы һөсләтеп ҡараһа ла, Дүрткүҙ артыҡ уҫаллыҡ та, ҙур теләк тә күрһәтмәне, соҡор тирәһен әйләнеп бер аҙ еҫкәштерә бирҙе лә битараф ҡалды. Быныһына инде хужа кеше аптырамаНы ла, асыуланманы ла. Эте бит тик януарға йә башҡа төр кейеккә генә өйрәтелгән, бары шул ғына. Тимәк, кеше еҫен һиҙә һәм уны һанға һанамай. Алағайымға тота килеп әҙәми затҡа ташланырға ул һаҡ этеме әллә? Дүрткүҙҙең дәрәжәһе юғарыраҡ. Уның шөғөлө – һунар итеп, хужаһына әҙме-күпме файҙа килтереү.

Батырхандың иҫке айыу өңөндә кеше ятҡанлығына бер шиге лә ҡалманы.

Ул туҙғытылған ҡауланды рәтләп кире япты ла, ҡайта һалып, бер нисә ир-ат алып килергә ҡарар итте. Әлбиттә, бысаҡ тотоп айыуға яңғыҙы ҡаршы сыҡҡан Батырхан соҡорҙа боҫоп ятҡан яһилды бер үҙе лә йомарлап алып ҡайта алыр ине, шулай ҙа быны шаһиттар алдында эшләүҙе хуп күрҙе.

Әүәл Биксәнтәй менән кәңәшләшкәндән аҙаҡ, Аҡсура, Байғазы исемле егеттәрҙе эйәртеп һикәл янына килделәр ҙә, туҙ яндырып мәмерйәне ҡарап сыҡтылар. Ул буш ине: кеше лә юҡ, ит тә тойолмай.

— Бая һағыраҡ ҡыланмай өркөттөм, шәт, — тип үкенес белдерҙе Батырхан. — Килеп ҡапҡан ерҙән, ә, ҡәһәрең!

— Ярай, бөтөрөнмә, ҡорҙаш, бәлкем, былай ғына киткәндер ҙә тиҙҙән әйләнеп ҡайтыр.— Биксәнтәй уны тынысландырып маташты.

— Ҡасып ҡайҙа барыр? — Аҡсура ла һүҙгә ҡушылды.

— Ә ниңә, ҡурҡынысты һиҙеп һыпыртыуы ла бар. Ҡар иреп бөттө, эҙ беленмәй, ә эт, үҙегеҙ беләһегеҙ, кеше артынан ҡыумай. — Ҡараҡты күрәләтә ҡулдан ысҡындырыуҙа тик үҙен ғәйепле һанаған Батырхан һаман ярһыны.

— Әйтәм дә баһаң, бер ҡайҙа ла китмәҫ, Батырхан апа. Хәҙер өңөнөң ҡайҙа икәнлеген беләбеҙ. Бер килмәһә, бер килер. — Аҡсура ла ныҡышты.

[55] *Һикәл — йырын башындағы соҡор.*

[56] *Мәғәрә — мәмерйә ауыҙы.*

Артабан ни ҡылырға белмәй аптырашып торғандарында алыҫ түгел әрәмәлектә нимәнелер эт абалағаны ишетелде. Ҡабалан-ҡарһалан тауыш килгән яҡҡа йүгерҙеләр. Һаҡмарҙың ҡыуарып бөткән боланут, кипкән айыу ҡурайы менән ҡапланған бөгөлө өҫтөндә беленер-беленмәҫ зәңгәр төтөн күтәрелә ине. Күтәрелеп сыға ла, тәпәш ҡыуаҡтар менән тиңләшкәс, тирә-яҡҡа йәйелеп китә. Эттең лауылдағаны ла шул тәңгәлдә.

Асыҡ урынға ҡапыл йүгерешеп сыҡҡан эҙәрләүселәр көтөлмәгән күренештең шаһиты булды. Ыҡсым ғына итеп эшләнгән аҫҡаҡлы әшәк янындағы ярым серек төпһә өҫтөндә әҙәми затҡа тартым йән эйәһе елек мөнйөп ултыра. Абалаған эткә, нишләптер, бөтөнләй иғтибар итмәй үҙе. Яҡынлашҡан кешеләрҙе абайлап ҡалғас ҡына, кинәт һикереп торҙо. Ауылдаштар, уға яҡын барырға баҙнат итмәгәндәй, туҡтап ҡалды. Аҡсура менән Байғазы өлкән ағайҙарының артына ышыҡлана һалды. Ышыҡланырһың да: уларҙың алдында уҡмашып бөткән көнйәлә[57]сәсле, ялбыр ерән һаҡалы биленә төшөп, өҫтөндәге кейем ишараты һуңғы сиккә етеп туҙып бөткән ҡот осҡос әҙәми зат баҫып тора ине. Үҙенең һап-һары йәпрәй ҡаштары аҫтындағы асыҡ-зәңгәр күҙҙәре ут булып яна. Уның урыҫ затынан икәнлеге күрер күҙгә шунда уҡ төҫмөрләнә.

– Һин кем? – Биксәнтәй ҡырыҫыраҡ күренергә тырышты.

– Ә? – Көнйәлә баш ишетмәй ине, буғай.

– Исемең кем, тием?

– Ә, исемемме? Куприян мин. — Тегеһе йылмайғандай итте. Йылмайыуы нисектер эскерле, сәйер генә килеп сыҡты.

— Ҡайҙан килә ятыуың?

— Кананикольский яҡтарынан.

—Ҡасып йөрөйһөң, тимәк? — тине Батырхан усал итеп, үҙе хәнйәренә тотонған кеше булды. – Бына мин һине хәҙер...

Шул әҙере йөҙө үҙгәреп киткән урыҫтың күҙҙәрендә ҡурҡыу билдәһе сағылып үтте. Ул ҡапыл тубыҡлана төштө лә ялбарырға тотондо:

— Харап итмәгеҙ инде, туғандар! Ни теләһәгеҙ, шуны эшләрмен, алпауытыма кире тапшыра күрмәгеҙ! Үтенәм һеҙҙән.

Биксәнтәй уның һүҙҙәрен энәһенән ебенәсә башҡортсаға ауҙарҙы.

— Һе! — Байғазы ауыҙын мыҫҡыллы ҡыйшайтты. — Кешенең аҡтыҡ кәзәһен урлап аша ла, өҫтәүенә, туған тип тора. Нисек теле бара тиң... Туған түгел, ҡараҡ һин!

— Ә ниңә яҡшылыҡ менән беҙгә килмәнең, Куприян? — Биксәнтәй ҡаҫҡынға һынап ҡараны. – Изге ниәт менән йөрөгәндәрҙе беҙ этәрмәйбеҙ.

— Ҡурҡтым! Кананикольскийға кире ебәрерһегеҙ, тип ҡурҡтым.

— Шул тиклем ҡурҡырлыҡ унда нимә бар һуң?

— Беләһегеҙме, кеше түгел ул беҙҙең алпауыт. Көнө-төнө эшләтеүе етмәгән, аслыҡ менән интектерә, һыуыҡ бараҡтарҙа мал урынына тота, йәберләй. Ҡыҫҡаһы, торғаны бер залим. Сатана!..

— Ғаиләң бармы?

— Бар ине...

— Аңлашыла. — Биксәнтәй шымтайышып ҡалған ауылдаштарына боролдо. — Раҫты һөйләгәнгә оҡшай был мосафир. Ни эшләтәбеҙ?

— Ышан һин ул кафырға! — Аҡсура икеләнеү белдерҙе. – Ана ла баһаң, ишетмәгән кеше булып ҡылана.

---

[57]*Көнйәлә— ялбыр, туҙған.*

— Урыҫ менән юлдаш булһаң, балтаңды билеңдән төшөрмә, тип ата-бабаларыбыҙ юҡҡа ғына әйтмәгәндәрҙер әле. — Байғазы дуҫын йөпләй һалды. – Башын һантыйға һалып маташа!

– Йүнле әҙәм кеше малына ҡағыламы? Хатта астан үлергә ятҡанда ла! Юҡ, минең был әҙәмгә һис кенә лә һыным теймәй. Күрмәйһегеҙме, күҙҙәре уйнап тора. — Батырхан да үҙ фекерен әйтте. – Беҙҙең араға инеп алыр өсөн яҡшатланып йөрөмәй тиһеңме әле...

— Ярай, әүәл ауылға алып ҡайтайыҡ, унан ҡарарбыҙ. — Шулай ҙа һуңғы һүҙ Биксәнтәйҙеке булды.— Тик был турала әлегә бер кемгә лә өндәшмәй тороғоҙ.

Сикһеҙ асанлығы[58] арҡаһында ғәләмәт һонтор булып күренгән Куприяндың һөйләгәндәренән старшина шуны асыҡлай алды: крепостной крәҫтиән, элекке хужаһының мыҫҡыллауҙарына, йәбер-золомдарына түҙә алмай, күҫәк менән уның башын иҙә һуҡҡан да сығып ҡасҡан икән. Бая, ҡырҙа саҡта, быныһын әйтмәй, йәшереп ҡалдырған, күрәһең, башҡорттарҙың һатып ҡуйыуынан шикләнгән. Әле бына, икәүҙән-икәү ҡалғас, буйтым тынысланып асыла төшкән урыҫтың теле сиселеп, урынһыҙ мәғрәм[59], өҙләкһеҙ туҡмаҡ менән үҙәгенә үткәргән йәзит[60] алпауытты һүкте. Ваҡытынан алда гүр эйәһе булған ҡатынын, ҡайҙалыр һатып ебәрелгән балаларын иҫкә төшөрөп илап та алды.

Ҡасҡалаҡ был яҡтарға жәүзә[61] аҙаҡтарында килеп сыҡҡан булған. Осраҡлы ғына бер йәйләүгә тарып, оҙон йәй буйына шул тирәлә ҡуна ятып, үлмәҫлек кенә тамаҡ ялғап йөрөгән. Көҙ яҡынлашып, кешеләр йәйләүҙән ҡайта башлағас, шуларға эйәреп ауылға килгән. Ташландыҡ айыу өңөн табып, шунда ҡыш сығыр өсөн әҙме-күпме булһа ла аҙыҡ әҙерләп ҡалыу маҡсатында, йәнәһе, ауыл кешеләренең ризыҡтарына ҡул һуҙырға мәжбүр булған. Аласлауға һалынған ҡорот, емеш-еләк ҡағы, сейә ҡушып иретелгән һары май, ҡаҡланған ит – барыһын да ташыған. Һуңға табан ваҡ малға ла тейә башлаған. Йән аҫрарға кәрәк бит нисек тә.

— Ауылға барып баш орорға бер нисә тапҡыр уҡталып та ҡуйҙым, — тине Куприян һүҙ аҙағында. — Тик, нишләптер, һуңғы мәлдә кире уйлар булдым. Әлеге шул шөбһәләнеү инде. Тотоп алһалар, һис шикһеҙ, ҡабырғанан ырғаҡлы дарға аҫып ҡуясаҡтар.

Йәй буйына барыһын аптыратҡан сәйер юғалыуҙарҙың сере ошолай анһат ҡына асыҡланды ла ҡуйҙы. Шулай ҙа старшина был турала ауыҙ тултырып ауыл халҡына һөйләмәй торорға ҡарар итте. Кеше уйында ни барын кем белә?.. Уғрыға үс һаҡлап, ҡон көҫәп йөрөмәһен өсөн, Батырхан һунарсыға быуаҙ кәзә биреп, күңелен табырға кәрәк булыр. Айырылмаҫ ҡушағалар Аҡсура, Байғазы менән дә һөйләшер. Улар – ышаныслы егеттәр, Куприянды — кеше үлтереүсе ҡасаҡты – һатмаҫтар.

— Ярай. — Старшина урыҫтың ҙурайған күҙҙәренә мәғәнәле итеп ҡараны. — Хәҙер инде Куприян тигән исемде оноторға тура килер. Бөгөндән һинең исемең Килдеғол булыр. Ә яңы фамилияң — Ғәлимйәнов. Әлегә кеше күҙенә салынмайыраҡ минең йортта йәшәп торорһоң, кәрәк сағында ваҡ-төйәк эш менән шөғөлләнерһең. Мәгәр берәй яманлыҡ ҡыла ҡалһаң, ҡара уны, аяу көтмә.

---

*[58]Асанлыҡ — асҡаҡ, ныҡ яшыҡ.*
*[59]Мәғрәм — штраф.*
*[60]Йәзит — палач.*
*[61]Жәүзә — май айы.*

— Рәхмәт, старшина, ғүмер ахырымаса һиңә бурыслы булып ҡалырмын. — Биленән һығылған Куприян-Килдеғол башын ергә орҙо.

— Ә бына быныһы ярамаç. Белеп ҡуй, башҡортта бөгөләп-һығылыу тигән нәмә юҡ. Ҡолдар ғына баш эйә, ә һин хәҙер беҙҙеке, тимәк, ҡол түгелһең. Аңланыңмы? — Биксәнтәй ҡасаҡты йәнә иçкәртте. — Бар, үҙеңде тәртипкә килтер. Был көйө йөрөһәң, өçтәүенә, ярамһаҡланып, үткән береһенә баш эйеп торһаң, шунда уҡ тотоп алырҙар. Үҙеңде лә харап итерһең, беҙгә лә бәлә килтерерһең.

Куприян-Килдеғол йылмайып эйәк ҡаҡты, йәнәһе, ул барыһына ла төшөндө. Ҡаршыһында тороусының алсаҡ йөҙөнә ҡарап, уның ҡаçта әҙәм түгеллегенә тамам ышанды һәм, ниһайәт, тынысланды.

Тәү башта һирәк-һаяҡ ҡына күренгеләп ҡалған Килдеғол ҡыш үтеүгә ауылдың үҙ кешеһенә әйләнде. Башҡалар ыңғайына мал-тыуар ҡараны, терәкһеҙ сана менән утын-бесән ташыны. Өс-дүрт ай үтеүгә шөйлә башҡортса һупаларға ла өйрәнеп алды. Ҡиәфәтенә ҡарап Килдеғолдоң кем икәнлеген һиҙенһәләр ҙә, һаҡмарбаштар өндәшмәй ҡалыуҙы хуп күрҙе. Ә ҡырҙан килеп, темеçкенеп йөрөүселәргә бай, ул минең өс туған ағайым, тип яуап бирҙе. Йәнәһе лә, Бөрйән яҡтарында тормошта булып, хәҙер инде үлеп ҡалған өләсәһенең ҡустыһы. Таулы-урманлы Бөрйәнгә ошо уйҙырманы тикшерер өсөн берәүҙең дә барып йөрөмәçен Биксәнтәй белә. Ә ышанып етмәгәндәргә:

— Күрмәйһегеҙме ни, күҙҙәребеҙгә ҡәҙәр оҡшап тора! — тип ебәрә. – Икебеҙ ҙә күк күҙле лә баһаң.

Һәм ошо шаяртыу ҡатыш төплө дәлил барыһын да ышандырып, тынысландыра ла ҡуя. Шулай итеп, күп тә үтмәçтән, урыç Куприян башы-тояғы менән башҡорт Килдеғолға әйләнде лә ҡуйҙы.

## III. Бүре өйөрө

*Кантонда кантон килә, тиҙәр,*
*Килгән кантондарҙан ҡаҡшаныҡ.*
*Яуыз кантондарҙы ҡуя икән*
*Рәсәй генә тигән батшалыҡ.*

(Халыҡ йырынан)

Яҙғы өҙәрем юлдың соҡор-саҡырлы урғылйын таçмаһы буйлап ҡатҡан мәте киçәктәренә, эреле-ваҡлы таштарға бәрелеп-һуғылыуҙан туҡтауһыҙ сайҡала-сайҡала, аçалы[62] көймә килә. Йомшаҡ, еңел көймәгә албалап егелгән төрлө төçтәге тирләгән аттар һирәк-һаяҡ бышҡырышып ҡуя. Сибек кәүҙәле, ас яңаҡлы, йонсоуы йөҙөнә сыҡҡан урта йәштәрҙәге күсер көймә ыңғайына бәүелеп йоҡомһорап бара.

Көплө көймә эсендә икәү. Береһе — хәрби, икенсеһе штатский кейемдә. Ике башы ике тарафҡа ҡарап торған йәмһеҙ сәмреғош кокардалы папаха кейгән, алтын ялатылған эполеттары ялтырашып, күкрәгендәге тәреле ордендар бер-береһенә ҡағылыуҙан сың-сың килеп тәҙрә уйымынан тышты күҙәтә барғаны — подполковник Тимашев. Юғары дворян ҡатламынан ул. Ярайһы ғына эре ер биләүсе. Ноғай даруғаһы Тамъян олоçо башҡорттарынан ҡайҙа алдыҡ, ҡайҙа үçсүәсә юлы менән Һаҡмар ҡушылдығы Йыланша йылғаһының ундырышлы үҙәне буйҙарын арзан хаҡҡа һатып алып, “үҙ” биләмәләрендә заманына күрә ҙур ғына Никольское ҡасабаһына нигеҙ һалған ҡомағай Иван

[62] *Аçалы — семәрле.*

Лаврентьевич яңы ерҙәр, яңы табыш көҫәп китеп бара. 1755 йылда алымһаҡришүәт ҡөҙрәте менән Ырымбур таможняһы директоры итеп тәғәйенләнгәндән һуң, ул әҙәм көлкөһө баһаға иң уңайлы, иң уңдырышлы баҫыуҙарҙы, асыҡтарҙы еңел генә "һатып алып", биләмәләрен күпкә арттырыуға иреште. Бөгөнгө көнгә уның 156 мең дисәтинәнән ашыу ере, 6 мең тирәһе крепостной крәҫтиәне бар. Теүәл һандарын үҙе лә белмәй, шул сәбәпле "тирәһе" тип кенә һөйләй. Бөтә булған ошо байлыҡҡа ул — хәҙер подполковник Тимашев — 1751 йылда, Шүшмән ландмилицияһы полкында капитан дәрәжәһендә хеҙмәт иткән сағында, нигеҙ һалды. Ул мәлдәрҙә ландмилиция офицерҙары һәм һалдаттары бер аҙ ер киҫәге менән тәьмин ителә ине, әммә хеҙмәтте үҙ иҫәбенә алып барҙы. Ана шунда башланды ла инде Тимашевта мөлкәт туплауға ынтылыш. Нәфсе тигәнең – бигерәк яман нәмә: әле ҡасан ғына хыялында булыу түгел, төшөнә лә инеп сыҡмаған ғәйәт ҙур күләмдәге майҙандарҙы биләп, меңәрләгән йәнгә хужа булыуына ҡарамаҫтан, йәше инде ырап барған И. Л. Тимашевтың һаман шул ер, дәрәжә, шөһрәт, дан тип йөрөп ятҡан көнө.

Артығын асылып бармаһа ла, Иван Лаврентьевич әлеге сәфәренән ифрат ҡәнәғәт. Ниһайәт, уны ла отставкаға ебәрелгән ҡарт офицер ише оноттолар тигән мәлдә, юҡ, улай ғына ла түгел, хәжәте бөткәнлектән сығарып ташланған ғәмәлгә яраҡһыҙ иҫке әйберҙәй күҙгә лә элмәй башлаған ерҙәренән, уйламағанда-нитмәгәндә ҡапыл ғына иҫтәренә төшөрөп, үҙенә күрә мөһим ошо эште ышанып тапшырҙылар. Тимәк, күпте күреп, унан да бигерәк күпте белгән тәжрибәле подполковниктың кәрәге бар. Хушлашҡанда тултырылған тоҡ ише ҡатынының: "Зинһар, һағыраҡ була күр инде, Ваня, ул ҡырағай халыҡтан барыһын да көтөргә була", — тип ҡат-ҡат киҫәтеүенә лә әллә ни иғтибар биреп торманы. Күңеле уның тыныс. Көймәһенең алдынан, иртәуылда[63], байтаҡ ара һаҡлап, ышаныслы үә ыраҫлы хауас[64] бара. Уныһынан аҙ ғына ҡалышып, асыҡ төҫтәге сыбар тыу аҫтында, төрлөсә ҡоралланған төп сиреү килә. Хатта биш көбәк эреле-ваҡлы туптары ла бар. Уларына йәҙрәләр тейәлгән ауыр ылауҙар эйәргән.

Тимашев үҙен ифрат ҙур һәм алыштырғыһыҙ сардар урынына хис итә. Эйе, ни бары бер ай эсендә ашыҡ-бошоҡ туплап алған ала-ҡола ғәскәре алдында ул бөгөн вәли[65]. Әйтерһең дә, оло төмән[66] башында килгән олпат паша. Бәғзе берен алдап, байтағын үәсүәсәләп, ә күпселеген өркөтөп-ҡурҡытып тигәндәй, сиреүен ул алты йөҙ илле кешегә еткерә алды. Шул иҫәптән тимер һауыт-һайман[67] кейеп, багинетлы[68] бер атар мылтыҡ, төҙ ҡылыстар менән ҡоралланған казактары өс йөҙ илле кеше. Бынан тыш ҡайһыһы подполковниктың ятаған, ҡайһыһы һайҙа-һөңгө тотҡан, эйәренә бөлдөргөлө киҫтән элеп, арҡаһына ҡалъян артмаҡлаған ике йөҙ Ҡарғалы татары менән йөҙҙән ашыу ҡалмығы ла бар. Һуңғыларын хәйләкәр Тимашев, бушлай ер бүләм, өлөшләтә һалымдан ҡотолтам, болалар баҫылып, ил-йорт тынысланғас, башҡорттар өҫтөнән хакимлыҡ бирәм, тип үҙ яғына ауҙарған.

Надворный советник Иван Тимашевты бынан ике ай ярым элек, бая әйтелгәнсә, уйламағанда-көтмәгәндә ашығыс рәүештә генерал-поручик Рейнсдорп

*[63]Иртәуыл — авангард.*
*[64]Хауас — тоғро хәрби төркөм.*
*[65]Вәли — ҙур түрә.*
*[66]Төмән — ун меңлек ғәскәр.*
*[67]Һауыт-һайман — кольчуга.*
*[68]Багинет — штык.*

саҡыртып алғайны. Подполковник, үҙен Ырымбур далаларының батшаһы тип күргән Рейнсдорптың ҡаты фарманы буйынса, Йылайыр нығытмаһында яҙа-йоҙа алай туплай һалып, Башҡорт тауҙарын ярып аҡҡан Аҡһыу[69] буйҙарына, боласылар тарафынан һаман ҡыҫырыҡлана барған хөкүмәт ғәскәрҙәренә ярҙамға ашыға. Һуңғы арала баш күтәреүсе бунтовщиктар артыҡ ҡоторона башланы. Насар ғына ҡоралланыу өҫтөнә, шыпа наҙан үә тырымтырағай булыуҙарына ҡарамаҫтан, регуляр ғәскәрҙе өтөп алып баралар. Бигерәк тә Әүжән — Иҙелбаш[70] тирәһендә, Әтәс тауы[71] янында хәлдәр ҡатмарлы. Ырымбурҙы алырға хәленән килмәгәнлектән ныҡ енләнгән Емелька Пугачев, ҡарашын шул яҡтарға йүнәлтеп, ҡырмыҫҡаға таяҡ төрткәндәй, ошо төбәк халҡын ҡуҙғытып ебәрҙе лә, ҡорал тота алғандайҙарҙың барыһын ҡотортоп, аяҡҡа баҫтырҙы.

Подполковник Тимашевҡа “дағи-самозванец Пугачевтың уң ҡулы булып йөрөгән, хатта яуыз боласы ихтыяры менән полковник дәрәжәһе алған Салауат Юлай улынан айырыуса һаҡ булырға, мөмкинселек килеп сыға ҡалһа, уны шунда уҡ ҡулға алып, бик аҫтына ҡуйырға” тигән йәшерен әмер бирелде. Унан тыш, тәкәллефләнеп, саҡ ҡына ҡаршылыҡ күрһәтергә маташыусыларҙы ла аяп тормаҫҡа ҡушылды. Хәйер, ҡушылмаһа ла, Тимашев бит йыуған әҙәм түгел. Байлыҡ, дан-шөһрәт, дәрәжә хаҡына әсәһен дә һатып ебәрер бәндә ул.

Подполковник белемле генә буйтым йәш кеше Александр Миргородский тигән буйҙаҡ егетте ярҙамсы итеп үҙе һайлап алды. Хәрби эшкә ҡыҫылып, тейер-теймәҫенә аҡыл өйрәтеп ултырмаһын өсөн, штатскийҙы артығыраҡ күрҙе. Уныһының кәсебе — Тимашевтың һәр һүҙен ҡағыҙға теркәп, документтарҙы үҙ ваҡытында тултырып барыу, подполковник аңлап етмәгән харита[72] менән эш итеү һәм үткән юлдарының маршрутын һыҙып, тынысһыҙ төбәктәрҙе билдәләп ҡуйыу. Бынан тыш Тимашев, генерал Рейнсдорптың яҡыны, үҙ кешеһе булғанға күрә, алдағыһын уйлап ярамһаҡланыу йөҙөнән, хәрби белеме булмаған Миргородскийға өҫтөнлөк биргән булды. Ҡояшта янып торған ерән сәсле, ҡағыҙ эше аҡ йөҙлө, яшыҡ, һонтор Миргородский ҙа, хужаһына оҡшап, ҡомағай, нәфсел, ваҡай әҙәм. Ә инде боҙоҡлоҡ буйынса унан да арттырып ебәрер. Ошо китеп барыуында ул Тимашев вәғәҙә иткән күҙ күреп, ҡолаҡ ишетмәгән алтын тауҙарына, сикһеҙ-ҡырыйһыҙ уңдырышлы ерҙәргә өмөт бағлап, татлы хыялдарға бирелеүҙән йоҡомһорап ултыра. Шулай ҙа, яҙыу-һыҙыуға артыҡ барымы булмағанлыҡтан, ҡағыҙ эшен ене һөймәгән Тимашевҡа үәкиф[73] писарының һәр ҡағыҙҙы урын-еренә еткереп, аныҡ итеп, ваҡытында тултырып-теркәп ҡуйыуы оҡшай. Бөгөн “Рәсәй именлеге өсөн” ҡылынған, башҡа ваҡытта күҙгә лә эленмәҫ ваҡ ҡына эштәрҙе лә самаһыҙ ҡабартып, шауҡымлыраҡ, яңғырауыҡлыраҡ итеп аҡҡа теркәп барған Миргородскийҙан яңы хужаһы ифрат ҡәнәғәт. Бигерәк тә уның ахырынаса аңлашылып етмәгән, әллә ниндәй һыҙыҡтар, түңәрәктәр, дүртмөйөштәр менән сыбарланған харитала теүәл һәм тиҙ арала хәлдең айышына төшөнөп, аңлатып бирә алыуы һоҡландыра. Иң мөһиме, Тимашевтан күпкә уҡымышлыраҡ та, һәләтлерәк тә булыуына ҡарамаҫтан, йәш кеше үҙен әллә кем итеп тотмай, асыҡ түбәнселек, күҙгә бәрелеп торған ихтирам менән мөғәмәлә итергә тырыша. Хәйер, кәрәк

---

[69]*Аҡһыу — Ағиҙел.*
[70]*Иҙелбаш — Белорет ҡалаһы.*
[71]*Әтәс тауы — Магнит тауы.*
[72]*Харита — карта.*
[73]*Үәкиф — белемле.*

урынында аҫтыртын ғына ялағайланып алырға ла тартынмай. Ҡыҫҡаһы, подполковниктың һалпы яҡтарын яҡшы белә һәм ошоноң менән оҫта эш итә. Оло кешегә йылы һүҙ менән (яһалма булһа ла!) йүкә шына килешә шул. Хәйләкәр Тимашев Миргородскийҙың үҙенә ҡарата эскерһеҙ булмаған мөнәсәбәтен һиҙә, әммә белмәмеш тә күрмәмеш. Сөнки һәр кемгә билдәле: хәйләһеҙ донъя — файҙаһыҙ. Йәш, тәжрибәһеҙ саҡтарында үҙе лә шулай булды ла баһаң! Маҡсатына ирешер өсөн барыһына ла әҙер ине ваҡытында. Ана, был егет тә нәҡ уның йәш сағы. Шунлыҡтан уға асыуланмай ҙа, кенә лә тотмай. Ә ҡырағай башҡорт иленә килгәндә, Тимашев уны ярҙамсыһына ҡарағанда күпкә яҡшыраҡ белә. Белмәҫкә, ярты ғүмере улар араһында үтте. Икмәктоҙлоҡ телдәрен төшөнөү өҫтөнә, аҙмы-күпме ғөрөф-ғәҙәттәрен, йәшәйештәрен дә белә...

— Александр Иннокентьевич, ҡай тирәлә барабыҙ әле? — тип ҡыҙыҡһынып ҡуйҙы иҙрәп килгән Тимашев.

Баҫып барған ауыр йоҡоһон еңә алмай ул яҡҡа ла, был яҡҡа ла сайҡалып ултырған Миргородский, ҡапыл тертләп, сыбар харитаһын йәйә һалды. Һуп бармағын ялтыр ҡағыҙ өҫтөнән йөрөтөп тиҙ арала кәрәкле урынды тапты ла аныҡ итеп:

— Түбә исемле ауылға етәбеҙ, ваше превосходительство! — тине. — Бына хәҙер уң ҡулда ҙур ғына күл асылырға тейеш. Күлдән алыҫ түгел тағы бер ауыл...

— Һаҡмар йылғаһының баштарына күпме ҡала, мой милый? — Күп һүҙҙе яратмаған Тимашев писарын бүлдерҙе.

— Ярты көнлөк юл. — Миргородский йәнә уйлап та тормаҫтан яуап бирҙе. — Юлдарҙың хөртөрәк икәнлеген иҫәпкә алғанда, бәлки, күберәк тә булыр.

Тимашев, ярты көнлөк юлдың нисә саҡрымдай булырын самалағандай, күҙҙәрен ҡыҫа биреп, уйсанланып барҙы. Ошо мәл, көймә тәгәрмәсе ташҡа менеп ҡаты ғына һелкетеп алыуға, подполковниктың өр-яңы бөҙрә папаһаһы иҙәнгә осоп төштө. Миргородский, ярамһаҡланып алыр өсөн тағы бер мөмкинселек килеп сығыуына ҡыуанып, уны йәһәт кенә күтәреп ала һалды ла, ҡаҡҡылап-һуҡҡылап, оло хәстәрлек менән хужаһының ярым пеләш түбәһен ҡапланы.

— Да-а, юлдар алама был яҡтарҙа! — Баш кейемен рәтләп ҡуйған Тимашев йөҙөн һытты. Ә Миргородский, кейеҙ менән көпләнгән көймә ишеген аса биреп, күсергә аҡырҙы:

— Йоҡлап ултыраһыңмы әллә? Күҙең сыҡмағандыр бит?! Юлды ҡараңҡырап, абайыраҡ барырға булмаймы, инәңде!..

— Виноват, вашборд! — Танау аҫтынан мығырҙап ҡуйған күсер, уңайһыҙланып, артына боролдо. — Йонсоуҙан күҙҙәр алара башланы.

Көтмәгәндә хужаһы алдында шулай ҡойроҡ болғап алған Миргородский ифрат ҡәнәғәт ҡалды.

— Күл янынан үтәбеҙ, тинегеҙ бит әле, сынок? — Тимашев ярҙамсыһына күтәрелеп ҡарамай ғына татлы телләнде.

— Эйе. Уң ҡулда терәлеп ята...

— Бараһы еребеҙ йыраҡ, күпме тырышһаҡ та, бөгөн барыбер унда етә алмабыҙ. — Тимашев, ҡапыл уянып киткән кеше һымаҡ, ошондай һығымтаға килде. — Привал яһамай булмаҫ. Үҙебеҙ ҙә йонсоноҡ, сиреү ҙә, аттар ҙа ныҡ арыны...

— Нисек бойораһығыҙ, ваше превосходительство!

Көноҙон килеүҙән нығ талсыҡҡан сиреү үтә күренеп торған таҙа һыулы, ҡап уртаһында ҡыуаҡлыҡ менән ҡапланған йәтеш кенә утрауы күренгән Талҡаҫ күленең көнбайыш ярындағы һөҙәк түбәләс битләсендә туҡталды. Тимашев төндө ошонда, Ирәндек һыртының ҡая таштары ышығында, үткәрергә ҡарар ҡылды.

Яйлы ғына урынға ҙур сатыр ҡороп урынлашҡас та, подполковник сиреү башлыҡтарын саҡыртты. Бер аҙ татарса һупалаған Миргородскийҙы йәнәшәһенә ултыртып ҡуйҙы. Уныһы ҡағыҙҙарын ағас һандыҡ өҫтөнә йәйеп һалды ла, ҡаурый-ҡәләмен рәтләштереп, яҙырға әҙерләнде.

Иң әүәл дала йәнле ҡалмыҡтарҙың йөҙбашы Барсын пәйҙә булды. Уның табаҡ йөҙө йәйелеп китеүгә, ҡыпыс күҙҙәре тағы ҡыҫыла төштө. Аттыҡы һымаҡ эре тештәрен күрһәтеп йылмайғандай итте лә, ҡулын күкрәгенә ҡуйып сәләм биргәндән һуң, дәрәжәһен белеп кенә тәғәйен урынға барып ултырҙы. Татар сиреүе башлығы, нескә мыйығы һыҙылып яңы беленә башлаған Өстөкәй менән көрәк һаҡаллы, кәкре танаулы казак атаманы Ефим да оҙаҡ көттөрмәне. Һуңғыһының ялбыр ҡаштары аҫтындағы аҡһыл күҙҙәре уҫал яна, шунлыҡтан ҡарашы ла әллә ҡалай хөштөмһөҙ. Күптәр ундай ҡараштан тиҙерәк ҡотолоу яғын ҡарай. Тимашев та, ана, ытырғанып ҡуйҙы...

— Хоҙай рәхмәте менән юлыбыҙ ошолай артабан да ыңғай ғына дауам итһә, иртәгә ниәтләп сыҡҡан тарафтарыбыҙға — Һаҡмар йылғаһының иң үрҙәренә барып етәсәкбеҙ. — Тимашев үҙенә текәлеп шым ғына ултырғандарҙы сиратлап күҙҙән үткәрҙе. — Ярайһы уҡ яҡшы ҡоралланған ҙур алай[74] менән үтеп, беҙ юлыбыҙҙа осраған ошо тирәләге ауыл халыҡтары күңеленә хәүеф орлоҡтары сәсеп барырға тейешле. Төп маҡсатыбыҙ: әлегә ҡапаҡлап ҡына булһа ла кешеләр йөрәгенә шом һалып, урындағы ҡырағайҙарҙы тынысландырыу, шуның менән кәрәкле тәртип урынлаштырыу.

Подполковник ҡоро ҡапаҡ-кәпәренеү менән башҡорттарҙы өркөтөп булмаясағын яҡшы төшөнһә лә, йыйылыусылар алдында үҙенең айбарлығын күрһәтеп, сардарҙарының күңелен күтәреү өсөн шулай һөйләнгән булды. Ә тегеләре, һуғышсан истәктәр[75] менән тәү тапҡыр осрашыуҙары түгел икәнлегенә ишаралағандай, мыйыҡ аҫтынан йәшертен-мыҫҡыллы йылмая биреп, ихлас тыңлаған кеше булып ултырҙылар.

– Үҙегеҙ күрҙегеҙ, бая үтеп киткән ауылдарҙа малайы ла, ҡарты ла, хатта бисә-сәсәһенә тиклем йоҙроҡ төйнәп, янап ҡалды. Был яғына ла шулай буласаҡ, – тип дауам итте Тимашев. – Ул белекһеҙҙәрҙән изгелек көтөп, миһырбанлыҡ өмөт итергә ярамай. Шулай ҙа беҙҙең ниәт-маҡсатыбыҙ ҡырылышүлтереш түгел... Хәҙергә... Был тирәнең халҡы әлегә тәғәйен генә баш ороп, яһил самозванецҡа ҡушыла һалып бармай. Шуның өсөн әлүк баштан ғәмдең асыуын ҡабартмай тороу хәйерле булыр. Мөҙҙәте еткәс – ә мин уның тиҙ араларҙа килеп етеренә нығ ышанам – Һаҡмар буйы әһелдәренең илдәре лә, ерҙәре лә тулыһынса беҙгә ҡаласаҡ. Туҡтауһыҙ бола ҡуптарып, батша ғали йәнәптәренә ризаһыҙлыҡ менән ҡаршы сыға торғас, үҙҙәрен үҙҙәре бөлдөрә бара бит улар. Был юлы ла күтәрелә ҡалһалар...

Подполковник әйтергә теләгәнен әйтеп бөтөрмәй туҡтап ҡалды. Хәйер, уның тел төбө шул көйө лә аңлашыла ине.

[74]*Алай — полк самаһы ғәскәр.*
[75]*Истәктәр (бор.) — башҡорттар.*

— Хөрмәтле подполковник, истәктәрҙе әллә ҡурҡытып-өркөтөп кенә баҫмаҡсыһың инде? Ай-һай, килеп сығырмы икән... Улай анһат ҡына булғанда был ерҙәрҙә әллә ҡасан уҡ әрәсәйҙәр ултырыр ине! — Йөҙө ҡарала көйөп ултырған дәү Ефим, ярһып, аяғүрә баҫты. — Йомшаҡһың, подполковник. Ай, йомшаҡһың!..

— Үрәпсемә, атаман! — Тимашев хәлдәрҙе ҡабаландырырға яҫҡынған өлгөрйөм казакты тынысландырырға ашыҡты. — Юҡҡа юрап алыш-ҡыйралыш көҫәмәй тор. Уныһы һинең теләкһеҙ ҙә ҡасмаҫ. Шунда уҡ тота килеп башты утҡа тыҡмайыҡ, һағыраҡ ҡыланайыҡ. Бары шул ғына. Әүәл был тирәләге башҡорт ҡәүеменең кәйефен самалап, уй-ниәттәрен ҡапшап ҡарайыҡ.

— Полковник раҫ әйтә: һаҡланғанды Хоҙай үҙе һаҡлай. — Йәмерәйеп ултырған Барсындың да тауышы сыҡты. — Беҙҙе яллағанда, ҡырылыш, ҡан ҡойош булмаясаҡ, тип вәғәҙә иттеме, итте. Шуның өсөн, атаман, йоҙроғоңдо алдан болғама. Шуны бел: бында һин бер үҙең түгел, күмәкләп хәл ҡылайыҡ.

— Һа-һа-һа! Күмәкләп! — Тәкәббер Ефим Барсынға төртөп көлдө. — Бәлки, паша ла булырһың әле беҙгә, ә?! Һа... һа...

— Ә ниңә, тәғәйенләп ҡушһалар, булырмын да. — Барсын тынып ҡалды.

— Йөҙ бөртөк йолҡош һыбайлыңа баш була белһәң дә яраған! — Ефимдың тел төбөндә яуҙашын кәмһетеп, асыҡтан-асыҡ мыҫҡыл итеү ярылып ята ине. Быны күреп ултырған Өстөкәй түҙмәне, аҡылһыҙ атаманға секерәйтә ҡарап, теш араһынан һығып сығарҙы:

— Ялланмыш булараҡ, ҡалмыҡтарҙан көлөүең ниндәйҙер дәрәжәлә миңә лә ҡағыла... Кешеләр менән идара итәһең, һүҙҙәреңде уйлаңҡырап әйт, Ефим.

— Ялланмыш, имеш! Башҡорттар – һеҙҙең ут күршеләрегеҙ. Барығыҙ ул сағында, ана, туғанлашығыҙ, әшнәләшегеҙ, әләйһәң! Улар менән ҡуша бер юлы үҙегеҙҙе лә...

— Биғәйбә. Кәрәгебеҙ булмағас, ниңә ялланығыҙ һуң?

—Эйе, кәрәгегеҙ һуҡыр бер тин! — Ефим, һаман мәғәнәһеҙ рәүештә һөйләнеп, йөҙ башлыҡтарының зитына тейҙе. — Ышанып кем яллағандыр һеҙҙе, белмәйем, әммә шуныһын асыҡ әйтә алам: тәүге алышта уҡ яу ҡырын ташлап ҡасасаҡһығыҙ...

— Әфәнделәр, урынһыҙ бәхәсте бөтөрөгөҙ! — Тимашев, ҡыҙа барыусыларҙы тынысландырмаҡ булып, һүҙгә ҡыҫылды. — Һөйләшеүҙе бөтөнләй икенсе юҫыҡҡа борҙоғоҙ ҙа ебәрҙегеҙ. Ә һин, атаман, туҙға яҙмаған хәбәр һөйләп наһырға тейеп ултырыуың етмәгән, хөсөт таратып маташаһың. Һүҙ бит кемдең кемгә кәрәклеге, кемдең мосолман, кемдең правоверный икәнлеге хаҡында бармай. Әле беҙ нисек итеп Рәсәй ерендә тәртип урынлаштырыу тураһында кәңәшләшергә йыйылғанбыҙ. Ҡыҙыулыҡ үә алабарманлыҡ менән, уйламайса, мәғәнәһеҙ эш итһәк, йүнле бер нәмә лә ҡырып булмаясаҡ. Шуны аңлағыҙ: дошман күп һанлы һәм көслө. Өҫтәүенә, ул бойондороҡһоҙлоҡ өсөн көрәшә...

— Дошман?! — Ҡыҫыҡ күҙҙәре һиҙелерлек түңәрәкләнеп киткән Барсын Тимашевты тупаҫ рәүештә бүлдерергә батырсылыҡ итте. — Иштәктәр беҙгә дошманмы ни? Бер илдә, бер ҡыйыҡ аҫтында көн иткән халайыҡтар берберейһенә дошман була аламы?

Уйламайыраҡ ыҫҡындырыуын тойоп, аптырап ҡалған Тимашев үҙен тиҙ генә ҡулға ала алманы.

– Кәрәккән-кәрәкмәгәнгә бола сығарып ятҡандары, хәҙер, ана, самозванецвор артынан эйәргәндәре, һинеңсә, дошман булмай, кем була? — Ошоғаса

шым ғына яҙышып ултырған ҡыян Миргородский һорауға ҡаршы һорау ҡуйҙы. — Әлбиттә, барыһы ла дошман түгел.

— Вот, вот. — Ауыр хәлдән сағыштырмаса анһат ҡотолоуына эстән генә ҡыуанып иркен тын алған подполковник оло ихтирам менән наибына[76] күтәрелеп ҡарап ҡуйҙы. — Дөрөҫ әйтә Александр Иннокентьевич, башҡорттарҙың да төрлөһө бар. Барыһы ла хас дошман түгел. Араларында верныйҙары ла табыла.

— Нимәһенә тылҡыйһың әле шул дала ҡамғаҡтарына, подполковник? Башҡортто улар һинән-минән яҡшыраҡ белә, — тип ҡырт киҫте Ефим. — Байлыҡтан, ерҙән, башҡа болдан һис баш тартмайҙар, ә күршеләре менән араларын боҙорға теләктәре юҡ, шөрләйҙәр.

Атамандың һуңғы һүҙҙәре Өстөкәйҙең сәменә тейҙе.

— Хаҡ әйттең, атаман, — тине ул, көләмһерәп. — Күршеләр менән һәр кемдең татыу йәшәйһе килә. Тиктомалға ҡыҫылып, ара болғап йөрөүселәр булмағанда йәшәр ҙә инек...

Аҫтыртын кинәйәне аңлаған Ефим, айбарланып, Өстөкәйҙең түшенән бөрөп алды.

— Һин! Ҡапыс! Һаман үҙеңдекен ләпелдәйһең? Ҡырағайҙарҙан ҡурҡаһың икән, тураһын әйт! Әйт һәм барып та йөрөмә! Дүрт яғың ҡибла! Тинтәк юлдаш хас дошманға ҡарағанда мең тапҡырға хәүефлерәк. Һинһеҙ ҙә йүгәнләрбеҙ башҡорттарҙы!

— Аһ! Ул бит асыҡтан-асыҡ мыҫҡыл итмәксе! — Барсын ағарынып китте. – Былай бармай, подполковник. Ана һөтө менән кермәгәнде ҡай саҡ тана һөтө менән кертеү кәрәк...

Барсындың тел төбөнә шунда уҡ төшөнөп алған Өстөкәй Ефимдың беләгенән тотоп, ҡулын шаҡарыуға, ытырғаныс итеп һөйәк шытырлағаны ишетелде. Еңмеш казак, ыңғырашып, бармаҡтарын яҙҙы.

— Һөйләшә белмәү өҫтөнә, ҡулдарыңа ирек ҡуяһың. — Өстөкәй тыныс күренергә тырышты. — Был ҡыланышың беренсе һәм һуңғыһы булһын, ишеттеңме? Юғиһә...

— Юғиһә, ни эшләтмәксеһең? — тип ыҫылданы тәкәббер Ефим.

— Күреп торам, атаман, һине сиреү башына һайлап ныҡ яңылышҡанбыҙ. — Ефимға ҡалҡып ҡарағыһы ла килмәгән подполковник Тимашев, абайламаҫтан баҡа ҡапҡан кешеләй, йөҙөн һытты. — Ошондай ауыр, хәл иткес мәлдә, бергә-бергә, татыу булыу урынға, изге эшкә аяҡ салып маташаһың. Ул ғына ла түгел, көсөргәнеш өҫтәп, тәртипте ҡаҡшатаһың. Бел, тәгәрмәскә таяҡ тығырға ирек ҡуймам!..

— Шулаймы ни?! — Ефим күҙҙәренән ут сәсте. — Һин дә ошо ауараҡтар яҡлымы, подполковник? Изге эш, имеш! Тыныс ҡына йөрөгән һарыҡ көтөүен туҙҙырырға сыҡҡан бүре өйөрө һинең сиреүең! Шул йыртҡыстарҙан бер ере менән дә айырылмай, белгең килһә!

— Молчать! — Ғәҙәттә сабыр, тотанаҡлы Тимашев, һөмһөҙлөктөң бындайын күтәрә алмайса, ҡысҡырып ебәрҙе. — Үҙеңде ҡулға ал! Әҙәп һаҡлай белеү кәрәк, Боюнов! Ошо һүҙҙәрең менән ғәскәр араһында хөсөт таратып, ҡотҡо сәсеүеңде аңламайһыңмы ни? Бик яҡшы аңлайһың! Осонма, Ефим, минең һиңә генә көсөм етер...

— Ҡапаҡлайһыңмы?

---

[76]*Наиб — урынбаҫар, ярҙамсы мәғәнәһендә.*

— Ҡапаҡламайым, ә киҫәтәм. Ҡаты киҫәтәм! Әлегә ғәскәр башлығы – мин. Теләйһеңме-теләмәйһеңме, буйһонорға тура килер. — Тимашев бер аҙ тынысланғандай булды. — Дөрөҫ, һәр төрлө әтрәгәләм-артмыштарҙы[77] кем яратһын – уныһы раҫ. Башҡорттарҙы ла аңларға була, тик көнө ул түгел. Бөгөн беҙ бөйөк батшабикәбеҙ хаҡына барыһын да эшләргә тейеш. Был яғына милләткә, бигерәк тә дингә ҡағылышлы үҙ-ара низағтарҙы бөтөрөүегеҙҙе талап итәм. Ишеттегеҙме, талап итәм?! Кем дә кем тыңламай — хәрби яуаплылыҡҡа тарттырыласаҡ.

Ана шулай подполковник Тимашевтың тәүге “хәрби кәңәшмәһе” ул теләгәнсә килеп сыҡманы. Аҡылы теүәл булмаған һымаҡ күренгән Ефимдың ҡыланышы уның күңелендә ауыр һәм икеле-микеле тойғолар ҡалдырҙы. Ошоларға өҫтәп Миргородский ҙа ҡыҙыҡ ҡына һүҙ ҡуҙғата биреп ҡуйҙы.

– Ә һеҙ беләһегеҙме, хөрмәтле подполковник, – тине ул ниндәйҙер сәйер тон менән, – 1755 йылдың 15 майы көнөндә, йәғни тап әлеге мәлдә, ошо тирәнең Этҡол, Әмин, Сураш, Темәс, йәнә лә Хоҙайбирҙе мулла ҡотҡоһона бирелгән йыйын әтрәгәләмдәре был яҡтарҙың аҫыл таштарына ымһынып килеп, Талҡаҫ күле буйында ялға туҡтаған Егор Брагин әфәндене хауасы-ние менән ҡырып һалған.

– Шунан? Уның менән нимә әйтмәксеһең, Александр Иннокентьевич? – Тимашев ғәжәпһенде.

– Мин былай ғына, тарих һабаҡтарын хәтергә төшөрөп ултырам. Әйткәндәй, ул аяныслы ваҡиғалар тап ошо урында, бына әле беҙ торған ерҙә, булған. Беҙ Брагин ҡаны ҡойолған тупраҡты тапап йөрөйбөҙ...

Ярҙамсыһының йәшертен мәғәнә һалып әйтелгән һүҙҙәренән һуң подполковник күңеленә аңлайышһыҙ шом инеп ояланы. Бая әйтмешләй, йыйын әтрәгәләмдәргә ышанып хәйерһеҙ сәфәргә сыҡтымы әллә ысынлап та? Теләһә ҡайҙан йыйылған инабатһыҙ ҡырҡ ата балаһына таянып булырмы алда? Әллә кире боролорға ла ҡуйырғамы? Ә офицер намыҫы? Юҡ! Артҡа юл юҡ! Кире боролғансы, боласылар менән алышып баш һалыуың мең артыҡ. Унан – генерал Рейнсдорптың вәғәҙәһе... Шул тиклем байлыҡтан, шәп киләсәктән үҙ иркең менән нисек баш тартмаҡ кәрәк?

Бер-береһенә асыу тотоп, асыу ғынамы, асыҡтан-асыҡ кенәләрен эстәренә йотоп таралышҡан сардарҙары подполковникты ныҡ хафаға һалды. Баштараҡ үҙен мәртәбәле вәли урынына хис иткән Тимашев, бөгөн килеп, аумаҡай ғәскәре алдында әллә ни оло мансафы[78] юҡлығын аңланы. Шүктә командирҙар менән ошондай хәтәр юлға сығыуына үкенә биреп тә ҡуйҙы, тик һуң ине инде. Боҙ ҡуҙғалған, уны хәҙер туҡтатып булмай.

Сатырында яңғыҙы ҡалғандан һуң оҙаҡ ҡына уйланып ятҡас, самаһыҙ ҡыҙырас[79] атамандан нисек тә ҡотолорға кәрәк булыр, тигән ҡарарға килде. Барсын менән Өстөкәй ҙә казактың мыҫҡыллы һүҙҙәре менән оятһыҙ ҡыланышын күңелдәренә бикләп ҡуйҙы. Ҡаҫта эсле бер йолҡош атамандан кәмһетелеп тормаға...

Таң беленер-беленмәҫ уйнап ебәргән борғо тауышы тын Талҡаҫ өҫтөн тибрәтеп, һил Ирәндек буйҙарын һиҫкәндереп уҙҙы. Ныҡ йонсоуҙан йоҡоһо туймаған ала-ҡола сиреү үтә ығыш ҡуҙғалды. Йыуынып-сайынып, өҫтәрен рәткә килтергәндән һуң тамаҡ туйҙырып, ат-ужаларын йыйнағансы байтаҡ

---

[77] *Әтрәгәләм-артмыштар — килмешәк, сит кеше.*
[78] *Мансаф — хөрмәт, абруй.*
[79] *Ҡыҙырас — ҡыҙыу, тиҙ көйөп барыусан.*

ваҡыт үтте лә китте. Түҙемһеҙлеге йөҙөнә сыҡҡан Тимашев Миргородскийға ғәскәрҙе тиҙерәк теҙергә бойорҙо. Ахырҙа сиреү алдына сығып:

— Дуҫтарым минең! — тип сыйылдап ебәрҙе. Иртәнге йоҡолары әле таралып өлгөрмәгән кешеләр, ғәжәпләнешеп, бер-береһенә ҡарашты: ҡайһы арала дуҫ булып киткән улар Тимашевҡа?! — Иге-сиге күренмәй, йәйрәп ятҡан дала артта ҡалды. Бөгөндән, ана, хәүеф-хәтәр тулы урман, ҡая ташлы тау ҡыраздары башлана. Унда һәр ағас төбөнән, һәр таш ышығынан ҡурҡыныс янай. Шуның өсөн дә берҙәм булайыҡ, һаҡ булайыҡ, дуҫтар. Йөҙ башлыҡтарына белдермәйсә ситкә китеп, дөйөм тәртиптән рөхсәтһеҙ тайпылыш булырға тейеш түгел. Бары төркөм менән генә йөрөргә тырышығыҙ. Яңғыҙ-ярым ҡалдыңмы — был һәләкәт. Үҙ-ара һүҙгә килешеү, ҡапма-ҡаршылыҡтар хаҡында ла онотоғоҙ. Шуны аңлағыҙ: арабыҙҙа татыулыҡ менән килешеп эш итеү юғында ҡырағайҙар өсөн беҙ сүп кенә. Беҙ бөйөк Рәсәйҙе һаҡлап ҡалырға, уның киләсәген бөгөн тәьмин итергә бурыслы. Изге эш өсөн алға, уландарым! Хоҙай һеҙҙең менән!

Тимашевтың ҡыҫҡа, әммә ярайһы уҡ ялҡынлы телмәренән һуң мылтыҡлы казактарҙан торған бер төркөм иртауыл ебәрелде. Ул күҙ күреме ер киткәс, уртауыл ҡуҙғалды. Тәгәрмәстәр шығырланы, аттар бышҡырышты, һуғышсыларҙың көңгөр-мөңгөр һөйләшкәне ишетелде. Бөтәһе лә әүәлгесә, хәрбиҙәрсә. Сиреүенең хәрәкәткә килгәнен күреп кәйефе арыулана төшкән Тимашев ҡыҙауына[80] менеп ултырҙы. Ҡырҡыу еҫле дегет менән мул итеп майланған көймә, тауыш-тынһыҙ ғына бәүелә биреп, алға – күгәрешеп ятҡан тауҙарға ҡарап ҡуҙғалды...

***

Ошо тирәләге иң бейек һаналған Ҡаҙаҡҡар һағауылында ул көндө ейәне менән Ғәббәс ҡарт тора ине. Ун икенсе йәшен ҡыуған үткер күҙле, сос, мейеһенә мәленән алда зирәклек кергән малай алыҫ Ирәндек ҡуйынында ятҡан Түбә ҡасабаһы яғында күтәрелгән саң бағанаһына шунда уҡ иғтибар итте. Бер килке ҡарап торғандан һуң, көҙөкләнеп, һөрән һалды:

— Олатай, Түбә юлында туҙан ойоҫҡой!

—Туҙан, тинеңме?— Иртәнге сәй мәшәкәте менән булашҡан олатаһы, йәштәрсә баҫып, тамға күтәрелде. — Яңылыш күрмәйһеңме? Ҡойон-фәлән уйнайҙыр...

— Юҡ, ҡойонға оҡшамаған.

— Эйе, бихисап мал көтөүе генә саң-туҙанды шулай борхота ала. — Ғәббәс ҡарт ҡулын ҡаш өҫтөнә ҡуйған көйө оҙаҡ ҡына күҙәтеп торҙо. — Тик һин миңә шуны әйт: был мәлдә ниндәй көтөү булыуы ихтимал?

— Караттар түгелме икән?

— Ул сағында Ҡуянташта, Боғалғорҙа, башҡалары ла шипкерт һалмай ни ҡарап ятырҙар? Әллә үҙҙәре менән бер-бер хәл булдымы?..

Ейәне, гүйә, бабайҙың шулай тигәнен генә көткән – ҡысҡырып ебәрҙе:

— Төтөн сыға, олатай! Ана, иң осло тауҙа!

— Тимәк, боғалғорҙар. Ай-бай, ни сәбәптәндер һуңлаңҡырап шәйләгәндәр хәүефте, — тигән һығымтаға килде ҡарт.

— Ҡараңғыла күрмәй ҡалғандарҙыр.

— Бар, улым, һин дә сытырға ут һал. Йәһәт бул!

Күп тә үтмәҫтән, тирә-йүнгә шом сәсеп, күккә олғашҡан Ҡаҙаҡҡар

---

[80] *Ҡыҙау — кузов.*

түбәһенән дә аҡ төтөн күтәрелде. Елһеҙ, тын иртәлә төтөн башта бағана булып туп-тура өҫкә ҡалҡты, унан, әкрен генә йәйелә барып, ғәйәт ҙур бәшмәк һынына инде. Ғайса, олатаһы ҡушҡанса, һоро дүнәженен эйәрләп тә тормаҫтан һыбай менде лә ауылға осто. Ул арғымағын аҡ күбеккә төшөрөп ҡайтып еткәндә, ауыл инде умарта күселәй ҡайнай ине.

— Ғәббәс ағай уҙағы ҡайтты! — тип хәбәр һалды кемдер. — Тиҙ генә старшина янына бар, Ғайса ҡустым. Шулай тигән ине.

Үҫмер күп ара үтеп тә өлгөрмәне, ҡабаланып килә ятҡан бай үҙе күренде.

— Ни булды, Ғайса улым? — Етер-етмәҫтән төбәшә лә башланы.

—Түбә – Теммәс юлында туҙан күтәрелеүгә, боғалғорҙар төтөн һалды! Олатайым ошоно, ҡайта һалып, һеҙгә әйтергә ҡушты.

— Әллә сиреү киләме?

— Теүәл генә әйтә алмайым, ара алыҫ, шыпа йүнләп күренмәй.

Биксәнтәй эргәһендә аңшайышып торғандарға ысын хәрбиҙәрсә:

— Халыҡты йыя һалығыҙ! Тиҙ булығыҙ!— тип бойорҙо.

Нисәмә йылдар ағышында һағауыл тороуҙарына ҡарамаҫтан, әле бер тапҡыр ҙа шәйләк төтөнө күргәне булмаған кешеләр, ҡоттары алынып, йылдам ғына мәсет алдына йыйылды ла борсолоу менән старшиналарының ни әйтерен көттө. Биксәнтәй һәр ҡайһыһы үҙенсә фараз ҡылыуҙан мәж килеп, өҙлөкһөҙ геүләшкән ғәм алдына сығып баҫты ла, уң ҡулын күтәреп, ишара яһаны. Тынлыҡ урынлашҡас, үҙе лә тыныс күренергә тырышып, һүҙен башланы:

— Ағай-эне! Ҡәримдәштәр![81] Күреп тораһығыҙ, һағауылдан шомло хәбәр килде: Теммәс аръяғында ойоҫкоп туҙан күтәрелгәнен күргәндәр. Өҫтәүенә, Ҡыпсаҡ ҡарауылы шәйләктәренә төтөн һалып иҫкәрткән. Ошоноһо айырата хәүеф тыуҙыра...

Йыйылған кешеләр, бигерәк тә ҡатын-ҡыҙ, ҡурҡышып шау-шыу күтәрҙе. Араларында соролдашып илағандар ҙа күренде.

— Йә, тынысланайыҡ, туғандар! Әлегә теүәл генә бер нәмә лә билдәле түгел. Кем белә, бәлки, йылҡы ҡыуаларҙыр...

— Ҡыпсаҡтар тиккә яр һалмаҫ!

— Үтә тәғәнле тойола был эш.

Берен-бере бүлдереп ҡысҡырышҡан ҡәүем гөж килде. Тауыштың баҫыла биргәнен түҙем генә көтөп алған старшина дауам итте:

— Туғандар! Минең тәҡдим былай: яҙмышты һынап маташмайыҡ, иң кәрәкле әйберҙәрҙе генә йыйнап, Оло ялан ҡарап сыға торайыҡ. Караттар була ҡалһа, артабан Сатраға юлланырбыҙ. Унда эт менән эҙләһәләр ҙә таба алмаҫтар. Ә инде килеүселәр зыянһыҙ икән, кире боролорбоҙ. Теммәстән Һаҡмарбашҡа — ярты көнлөк юл, ашығырға кәрәк. Һәр кем өйлә еткәнсе ауылды ҡалдырып китергә тейешле.

— Алағайымға ғауға күтәрмәйбеҙме икән, Биксәнтәй?.. — Кемдер ҡаршы төшмәксе булғайны, бай уны ҡәтғи бүлдерҙе:

— Теләге булғандар ғына бара, теләмәгәндәргә көсләш юҡ. Тик бер шарт менән... — Ошо урынында туҡталды ла ауылдаштарына һынап ҡарап торҙо: — Китеүселәрҙең ҡайһы яҡҡа юлланғанын бирәү ҙә, хатта күрше ауылдыҡылар ҙа, белергә тейеш түгел. Аңлашыламы?

— Аңлашыла, аңлашыла!

*[81] Ҡәримдәштәр — ауылдаштар.*

— Ниməһен аңламаҫҡа уның!
— Ваҡыт сарыф итеп торғансы ҡуҙғалайыҡ, йəмəғəт!
— Эйе, ҡапылыраҡ булайыҡ.

Халыҡ туҙҙырылған ҡырмыҫҡа иләүендәй ҡайнаны, ығы-зығы башланды. Барыһы ла өйҙәренә ашыҡты. Ауылда ҡалырға теләүселәр юҡ иҫәбендә ине. Ҡалғандары ла йыйын ҡарт-ҡоро ғына.

— Саҡырылған сауын[82] ғына көттөрә ул, саҡырылмағаны хәҙер килеп етер, — тип ҡуйҙы Биксәнтәй, эргәһендә баҫып торған Батырханға боролоп. – Ҡунаҡтың көтөлмәгәне әрһеҙ була...

— Бағиҙарға[83] ҡаршы ебәрелгән армайҙар[84], күрәһең, — тине уныһы, әсенеп. — Ҡотолор көн булырмы шуларҙан-юҡмы бер заман?! Һай, наһырға тейҙеләр ҙә баһаң!..

— Бағиһыңмы-түгелһеңме, юлдарында осраһаң, ҡарап та, һорап та тормаҫтар.

— Эйе шул. Бәйләнергә ҡалһа, мең сәбәбен табырҙар.

— Бәләһенән баш аяҡ...

Хәлдең айышына төшөнөп тиҙ арала таралышҡан кешеләр, ҡайһыһы төйөнсөк тотоп, ҡайһыһы тоҡ артмаҡлаған килеш, шул әҙере кире йыйыла башланы. Шарран асыҡ индектәрҙән берәм-һәрәм сыҡҡан ылауҙар, ышыҡланыр урын эҙләп, Уралтау ҡуйынына юл алды. Уларына йәйәүлеләре эйәрҙе. Мал-тыуарҙы бөгөнгә ауылға алып ҡайтмай торорға ҡушып көтөүселәрҙе иҫкәртеү Әхмәтйәнгә йөкмәтелде. Бераубыҡтан шау-шыу баҫылып, урам буйы тып-тын булып ҡалды.

***

Һаҡмар үҙәне буйлап урынлашҡан эреле-ваҡлы ауылдар аша үткән һайын йән эйәһе күренмәгән урамдарҙы, бушап ҡалған йорттарҙы күргән Тимашев нығыраҡ ғәжәпләнә. Нисек инде улай? Уларға әүәлге шикелле бер кем дә янамай ҙа, ҡойма ярыҡтарынан да ҡарап ҡалмайҙар. Башҡорттоң әллә әҙмекүпме аҡылға ултыра башлауы ошомо? Бәлки, алдан тау-таш араһына йәшеренеп, тағы бер этлек ҡылырға йыйыналарҙыр? Ни уйларға ла белмәгән подполковник көтмәгәндә:

— Александр Иннокентьевич, ҡәҙерлем, нисек уйлайһың, берәй ваҡыт тәүбәгә килеп, аҡылға ултырыр көнө булырмы икән был халыҡтың? — тип бартанданы. – Улар бит батшаны бар тип тә белмәй.

— Ҡарап-ҡарап киләм дә шундай һығымта яһап ҡуям, Иван Лаврентьевич, — тип көләмһерәй тегеһе, — был халыҡ әллә ҡасан аҡылға ултырған инде...

— Төшөнөп етмәйем. Йәғни?..

— Быға төшөнөр өсөн ҙур отҡорлоҡ кәрәкмәй. Үтә аҡыллы булғанға күрә, ҡырағайҙар көнәлгәре ҡасып-боҫоп бөткән. Тимәк, ошондай оло сиреүҙең тиктәҫкә йөрөп ятмаҫын яҡшы беләләр.

— Көпә-көндөҙ йәшеренеп ятмаға ни зыяныбыҙ тейгән уларға?

— Әлегә теймәгән...

Тимашев, бер аҙ өндәшмәй барғандан һуң:

— Үтә ҡабартып ебәрмәйһеңме, Александр Иннокентьевич? — тип ауыр һулап ҡуйҙы.

— Һеҙ һораныҡыҙ — мин тураһын әйттем.

---

[82] *Сауын — саҡырылған ҡунаҡ.*
[83] *Бағи — баш күтәреүсе.*
[84] *Армай — каратель.*

— Бәлки, ҡурҡаһығыҙҙыр үҙҙәренән? Йә ҡурҡаһығыҙ, йә ҡыҙғанаһығыҙ.

— Ҡурҡмайым да, ҡыҙғанмайым да, ваше превосходительство. – Иннокентий Миргородский ҡырҡа һуҡты. — Башҡорт милләте үҙен йәлләтә лә, ҡыҙғандыра ла торғандарҙан түгел.

— Һ-м… Милләт тиһегеҙ инде... Ә мин уларҙы бер юлбаҫарҙар өйөрө икән тиһәм әле...

— Бөтөн бер халыҡтан шулай көлөү килешәме икән...

— Һуң?..

— Ихтирам итәм мин был халыҡты.

— Хатта ана нисек! — Тимашев, тәү күргәндәй, наибына секерәйтә ҡараны. Әлеге һынамсыл ҡараш: "Кемде юлдаш иткәнмен мин?" — тигәнгә асыҡ ишара ине. Йәғни, хистәрең артығыраҡ таша башланы түгелме, йәш кеше? Аҡылыңа кил!

— Мин ни бары уйлағанымды ғына әйттем, Иван Лаврентьевич. —Хужаһының кәйефен яҡшы эт кеүек тойоп алған Миргородский аҡланғандай итте. — Үҙ ере менән үҙ төйәгендә кемдең килмешәк хәлендә йәшәгеһе килһен, тимәксемен.

— Һин шуны күҙ уңынан сығарма: улар үҙҙәре һан яғынан беҙгә ҡарағанда күпкә, бик күпкә аҙ, ә ерҙәре иркен, бер файҙаһыҙға буштан-буш ята. Был бит – аҡылға һыймаған факт.

— Файҙаһыҙ ятҡан ерҙәр күп инде ул Рәсәйҙә...

— Ер менән ер араһында ла айырма була.

— Эйе, иркен дә, бай ҙа Рифей тауҙары[85], уныһы хаҡ. — Миргородский инде ихласлап хистәргә бирелә башланы. —Шулай булмағанда, башҡорт уның өсөн үҙен аямай күкрәге менән торор инеме? Ерем-һыуым тип йән атып, ул ғорурланып йәшәй. Аҫаба башҡортто Уралтауһыҙ ҡалдырыу — үлемгә дусар итеүгә бәрәбәр. Ә үлемгә дусар ителгән кейектең-кейеге былай ғына бирелмәй. Ул һуңғы һулышынаса тешләшә, сапсыша, ҡыҫҡаһы, аҡтыҡ тамсы ҡаны ҡалғанса алыша, һәм һеҙ ошоно миңә ҡарағанда яҡшыраҡ беләһегеҙ.

— Уның ҡарауы, беҙ көслөрәк. Ә көслөнөкө — замана...

— Минеңсә, ерле халыҡты ҡара көс менән генә еңеп булмай...

— Ҡырып бөтөрмәйенсә, — тип өҫтәп ҡуйҙы Тимашев, шунан бер талай һүҙһеҙ барғандан һуң, йәне үртәлә биреп, дауам итте: — Тағы әйтәм: ифрат белекһеҙ зат ул башҡорт. Аңла, баштан уҡ беҙ бында һуғыш менән килмәнек. Башҡорттоң үҙен һаҡлар өсөн крепостар төҙөргә, крайы үҫешһен тип заводтар һалырға ниәт тоттоҡ, ә улар...

— Әлбиттә, ҡарамаҡҡа ниәттәр изге һымаҡ, тик быға ирешер өсөн һайланған алымдары ниндәй? Ҡайҙа алдап, ҡайҙа көслөк менән тартып алып, быуаттар төпкөлөнән килгән ергә аҫабалыҡ хоҡуғынан мәхрүм итеү кемгә оҡшар икән? Унан, уларҙы белекһеҙгә тиңләүегеҙ ҙә дөрөҫлөккә тап килмәй.

— Нисек инде тап килмәй?! Ун – ун биш йыл һайын бола ҡуптарып, ҡанға туҙғансы баҫтырыла торалар, ә үҙҙәре һаман киҫәмәйҙәр, һаман ҡарышалар! Ана, Батыршаларының дөмөгөүенә әле генә, хәҙер килеп, йәнә ҡуҙғырға торалар. Белекһеҙ тимәй, башҡаса нимә тиһең? Улар урынында икенсе берәү булғанда, әллә ҡасан меҫкенлеккә төшөп, йыуашайып ҡалыр ҙа бағынып ине.

— Минеңсә, бүтән берәүҙе лә шул сиккә еткәнсе интектермәйбеҙҙер. Шулай ҙа был юлы боланы үҙебеҙҙең казак башланы...

---

[85]Рифей тауҙары — Урал тауҙары.

— Казак башланы, башҡорт ҡушылды. Барыбер түгелме ни?

— Бөйөк Рәсәй именлеген инҡар итеп, мәрхәмәтле Батшабикә-матушкабыҙға ҡаршы сығыу яҡшы эш түгел, әлбиттә, әммә ләкин, әйткәнемсә, ғәйеп үҙебеҙҙә лә юҡ түгел, ваше превосходительство.

— Маҡсатҡа ирешеү өсөн барлыҡ ысул да яҡшы. – Подполковник тамаҡ ҡырып алды ла, бармағы менән өҫкә күрһәтеп: – Шәт, юғарыла ултырғандарға асығыраҡ күренәләр, – тип ҡуйҙы.

— Шул иҫәптән үҙ халҡыңды йәберләү ҙәме?

— Был ҡырағайҙар беҙҙең халыҡ түгел! — Наибының асыҡтан-асыҡ тиҫкәрелеге йәненә тейә башлаған Тимашев ҡыҙып уҡ китте. — Улар – үләт төшөүҙән тулыһынса ҡырылып бөтөүгә дусар ителгән икенсе сорт инородецтар төркөмө генә!

— Кешеләре, тимәк, кәрәкмәй, ә ерҙәре...

— Кешеләре осһоҙ эш көсө буласаҡ...

— Ай-һай, Иван Лаврентьевич?

— Бая әйткәнемсә, көслөнөкө замана. Нисек тә мәжбүр итербеҙ, ләкин икһеҙ-сикһеҙ ерҙәрҙең буш ятыуына юл ҡуймабыҙ! Ни за что!

Йәш Миргородский подполковник Тимашевтың – ҡаты күңелле алпауыттың – үҙен серегән байға әйләндергән халыҡты, уның ғөрөф-ғәҙәтен, ябай көнитмешен шул ҡәҙәре күрә алмауына, ул ғынамы, сит ерҙәр тип оңҡоттарса һаман ҡаныҡҡанына аптырап бөтә алмай. “150 мең дисәтинә ерем менән ҡулым аҫтында алты меңдән ашыу кешем булғанда, мин дә уның һымаҡ һайрар инемме икән? Күрәһең, кешене байлыҡ шулай боҙалыр...”

— Бына асыҡтан-асыҡ һөйләштек, Александр Иннокентьевич. — Тимашев уның уйҙарын бүлдерҙе. — Ә хәҙер әйтегеҙ инде: ысын күңелдән ошолай уйлайһығыҙмы, әллә был ҡарашығыҙ берәй ҡотҡоға бирелеүме?

— Ҡотҡонан Хоҙай һаҡлаһын, Иван Лаврентьевич! Әлбиттә, үҙ фекеремде генә әйтәм.

— Ә былай “кыйыш фекерләгәнегеҙ”ҙе икенсе берәү белеп ҡалыр, тип уйламайһығыҙмы?

— Бында беҙ икәүҙән-икәү генә бит, ваше превосходительство.

— Миңә, тимәк, ышанаһығыҙ. Бер-береңә ышаныу, әлбиттә, яҡшы.

— Ышанмаһам, асыҡтан-асыҡ һөйләп тә тормаҫ инем.

— Шулай ҙа һеҙҙең был “асыҡтан-асыҡлығыҙ” һәр төрлө сиктәрҙе үтеп китә, хатта һөмһөҙлөккә тартым. Һиҙәһегеҙме?

— Әгәр артығын ысҡындырғанмын икән, мең тапҡыр ғәфү, ҡәҙерле Иван Лаврентьевич. Тик мин, тағы бер әйтәм, бары уйлағанымды ғына еткерҙем. Һеҙ бит үҙегеҙ һоранығыҙ...

Тимашев йәнә көрһөнөп ҡуйҙы ла, мәғәнәле итеп:

— Уй-фекерҙәрегеҙҙе командирыңдан йәшермәй асып һалыу маҡтауға лайыҡ. Үҙ янында кем йөрөгәнен беләһең икән, исмаһам, күңелең тынысыраҡ була. Тик һеҙҙең, йәш кешенең, ошо халыҡҡа ҡарата мөнәсәбәтегеҙ шул ҡәҙәре йылылыр, тип һис көтмәгәйнем, – тип ҡуйҙы.

— Бәлки, мин яңылышамдыр, ваше превосходительство. – Тегеһе аумаҡайлана һалды.

Ауыр тынлыҡты аттарҙың талғын тояҡ тауышы, көймә шығырлағаны ғына боҙа ине.

...Оло юлға арҡыры төшөп ятҡан дәү тауҙы урап үтеп, Һаҡмар бөгөлөнә етеүгә, иртәуылдан ике татар егете сабып килде. Алдағыһы, ярһыған атын көскә тыйып:

— Ваше превосходительство, Һаҡмарбашҡа яҡынлайбыҙ, — тип ҡысҡырҙы.

— Шипкерт-фәлән һиҙелмәйме? — Көймә ишеген ҡыҫа биргән Тимашев төйтәйгән ҡаштары аҫтынан һөҙөп ҡараны.

— Тыныс һымаҡ былай.

— Теге малай үҙен нисек тота? Үтә яндырай күренә ине, юғиһә.

— Ҡушсыны[86] әйтәһегеҙме? Ышаныслы егет ул, был яҡтарҙы һәйбәт белә.

— Яҡшы. – Тимашев ишеткәндәре менән ҡәнәғәт ҡалды. – Барығыҙ, сынок-тар, службағыҙҙы дауам итегеҙ. Абай булығыҙ, ян-яғығыҙҙы ҡарап барығыҙ.

– Ыслушаемся!

Малай ҡоронан яңы сығып килгән йәш егеттәр, подполковник һынлы кешенән шундай йылы һүҙ ишетеп ҡанатланыуҙан, аттарын ашыҡтыра-ашыҡтыра килгән яҡтарына кире сапты.

Тимашев Һаҡмарбаш ауылынан саҡрым ярым арауыҡта, түбәндәрәк йәйрәп ятҡан, бер битләсе ярайһы уҡ текә, икенсеһе һөҙәк, яҫы ҡалҡыулыҡ түбәһендә урынлашырға ҡарар итте. Ҡояш сығышына ҡарай ауыш, ҡабрый урын күңеленә шунда уҡ хуш килде. Ҡабау ерҙән тирә-йүн яҡшы күренеп торһа, теләһә ниндәй ямғырҙа ла аяҡ аҫтарында һыу йыйылып ятмаясаҡ. Ә ҡойма ямғырҙарҙың был яҡтарҙа нисегерәк булғанлығын ул ишетеп кенә белмәй. Тирмә ҡуйыр урыны киң, асҡаҡһыған аттарға утлау өсөн ер етерлек, үләне лә мул.

Подполковник башта бында аҙна тирәһе торорға ниәтләнде. Оҙон юлдан хәтһеҙ генә йонсоған сиреү тейешенсә ял итеп, ат-ужаһын рәткә килтерер. Шул арала яҡын-тирәне байҡаштырып, урындағы халыҡтың тын алышын да самаларҙар. Етәһе ерҙәре әле алыҫ, шулай ҙа әллә ни ҡабаланмаһалар ҙа була. Иҙелбаш ҡәлғәһендә боласы борҙар өйөрөнән барыбер алдараҡ буласаҡтар. Уларҙы тейешенсә ҡаршы алырға ла әҙерләнеп өлгөрәсәктәр.

Йүнсел ҡалмыҡтар ҡайһы аралалыр киҫеп алынған һайҙа остары менән ҡаты сиҙәмдең ҡыртышын соҡоп, кирәгә[87] ҡаға башланы. Ҡасҡалаҡ аттарҙы ябып тотоу өсөн йәтеш индекле тоҡон кәртә тотолдо. Шырт бүтәгә өҫтөнә йыға һалып, йомро ғына бер дүнәженде бысаҡлап ебәрҙеләр. Бер-бер артлы унда-бында әшәктәр дөрләне, ҡаҙандар аҫылды. Ауыр туптарҙы бер урынғараҡ теҙеп ултырттылар. Улар янына, иң ышаныслы казак һуғышсыларынан һайлап алып, шәйләктәр ҡуйылды. Ҡалын, беше кейеҙҙән ҡоролған тирмәләр бөтәһен дә һыйҙырырлыҡ түгел ине, шунлыҡтан ваҡ сауҡаларҙан ҙур ҡыуыштар эшләнде, өҫтәренә ҡалын итеп ауһаҡ[88] миндек, аҫтына йәш үлән түшәлде. Муйыл ағасынан оло-оло сөгөн ҡаҙандарҙы күтәрерлек итеп ныҡлы тағандар ҡағылды.

Наибын эйәртеп әҙерлекте ҡарап йөрөгән Тимашев эш барышы менән буйтым ҡәнәғәт ҡалды һәм бер ситкәрәк, ҡыуаҡтар ышығына, үҙе өсөн ҡоролған аҡ сатырға йүнәлде.

Мәле етеүгә ул инде һыуынып, себенгә сыҙамай ҡойроҡтарын болғай-болғай саллыҡлап торған аттарҙы һуғарырға рөхсәт итте. Ат һуғарыу мотлаҡ уның рөхсәте менән генә башҡарыла — быны сиреүҙә һәр ҡайһыһы белә. Арғымаҡтарының эйәр-өпсөнөн һалдырғандан һуң үҙҙәре лә ялан аяҡланып алған һыбайлылар, һай-һайтлап ҡысҡырыша-ҡысҡырыша, тау аҫтында,

[86]*Ҡушсы — юл күрһәтеп барыусы, проводник.*
[87]*Кирәгә — тирмә таяғы.*
[88]*Ауһаҡ — уҫаҡ.*

түбәндә, ялтырап күренгән Һаҡмар кисеүенә ҡарап саптылар. Сарсаған аттар һыуһындарын ҡандырыуға, уларҙы ағас ҡашлау[89] менән ҡырғыслап, ҡойондорорға тотондолар. Шул арала яугирҙар үҙҙәре лә рәхәтләнеп, шау-гөр килеп һыу инеп алды.

Ҡеүәте һүрелә төшкән ҡояш мәғрипкә яҡынлашҡанда, танау буйҙарын ҡытыҡлап, тәмле ит еҫе таралды. Шуны ғына көткәндәр тиерһең, алыҫ булмаған Һаҡмарбаш ауылын күҙҙән үткәреү менән бер рәттән, өҫтән-мөҫтән генә булһа ла яҡын-тирәгә мәхкәмә[90] яһап, ошо ерҙәрҙән үткән юл-һуҡмаҡтарҙы ҡараштырып килер өсөн ебәрелгән йөрөкшәләр ҡайтып етте.

— Подполковник әфәнде, һеҙ йөкмәткән йомош урын еренә еткереп үтәлде! – тине дәрәжә буйынса араларынан иң өлкәне, Тимашев алдына килеп тып баҫып.

— Йә, нимәләр күрә алдығыҙ?

— Артыҡ бер ни ҙә. Халыҡ ҡайҙалыр ҡасып бөткән, ауылда кеше бик аҙ. Улары ла ҡарт-ҡоро ғына.

— Тағы?

— Тағымы... Уларҙың... ҡыҙаштары[91] бар.

— Ҡыҙаштары?! — Ҡапыл йөҙө үҙгәреп киткән Тимашевтың сырайы һытылды, һәм бая ғына бәреп сыҡҡан шәп кәйефтең инде эҙе лә ҡалманы. Барыһы ла белә: ауыл ерендә, бигерәк тә башҡорттар йәшәгән ауылдарҙа, тимерлек тотоу ҡәтғи рәүештә тыйылған. Ошо тәртипте аңды ла, аңһыҙ ҙа көйө боҙоп, һанға һанамаған осраҡта ғәйепләне бер һүҙһеҙ хәбес ҡылыу[92] ҡаралған. Ана бит, бөтә илгә мәғлүм фарманды аңламаған аңламай инде тиҫкәре әһел. Белекһеҙ түгел тип әйтеп ҡара шунан уны. Ҡыҙаш бар ерҙә тимер бар, ә тимер булған урында – ҡорал. Үтә тәғәнле ауыл булып сыҡты был Һаҡмарбаш тигәндәре.

— Ауыл старостаһын саҡырығыҙ! Хәҙер үк! — тип бойорҙо асыуынан бүртенгән Тимашев.

Ҡораллы биш казак, саң борхотоп, шунда уҡ Һаҡмарбашҡа кире сапты.

— Ә ауыл үҙе ҙурмы? — Подполковник төпсөнөүен дауам итте.

— Байтаҡ ҡына. Өйҙәр тәртипһеҙ урынлашҡан, урам-фәлән дә юҡ.

— Кешеләре менән һөйләшмәнегеҙме?

— Һөйләшерҙәй йүнле кеше күренмәй. Ике-өс ҡарсыҡ, бисә-сәсәнән башҡа, берәү ҙә осраманы. Улары ла, беҙҙе шәйләп ҡалыу менән, йәшеренеп бөттөләр.

— Улай икән. Тимәк, үҙҙәре ҡасып киткәндәр, ә тимерлектәрен юҡ итергә өлгөрмәгәндәр. — Тимашев, үҙ алдына һөйләнгәндәй, танау аҫтынан мыңғырҙаны. Шунан ҡапыл ғына алсаҡланып: — Александр Иннокентьевич, шикле эше менән тәғәнле ғәмәле булмағандар ҡасып та китмәй, тиктомалға йәшеренеп тә ятмай бит ул, ә?— тип ҡуйҙы.

— Раҫ әйтәһегеҙ, ваше превосходительство. — Миргородский ярамһаҡланғандай яуапланы. — Ҡыланыштары бик шикле. Иртәгә үк барып, ентекле тикшереү үткәрергә кәрәк.

—Иртәгә? Иртәгә һуң булып ҡуйыуы бар. Бөгөн үк, хәҙер үк!

— Хәҙер эңер төшә, Иван Лаврентьевич. Белмәгән-күрмәгән ерҙә ҡараңғылыҡҡа йөрөп ятыуы килешкән эш булырмы икән? – Хөрәфәтле наиб икеләнеү белдерҙе. — Кистән иртә хәйерлерәк...

— Ярай, бөгөнгә йөрөмәй торайыҡ, — тине һыуына төшкән подполковник,

[89]*Ағас ҡашлау — ағас тараҡ.*
[90]*Мәхкәмә — тикшереү.*
[91]*Ҡыҙаш — тимерлек.*
[92]*Хәбес ҡылыу — төрмәгә ябыу.*

бер талай өндәшмәй торғандан һуң. — Тик ҡояштан алда беҙ унда булырға тейеш. Иртәгә!

Миргородский эйәк ҡағып ризалығын белдерҙе.

Танһыҡҡа йәш бейә ите менән тамаҡ туйҙырған яугирҙарҙың ҡайһыһы шунда уҡ ҡыуыш эстәрендәге йомшаҡ үлән-түшәккә морон төртөп йоҡларға ятһа, икенселәре һүрелгән усаҡ янында атының бушап шаҡылдай башлаған дағаһын нығытты, өсөнсөләре өҫ-башын, ат-ужаһын тәртипкә килтерҙе.

Яҙ ахырының аяҙ, һалҡынса төнө. Ҡояш байыу менән Ирәндек аръяғынан сағыу Сулпан ҡалҡһа, ҡараңғы төшөүгә баш осондағы “йыһан кендеге”нә беркетелгән Етегән балҡыны, эреле-ваҡлы башҡа йондоҙҙар, ерҙәге ығы-зығы ҡолдарын сәләмләгәндәй, кемуҙарҙан күҙ ҡыҫышып емелдәште. Һаҡмар бөгөлөндәге таллыҡ эсендә, хәрәкәтһеҙ ҡатып ҡалған шыйыҡ томанлы туғайҙы яңғыратып, һандуғас һайрарға тотондо. Уға икенсеһе, өсөнсөһө ҡушылды. Йылға буйы ни аралалыр илаһи моңға күмелде.

Ошо бер ваҡытта ла ялҡытмаҫ һәр төрлө танһыҡ ауаздар симфонияһына мөңгөр-мөңгөр һөйләшкән кеше тауышы ҡушылып китә. «Ни тураһында сөкөрләшә улар? Оҙон көн буйына һөйләшеп туймайҙармы икән? Шул тиклем юл үтеп, нисек эйәр һуҡмай үҙҙәрен? — Ярайһы ғына талсыҡҡан Тимашев аҡ сатыры алдында таяҡсаларҙан яһалған эскәмйәлә уйҙарға сумып ултыра. — Ғәжәп тә һуң был әҙәм тигәнең!» Татар телмәрен ул икмәк-тоҙлоҡ аңлаһа, жуңғарҙың[93] бер-ике һүҙен генә төшөнә. Ярай әле, жунғарҙың араһында бер аҙ урыҫса һупалағандары бар. Подполковник шулар аша эш итә. Эйе, тегеһенә лә, быныһына ла ышаныуы ауыр. Бер яҡтары әйләнһә, улары ла, башҡорт ише, баш бирмәҫ инде. Саҡ ҡына ҡатыраҡ һуғылып, яңылыш әйттеңме, сиреүеңдә бөгөн үк ташлап китергә әҙерҙәр. Шуның өсөн дә хәйлә, йомаҡайлыҡ менән эш итергә тура килә. Әлегә һәммәһенә ҡарата эс-бәйеллекте йәшереп торорға мәжбүрһең. Күпселегенең ер, мөлкәт, мал тип йөрөп ятҡан көнө. Араларында тамаҡ хаҡына ялланғандары ла етерлек. Әммә теге күпселектең ымһыныуы, күрәһең, тормошҡа ашмаҫ, өмөттәре өмөт көйө тороп ҡалыр. Бында өлкәнерәк ағайың бар бит әле...

Үҙенән-үҙе һәләк ҡәнәғәт Тимашев көлөмһөрәп ҡуя ла, буласаҡ хәтһеҙ биләмәләрен, осһоҙ эш көсөн күҙ алдына килтереп, йәнә татлы хыялдарға бирелә. Башҡорт ерҙәрен элек алдаштырып, юхалап арзанға һатып алһа, хәҙер көс менән, ҡорал көсө менән тартып, юҡ, талап аласаҡ, ә башҡорттоң үҙен ҡапаҡлап ҡол итәсәк. Байлығын шул рәүешле ун, йөҙ, юҡ, мең тапҡырға арттырып ебәреп, бөйөк империяның иң билдәле, иң күренекле алпауыттарының береһенә әүерелер. Элек күҙгә лә элмәгән күп кеше киләсәктә уның менән кәпәс һалып һөйләшер. Эре ер биләүселәр, заводчиктар үҙенә кәңәшкә йөрөр. Ошолар барыһы ла тормошҡа ашһын өсөн Тимашевтан бөгөн бер генә нәмә талап ителә: үҙен әлегә бер файҙаһыҙға ятҡан Урал тауҙарының хужаһымын тип хис иткән башҡортҡа ҡарата мөмкин тиклем аяуһыҙыраҡ булыу...

Талғын ғына елпелдәгән әшәк телдәренә мөкиббән китеп, ем-ем иткән торонбаштарҙы таяҡ осо менән рәтләштерә ултырған моңһоҙ Тимашевтың татлы уй-хыялдарын әлән-борхан килеп еткән йөрөкшәләрҙең береһе бүлдерҙе.

— Ваше превосходительство, старшинаны таптыҡ...

— Тапҡасығыҙ, ҡайҙа һуң ул?

— Бармайым, тине.

[93] *Жуңғар (бор.) — ҡалмыҡ.*

— Нисе-ек?! — Тимашевтың көр тауышы һауаны тетрәтте.

— Мин бер ниндәй ҙә подполковник Тимашевты белмәйем, кәрәк икән, үҙе рәхим итһен, ти. Һәр бер үткенсе саҡыртта тип сабып йөрөргә тейеш түгелмен, тип тә өҫтәне.

— Шулай тинеме?! – Ярһыуҙан тыны ҡыҫылып, өнө быуылған Тимашевтың тауышы сыйылдап китте: – Ярай, улай булғас, барырмын. Таң менән барып етермен! Ну, ҡырағай, ул сағында абай бул! – тип йоҙроғон төйнәп ыҫылданы ул.

– Йәнә лә, яҡшылыҡ менән йөрөгәндәргә беҙ ҙә яман булмабыҙ, тип әйтергә ҡушты. – Уны-быны уйлай белмәгән бер ҡатлыраҡ йөрөкшә һүҙен дауам итте: – Ә инде этлек уйлап, хаслыҡ менән килгәндәргә...

– Юғал күҙемдән, алйот! – Тимашев яугирға аҡырып ебәрҙе. Әйтерһең дә, барыһына алдында торған ошо ярпы егет ғәйепле. Шулай ҙа йәш казак өркәктәрҙән булып сыҡманы.

— Ваше превосходительство, ни өсөн миңә ҡысҡыраһығыҙ? — тине ул, тыныс булырға тырышып. – Үҙегеҙҙең ҡушыу буйынса, нимә әйткәндәр, һеҙгә шуны ғына еткерҙем.

— Молчать! — Ифрат енләнеп киткән подполковник, асыуын ауыҙлыҡлай алмайса, ҡулындағы таяҡ менән казакка киҙәнде. — Марш бынан! Күҙемдән юғал, көсөк!

Миргородский һалдатҡа һуғырға өлгөрмәгән Тимашевтың ҡулынан тотоп алды.

— Тынысланығыҙ, Иван Лаврентьевич. Беҙгә бөтә лагерь ҡарап тора...

Ярай әле, ошо юҡ ерҙән ҡупҡан низағты атаман Ефим күрмәй ҡалды, юғиһә, оло ғауға сыға ине.

...Үҙе менән татар сардары Өстөкәйҙе алып, йәнә лә егермеләп һайланмыш яугир эйәрткән Тимашев урынына наибын ҡалдырҙы ла ҡояш сығыр-сыҡмаҫтан Һаҡмарбашҡа килеп тә етте. Биксәнтәйҙең өйөн тиҙ үк таптылар һәм деһерләшеп семәрле ҡапҡа алдына килеп туҡтанылар. Күмәк тояҡ тауышын әллә ҡайҙан ишетеп ҡаршы сыҡҡан Биксәнтәйҙең эстән һарыуы ҡайнаһа ла, соғол сырайында бер еп тә тартылманы.

— Һин булаһыңмы старшина?—Тимашев, күрәһең, баштан уҡ тупаҫ уҫаллыҡ менән шаңҡытмаҡсы булды.

— Беҙҙә тәүҙә иҫәнлек-һаулыҡ һорашалар. — Биксәнтәй әүәлгесә тыныс ҡалды. Ошондай мәлдәрҙә ул үҙ-үҙен тейешенсә тота белә. Поляк һуғышы сыныҡтырып, күпкә өйрәткән. — Мин булам. Ни йомош, түрә?

“Түрә“ һүҙенә айырым-асыҡ баҫым яһап әйтте.

— Һаулығыңдың ташып барғанын былай ҙа күреп торам. — Тимашев аҫтыртын йылмайҙы. — Әммә арҡырылығыңды ташламаһаң, уныһынан яҙып ҡуйыуың да бар.

— Хөрмәтле подполковник, һүҙҙе нишләп ҡапаҡлауҙан башларға? — Биксәнтәй йылмайыуға ҡаршы йылмайыу менән яуап бирҙе. Тик уның йылмайыуы эскерһеҙ ине. — Беҙгә килгән сауын улай итмәй.

— Мин һеҙгә ҡунаҡ булып төшмәгән. Мин бында тәртип урынлаштырып, тыныслыҡ булдырыр өсөн килгәнмен, шуны бел.

— Беҙҙең халыҡ тыныс, иншалла. Тәртип тә боҙмай.

— Кешеләрең, бәлки, тыңлаусандыр, ә бына үҙең тәртипһеҙһең.

— Асығыраҡ һөйләгеҙ, подполковник әфәнде.

— Кисә саҡыртыуға килмәнең, ярпылар әфәндеһе... — Тимашев күҙҙәрен мәкерле ҡыҫа бирҙе. — Эш боҙмаған кеше шулай боҫоп ятмай.

— Йәшерен-боҫорон йәшәгән юҡ, шөкөр, — тине Биксәнтәй дорфа ғына. — Бына бит алдыңда торам. Ә саҡыртыуыңа килгәндә: эт саба тип беҙҙә һәр саҡ бет сабып йөрөмәй.

— Нисек, нисек? — Тимашев, ҡапылғара аңлап етмәй, урыҫса арыу ғына белгән тәржемәсе татарға боролдо. Уныһы һүҙмә-һүҙ төшөндөрөп биргәс, йөҙө буҙарып, ҡараштары ҡомһарылды, тотлоғоуҙан ыҡ-мыҡ килде: — Т...телеңә һалышып торһаң, ст...таршина, ни эшләтергә белермен мин һине.

— Эшләтһәгеҙ эшләтәһегеҙ инде, һеҙҙә – көс, мин яңғыҙым.

— Тимерлегеңде күрһәт беҙгә! — Тимашев Биксәнтәйҙе көтөлмәгән һорау менән әйләндереп һалмаҡсы булды. — Ҡай ерҙә тимерлегең?

— Тимерлек? — Йөрәге жыу итеп ҡалған Биксәнтәй шулай ҙа тыштан ҡымшанманы ла. Ҡайһы ике арала һиҙеп ҡалған тиһең, ҡомағай?! — Тимерлек тотоу ҡәтғи тыйыла хәҙерге заманда. Быны һеҙ минән яҡшыраҡ беләһегеҙ.

— Ә һин шул тыйыуҙы боҙоп, боласыларға ҡорал әҙерләп ятаһың. — Быныһын Тимашев былай ғына, үҙһүҙле старшинаны өркөтөү өсөн генә әйтте. Ысынбарлыҡта уның төплө бер дәлиле лә юҡ ине.

— Быныһы инде – ҡоро һүҙ генә, подполковник, бары бинахаҡҡа ғәйеп тағып, һүҙҙәреңде өҫкә сығарырға тырышыу.

— Күрһәт, тим, тимерлегеңде!— Тимашевтың тауышында асыҡтан-асыҡ янау ишетелеп ҡалды.

— Юҡ ул беҙҙә. — Биксәнтәй үҙенекен тылҡый.

Тимашев, алан-йолан ҡаранып, кисә кис ҡыҙашты үҙ күҙҙәре менән күргән яугирҙы эҙләне лә:

— Бына был казак тапҡан һинең тимерлегеңде! — тип ҡамсы һабы менән төртөп күрһәтте.

– Тапҡан?! – Ҡаштары ҡапыл юғары сөйөлгән Биксәнтәй ышандырырлыҡ итеп әйтте. – Әләйһәң, беҙгә лә күрһәтһен, – тигән булды.

— Хәйләләшмә, старшина, боҙоҡлоғоң барыбер асылыр. Унан хәбесханаға ла күп ҡалмаҫ.

— Тимерлекте тапһағыҙ, мин риза,— тине Биксәнтәй битараф ҡиәфәттә.

Күмәк төркөм теге казактың артынан эйәрҙе. Уныһы текә ҡабаҡ ситендә торған аласыҡҡа тартым яңғыҙ өй ишараты янына алып килде.

— Бына ошонда.

Барыһы ла аттарынан төшөп, ишек-яҡтауҙары ыҫ һуғыуҙан ҡарайған, ҡыйыҡһыҙ, әммә бейек кенә түшәмле аласыҡҡа инделәр. Был бер мөйөшөнә эреле-ваҡлы таш өйөп, уларының өҫтөнә сөгөн ҡаҙан ултыртылған ҡәҙимге ҡара мунса ине. Тимашев, күпме генә тырышмаһын, өмөт иткән күректе лә, һандал да күрә алманы.

— Был беҙҙең бөтөн ауылға бер бөртөк мунсабыҙ. — Биксәнтәй юғалып ҡалған Тимашевҡа ҡараны.

— Һеҙ мунса ла төшә беләһегеҙме ни? — тип мыҫҡылланы уныһы. Ахыры, башҡаса һүҙ таба алманы.

— Ә бына быныһының, минеңсә, эшкә бөтөнләй ҡыҫылышы юҡ, подполковник. — Биксәнтәй, еңеүсе ҡиәфәтендә, күкрәген кирә бирҙе. — Төшә белмәһәк, төҙөмәҫ инек. — Шунан, түрәнең артабан зитына теймәктән: — Әйткәндәй, бөгөн кискә саҡырам үҙегеҙҙе, — тип өҫтәне, — кинәнеп бер сабынып алырһығыҙ.

Ысынлап та, әлеге һүҙҙәр Тимашевтың асыуына ныҡ тейҙе, буғай. Ул еҙ текәүерен[94] сыңғылдатҡансы баҫып сығып китте лә "ҡыҙаш таптым" тип маһайыуҙан әллә кем булып торған казак ҡаршыһына килде.

[94]Текәүер — шпора.

— Һин нимә, наҙан, мине лә әллә үҙең ише ахмаҡҡа һанайһыңмы?! Әллә, ысынлап та, тимерлектән ҡара мунсаны айырмайһыңмы?! – тип екеренде.

— Вв... ваше, пр-ревосходительство, кисә генә бында тимерлек ине.

— Болван! — Ярһыуын йүгәнләй алмаған подполковник егеттең сикәһенә килтереп сәпәне. Казак, сайҡалып китһә лә, йығылманы. — Рәсәй һинең һымаҡ яртаҡылдар арҡаһында йәлсей алмай!

Шулай итеп, Тимашев фекеренсә, Рәсәйҙең барлыҡ уңышһыҙлыҡтарында ошо, әле егермеһе лә тулмаған, бер гонаһһыҙ йәш казак ғәйепле булып ҡалды.

Йылғыр аттарға менгән төркөм нисек килеп сыҡҡан, шулай ҡапыл юҡ булды. Һыбайлыларҙы йылмая биреп, ҡараштары менән оҙатып ҡалған Биксәнтәй кисекмәҫтән тимерсене күреп, Йәйектүбәләге сиреү ҡуҙғалып китмәй тороп, әлеге “мунса” мунса көйө ҡалырға тейешлеге хаҡында иҫкәртергә ҡарар итте. Сәғәте һуғып, мәле еткәс, уны яңынан ҡыҙашҡа әйләндереүе оҙаҡ булмаҫ. Тимерлектән ҡара мунсаға ярты төн эсендә әүерелдергәнде... Һандалын уйһыуға төшөрөп ергә күмделәр, күн күректе тирегә урап ер баҙға йәшерҙеләр. Эйе, әлегә үтә һаҡ, абай булыу кәрәк, тегеләр һылтауын табып бәйләнерлек сәбәпкә юл ҡуйырға ярамай. Күренеп тора: тырнаҡ аҫтынан кер эҙләп, улар үс алыр һылтауын таба алмай ғына йөрөй. Килмешәктәр ҡон көҫәй, килмешәктәр ҡан көҫәй!

Биксәнтәй тауҙарға киткән ауылдаштарын кире әйләнеп ҡайтыу әлегә хәүефле икәнлеге хаҡында иҫкәртер өсөн сапҡын ебәреп, йәшерен юлдарҙан үә үҙҙәре генә белгән һуҡмаҡтар буйлап Сатраға сығырға бойорҙо. Хәйер, бер уйлағанда, саҡ ҡына иртәрәк булһа ла, йәйләүҙәргә күсенер ваҡыт та етеп килә ине инде.

Сатра йәйләүенә юлланыр алдынан аҙ ғына серем алырға ятҡан Биксәнтәйҙе төн уртаһында табунсы уятты.

— Нимә бар, Ғәлимйән?— тине һеркелдәгән бай, ҡаты итеп. – Ниңә көтөүҙә түгелһең?

— Биксәнтәй ағай, һине бер мосафир таптыра.

— Мосафир? Ҡайҙан килгән? Кем ул? – Старшина аптырап китте.

— Аҡһыу буйҙарынан килә ятам, ти.

— Үҙе ҡайҙа?

—Урамда көтә.

—Саҡыр.

Төн ҡараңғылығына инеп юғалған Ғәлимйән, күп тә үтмәҫтән, мыҡты кәүҙәле ят ир-егетте эйәртеп, һуҡыр шәм яҡтыһында ҡабаттан пәйҙә булды.

— Әссәләмәғәләйкүм! Йортоғоҙға тыныслыҡ үә бәрәкәт! — Таныш түгел кеше Биксәнтәй менән ике ҡуллап күреште.

— Вәғәләйкүмәссәләм, мосафир!

— Мин, ағай, Әүжән яҡтарынан килә ятам. Йөрөкшә[95] итеп ебәрҙеләр. — Мосафир итәғәт менән шым ғына өндәште. Күренеп тора: үҙ эшенең оҫтаһы һәм һаҡ ҡыланырға тырыша.

—Йә, әйтереңде әйт, йөрөкшә.

—Түңгәүер олоҫо старшинаһы Биксәнтәй Юламанов һеҙ булаһығыҙмы?

— Мин булам.

— Беҙгә икәүҙән-икәү генә һөйләшәһе ине.

Биксәнтәй, был малайға ышанырғамы-юҡмы тигәндәй, бер ғауым

[96]*Йөрөкшә — илсе, вәкил.*

һынамсыл ҡарап торғандан һуң, ситкәрәк китергә ҡушып Ғәлимйәнгә ымланы ла һуҡыр шәмде йөрөкшәнең күҙҙәренә яҡын килтерҙе:

— Хәҙерге болғауыр заманда һәр төрлө ҡыҙырастар[96] донъя тулып йөрөй, ҡустым. Араларында тәғәнлеләре лә юҡ түгел. Ни өсөн беҙ һинең ҡоро һүҙҙәреңә ышанырға тейеш? Бәлки, һин берәй яман ҡотҡосолор.

— Аңлайым һеҙҙе, старшина, әммә минән көҙөкләнмәгеҙ. Мин үҙ кеше. – Тегеһе уны тынысландыра һалды.

— Йә, үҙ кеше, йомош ниҙә һуң?

— Мин һеҙгә бөйөк Петр III манапистарын[97]килтерҙем, бей. – Егет инде бышылдауға күсте. — Шуларҙы таратырға ҡушып был яҡтарға Бураҡ Ҡолоҡасов тигән уҙаман ебәрҙе. Ә уның үҙенә Салауат Юлаев атлы батыр фарман биргән.

— Бураҡ тинеңме?

— Эйе, Бураҡ Ҡолоҡасов, — тип ҡабатланы төнгө ҡунаҡ.

— Танышмын уның менән, ә бына Салауат хаҡында ишетә генә хәбәрҙармын. — Старшина Юламанов, йөрөкшәгә ышана башлағанын белдереп, асыҡтан-асыҡ һөйләшеүгә күсте. — Дан егет тиҙәр үҙен.

— Булмай һуң, батшанан полковник дәрәжәһе алған.

— Әйҙә, ин. — Биксәнтәй йөрөкшә егетте өйөнә әйҙәне. Инеп барышлай артына боролоп: — Ғәлимйән, ә һин бар, көтөүеңә кит, — тип ҡапҡа янында торған табунсыға өндәште. — Был ышаныслы кеше.

Саҡырылмаған ҡунаҡ барлығын һиҙгән Гөлзәйнәп мейес соҡалтаһы ҡыуышында быҫҡып ултырған шәмгә ҡыуыҡ кейҙерҙе, былай ҙа тартыулы торған тәҙрә ҡорғандарын ентекләп йүнәтештерҙе, һике аҫтынан һалҡын ҡымыҙ сығарып урындыҡҡа ҡуйҙы, һыуыҡ ит ултыртты ла үҙе төпкө бүлмәгә инеп китте.

— Әйҙә, ултыр, мосафир. Килгән ерең яҡын түгел, сарсағанһыңдыр. — Хужа төнгө юлаусыға оло туҫтаҡ менән ҡымыҙ тотторҙо:— Тамаҡ ялғап, һыуһыныңды ҡандыр ҙа, унан һөйләшербеҙ. Йолаһы шулай.

Егет тулы туҫтаҡты бер тынала түңкәреп ҡуйҙы. Сарсауы ла, асығыуы ла еткән, ныҡ талсыҡҡан да. Биксәнтәй йәнә ҡымыҙ һалды, итле табаҡты ҡунағына яҡыныраҡ шылдырҙы.

— Мына, бей. — Эсенә төйөн төшөүҙән алсаҡланып киткән йөрөкшә ҡуйынынан ҡағыҙ төргәге сығарҙы. — Был – Бохар яҡтары[98] Яман ҡала[99] янынан килгән мәктүб[100]. Бөйөк батша үҙе ебәргән. Бер данаһын һеҙҙә ҡалдырам. Фарман шулай: һеҙ уны күбәйтеп, артабан таратырға тейешле. Ә бынығы – Салауаттың дәғүатнамәһе[101].

— Салауаттың? — Биксәнтәй, ҡыҙыҡһыныуын йәшерә алмайса, ҡағыҙ остоғон ҡулына ала һалды ла күҙ йөрөтөп сыҡты: "Ошбу мәктүб эйәһенә ҡулдан килгәнсе ярҙам күрһәтергә үә мәктүбтең үҙен күсереп яҙып күпләп таратырға һәр кем тейешле. Бөйөктәрҙән-бөйөк императорыбыҙ Петр Федорович Өсөнсө тыуы аҫтында изге еребеҙҙе, эсер һыуыбыҙҙы, тау-урмандарыбыҙҙы, Уралыбыҙҙы тартып алырға маташыусы килмешәктәргә ҡаршы аяуһыҙ

---

[96] *Ҡыҙырастар — берәҙәктәр.*
[97] *Манапист — манифест.*
[98] *Бохар яҡтары — Йайыҡ аръяғы.*
[99] *Яман ҡала — Ырымбур ҡалаһы.*
[100] *Мәктүб — хат, записка.*
[101] *Дәғүатнамә — фарман, талап.*

һуғышҡа күтәрелергә ҡәүемде өндәргә. Илбаҫарҙарҙың ҡуштандарына ла көн күрһәтмәҫкә...” – Ә һин Салауаттың үҙен күргәнең бармы һуң, ҡустым?

— Юҡ, күргәнем юҡ, ағай. Сикһеҙ ҡыйыу, һәләк ауан, ифрат ғәйрәтле кеше, тиҙәр. Үҙенә ҡаршы килгән бер кемде лә аяп тормай, имеш. Йөрөгән ерендә алпауыттарҙың ҡотон алып бөткән, ти.

— Тимәк, ҡаты ҡуллы. — Салауатты үҙенсә ошо рәүешле ҡыҫҡаса ғына ҡылыҡһырлап ҡуйған Биксәнтәй икенсе ҡағыҙҙы ла алып, уҡып сыҡты: “...Меңләгән бөйөк һәм юғары һәм дәүләт хакимы... бөгөндән мин һеҙҙе ерле, һыулы, урманлы, балыҡлы, торлаҡлы, бакуйлы, диңгеҙле, икмәкле итәм, үҙегеҙҙең динле һәм законлы, сәсеүлекле, тәнле, ризыҡлы, күлдәкле, хеҙмәт хаҡлы, ҡурғашлы, дарылы һәм аҙыҡ-түлекле, бер һүҙ менән әйткәндә, үҙегеҙ ғүмер буйы теләгән бар нәмәле итәм. Далалағы кейектәй булығыҙ. Изгелек теләп меңләгән бөйөк император, батша Петр Федорович Өсөнсө ҡулын ҡуйҙы”. — Бына быныһы шәп әйтелгән, егет! Беҙҙең өсөн, аҫаба башҡорт өсөн, иң кәрәклеһе яҙылған. Һай, император! Һай, мәрҙәс! Белгән ҡайҙа һуҡтырырға. Әйткән һүҙе тоғро үә ысын күңелдән булһа мәгәр, барасаҡ башҡорт уның артынан. Иманым камил, батша тип йәнен аямаҫ, утына ла, һыуына ла инер.

—Йәнә бер фарман бар, ағай. Тик уныһы телдән генә.

—Әйт.

—Баш күтәреүселәргә, мәгәр император сиреүенә ҡаршы ебәрелгән карат командалары күренә ҡала икән, теләһә ниндәй сәбәп-һылтау, ысул табып, уларҙы Әүжән-Иҙелбаш яғына үткәрмәҫкә тырышырға. Нисек тә тоҡарларға, мөмкин була икән, кире боролорға мәжбүр итергә кәрәк.

Йөрөкшә һөйләп бөтөр-бөтмәҫтән үк инде Биксәнтәй хәлдең асылына төшөнөп тә алды: бына ҡайҙа китеп барыуы подполковник Тимашевтың! Тимәк, вирнай[102] ғәскәрҙәргә ярҙамға ашыға! Хәҙер аңлашыла: ҡалмыҡ менән Ҡарғалы татарына көнө ҡалған Әбей батшаның, күрәһең, эштәре шәптән түгел. Тимәк, аҫтына шәре инеп бара!

— Бик ваҡытлы килгәнһең, әй. Ауылдан алыҫ түгел, мәшриҡ йүнәлешендәге Йәйектүбә түбәләсе битендә, яҡшы ҡоралланған карателдәр туҡталды. Көстәре бер алай тирәһе булыр. Ошо турала башлыҡтарыңды иҫкәртерһең. Ә беҙ ул килмешәктәрҙе нисек тә тоҡарларбыҙ. Илбаҫарҙы артабан үткәреп, изге еребеҙҙе тапап-бысратып йөрөүгә юл ҡуймабыҙ.

— Бер алай?! — Йөрөкшәнең күҙҙәре түбәһенә менде.— Ул тиклем көскә нисек итеп ҡаршы тормаҡ булаһығыҙ? Был бит – аҡылһыҙлыҡ! Ул ғына ла түгел, тоғро үлемгә тиң!

— Әлбиттә, йөҙгә-йөҙ бәрелештә уларҙы еңеп булмаясаҡ, быныһы асыҡ. Эйе, үҙебеҙҙең генә хәлдән килмәҫ, ҡыранға эләгеүебеҙ бар. Шуның өсөн был тәңгәлдә мең тапҡыр уйлап, аҡыл менән эш итеү кәрәк.

— Шулай шул, уйлап эш итеү хәйерле.

— Бар миндә бер фекер. — Биксәнтәйҙең күҙҙәрендә йәштәрсә осҡон уйнап китте. — Хәүефле инде, ҡалай итәһең. Шулай ҙа самаларбыҙ. Хәтәрерәк булһа ла, ошо аҙымға барырға тура килер. Башҡа юлы бирелмәгән. Хәйер, азатлыҡты боҫоп ятып яулап та булмай.

Йөрөкшәне оҙатҡас та инеп ятмаған Биксәнтәй йәһәтләп Тимеркүген эйәрләне. Бөгөн үк Бөрйән, Ҡыпсаҡ, Үҫәргән, Тамъян яҡтарына сапҡынсы ебәреп, барыһын иҫкәртергә, тигән ҡарарға килде ул. Бер-беренә барымта-ҡарымтаға йөрөшкән ҡаҙаҡ күршеләрҙән дә ярҙам һорап ҡарағанда... Нисек итмәк кәрәк, көнөң төшөп, илең менән ереңә, әһелеңә үлем ҡурҡынысы

[102]*Вирнай — тоғро.*

янағанда кисәге дошманыңа ла кәпәс һалып барырға тура килә. Икенсе яҡтан, сахради ҡырғыҙ-ҡайсаҡ халайығы төптө иҫәр түгел, ошо көндөң уларға ла килеүе ихтималлығын яҡшы аңларға тейеш. Аңларға һәм сараһын күрергә тейеш. Осһоҙ-ҡырыйһыҙ тойолған далалары башҡорт ерҙәренә терәлеп үк ята ла баһаң, ошоға һуҡтырырға кәрәк булыр. Унан, ҡыр ҡаҙаҡтар иманға ыраҫлы[103] булып ҡалырға бурыслы. Улар ҙа мосолман әһеленән бит. Байҙары, ярай, баш тартҡан хәлдә лә, жатаҡтарының[104] ярҙамға килеренә ниндәйҙер өмөт бағларға була.

Юлда бер-бер хәлгә осрап, сәфәрҙәренең маҡсаты асылып ҡуймаһын өсөн, старшина ҡулдан мәктүб яҙып маташманы, йөрөкшәләренә үтенесен телдән генә еткерергә ҡушты. Улары, шул көндө үк ҡуҙғалып, төрлө тарафтарға юл алды.

Терәлеп ятҡан Ҡыпсаҡ, Бөрйән, Тамъян олоҫтарына ебәрелгән егеттәр тиҙ әйләнеп ҡайтты. Өмөтлө, ҡыуаныслы хәбәрҙәр килтерҙе улар. Ырыу башлыҡтары, терәкһеҙ ҡалдырмабыҙ, тигәндәр. Бөгөндән әҙерлеккә тотоноуҙары, карателдәр ҡуҙғыра башлау менән сапҡын ебәрергә кәрәклеге тураһында әйтергә ҡушҡандар. Йылға башы түңгәүерҙәре старшинаһы ҡан-ҡәрҙәштәренең ышаныслы һүҙҙәренә, ауыр ваҡытта иң терәшеүҙән баш тартырға йыйынмауҙарына шатланып бөтә алманы. Ә ниңә, шулай булырына уның шиге лә юҡ ине. Элек-электән, бик борон замандарҙан Түңгәүер ырыуы ошо тирәнең, ғөмүмән башҡорт иленең иң өлкән, иң мәртәбәле ырыуҙарынан һаналған. Түңгәүерҙәр һынсыл, баҫалҡы холоҡло илһөйәр булған һәм шулай булып ҡаласаҡ. Шуның менән улар башҡаларҙан ныҡ айырылып тора. Тыныс мәлдәрҙә ете ырыуҙың нәҡ Түңгәүер ерендә ҡорға йыйылыуының, илгә ҡурҡыныс янап, яу ябырылғанда ла барыһының кәңәш-төңәшкә унда ашығыуының сәбәбе лә ошондалыр.

Иге-сиге күренмәй йәйрәп ятҡан Бохар яҡтары алыҫ та, ҡурҡыныс та. Шул сәбәпле Биксәнтәй ул тарафтарға айырылмаҫ ике ҡушағаны[105] ебәрергә ҡарар итте. Аҡсура менән Байғазы, йәш кенә булыуҙарына ҡарамаҫтан, икеһе лә ышаныслы, ҡуш йөрәкле, өҫтәүенә бер-береһе өсөн йәнен бирергә әҙер егеттәр. Ундайҙар һынатмаҫ. Уларға бөгөн, ышаныстың иң ҙуры күрһәтелеү менән бер рәттән, эштең дә иң хәтәре ҡушыла.

Сәфәрҙәренең тәүге көнөндә үк, Ирәндекте артылғас та, улар уйламағанда-көтмәгәндә караттар төркөмөнә тап булды. Тәүҙә һырт биреп ҡасып китергә уйланылар, аҙаҡ был ниәттәренән кире ҡайттылар. Үҙҙәре менән ҡоралфәләндәре лә, шик тыуҙырырҙай башҡа әйберҙәре лә юҡ та баһаң, нишләтерҙәр тиһең. Арлы-бирле һорашыр ҙа ебәрерҙәр. Нимәгә уларға бер ярпы малайҙар?

Тик ҡушағалар күҙаллағанса анһат ҡына килеп сыҡманы. Әүәл үҙҙәрен энәһенән-ебенә тиклем тентеп, тире-торо артмаҡтарының эсен тышҡа әйләндереп аҡтарып ташланылар. Хатта эйәрҙәрен һалдырып, уларын да ентекләп тикшерҙеләр. Ҡымыҙ тултырылған турһыҡтарына тиклем ҡапшап ҡаранылар, әммә тәғәнле бер әйбер ҙә таба алманылар. Сөнки ул юҡ ине. Шуға ҡарамаҫтан, ике дуҫты тиҙ генә ысҡындырып ебәрергә ашыҡманылар, йылға буйында торған лагерҙарына алып килеп, көноҙон тоттолар. "Юғалған аттарыбыҙҙы юллап йөрөп ятыуыбыҙ" — тигәндәренә ышанмай, төрлөсә һорау алдылар, төпсөнөп төпсөндөләр. Ҡайҙа, нишләп китеп барыуҙарын әйтмәгән хәлдә зиндан менән янанылар, аттарығыҙҙы тартып алабыҙ, тип

[103] *Ыраҫлы — тоғро.*
[104] *Жатаҡтар — ҡаҙаҡ крәҫтиәндәре.*
[105] *Ҡушаға — айырылмаҫ йән дуҫ.*

ҡурҡыттылар. Шулай ҙа егеттәр ныҡ торҙо, туҡтауһыҙ бер һүҙҙе тылҡыны: ат эҙләп йөрөйбөҙ – вәссәләм. Ахырҙа, икенсе көн төш ауышыуға, бәйләнерлек сәбәп таба алмағас, ҡушағаларҙы ебәрергә мәжбүр булдылар. Оҙон буйлы офицер етәкселегендәге егермеләп һалдат уларҙы яман ҡарап оҙатып ҡалды. Артабан тағы боҫҡон-маҙарға тарып, бар эште юҡҡа сығарып ҡуймаҫ өсөн, ныҡлап һөйләшкән йөрөкшәләр алға осто.

Шулай ҙа Аҡсура менән Байғазының йөрәктәре елкенеп барыуҙары тиккә булды. Ҡунаҡсылһыҙ Бохар ерендә уларҙы уңышһыҙ сәфәр көтә ине. Үҙ мәнфәғәтен артығыраҡ ҡайғыртҡан ҡырғыҙ-ҡайсаҡтар истәк боласыларына ярҙам ҡулы һуҙыуҙан ҡырҡа баш тартты. Байы ла, ярлыһы ла. “Әбей батшаға ҡаршы яу сапһаҡ, илебеҙгә ябырылырға сәбәп таба алмаған урыҫҡа һылтау ғына булыр. Үҙ еребеҙгә үҙебеҙ афәт алып килербеҙ, — тине баш утағалары[106], йөрөкшәләр менән күҙгә-күҙ ҡалғас, — тамырлыҡты һаҡлау йөҙөнән барымталарҙы туҡтатырға һүҙ бирәм. Минең рөхсәтһеҙ Яйыҡ аръяғына бер ҡаҙаҡ та сыҡмаҫ был яғына, әммә сиреү ебәреп ярҙам итә алмайбыҙ, буҫыҡ[107] итмәгеҙ, беҙҙе лә аңлағыҙ”.

Ҡайтыуҙарына Яйыҡ ярындағы Әтәс тауынаса оҙатып ҡалырға тип ҡулауыҙ[108] бирҙе, бар хөрмәте шул булды. Ләкин быныһынан истәктәр итәғәтле генә баш тартты. Дуҫтар, хәтерҙәрен ҡалдырған ышанысһыҙ утаға кешеләре менән юлдаш булғансы, аҙым һайын хәүеф менән янаған далала үҙҙәре генә ҡалыуҙы өҫтөнөрәк күрҙе.

Ике ғауам[109] араһындағы ыҙан хеҙмәтен үтәп, ҡыр-ҡаҙаҡ менән истәкте айыра яткан Яйыҡ йылғаһына етергә күп тә ҡалманы инде. Сираттағы пеләш түбәләсте артылыуға күҙҙәренә сағым ялпылдаған уйһыулыҡтағы яңғыҙ тирмә салынды. Башта, яҙмышты икенсегә һынап тормаҫ өсөн, ситләтеп кенә үтеп китмәкселәр ине, әммә буҫлығып илаған сабый тауышы, уны бер кемдең дә тынысландырмауы аттарының башын тирмә яғына борорға мәжбүр итте.

Бүтәгәһе ҡуй тарафынан ныҡ ҡырҡылып тапалған ҡабрый[110] үҙәктә торған тирмәгә яҡынлашҡан һыбайлылар, аптырауҙан былайыраҡ, ҡот оҫҡос күренештән ҡаушап, шаҡ ҡатты ла ҡалды. Тирмә тирәһендәге иләмһеҙ күренеш күптән түгел бында аяуһыҙ ҡырғын-үләт үтеүе хаҡында һөйләй ине. Тирмөйҙән алыҫ түгел, һарыҡ ябыр өсөн тотолған иркен кәртә уртаһында яшыҡ ат үләкһәһе аунап ята. Уның янында күкрәгенә ҡыҫҡа йыуан һаплы башҡорт һайҙаһы[111] ҡаҙалған йәш егеттең мәйете күренә. Маңлайындағы яраға ҡарағанда, атты һыҙманан атып үлтергәндәр. Егеттең ауыҙ ситенән ҡарағусҡыл ҡан һырҡып сыҡҡан, ярым асыҡ күҙҙәрендә сикһеҙ ҡурҡыу ҡатып ҡалған.

Бер аҙ иҫ йыйғандан һуң Аҡсура менән Байғазы аттарын бағанаға бәйләнеләр ҙә, етемһерәп ҡалған тирмәнең кейеҙ ябыуын оло һаҡлыҡ менән күтәреп, һонола биреп эскә ҡаранылар. Күҙҙәре ҡараңғыға күнеккәс, тәүгеһенән дә йән өшөттөргөс күренештең шаһиты булдылар. Бораҡлы тирмә түрендә, иләнгән һарыҡ тиреһе, сепрәк-сапраҡ араһындағы ҡан эсендә күлдәк итәге кендегенә тиклем күтәрелгән, күкрәге асылып, сәстәре туҙған йәш уруғас[112] салҡан төшөп ята. Эргәһендә, егеттәрҙең самалауы буйынса, йәше лә

*[106] Утаға (ҡаҙ.)— ил ағаһы, аҡһаҡал.*
*[107] Буҫыҡ — ғәйеп.*
*[108] Ҡулауыҙ — оҙата барыусы.*
*[109] Ғауам — ил, дәүләт.*
*[110] Ҡабрый — ҡыя урын.*
*[111] Һайҙа — һөңгө.*
*[112] Уруғас — йәш ҡаҙаҡ ҡатыны.*

тулмаған сабый бала шыңшый. Оҙаҡ илауҙан уның инде һыны ҡатҡан да, тыны ҡыҫылып, өнө быуылған. Ҡушағалар осраҡлы ғына килеп сыҡмағанда, быныһына ла йәшәргә күп ҡалмағайны.

Аҡсура менән Байғазы ошо ҡот осҡос ҡыйралышҡа, уның сәбәптәренә үҙҙәренсә фараз ҡылып, байтаҡ ҡарап торҙо. Тыныс ҡына ҡуй бағып, уныбыны көтмәй далала ятыусы йәш ҡаҙаҡ ғаиләһенә юлбаҫарҙар, күрәһең, иҫ итмәҫтән ябырылған. Яҡындарын ҡурсалап ҡаршы сыҡҡан һыбайлы ирҙең тәүҙә атын атып йыҡҡандар, һуңынан үҙен дә һөңгө менән сәнсеп үлтергәндәр. Аҙаҡ ҡатынға сират еткән. Оҙаҡ аҙаплап, балаһының күҙ алдында мәсхәрәләгәндән һуң, уныһының да ғүмерен ҡыйғандар. Йөрәгенә бөркөт ҡаурыйлы уҡ ҡаҙалған меҫкен ҡатын шунда уҡ йән биргән.

Алдан ингән Аҡсура уруғастың итәген рәтләп, ғәүрәтен[113] ҡапланы ла, күҙҙәрен йомдороп, өҫтөнә киндер буҫтау япты. Ә бала йәнле Байғазы аҡтыҡ көсөн йыйып ғыжылдаған мөсһөҙ малайҙы күтәреп алды. Хәлһеҙләнгән сабый, ҡулды тойоп, шунда уҡ тыныслана төштө.

— Ҡалайтабыҙ, Байғазы? — Аҡсура һораулы ҡарашын ҡушағаһына төбәне.

— Һис баш етмәй, дуҫ.

— Һәр хәлдә лә ғажиз вилданды[114] был килеш ҡалдырып китеп булмай...

— Уныһы билдәле. — Дуҫы һүҙҙәрен йөпләгән Байғазы үҙенән өҫтәп ҡуйҙы: — Мәйеттәрҙе лә ҡортлатып һалып ҡуйырға ярамай. Ана, күпме себен мыжғып тора...

— Эйе, ни тиһәң дә, үҙебеҙҙең мосолмандар.

Көрәккә оҡшаш тимер һынығы табып, иркен ҡәбер ҡаҙҙылар. Мәйеттәрҙең асыҡ урындарындағы йәшел себен йоморткаларын һыпырып төшөрөп, иҫке сепрәк менән булһа ла үҙҙәренсә кәфенләнеләр. Ғазраил хакимлығына күскән Хоҙай бәндәләрен әҙер соҡор янына килтереп, әруахтар иленә оҙатырға йыйынғандар ине инде, көтмәгәндә-уйламағанда күмәк ат тояғы тауышы ишеткән егеттәрҙең йөрәктәре жыу итте: ҡыр-ҡаҙаҡтар була ҡалһа — эш харап. Бар ғәйепте уларға япһарып, мәхкәмә яһап та тормаҫтан йәндәрен аласаҡтар. Бар, буҫыҡһыҙ икәнлегеңде иҫбатлап ҡара дала шайтандарына.

Һыбайлылар яҡынлашҡан һайын, Аҡсура менән Байғазының йөрәктәре йышыраҡ типте. Үҙеңдән ярҙам, йә Хоҙа!

— Әссәләмәғәләйкүм! — Алдан килгән мыйыҡлы ир башҡорт егеттәрен шунда уқ сырамытты. Үҙе лә, күрәһең, саф башҡорт ине. — Ни менән булашып ятҡан көнөгөҙ, уҙамандар?

Ҡушағаларҙың эсенә йылы йүгерҙе

— Вәғәләйкүмәссәләм! — тип яуапланы Аҡсура, иркен һулап. — Бына, ағай, көпә-көндөҙ ҡырғын һалып киткәндәр.

— Юлбаҫарҙар, шәй. — Ҡобараһы осҡан Байғазы ла шатланып һүҙгә ҡушылды.

Аттарынан төшкән һыбайлылар, фажиғә урынын ҡараштырып, үҙҙәренсә тикшереү яһанылар.

— Караттарҙың эше был, — тип хәтимә ҡылды төркөм башлығы. — Был вәхшилеккә улар ғына һәләтле, вәкәхәттең[115] быңдайын улар ғына булдыра ала. Вафалы әҙәм сит ҡатындан көлөп, ир бисәһен көсләмәҫ. Тамсы гонаһы булмаған вилданды ла еҫер[116] ҡалдырмаҫ. Был, – белгегеҙ килһә, башҡорт менән ҡаҙаҡ

[113] Ғәүрәт — оят урын.
[114] Ғажиз вилдан — ярҙамға мохтаж бала.
[115] Вәкәхәт — ҡәбәхәтлек, сикһеҙ оятһыҙлыҡ.
[116] Еҫер — үкһеҙ етем.

мөнәсәбәтен боҙоп, ара болғар өсөн ҡыланған этлек-хөсөт, төптән уйлап эшләнгән яуызлыҡ. Күҙ алдығыҙҙағы көфрана эшкә ҡаты бәгерле, ҡанһыҙ армайҙар ғына һәләтле. Аҫтыртын ҡылған енәйәттәренә шик төшмәһен өсөн, күрәһегеҙме, ирҙе беҙҙең һайҙа менән үлтергәндәр, ә ҡатынға тәүҙә багинет менән сәнсеп, шул яраға беҙҙең бөркөт ҡаурыйлы уҡты ҡаҙағандар.

Әлеге һүҙҙәрҙе тыңлап тороусыларҙың иҫ-аҡылы китте. Араларынан береһе асыу менән:

– Маҡсаттарына ирешеп, халайыҡтарҙы болғар өсөн ниндәй генә ҡыянлыҡ-ҡа бармай, ә, ҡәбәхәттәр! — тип ҡуйҙы.

– Аллаһының ҡаты ҡарғышы төшмәй бит үҙҙәренә!

– Ер йотҡоро йәзиттәр!

– Ҡаныҡтылар ҙа баһаң!

Шымып ҡалған кешеләр шаулашып алды. Ахырҙа башлыҡтарының ҡушыуы буйынса теҙелешеп сафҡа баҫтылар ҙа, имам артынан эйәреп, йыназа ҡылдылар. Ҡыуан елдә бәүелеп сайҡалған сал ҡылғанлы ҡайнар дала уртаһында сөм-ҡара тупраҡ өйөмө ятып ҡалды...

— Бынан тиҙерәк китергә кәрәк, — тине мыйыҡ, доға ҡылғандан һуң. — Һалдаттарҙың аңдып ятыуы бар. Ҡаҙаҡтар килеп сыға ҡалһа ла, шулай уҡ баштан һыйпамаҫтар. Нимә тип аҡланаһың улар алдында? Яйыҡ аръяғында үҙебеҙҙең “вирнайҙар” ҙа тулып йөрөй. Һаҡ булығыҙ, егеттәр, абай булығыҙ, өҫтәренә барып сыға күрмәгеҙ.

— Ә был еҫерҙе ни эшләтәбеҙ? — Аҡсура, ҡаҙаҡ малайына күрһәтеп, эйәк атты.

— Үҙегеҙ табып алғанһығыҙ икән — үҙегеҙгә василлыҡ кылырға[117] тура килә инде, башҡа сараһы юҡ. — Тап[118] башлығы мыйыҡ аҫтынан йылмайып ҡуйҙы. — Беҙ — хәрби кешеләр, күреп тораһығыҙ, вилдан менән булашып йөрөр әмәлебеҙ юҡ.

— Һуң, ағай, беҙгә Уралға еткәнсе, беләһегеҙме, күпме бараһы?! — Әлегәсә өндәшмәй торған Байғазы тоҡанып уҡ китте.

— Ә беҙгә, мырҙам, һин әйткән Уралды урап сығып, Иҙелде кисергә кәрәк. Әлегә юлыбыҙҙың башы ла, ахыры ла юҡ һымаҡ, ҡасан өйөбөҙгә ҡайтып инерҙе үҙебеҙ ҙә белмәйбеҙ, — тине башлыҡ тыныс ҡына. — Шунан үҙең уйлап ҡара.

Аҡсура менән Байғазының шул ерҙә ауыҙы ябылды.

Яҙмыштарын Хоҙай ҡулына тапшырып, илебеҙ-еребеҙ тип тыныс тормош уңайлыҡтарынан, йәшәйеш рәхәтлектәренән үҙ иректәре менән баш тартҡан ҡурҡыу белмәҫ баш күтәреүселәр – бер яҡҡа, үҙҙәре лә уйламаҫтан, шул уҡ маҡсат менән йөрөп ятып, малай ҡоронан яңы сыға килгән ҡушағалар икенсе яҡҡа юл тотто. Алыҫ та, ҡатмарлы ла ул юлдар, ни менән тамамланыры ла билдәһеҙ. Үтәһе юлдар кемделер мәңгелек данға күмһә, кемделер бөтмәҫ хурлыҡҡа батырыр, әлегә уныһын береһе лә белмәй...

Әсә һөтөн туйғансы имеп, әсә ҡосағында танһығы ҡанғансы иркәләнергә лә өлгөрмәгән ҡыр-ҡаҙаҡ малайы Һаҡмарбаш түңгәүерҙәре араһына ана шул рәүешле килеп эләкте. Үҙенең имсәк балаһы булыуға ҡарамаҫтан, кеше йәнле Ғәлимйән уны шунда уҡ уллыҡҡа ҡабул ҡылды.

— Ғәлийән улыма иш булып, бергә-бергә үҫерҙәр әле шунда, бер-береһенә терәк булырҙар. Инә арыҫланға торошло Бәҙернисамдың һөтө күп, иншалла,

[117] *Василлыҡ ҡылыу — уллыҡҡа, тәрбиәгә алыу.*
[118] *Тап — хәрби төркөм.*

икеһенә лә етер, — тип сабыйҙы күтәрҙе лә алды. Шуның менән Тәңре ҡаршыһында оло сауаплы булһа, ауылдаштары алдында абруйы арта төштө.

Өс көндән өйҙәренә мулла саҡырта һалып, Табылды тип исем ҡысҡырттылар. Үҙҙәре аслы-туҡлы көн иткән Ғәлимйән менән Бәҙернисаға яҡташтары һоҡланып бөтә алманы.

Ҡыр-ҡаҙаҡтарҙың башҡорттарға иң терәшеүҙән ҡырҡа баш тартыуҙарына Биксәнтәйҙең ныҡ йәне көйҙө. "Үҙҙәрен урап үтер, тип уйлайҙармы икән ошо афәтте? — Ут күршеләренә хәтере ҡалған Түңгәүер башлығы, бошоноп, аҡ сатырында ултыра. Сатраға ул, хәл-әхүәл белешеүҙән тыш, ул-был күрһәтмәләр ҙә биреп ҡайтыу өсөн килгән ине. Әле, бер аҙ тын алырға форсат табып, яңғыҙы уйланды. — Осһоҙ-ҡырыйһыҙ булғас та, килмешәктәр далаларына бәреп инә алмаҫ, тип өмөтләнәме улар? Илбаҫарҙың Яйыҡ буйлап үткән ыҙандарына килеп терәлгәнен күрмәйҙәрме? Әллә, Башҡорт илен яулап алған хәлдә, ҡаҙаҡтарҙы һытып үтеүе илбаҫарҙарға бер ни тормаясағын аңлап етмәйҙәрме? Үҙен ҡырғыҙ-ҡайсаҡ тип атап йөрөткән халыҡтың башҡортҡа ҡарағанда тарҡауыраҡ икәнлеген урыҫ яҡшы белә. Уның тиҙерәк ыҡҡа барасағын да алдан төҫмөрләй. Шуның өсөн дә аҫтыртын ҡыланып, боласыл башҡорттарҙың ҡаҙаҡтар менән яҡынлашыуын нисек тә булдырмаҫҡа тырыша. Ике күрше ҡәүем туғанлашып китмәһен өсөн барыһын да эшләй: төрлөсә хөсөт һала, ялған тарата. Ана яңыраҡ та ни ҡылғандар бит: ҡаҙаҡ жатағының тирмәһен туҙҙырып ташлағандар, хужаларының йәнен ҡыйып, барлыҡ мөлкәтен алып киткәндәр һәм әлеге яман эште башҡорттарға япһарырға маташҡандар. Ҡырылыш урынында башҡорт һөңгөһө менән башҡорт уғының табылыуы ошо хаҡта һөйләмәйме ни? Ә бит бер ҡатлы ҡаҙаҡтың яһалма ялғанға ышанып ҡуйыуы ла бар. Унан: "Барымтаға – ҡарымта!" — тип яр һала ла башлар, көтмәгәндә ябырылып мал-тыуарыңды ҡыуып алып китер, мөлкәтеңә үрт һалыр, кешеләреңде лә аяп тормаҫ..."

Ошо мәл, Биксәнтәйҙең ауыр уйҙарын бүлдереп, сатырына Аҡсура менән Байғазы ҡотолғоһоҙ үлемдән ҡурсалап ҡалған ҡаҙаҡ малайы Табылды килеп инде. Иш янына ҡуш һанап уны улы яһаған Ғәлимйән: "Табып алынған икән, тимәк исеме лә Табылды булырға тейеш", — тине һәм әйткәнендә торҙо. Теге ваҡыт, көтмәгәндә ябырылып, Әхмәтйәнде һәләк итә яҙғандарында, Ҡарайғыр мингәткән йәш егеттәре аяғына баҫа башлағас та үҙ яғына ҡайтарып ебәрҙеләр. Атын да, эйәр-өпсөнөн дә бирҙеләр, үҙе боҙоҡ уй менән килһә лә, ҡаҙаҡҡа бер зыяндары теймәне. Ҡыҙыҡ, башҡорт шулай барып эләгә ҡалһа, ҡаҙаҡтар ни эшләтерҙәр ине икән? Кире ҡайтармаҫтар ине, шәт. Сахради әҙәмдәр[119] ундайҙарҙы ҡол итеп ҡалдырыуҙы артығыраҡ күрә. Атайсал, тыуған төйәк, ҡан-ҡәрҙәшлек тигән төшөнсәләргә төкөрҙө улар. Ана, етмеш йәшлек Ғәббәс ҡарт ейәне Ғайсаны һағауылда торған еренән көпә-көндөҙ урлап алып киттеләр. Малайҙың ҡайҙалығын, тереме-үлеме икәнлеген әле һаман бер кем белмәй. Тәбиғәткә һыйынып үҫкән тау-урман кешеһенең ҡола ялан менән ҡотһоҙ далала толҡа таба алмаҫын аңламаймы  улар? Әгәр тере икән, нишләп тоталарҙыр байғош малайҙы? Бер ғәйепһеҙ баланы тыуып-үҫкән еренән, ата-әсәһенән көслөк менән айырыу өҫтөнә, фани донъя ҡыуанысынан күрәләтә мәхрүм итеп иңдәренә оло гонаһ йөкмәүҙәрен, теге донъяла мәңгелеккә тамуҡ киҫәүе буласаҡтарын белмәйҙәрме? Әлбиттә, беләләр! Әммә яһилдарға бөгөнгөһө ҡәҙерле. Уларға бушлай эш көсө кәрәк. Хәйер, үҙ тамағын көскә туйҙырып йөрөгән ярлы жатаҡ был аҙымға бармаҫ, ә бына хәллерәктәре...

---

[119] *Сахради әҙәмдәр — дала кешеләре.*

Тумалаҡ Табылды, тәнтерәкләп килеп, бәләкәс ҡулдары менән Биксәнтәйҙең тубығына ҡағылды ла, ебәк уҡалы ялтыр еләнен һыйпаштырып, һаҡау телен болғай-болғай нимәләр һөйләп маташҡан булды. Башҡорт старшинаһы шыраулы усы менән ҡаҙаҡ малайының шырт сәсен һыпырҙы.

— Эй, сабый... Гонаһһыҙ сабый. Ҡасан ғына хәл өҫтөндә ята инең, әле тумырандап сығып та киткәнһең. Һиңә рәхәт, сит ерҙәрҙә йөрөп ятҡаныңды ла, икенсе һауа һулап, ят һыу һыулағаныңды ла әлегә белмәйһең. Үҙеңсә әсәйле лә, атайлы ла булып йөрөйһөң, шунлыҡтан үкһеҙ етем икәнлегеңде тоймайһың. Шулай ҙа килер бер мәл, бөтәһе лә асыҡланыр, барыһына ла төшөнөрһөң. Ул сағында ни уйлап, ни ҡылырһың икән? Шыуыша башлағандан аңһыҙ рәүештә ҡабул итеп, артабан яратып киткән Башҡорт илен ташлап сығып китерһеңме? Әллә биләүҙә сағыңдан һыйындырып, үҙ балаһы менән йәнәш һиңә лә урын тапҡан, наҡыҫ ризығы менән һис икеләнеп тормай уртаҡлашып, әсә наҙы менән әсә йылыһы биргән, атай терәге, атай таянысы бүләк иткән кешеләрҙе, икенсе Ватанға әүерелгән ереңде ҡалдырып китә алмаҫһыңмы? Ир ҡорона ингәс, нindәйерәк әҙәм булып сығырһың һин?..

— Табылды-ы! Табылды, балам! Ҡайҙа ғәйеп булдың да ҡуйҙың? Табылды-ыу!

Биксәнтәйҙе Ғәлимйән ҡатыны Бәҙернисаның сәрелдәк тауышы һиҫкәндерҙе. Ул сабыйҙың йомшаҡ ҡулын услап тотто ла тышҡа алып сыҡты.

– Малайың бында, килен.

– Уф, Аллам, балаҡайым! Ҡотомдо алдың бит, ә! — Ғәлийәнен күтәргән Бәҙерниса, йүгермәндәп килеп, Табылдыны ҡулына алды. — Яманйылғаға төшөп киттеме әллә, тип йөрәгем ҡалманы.

“Ҡара һин уны, бөтөнләй сит-ят бауырҙы балам тип өҙөлөп тора Бәҙерниса килен. Һай, башҡорт бисәһе! Күңел тарлығы тигән нәмәнең осмото ла юҡ үҙендә! Ә ул ҡайҙан килә? Әлеге шул атай-олатай, әсәй-өләсәй тәрбиәһенәндер. Тәрбиә быуаттан быуатҡа, быуындан быуынға бирелеп, ҡаныңа, булмышыңа нығынып, һеңешә бара. Күңеле йомарт, ҡуш йөрәкле, ихлас кеше тар эсле әҙәм тәрбиәләй аламы? Икеле...“

— Үҙе килеп индеме, ҡайнаға? — Килен кеше аптырап бот сапты.

— Үҙе килде. Тәпәй-тәпәй баҫып килде лә инде. Рөхсәт тә һорап торманы. Старшинаға булышам тип йөрөгән көнөләр, күрәһең.

— Уй-й, унан ярҙамсы сыҡҡансы... Бимазалап йөрөргә эшкинә былай. Бигерәк йөрөмтәл!

— Шәп малай күренә, сос булыр.

— Ҡарап ҡына тормаһаң, күҙ менән ҡаш араһында ғәйеп була ла ҡуя. Бына әле лә ҡорот менән булған арала...

– Башта ауырыраҡҡа төшһә лә, түҙергә тура килә инде, килен, — тип ҡуйҙы әҫәрләнеп киткән Биксәнтәй. — Уның ҡарауы, ҡул аҫтығыҙға инә башлаһалар, үҙегеҙгә бер ярҙамсы, йыуаныс булырҙар. Тәрбиәләгеҙ, үҫтерегеҙ, изгелек ерҙә ятып ҡалмаҫ...

— Алла бирһә, тип әйтәйек. — Һәләк ҡәнәғәт Бәҙерниса шул ерҙә бер ҡарышҡа үҫеп китте. Үҫмәй һуң, старшина һынлы старшинанан шундай һүҙ ишет әле! — Әйткәнең килһен инде, ҡайнаға.

Кешегә күп кәрәкме ни?! Ана, Бәҙернисаға ла бер генә йылы һүҙ етте. Ике малайын ике ҡулына күтәргән килеш ул әллә кем булып ҡайтып китте. Уға ҡатын-ҡыҙ менән, ғәҙәттә, асылып һөйләшеп бармаған, ғөмүмән, кеше менән үҙен ҡорораҡ тотҡан абруйлы ҡайнағаһы мәртәбәле һүҙ әйтте бит.

*(Дауамы бар.)*



**Фәнил
КҮЗБӘКОВ**

# ЙЫҺАН ҮЛСӘМДӘРЕ

## *Табип*

Медицина фәндәре докторы, профессор
Вәсилә Шәрифйән ҡыҙы Ваһаповаға

*Пайтәхеттә мәхшәр, ығы-зығы,—
Сабышалар —
әллә ут сыҡҡанмы?
Олуғ бүлмәһендә генә тынлыҡ,—
Бында әллә ваҡыт туҡтағанмы?*

*Бар тарафҡа сапҡын ебәрелгән:
Табиптарҙы табып килтерергә!
Хан ауырый...
Сире — сиселмәҫ сер...
Хан әмерен илгә еткерергә.*

*Берәмләп тә, парлашып та килә
Табиптарҙың илгә танылғаны.
Тик ыңғайға ғына үҙгәреш юҡ —
Яҙмышына ҡарғыш яҙылғанмы?!*

*Яҡындарҙа хәҙер башҡа ҡайғы:
Тәхет өсөн алыш бына-бына.*

---

*Фәнил Күзбәков (1952) — Мәләүез районы Әбет ауылынан. Бер нисә шиғри йыйынтыҡ авторы. Башҡорт журналистикаһы тарихы буйынса монография баҫтырҙы. Әҙәби тәнҡит өлкәһендә ҡыйыу сығыштары менән билдәле. Әле «Ағиҙел» журналының шиғриәт, әҙәби тәнҡит бүлектәрен етәкләй.*

*Бөгөн үткерләнгән хәнйәр осо*
*Ҡемдең генә инер арҡаһына?*

*Иң сабыр һәм ышаныслының да*
*Көл аҫтында өмөт сатҡылары.*
*Инде нисәнселер —*
*Йәш егетте*
*Үткәрҙеләр ишек һаҡсылары.*

*Йәп-йәш күренһә лә, сыҡҡан, тиҙәр,*
*Ғилем тигән сал диңгеҙҙе йөҙөп.*
*Аҙаҡ бар белемен мәмерйәлә,*
*Уңға-һулға барлап, алған һөҙөп.*

*Хужаларса ышаныслы баҫа,*
*Ыҫмалалай ҡараш — арбар йылан.*
*Ҡулға ҡулы менән ҡағылыуҙан*
*Яҡтырып та китә төҫлө йыһан.*

*Һөйләшеүе...*
*Моң ағыламы ни?!*
*Һорай...*
*Тыңлай, —*
*гүйә, донъя сыңлай.*
*Күк ҡабағы асылғандай итеп,*
*Йәшәгеләр килә йырлай-йырлай.*

*Ҡумтаһында кипкән үлән, сәскә,*
*Төнәтмәнең булыр йөҙ төрлөһө.*
*Ағыуҙы ла дарыу итә алыр*
*Һынсыл табиптарҙың зиһенлеһе.*

*Көнләп кенә түгел, һәр сәғәтләп*
*Сырхау хәле китте яҡшырыуға.*
*Һәм, ниһайәт, үтәр мәле етте*
*Биргән вәғәҙәне зат-ырыуға.*

*«Йә, әйт, егет, нимә теләр инең:*
*Вәзир...*
*Йәриәләр...*
*Алтын-көмөш?..*
*Төп байлығым — һаулыҡ,*
*һин ҡайтарҙың —*
*Әүлиәлегеңә нимә тейеш?»*
*«Мөмкин булһа, китапханағыҙға*
*Йөрөр инем...*

Миңә ошо еткән...»
Көлөмһөрәй батша:
Китап ене
Тейгән, тиеңҙәре дөрөҫ икән!

«Хуп!
Мәйелең!
Кәрәгеңсә йөрө —
Теләктәрең тыуһа, һора ғына!»
Егет иһә кисектермәйенсә
Баҫа китапхана тупһаһына.

Бында көндө шәмле төнгә ялғап,
Аҙна-айҙар баш та ҡалҡытманы!
Гүйә, сүллек аша үткән юлсы —
Һыуһын ҡандырырға талсыҡҡайны.

Китапхана — ғилем ҡапҡаһылыр,
Шар асылыр, асҡыс яраталһаң.
«Эй Хоҙайым!
Зиһенемде яҡтырт —
Нур таратыр Әбуғалисинаң!..»

## Етегәнем

Етегәнем! Көмөш сүмесеңә
Йондоҙҙарҙы һоҫтом...
Ғашиҡ инем...
Йәрем әйтһә, һинең һабың менән
Төн шаршауын йыртып
асыр инем.

Йондоҙҙарҙы хатта һинең сүмес
Тота аламы һуң?!.
Ҡойолдолар.
Әллә шашып, әллә шаярышып,
Беҙгә,
ғашиҡтарға,
һыйындылар.

Ул төндәрҙең яҡты йондоҙлоғо,
Етегәнем!
Миндә әле һаман.
Ҡайсаҡ һине болот ҡаплағанда
Мин уларҙы күккә һибә һалам.

Яҡтырып та китә барса донъям —
Был донъяма минең йыһан һыйған.

## Һағынасаҡһың

*Һин мине һағынасаҡһың*
*Һағышлы мәлдәреңдә;*
*Быҫҡаҡ ямғырҙарҙа ҡалып*
*Аҡ болан хәлдәрендә.*

*Һин мине һағынасаҡһың,*
*Сәскәләр көлгән саҡта;*
*Осар ҡоштар, талпынышып,*
*Ҡайтҡанда тыуған яҡҡа.*

*Һин мине һағынасаҡһың*
*Былбылдар һайрағанда;*
*Айҙың нурҙарына мансып,*
*Сәсеңде тарағанда.*

*Һин мине һағынасаҡһың,*
*Күреп күктә аҡ болот...*
*... Мин ҡайтырмын...*
*Ергә осҡан*
*Алһыу таң нуры булып.*

## Иблислек

*И-вҡа*

*Түрәләләрҙең ҡашҡа тәкәһе тип*
*Иҫәпләйһең һин үҙеңде күптән.*
*Көнләшерлек түгел һинең яҙмыш:*
*Һиндәйҙәрҙе Иблис үҙе үпкән.*
*Иблис үҙе үпкән...*
*Ҡарашыңда,*
*Күҙ ҡараңда уның мөһөрҙәре.*
*Текләп ҡараусылар унда күрер*
*Бейегәнен шайтан өйөрҙәре.*

*Ә шулай ҙа донъялыҡта, тимен,*
*Бар ул, бар ул бөйөк ғәҙеллектәр.*
*Көндән төнгә һәр саҡ күскән кеүек,*
*Кәрәк уға, кәрәк әҙерлектәр.*

*Ҡыуанысҡа, Иблис кенә түгел,*
*Фәрештә лә бар ул донъялыҡта.*
*Юҡһа йәшәү, мәғәнәһен юйып,*
*Юғалыр ҙа ине томанлыҡта.*

*Иблис булғас, иблислек тә булыр —*
*Бында һис урын юҡ аптырарлыҡ.*
*Бәндәләрҙең кем икәне асыҡ,*
*Ҡубып төшһә тышҡы ялтырауыҡ.*

*Ялтырауыҡ менән алдап була*
*Бер ҡатлы ла әҙәм балаларын.*
*Бөйөк ғәҙеллектең алдарында*
*Бар ни, юҡ ни бындай саралары.*

*Кеше бит ул*
*Илаһ яралғыһы —*
*Ғүмерҙәре Ер-Күк араһында.*
*Күккә талпына ул.*
*Ғазап аша*
*Таный бара ағын-ҡараһын да.*

*Ҡашҡа тәкәләргә быны аңлау*
*Бирелмәгән —*
*барҙыр гонаһтары...*
*Иблислектең нимә икәнлеген*
*Күрһәтеүҙә, буғай, бурыстары.*

***

*Күккә баҡтым...*
*Ваҡлыҡтарҙан*
*Күңелем өшөп-туңып.*
*Телһеҙ ҡалдым:*
*йондоҙ аға,*
*Тотош бер йылға булып...*

## Тынлыҡ

*Т-ға*

*Тонйорап байыуға ҡояш,*
*Ойоп, тын аға йылға.*
*Хәл алырға туҡталған ел*
*Ҡайындар араһына.*

*Был тынлыҡта тыңлар кәрәк*
*Бары йөрәк типкәнен, —*
*Уйландырмай киләсәгең,*
*Онотолған үткәнең.*

*Бары йөрәктәр аңлаша*
*Ҡосағында тынлыҡтың...*

*Асылымы был йәшәүҙең,*
*Асылымы тормоштоң?*

*Йөрәк аңлашыр тынлыҡҡа*
*Йәндәребеҙ һыуһаған.*
*Һулҡып-һулҡып тынлыҡ аға*
*Күктән,*
*Ерҙән,*
*Йылғанан.*

## Йыһан үлсәмдәре

*/Шәлкем/*

*Бәхеттең үлсәме бармы –*
*Кемдәр үлсәй икән?!*
*Һәр кемдең үҙ бизмәндәре,*
*Үҙ үлсәме микән?..*

***

*Ер ваҡытын ҡабаландырма һин –*
*Был үлсәмдәр бары тәнең өсөн.*
*Бар бит әле йондоҙ үлсәмдәре, –*
*Ә улары үлмәҫ йәнең өсөн.*

***

*Мәңгелектең саҡырыуын*
*Кем ишетә, кем аңлай?!*
*Күктә Ҡояш мәңгелекме,*
*Мәңгелекме тулған Ай?*
*... Тик моңһоҙ ғына йәшәйҙер*
*Мәңгелеккә тыуғандай.*

## Офоктарым янғанда

*Офоҡ яна...*
*Нисек шул саҡ*
*Мөмкин йоҡлап ятырға?!.*
*Арғымағымдан да алда*
*Йөрәк алға атыла.*

*Ул янғынды һүндерәм тип,*
*Һыбай сығыуым түгел.*
*Шул ялҡындан ут алырға*
*Талпынып оса күңел.*

*Юҡ! Һис тыныс ҡала алмам,*
*Офоҡтарым янғанда –*
*Йәнә бер таң, бер мәл булып*
*Мәңгелеккә тамғанда.*

## Төн сыҡҡансы

*Ҡандай шарап ҡанда уйнай –*
*Болара күңел.*
*Йырлаймы ул, илаймы ул –*
*Белерлек түгел.*

*Күҙ һарыһына мансылып,*
*Көн кискә һарҡа.*
*Бөгөнгә хушлаша ҡояш,*
*Тулған ай ҡалҡа.*

*Меңәр йыллыҡ күренештәр*
*Ҡабатланамы?*
*Сер йомғағы аҡрын-аҡрын*
*Тағатыламы?*

*... Төн сыҡҡансы яңы ептәр*
*Уралған булыр.*
*Шатлыҡтанмы, һағыштанмы*
*Күҙгә йәш тулыр.*

## Гел генә былай булмаҫ

*Сараһыҙлыҡ, ярлылыҡ –*
*Бармы алда яҡтылыҡ?*
*Ҡар-ямғырһыҙ ҡара күҙ –*
*Көндөҙ ҙә ҡараңғылыҡ.*

*Сараһыҙлыҡ, ярлылыҡ –*
*Өнһөҙ-телһеҙ ҡалырлыҡ.*
*Барған Әҙәм Хоҙайға:*
*“Һынды, – тиеп, – сабырлыҡ.*
*Ал Һин мине Күктәргә,*
*Еттем инде сиктәргә:*
*Ризалығым бар хатта*
*Тамуҡтағы уттәргә!..”*

*“Ай-й, сабырһыҙ икәнһең!..*
*Сиккә, имеш, еткәнмен.*
*Күптәрегеҙ белмәй бит*
*Сикте күптән үткәнен,*
*Сиктең нимә икәнен...*

*Һиңә һынау бөтмәгән,*
*Һуңғы көнөң етмәгән, –*
*Бирәм һиңә бер аят –*
*Яҙыуҙары кипмәгән.*

*Ишегеңә элерһең,*
*Көн дә уҡып йөрөрһөң.*
*Һис тә сабырһыҙланма –*
*Яҙғаныңды күрерһең!”*

*Ҡайтҡан Әҙәм ашығып,*
*Тигеҙ ерҙә абынып,*
*Өмөт тигән осҡондо*
*Йөрәгендә ҡабыҙып.*

*Аят тиһәң дә аят!*
*Күңелдә тора йырлап:*
*“Гел генә былай булмаҫ!”*
*Ай ҙа ҡабатлай һымаҡ.*

*Ҡайтҡас та ишегенә –*
*Гел иҫкә төшөрөргә –*
*Элеп ҡуйған аятты...*
*Ҡала, тип, тикшерергә.*

*Хоҙайҙың киң ҡөҙрәте:*
*Килеп еткәс мөҙҙәте,*
*Яйға һалынған эше, –*
*Был әҙәм инде Ҡеше!*

*Даны ла бар, малы ла,*
*Ҡунаҡ йыйыр яйы ла.*
*Тик ишектәге яҙыу*
*Һала хәҙер ҡайғыға.*

*Йәнә Хоҙай алдына*
*Бер көн килеп баҫты ла*
*Һораны, ти, ялуарып*
*Хаҡ аятты алырға.*

*“Һин, бисара, бер ҡатлыһың,*
*Етмәһә бер яҡлыһың...*

Сикте үтмә!
Табалырһың
Урталыктың алтынын.

Ҡабатла — доға боҙолмаҫ:
“Гел генә былай булмаҫ!..”

## Ҡыу япраҡтар

Йондоҙҙарға ҡырау ятҡан бөгөн —
Өшәнгәндәр... Балҡыштары һалҡын.
Ҡырау ҡурған япраҡтарҙы йыйып,
Көҙгө урманда мин усаҡ яҡтым.

Устарымды йылытырлыҡ ҡына
Ҡыу япраҡтың барлыҡ йылылығы.
Әммә йөрәк ҡуҙын ҡыҙыулата
Алтын һипкән көҙҙөң моңһоулығы.

Бөгәрләнеп, һуңғы тапҡыр гөлтләп,
Көлгә әйләнәләр япраҡтарым...
Кинәт ҡайһыһылыр һулҡылданы:
“Ҡайҙа ҡалды йәшел йәш саҡтарым?!.”

***

Юҡ!
Өндәшмә...
Мәле килер...
Әле юҡ һүҙ ҡәҙере.
Үҙ ҡәҙерең ебәргәнсе,
Һүҙҙе елгә елгәргәнсе
Өндәшмәүең хәйерле.

## Өндәшмәйем

Һеҙгә —
Шиғыр-йырҙы
Белмәгәндәргә,
Ысыҡлы йәшел үләнде
Кисмәгәндәргә,
Таң ҡыҙылын төшөндә лә
Күрмәгәндәргә,
Былбыл моңон йөрәгенә
Үрмәгәндәргә —
Өндәшмәнем,
Өндәшмәйем!..



**Зөһрә**
**АЛТЫНБАЕВА**

## *Башҡортостан – тыуған ергенәм!*

*Башҡортостан – мөғжизәләр иле.*
*Тап килгәндер Хоҙай юрауы.*
*Ҡитғаларҙы хатта хайран итә*
*Башҡорт балы, башҡорт ҡурайы.*

*Таң нурында наҙлап бер уятһа*
*Оҫта ҡулдарының ҡумыҙы,*
*Ошо көйгә бейеп китер кеүек,*
*Ауыҙ итһә кеше ҡымыҙын.*

*Яныҡ торған тау ҙа бер хазина,*
*Хоҙай үҙе биргән бүләккә.*
*Янғантауҙа баҫып теләгәндә*
*Аша, тиҙәр, барса теләктәр.*

*Башҡортостан – Балҡортостан иле.*
*Тел осонда тора бал тәме.*
*Бал ҡортолай уңған халҡыбыҙҙың*
*Күңелендә һәр саҡ ил ғәме.*

---

*Зөһрә Алтынбаева (1951) – Мәсетле районының Ләмәҙтамаҡ ауылы ҡыҙы. Мәсәғүт педагогия училищеһын, БДУ-ны тамамлай. "Ватандаш" журналы редакцияһында бүлек мөдире. Яҙыусылар союзы ағзаһы.*

*Ҡәләмдәшебеҙҙе 60 йәше менән ихлас тәбрикләйбеҙ!*

*Башҡортостан — тыуған, үҫкән ерем,*
*Ғәзиз ерем минең, булмышым.*
*Мин бәхетле һиндә яҙылғанға*
*Ҡыуандырып торған яҙмышым.*

## Заман шаңы

*Баҙар иҡтисады тигән булып*
*Алыпһатар ғәләм ҡыуана.*
*Алдап һата белгән мал-дан йыя,*
*Һата белмәгәндәр — диуана.*

*Ата — улын, әсә ҡыҙын һата.*
*Ер йөҙөнә килде ни заман?*
*Аҡыллыға барыр юлы ябыҡ,*
*Аҡылһыҙы — түрҙә.*
*Шул яман.*

*Түр башында доға уҡыр инәй*
*Юл сатында хәйер һораша.*
*Ил инәһен түбәнһеткән яһил,*
*Үҙ башына микән, һай, шаша.*

*Бүләк кенә булған был ғүмерҙе*
*Яуызлыҡтан кемдәр ҡотҡарыр?*
*Кешелектең аҫыл ташы булған*
*Изгелекте кемдәр атҡарыр?*

## Яңы кышка

*Барса донъя ап-аҡ.*
*Сихри тынлыҡ.*
*Барса тараф талған йоҡоға.*
*Ҡыш үҙенең аҡ буяуы менән*
*Күҙҙе арбар келәм туҡыған.*

*Төнгө тынлыҡ.*
*Баш осонда ғына*
*Йондоҙ ямғырҙары һибелә.*
*Ҡыш биҙәгән ошо серле донъя*
*Әкиәт булып күсә күңелгә.*

*Аҡ бәхеттәр, аҡ өмөттәр юрап*
*Өр-яңы ҡыш килде тағы ла.*

*Тәүге ҡарҙар, ап-аҡ тәңкә төҫлө,*
*Күңел ҡылдарына ҡағыла.*

## *Ғүмер*

*Ғүмер үҙе бейек бер тау кеүек.*
*Артылаһың уның үренә.*
*Балҡып тора ул үҙенә тартып,*
*Бейек түгел һымаҡ күренә.*

*Йәшлек менән тауҙың үрҙәренә*
*Артылаһың артыҡ арымай.*
*Бар хыялың — яңы үрҙәр яулау,*
*Бәлә-ҡазаларға тарымай.*

*Әммә тауҙар таш-ҡаянан тора.*
*Абайламай ҡалһаң — таяһың.*
*Тәндә түгел, йөрәктәрҙә ҡала*
*Яралары һәр бер ҡаяның.*

*Ә шулай ҙа үҙе оло бәхет —*
*Ҡая баштарына менеүе.*
*Тауҙар төҫлө ғорур үтке килә*
*Хоҙай биргән ошо ғүмерҙе.*

## *Үпкәләнем әле көҙгөгә*

*Нисә йылдар тоғро серҙәш булды*
*Стенала торған көҙгөбөҙ.*
*Семәрле лә рам — сер донъяһы,*
*Балҡый ине унда йөҙөбөҙ.*

*Ашыҡҡанда һөйгән йәрең менән*
*Күрешергә тиеп, һағынып,*
*Килә инем көҙгө ҡаршыһына —*
*Бары матурлыҡҡа табынып.*

*Сибәр итә ине мине көҙгө.*
*Ҡаштар — ҡыйғас, күҙҙәр — һөрмәле.*
*Баға ине унан шаян бер ҡыҙ,*
*Оялыуҙан теле көрмәлеп.*

*Һағыҙаҡтай нәҙек билкәйенә*
*Сылбыр булып билбау тағылған.*

*Дәрт-дарманы урлылып та тора,*
*Ҡарашына ялҡын яғылған.*

*Ә бөгөн һуң?!*
*Бөгөн ул күҙгөнән*
*Баҡты миңә ябыҡ бер ханым.*
*Һүнгән ҡараш һағыш менән тулы,*
*Булмай ине уны һис танып.*

*Йылдар, йылдар?!*
*Ниңә һеҙ күҙгөнө*
*Ҡартайттығыҙ –*
*Булмай таныр та.*
*Күҙгөләрҙә ҡалған матурлыҡты*
*Эҙләп кенә булмай, табып та...*

## Ҡарама һин миңә, ҡарама

*Ҡарама һин миңә, ҡарама,*
*Боҙҙар өҫтәп һалған яраңа.*
*Һалҡын ҡышта йылы ел иҫәме,*
*Әллә өмөт шулай ярала?*

*Ҡарама һин миңә, ҡарама.*
*Илаҡ болоттар ҙа тарала.*
*Үткәндәрҙә ҡалған өмөттәр,*
*Мөмкин түгел һөйөү өгөтләп.*

*Ҡарама һин миңә, ҡарама,*
*Һағыш һалма, зинһар, ярама.*



**Мөнир**
**ВАФИН**

## *Ғүмер һуҡмағы*

*Баш юғалтырҙай елдерәм*
*Мин ғүмер һуҡмағынан.*
*Сабыптар ҡасып булһасы,*
*Эх, ваҡыт туҡмағынан.*

*Һуҡмаҡтың арғы осонда*
*Бер малай тора көлөп.*
*Бала саҡ — ҡыҫҡа ғүмерле,*
*Бөтөрмәй әле белеп.*

*Һуҡмаҡ сикһеҙ тойолһа ла,*
*Уның осо ҡаршымда.*
*Ҡартлығым ҡул иҙәп тора*
*Һуҡмаҡтың был башында.*

*Ҡартлығыма йәнәш кенә*
*Сәйер зат ҡарап тора;*
*Аҡ кейемен елферҙәтеп,*
*Салғыһын яныплап тора.*

*Мөнир Вафин (1961) Бәләбәй районының Мәтәүбаш ауылынан. БДУ-ның филология факультетын тамамлай. Өс шиғри йыйынтыҡ авторы. «Толпар» журналы редакцияһында эшләй. Яҙыусылар союзы ағзаһы.*
*50 йәшең менән, ҡәләмдәш! Ижади үрҙәр теләйбеҙ.*

* * *

*Үрелеп тә етә алмаҫлыҡ*
*Ине күктәр элек.*
*Хәҙер инде улар күпкә*
*Түбәнәйҙе кеүек.*

*Ҡояштың да йылдар ҡары*
*Нурын һалҡынайта.*
*Күктәр, иңдәремә баҫып,*
*Ергә яҡынайта.*

* * *

*Китеп барҙы ауылыбыҙҙың*
*Мискә яһау оҫтаһы.*
*Унан мейессе һәм итексе —*
*Бар алтын ҡул, ҡыҫҡаһы.*

*Бер кем өйрәнеп ҡалмаған*
*(Ғәжәпләнәм ир-атҡа).*
*Шулай итеп, һөнәрҙәр ҙә*
*Күмелә зыяратҡа.*

*Кибернетик заман, тиҙәр,*
*Көн дә асыш, көн дә дан.*
*Ғәжәп түгел, һуңғы шағир*
*Китеп барһа аранан.*

* * *

*Ғүмер-ғүмер ниҙер етмәй*
*Әҙәм балаһына.*
*Тыуған ауылын һағыныр өсөн*
*Китә ҡалаһына.*

*Хатта һөйгән кешеләрен*
*Алыштырып туймай.*
*Әммә ләкин ғүмер буйы*
*Беренсеһен уйлай.*

*Баш һындырып донъя ҡыуа,*
*Эҙләй ул, эҙләнә.*
*Ахыр килеп нигеҙенә*
*Ҡайтып бер теҙләнә.*

*Башҡа төрлө финалдар юҡ*
*Әҙәмдәр затында:*
*Таба бер  көн эҙләгәнен*
*Тыуған зыяратында.*

## Тыуған як нараттары

*Ауылыма кергән ерҙә генә*
*Теҙелешеп тора нараттар.*
*Бер күрергә зар-интизар булып,*
*Өҙөлөшөп тора нараттар.*

*Юлдар төшһә, әллә ҡайҙан күреп,*
*Йүгерешеп ҡаршы алалар.*
*Киткән саҡта,  ебәрмәҫкә теләп,*
*Юлды бүлеп, алға ауалар.*

*Офоҡтарҙан мине күҙләй-күҙләй,*
*Буйға үҫте улар һуҙылып.*
*Ауылдаштар, бәлки, һағынмайҙыр*
*Ул нараттар кеүек өҙөлөп...*

## Ҡороған ағас

*Скелеттай ағас,*
*Аяғөҫтө үҙе.*
*Әйтә алмаһа ла,*
*Шулдыр уның һүҙе:*
*«Тупраҡтан айырылып,*
*Ҡайһы тереклек ота,*
*Мине, аумаҫ өсөн,*
*Тамырҙарым тота».*

*Ағас — кеше түгел,*
*Улар башлы күпкә.*
*Беҙ тамырһыҙ-ниһеҙ*
*Үреләбеҙ күккә.*

*Ҡороп бөткән  ағас*
*Нисек аумай тора?*
*Тыуған тупраҡ көсөн*
*Ағастарҙан һора.*

* * *

*Ауылдарҙан йәштәр генә түгел,*
*Китеп бара ҡайсаҡ ҡарттар ҙа.*

*Ҡартлыҡ һәм яңғызлыҡ, ҡулдан алып,*
*Ҡалаларға илтә ҡаҡларға.*

*Ундайҙарҙы таныу ауыр түгел*
*(Булһалар ҙа шаҡтай аҙ улар) —*
*Көтөү ҡайтыр ваҡыт етеү менән*
*Балкондарға сығып баҫалар.*
*Ҡай тарафта ауылы? Белмәһә лә,*
*Ҡараштары булыр йыраҡта.*
*Трамвай-троллейбустар гөрөлтөһө*
*Сыбыртҡылай тойолор ҡолаҡҡа.*

*Оҙаҡ үтә бында секундтары,*
*Ҡыҫыр ғына тыуа таңдары.*
*Кәүҙәләре менән — ҡалаларҙа,*
*Ауылдарҙа ҡалған йәндәре.*

*Балкондарға ер йылыһы йыраҡ —*
*Балкондарҙа оҙаҡ тормайҙар.*
*Их, ауылға тиҙерәк ҡайтырға, тип*
*Кәфенлекте кереп барлайҙар...*

* * *

*Алты мөйөшлө ағас өйҙөң*
*Һис булманы бушағаны,*
*Яҙмышы ла, яңылышы ла*
*Атлаттырҙы буҫағаны.*

*Хужалар һуҙҙы ҡулдарын*
*Ярҙам һорап кергәндәргә,*
*Мейес йылыһын ҡыҙғанманы*
*Өшөп, туңып йөр(ө)гәндәргә.*

*Фажиғәгә ишек асыҡ —*
*Өйҙө янғын ялмап алды.*
*Күмер, кисәү араһында*
*Тик һерәйеп мейес ҡалды.*

*Етем мейес хәлкәйҙәре...*
*Мөмкиндер ниҙер ҡылырға?!*
*Һалҡындарға түҙә алмай,*
*Арҡа эҙләй йылынырға.*

* * *

*Ер күсәре ғыжлай, халыҡ гөжләй,*
*Донъя тулды тамам шау-шыуҙарға.*
*Тынлыҡ һорап күктәр батшаһынан*
*Күккә ҡарап микән бер олорға?*

*Көпә-көндөҙ күккә ҡарап олой.*
*Ситтә торһон өйөр бүреләрең.*
*Бындай илдә әҙәм булыуҙарҙан*
*Бәхеттер ул бүре булыуҙарың.*

*Шау-шоуҙарға абынып, бәрелә-һуғыла,*
*Килеп керәм зыяраттарға, шашып.*
*Йәп-йәш кенә ҡәбер өҫтәрендә*
*Аҡ күбәләк тора башын ҡашып.*

*Ләхеттәргә төшөп баш төртөүҙе*
*Аяныслы тиеү — хаталыр ул.*
*Әҙәм бары тыныслыҡҡа туймай*
*Ҡәберҙәргә төшөп яталыр ул...*

* * *

*Атай минән сәс алдыра ине*
*(Һис башҡанан түгел, тик минән).*
*Әллә инде һирәк ҡайтҡанғамы,*
*Ул ҡырҙыра ине төбөнән.*

*Атай башын ялт иттерә инем*
*(Һис булманы минең иренгән),*
*Уның өсөн — нисек, ә миңә был*
*Ябай бер эш булып күренгән.*

*Улдарынан сәс алдырыуҙарҙы*
*Ғөрөф-ғәҙәт типме белгәндәр?!*
*... Атайымдың ҡәбер өҫтәрендә*
*Ҡурпыланып үҫкән үләндәр...*

## ***Һуңғы күмер***

*Яндырҙың да китеп барҙың,*
*Эй, шунан яныуҙарым.*
*Һуңғы күмергә ҡалғансы*
*Һине һағыныуҙарым.*
*Йылдар үткәс килдең дә ул...*
*Хәҙер нисек янаһың?*

*Ә һин, терһәгеңде тешләп,*
*Көлөмдә бутанаһың...*

* * *

*Йондоҙ кеүек яналмайһың, тиеп*
*Мәсхәрәләп әйтһәң бер көлөп,*
*Һауаларҙа йондоҙ булыр инем,*
*Ҡарар булһаң күккә үрелеп.*

*Яныуымды шунан аңларһың да*
*(Ялҡындарҙай булып бөркөлһәм).*
*Атылыптар һүнергә лә риза,*
*Яныуымды әгәр бер күрһәң.*

* * *

*Күпме «дуҫтар» дуҫлыҡ имтиханын*
*Бирә алмайса һынып ҡалдылар,*
*Ҡапсыҡ тоҙҙо уртаҡ ашау түгел,*
*Бер ус тоҙҙан тынып ҡалдылар.*

*Ә шулай ҙа дуҫтар була икән*
*Бар михнәтте уртаҡ һөйрәгән:*
*Бер аҙым да мине ташлап китмәй*
*Йәнәшәмдән килә... күләгәм.*

* * *

*Йүгер әле,*
*Сап ҡаршыма,*
*Беренсе мөхәббәтем.*
*Беренсе рәхәтем минең,*
*Беренсе йәрәхәтем.*

*Һарыл әле муйыныма,*
*Ире әле ҡосаҡта.*
*Ҡабатланһын һөйөлөүҙәр*
*Йәшлектәге — ҡарт саҡта.*

*Ҡаршы саба, сәстәре сал,—*
*Беренсе мөхәббәтем.*
*Һуңлаған рәхәтем минең,*
*Мәңгелек йәрәхәтем...*

# *Сәсмә әҫәрҙәр*



**Наил**
**ҒӘЙЕТБАЙ**

*“Тамаша” журналының етәксеһе булып эшләгән осорҙа һәр һан өсөн “Мөхәррир һүҙе” яҙа инем. 15 йыл эсендә бер колонкаға һыйырлыҡ алтмыштан ашыу кескәй генә мәҡәләләр баҫылған. Улар матди һәм рухи донъя, бәхет һәм дөрөҫ йәшәү, байыу һәм дан яулау, көнсөллөк һәм үс алыу, хеҙмәт һәм ял, мөхәббәт һәм ғаилә һ.б. тураһында. Уҡыусыларға минең яҙмалар бик оҡшаны. Һәр хәлдә, осрашыуҙар ваҡытында – уҡыусылар, тап булышҡанда таныштарым, дуҫтарым “Мөхәррир һүҙе”н бик яратып ҡабул итеүҙәрен әйтәләр һәм уны уҡыу өсөн журналдың киләһе һандарын көтөп алыуҙарын белдерәләр ине. Иң мөһиме – был бәләкәй мәҡәләләрҙең бөтәһен дә бергә йыйып баҫтырырға йә иһә айырым китап итеп сығарырға тәҡдим иттеләр. Мин үҙем дә күптән был хаҡта уйлана инем. Ниһайәт, форсат тыуҙы.*

*Әлбиттә, был баҫмаға әҙерләгәндә, бөтә мәҡәләләрҙе яңынан ҡарап сығарырға, бер аҙ үҙгәртергә, ҡабатланған урындарын алып ташларға тура килде. Шуға ҡарамай, улар, нигеҙҙә, “Тамаша” журналында нисек донъя күргән – шулай ҡалды. Әммә шуны ла иҫкәртергә кәрәк тип һанайым. Биш мәҡәләлә (“Нәфсе”, ”Маҡсат”, “Бәхет хаҡында”, “Дөрөҫ белем”, “Кешегә күпме кәрәк?”) “кешегә булғаны етә” тигән һөйләм бар. Йәнә биш мәҡәләлә (“Маҡсат”, “Бәхеткә сәйәхәт”, “Бәхет хаҡында”, “Хәҙерге мәл”, “Төп ҡағиҙә”) “ошо секундта кеше һәр саҡ бәхетле” тигән фекер әйтелә. Был һөйләмдәр ҡабатланһа ла, ул мәҡәләләр йөкмәткеһе менән ныҡ айырыла һәм төрлө фекергә илтә. Ошо сәбәпле уларҙы үҙгәртмәйенсә ҡалдырырға кәрәк тип таптым.*

*Тағы шуны әйтеү ҙә мотлаҡ: был мәҡәләләрҙе һис тә әҙмә-әҙлекле уҡыу кәрәкмәй. Улар бер-береһенә бәйләнмәгән, шуға күрә йәнең теләгән ерҙән алып уҡырға мөмкин.*

*Шулай итеп, ҡәҙерле уҡыусылар, “Мөхәррир һүҙе” – хәҙер инде “Бәхет сере” исеме менән – йәнә һеҙҙең менән осраша. Әгәр ул һеҙгә тормошҡа саҡ ҡына икенсе төрлөрәк ҡарарға ярҙам итһә, мин бик шат булыр инем.*

# БӘХЕТ СЕРЕ

**ЭССЕ**

## *Талантһыҙҙарҙы яҡлау*

Йыш ҡына ижади шәхестәрҙән: “Донъяны талантһыҙҙар баҫты. Уларҙы сәнғәткә яҡынлатырға ярамай”, – тигәнерәк фекер ишетергә тура килә. Күп кенә егет-ҡыҙҙарҙы режиссерлыҡҡа уҡытыу өсөн Мәскәүгә ебәрергә иткәйнек, бер тәжрибәле режиссер: “Һәйбәт режиссерҙар күп булмай ул, ниңә уларҙы инкубатор себештәре кеүек күпләп әҙерләргә?” – тип ҡәнәғәтһеҙлек белдерҙе. Министрлыҡ янында йәш драматургтар мәктәп-лабораторияһы асҡайныҡ, икенсе бер әҙип: “Драматургтар бер көтөү булмай ул”, – тине.

Эйе, таланттар һирәк. Ләкин мең кешенән берәйһе ысын талант булып асыла икән, шул уҡ мең кешене беҙ сәнғәткә йәлеп итергә тейешбеҙ. Юғиһә, теге талант эйәһенең ситтә тороп ҡалыуы бар. Талант, башняның түбәһе кеүек, әллә ҡайҙан күренеп, ҡараштты үҙенә йәлеп итеп тора. Әммә башняның түбәһе нигеҙһеҙ йәшәй алмай. Шуға күрә лә бер талантты табыу, тәрбиәләү өсөн беҙ бик күп “талантһыҙҙар”ҙы ла уҡытырға тейешбеҙ. “Талантһыҙҙар” талантты табырға ярҙам итә һәм талант “талантһыҙҙар”ҙы сәнғәткә, йәғни рухи донъяға, матурлыҡҡа, изгелеккә йәлеп итә. Улар бер-береһенән башҡа йәшәй ҙә, ижад итә лә алмай. Шуға күрә уларға былдай ҡәтғи баһа бирергә лә ашыҡмайыҡ. Һәр кем үҙенә талантлы кеүек тойола бит. Даһи шәхес 99 процент хеҙмәттән һәм бер генә процент таланттан тора, тигән бер оло әһел. Тимәк, талантһыҙ тип һаналған кеше лә 99 процент хеҙмәт түкһә, сәнғәт өлкәһендә ҙур уңышҡа өлгәшә ала.

## *Көнләшеү*

Ижад кешеләре йыш ҡына бер-береһенән көнләшеүсән, шул арҡала үҙ-ара дошманлашыусан була. Күптәр быға ҡаршы көрәшеп маташа, көнләшеүселәрҙе ҡаты тәнҡитләй, әммә ижадсыларға көнләшеүҙән ҡотолоп булмай тиерлек. Ни өсөн? Сөнки бала саҡтан уңыш ҡаҙанырға, дан яуларға, һәр саҡ беренсе урында булырға хыялланған, уның менән һоҡланыуҙарын теләгән кеше генә яҙыусы, рәссам, артист һөнәрен һайлай. Әммә белем алып эшләй башлағас, ул үҙенең янында тағы ла 99 кешенең шулай уҡ беренсе булырға, дан ҡаҙанырға ынтылыуын күрә. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, беренсе урын – берәү генә, уға бер генә кеше үҙенең һәләте, егәрлелеге, холҡо, аралаша белеүе менән өлгәшә ала. Ә башҡаларға икенсе, өсөнсө һ.б. урындар эләгә. Һин теләйһеңме, теләмәйһеңме, үҙеңде уҙып китеүселәргә ҡарата көнләшеү тойғоһо барлыҡҡа килә. Сөнки был ғәҙелһеҙ кеүек тойола: “Ул да шул минең кеүек кеше. Ниңә ул – беренсе, ә мине күреүсе лә юҡ?!”

Шулай итеп, ижад кешеһенең һөнәрендә, уның мәғәнәһендә дан ҡаҙанырға, йәғни беренсе булырға теләү һалынған, ә инде була алмаһаң, үҙеңде уҙып киткәндәргә ҡарата көнләшеү йәшерелгән. Бынан ҡотолоуы ауыр. Шуға күрә көнләшеүселәрҙе, ғөмүмән көнләшеүҙе тыныс ҡабул итергә кәрәк һәм, ижад кешеләренең барыһы ла бер-береһенән көнләшә, тип әрләргә генә ярамай.

...Көнләшеүҙән ҡотолоп булмай, тинем. Үҙемдең тәжрибәм менән уртаҡлашайым әле. 80-се йылдар аҙағында драматургияға Флорид Бүләков менән мин бергә килеп индек. Беҙҙең пьесалар Башҡортостан менән Татарстан театрҙарын

яуланы. Һәм беҙҙе сағыштыра башланылар: “Флорид шәберәк яҙа, Наил – хөртөрәк” йәки киреһенсә. Кешеләр сағыштырғас, мин уйланырға тотондом, һәм ирекһеҙҙән көнсөллөк тойғолары тыуа башланы. Шунда мин үҙ-үҙемә әйттем: “Флорид минән талантлыраҡ, Флорид – беренсе, мин – арттағы рәттә”. Һәм бөтә ерҙә шуны тылҡырға тотондом. Хатта ҡайһы берәүҙәр мине Флоридтан өҫтөн ҡуйырға маташһа, уларҙы үҙем төҙәттем: “Һеҙ яңылышаһығыҙ. Флорид минән һәйбәтерәк яҙа”. Һәм ғәжәп: үҙемдең Флоридҡа ҡарағанда түбәнерәк торорға тейешлегемде аңлағас, көнләшеү бөттө. Шундай еңел, рәхәт булып китте, хатта күңелдә оло ҡыуаныс тыуҙы.

Күрәһең, көнләшеү үҙ һәләтеңде артыҡ юғары баһалауҙан килә. Шуға көнләшеүҙән ҡотолоу өсөн үҙеңдең урыныңды аңларға кәрәктер.

## *Нәфсе*

Аслыҡтан, һыуһауҙан үлергә етешкән хәйерсенең аҡтыҡ үтенесе – бер сынаяҡ һыу. Сарсауын ҡандыра алһа, бер телем икмәк менән донъяһы теүәлләнер һымаҡ уға. Әммә быныһына ла өлгәшкәс, ул: “Их, майлап ашарға ине,” – тип хыяллана башлар. Ә инде майланған икмәкте лә ҡорһағына оҙатҡас, уның нәфсеһе кәнфит-шәкәргә ынтылыр… Эйе, кеше бер ҡасан да алдындағыһына ҡәнәғәт булмай. Һәр саҡ күберәкте уйлай һәм шул арҡала үҙ-үҙенә бөтмәҫ-төкәнмәҫ эш, башына тынмаҫ ауырыу таба.

Ә нәфсенең сиге буламы икән? Кеше бер ваҡыт: “Бына мин, ниһайәт, теләгемә ирештем. Башҡаса бер ни ҙә кәрәкмәй”, – тип әйтә аламы? Юҡтыр. Сөнки, ғәҙәттә, йөҙ һумы булған кеше мең һум хаҡында хыяллана. Мең һумдың хужаһы “миллион” тип баш вата… Яңыраҡ гәзиттә донъялағы иң бай миллиардерҙың интервьюһын уҡырға тура килде. Бына уның бөтә нәмәһе бар, уға бер ни ҙә кәрәкмәйҙер кеүек. Әммә ул аҡсаның һыу кеүек юғалыуына, байлығын арттырыу өсөн туҡтауһыҙ йүгерергә кәрәклегенә зарланған…

Эйе, бахыр кеше бер ҡасан да үҙен ваҡытында туҡтата белмәй шул. Ә, ғөмүмән, быға өлгәшеп буламы икән һуң? Бер аҡыл эйәһе, әҙәм балаһына булғаны етә, тигән… Ғәжәйеп аҡыллы һүҙҙәр, минеңсә! Әйҙәгеҙ, бер генә минутҡа туҡтап, ошо һүҙҙәрҙең мәғәнәһенә төшөнөргә тырышайыҡ әле.

Һеҙҙең бөгөн ашарға ризығығыҙ, кейергә кейемегеҙ бармы? Бар ҙа ул, тиерһегеҙ. Булғас, нимә тип һеҙ өсөнсө көн тирләй-бешә саптығыҙ? Кисә ҡайғырҙығыҙ? Ә бөгөн шул тиклем борсоулыһығыҙ?

Кешегә бит бик аҙ кәрәк. Ошоно аңламаған әҙәм генә һәр саҡ борсоулы, ул ғына туҡтауһыҙ саба, башҡалар менән талаша, башы һис ҡасан хафанан сыҡмай.

Ә кешегә булғаны етә. Ошоға төшөнгәндең генә күңеле тыныс, ҡайғырырға сәбәбе юҡ. Ул ғына ысын мәғәнәһендә бәхетле был донъяла…

## *Яҡшылыҡ һәм насарлыҡ*

Баланың теше һыҙлап китеп, врач уны һурырға ҡарар итһә, кескәй йән эйәһе ҡурҡып иларға тотона. Теш һыҙлау – кескәй генә бер гонаһтың (ваҡытында теш таҙартмауҙың) һөҙөмтәһе. Һәм бала яза ала – теше һыҙлай, йәғни гонаһлы бала таҙарыныу өсөн ауыртыу аша, ҡыйынлыҡ аша үтергә тейеш – уның тешен һуралар. Шулай итеп, яҡшылыҡ (йәлләп тешен һурмау) балаға оҙайлы ғазаптар килтерә, күрәләтә эшләнгән насарлыҡ (ауырттырып тешен һурыу) уны ғазаптан ҡотҡара. Кескәй йән эйәһе быларҙы аңламай, әммә ололар тормоштоң шулай ҡоролғанлығын белергә бурыслы.

Был донъяла бер нәмә лә – яҡшылыҡ та, насарлыҡ та – буштан-бушҡа, сәбәпһеҙгә килмәй. Барыһы ла беҙҙең йәшәү рәүешебеҙгә – асыҡтан-асыҡмы, йәшеренме – гонаһ ҡылыуыбыҙға бәйле. Ғәжәп: беҙгә ҡарата эшләнгән насарлыҡ беҙҙе гонаһтарыбыҙ өсөн яҙалай һәм шуның арҡылы таҙарта ла, ә эргәбеҙҙәге яҡшылыҡ, киреһенсә, фани донъяға бәйләй, рухи донъяны оноттора, йәғни тағы ла нығыраҡ гонаһтарға батыра.

Ҡөрьәндең Әл-Бәҡара сүрәһендә: "Ихтимал, һеҙ берәй нәмәгә нәфрәтләнә торғанһығыҙҙыр, ә ул һеҙҙең өсөн хәйерле һәм, ихтимал, һеҙ берәй нәмәне ярата торғанһығыҙҙыр, ә ул һеҙгә – насарлыҡ. Ысынлап та, Аллаһ белә, ә һеҙ белмәйһегеҙ!" – тип әйтелмәйҙер.

## *Изгелек һәм яуызлыҡ*

Бөркөт балаһының ҡанаттары нығынғас, әсәһе уны ҡая башындағы ояһынан төртөп төшөрә. Кескәй бөркөт әле үҙенең оса алыуын белмәй, шуға тәүҙә аҫҡа таш кеүек атыла, әммә аҙаҡ ҡурҡышынан ҡанаттарын елпелдәтә һәм үҙе лә һиҙмәҫтән осоп китә – үҙ аллы тормош башлай... Әгәр инә бөркөт ваҡытында, балаһына изгелек күрһәтәм тип, уны ояһынан этеп төшөрөргә йәлләһә, уныһы ғүмерлеккә осорға өйрәнә алмаясаҡ.

Тормошта беҙ – ата-әсә – йыш ҡына ана шул инә бөркөт кеүек була алмайбыҙ. Оянан этеп төшөрөрҙәй, күптән үҙ аллы тормош башларҙай балаларыбыҙҙы һаман ҡурсалайбыҙ, ҡанат аҫтында тотабыҙ. Уларға яҡшылыҡ эшләйбеҙ тип, йыш ҡына, киреһенсә, ялҡаулыҡҡа, кеше елкәһендә йәшәргә ғәҙәтләндерәбеҙ. Ваҡытында үҙ балаңа ла уҫал һәм рәхимһеҙ булырға кәрәк шул.

Матди донъяға ныҡ йәбешкән, үҙ тәне, кәүҙәһе өсөн ныҡ борсолған кешегә генә тормош яуызлыҡҡа һәм изгелеккә бүленә. Кемдер һинең тәнең талап иткәнде ҡәнәғәтләндерһә – ул яҡшы кеше, ә инде кәүҙәң теләгәнгә ҡаршы сыҡһа – яман. Эйе, тик нәфсе, кәүҙә генә донъяны аҡ менән ҡараға буярға мәжбүр итә.

Төптән ҡарағанда, тормошта изгелек һәм яуызлыҡ юҡ ул. Йыш ҡына тәү ҡарағанда яуызлыҡ тип ҡабул ителгән ваҡиғалар киләсәктә беҙҙең өсөн изгелеккә әйләнә. Ә бөгөн эшләнгән изгелек, киреһенсә, яуызлыҡҡа әүерелә. Берәүҙең күңелен уйлап, йәлләп бөгөн урынына ултыртмаһаң, ул киләсәктә ауыр яҙмышҡа дусар буласаҡ, ә бөгөн ауыҙы бешкән кеше киләсәктә һыуыҡ һыуҙы ла өрөп ҡабасаҡ, тимәк, үҙ яҙмышын үҙенсә ҡорорға өйрәнәсәк.

## *Ауырлыҡ – кешенең тормошҡа ҡарашы ул*

Ҡартәсәйем былай ти торғайны: "Эй, Аллам, бәләкәй ҡазалар бир, улар мине оло ҡайғынан ҡотҡарыр!" Йәшерәк саҡта был һүҙҙәр минең өсөн сәйер тойолдо, уларҙың мәғәнәһенә төшөнә алманым. Олоғая төшкәс, ябай башҡорт әбейенең ошо фекеренә юғары фәлсәфә һалғанлығын аңлап һоҡландым.

Ысынлап та, тирә-йүнемә әйләнеп ҡарайым да ҡартәсәйемдең һүҙҙәренә инанам. Беҙгә бит тормошта ауырлыҡтар юҡҡа килмәй. Улар – беҙҙең яңылыш йәшәүебеҙҙе иҫкәртеүсе һәм төҙәтеүсе ысынбарлыҡ. Эйе, беҙҙе күп кенә кескәй ҡыйынлыҡтар уйланырға һәм төҙәлергә мәжбүр итә. Әгәр инде уларҙы ҡабул итмәһәк, тормош оло ауыр ҡайғы менән беҙҙе дөрөҫ юлға баҫтыра. Был фекерҙе карма системаһы ла фәнни нигеҙләп иҫбат итә. Ул системаны ҡабул итмәүселәргә үрҙә әйтелгән фәлсәфәне икенсе төрлө аңлатырға була.

Кеше кескәй ҡыйынлыҡтарға битараф булырға өйрәнһә (ә быға өйрәнеү өсөн тормошҡа ҡарашыңды үҙгәртергә, ғүмерҙең фани икәнлеген аңларға, бер нәмәнең дә мәңге түгеллеген бөтә йәнең менән төшөнөргә, тимәк, был донъяла

ҡайғырырлыҡ һәм нәфрәтләнерлек һис нәмә юҡлығын юғары кимәлдә тойорға кәрәк), ул оло ҡайғыны ла ҡабул итәсәк. Дөрөҫөрәге, ундай ҡаза уға бөтөнләй килмәйәсәк. Ауырлыҡтар – кешенең тормошҡа ҡарашы ғына бит ул. Бер үк ауырлыҡ берәүгә – оло ҡайғы, икенсе кеше уны тоймай ҙа үтеп китә.

Шулай булғас, ҡартәсәйем әйтмешләй, әйҙә, беҙгә был донъяла кескәй ҡыйынлыҡтар осрап торһон, әгәр уларҙы тыныс ҡабул итһәк, беҙгә оло ҡайғы килмәҫ. Килһә лә, беҙ уның ҡайғырырлыҡ түгеллеген аңларбыҙ…

## *Барыбыҙ ҙа бер ата балаһы*

Беҙ кешеләрҙе дуҫтарға һәм дошмандарға бүлергә күнеккәнбеҙ. Дуҫты ҙурлайбыҙ, дошманды хурлайбыҙ, ләкин әҙәм балаларын шулай ҡәтғи бүлергә кәрәкме икән? Дуҫ тигәнең йыш ҡына һине урынһыҙ маҡтай. Насар яғыңды әйтмәҫкә тырыша һәм һиндә үҙең хаҡында хата фекер тыуҙыра. Һин үҙеңде етешһеҙлектәрҙән азат, шәп кеше итеп тоя башлайһың, даими рәүештә үҫергә, белемеңде һәр яҡлап арттырырға, үҙ-үҙеңде тәрбиәләргә онотаһың. Ә был инде кешене рухи үлемгә илтә.

Ә дошмандар хаталарыңды, насар яҡтарыңды һәр саҡ иҫеңә төшөрөп торғас, һин үҙеңдең фәрештә түгеллегеңде, етешһеҙлектәреңдең күплеген, урағанһайын яңылыш баҫыуыңды аңлайһың. Эйе, дошман булғанға беҙ һаҡбыҙ, ул беҙҙе сыныҡтыра, ауырлыҡтарға сыҙарға, үҙ өҫтөңдә туҡтауһыҙ эшләргә өйрәтә.

Шулай ҙа кешеләрҙе дуҫ-дошмандарға бүлмәү хәйерле. Дини китаптарҙа әйтелгәнсә, һәр кеше – Аллаһы Тәғәлә балаһы, һәр кемде Ул өйрәтә, һәр кем Уның ҡушыуын үтәй. Шуға ла бар кешене үҙ туғаныңдай күреп яратырға кәрәк. Кемдер һиңә насарлыҡ ҡыла икән, был – уның үҙ ҡайғыһы, ул үҙе Хоҙай алдында яуап бирер. Иң мөһиме – һин үҙең уға асыу тотма, кешегә насарлыҡ эшләмә. Һиңә яуызлыҡ ҡылғанға иң ҡаты яза – уға туҡтауһыҙ изгелек теләү һәм изгелек эшләү.

## *Нимә өсөн йәшәйбеҙ?*

Күптән түгел булған ике ваҡиға мине ныҡ уйланырға мәжбүр итте. Бер танылған яҙыусының юбилейы киң билдәләнде, ул үҙенә һәйбәт-һәйбәт бүләк килтереүҙе ойошторҙо. Тырышлығы бушҡа китмәне: ҡала-райондар, төрлө учреждениелар бишәр-алтышар видеокамера, видеомагнитофон, телевизор, ябай магнитофон, тағы әллә нәмәләр бүләк итте. Яҙыусы шуларҙы күреп бик ҡыуанғайны, башҡалар, шул иҫәптән мин дә, унан көнләшкәйнек. Ярты йыл да үтмәне, бөтәһен дә хайран ҡалдырып, теге яҙыусы уйламағанда үлде лә китте. Бахырҙың бүләктәре торҙо ла ҡалды. Икенсе бер түрә, тирә-йүнде һелкетеп, кешеләрҙе йәберләп, был донъяға мин хужа, тигәндәй йәшәне. Ябайыраҡтар унан ҡурҡа, хәйләкәрерәктәр уға ялағайлана ине. Донъяның кендеге кеүек тотто теге үҙен, һәм был мәңге шулай булыр һымаҡ ине. Әммә был түрә лә ҡапыл ғына донъя менән хушлашты.

Был ике үлем мине ныҡ тетрәндерҙе. Төптән ҡараһаң, Аллаһы Тәғәлә беҙгә был донъяла бөгөн һоҡланған, табынған бар нәмәнең ваҡытлы икәнлеген, күп тә үтмәйенсә юҡҡа сығасағын, уға һис тә йәбешергә, мөкиббән китергә ярамағанлығын көн дә күрһәтә, иҫбат итә. Беҙ иртәнсәк кенә һоҡланып, ауыҙ һыуын ағыҙып, “тәмле лә тәмле” тип ашаған ризығыбыҙҙың ярты тәүлек үтеүгә нәжескә әйләнеүенән фәһем алһаҡсы! Буш нәмәләр, мираждар артынан сабабыҙ. Аллаһы Тәғәлә бит беҙҙе иҫкәртә: һеҙҙең бөгөн һоҡланған, яратҡан,

табынған бөтә нәмәләрегеҙ ҙә, ваҡыты еткәс, ана шулай серей, һаҫый, юҡҡа сыға, нәжескә әүерелә. Ә һеҙ, аҡылһыҙҙар, шуның өсөн көсөгөҙҙө сарыф итәһегеҙ! Уйланһағыҙсы, ти Ул. Көсөгөҙҙө ваҡытлыса әйберҙәргә түгел, мәңгелек ҡиммәттәргә йүнәлтһәгеҙсе, ти Ул.

## Беҙҙең ауырыуҙар

Беҙ тәбиғәт ҡуйынында йәшәйбеҙ, уға бәйләнгәнбеҙ, унын ҡанундарына буйһонабыҙ. Беҙҙең тәнебеҙҙе матди донъяға һиҙгер ағзаларыбыҙ – күҙ, ҡолаҡ, тел, ашҡаҙан һәм башҡалар – сынйырҙар кеүек бәйләп тота. Был ағзалар арбаға егелгән аттар кеүек. Арба – кешенең тәне, дилбегә – аҡылы, күсер – аңы. Әҙәм балаһының йәне ошо арбаға ултырып китеп бара. Дөрөҫ юлдан барыу өсөн хәрәкәткә аҡыл (дилбегә) ярҙамында аң (күсер) етәкселек итергә тейеш, ә күсер арбала ултырыусының (йәндең) ҡайҙа барырға теләүен белергә бурыслы. Әммә йыш ҡына аттар үҙҙәренә кәрәкте күреү менән ярһып саба башлай, һәм, дилбегәгә буйһонмайынса, дөрөҫ юлдан яҙлыға ла арбаны упҡынға алып төшөп китә. Шулай итеп, һиҙеү ағзалары тарафынан тыуҙырылған тойғолар: нәфрәтләнеү, үпкәләү, көнләшеү, ғәйепләү, аҡса-байлыҡҡа ныҡ йәбешеү, кешеләрҙең яҡшы сифатына табыныу, күп ашау, енси бәйһеҙлек һ.б. йоҡа кимәлдә (на тонком уровне) тәндә кимерә башлай һәм ауырыуға килтерә.

Һуңғы осор кешенең күҙгә күренмәгән тәндәрен (тонкий мир) тикшереүсе ғалимдар – Лазарев, Свияш һ.б. – ниндәй тойғо ниндәй ауырыу тыуҙырыуын асыҡлай башланы.

Ә ауырымайынса йәшәп буламы һуң? Бының өсөн тойғоларға бирелмәйенсә, тыныс булып, башҡаларҙы ғәфү итеп, йәнең өсөн йәшәргә, доға-намаҙҙар уҡырға, был донъяның фани икәнлеген бер ҡасан да онотмаҫҡа кәрәк, ти ғалимдар һәм дин әһелдәре.

## Маҡсат

Яңыраҡ миңә бер танышым: "Тамаша" журналының 2001 йылғы беренсе һанындағы баш һүҙең оҡшаманы. Башҡорттарҙың былай ҙа бер байлығы юҡ, бөтәһе лә ярлы, ялանғас. Ә һин уларҙы байлыҡ йыймаҫҡа өндәйһең", – тине.

Мин ул баш һүҙемдә байлыҡ хаҡында түгел, ә күңел тыныслығы, йәғни бәхет тураһында әйтмәксе инем. Күрәһең, аныҡ итеп аңлата алмағанмын.

Әгәр байлыҡ тип сабаһың, көрәшәһең икән һәм был көрәш һиңә фәҡәт күңел ҡыуанысы, эске (тышҡы түгел) бәхет килтерә икән, рәхим ит – ҡыуан, байы. Әгәр инде байлыҡ тип сабыу, байлыҡҡа өлгәшеү һиңә борсолоу, күңел тыныслыҡһыҙлығы, асыу алып килә икән (мин теге баш һүҙемдә ошондай осраҡ хаҡында һөйләгәйнем) – ундай көрәш һинең өсөн зарарлы.

Йыш ҡына кешеләр кәрәккәнгә түгел, ә башҡаларға ҡарап үҙенә маҡсат ҡуя (күршем баҡса төҙөй – мин дә төҙөйөм әле; дуҫым машина алған – мин кемдән кәм; әхирәтемдең яңы күлдәге матур – мин унан шәберәген алам һ.б.). Был – оло хата. Кеше кешегә ҡарап йәшәргә тейеш түгел, ә үҙ күңеленә генә кәрәк нәмә өсөн ынтылырға бурыслы. Кеше өсөн төп маҡсат – күңел тыныслығы, ҡыуаныс, мөхәббәт. Үҙеңә артыҡ ауыр маҡсат ҡуйып, уға өлгәшә алмау күңелдә борсолоу, асыу, нәфрәт уята. Ә был тойғолар кешенең һаулығын, тормошон, яҙмышын селпәрәмә итә. Әгәр маҡсатыңа ынтылған мәлдә күңелеңдә кире тойғолар тыуа икән, ундай маҡсаттан баш тарт! Ул һиңә кәрәк түгел. Булғанды күрмәү, шуға ҡыуана белмәү, буй етмәҫлек маҡсатҡа ынтылыу кешене бәхетһеҙ итә.

Тормоштоң хәйләһе лә, көлөүе лә шунда: һәр кемгә ни кәрәк, янында шул бар. Фәҡәт яҡшылап ҡарарға, күрә белергә кәрәк. Был кешенең рухи кимәленә бәйле. Кешегә булғаны етә. Кешегә артығы кәрәкмәй. Кеше бөгөн бәхетле. Кеше бөгөн ожмахта. Кеше ожмах эҙләп ожмахтан китә һәм тамуҡҡа эләгә.

## *Донъя*

Кеше ҡолағы 50 децибелдан 150 децибелға тиклем тауышты ғына ишетә. Ә тауыш донъяһы шуның менән генә сикләнмәй, ул бик киң. Унда бер децибелл тауыш та, мең децибелл тауыш та бар. Ләкин беҙ уларҙы ишетмәйбеҙ. Ишетмәүебеҙ ҙә хәйерле. Әгәр уларҙы ишетһәк, беҙ аҡылдан яҙыр инек. Сөнки улар йә үҙәк өҙгөс нәҙек, йә ҡолаҡ ярырлыҡ көслө һәм ҡурҡыныс. Йәғни беҙ иҫ киткес киң тауыштар донъяһының кескәй генә өлөшөн ишетеп тыныс йәшәйбеҙ. Һәм иң сәйере – ишеткән генә тауыштар буйынса бар донъя хаҡында фекер йөрөтөргә маташабыҙ.

Күҙ менән дә шул уҡ хәл. Донъяның тығыҙлығын (плотность) шартлы рәүештә 0-дән 1000-гә тиклем тип алһаҡ, ошо тығыҙлыҡтың яҡынса егерменән йөҙгә тиклемен генә күҙ тигән аппарат тойоп, мейегә мәғлүмәт бирә ала. Ә инде ескә материяны (мәҫәлән, радио, электротулҡындарҙы, атомдарҙы, электрондарҙы һ.б.) шулай уҡ тығыҙ материя (таш ҡая, стена) аша тоя алмай. Күрмәүебеҙ ҙә хәйерле, әгәр беҙ үҙебеҙҙе ураткан донъяны тулыһынса күҙаллаһаҡ, мәҫәлән, икмәгебеҙгә йәбешкән миллионлаған һигеҙ аяҡлы микробтарҙы күрһәк, уны ашай алмай астан үлер инек. Йәғни беҙ матди донъяға кескәй генә бер ярыҡ аша ҡарайбыҙ, тыңлайбыҙ һәм шуға ҡарап бөтә матди һәм рухи донъя хаҡында фекер йөрөтөргә маташабыҙ.

Беҙ ҡараңғы төндә китеп барған юлсы хәлендә. Беҙгә эләгеп йығылмаҫ өсөн генә, алдыбыҙҙы бер-ике аҙымға ғына яҡтыртып ҡарау өсөн “фонарь” (күҙ менән ҡолаҡ) бирелгән. Ә беҙҙең “фонарь” тота алмаған донъя иҫ киткес киң, ҡатмарлы һәм ҡараңғы. Икенсе төрлө әйткәндә, беҙҙең ҡолаҡ менән күҙ, радиоалғыстың антеннаһы кеүек, ниндәйҙер бер тулҡындарға ғына көйләнгән, һәм беҙ шул тулҡындарҙы ғына күрәбеҙ, ишетәбеҙ. Ләкин был, әле башҡаса меңәрләгән тулҡындар юҡ, тигән һүҙ түгел.

Ана шуға ла дини китаптар донъяны күҙгә күренгәне, ҡолаҡҡа ишетелгәне менән генә сикләнә тип һанамаҫҡа, күренмәгән, ишетмәгән иҫ киткес оло донъя барлығын белергә, тойорға һәм шул хаҡта уйланырға өндәй.

## *Бөйөк осраҡлыҡтар*

Бынан нисәләр йыл самаһы элек астрономдар, бер комета (диаметры – бер километр самаһы) Ер менән бәрелеүе ихтимал, тип яу һалды. Әгәр ул Ер менән осрашһа, кешеләр харап булыр ине. Әммә комета Ер орбитаһын ярты тәүлек алда киҫеп үтеп китте. Астрономдарҙың күҙәтеүенсә, бер быуат эсендә Ер ана шулай кометалар менән йөҙгә яҡын тапҡыр бәрелешә яҙа икән. Әммә осраҡлы рәүештә улар осрашмай ҡала.

Ғөмүмән, Ер һәм кешелек тарихында осраҡлыҡтар шул тиклем күп. Әгәр шул осраҡлыҡтарҙың береһе генә бойомға ашмаһа, Ерҙә тереклек барлыҡҡа килмәҫ, килгән хәлдә лә күптән харап булыр ине. Мәҫәлән, бар галактикалар, улар эсендәге бар йондоҙҙар ҙур тиҙлек менән бер-береһенән алыҫлашалар, йәғни Йыһан киңәйгәндән-киңәйә бара. Йыһандың киңәйеү тиҙлеге математик яҡтан шул тиклем дөрөҫ һанап сығарылған. Әгәр саҡ ҡына (триллиондан бер өлөшкә) яйыраҡ киңәйһә, йыһандағы бар материя (галактикалар, йондоҙҙар), гравитация көсөн еңә алмайынса, кире бер нөктәгә уҡмашыр ине. Йыһан иң кәрәкле тиҙлектә киңәйә. Осраҡлы рәүештә.

Йәки атомды алайыҡ. Унда электрондың заряд көсө һәм әйләнеү тиҙлеге тап-таман. Әгәр заряд саҡ ҡына шәберәк булһа, электрон атомдан ысҡынып китер ине лә атом йәшәй алмаҫ ине. Осраҡлы рәүештә электрондың тиҙлеге лә, зарядының көсө лә дөрөҫ һайланған. Шуға күрә материя йәшәй.

Ары китәйек. Ерҙең ҙурлығы ла – осраҡлы рәүештә – тап кәрәккәнсә. Әгәр ул саҡ ҡына ҙурыраҡ булһа, уның тартыу көсө (гравитация) көслөрәк булыр ине, һәм Ер өҫтөнән еңел водород газы айырыла алмаҫ, атмосфера йәшәү өсөн эшкинмәҫ ине. Әгәр ҙә мәгәр Ер саҡ ҡына бәләкәйерәк булһа, уның тартыу көсө үҙ өҫтөндә кислородты тотоп тора алмаҫ, Ер өҫтөндәге бар йән эйәһе юҡҡа сығыр ине.

Унан башҡа Ерҙең Ҡояшҡа тиклемге алыҫлығы ла тап-таман иҫәпләп сығарылған. Был, бер яҡтан, Ер өҫтөндә “парник эффекты” тыуҙырыуҙан, икенсе яҡтан, боҙ аҫтында ҡалыуҙан һаҡлай. Ерҙең үҙ күсәре һәм Ҡояш тирәләй әйрәлөүе лә Ер өҫтөндә йәшәү өсөн ифрат дөрөҫ алынған. Быныһы ла осраҡлы. Ҡояш системаһының Галактика ситендәрәк, бушыраҡ урында осоп барыуы бигерәк тә ғәжәп. Галактиканың уртаһындараҡ булһаҡ, башҡа йондоҙҙарҙың гравитация көсө Ҡояш системаһын тарҡатып ебәрер ине. Әгәр ҙә инде уның ситендә (иң иркен урында) булһаҡ, тере тормошто барлыҡҡа килтереү өсөн кәрәкле элементтар етешмәҫ ине. Беҙ Галактиканың иң кәрәкле урынында осабыҙ. Осраҡлы рәүештә!

Ә инде Ерҙә тормоштоң барлыҡҡа килеүе бигерәк хайран ҡалырлыҡ! Тормош тыуҙырыу өсөн бөтә кәрәкле элементтарҙы, кислоталарҙы бер һауытҡа һалып уңайлы шарттарҙа күпме генә болғама, бер ҡасан да тере күҙәнәк барлыҡҡа килмәйәсәк. Быны өсөн йәнә иҫ киткес осраҡлыҡтар теҙмәһе кәрәк. Йөҙҙән ашыу билдәле тәртиптәге бер-береһенә бәйләнеүле хәрефтәр хикәйә тыуҙыра алған кеүек, тере күҙәнәк тыуҙырыу өсөн меңдәрсә аминокислоталарҙың да бер-береһенә билдәле бер тәртиптә бәйләнеүе кәрәк икән. Ғәжәп бит! Ярай, һөйләмдәге хәрефтәрҙе яҙыусы уйлап теҙгән, ә аминокислоталар нисек кәрәккәнсә теҙелгән?..

Осраҡлыҡтар, осраҡлыҡтар, осраҡлыҡтар!.. Беҙ осраҡлы рәүештә барлыҡҡа килгәнбеҙ һәм осраҡлы рәүештә йәшәп киләбеҙ…

Киләһе быуат эсендә лә, астрономдар иҫәпләүенсә, йөҙҙән ашыу ҙур-ҙур кометалар менән Ерҙең бәрелешеүе ихтимал. Әммә, иманым камил, улар Ергә теймәйенсә Ер орбитаһын Ерҙән ярты тәүлек алда йәки ярты тәүлек һуңыраҡ үтеп китәсәк. Осраҡлы рәүештә.

Осраҡлы рәүештә Ер һәм беҙ тере ҡаласаҡбыҙ. Һәм осраҡлы рәүештә ары ла йәшәйәсәкбеҙ. Ниңә улай?

Был һорауға яуапты һәр кем үҙе эҙләргә һәм табырға тейеш.

## *Уй*

Йыһанда һәр ике матди берәмек араһында Оло Тәртип йәшәй: Ер – Ҡояштан, кеше Ерҙән ысҡынып ситкә осоп китмәй. Ошо сәбәпле атом эсендәге электрон үҙ ядроһы тирәләй әйләнә. Был көстәр матди берәмек (атом, планета, йондоҙ һ.б.) барлыҡҡа килеү менән тыуа һәм шунда уҡ бөтә Йыһанды яулай. Әлбиттә, планетаның гравитацион һәм электромагнит ҡеүәттәре көслөрәк, ә кескәй атомдыҡы һиҙелер-һиҙелмәҫ. Әммә барыбер икеһенеке лә бар Йыһанға таралған. Әгәр ике матди берәмек бер-береһенә тәьҫир итһә (яҡынайһа йәки алыҫайһа), уларҙың гравитацион һәм электромагнит көстәре лә үҙгәрә һәм ике атомдың бер-береһенә мөнәсәбәтен шунда уҡ бөтә Йыһан “белә”.

Ғалимдарҙың асышы буйынса, **уй** – кеше мейеһендәге нейрондарҙың (улар

атомдан тора) сайҡалыуы, тирбәлеүе ул. Йәғни, **уй** – мейеләге молекулаларҙың бер-береһенә ҡарата үҙ урынын үҙгәртеүе, тимәк, бер-береһенең бөтә Йыһанды яулаған гравитацион һәм электромагнит көстәрен һелкетеүе. Ана шуға ла беҙҙең **уй** “һә” тигәнсә бөтә Йыһанға тарала ла, матди көс булараҡ, үҙ эшен башҡара башлай.

Әгәр беҙҙең **уй** Йыһан программаһына (йәки уның берәй бәрәмегенә) ҡаршы бара икән, Йыһан, Оло Тәртипте боҙмаҫ өсөн, был **уй**ҙы йәки был **уй** сығанағын “урынына ултыртырға”, хатта юҡ итергә тырыша. Ана шуға ла һәр кем үҙ яҙмышын онтамаҫ өсөн үҙ **уй**ына хужа булырға, уның таҙалығы хаҡында хәстәрләргә (һәр кемгә изгелек теләргә), бысраҡ уйҙарҙан арынырға (башҡаларға яуызлыҡ уйламаҫҡа) тейеш.

Ә инде кешенең эмоциональ хәлдә **уй**ланыуы Йыһанды бигерәк тә көслө итеп яуап ҡайтарырға мәжбүр итә. Ярай ҙа, был **уй** таҙа булһа… Ул саҡта Йыһандың тәьҫир итеүе файҙаға ғына. Ә инде, мәҫәлән, әҫәрендәге кире образды яҙған саҡта – яҙыусы йәки кире образды уйнаған мәлдә – актер көслө тойғоға бирелеп насар **уй**ҙар уйлаһа, Йыһан, унан ҡотолоу өсөн, быны яҙмышына бик ҡеүәтле кире энергия ебәрә. Шуға ла элекке заманда яҙыусылыҡ та, актерлыҡ та гонаһ һаналған. Ә инде был юлды һайлаған кешеләр, гонаһтарын юйыу өсөн (йәғни Йыһандың “һуғыуынан” ҡотолоу өсөн), күпләп ураҙа тотҡан, намаҙ уҡыған.

Юҡҡамы ни Ҡөрьән: “Аллаһы Тәғәлә һеҙҙең һәр **уй**ығыҙҙы белә”, – тип иҫкәртә.

## *Кеше һәр саҡ үҙе ғәйепле…*

Беҙ барыбыҙ ҙа тормошта ҡасан да булһа уңышһыҙлыҡтарға юлығабыҙ. Һәм, әлбиттә, тиҙ генә уның сәбәбен дә табабыҙ. Дошмандарыбыҙ ғәйепле – улар аяҡ салды, ғәйбәт таратты; мөхит, тормош ғәйепле – ул шундай рәхимһеҙ. Был дөрөҫ кеүек. Ләкин, әйҙәгеҙ, тәрәнерәк ҡарайыҡ әле.

Күҙ алдына килтерегеҙ: бар урамды боҙ ҡаплаған. Әгәр мин, һаҡ булмай, тайып йығылып, ҡулымды һындырҙым икән, быға кем ғәйепле? Урамдағы боҙмо, тормошмо, әллә үҙемме? Кемдер, боҙ ғәйепле, тиер, йәғни мөхит. Әммә һәр кем, аҡылы булһа, тышҡа сыҡҡас та, урамды боҙ ҡаплап алғанын күрергә һәм һаҡ ҡына атлап китергә тейеш. Йәғни мөхиткә яраҡлашырға бурыслы. Сөнки урамдағы боҙҙо бөтөрөп булмай, ә атлау тиҙлеген үҙгәртергә мөмкин. “Боҙ булһа ла, элеккесә атлайым”, – тигәндәр шунда уҡ тайып йығыла һәм ҡулын һындыра, аҙаҡ тормошто һүгергә тотона.

Шуға ла аҡыллы кеше, уңышһыҙлыҡҡа эләкһә, иң алда ғәйепте үҙенән эҙләргә һәм киләсәк өсөн һығымта яһарға тейеш.

Тирә-йүн мөхитте үҙгәртеп, дошмандарҙы бөтөрөп булмай, ә үҙеңде уға ҡулайлаштырырға мөмкин һәм был күпкә еңелерәк. Кеше һәр саҡ үҙе ғәйепле. Ошоно аңлаған кеше генә тормошта ла, сәнғәттә лә уңыштарға өлгәшә ала.

## *Идеал*

Кешегә план ҡороу хас.

Һәр кем үҙенең тормошо нисек булырға тейешлеген алдан күҙаллай, йәғни план ҡора (һәр кем үҙ планында бай һәм бәхетле йәшәү хаҡында хыяллана, шуға был планды идеал тип атайыҡ). Һәм шуны бойомға ашырыу өсөн йәшәй башлай.

Бына ошонда кеше яҙмышына ҡайғы һәм шатлыҡ килеп инә лә инде. Әгәр идеалына өлгәшһә, кеше шатлана, ә уныңса килеп сыҡмаһа – ҡайғыра.

Ә ҡайҙан килеп тыуа икән кеше аңында был идеал? Баҡһаң, уны һәр кемдә

тәрбиә, мәктәп, уҡыу йорттары, уҡыған китап, журнал, гәзит, күргән кино, спектакль, атай-әсәй, күршеләр, дуҫ-иш, коллегалар, таныштар, туғандар һ.б. тыуҙыра икән. Улар ярҙамында кеше үҙенең ғаиләһе, өйө, эше, дуҫтары, күршеләре, ата-әсәһе һ.б. ниндәй булырға тейеш тигән идеал төҙөп ала. Йәғни, ул һис тә әҙәм балаһының тәбиғи талабынан килеп сыҡмай, фәҡәт тыштан бирелгән, хатта уға көсләп тағылған мәғлүмәт арҡаһында тыуа. Идеалдың тәүге бәләһе – уның тулыһынса уйҙырма булыуы (ваҡытлыса икәнен әйтеп тораһы ла юҡ), ә икенсе төп бәләһе – уның фәҡәт матди донъяға ғына бәйле булыуында, рухи донъяны онотторыуында.

Тормош күпкә ғәҙел. Кеше Мәңгелекте инҡар итеп, ваҡытлы әйбер менән мауыға башлаһа, уны өҫтөнөрәк ҡуйһа, Йыһандың Оло программаһы был әҙәм балаһын урынына ултырта, ваҡытлы уйынсыҡты ҡулынан тартып ала. Уның киләсәге өсөн, рухи таҙалығы өсөн эшләнә был.

Ана шуға ла Йәшәйештең Оло Мәғәнәһен онотоп, уйҙырмалар менән артыҡ мауығып йәшәй башлаусының идеалдары селпәрәмә килә лә инде.

Әгәр донъяңды онотоп машина алыу хаҡында хыялланһаң, һиңә тормош бер ҡасан да машина бирмәй. Биргән хәлдә лә йә ул аварияға эләгеп юҡҡа сыға, йә уны урлайҙар.

Әгәр ҡыҙ кеше тормошон кейәүһеҙ күҙ алдына килтермәһә, ғүмерҙә лә кейәүгә сыға алмаясаҡ. Әгәр инде эсмәгән, тартмаған, һуғышмаған ир хаҡында хыялланһа, тормош уға фәҡәт эскән, тартҡан, һуғышҡан ир бирәсәк. Ҡыҙҙың идеалдарын емереү өсөн эшләнә был. Үлә яҙып фатир даулаған кеше фатир ала алмаясаҡ һ.б.

Тормош ниндәй, уны шулай ҡабул итергә кәрәк. Ҡайғы – хыялда ҡоролған идеал менән ысынбарлыҡтың тигеҙләшеүе генә бит ул. Шуға ла идеал ҡормағыҙ, ҡорған хәлдә лә уны ысынбарлыҡтан, мөмкинселектәрҙән артыҡ айырмағыҙ. Был, хыялланырға, көрәшергә кәрәкмәй, тигән һүҙ түгел. Хыялланығыҙ, көрәшегеҙ. Әммә уйығыҙ тормошҡа ашмай икән, уны тыныс ҡабул итегеҙ. Тимәк, һеҙҙең планығыҙ Йыһандың Оло программаһына ҡаршы килә, шуға ул ошо минутта бойомға ашырылырға тейеш түгел.

“Алла шулай ҡушҡандыр!..” Боронғоларҙың ниндәй бөйөк һүҙе был! Әгәр һеҙ Йыһанға хужа түгел икәнлегегеҙҙе аңлаһағыҙ, уның Бөйөклөк теләге буйынса тәгәрәүен тойһағыҙ һәм барыһын да “Алла шулай ҡушҡандыр” тип тыныс ҡабул итергә өйрәнһәгеҙ, тиҙҙән һеҙгә уңыштар ҙа килер. Һәм ысын шатлыҡтың нимә икәнен аңларһығыҙ.

## *Беҙгә кем хужа?*

Бер әҙәм балаһы: “Мин үҙемә үҙем хужа, нимә теләйем, шуны эшләйем. Кеше менән ниндәйҙер көстәрҙең етәкселек итеүенә ышанмайым. Юҡ ул Алла!” – ти икән, ти. Уның янына килеп сыҡҡан Аҡыл эйәһе быңдай тәкдим яһаған: “Хәҙер мин һинең үҙеңә генә ҡағылышлы йөҙ һорау бирәм, әгәр шуларҙың берәүһенә генә, эйе, үҙем теләгәнсә эшләй алам, тип яуап бирһәң, мин дә Аллаһы Тәғәләнең һиңә хужа түгеллегенә, һинең менән етәкселек итмәүенә ышанырмын”. “Һора”, – тигән, ти, был әҙәм балаһы.

“Һин үҙеңә үҙең хужа булғас, тыумаҫҡа булдыра алаһыңмы?” – “Юҡ”, – ти икән был. “Ашамай-эсмәй йәшәй алаһыңмы?” – “Юҡ”. “Ашаған ризығыңды ашҡаҙаныңда, эсәктәреңдә эшкәртеүгә үҙең етәкселек итәһеңме?” – “Юҡ”. – “Улайһа, башыңда – сәсте, ҡул-аяҡтарыңда – тырнаҡты, йәш саҡта тәнеңдә үҫеүҙән,

ваҡыты еткәс, енси теләктәреңдең уяныуын туҡтата алаһыңдыр?” – “Юҡ, юҡ, юҡ”. “Әллә йылдар үтеү менән битеңде сырыш баҫыуынан, сәстәреңде салланыуынан, тәнеңдең көсһөҙләнеүенән, ҡартайыуынан ҡотола алаһыңдыр?” “Юҡ”, – тигән әҙәм балаһы.

Аҡыл эйәһе быға тағы шундай бик күп һорау биргән, ти, ә был әҙәм барыһына ла: “Былар минең тәнемә ҡағылһа ла, үҙем теләгәнсә эшләй алмайым, уларға мин хужа түгел”, – тигән. Иң аҙаҡ Аҡыл эйәһе бынан: “Бәлки, үлмәҫкә булдыра алаһыңдыр?” – тип һораған. “Юҡ”, – тигән икән теге әҙәм.

“Улайһа, һин нисек “үҙемә үҙем хужамын” тип әйтә алаһың? – тип ғәжәпләнгән Аҡыл эйәһе. – Һин бит үҙең теләгәнсә бер ни эшләй алмайһың! Һин, барса йән эйәһе кеүек, Аллаһы Тәғәлә ҡушҡан нөктәлә һәм ваҡытта барлыҡҡа килгәнһең, Аллаһы Тәғәлә ҡушҡан юлды үтеп, маңлайыңа яҙылған көндә һәм нөктәлә вафат буласаҡһың. Тәүге нөктәнән һуңғы нөктәгә барырға мәжбүр юлыңда тап булған ташты (ҡаршылыҡты, бейеклекте һ.б.) уң яҡтанмы, һул яҡтанмы урауҙы ғына һайлай алаһың. Әммә һин уны ҡайһы яҡтан ураһаң да, Аллаһы Тәғәлә ҡушҡан һуңғы нөктәгә барыбер барып етергә тейешһең. Тимәк, һинең тәнеңдең, йәнеңдең, яҙмышыңдың хужаһы һин үҙең түгел, ә Аллаһы Тәғәлә”.

“Шулай икән шул”, – тип килешкән, ти, был әҙәм.

## *Иллюзия*

Беҙ химия дәрестәренән беләбеҙ: һәр материя атомдарҙан тора. Атомдарҙың ядроһы бар, ә уның тирәһендә электрондар өйөрөлөп йөрөй. Йәғни атом Ҡояш системаһына оҡшаған: уртала – Ҡояш-ядро һәм бик ҙур бушлыҡта бер нисә планета-электрон әйләнә. Икенсе төрлө әйткәндә, нимәне генә алһаҡ та – ҡаты таштымы, шыйыҡ һыуҙымы – атом исемле сағыштырмаса ҙур бушлыҡ эсендә кескәй генә электрондар сәбәләнә. Шулай итеп, һәр бер әйбер (иң ҡаты таш та, бетон да) 99 процент бушлыҡтан һәм фәҡәт бер генә процент тәшкил иткән матдәнән (ядро һәм электрондарҙан) тора. Йәғни һәр әйбер (мәҫәлән, ҡаршыбыҙҙа торған ҡаты ҡая ла) ҙур-ҙур тишекле селкаға оҡшаған. Етмәһә, электрондар иҫ киткес тиҙлектә туҡтауһыҙ хәрәкәт итә, – гүйә, мыжғып торған ҡырмыҫҡа иләүе. Ә беҙгә примитив күҙебеҙ ҡаяны ҡатып ҡалған хәрәкәтһеҙ тотош стена итеп күрһәтә, уны үтә күреп булмай, тип алдай.

Күҙ тигән приборҙың тойоу мөмкинлегенең сикле булыуы арҡаһында, икенсе төрлө әйткәндә, күҙҙең алдауы сәбәпле, беҙ ысынбарлыҡты, бар донъяны бөтөнләй икенсе төрлө, булмағанса ҡабул итәбеҙ.

Фекеребеҙ аңлайышлы булһын өсөн, кино эффектын иҫкә төшөрәйек. Кино бит таҫмала ҡатып ҡалған һүрәттәрҙән тора. Әммә уларҙы тиҙ-тиҙ генә бер-бер артлы күрһәткәс, күҙебеҙ беҙҙе “ҡыбырлаусы кешеләрҙе күрәм” тип ышандыра. Шулай итеп, күҙебеҙ донъя хаҡында беҙҙең мейегә гел генә дөрөҫ булмаған мәғлүмәт бирә.

Хәҙерге физика ғалимдары әйтә: беҙ күргән материя ысынында юҡ ул. Күҙебеҙ материя тип күргән нәмә – энергия. Вибрациялы энергия. Был вибрациялы көслө энергия ҡайҙандыр (Оло сығанаҡтан!?) килә. Уның вибрацияһын, тиҙлеген кәметә төшкән урынында элементар бөрәмектәр (частица) хасил була. Улар электрон менән протонға әүерелә. Шулай итеп атом тыуа. Электрондар күҙгә тик торған тотош әйбер кеүек күренер тиҙлектә хәрәкәт итә. Дөрөҫө – киреһенсә: кешенең күҙе һәм нервы системаһы шундай итеп эшләнгән – улар ошо тиҙлектә хәрәкәт итеүсе энергияны ҡатып ҡалған өҙлөкһөҙ әйбер итеп

күрә. Шулай итеп, материя тигәнебеҙ – күҙ биргән мәғлүмәтте мейенең үҙенсә интерпретация яһауы, юҡ нәмәне бар тип алдауы ғына. Көнсығыш мистиктары ла, күҙебеҙ “күрәм” тип алдаған нәмә ысынында юҡ ул, материя – иллюзия, *майя*, тиҙәр.

Эйе, беҙ ысынбарлыҡты бөтөнләй башҡаса күҙ алдына килтереп, булмаған тирә-яҡ мөхитте бар тип, күҙ алдына алдатҡыс донъяны килтереп йәшәйбеҙ. Шуның өсөн ҡайғырабыҙ, нәфрәтләнәбеҙ йәки шатланабыҙ. Был – кинолентալағы хәрәкәтһеҙ кешеләрҙе үҙ-ара һуғыша тип күреп ҡайғырыу-илауҙан да сәйерәк. Күҙҙең алдауына ышанып, булмаған, юҡ материя өсөн әҙәм балаларының өҙгөләнеүе көлкө лә, ҡыҙғаныс та.

Әйтәләр бит: эй кешеләр, был донъяны тыныс ҡабул итегеҙ. Үҙегеҙҙе уратып алған нәмәләр, ваҡиғалар өсөн ҡайғырмағыҙ ҙа, шатланмағыҙ ҙа (сөнки улар – иллюзия, юҡ, алдатҡыс), эске донъяғыҙ, күңелегеҙ, йәнегеҙ өсөн йәшәгеҙ. Барлығы ул ғына ысын һәм мәңгелек.

## *Бәхетһеҙлек*

Театрҙа яңы спектакль ҡуйырға булып роль бүлешкәндә, артистарҙың береһе лә бәхетле, ыңғай персонажды (мәҫәлән, ғашик булып, бер ниндәй ҡаршылыҡһыҙ өйләнешкән бәхетле егет менән ҡыҙ образын) алырға теләмәй. Сөнки унда уйнарлыҡ кисерештәр юҡ кимәлендә. Һәр артист кире образдарҙы, бәхетһеҙ яҙмышлы персонаждарҙы (хатта бөкрө, аҡһаҡ йәки һуҡыр геройҙарҙы) алырға тырыша. Сөнки бындай ролдәрҙә көслө тойғолар тулып ята. Уларҙы уйнауы ауыр, әммә ҡыҙыҡ, бында рәхәтләнеп иң юғары ижадҡа күмелергә була. “Ә бәхетһеҙ, бөкрө кеше булып сәхнәлә йөрөүе ҡыйын түгелме?” – тиер берәү. Түгел. Сөнки донъяла 60-70 йыл йәшәр артист өсөн сәхнәлә ике генә сәғәт бәхетһеҙлекте кисереү бер ни тормай. Әммә ошо ваҡыт эсендә ул бик көслө тойғо эсендә ҡайнарға өлгөрә, хис тигән татлы төшөнсәнең иң юғары нөктәһенә менә. Көслө тойғо кисереү (уның бәхетһеҙлек булыуы мөһим түгел) – артист өсөн иң бәхетле осор, оло ижад ҡыуанысы.

Кешенең Йәне лә был донъяға төрлө тойғолар кисереү өсөн килә. Һәм ергә килгән һайын ниндәйҙер бер хисте татырға теләй. Көслө хисте. Ә көслө тойғолар күбеһенсә бәхетһеҙлек кисергәндә була. Ана шуға ла Йән йыш ҡына ерҙә бәхетһеҙ, ауыр яҙмыш һайлай. (Әлбиттә, кеше бик теләһә, яҙмышын үҙгәртә ала. Әммә был инде – икенсе тема.) “Ә Йәнгә ҡыйын түгелме һуң бәхетһеҙ булыуы?” – тип һорар берәү. Миллиард йылдар йәшәр, мәңгелек йәшәр Йән өсөн Ерҙәге 60-70 йыл ваҡыт сәхнәлә уйнаған артистың ике сәғәтенә ҡарағанда ла ҡыҫҡараҡ, йәғни өс-дүрт секунд самаһы һымаҡ ҡына тойола.

Йән фәҡәт төрлө тойғолар кисереп кенә үҙенең Кем икәнлеген, Нимә икәнлеген һәм башҡа ваҡытта мәңге бәхетле икәнлеген аңлай. Теге донъяла, Аллаһы Тәғәлә янында, бәхет эсендә ул диңгеҙгә сумған тамсы кеүек үҙен тоймай, үҙенең кем икәнлеген аңламай башлай. Үҙен тойоу өсөн килә ул был донъяға, тән тигән кейем ала. Үҙен көслө итеп тойоу өсөн Йән бәхетле яҙмышты һайламаҫҡа тырыша, сөнки теге донъяла ул былай ҙа бәхетте туйғансы татый.

Ана шуға ла Ҡөрьәндә әйтелә: “Бер ҡасан да яҙмышыңа зарланырға ярамай, ни булһа ла, уны ризалыҡ менән ҡабул итергә кәрәк”. Сөнки матди донъяға бәйле тән ни өсөн шундай ауыр яҙмышҡа дусар булғанлығын бер ҡасан да аңлай алмай.

## *Бүләк*

Үҙеңде ҡайғыртма, кеше хаҡында уйла, тип тәрбиәләйбеҙ балаларҙы. Был фекер бик үк дөрөҫ түгел. Кеше иң алда үҙе тураһында уйларға тейеш. Сөнки, дини һәм фәлсәфәүи китаптар әйтеүенсә, беҙ был донъяға үҙебеҙҙең кем икәнлегебеҙҙе белеү, аңлау, тойоу өсөн килгәнбеҙ. Кеше төрлө тойғолар кисергәндә үҙен дөрөҫ тоторға тырыша, шулай итеп үҙ-үҙен яһай. Эйе, төрлө хәлдә, төрлө һыналышта үҙеңде нисек тотаһың, шул – һин ул.

Ә нисек тоторға һуң үҙ-үҙеңде секунд һайын тыуып, үҙгәреп торған ситуацияларҙа?

“Ошо хәлдә мөхәббәт, изгелек, ярҙам итеү ни эшләр ине?” Һәр ситуацияла ошо һорауға бирелгән яуап – кешенең үҙе ул.

Кешене уйлама, үҙеңде уйла, йәғни секунд һайын ошо һорауға нисек итеп яуап биреүеңде уйла. Сөнки шул яуап – һин ул. Сөнки һинең менән осрашҡан һәр кеше һинең шул һорауға ниндәй яуап биреүеңде белеү өсөн ебәрелгән.

Ҡартатайым әйтә торғайны: “Һиңә һәр осраған кеше Хызыр Ильяс ул. Хызыр Ильяс урамда хәйерсе булып ултыра, һине һынап ултыра, шуға аҡсаңды бер ҡасан да йәлләмә”, – ти ине.

Ә беҙ бит йыш ҡына: “Хәйерсе араҡы алыу өсөн аҡса йыя”, – тип аҡса бирмәҫкә тырышабыҙ. Әммә!.. Хәйерсене уйлама, үҙеңде уйла. Изгелек итеү мөмкинселегенән файҙалан.

Эйе, һәр осрашыу, һәр осраған кеше (дошманмы, дуҫмы – уныһы мөһим түгел) беҙҙең өсөн бүләк ул. “Мин – кем?” тигән һорауға “Мин – мөхәббәт, изгелек, ярҙам итеү” тип яуап биреү мөмкинселеген тыуҙырған бүләк. Шул уҡ ваҡытта һин үҙең дә һәр осраған кеше өсөн бүләк. Шуға күрә тормошоңа килеп кергән һәр кешенең ҡайһы яғы менән бүләк икәнлеген таба бел, аңлай бел, яуап бирә бел.

Аллаһы Тәғәләнең оло, бөйөк һүҙе бар: “Мин һеҙҙең янға фәрештәнән башҡа бер кемде лә ебәрмәйем”.

## *Бәхеткә сәйәхәт*

Бөтә донъяла бик күп туристик фирмалар, ял итеү урындары бар. Уларҙың төп маҡсаты – мөмкин тиклем күберәк кешеләрҙе сәйәхәткә йәлеп итеү. Ни тиклем күп халыҡты урынынан ҡуҙғата алһалар, шул тиклем байыйҙар улар. Шуға күрә лә туристик фирмалар, ял иттереүсе ойошмалар реклама ярҙамында әҙәм балаһының аңында, тыуған төйәгендә ултырыу – насар нәмә, ундай кеше бәхетһеҙ, тигән фекер тыуҙыра. Был “һөжүм” уғата көслө, һәм бер мәл сәйәхәткә сыға алмағаны арҡаһында кешенең күңелендәге тынысһыҙлыҡ көсәйә, ул үҙен ысынлап та ифрат бәхетһеҙ тоя башлай. Ошо рекламаларға ышанған кешеләр барлыюҡлы аҡсаһын йыя ла (үҙен бәхетле тойоу өсөн, ә дөрөҫөрәге – теге фирмаларҙың рекламаларына буйһоноп) сәйәхәткә сығып китә. Төрлө ҡалалар (илдәр) күрә улар, әммә (ғәжәп!) күңелендәге тынысһыҙлыҡтан ҡотола алмай. Ни өсөн? Сөнки, төптән ҡарағанда, кешеләр ҙә, магазиндар ҙа, ҡунаҡханалар ҙа, ҡалалар ҙа бөтә ерҙә лә бер иш. Тыштан бер аҙ айырмалары булһа ла, эстәлегендә улар араһында бер ниндәй айырма юҡ. Шуға күрә лә кешелә быларҙың барыһын да ҡайҙалыр күргән кеүек тойғо тыуа, ул ни өсөн шул тиклем аҡса түгеп бында килгәнен аңламай башлай. Бер мәл ул сәйәхәтенең маҡсатына өлгәшә алмауын һиҙемләй һәм уның күңелендәге тыныслыҡ тағы көсәйә төшә. (Бында шуны ла әйтергә кәрәк: ғалимдар раҫлауынса, кешенең тәненә, йәненә фәҡәт тыуған еренең тәбиғәте һәм менталитеты ғына ыңғай тәьҫир яһай, ә сит ерҙең тәьҫире әҙәм балаһына һәр саҡ насар һәм зарарлы.)

Күп кешенең трагедияһы шунда: ул бәхетте ситтән эҙләй. Тик бәхет бер ҡасан да ситтә булмай. Ул һәр саҡ кешенең эргәһендә, дөрөҫө – уның эсендә, күңелендә. Әгәр һин эргәңдәге донъяға ҡыуана белмәйһең икән, әгәр һин булғанына ҡәнәғәт түгелһең икән – тимәк, күңелеңдә тыныслыҡ юҡ, тимәк, һин сит донъяны күреп кенә ҡыуаныс та, ҡәнәғәтлек тә кисермәҫһең – күңел тыныслығы тапмаҫһың. Бәхет эҙләп сәйәхәт ҡылыусы – иң бәхетһеҙ кеше.

Шуны аңлау мотлаҡ: кеше ошо секундта, баҫып торған ерендә бәхетле. Аллаһы Тәғәлә кешенең тәненә һәм йәненә бәхетле булыу, бәхетте тойоу өсөн бөтәһен дә биргән. Шуға күрә әҙәм балаһына һис тә бәхет эҙләп алыҫ ерҙәргә юлға сығырға кәрәкмәй. Ә бар аҡылын, белемен, рухи көсөн күңеле эсенә сәйәхәт ҡылыуға йүнәлтергә һәм унда үҙен күптән көтөп торған тыныслыҡты табырға ғына кәрәк.

## *Вазифа һәм тән*

Бер дуҫым һөйләне: нәшриәттә директор булып эшләгәндә, яҙыусылар йүгереп килеп, баш эйеп һаулыҡ һорашҡан, тыуған көнөндә хатта бүләктәр килтергән, башҡа байрамдарҙа ла буш ҡалдырмаған. Әммә эшенән төшкәс, күптәр унан ҡырҡа һыуынған, ә иң күп бүләк ташыусы, иң яҡын дуҫ тип йөрөгән бер шағир урамда һаулыҡ та һорашмай үтеп киткән. Элекке етәксе ошо хаҡта хайран ҡалып һәм әсенеп һөйләгәйне.

Был хәлде ентекләп тикшерәйек әле. Кеше һәр саҡ ике өлөштән тора. Береһе – уның тәне. Икенсеһе – уның вазифаһы. Вазифа һис тә кешенең тәне менән бәйле түгел. Әгәр директорға ҡул аҫтында эшләүселәре табына, хөрмәт итә икән, был – уның вазифаһына бәйле. Эйе, директор вазифаһын күптәр хөрмәт итә, әммә ошо вазифа һинең тәнеңдән ысҡынып ситкә китә икән, бөтә ихтирам да, табыныу ҙа баяғы вазифа артынан ситкә китәсәк. Быға алдан әҙер булырға кәрәк.

Оло вазифа алып тороусы күп кешеләрҙең бәләһе шунда: улар үҙҙәренең тәне менән юғары вазифа араһындағы айырманыноймай башлай. Юғары вазифаға йүнәлгән хөрмәт үҙҙәренең тәненә бағышланған, тип алдана. Вазифанан төшөрөлгәс, уның менән бергә үҙенә ҡарата табыныуҙың да бөтөүен ауыр кисерә.

Бөтә кешеләрҙең дә тәне бер төрлө. Бер тән дә икенсе тәндән түбән дә, өҫтөн дә түгел. Фәҡәт вазифалар ғына эреле-ваҡлы һәм төрлө, улар ғына төрлө кимәлдәге маҡтауға, табыныуға лайыҡ. Кеше вазифаларға йүнәлтелгән табыныуҙарҙы, үҙенең тәненә ҡағыла икән, тип уйламаҫҡа тейеш. Элекке нәшриәт директоры ла үҙенә табыныусы шағирҙарҙы әрләмәһен ине. Улар бит директорҙың тәнен түгел, ә вазифаһын бөгөн дә кисәге кеүек хөрмәт итә. Тик был вазифала инде икенсе кеше (тән) ултыра.

## *Тойғолар*

Нимә ул тормош? Тормош иң алда – тойғо, кисереш. Юҡҡа ғынамы ни бер бөйөк кеше: “Мин һиҙәм, тимәк, йәшәйем!” – тимәгән бит. Эйе, кеше кисерештәрҙе тойоу өсөн килә был донъяға. Оло кисерештәр. Бында уның ыңғаймы, киреме икәнлеге мөһим түгел. Тик тойғолар булһын. Быны иҫбат итеү өсөн шуны әйтеү ҙә етә: кеше тәне – бер-береһенә бәйләнгән атомдар өйөмө ул. Атомдар кеше тәне рәүешендә уҡмашҡанға күрә генә уның эсендә төрлө тойғолар барлыҡҡа килә. Бер мәл тән үлә, ә ундағы бер генә атом да юҡҡа сыҡмай, фәҡәт бер-береһенән ысҡына һәм тойғо тыуҙырыу көсөн генә юғалта. Ә инде кисереш булмағас, тормош та бөттө тип һанала.

Ана шуға ла кешегә тормош тип аталған ваҡыт арауығында иҫ киткес диапазондағы кисерештәр бүләк ителә. Йәғни йәшәүҙең мәғәнәһе – мөмкин тиклем күберәк, тәрәнерәк төрлө-төрлө аҡлы-ҡаралы тойғолар кисереү ул. Һәм тән, бай тойғолар аша үтеү өсөн, ниндәй генә ҡиәфәткә инмәй. Дарвин теорияһы буйынса, кешелек, кеше рәүешен алғанға тиклем, миллиондар йыл элек сүмесбаш рәүешендә яралған, меңәр быуаттар һыу эсендә йәшәгән, шунан шыуышып ергә сыҡҡан, бер мәл маймыл ҡиәфәтен алған, аҙаҡ кешегә әүерелеп киткән. Күптәр быға ышанмай. Әммә яҡшылап ҡараһаң, һәр кем үҙенең ғүмерендә ошо стадияларҙың барыһын да үтә һәм ошо ваҡыт эсендә иҫ киткес тойғолар кисерә. Яралғандан һуң тәүге аҙналарҙа ул әсә ҡарынында сүмесбаш рәүешендә була, шунан туғыҙ ай буйы балыҡ кеүек һыу эсендә йәшәй, бер мәл яҡты донъяға сыға, бер аҙҙан селәү һымаҡ шыуыша башлай, шунан, маймыл кеүек, һөйләшә алмайынса, тарбанлап йөрөй. Ошо мәлдәрҙә тән бер ни аңламай, бер ни һиҙмәй, тибеҙ. Әммә, ғалимдар иҫбатлауынса, бала әсә ҡарынында уҡ бөтә нәмәне ишетә, тоя икән. Йәғни кеше яралғандан алып төрлө кисерештәр донъяһында йәшәй. Аҙаҡ бала ир етә, һау, көслө, матур булыу тойғоларына рәхәтләнә. Уларҙы һиҙгәндән һуң уға яңы, бай кисерештәр – хәлһеҙләнеү, ҡартайыу бүләк ителә. Шунан ауырыу, ауыртыуҙың нимә икәнлеген тойоу бәхете лә тейә әҙәм балаһына. Һәм аҙаҡ тән, яралыу кеүек үк иң көслө, татлы кисереш аша үтә – уға үлем килә.

Шулай итеп, бер тормош эсендә ниндәй бай, киң диапазонлы, миллиондарса кисерештәр донъяһын бирә кешегә Аллаһы Тәғәлә. Уларҙың һәр береһе ҡыҙыҡ, ҡыуаныслы һәм кәрәкле. Уларҙың һәр береһен: ҡараһын да, ағын да татыу – үҙе бер бәхет. Тик был кисерештәрҙе береһен дә трагедия тип ҡабул итергә ярамай. Һәр тойғоноң – фәҡәт атомдар (нейрондар) тирбәлеүе икәнен белергә, тормоштоң тойғолар йомғағы икәнлегенә төшөнөргә һәм ни тиклем көслө, тәрән, ҡапма-ҡаршы кисерештәр менән йәшәһәң, шул тиклем бай тормош юлы үткәнлегеңде аңларға ғына кәрәк.

## *Ысын ураҙа*

Беҙ һиҙеү ағзаларыбыҙ (күҙ, ҡолаҡ, тел, танау, ашҡаҙан, енес) аша матди донъяға бик ныҡ бәйләнгәнбеҙ. Йәғни күҙ – күрергә, ҡолаҡ – ишетергә, тел һөйләргә теләй, ашҡаҙан аш таптыра һ.б. Улар үҙенә кәрәген һорап, алдаштырып, беҙҙе рухи донъяға ебәрмәй тота, Аллаһы Тәғәләне тойорға мөмкинлек бирмәй.

Ана шуға ла дини китаптар, йылына бер ай булһа ла, алдатҡыс матди донъянан ысҡынып, рухи донъяға яҡынайырға тәҡдим итә. Бының иң һәйбәт юлы – ураҙа тотоу – бар һиҙеү ағзаларын эшләүҙән туҡтатыу.

Әммә күп кеше был изге ритуалдың мәғәнәһен тулыһынса аңлап етмәй. Улар ураҙа тотоу – көнө буйы ас йөрөү тип уйлай. Ләкин ярты тәүлек ашамау-эсмәү – матди донъяға бәйләүсе бер генә сынйырҙан ысҡыныу, бер генә һиҙеү ағзаһын – ашҡаҙанды эшләүҙән туҡтатырға маташыу ул. Ысын ураҙа, тулы ураҙа мәлендә бөтә һиҙеү ағзалары ла матди донъя менән бәйләнеште өҙөргә тейеш. Шул саҡта ғына ысын ураҙа тотола, кеше рухи яҡтан таҙара, Аллаһы Тәғәләгә яҡынлаша. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, беҙ бөгөнгө көсөргәнешле тормошта ундай тулы ураҙа тота алмайбыҙҙыр. Беҙ изге Рамазан айында ла эшкә һәм уҡырға барырға тейешбеҙ. Тимәк, кешеләр менән аралашырға мәжбүрбеҙ. Шул сәбәпле һиҙеү ағзаларыбыҙҙы тулыһынса тыя алмаһаҡ та, уларҙы мөмкин тиклем сикләү мотлаҡ. Мәҫәлән, музыка тыңламаҫҡа, телевизор ҡарамаҫҡа, гәзит-журналдар уҡымаҫҡа, мөмкин тиклем аҙ һөйләшергә... Шул саҡта ғына, ураҙа тарафынан ҡуйылған маҡсаттың йөҙ процентына өлгәшмәһәк тә, егерме процент тирәһен

үтәй алырбыҙ. Ни тиһәң дә, егерме процент – ноль түгел бит әле. Ошо бер аҙ тынысландыра. Ә инде ураҙа осоронда күп һөйләшеү, телевизор ҡарау, музыка тыңлау ас йөрөү арҡаһында йыйылған процентарҙы юҡҡа сығара. Ул саҡта ярты тәүлек ашамауҙан ғына бер ниндәй ҙә рухи файҙа булмай. Шуны һис ҡасан онотторға ярамай.

## Үҙеңде уйла

Яңыраҡ телевизорҙан һуҡыр кешеләрҙең нисек йәшәүе хаҡында тапшырыу ҡараным. Ауыр тормоштарын күреп (күҙле кешеләр ҡарашы менән), уларға ҡарата йәлләү тойғоһо барлыҡҡа килде. Тапшырыу авторҙарының маҡсаты ла телевизор ҡараусыла шундай кисереш уятыу ине, шикелле.

Ләкин ошо ерҙә беҙ бер нәмәне онотабыҙ. Кеше ни өсөн килә был донъяға? Һәр кемдең үҙ маҡсаты, үҙ миссияһы бар. Йән һәр бер тыуыу алдынан тән рәүешендә ни ҡиәфәттә булырын, нисек йәшәрен, йәғни яҙмышын үҙе һайлай. Кемдер үҙе теләп – һуҡыр, кемдер – хәйерсе, кемдер бөкрө булып үтеп ҡарарға уйлай был тормошта. Шуға күрә һуҡырҙы йәлләргә түгел, ә был йәндең ошо тән эсендә бер ғүмерен үтергә ниәтләнгәнен тыныс ҡына аңларға кәрәк. Был – беҙҙең ярҙамға мохтаж кешеләргә ярҙам итмәҫкә тигән һүҙ түгел. Сөнки һәр кем һинең янына һынау өсөн ебәрелә – йә юғары күтәреү, йә түбән төшөрөү өсөн. Дөрөҫө – был үҙеңдән тора. Ҡаршыңа килгән кешегә ниндәй мөнәсәбәт күрһәтһәң, шул – һин ул. Хәйерсегә аҡсаңды йәлләнең икән, һин – ярлы, һинең бер ҡасан да аҡсаң булмаясаҡ; ысын күңелдән ярҙам иттең, байлығың менән бүлештең икән, һин – бай, аҡсаң тағы ла күбәйер. Ана шуға ла беҙ физик яҡтан зәғиф кешеләрҙе йәлләргә түгел, ә уларға үҙ миссияһын үтәүселәр тип ҡарарға тейешбеҙ. Ә беҙҙең бурыс – улар янында, хәйер, һәр кеше янында, үҙеңдең кем икәнлегеңде тағы бер тапҡыр тикшереп, белеп ҡалыу һәм үҙеңде тәрбиәләү, эшләү, ҡороу мөмкинлегенән файҙаланып ҡалыу. Йәғни кем менән осрашҡанда ла – ярлы менәнме, ғәрип менәнме – уны түгел, үҙеңде уйла, ошо осрашыуҙан файҙаланып ҡал, рухи күтәрелеү форсатын үткәреп ебәрмә.

## Бәхетле тормош

Башҡортостандың халыҡ артисткаһы Нурия Ирсаева һөйләгәйне: “Ирем менән өйләнешкәс, бер өйҙән бәләкәй генә бүлмә бирҙеләр. Шунда сынаяҡ-сәйнүк килтереп йәшәй башланыҡ.

Бүлмәбеҙҙең ишеге йоҡа, төртһәң, емерелергә тора, рәтләп бикләнмәй ҙә. Ҡай саҡ эшкә ишекте бикләмәй китәбеҙ. Йә ашығабыҙ, йә бикләргә онотабыҙ. Берәйһе беҙ юҡта бүлмәгә инер, тип уйламайбыҙ ҙа, борсолмайбыҙ ҙа. Хәйер, ниңә борсолорға? Унда бит кеше урлап китерҙәй бер нәмә лә юҡ – кейемдәребеҙ өҫтөбөҙҙә.

Бер мәл беҙгә ҡыйбатлы ғына келәм бүләк иттеләр. Ә келәмдәрҙең дефицит сағы. Иртәгәһенә эшкә китергә булғайныҡ, йоҙаҡтың насар икәнлеген иҫкә төшөрҙөк. Ирем эшкә барманы, магазиндан яңы йоҙаҡ килтереп ҡуйҙы. Эштә уйлап ултырам: йоҙаҡты алмаштырҙыҡ та ул, ә ишек хөрт бит. Берәйһе уны емереп, келәмде алып сығып китмәҫме? Шул уҡ көндө ишекте алмаштырҙыҡ. Нығыраҡ, яңыраҡ ишек ҡуйҙырҙыҡ. Иртәгәһенә эшкә китеп бара инем, ярты юлда ҡурҡып туҡтап ҡалдым: ә ишекте бикләнемме һуң әле? Элек бит йыш ҡына уны бикләргә онотоп та китә инек. Шул ғәҙәт менән бөгөн дә бикһеҙ ҡалдырманыммы? Ҡот осоп, кире өйгә йүгерҙем. Үҙем уйлап барам: туҡта, ни булды әле беҙҙең менән? Ошоғаса рәхәт кенә йәшәй инек, келәмле булғайныҡ,

тыныслыҡ бөттө! Бәләкәй генә байлыҡ та кешегә ана шулай борсолоу, ҡурҡыу килтерәме икән? Ә тағы ла ҡыйбатыраҡ әйберҙәр ала башлаһаҡ, ни булыр?!.”

Нурия Ирсаева һөйләгән ошо ваҡиғала кешенең тыныс, рухи тормоштан тынғыһыҙ, матди көн итеүгә күсә барыуы асыҡ күренә. Әҙәм балаһы ни тиклем матди донъяға нығыраҡ бәйләнһә (күп аҡса алыу өсөн тырышһа, йыһаз, байлыҡ туплай башлаһа), шул тиклем нығыраҡ борсолоуға, хафаға һәм ҡурҡыуға бата бара. Байығыуға ҡул һелтәп, булғанына ҡәнәғәт булып ҡала алған кешенең генә күңеле һәр саҡ тыныс була, ул бер нәмәгә лә борсолмайынса, тормошҡа ҡыуанып ҡарай, уның матурлығын күрә һәм рәхәтләнеп йәшәй.

## *Мөъжизә*

Йыш ҡына: “Әгәр Аллаһ бар икән, мине ышандырыу өсөн берәй мөғжизә эшләһен”, – тигән һүҙҙәр ишетергә тура килә. Иң ғәжәбе шунда: беҙҙе мөғжизәләр донъяһы уратып алған. Ләкин беҙ уларға күнеккәнбеҙ һәм күрмәйбеҙ.

Мәҫәлән, һуңғы осор компьютерға ғәжәпләнәбеҙ, уның ус аяһындай дискетаһына кирбес ҙурлыҡ ун роман һыя, тип аптырайбыҙ. Уны компьютерға ҡуйыуың була, шул романдарҙың теләһә ниндәй бите экранда пәйҙә була, уны шунда уҡ ҡағыҙға баҫтырып алырға мөмкин. Мөғжизәме? Мөғжизә. Әммә уны донъяға ашырыу өсөн бик күп махсус нәмәләр кәрәк: электр уты, компьютер һ.б.

Ә бит Аллаһы Тәғәлә шундай уҡ дискетаны күптән эшләгән, беҙ уны көн дә күрәбеҙ, быға күнеккәнбеҙ, шуға ла аптырамайбыҙ. Ул – орлоҡ. Мәҫәлән, имән ағасы орлоғо. Беҙ уны тупраҡ тигән “компьютер“ға һалабыҙ, һәм орлоҡтоң программаһы сәғәт кеүек эшләй башлай – имән үҫентеһе шыта һәм ул үҙенә һалынған программа буйынса үҫә, зурая. Ғәжәп бит! Һәм быны өсөн һис тә ҡатмарлы компьютер ҙа, мотлаҡ рәүештә электр уты ла кәрәкмәй. Ошоно кеше орлоғо хаҡында ла әйтергә була. “Дискета” (кеше орлоғо) “компьютер“ға (әсә ҡарынына) һалына һәм орлоҡтағы программа эшләй башлай – бала тыуа. Һәм был компьютер кеше ҡулы менән эшләнгән компьютерға ҡарағанда миллиард тапҡыр ҡатмарлыраҡ. Мөғжизә!

Йәки ябай тауыҡ йомортҡаһын алайыҡ. Бына ҡайҙа ул – мөғжизә! Йомортҡа бер ни аңламаған тауыҡ эсендә ярала, үҙенең эсенә иҫ киткес ҡатмарлы программа ала. Һәм был программа, кәрәкле шарт тыуыу менән, атом энергияһы кеүек эшләй башлай – себеш хасил була. Ләкин беҙ, йомортҡаны көн дә күргәс, уның иҫ киткес мөғжизә икәнлегенә иғтибар ҙа итмәйбеҙ.

Кеше үҙе ятраҡан ризыҡты ашай. Шул секундтан организм эсендә титаник эш башлана – ризыҡтың составын белергә, уны нисек итеп айырым элементтарға бүлеүҙе асыҡларға, быны эшләү өсөн кислота, аммиак кеүек нәмәләр эшләп сығарырға, ризыҡтың кәрәкле элементтарын дөрөҫ файҙаланырға (ҡайһыһын – ҡанға, ҡайһыһын һөйәккә ебәреп), кәрәкмәгәнен сығарып ташларға кәрәк. Ошондай эш башҡарыу өсөн ҙур химия заводы кәрәк булыр ине. Ә беҙҙең нескә организм быны тиҙ һәм аңһат ҡына эшләй. Мөғжизә!

Мөғжизәләр… Күҙ күрә – мөғжизә. Тамаҡ ярылары тауыш сығара – мөғжизә. Организмдың һәр күҙәнәгенең дөрөҫ һәм кәрәгенсә эшләүе – үҙе оло мөғжизә. Ағастар, йәнлектәр, һәр кем үҙ программаһы буйынса сәғәт кеүек үҫә, йәшәй – мөғжизә. Ай, Ер, Ҡояш, йондоҙҙар бирелгән программа буйынса тамсы ла ситкә тайпылмайынса хәрәкәт итә – мөғжизә!

Беҙҙең тирә-йүндәге бар нәмә – ҡабатланмаҫ мөғжизә. Һәм был мөғжизәләр һис тә үҙенән-үҙе барлыҡҡа килмәй. Улар Оло Аҡыл тарафынан бик уйлап эшләнгән – мөғжизә!

## *Матди мөхәббәт*

Мөхәббәт ике төрлө була. Тәүгеһе – Аллаһы Тәғәләгә ҡарата рәхмәтле мөхәббәт. Ул – юғары, рухи мөхәббәт тип атала. Икенсеһе – матди донъялағы һәр нәмәгә ҡарата мөхәббәт, матди мөхәббәт. Быға байлыҡҡа, данға, кешеләргә ҡарата мөхәббәт инә.

Мин ир менән ҡатын араһындағы мөхәббәт хаҡында һүҙ алып бармаҡсымын.

Беҙ үҙебеҙҙең яҙмышты үҙебеҙ ҡорабыҙ. Нимәлер хаҡында тәрән кисерешкә бирелеп, йәғни даими рәүештә уйланһаң, Йыһанда ошо уй тарафынан тыуған яуап хасил була. Был ваҡиға – стенаға туп һуғыу менән бәрәбәр. Һин ырғытҡан туп тәүҙә стенаға табан оса, барып еткәс, ҡаҡлыға ла үҙеңә кире килеп бәрелә.

Эйе, кешенең бер уйы ла, кисереше лә юҡҡа сыҡмай. Ул һәр саҡ хужаһына кире әйләнеп ҡайта. Был осорҙа Аллаһы Тәғәләгә һәр кемдең уйын күҙәтеп тороу кәрәкмәй. Бөйөк Атабыҙ шундай ҡанун уйлап сығарған, һәм ул бер нindәй күҙәтеүһеҙ ҙә сәғәт кеүек эшләй.

Бына шундай ҡанундар ярҙамында ир менән ҡатын һәр саҡ бер-береһен тәрбиәләй, рухи яҡтан таҙарта. Әгәр ир кеше байлыҡты артыҡ яратһа, уға аҡсаның ҡәҙерен белмәгән ҡатын бирелә; тоғролоҡҡа артыҡ табынһа, хыянатсыл кәләш тап була һ.б. Ҡатындар ҙа матди донъяға артыҡ йәбешеүҙән (тимәк, гонаһҡа батыуҙан) ҡотҡарыла: әгәр эсмәгән ир хаҡында артыҡ хыялланһа йәки эскеселәрҙе күрә алмаһа, уға эскесе ир эләгә; татыу ғаиләне артыҡ күрһә, һуғыша, туҡмай торған иргә сыға.

Егет менән ҡыҙ бер-береһенең холҡоноң насарлығын аңлап, бер-береһен ташлап ҡасып китмәһен өсөн, Оло программа уларҙың икеһен дә иҫәрләндерә – ғашиҡ итә. Егет менән ҡыҙ бер ни күрмәй башлай, хатта ата-әсәһен, дуҫтарын тыңламай, өйләнешә. Был иҫәрләнеү бер йыл самаһы дауам итә. Айыҡҡан, бер-береһенең кемлеген аңлаған ир менән ҡатын икеһе ике яҡҡа ҡасып китмәһен өсөн, уларҙы бәйләүсе икенсе көс барлыҡҡа килә – бала тыуа. Һәм бер-береңде рухи тәрбиәләү, рухи таҙартыу, матди донъяға артыҡ бәйләнеүҙән ҡотҡарыу программаһы эшләүен дауам итә.

Тормошта бары матди нәмә хаҡында артыҡ хыялланырға, уға мөкиббән китеп ынтылырға ярамай. Юғиһә, һин үҙең Йыһандан "һорап" үҙеңде урынына ултыртыусы, тәрбиәләүсе көс тартып аласаҡһың. Был, үҙеңә маҡсат ҡуйып, уға ынтылыу кәрәкмәй, тигән һүҙ түгел. Ынтылығыҙ хыялығыҙға. Әммә Юғары Көстәр бер-ике тапҡыр иҫкәртеү рәүешендә теләгәнегеҙҙе бирмәй икән, ваҡытында быны аңларға һәм маҡсатығыҙға төҙәтмә индерергә кәрәк.

## *Бәхет хаҡында*

Күптән түгел минең эшкә таныш ҡатын килде, һүҙҙән һүҙ сығып, был тормошоноң насарлығына, үҙенең бәхетһеҙлегенә зарлана башланы: фатиры юҡ, ире бешмәгән, бер нәмәгә лә өлгәшә алмай, аҡса етешмәй...

Мин ваҡытында туҡтаттым: "Бөтә бәлә – һинең донъяны дөрөҫ күрмәүеңдә, – тинем, – тормошоң менән ҡәнәғәт була белмәүеңдә". "Нисек ҡәнәғәт булайым, әгәр..." "Туҡта, туҡта, – тием. – Һин һәр нәмәгә кире баһа бирәһең, шуға ла тормошоңа кире энергия килә, ошо сәбәпле тирә-йүнеңә кире ваҡиғалар, кире кешеләр йыйыла! Һинең тормошоңда матур, ыңғай ваҡиғалар ҙа күп бит!" "Ҡайҙа улар?" – тип һорай ҡатын. "Һинең һаулығың нисек?" – "Һәйбәт, буғай". "Ireң бармы?" – "Бар, тик..." "Туҡта! Минең һорауҙарға ғына яуап бир. Иреңдең эше бармы?" "Бар". "Аҡса килтерәме өйгә?" – "Килтерә". "Балаларың бармы?", "Бар". "Нисәү?" – "Икәү". "Һаулыҡтары нисек?", "Һәйбәт, Аллаға шөкөр, ҡай саҡ ҡына

йүткереп алалар”. “Үҙеңдең эшең бармы?”, “Бар”. “Аҡса түләйҙәрме?” – “Түләйҙәр”. “Атай-әсәйең ни хәлдә?” – “Иҫәндәр, Аллаға шөкөр”. “Әле йәшәргә урының бармы?”– “Бар, ятаҡта йәшәйбеҙ”.

“Ҡара әле, – мин әйтәм, – күпме ыңғай күренештәр бар һинең тормошоңда, һин бит иҫ киткес бәхетле кеше. Ниңә шуларҙы күрмәйһең, ҡыуанмайһың, ошолар өсөн Аллаһы Тәғәләгә рәхмәт әйтмәйһең, һаман зарланаһың, шул рәүешле үҙеңә негатив, кире ваҡиғалар тартаһың! Аңла: бәхетле булыуы бик анһат ул. Фәҡәт үҙеңдең ошо ерҙә, ошо мәлдә бәхетле икәнлегеңде тоя белеү, йәғни булғанына ҡәнәғәт була белеү. Кешегә һәр саҡ булғаны етә, кеше һәр саҡ булғаны менән бәхетле”.

Ә олоға, ҙурға, киләсәккә ынтылмаҫҡамы ни, тырышмаҫҡамы ни, тиерһегеҙ. Ынтыл! Тырыш! Тик ошо секундтағы эшең менән ләззәтлән, унан ҡыуаныс ал. Ә һөҙөмтәне уйлама, уның өсөн борсолма. Борсолоуҙың эште насар яҡҡа алып китеүе бар. Ә бөтәһе лә һәйбәт буласаҡ, тип уйлаһаң, ыңғай уй ыңғай һөҙөмтәгә илтәсәк.

Ошо секундта, ошо ерҙә бәхетле икәнлеген аңлай алмаған, булғанына риза була белмәгән кешене ҡайҙа ғына илтмә (Парижға, Төркиәгә, Мәскәүгә, Америкаға һ.б.), күпме генә аҡса, байлыҡ бирмә, бәхетле була алмай. Юҡҡамы ни, күптәргә, Сибайҙа йәки ауылда йәшәгәндә, Өфөгә күсһә, бәхетле булыр кеүек тойола, әммә ул баш ҡалаға килеп урынлаша, ятаҡтан бүлмә ала, ә үҙе – һаман бәхетһеҙ.

Аңла: һин хәҙер һәм ошо урында һәр саҡ бәхетле, һиңә һәр саҡ булғаны етә.

## *Һин бөгөн матур*

Илле йәштәр тирәһендәге бер артистканың фотоһын журнал биттәрендә баҫырға булғас, ул кисә генә эшләнгән рәсемен оҡшатманы: “Юҡ, юҡ! Был бармай. Бында мин ҡарт, йәмһеҙ!” Ә беҙҙең фекеребеҙсә, фото бик уңышлы килеп сыҡҡан, уның бер ниндәй насарлығы юҡ, рәсемдә артистка үҙенә бик оҡшап тора. Әммә күпме генә өгөтләһәк тә, актриса ул фотоһын баҫтырманы, беҙгә ете-һигеҙ йыл элегерәк төшкән рәсемен бирҙе: “Ошоно баҫығыҙ!”

Ни сәбәптәндер “насар” фото минең өҫтәл тартмаһында ятып ҡалды. Биш йыл самаһы үткәс, был артистка бүлмәмә килеп ингәйне, теге рәсемде хужабикәһенә кире ҡайтарҙым. Артистка ҡыуанып китте: “Ниндәй һәйбәт фото! Ҡайҙан алдың?” “Был бит теге саҡта оҡшатмаған рәсемегеҙ”. “Кит, юҡты һөйләмә, – ти актриса. – Ул саҡтағы фотоны хәтерләйем, унда бит мин ҡарт инем, йәмһеҙ инем. Ә бында бит мин йәш, матур!” Күпме генә әйтһәм дә, актриса биш йыл элек ошо фотоһын яманлағанына ышанманы.

Хәйер, был сифат күптәргә хас. Алтмыш йәшлектәр ун йыл элекке ҡиәфәтен һағына – илле йәшлек кеше булып күренергә хыяллана, шуның өсөн бөтә көсөн һала (биҙәнә, сәстәрен буяй һ.б.). Ә илле йәшлектәрҙең, үҙ сиратында, ҡырҡ йәштәге кеүек булғыһы килә, ә тегеһенең теләге – утыҙ йәштәге ҡиәфәтенә ҡайтыу, ә утыҙ йәшлектәр… Хәйер, быны туҡтауһыҙ дауам итергә мөмкин. Йәғни кеше һәр саҡ бөгөнгө көнө менән риза түгел, биш-алты йәки ун – ун биш йәшкә йәшерәк сағын һағына, ярата, шул осорона ҡайта алмағанына ҡайғыра.

Ә бит трагедияны (был ысынлап та күптәр өсөн трагедия) еңел хәл итеп була. Фәҡәт үҙ-үҙеңде яратыу тойғоһон үткән ваҡыттан бөгөнгөгә күсерергә генә кәрәк. Һиңә бөгөн илле йәшме? Ҡайғырма һәм шуны бел: алтмышҡа еткәс, барыбер бөгөнгө сағыңды һағынасаҡһың, ярата саҡһың, шуға күрә һин ошо йәшеңә, ҡиәфәтеңә ҡарата матур, изге һәм шифалы тойғоларыңды ун йылға һуңға ҡалдырма, үҙ-үҙеңде бөгөн ярат, үҙ-үҙең менән бөгөн һоҡлан, бөгөнгө тормошҡа ҡыуан.

Бел: үҙеңдең бөгөнгө йәшеңде, ҡиәфәтеңде, тормошоңдо яратмау, күрә алмау энергетик кимәлдә көслө кире, бысраҡ энергия тыуҙыра, ул кешенең тәнен төрлө ауырыуҙарға һала, яҙмышын селпәрәмә килтерә.

Кеше, ниндәй генә йәштә, ниндәй генә ҡиәфәттә лә, ниндәй генә яҙмышҡа дусар булыуына ҡарамай, һәр саҡ үҙен бөгөн яратырға, үҙе менән бөгөн һоҡланырға, хәҙерге донъя менән, йәшәйеше менән ҡәнәғәт булырға, ҡартайыуын ризалыҡ менән, хатта ҡыуанып ҡабул итергә тейеш.

Изге, матур, таҙа тойғолар ғына ыңғай, саф энергия тыуҙыра. Ә ул кешенең яҙмышын төҙөкләндерә, матурлай, тәнен ауырыуҙарҙан һаҡлай.

## *Хәрәкәт һәм эшмәкәрлек*

Күп кеше үҙен бәхетһеҙ итеп тоя. Һеҙ ҙә шулаймы? Улайһа, зинһар, бер минутҡа туҡтағыҙ. Үткәнде лә, киләсәкте лә уйламағыҙ. Үҙегеҙҙең ошо секундтағы ғына, ошо мәлдәге хәлегеҙҙе аңларға, тойорға, күҙәтергә тырышығыҙ. Әгәр ҙә киләсәкте лә, үткәнде лә онота алһағыҙ, үҙегеҙҙең ошо мәлдә бәхетле икәнлегегеҙҙе аңларһығыҙ.

Кешене хәрәкәт – бәхетле, эшмәкәрлек бәхетһеҙ итә. Тәндең ошо мәлдәге тәбиғи талабын ҡәнәғәтләндереү, йәғни ошо секундта тән башҡарған төп эш өсөн йәшәү, шунан ҡыуаныс алыу – хәрәкәт ул. Үткәнде йәки киләсәкте уйлап ниҙер эшләү, йәғни тәндең ошо мәлдәге төп эшен онотоп, башҡа нәмәне уйлау, башҡа нәмәләр менән шөғөлләнеү – эшмәкәрлек була. Ә бит кеше үткәндә лә, киләсәктә лә түгел, фәҡәт хәҙерге мәлдә йәшәй. Тимәк, һеҙ ошо секундта ни эшләйһегеҙ, шуның менән генә йәшәргә тейешһегеҙ.

Әгәр һеҙ асығып ашайһығыҙ икән, ашаған саҡта үҙегеҙҙе тыңлайһығыҙ, күҙәтәһегеҙ икән, был – хәрәкәт. Әгәр ашаған саҡта башҡа нәмә хаҡында уйлайһығыҙ, гәзит уҡыйһығыҙ, йәки телевизор ҡарайһығыҙ, һөйләшеп ултыраһығыҙ икән, был – эшмәкәрлек.

Күп кеше хәрәкәт итеп йәшәй белмәй, ул фәҡәт эшмәкәрлек менән шөғөлләнә. Буш ваҡытында туҡтап ҡалып үҙен тыңлайһы, күҙәтәһе йә янындағы донъя менән һоҡланаһы урынға, тыныс ҡына ултыра алмай, ни эшләргә белмәгәнлектән, йә гәзит уҡый, йә кроссворд сисә, телевизор ҡарай, һөйләшергә кеше эҙләй. Уның тәне быларҙың береһен дә талап итмәй, ул, тынып ҡалып, эске хәрәкәтте күҙәтергә, тойорға теләй, ә борсоулы уй, мейе кешене алдап, туҡтауһыҙ эшмәкәрлек менән шөғөлләнергә мәжбүр итә.

Эшмәкәрлектән ҡотолоу өсөн мейеләге тынғы белмәгән уйҙы туҡтатырға, дөрөҫөрәге, күпмелер ваҡытҡа бер ниндәй уйһыҙ ҡалдырырға кәрәк. Бының өсөн ошо мәлдең ҡыуанысын, бәхетен тойорға, аңларға өйрәнеү, йәки эргәңдәге мөхит менән һоҡланыу мотлаҡ.

Бер генә минутҡа туҡтағыҙ! Үткән, киләсәк хаҡында уйламағыҙ. Тәнегеҙҙе тыңлағыҙ. Йә иһә эргәгеҙҙәге донъяға – яуған ямғырға, елгә тирбәлгән сәскәләргә, япраҡтар шаулауына, ҡоштар һайрауына ҡарағыҙ һәм һоҡланығыҙ! Эшләгән саҡта эштән ҡыуаныс алығыҙ. Атлағанда атлап барыуығыҙға шатланығыҙ. Тормоштоң ошо мәленән, ошо секундынан ләззәт алығыҙ. Һәм һеҙ бәхетле кешегә әүерелерһегеҙ.

## *Ғашиҡ булыу һәм мөхәббәт*

Яңыраҡ гәзиттә бер ҡатындың хатын уҡырға тура килде. Ул ире менән ғашиҡ булышып өйләнешеүҙәре хаҡында яҙа. Әммә йәшәргә урын юҡлығы, аҡса етешмәүе арҡаһында мөнәсәбәттәренең ҡырҡыулашыуы, ике яҡтан да ата-әсәһе

килеп ҡыҫылғас, аралары бөтөнләй насарайыуы тураһында һөйләй. Ире ҡатынына бер нисә тапҡыр ҡул күтәргән. Шулай итеп, ялҡынлы хистәр әкренләп боҙло нәфрәткә әйләнгән, улар айырылышып ҡуйған. “Мөхәббәт юҡ ул!” – тип һығымта яһай хат авторы. Һөйләүенә ҡарағанда, ҡатындың ғашиҡ булыу менән мөхәббәт араһындағы айырманы белмәүе һиҙелә.

Хәйер, ул ғына түгел, күптәр ҡайҙан белһен был айырманы? Хәҙерге кинолар, сериалдар, бигерәк тә эстрада йырҙары егет менән ҡыҙ араһындағы барлыҡҡа килгән мөнәсәбәтте – тансыларҙа, урамда осраҡлы рәүештә тыуған, бер ниндәй рухи принциптарға таянмаған мауығыуҙы – ғашиҡ булыуҙы – “мөхәббәт” тип бутай. Шул тойғоно Алла кимәленә күтәрә, уға табынырға өндәй. Тормошто әле аңлап етмәгән йәштәр ошоға ышана, йырҙар тарафынан туҡтауһыҙ тылҡылғас, ғашиҡ булыуҙы бөтә бәләләрҙән ҡотҡарыусы көс тип, йәшәйештең төп маҡсаты итеп ҡабул итә, шуға ғына таянып ғаилә ҡорорға маташа. Егет һәм ҡыҙҙар, әгәр кемгәлер ғашиҡ булмаһам, ҡыйынлыҡтарға ҡаршы тора алмаҫмын, йәшәүемдең мәғәнәһе бөтәр, тигән фекергә килә. Ана шулай итеп яңылыш рәүештә “мөхәббәт” тип аталған мауығыу – ғашиҡ булыу тураһында үтә ҡыҙыл уйҙырма тыуа. Әммә тормош үтә ҡыҙылды тиҙ уңдыра, һәм күңел төшөнкөлөгөнә бирелеүҙәр, айырылышыуҙар, хатта үҙ-үҙенә ҡул һалыуҙар башлана. Үрҙәге ҡатындың яҙмышы ошоға бер миҫал. Уға үҙ ҡайғыһының сәбәптәрен аңлатыу өсөн түбәндәгене әйтер инем.

Элекке ваҡыттарҙа ҡыҙ кейәүен өйләнешкәнгә тиклем бөтөнләй күрмәгән, белмәгән. Ҡатын ирен ғәйеп итмәҫкә, ниндәй булһа ла ҡабул итергә, уны ихтирам итергә һәм уға буйһонорға кәрәклеген белгән, иренең мөхәббәтен яулау мотлаҡ икәнлеген аңлаған. Ире менән йәшәүҙе енси теләк арҡаһында түгел, ә Аллаһы Тәғәлә ҡушыуы буйынса бирелгән тип, Хоҙайға рәхмәт әйтеп ҡабул иткән.

Ысын мөхәббәт – бер-береңә ҡарата ныҡлы рухи һәм дини принциптарға таянған ихтирам ул, ихтирамдан сыҡҡан һоҡланыу. Ихтирам ни тиклем көслө булһа, мөхәббәт тә көслө. Шуға ихтирамды күҙ ҡараһындай һаҡларға, уны үҫтерергә кәрәк.

Ғашиҡ булыу – ысын мөхәббәттең башы ғына. Әгәр ысын мөхәббәткә әүерелмәһә, ғашиҡ булыу тормош ауырлыҡтары арҡаһында анһат ҡына юҡҡа сыға. Сөнки ул буш ерҙә осраҡлы барлыҡҡа килгән, уның рухи нигеҙе юҡ. Ә ысын мөхәббәт һәр саҡ донъя ҡыйынлыҡтарын ризалыҡ менән ҡабул итә. Уларға артыҡ иғтибар итмәй, хатта күрмәй, шуға бер нәмәгә бирешмәй йәшәүен дауам итә ала.

Эстрада йырҙары данлаған “ғашиҡ булышыу” – мөхәббәт түгел, ә бер ниндәй принципҡа нигеҙләнмәгән ваҡытлыса хис. Эстрада һәм сериалдар “ғашиҡ булыу”ҙы, күберәк йәштәрҙең иғтибарын йәлеп итеү өсөн, юрамал “мөхәббәт” тип атай. Бәләкәй балаларға әүрәтер өсөн уйынсыҡ биргән кеүек, бәлки, ваҡытында йәштәрҙе лә әүрәтер өсөн ошондай уйынсыҡ кәрәктер. Бала үҫкәс уйынсыҡтың буш нәмә икәнлеген аңлаған кеүек, һәр кем аҡыллана төшә, ғашиҡ булыуҙың матур биҙәлгән уйынсыҡ ҡына икәнлегенә төшөнөргә, ғаилә ҡорғанда һис тә уның кеүек еңел-елпе тойғоға таянырға ярамағанлығын белергә тейеш.

*(Аҙағы киләһе һанда.)*

**Баязит**
**БИКБАЙ**

## Онотолмаҫ ғүмер*

*(Ғәлимов Сәләмдең тыуыуына 100 йыл)*

Башҡорт әҙәбиәтенең тарихы бик үк оҙайлы булмаһа ла, халыҡҡа биргән онотолмаҫлыҡ художниктары, гүзәл исемдәре бар. Шағир Ғ. Сәләм дә шундай яҡты исемдәр менән бер рәттә тора. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, бик күпте вәғәҙә иткән ҙур йөрәкле кеше, ялтырап торған талантлы шағир бик йәшләй – ни бары 28 йәшендә генә арабыҙҙан китте. Ә ул:



*Ун ғүмергә бөтмәҫ йәшәү дәрте*
*Йөрөтә ине йөрәк түрендә!*

Ләкин тулы бер ғүмер ҙә йәшәп бөтә алманы, әммә ун ғүмергә һыйып бөтә алмаҫлыҡ гүзәл әҫәрҙәр тыуҙырып өлгөрҙө.

Ғ. Сәләм башҡорт совет әҙәбиәтенә Бөйөк Октябрь социалистик революцияһынан һуң килгән икенсе быуын яҙыусылар рәтенә керә. Был осорҙа беҙҙең әҙәбиәтебеҙ үҙенең балалыҡ дәүерен үткән, быуынға ултырған һәм аҙмы-күпме үҙ традицияларын төҫмөрләп өлгөргәйне инде. Уға совет мәктәбе үткән йәш көстәр ағылды. Был йәштәр үҙҙәре менән яңылыҡтар ҙа алып килделәр уға. Хәҙер уларҙың әҙерлеге халыҡ ижады традициялары, иҫке мәҙрәсәләрҙә өҙөп-йолҡоп алған тар әҙәби күнекмәләр багажы менән түгел, рус классик һәм совет әҙәбиәте тәжрибәләре менән үлсәнә ине. Улар, татар һәм башҡорт әҙәбиәтенең үҫешенә ҙур йоғонто яһаған Ғ. Туҡай һәм М. Ғафури тәжрибәләрен яҡшы үҙләштереү менән бергә, В. Маяковский, С. Есенин, А. Блок, Н. Асеев, Н. Тихонов һәм татар совет поэзияһының иң күренекле вәкилдәре Һ. Таҡташ, Х. Туфан әҫәрҙәрен дә үрнәк итеп өйрәнделәр.

Билдәле, был осорҙа – иҫке ҡалдыҡтарҙы тамам емереп бөтмәгән һәм яңыны тыуҙырып өлгөрмәгән саҡта – поэзияла ялған яңылыҡтар эҙләү сире лә бөтөп етмәгәйне әле. Ул эҙләнеүҙәр, төплө йүнәлешле хәрәкәт булыуҙан бигерәк, күбеһенсә, – иҫке шиғыр үлсәүҙәрен, ритм, рифмаларҙы аңлы рәүештә ватыуҙарға ҡайтып ҡала ине. Быны күреү өсөн Ғ. Сәләмдең 1930 –1933 йылдар эсендә яҙған өйрәнсек шиғырҙарына ҡарау ҙа етә. Ул да, башҡа күп үҙ тиҫтерҙәре һымаҡ, йәш Хәсән Туфандың тик тышҡы формаһына күндәм эйәреүсе ине.

---

*Мәҡәлә 1961 йылда яҙылған. 1987 йылда сыҡҡан “Ғ. Сәләм тураһында иҫтәлектәр” йыйынтығынан алынды.*

Бәхеткә ҡаршы, киң ҡоласлы Ғ. Сәләм был эпигонлыҡтан тиҙ ҡотола белде. Беҙ инде 1934 йылдың баштарында уҡ уның үҙ тауышы, шиғырҙарында үҙенә генә хас интонацияларын ишетә башланыҡ, йөрәк йылылығын тойҙоҡ. Талантлы шағир бөтә көүҙәһенә турайҙы, ҡанат кирҙе. Тимәк, кешенең аңлы ижад ғүмере башланды. Был ғүмер оҙон түгел, бары 5 йыл ғына, ә нindәй тулы ҡанлы ғүмер һуң! Ошо ҡыҫҡа ғүмер эсендә лә уның ҡәләме аҫтынан, йөрәге түренән «Өс йыр», «Мәскәү», «Республика иртәһе», «Һәйкәл», «Беҙҙең урам баҡсаһы», «Ғүмер», «Шоңҡар», «Бала» һымаҡ һоҡланғыс шиғырҙар, ода, балладалар, поэмалар урғылып сыҡты. Тотоп тыя алмаҫлыҡ көслө саф һыулы шишмә ярһып бәреп сыҡты, ул бик оҙаҡ атып торор, кешеләрҙе һөйөндөрөр төҫлө ине...

Ҡапыл балҡыған талант, кешеләрҙе хайран ҡалдырып күкте яҡтыртҡан оло метеор һымаҡ, үтеп тә китте. Метеорҙың яҡтыһы күҙ алдынан юғала, йыһан киңлегендә эҙе ҡалмай, ергә ваҡ саңдары ғына төшһә төшөп ҡалалыр. Әммә Ғ. Сәләмдең гүзәл әҫәрҙәренең нурҙары һүнмәнеләр, улар һаман булһа кешеләрҙең күңелдәрен яҡтырталар, йылыталар әле. Шуға күрә, талантлы шағир беҙгә бөгөн дә яҡын, бөгөн дә ҡәҙерле, беҙ уның исемен йылы хөрмәт менән иҫкә алабыҙ. Бер ҡарағанда, уның шундай аҙ ғүмер эсендә күп кенә яҡшы әҫәрҙәр яҙып өлгөрөүе ғәжәп төҫлө. Шағирҙы аҙ белгән кешеләр өсөн бигерәк тә был шулай тойола. Әммә Ғ. Сәләмдең замандаштары – уны яҡындан белгән кешеләр өсөн бында бер ҙә ғәжәпләнерлек урын юҡ. Барыһынан элек, уны был ижад еңеүҙәренә уның йән аямай тырыш хеҙмәт итеүе, туған халҡын, Ватанды тәрән һөйөүе, тулы тормош менән ҡайнап йәшәүе килтерҙе. Хеҙмәттә лә, тормошта ла ярты-йорто булыуҙы һөймәне ул. Ғ. Сәләмдең барлыҡ тормош һәм ижад ғүмеренә эпиграф итеп атаҡлы «Юлбаҫарҙар», «Мәкер һәм мөхәббәт» авторының шундай һүҙҙәрен ҡуйырға мөмкин булыр ине:

*Әжәл һинең өсөн ҡурҡынысмы?*
*Теләмәйһеңме һин үлергә? —*
*Бөтөн булып йәшә,*
*ярты үлер,*
*Бөтөн булъан үлмәҫ ъүмергә!*

Поезд китер алдынан тимер юл станцияһында тыуа торған ығы-зығыны һеҙҙең күп тапҡырҙар күргәнегеҙ барҙыр. Кешеләр өтәләнәләр, йә ары, йә бире ташланалар. Улар нимәгәлер өлгөрмәгәндәр, нимәләрелер онотолған, Ғ. Сәләм дә минең күҙ алдымда, кешеләрҙең баштары аша ҡарап, ҡайҙалыр китергә ашҡынған төҫлө баҫып тора. Эйе, ул йәшәргә, күберәк ижад итеп ҡалырға ашыҡты. Ләкин шағирҙың был ашығыуы станциялағы кешеләрҙең ығы-зығы килеүе түгел, ә тормошто күберәк күрергә, халыҡҡа күберәк файҙа килтерергә ашығыу ине. Уның күкшел күҙҙәре шатлыҡ саҡҡылары менән балҡый, йөрәге, күрәһең, яңы матурлыҡтарҙы алдан тойоп, ашҡынып тибә. Шағирҙың был саҡтағы торошон, эске кисерештәрен Украина әҙәбиәтенең классигы Михаил Михайлович Коцюбинскийҙың бер саҡ Максим Горькийға: «Мөмкин тиклем күберәкте күргем килә: миңә бит инде ер йөҙөндә оҙаҡ йәшәргә ҡалмаған, ә мин уны – бик һөйәм...» – тип әйткән һүҙҙәре менән дә үтә тапҡыр билдәләп булыр ине.

Шулай уҡ Ғ. Сәләм үҙен тиҙерәк әҙәбиәттә таныта алыу, дан ҡаҙаныу артынан да ҡыуманы. Дан йәки аҡса артынан сабыу – яҙыусы эше түгел ул, ысын яҙыусы үҙен халыҡҡа файҙалы хеҙмәт итеүгә, уның тормошон еңеләйтеү һәм тағы ла матурлауға бағышлай. Ғ. Сәләм тап ана шундай шағир, оло йөрәкле кеше ине. Шуға күрә уның барлыҡ шиғырҙары халыҡ тормошоноң үҙ баҡсаһында үҫеп сыҡтылар, ә хәйләкәр аҡыл уйлап тапҡан фекер-тойғоларҙың яһалма емештәре булманы. Ғ. Сәләм шиғырҙарының пафосы – халыҡ пафосы, халыҡтың ҡәҙерле уй-тойғолары, кисерештәре, ҡыҫҡаһы – уның барлыҡ тормошо. Уларҙы уҡып, Башҡортостандың социалистик үҫеш баҫҡыстарын, халыҡ тормошондағы яңы үҙгәрештәрҙе күҙ алдына асыҡ баҫтыра алған кеүек, шағирҙың үҙ биографияһын да белергә мөмкин.

Ғ. Сәләмдең, совет кешеһе һәм уның рухының инженеры булараҡ, ғәжәп гүзәл сифаттары бар ине. Минеңсә, тап ана шул яҡшы сифаттар шағир булып йылдам үҫергә, күп хеҙмәттәр күрһәтеп өлгөрөргә ярҙам иткәндер. Шағирҙың характерында, барынан элек, уның эшсәнлеге, һәр яңылыҡ менән йәнле ҡыҙыҡһыныуы, сапсан тынғыһыҙ булыуы беҙҙең күҙебеҙгә ташлана. Кешеләргә хас булған бөтә яҡшы нәмәләр уға ла хас, ә ят булған нәмәләр уға ла ят. Ул янып йәшәне, янып эшләне. Ул, күп һанлы шиғырҙар яҙыу менән бергә, үҙе ғилми эшкә лә әҙерләнә, халыҡ ижадын ентекләп өйрәнә; ул журналист-корреспондент сифатында яңы төҙөлөштәргә, колхоздарға барырға ла өлгөрә; ул Яҙыусылар союзы йәки комсомол ойошмалары йөкмәткән бурыстарҙы ла еренә еткереп үтәй; ул әҙәбиәт һәм театр тураһында үткәрелгән йыйылыштарҙа ла ҡайнар сығыш яһай, клуб һәм уҡыу йорттары сәхнәләренән дә үҙенең ялҡынлы шиғырҙарын уҡый. Ә быларҙың һәр береһенә етешеү өсөн генә лә күпме көс, ваҡыт, мөхәббәт кәрәк!.. Шуларҙы уйлаһаң, шағирҙың йөрәк түрендә ысындан да «ун ғүмергә етерлек йәшәү дәрте» булыуына шик ҡалмай.

Шул уҡ ваҡыт шәхси тормошонда ла Ғ. Сәләм төҫһөҙ кипкән шөкәрә булып йәшәмәне. Ул һәр саҡ шаян, шат күңелле, йор һүҙле була торғайны. Уның тормоштан зарланған сағын берәү ҙә ишетмәгәндер. Ул шахматта ла яҡшы уйнай белә. Минең бөгөн дә хәтеремдә: 1938 йылдың көҙөндә беҙ Ленинградтың шахмат клубында үткәрелгән бер сеанста булдыҡ. Сеансты ҡаланың ул йылдағы чемпионы гроссмейстер А. Толуш бирҙе. Ғ. Сәләм уйында отто! Минеңсә, йоҡонан башҡа, уның бер генә ваҡыты буш булмай торғайны шикелле. Ул катокта ла була, велосипедта ла йөрөй, тура килгәндә бильярд та һуға, хатта тансаларға ла йөрөй. Хәтерегеҙҙәлер, уның "Балалар" тигән шиғырында шундай юлдар бар:

*Һүҙ тәртибе һөйләргә*
*Һәм етә миңә:*
*Ә мин – барам ауылъа*
*Велосипед менән...*

Был ҡоро һүҙ шаяртыу ғына түгел бит. Ғ. Сәләм тап ошо шиғыр яҙылған 1935 йылда, Силәбегә тиклем поезда барғас, үҙе тыуған ауылға артабан юлды велосипедта үтте. Был, үҙенсә, бер велопробег ине!.. Шундай күп ҡыҙыҡһыныуҙар, янып эшләүҙәр менән йәшәгән шағирҙың йөрәгендә, билдәле, тәмәке тартыу, эсеү йәки башҡаса төрлө буш күңел асыуҙар кеүек ваҡлыҡтарға урын юҡ ине. Былар бит – йәш совет кешеһенең, комсомолец шағирҙың, ысындан да һоҡланғыс сифаттары ине.

Ғ. Сәләм – үҙенең ҡыҫҡа ижад ғүмере эсендә лә башҡорт совет әҙәбиәтен байытыуға, уны артабан үҫтереүгә күп көс һалған кеше. Уның әҫәрҙәре өлгөһөндә беҙҙә күп һанлы йәш шағирҙар үҫеп сыҡты. Халҡыбыҙ уның әҫәрҙәрен бөгөн дә яратып уҡый. Шуға күрә лә шағирҙың исеме беҙгә бик тә ҡәҙерле. Беҙ уны йыш ҡына һағынабыҙ, гел юҡһынабыҙ.

Шағир 1938 йылда, үҙенең үлеренән бер генә йыл элек, Ғ. Туҡай иҫтәлегенә арналған шиғырын:

*Шағир ҡайтмаҫ,*
*Шағир килмәҫ,*
*Йырҙары уның һаман да*
*Халҡы менән бергә...–*

тигән юлдар менән тамамлағайны. Бөгөн был һүҙҙәрҙе Ғ. Сәләмдең үҙенә ҡарата ла хаҡлы рәүештә әйтергә мөмкин. Эйе, ул үҙе лә һаман беҙҙең менән!

# ЙЫЛМАЙЫП БАҠТЫ ДОНЪЯҒА

*(Марсель Искәндәрҙең тыуыуына 50 йыл)*



Ҡол-Дәүләт... Ғәбиҙулла... Рәйес Түләк... Буранбай... Яҡты донъяла ғүмерҙәре ҡыҫҡараҡ булды уларҙың, әммә һәр ҡайһыһы үҙенсәлекле, күләм яғынан сағыштырһаҡ, тос ҡына нәфис һүҙ, хатта ки әйтергә яраһа, бихисап уҡыусыларҙың заупҡлы баһаһына лайыҡ әҙәби мираҫ ҡалдырып китте. Үҙҙәрен ҡусты, дуҫ, замандаш күргән дүрт йәш ҡәләмдәшкә Марсель Бағдат улы Искәндәровтың да (Марсель Искәндәр)исемшәрифтәрен өҫтәү зарур.

Буласаҡ яҙыусы Көйөргәҙе районының Яҡшымбәт ауылында тыуған. Йәмле тәбиғәтле йәнтөйәгендә урта мәктәпте тамамлағас, дәртле, ярһыу егет Мәләүезгә юллана, шунда профессиональ-техник училище бөтөрөп, ҡала предприятиеларында эшләй. Унан техникаға һәләтле уҙаман Өфө торлаҡ-коммуналь хужалыҡтарының береһендә байтаҡ йылдар слесарь һөнәре буйынса тир түгә.

Бала сағынан әҙәбиәткә, бигерәк тә халыҡтың ауыҙ-тел ижадына ғашиҡ Марсель Башҡорт дәүләт университетының филология факультетында уҡый. Тәүге шиғырҙары, нәҫерҙәре, хикәйәләре ошонда яҙыла, мәгәр үҙенә талапсан йәш әҙәбиәтсе башланғыс ижад емештәрен ташҡа баҫтырырға ашыҡмай.

Миңә унын менән байтаҡ йылдар Башҡортостан «Китап» нәшриәтенең нәфис һәм балалар әҙәбиәте редакцияһында бергә эшләргә насип итте. Ҡатмарлы, бәғзе саҡ хатта бәхәсле ҡулъяҙмаларҙы намыҫ ҡушыуы буйынса, йәғни авторҙарҙың кемлегенә — йәшенә, абруйына, наградаларына ҡарамай, ғәҙел редакторларға тырышты.

Ҡәләмдәшебеҙҙең 1995 йылда бер генә, әммә берәгәй, ҙур тираж менән һәлмәк проза китабы донъя күрҙе: «Юл сатында» тип атала ул. Унда төп урынды «Ҡомаҡтар» романы биләй, ҡалғандары — хикәйәләр. Романдың исеме, бер уйлаһаң, сәйер һәм һиҫкәндергес. Ысынлап та, әҫәрҙе социаль-психологик жанрға индерергә һәм йөкмәткеһендә ҡараңғы буяуҙарҙың ярайһы ҡуйы төҫөн күрергә мөмкин. Сөнки автор образдарҙы уйлап-яһап сығармаған, уларҙы таныштары, хатта ки әшнәләре араһынан тапҡан. Йәмғиәт тарафынан ҡыйырһытылыуҙарға дусар ителеүгә ҡарамаҫтан, ана шул геройҙар үҙҙәренең тәбиғи асылы, ябайлығы, ҡырыҫлығы, иң мөһиме, ауырлыҡтар алдында баш эймәҫкә ынтылыштары менән иҫтә ҡала. Хикәйәләре иһә тәрбиәүи юҫыҡтараҡ, уларға бер ни тиклем көнсығыш әҙәбиәте мотивтары хас.

Ҡырҡ өс йәшендә генә китеп барҙы арабыҙҙан Марсель... Геройҙары һымаҡ, үҙе лә тормош ауырлыҡтарына, сәләмәтлек зәхмәттәренә бирешмәй йәшәргә, ижад итергә теләне. Үкенескә, уй-хыялдары, изге теләктәре бойомға ашып бөтмәне. Йылмайыуы иҫтә... Ҡалын ирендәрен киң яҙып, күҙҙәренән нур сәсеп, ихлас йылмая торғайны...

**Сабир ШӘРИПОВ.**

# *Башҡортостан яҙыусыларының сираттағы съезы алдынан*

## ӘҘӘБИӘТ ТОРМОШ ДӘРЕСЛЕГЕМЕ БӨГӨН?

*(ӘҘӘБИ ТӘНҠИТ: ПРОФЕССИОНАЛДАР ДӘҮЕРЕ, ГРАЖДАНЛЫҠ ПОЗИЦИЯҺЫ)*

*Әҙәбиәт ғилеме, билдәле булыуынса, өскә тармаҡланып үҫешә: әҙәбиәт теорияһы, тарихы һәм көндәлек әҙәби тәнҡит. 1990–1996 йылдарҙа "Башҡорт әҙәбиәте тарихы" исеме аҫтында алты томлыҡ донъя күрҙе. Тимәк, был тармаҡ яҡшымы, насармы эшләнгән (яҡшымы, насармы, тием, сөнки беҙҙә тарих та ошоғаса, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, тик идеологияға ғына хеҙмәт итте – етәкселеккә кем килеүенә бәйле ҡайта-ҡайта күсерелеп яҙылды, үҙгәртелде, "эшкәртелде"). Башлыса Ким Әхмәтйәнов тырышлығы менән әҙәбиәт теорияһы ла (Өфө, 1971; икенсе баҫмаһы – 1985), башҡорт әҙәбиәте миҫалында, милли үҙенсәлектәр иҫәпкә алынып, ярайһы төплө байҡап сығылған. Тик ул бөгөнгө талаптарға яуап биреп бөтмәй. XXI быуат был йүнәлештә лә етди тикшеренеүҙәр, яңы һығымталар, киң дөйөмләштереүҙәр көтә. Әлегеһе һөйләшеү башлыса көндәлек әҙәби тәнҡиткә ҡағылышлы.*

***Әҙип** (шағир, прозаик) ваҡиғаларҙы, әҙәм балаларын образлы тел менән **һүрәтләй, күрһәтә. Әҙәби тәнҡитсе** иһә әҙиптең тормошто, кешеләрҙе дөрөҫ һүрәтләүен, был һүрәтләүҙәрҙең ысынбарлыҡҡа тап килеү-килмәүен **иҫбатлай,** фактарға таянып, әҙәбиәт теорияһы төшөнсәләре ярҙамында юғары художестволылыҡ үлсәмдәрен билдәләшер критерийҙарға нигеҙләнеп, **һығымталар яһай, дөйөмләштерә.***

*Бөгөнгө әҙәби тәнҡит буйынса башҡорт әҙәбиәтен тәғәйен күҙаллап буламы? Йәмғиәт, әҙәбиәт үҫешенә (эйе, йәмғиәт үҫешен ҡайғыртҡан тәнҡит кенә дәүерҙең рухиәт алғасҡыһы була аласаҡ) булышлыҡ итерлек кимәлдәме ул? Әллә шәхси зауыҡтарҙы ғына ҡәнәғәтләндереүсе ролендә сығыш яһаймы? Йәмғиәт, әҙиптәр, уҡыусылар уға мохтажлыҡ кисерәме?*

*Моғайын, шуныһы бәхәсһеҙҙер: кеше эшмәкәрлегенең һәр бер өлкәһендә лә үҙ эшенең һөнәрмәндәре, ижади һырттарҙың төрлө-төрлө түбәләрен яулаусылар бар. Әммә уларҙы күрә-күрһәтә белергә кәрәк: һоҡланғыс талантты ла мәлендә тейешенсә баһалау, тулыраҡ асылыу өсөн уны ҡурсалау зарур. Әлбиттә, иң ғәҙел тәнҡитсе – ваҡыт ғәли йәнәптәре лә бар-барлығын, тик әҙәм балаһына бөгөнгөһө ҡәҙерлерәк барыбер. Үткәндең емеше булыуы йәһәтенән дә, киләсәктең яралғыларын йөрөтөүе менән дә. Ә инде иң оло бурыстарҙы күҙ уңында тотҡанда, ул милләттең иртәгәге рухиәте өсөн эшләнергә тейешленең бөтәһен дә бөгөн эшләргә тейеш. Сөнки, әҙәбиәтте – рухиәт дәреслеге тип ҡарайбыҙ икән, ысын мәғәнәһендәге әҙәби тәнҡит шул дәреслектең ысынбарлыҡ талаптарына тап килеү-килмәүен билдәләүсе ул.*

*Бөгөнгө әҙәби тәнҡиткә бәйле әңгәмәлә – БДУ доценты, филология фәндәре кандидаты **Зәки ӘЛИБАЕВ.***

**Фәнил КҮЗБӘКОВ:**

**– Бөгөнгө әҙәби процесты нисегерәк баһаларға мөмкин? Уртаға һалып һөйләшерҙәй, башҡа әҙәбиәттәр ҡатарына һис бер тартыныуһыҙ, икеләнеүһеҙ ҡуйырлыҡ әҫәрҙәргә иғтибар итәйек әле. Бар бит улар. Уйлаһаң, донъя әҙәбиәте тигәнебеҙгә лә ҡан заман ҡабул ителеп ҡалыплашҡан ҡанундарға ярашлы бер үк халыҡтарҙың әҙәбиәтен индереп йөрөтмәйҙәрме? Көнсығыш, Көнбайыш, Урта Азия әҙәбиәттәре араһына төрки донъяһы әҙәбиәте лә инеп бара түгелме? Мин бында тәү сиратта Мөхтәр Әүәзов менән Сыңғыҙ Айытматов ижадын күҙ уңында тотам. Әгәр ҙә тәржемә эштәре иң юғары кимәлгә ҡуйылған булһа, донъя кимәлендә майҙан тоторлоҡ әҫәрҙәр беҙҙә лә бар ул.**

**Зәки ӘЛИБАЕВ:**

– Ҡайһы берәүҙәр, әҙәби тәнҡит кенә түгел, ғөмүмән, йүнле әҙәбиәт юҡ хәҙер, тип ебәрә. Быны әҙәбиәт буйынса фән докторы булып киткәндәр ауыҙынан ишетеү бигерәк ғәжәп! Бар ул әҙәбиәт, әҙәби тәнҡит тә бар...

**Фәнил КҮЗБӘКОВ:**

**– Бында артыҡ һүҙ ҡуйыртыу ҙа урынһыҙҙыр, бәлки. Һүҙ тик ниндәй әҙәбиәт, ниндәй тәнҡит – шул турала барырға тейештер. Әгәр ҙә 1920–1930-сы йылдарҙа профессиональ башҡорт әҙәбиәте (шартлы рәүештә шулай атайыҡ. Сөнки атаҡлы сәсәндәр, мәшһүр Аҡмулла ижадын профессиональ әҙәбиәт түгел тип нисек әйтәһең?!) формалаша тип иҫәпләһәк, әҙәби тәнҡиткә бәйле был фекер бәхәстәр тыуҙырасаҡ. Ни генә тимә, ул осорҙа әҙәби тәнҡит художестволылыҡтан алда һуғышсан партиялылыҡты алға һөрҙө. Шул сәбәпле әҙәби тәнҡит утына эләккәндәр үҙлегенән сәйәси золом ҡорбандарына әйләнә барҙы. Бындай тәнҡиттән беҙ бары 50-се йылдар уртаһынан һуң ғына арына башланыҡ. Әммә әҙиптәрҙә «тешле» тәнҡиттән ҡурҡыу әлегәсә йәшәй. Күрәһең, ул генетик рәүештә теге дәүерҙән күсә киләләр. Әҙиптәрҙе сәйәси дошман тип ҡараусылар, шөкөр, юҡ бит хәҙер, ә ҡурҡыу ҡалған. Әйҙә беҙ ана шул булғанын барлап ҡарайыҡ. Әгәр ҙә тәнҡит талаптарға яуап бирә тибеҙ икән – әйҙәгеҙ асыҡлайыҡ: ниндәй тәнҡит, ниндәй талаптарға яуап бирә? Әйтәйек, бар Рафаэль Аҙнағоловтың материалдары. Улар, ҡағиҙә булараҡ, мәҙехләүгә ҡоролған. Был автор маҡтай башланымы, ғөмүмән, сама тигән тойғоно онота: уртаҡул ғына әҙипте күктәргә ашыра, фәрештәргә еткерә, бер ҡалыптан һуҡтырып, “гений“ яһап ҡуя. Бындай осраҡта нисек Мостай Кәримдең һығымталары менән килешмәйһең: “Талантһыҙлыҡ талантһыҙлыҡты юғарыға сөйә, ул бының менән үҙен дә сөйә, үҙен раҫлай“ (“Ағиҙел”, N 11, 2010, 110-сы бит). Әҙиптең әҙәплеһе “Аҙнағолов баһаһы хатта яртылаш ҡына хәҡиҡәткә тап килә” тигән хәлдә лә ояласаҡ. Ә оялмай икән, был «тәнҡитсе»нән тағы-тағы мәҡәләләр көтә икән, нимә генә әйтергә мөмкин һуң?!. Йәки “Башҡортостан“дағы “Үҙебеҙ хаҡында үҙебеҙ“ тигән “үлемһеҙ“ рубриканы ал...**

**Зәки ӘЛИБАЕВ:**

– Әйткәнемсә, бөгөнгө әҙәбиәт донъяһында ваҡиға булырҙай әҫәрҙәребеҙ етерлек, тик беҙ уларҙы күрә-күрһәтә белмәйбеҙ. Көндәлек ығы-зығыла эреһе-ваҡы бергә бутала. Мәҫәлән, Фәрзәнә Аҡбулатова ижады ентекле иғтибарға лайыҡ: уның формаға бәйле эҙләнеүҙәре уңышлы килеп сыға. Нияз Алсынбаев

та был яҡлап ҡыҙыҡлы булмаҡсы... Тик күп нәмә теләк булыуҙан үтә алмай. Беҙ хатта төрлө яҡлап Рәми Ғарипов ижадын тулайым баһаламағанбыҙ. Әле булһа юғары уҡыу йорттарында уҙған быуаттың етмешенсе йылдар башында сыҡҡан «Әҙәбиәт теорияһы»на таянып эш итәбеҙ. Ә беҙгә бөгөнгө әҙәбиәтте яҡшы белгән профессионалдар кәрәк. Бары улар ғына ауырыуҙы дауалау юлдарын күрһәтә, кисектергеһеҙ сараларҙы билдәләй ала...

**Фәнил КҮЗБӘКОВ:**

**– Эйе, Рәшит Назаров феноменын өйрәнәһе бар. Прозала Талха Ғиниәтуллин, Рәшит Солтангәрәев, Әмир Әминев, Гөлсирә Ғиззәтуллиналарҙың ижады хаҡында тикшеренеүҙәр ҡыҙыҡлы, әҙәбиәт үҫеше өсөн файҙалы һәм кәрәкле булыр ине. Драматургияны театр сәнғәте менән тығыҙ берлектә ҡарау оло бер проблема...**

**Быға тиклемге һөйләшеүҙәрҙә әҙәби тәнҡит «цех»ына әҙерлекле белгестәр кәрәклеге хаҡында әйтелгәйне. Эште мәктәптән үк башлау ихтыяжы, белгестәрҙе әҙерләүселәрҙең үҙҙәрен әҙерләү, махсус семинарҙар ойоштороу, радио-телевидение аша әҙәбиәттең көнүҙәк мәсьәләләренә бәйле даими рәүештә, тәүлектең билдәле мәлендә эфирға сығыу...**

**Шулай ҙа әҙәби тәнҡиттең бөгөнгөһөн нисек баһаларға мөмкин?**

**Зәки ӘЛИБАЕВ:**

– Әҙәби тәнҡит – заман емеше ул: заман, йәмғиәт менән бергә атлай, бергә үҙгәрә. Үҙ дәүерендә Ким Әхмәтйәнов, Әнүр Вахитов, Марат Минһажетдиновтар әҙәби процесты дөрөҫ баһалағандар. Әҙәби тәнҡит әҙәби процесҡа диагноз ҡуя, әммә быны менән генә эш бөтмәй. Һау-сәләмәт организмға ла профилактика кәрәк. Ә инде ниндәйҙер кире симптомдар бар икән, дауалау юлдарын күрһәтеү фарыз...

Әҙәби тәнҡит, иң беренсе нәүбәттә, юғары профессиональ кимәлдә булырға тейеш. Ижадсының шәхесенә, таныш-тоношлоҡҡа ҡарамай, ижад елкәндәренең йүнәлешен билдәләп, хәрәкәтте барлыҡҡа килтереүсе фекерҙе ваҡытында, урынында әйтеп барырға кәрәктер, тип уйлайым. Бөгөн беҙҙә “парад” йәки “биҙәкле” тәнҡит өҫтөнлөк итә һәм беҙ шуның менән мауығып, төп эшебеҙҙе онотабыҙ, буғай.

Әҙәби тәнҡит бөгөн “ҡартайҙы”. Күберәк XX быуаттың 60–70-се йылдарында һалынған һуҡмаҡтарҙан ситкә сыҡмай, бер тирәлә уралабыҙ. Яңы, үткер һәм ҡыйыу фекер юҡ. Хатта уның кәрәге лә юҡ кеүек. Сөнки әҙәби процесс донъяһында әҙәби тәнҡиткә үгәйһетелгән ҡараш йәшәп килә. Был тармаҡта хеҙмәт итеүселәр тик “парад” ваҡытында ғына иҫкә төшә, уларҙы “пафослы маҡтау” менән ҡоралландыралар ҙа ҡуйған маҡсатҡа ирешәләр. Шуның өсөн дә тәнҡиткә ҡарашты үҙгәртергә кәрәк. Ә бит эшләрлек белгестәребеҙ ҙә юҡ түгел. Мин, мәҫәлән, Г. Гәрәеваның төплө фекерҙәрен, Ә. Хәбировтың тырышлығын билдәләр инем.

Төрлөлөккә ынтылһын ине әҙәби тәнҡит. Яҙыусыға ижады хаҡында ғәҙел фекер еткереү – уға артабан үҫеү өсөн мөмкинлектәр тыуҙыра. Асылда нисек килеп сыға? Премияға тәҡдим ителгән әҙиптәр ижады хаҡындағы материалдар, мәҫәлән, йыш ҡына уҡырлыҡ булмай... Юбилейҙарға бәйлеләре лә бер ҡалыптан. Быныһы – бер хәл. Ҡыҙғанысы шунда: саралар үтә – әҙип онотола. Ә, бәлки, тап ошоноһо ғәҙел баһалыр?

Әҙәбиәттең айырым-айырым йүнәлештәре буйынса байтаҡ хеҙмәттәр бар,

кандидатлыҡ, докторлыҡ диссертациялары яҡлана, тик әҙәбиәт өлкәһендә үҙенең фәнни мәктәбен булдырған ғалимдарыбыҙ бармы? Заманында академик Ғайса Хөсәйеновтың мәктәбе бар ине. Ә хәҙер ундай бер мәктәп тә юҡ. Бәлки, шул сәбәпле тулайым әҙәби процесс ситтәрәк ҡалалыр. Был йәһәттән “Ағиҙел“ ойошторған әңгәмәләр был бушлыҡты бер ни тиклем тултырғандай итте-итеүен: тәрән фекерҙәр яңғыраны, өлгөрөп еткән мәсьәләләр ҡуҙғатылды, хәл ителергә тейешле проблемалар бар ҡырҡыулығында ҡалҡытып күрһәтелде. Тик бындай һөйләшеүҙәр оло форум алдынан булып ала ла... аҙаҡ йәнә онотола...

**Фәнил КҮЗБӘКОВ:**

**– Улай булмаһын ине шул. “Ағиҙел“ был тәңгәлдә һәйбәт әҙәби өлгөләр ҡуйылған күргәҙмә залын хәтерләтһен, оҫтаханаға, ижад лабораторияһына әүерелһен, ҡайнап торһон ине. Әҙәби процеста бит өҙөклөк юҡ: әҫәрҙәр яҙыла тора, баҫыла бара. Тимәк, улар хаҡында фекер алышыуҙарҙың да, баһаларҙың да һуңламауы, үҙ ваҡытында, эҫе мәлендә булыуы бик мөһим. Ҡайҙалыҡты асыҡлау, маҡсаттарҙы аныҡлау, киләсәкте тоҫмаллау өсөн кәрәк был. Әлбиттә, эҫе мәлендә тигәс тә, ҡайнап торған ҡаҙанға бер кем дә ҡулын тыға һалып бармаҫ, әммә боҫораған аш табынға ҡуйыла икән, уны һыуытырға ярамай – таты юғала, табындың ҡото китә...**

**Фәнни мәктәпте бик туранан-тура ла аңларға ярамайҙыр, моғайын. Ғайса ағай Хөсәйеновҡа бәйле әйтмәксемен. Ул тотош бер институт башҡара алырҙай ғына эштәр атҡарҙы, тиҫтәләгән фән кандидаттары, фән докторҙары әҙерләне. Уларҙың күпселеге әҙәбиәт тарихы менән шөғөлләнә, бөтәһе лә, беҙ Ғайса Хөсәйенов мәктәбен үткәнбеҙ, тип әйтә ала. Шулай ҙа был, миңә ҡалһа,– тышҡы, формаль күрһәткес кенә. Фәнни мәктәп тип аталған күренеш – остаз ирешкәнде яңы осорҙа яңыса үҫтереп алып китеү ҙә ул. Икенсенән, фән донъяһында кемдеңдер эшен дауам итеү – мотлаҡ уның етәкселегендә генә диссертация яҡлауға һис кенә лә бәйләнмәгән. Үкенеслеһе шул: хатта академик Ғайса Хөсәйеновтың әҙәбиәт ғилеменең һәммә тармағында ла уның һымаҡ уҡ ҡолас ташлап иркен йөҙгән энциклопедик ҡарашлы уҡыусыһы күренмәй...**

**Ә әҙиптәрҙең ҡәләмдәштәре хаҡында сығыштарын профессиональ кимәлдә тип буламы?**

**Зәки ӘЛИБАЕВ:**

– Бындай типтағы материалдар ҙа кәрәк, әлбиттә. Әйтәйек, Муса Ғәлиҙең фекерҙәре уҡыусыла ауаздашлыҡ таба торғайны. Ноғман Мусиндың яҙғандары һәр ваҡыт ҡыҙыҡлы, фәһемле була. Заманында Мостай Кәримдең йәш ҡәләмдәштәренә яҙған асыҡ хаттары башлап яҙыусылар өсөн үҙенә күрә әсбап һымаҡ булғандыр. Әммә барыбер бындай сығыштар профессиональ тикшеренеүҙе алыштыра алмай. Бына тигән шиғырҙар яҙған таланттың да шиғыр хаҡында фекерләүе примитив булыуы бар. Уларҙың күбеһе тәүге тәьҫораттарға ғына нигеҙләнә бит.

**Фәнил КҮЗБӘКОВ:**

**– Быны, моғайын, хис-тойғо кешеләренең күбеһендә художестволы фекерләү менән логик фекерләү араһындағы нисбәттең һиҙелерлек айырымланыуы менән аңлатып булалыр. Шуға ҡәләмдәш хаҡындағы мәҡәләләрҙә эмоциональлек өҫтөнлөк итеүенә аптырайһы түгел.**

**Ҡыҙғанысы шунда: улар, башлыса, объективлыҡтан бик алыҫ тора. Сөнки ыңғай тип табылғанды төплө дәлилләгән хәлдә лә, тулайым күҙаллау булмағас, бындай бер яҡлылыҡ әҙипте дөрөҫ баһаларға ныҡ ҡамасаулай.**

*Артабанғы һөйләшеүҙә «Шоңҡар» – Башҡортостан йәштәре журналының баш мөхәррире* ***Азамат ЮЛДАШБАЕВ****.*

**Фәнил КҮЗБӘКОВ:**

**– “Ағиҙел” ойоштороған әңгәмәләр барышында әҙәби тәнҡиткә ҡағылышлы ла фекерҙәр яңғыраны. Уларға бәйле ниҙәр әйтергә мөмкин? Килешерлекме? Ә ни өсөн? Юҡ икән – ниндәй дәлилдәр булыр? Унда “Әгәр ҙә йәмғиәт тә, әҙип тә, уҡыусы ла төплө, объектив тәнҡит кәрәк тип иҫәпләһә, ул булыр ине” тигән ҡараш үткәрелә…**

**Азамат ЮЛДАШБАЕВ:**

– Ысынлап та, һуңғы ун биш-егерме йыл тирәһе “беҙҙә әҙәби тәнҡит юҡ” тип һуҡраныуҙар, һәр төрлө әҙәби йыйындарҙа тәнҡитселәрҙе итәғәтле генә итеп еңелсә генә булһа ла битәрләп алыу үҙенсәлекле бер тенденцияға, хатта ки милли әҙәби йолаға әйләнеп китте шикелле. “Тик, хәлүә, хәлүә” тип күп ҡабатлағандан ғына ауыҙҙа хәлүә тәме сыҡмаған кеүек, ҡат-ҡат тәнҡитләүҙән, урынлы-урынһыҙ битәрләүҙән, һүгеүҙән, үҙен үҙе һаҙлыҡтан һөйрәп сығарған барон Мюнхгаузен кеүек, әҙәби тәнҡит тә ҡапыл ғына күтәрелеп, яңырып, үҫеп, буй етмәҫ бейеклектәргә артылып, ҡараш иңләмәҫ киңлектәргә йәйелеп китмәҫ шул. Был – беренсенән. Икенсенән, әҙәби тәнҡит юҡ тип әйтергә тел әйләнмәй ҙә бит әле ул. Эш нимәлә? Һәр нәмә сағыштырыуҙа беленә. Бөгөнгө башҡорт әҙәбиәте тигән рухи мираҫты тыуҙырыусы әҙиптәр, шул байлыҡ менән ҡулланыусы уҡыусылар, ошо ике арала аралашсы ролен үтәүсе (һәр хәлдә, үтәргә тейешле) тәнҡитселәр – барыһы ла, дөрөҫөрәге, барыбыҙ ҙа, “СССР-ҙа тыуғандар”, совет мәктәбе уҡыусылары. Ул саҡта, иҫләүегеҙсә, социалистик реализм методы менән ижад ителгән совет әҙәбиәте синфилыҡ, партиялылыҡ кеүек идеология менән һуғарылған ине. Ул методтан тайпылған әҫәрҙәргә йәмғиәттә урын булманы, йәмғиәттә урын табылғанда ла, улар матбуғатта донъя күрә алманы. Был осраҡта һәр яҡтан сикләүҙәр менән ҡаймаланған әҙәби тәнҡиткә нимә ҡала ине?! Иҫегеҙгә төштөмө? Әлбиттә, һәр бер әҫәрҙән баяғы идеологияны хеҙмәтләндереүсе, совет иленең бөйөклөгөн, социалистик ҡоролоштоң өҫтөнлөгөн, Коммунистар партияһының XXVI съезы ҡарарҙарын тормошҡа ашырыуҙағы оло уңыштарҙы, бөткөһөҙ еңеүҙәрҙе һүрәтләүсе ишара-кинәйәләрҙе, туранан-тура әйтелгән һүҙҙәрҙе, һөйләмдәрҙе эҙләп табырға һәм уларҙы инде нығынған ҡалыптарға әйләнгән клише-шаблондарға һалып уҡыусыға алып барып еткереү. Йәғни ул осорҙа әҙәбиәт үҙе лә, әҙәби тәнҡит тә артыҡ сәйәсиләштереп, ижтимағилаштырылып йәшәне, улар дөйөм дәүләт кимәлендәге эш, бурыс, йөкләмә булараҡ ҡаралды. Әлбиттә, мин ул осорҙо бөтөнләй юҡҡа сығарып ташларға, өлгәшелгән бөтә ҡаҙаныштарҙы инҡар итергә йыйынмайым. Хатта артығыраҡ әйтәм: алтмышынсы – һикһәненсе йылдар башҡорт әҙәби тәнҡитенең һәм, ғөмүмән, әҙәбиәт теорияһының “алтын быуаты” булғандыр. Шул осорҙағыларҙың исемдәрен генә иҫкә төшөрөгөҙ әле. Мин икенсе нәмә хаҡында: беҙ бөгөнгө әҙәбиәттә лә, әҙәби тәнҡиттә лә һаман шул осорҙағы әүҙемлекте, шундай уҡ эшмәкәрлекте һаман талап итмәксебеҙ. Тик юҡҡа ғына… Бөгөн әҙәбиәт дәүләт сәйәсәте түгел. Бында эш кемдеңдер яуыз

ниәтендә, батшаларҙың уҡырға яратмауында, түрәләрҙең хәреф танымауында түгел, инде егерме йыл илебеҙҙә ғөмүмән дәүләт сәйәсәте юҡ. Бары шул ғына. Был – бер бәлә... Әҙәби тәнҡиткә килгәндә инде, беҙ совет фекерләүенән арындыҡ, тик яңыса фекерләргә һаман өйрәнмәнек, үрҙә телгә алынған клише-шаблондарҙан баш тарттыҡ, әммә ирекле фекер йөрөтөүгә зиһен тарыраҡ булып сыҡты. Бына шулай йәшәй бирәбеҙ: саҡ ҡына советтарса уйлап, бер аҙ демократтарса фекерләп, бер ни тиклем либералдарса йәшәргә күнеп... Көтәйек, тарих ике ҡабатлана, тиҙәр бит. Бәлки, бер саҡ миңә лә насип булыр: йә Дамир Шәрәфетдинов шиғырҙарында "Берҙәм Рәсәй" партияһының V съезы ҡарарҙарының сағылышы, йә Мөнир Ҡунафиндың хикәйәләрендә "Ғәҙел Рәсәй" фирҡәһе программаһын тормошҡа ашырыу мотивтары... Быныһы шаярыу...

Ысынында иһә... Ғәҙәттә, һарыҡтарҙы түгел, көтөүсене алыштыралар. Быуындар алышынырға тейеш. Уҡытыусылар ҙа... Йәмғиәттә ирекле фекер булмайынса, әҙәби тәнҡиттә лә булмай. Мостай ағайҙың геройы әйтмешләй, беҙҙең эсебеҙҙә һаман ҡолдар ята. Бөгәрләнеп-бөгәрләнеп. Беҙ – батша ҡоло, етәксе ҡоло, башҡаларҙың фекере ҡоло, банктарҙан алған кредиттар ҡоло, наҙанлыҡ ҡоло, тар фекерләү ҡоло...

**Фәнил КҮЗБӘКОВ:**

**– Әҙәби тәнҡит һинең өсөн нимә ул? Ул ниндәй талаптарға яуап бирергә тейеш?**

**Азамат ЮЛДАШБАЕВ:**

– Әҙәби тәнҡит минең өсөн – бәхәсләшеү сараһы. Автор менән, әҫәр менән, ундағы геройҙар менән. Хатта үҙ-үҙем менән. Талаптарға килгәндә инде... Минең өсөн бер генә талап: әҙәби тәнҡиттә фекер булырға тейеш. Фекерҙән фекер быуаҙыу фарыз. Ҡыҫыр фекерҙән фәтүә юҡ. Юғиһә беҙҙә тәнҡит һинд-мексика кинолары кеүек, саҡ ҡына әҫәрҙең йөкмәткеһен тәфсирләү, саҡ ҡына интрига һәм... барыһы ла бәхетле. Йә (мөмкинме, үҙ-үҙемә һылтанайым) уларҙың күбеһе бер шиғырымда яҙғанымса: бай йөкмәткеле һәм бер мәғәнәһеҙ.

**Фәнил КҮЗБӘКОВ:**

**– Беҙҙә бөгөн ниндәй тәнҡит өҫтөнлөк итә? Уларҙы төркөмләп ҡарап буламы? Уның ниндәй йүнәлештә үҫеүе әҙәбиәт файҙаһына булыр ине?**

**Азамат ЮЛДАШБАЕВ:**

– Төркөмләүгә килгәндә, ҡапыл ғына ынтылғанда икегә бүлеп ҡарарға мөмкиндер. Беренсеһе – әҙәбиәт теорияһына ҡағылышлы хеҙмәттәр. Уларҙың авторҙары – юғары уҡыу йорттарында уҡытыусы профессорҙар, доценттар, өлкән уҡытыусылар, аспиранттар, Тарих, тел, әҙәбиәт институты кесе һәм өлкән (халыҡ теле менән әйткәндә, эреле-ваҡлы) хеҙмәткәрҙәре, аспиранттар. Уларҙың күбеһе үҙҙәренең оло ғилми хеҙмәттәрен (докторлыҡ, кандидатлыҡ диссертацияларын) төрлө баҫмаларға "ваҡлап" тәҡдим итә. Һәр төрлө конференцияларҙа сығыш яһаған докладтарын мәҡәлә рәүешендә гәзит-журналдарҙа баҫтыра. Быларҙың һәр береһенең әһәмиәте үҙенсә, тик улар әҙерлекле уҡыусыға тәғәйенләнгән, киң ҡатлам уҡыусылар өсөн артыҡ ҡыҙыҡ түгел.

Икенсе төркөмдө мин "оператив тәнҡит" тип атар инем. Был төркөмгә ингән хеҙмәттәрҙең төп өлөшө – юбилейҙар айҡанлы яҙылған мәҡәләләр. Аңлашылып тора ки, юбилей булғас, төп йүнәлеш тәнҡиттән бигерәк маҡтауға үә данға табан. Һуңғы егерме йыл эсендә төрлө баҫмаларҙа донъя күргән ошондай

юбилей-тәнҡит мәҡәләләрен бергә йыйһаң, шундайыраҡ тойғо тыуып ҡуя: бәлки, Салауат Юлаев премияһын ике йылға бер түгел, ә йылына ике-өс бирергә кәрәктер. Ошо икенсе төркөмгә бер-беренең үтенесе, ҡайһы саҡ хатта ҡулалмаш яҙылған хеҙмәттәрҙе лә индерергә мөмкин. Һин мине тәнҡитләйһең, мин – һине. Һәм, әлбиттә, мөмкин тиклем объективыраҡ. Тик объективлыҡ һаман да шул соцреализм ваҡытында “Правда” гәзитендә социализмды “тәнҡитләгән” һымағыраҡ килә лә сыға. Бына шулай. Әлбиттә, бөтә әҙәби процесс ошонан ғына ғибәрәт түгелдер ҙә... Ниндәй йүнәлештә үҫергә тейешлеген асыҡ ҡына әйтеп булһа икән. Хәйер, ҡайһы яҡҡа ғына йүнәлһә лә, беҙҙең әҙәбиәт “Урал батыр”ҙан башланғанын онотмайыҡ. Һәм кимәлде лә шунан сығып билдәләйек.

**Фәнил КҮЗБӘКОВ:**

**– Бөгөнгө әҙәби тәнҡит әҙипте, алдынғы ҡарашлы тәнҡитсене, уҡыусыны ҡәнәғәтләндерерлек кимәлдәме? Ябай уҡыусының фекере әҙәби тәнҡит була аламы?**

**Азамат ЮЛДАШБАЕВ:**

– Ҡәнәғәтләндерерлекме? Баштан башлайыҡ. Шул уҡ әҙиптең, уҡыусының ихтыяжы бармы һуң? Бәлки, уның булмаған ихтыяжын, ике ятып бер төшөнә лә инмәгән талабын ҡәнәғәтләндерергә маташабыҙҙыр. Әгәр ҙә, әҙәби тәнҡит яҙыусының ижадына, уның ижади эволюцияһына йоғонто яһарға тейештер, тип уйлаһаҡ... Бөгөн мин, беҙҙең әҙәбиәттә кемдеңдер ижадына йоғонто яһап булалыр, тип уйламайым. Бәлки, һеҙ берәйһенең исемен әйтерһегеҙ? Уҡыусы менән дә шулай уҡ. Шулай булғас, ҡәнәғәтләндереү тураһында һорау бик үк коррект түгелдер. Унан һуң бит кемдеңдер (йә тәғәйен кешенең, йә айырым социаль ҡатламдың) ихтыяжын ҡәнәғәтләндереүҙе күҙ уңында тотҡан тәнҡит үҙе үк объективлыҡҡа дәғүә итә алмайҙыр.

Ябай уҡыусының фекере тәнҡит була ала, тик әҙәби тәнҡит була алмай. Хатта яҙыусыларҙың бер-береһе тураһында яҙғанының барыһы ла әҙәби тәнҡит тигән атамаға дәғүә итә алмай. Һәр бер бейеү – балет, һәр бер йыр опера булмағандай.

Ихтыяждарҙы ҡәнәғәтләндереүгә килгәндә, был процесс та, мөхәббәт һымаҡ, ике яҡлы булырға тейештер бит. Бөгөн ижад ителгән әҫәрҙәр үҙҙәре әҙәби тәнҡитте ҡәнәғәтләндерәме икән? Сөнки аҡыллы тәнҡитсе үҙенең киң эрудицияһын, бай белемен, тәрән фекерен, бөйөк зауығын, зиһенен һәм аңын файҙаланырлыҡ әҫәр таба аламы һуң? Бәлки, уға теге йәки был әҫәр хаҡында һөйләргә баяғы йөкмәткеһенән башҡа бер нәмә лә юҡтыр. Тауыҡ менән йомортҡаның беренселлеге һымаҡ, әҙәбиәт менән әҙәби тәнҡит бик оҙаҡ бер-береһен тәнҡитләй ала. Әҙәби тәнҡит булмағанға әҙәбиәт хөрт һәм киреһенсә... Улар бәхәсләшә бирә, ә халыҡ “Кривое зеркало” менән “Гәлсәр һандуғас” ҡарай.

**Фәнил КҮЗБӘКОВ:**

**– Ижад кешеһе генә түгел, ғөмүмән, әҙәм балаһы башҡалар фекеренә ҡолаҡ һалмайынса йәшәй алмай. Ел ыңғайына йөрөү өсөн түгел, ә елде иҫәпкә алыу ниәтенән. Сөнки маҡсатһыҙ карапҡа бер генә ел дә ыңғай була алмай. Урал батыр әйткәнде лә һәр даим иҫтә тотһаҡ ине:**

*Олоға кесе булығыҙ –*
*Кәңәш алып йөрөгөҙ.*
*Кесегә оло булығыҙ –*
*Кәңәш биреп йөрөгөҙ!..*

**Аҡыллыға ишара ла етә... Теләйме-теләмәйме, кемдер кемдеңдер ниндәйҙер кимәлдә йоғонтоһон кисермәй ҡалмай. Уның, йоғонтоноң, сәңгелдәк йыры аша килеп ингән халыҡ моңо, халыҡ аҡылы, халыҡ педагогикаһы булыуы мөмкин. Уны, Айбулаттың Гөлйөҙөмгә булған һөйөүен һутланып торған тел аша, күңелде берсә болоҡһотоп, берсә елкендереп, эскерһеҙ һөйөү булыуына инандыра алған әҙибә стиленең үҙлегенән ҡабул ителеүе тип, аңларға була. Юғары уҡыу йорттарында, китапханаларҙа, үҙеңдең эш өҫтәлең артында классиктарҙы ҡайта-ҡайта өйрәнеү тураһында әйтеп тә тормайыҡ. Бер кем дә ижадҡа ла, тормошҡа ла әҙер килеш килеп инмәй. Инде формалашып бөткән тигәне лә бит үҫеүҙән туҡтамаясаҡ. Сөнки ижадта үҫеүҙән туҡтау – ижад итеүҙән туҡтауға тиң. Кеше башҡаларҙы ғына түгел, үҙ-үҙен ғүмер буйы “тәрбиәләй, өйрәнә, үҫтерә“. Сократтың “Үҙ-үҙеңде өйрән“ (“Познай самого себя”) тиеүендә тәрән мәғәнә бар. Башҡортта ла “Үҙ-үҙен белгән – әүлиә!“ – тип тикмәгә генә әйтелмәгән. Кеше башҡаларҙы, донъялыҡты үҙе аша (белеме, ҡарашы, зауығы һ.б. аша) өйрәнә. Әгәр ҙә уның үҙенең кимәле түбән, фекерләү даирәһе тар икән – юғарылыҡты ул нисек аңлаһын?! Ә инде, был айырмалыҡты һиҙеп, үҙ өҫтөндә эшләй башланымы – камиллашыуға тәүге аҙымды яһаны тигән һүҙ. Билдәле булыуынса, иң оҙон юл да тәүге аҙымдан башлана. Үҙебеҙҙән: иге-сиге булмағаны ла шулай, тип өҫтәйек...**

**“Кемдеңдер ихтыяжын ҡәнәғәтләндереүҙе күҙ уңында тотҡан тәнҡит объективлыҡҡа дәғүә итә алмайҙыр...“ Әгәр ҙә беҙ объективлыҡты абсолют дәрәжәгә еткерһәк, бөгөнгө бурыстарҙы онотор, көндәлек проблемаларға эләгеп тәгәрәр инек. Бурыстарҙың, хәл итәһе проблемаларҙың төрлөһө бар бит. Бар кисектермәй бөгөн хәл ителергә тейешлеһе. Бар үҙең, намыҫың, балаларың, ғаиләң алдындағылары. Бар халыҡ, кешелек алдында торғандары. Уларҙың эреһе лә, вағы ла башҡортто милләт булараҡ һаҡлап ҡалыу өсөн хәл ителә, хәл итергә ынтылыш яһала икән – был – башҡорттоң милли ихтыяжын ҡәнәғәтләндереү өсөн барған ысын мәғәнәһендәге көрәш объективлыҡҡа дәғүә итәсәк. Милләт файҙаһына тип, факттарҙы үҙең теләгенсә һурғыслау, борғослау, башҡа милләттәрҙең мәнфәғәтен ҡыҫырыҡлау юлы менән түгел, ә милләттең үҙенең эске потенциалын ҡулланыу, рухын тергеҙеү, рухын ҡайтарыу, рухын нығытыу иҫәбенә...**

**Башҡа халыҡтар әҙәбиәтенең әҙәби тәнҡиттә сағылышы буйынса ниндәйерәк фекер тупларға, һығымталар яһарға мөмкин? Билдәле әҙәби тәнҡитселәрҙән бөгөн кемдәрҙе күрһәтеп булыр ине?**

**Азамат ЮЛДАШБАЕВ:**

– Ғәфү итегеҙ, донъяуи әҙәбиәт тураһында бер аҙ хәбәрҙар булһам да, бөртөкләп кенә уҡыштырған китаптар аша донъяуи әҙәби тәнҡит тураһында һүҙ йөрөтөргә маташыу килешкән эш булмаҫ. Ә бына урыҫ әҙәбиәте хаҡында бер кәлимә әйтеп китә аламдыр. Әйткәндәй, бөгөн уларҙа ла шул уҡ хәл: һәр тарафта, әҙәби тәнҡит юҡҡа сыға, тип яр һалалар, сөнки әҙәбиәт, бөйөк урыҫ әҙәбиәте һынылыш кисерә. Беҙҙә рәхәтерәк – Акунин-Маринина-Донцоваларҙың ялтырауыҡ тышлы ижад өлгөләренең һөжүме юҡ. Бына һеҙ урыҫтарҙың ҡайһы йәш яҙыусыһын, донъяға танылған йәш шағирҙарын әйтә алаһығыҙ? Унда хәҙер, дөйөм әҙәбиәттән тыш, корпоратив әҙәбиәт барлыҡҡа килде. “Дружба народов” бер исемде күтәрһә, “Новый мир” – икенсеһен, айырым нәшриәттәр – үҙҙәренең авторҙарын. Һәм тәнҡит тә шул тар корпоратив мәнфәғәттән сығып эш итә. Һуңғы арала күренгән йәштәрҙән мин Илдар Әбүзәров (Салауат

Әбүзәрҙең туғаны түгел, Түбәнге Новгородтан) менән Денис Гуцконы ғына әйтер инем. Тик улары ла минең күңелгә хуш килгән авторҙар түгел, хатта ки шәхсән таныш булһам да. Мин классика менән йәшәйем. “Алтмышынсы”лар ижады менән. Тәнҡитселәрҙән дә Вадим Кожиновты, Алла Латынинаны, Лев Аннинскийҙы атар инем. Аннинский менән танышып, бер аҙ аралашыу бәхете лә тейҙе. Ә авторитетҡа килгәндә инде... Минең өсөн Игорь Золотусский оло авторитет. Уның “Исповедь Зоила” исемле мәҡәләләр йыйынтығы – минең өҫтәл китабы. Әйткәндәй, Зоил – тәнҡитсе, заманында ул “Илиада” менән “Одиссея”ның авторы Гомерҙы тәнҡитләргә йөрьәт иткән.

Үҙебеҙҙең башҡорт әҙәбиәт ғилеме авторитеттары тураһында һүҙ йөрөткәндә, һис икеләнмәй Ким Әхмәтйәновты атар инем. Вафатына нисә йыл, әммә әле бер кем дә ул фекер йөрөткән юғарылыҡта фекер йөрөтә, бер кем дә ул билдәләгән талаптар, ҡанундар бейеклегенә күтәрелә алмай. Ғөмүмән, уның кимәленә ҡасан да булһа барып етә алырбыҙмы икән?

**Фәнил КҮЗБӘКОВ:**

**– Ким ағайҙың хеҙмәтенә бәйле фекерҙәр әйтелде. Заманы өсөн ул иҫ китмәле ҙур эш башҡарҙы. Әгәр ҙә беҙ әҙәбиәтте, әҙәби тәнҡитте йәмғиәттәге тәғәйен урынына ҡуя алһаҡ, әҙәбиәт фәне лә мотлаҡ заманыбыҙға торошло үҫешәсәк. Әлегә иһә республика матбуғатында әҙәби тәнҡит тип тәҡдим ителгән материалдарҙа йөкмәтке һөйләү төп урынды ала, анализ йомшаҡ, комплиментар рух өҫтөнлөк итә...**

**Азамат ЮЛДАШБАЕВ:**

– Үҙ аллы хәрәкәткә эйә булыу өсөн әҙәби тәнҡит тигән оло хеҙмәткә тотоноусыға хәреф таныу ғына аҙыраҡтыр шул. Әҫәрҙе уҡып сығыу үә әҙәбиәт теорияһы тигән тәғлимәт менән таныш булыу – әле ярты эш. Әҙәби тәнҡит үтә лә ҡатмарлы һәм яуаплы өлкәлер – уның менән аралаш фәндәр: социология, политология, философия, этика һәм эстетика, иҡтисад, психология, психоаналитика һ.б. Киң даирәлә фекер йөрөтөп, вертикаль һәм горизонталь яҫылыҡтарҙы берҙәй иркен гиҙергә уйлаған тәнҡитсе юғарыла һаналған фәндәр тураһында саҡ ҡына хәбәрҙар булырға тейештер. Шул осраҡта ғына ул һис ҡурҡмай әҫәрҙән айырылып китеп ирекле фекер йөрөтә алыр. Ғөмүмән, ысын тәнҡитсе художестволы әҫәр тураһында яҙмай, ә ана шул әҫәргә бәйле, шул әҫәрҙән сығып үҙенең кисерештәре, тәьҫораттары, уйҙары менән уртаҡлашалыр. Писаревтың әйткәне бар бит: “Беҙгә авторҙың нимә әйтергә теләүе мөһим түгел, ә тормошто дөрөҫ һүрәтләү һөҙөмтәһендә, бәлки, уның үҙе лә аңғармаҫтан нимә әйтелеүе мөһим”. Йәғни тәнҡитсенең асышы авторҙыҡынан да олораҡ, фекере тәрәнерәк, һүҙе көслөрәк булырға тейеш. Шул осраҡта ғына ул, аҙашып китеүҙән ҡурҡып, туҡтауһыҙ йөкмәткенең “итәгенә йәбешеп” йөрөмәйәсәк.

**Фәнил КҮЗБӘКОВ:**

**– Профессиональ тәнҡитселәрҙе махсус әҙерләүгә ныҡлы иғтибар иткәндә... Әйтәйек, Мәскәүҙәге Әҙәбиәт институтына ебәреп йәки БДУла бер төркөм... Әлбиттә, “шағирҙарҙы саҡырып килтермәгән“ кеүек, әҙәбиәт белгестәрен дә үҙебеҙҙең мөхит кенә тыуҙыра ала. Иң мөһиме – бындай белгестәргә ихтыяж булырға тейеш...**

**Азамат ЮЛДАШБАЕВ:**

– Мөмкин, әлбиттә. Телевидение хеҙмәткәрҙәрен, театр актерҙарын, режиссерҙарын уҡытып ҡайтарабыҙ бит. Тик БДУ вариантын шунда уҡ кире

ҡағам. Сөнки был уҡыу йорто уларҙы әҙерләй алһа, бөгөн тәнҡиткә һуҡранып ултырмаç та инек, әле үк журналдарыбыҙҙа йөҙәрләгән әҙәби тәнҡит ҡулъяҙмалары сират көтөп ятыр ине. Әҙәбиәт институтына килгәндә инде… Унда уҡытыу мотлаҡ түгелдер, ә бына үҙебеҙҙә юғары уҡыу йорто тамамлаған егет һәм ҡыҙҙарҙың бер нисәһен һайлап алып, шул институттың юғары әҙәби курстарына ебәреп, белемдәрен камиллаштырып алғанда маҡсатҡа ярашлыраҡ булыр ине. Сөнки унда уҡытыусылар ғына түгел, ғөмүмән, мөхит үҙе тәрбиәләй бит. Бәлки, улар шунда уҡ билдәле ҡалын журналдарҙа стажировка үтеп, тәжрибә туплап та ҡайтырҙар. Тик… Ул егеттәр, ҡыҙҙар белем эстәп ҡайтҡандан һуң ҡайҙа барырҙар икән? Бына был хаҡта уйларға кәрәк. Әҙәби тәнҡит менән тамаҡ туйҙырып, ғаиләне аçрап булмай бит әле… Мин үрҙә әйткән 60 – 80-се йылдарҙа әүҙем эшләгән ғалимдар шул заман өсөн социаль яҡтан ярайһы уҡ яҡшы яҡланғандар ине: эш менән тәьмин ителгәндәр, эш хаҡы арыу, бер аҙ көттөрөңкөрәп булһа ла фатир мәсьәләһе лә хәл ителә ине. Ә хәҙер?.. Кемгә кәрәк тәнҡитсе? Йәмғиәткәме, дәүләткәме? Әҙәбиәттең үҙенән башҡа берәүгә лә кәрәкмәй шикелле… Бына шундайыраҡ пессимистик фекерҙәр. Оптимизмға килгәндә инде… Әҙәбиәт булһа, әҙәби тәнҡит тә буласаҡ, иншалла… Тик башта баяғы ҡоллоҡтан ҡотолоу фарыз. Азат милләт азат шәхестәрҙән ғибәрәт. Аңлашылалыр ки, һүҙ эске азатлыҡ тураһында бара… Шул ғына.

## Яңғыҙ юл тапҡанға еңелме, *әллә күмәктәр менән бергә аҙашҡанға ҡыйынмы?*

*Артабанғы әңгәмәлә – “Киске Өфө” гәзитенең баш мөхәррире урынбаçары, билдәле яҙыусы* ***Әхмәр Ғүмәр-ҮТӘБАЙ:***

## Тәнҡит – һөйәл үләне…

Журналдың былтырғы 9-сы һанында баçылған “Әҙәбиәт тормош дәреслегеме бөгөн?” тигән әңгәмәлә ҡатнашыусы Ғайса Хөсәйенов менән Фәнил Күзбәковтың әҙәби тәнҡит хаҡындағы фекерҙәре башҡорт әҙәбиәтенең киләсәге хаҡында борсолоп йәшәүселәрҙе битараф ҡалдырмағандыр, тип уйлайым. Әйткәндәй, унда һүҙ әҙәби тәнҡит хаҡында ғына бармай, ғөмүмән, әҙәбиәттең хәҙергеһенә анализ бирелә, һөйөндөргән һәм көйөндөргән күренештәргә ишара яһала, киләсәгенә ҡараш һирпелә. “Ижадымды әҙәби тәнҡитсе булараҡ башлаһам да, был ауыр һәм һирәктәр генә исем-ат алыр жанр хаҡында хәҙерге ваҡытта әллә ни әйтә алмайым. Әҙәби тәнҡит өлкәһе беҙҙә һүнеп ҡалды тиерлек. Тәнҡитсе булып танылған исемдәрҙе лә атауы ҡыйын. Сөнки, асылда, был жанр юҡ бөгөн. Был, уртаҡул яҙыусыларыбыҙ өсөн, бәлки, йәннәттер, әммә әҙәбиәттең үçеше өсөн етди тотҡарлыҡ. Тәнҡит юҡ икән – түбән әҙәбиәткә хөрриәт” – ти академик Ғайса Хөсәйенов бөгөнгө әҙәби тәнҡит, дөрөçөрәге, уның булмауы хаҡында. Хаҡ баһаға һүҙ юҡ, тип әйтергә генә ҡала был осраҡта.

Милләтебеҙҙең һәм әҙәбиәтебеҙҙең киләсәге өсөн битараф булмаған икенсе бер әңгәмәсенең, фән докторы Фәнил Күзбәковтың: “Әҙәби тәнҡит – үҙенә фанатиктарса бирелеүҙе талап иткән өлкә. Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында бөгөнгө әҙәби тәнҡит менән шөғөлләнгән махсус бүлек кәрәк, тип сығыш та яһағайным бер. Ҡыҙғаныс, был тәҡдимгә бәйле хатта аралашып йөрөгән ҡәләмдәштәр ҙә бер ни әйтмәне. Был да уйландыра”,– тигән һүҙҙәрендә лә ауаздашлыҡ таптым һәм үҙ-үҙемә шундайыраҡ сәйер һорауҙар яуҙырырға һәм үҙем үк шул һорауҙарға яуаптар бирергә тотондом.

Әҙәбиәтһеҙ милләт, әҙәби тәнҡитһеҙ әҙәбиәт юҡ икән, әҙәби тәнҡитһеҙ милләт тә булмай сыға түгелме?

Ҡапыл ғына яуап бирерлек түгел был һорауға. Дөрөҫөн әйткәндә, был һорауға яуап бирер өсөн халҡыбыҙҙың тарихына, ауыҙ-тел, фольклор, сәнғәт үҙенсәлегенә, хәҙерге көнкүрешенә анализ яһарға кәрәк буласаҡ. Әлегә шуны ғына әйтәм: мәҫәлән, чечен әҙәбиәтендә роман юҡ, тиҙәр. Был дөрөҫ булһа, романһыҙ әҙәбиәт буламы икән? Мәҫәлән, беҙ француз, урыҫ, татар, башҡорт әҙәбиәттәрен романһыҙ күҙ алдына ла килтерә алмайбыҙ. Әммә, шулай булыуға ҡарамаҫтан, чечендар ер йөҙөндәге иң көслө милләттәрҙең береһе һанала. Бында, бәлки чечен әҙәбиәтендәге роман жанрының булыу-булмауы хаҡында түгел, минеңсә, милли үҙенсәлек, характер, менталитет хаҡында фекер йөрөтөү урынлы булыр ине. Мәҫәлән, ошолайыраҡ итеп: чечен әҙәбиәтендә роман жанры юҡ, сөнки... башҡорт әҙәбиәтендә лә әҙәби тәнҡит юҡ, сөнки...

**Фәнил КҮЗБӘКОВ:**

**– Һорауыңдың ауырлығын уны софистик яҫылыҡта ҡарауың менән аңлатырға мөмкин. Антик фәлсәфәлә апорий тигән төшөнсә бар. Уға ярашлы, еңел аяҡлы Ахиллес аҡрын ғына шыуышыусы гөбөргәйелде бер ҡасан да ҡыуып етә алмай, сөнки Ахиллес гөбөргәйелгә тиклемге арауыҡты үткәнсе теге күпмелер юл үтеп өлгөрә. Был арауыҡты Ахиллесҡа ла үтергә кәрәк, әммә гөбөргәйел тик тормай – һаман алға бара... Хикмәт ниҙә һуң? Арауыҡ (пространство) менән ваҡытты айырым-айырым ҡарауҙа, улар араһындағы диалектик берлекте иҫәпкә алмауҙа... “Чечен әҙәбиәтендә роман юҡ, әммә... ул көслө милләт...” Беҙ бөгөн күҙаллаған роман башҡортта ла XX быуат башында ғына күренде. Әммә башҡорт, батшалыҡты дер һелкетеп, ниндәй генә ҡатмарлы осорҙарҙа ла башҡаларҙы үҙе менән иҫәпләшергә мәжбүр итте, диңгеҙҙәрҙе ҡыҙартырлыҡ ҡан түгеү бәрәбәренә рухи азатлығын һаҡлап ҡала алды. (Кемдер: “Ә кәрәк инеме?” – тиер. Әгәр ҙә кендек ҡаның тамған ереңде бысраҡ аяҡтары менән тапап, талай башлаһалар, йәндәй ғәзиз яҡындарыңды күҙ алдында ҡылыстан үткәрһәләр, ҡарт атай-әсәйеңде, сабыйҙарыңды һарайға бикләп терелләй яндырһалар, ни эшләр инең икән?!) Рухы азат халыҡты ҡол итеп булмай! Рухы азат халыҡ рухи донъяһы менән бай. Был байлыҡ уның ҡанында... Тик башҡорт ҡаны күп аҡҡан шул... Бына ниҙә хикмәт. Башҡорттоң рухи байлығын бейеүе, йыр-моңо, ауыҙ-тел ижады XX быуатҡа килтереп еткергән. Рухи яҡтан бөтөн булмаған халыҡ ике ут, һандал менән сүкеш араһында ҡалғанда ла (“Беҙ аҡ та, ҡыҙыл да түгел, беҙ – башҡорт”, – Зәки Вәлиди) үҙен һаҡлай, үҙенә дәүләтселек яулай алыр инеме?!. Яңы осорға ярашлы профессиональ әҙәбиәт, сәнғәт, музыка, театр күкрәп үҫеп китеүе лә бит ана шул рухи ныҡлыҡ булыуында...**

**Әйтелгән фекерҙе дауам иткәндә... Бөгөнгө башҡорт әҙәбиәтендә башҡорттоң алдынғы зыялылары күҙаллаған объектив әҙәби тәнҡит юҡ, сөнки, дөйөм алғанда, әҙәби мөхиттә уртаҡуллыҡ хөкөм һөрә, быуындар алышыныуы ла, йән сәләмәтлегенән ғәйре, тән сәләмәтлегенә бәйле. Ябайлаштырып әйткәндә, әрмеләге тәртип асылының (“дедовщина”) тормошобоҙҙоң һәммә тарафына ла ныҡлы үтеп инеүе – етди ҡаршылыҡтар тыуҙыра. Әлбиттә, быны туранан-тура ғына ла аңларға ярамай. Әйе, етмештә лә егеттәр, ун етелә лә ебектәр була (Ана, туғыҙынсы тиҫтәне ваҡлаған Ғайса ағайыбыҙ Хөсәйенов. Башҡорт рухиәте бәхетенә, ул әле лә ижад ҡомарын һүрелтмәгән, өр-яңы, бынамын тигән яҙмалары менән ҡыуандырып тора: фекерҙәре тос, һүҙ ҡеүәһе иң юғары кимәлдә, әҙәбиәтебеҙ – көнөбөҙ тип ихлас борсола,**

**хафалары менән уртаҡлаша, проблемаларҙы хәл итеү юлдарын эҙләй)...**

**Идеаль осраҡ тип, әҙәби мөхиттә “көн торошон“ билдәләүсе йәштәр, ололар, төп йөктө һөйрәүсе урта быуын нисбәтен яҡынса шулай күҙалларға мөмкин кеүек: 40 процент йәштәр, 10 – ололар, 50 – урта быуын. Ә ғәмәлдә нисегерәк? 10 – йәштәр (башлыса ололар ҡулға эйәләштергәне), 70 – ололар, 20 – урта йәштәгеләр (Кемдер бындай “иҫәп-хисап“ты көлкөгә алыр. Алһын! Ә беҙ хәлде ыңғай яҡҡа үҙгәртеү ниәтенән ысынбарлыҡты төрлө яҡлап та барлайыҡ, төрлө юлдарҙы эҙләп ҡарайыҡ, төрлө алымдарҙы ҡулланайыҡ – ҡулдан килгәнен эшләйек! Битараф булмайыҡ!)**

**Ололарҙың күбеһенә нимә кәрәк? Уларға (бөтәһенә лә түгел, әлбиттә), дилбегәне ҡулда ныҡ тотоп, мәҙехтәр тыңлап (“дембел“гә тиклем!) тыныс ҡына йәшәргә (ижад тураһында һүҙ юҡ) кәрәк. Бына беҙ яңынан теге һорауға әйләнеп ҡайтабыҙ: әҙәби тәнҡиттең кемгә һәм ни өсөн кәрәге бар?**

**Әхмәр Ғүмәр-ҮТӘБАЙ:**

– Әҙәби тәнҡитсе – ул шул уҡ “баҡсасы”, баҡса сүбен утаусы, йәшелсә-емеште ҡый үләндәренән айырыусы, һирәкләтеүсе, ерҙе йомшартыусы, ашлаусы, һыу һибеүсе һ.б. Әҙәби тәнҡитебеҙ булмаған, әҙәбиәтебеҙ сүп үләндәре баҫҡан ҡараусыһыҙ баҡсаға оҡшай башланы түгелме һуң?

Ярай әле, сүп үләндәре араһында һөйәл үләне (чистотель) кеүек дарыу үләндәре күберәк булһа, тием. Ташландыҡ, ҡарауһыҙ баҡсаларҙы ярата был үлән. Өйкөм-өйкөм булып үҫә. Дөрөҫ, һөйәл үләне ағыулы, уны бер юлы күп итеп ашаһаң, бауырыңды эшлектән сығарып, ағыуланып үлеүең дә бар. Тик ниңә мин бында һөйәл үләне хаҡында фекер йөрөтәм һуң? Уның әҙәби тәнҡит менән нindәй уртаҡлығы бар? Ғөмүмән, бармы? Бар икән шул.

Белгестәр әйтеүенсә, хайуандар, мәҫәлән, эттәр, бесәйҙәр, аттар, һыйырҙар, һарыҡ-кәзәләр көнөнә һөйәл үләненең бер генә япрағын ҡабып ҡуя. Бигерәк тә эттәр һәм бесәйҙәр, нык ауырыһа, ошо үләнде генә ашап һауығып китә. Шул бер япраҡ уларҙың организмын таҙа тоторға (шуның өсөн дә – чистотель – таҙа тән) ярҙам итә. Хайуандарҙа яман шеш кеүек яман сирҙәрҙең булмауын да ошо үләнгә бәйләп аңлаталар. Мал һуйған ваҡытта (ә мал нимә генә ашамай?) уның эске органдарына иғтибар иткәнегеҙ бармы? Булмаһа, ундағы таҙалыҡҡа һәм камиллыҡҡа бер иғтибар итеп ҡарағыҙ әле. Бында ла әлеге лә баяғы һөйәл үләне “этлеге”. Сере уның ябай ғына: составында ағыу булған һөйәл үләне организмдың эсәклек өлөшөнә барып ингәндән һуң, шундуҡ баш мейеһенә “Йәшәйешебеҙгә оло ҡурҡыныс менән янаусы ағыулы матдә беҙгә килеп инде. Арабыҙҙа – дошман. Уны эшкәртер өсөн ферменттар юҡ. Шуға күрә ул бауырға үтеп инеп, барлыҡ организмды эшлектән сығарыуы бар. Кисекмәҫтән сара күреүегеҙ һорала!” тигән SOS сигналы барып етә. Шул саҡ баш мейеһе бар организмды “Бөйөк Ватан һуғышы”на күтәрә һәм “дошман”ды юҡ итеүҙең барлыҡ сараларын күрә, йәғни һөйәл үләненә_организмды ағыулауға юл ҡуймай. Һөҙөмтәлә организмдың иммунитеты уяна, ул үҙенә ҡурҡыныс менән янаған һөйәл үләнен дә, уның менән бергә яман шеш ялғыларын да, башҡа зарарлы өлөшсәләрҙе лә юҡҡа сығара, үлтерә һәм организмдан тышҡа сығарып ташлай.

Әҙәби тәнҡит хаҡындағы мәҡәләлә нимәгә хәжәт булды был һөйәл үләненең организмға файҙаһы хаҡындағы фитоаңлатма, тиерһегеҙ. Мин әҙәби тәнҡитте, ғөмүмән, тәнҡитте тере организм өсөн һөйәл үләне нисек кәрәк булһа, әҙәбиәт, кешелек һәм милләт өсөн шундай уҡ кәрәкле тип һанайым. “Һәр бер сағыштырыу аҡһай” тип тә әйтәләр, шулай ҙа әҙәби тәнҡитһеҙ – әҙәбиәт, ғөмүмән,

тәнҡитһеҙ йәмәғәтселек, кешелек, милләт аҡһай, үлә башлай. Әҙәби тәнҡит – әҙәбиәтте уяу тота, тулы ҡанлы тормош менән йәшәтә, уны түбән зауыҡлы әҫәрҙәрҙән таҙарта, сафландыра, пакландыра, һөйәл үләне лә тере организм өсөн ошондай уҡ функцияларҙы башҡара.

Әҙәби тәнҡиттең әҙәбиәт өсөн зарурлығын иҫбатланыҡ. Ә шулай ҙа авторитар режим, чиновниктар ихтыяры хөкөм һөргән илдә демократик дәүләт төҙөп булмаған кеүек, “феодаль тарҡаулыҡ“ хөкөм һөргән милли әҙәбиәттә әҙәби тәнҡитте үҫтереп буламы һуң? Ай-һай, булмайҙыр шул. Уның өсөн объектив һәм субъектив шарттар кәрәк. Ғөмүмән, нимә һуң ул әҙәби тәнҡит?

Уның үлсәү критерийҙары нимәгә ҡайтып ҡала? Нимә өсөн хеҙмәт итергә тейеш һуң әҙәби тәнҡит? Тәнҡитләргә кәрәк булған өсөн генә кемделер тәнҡитләр өсөнмө, әллә үҫештең этәргес көсө булараҡмы?

## Тәнҡитме, баһаламамы?

“Әҙәби тәнҡитсе (әҙерлекле, ғәҙел тәнҡитсе!), әлбиттә, әҙипте талантлы итә алмай, әммә уны “асырға”, тәғәйен баһаларға һис һүҙһеҙ ярҙам итә ала, минеңсә. Кемгәлер аҡыл өйрәтеүҙе маҡсат итмәй ул, сөнки белә: ысын мәғәнәһендәге ижадта был – урынһыҙ, “танылған”дарға ла иҫәп тотмай, сөнки уның баһалары күптәрҙе айнытыуы бар (яңғыҙ йөрөп юл тапҡанға еңелме лә, күмәктәр менән бергә аҙашҡанға ҡыйынмы?) Уның күҙ терәгәне: рухлылар, күбеһенсә, йәштәр, ғүмерҙе – һынау, ижад тип ҡараусылар. Тәғәйен баһалар аша тап ошо рухлыларҙа әҙәбиәтебеҙгә ҡарата дөрөҫ ҡараш, ғөмүмән, юғары әҙәби, рухи зауыҡ тәрбиәләргә мөмкин һәм кәрәк. Ошондай тәнҡитселәребеҙ бармы беҙҙә? Әллә, алдан әйткәнемсә, премия өләшеү кампанияларында ҡатнашыусылар ғына бармы? Әҙәби тәнҡитте үҫтереүгә ни ҡамасаулай”,– ти Фәнил Күзбәков журналдың 10-сы һанында (2010 йыл).

Әйткәндәй, ғалим бында әҙиптәр араһындағы камил мөнәсәбәтле әҙәбиәт донъяһындағы идеаль әҙәби тәнҡит тураһында һүҙ алып бара. “Ҡана һуң...” тип әйтергә ҡала бында. Ә ни өсөн әҙәби тәнҡиттең бындай идеаль формаһы беҙҙә юҡ һуң? “Совет осоронда булды бит ундай әҙәби тәнҡит” тип әйтер берәү. Эйе, шуға оҡшаңҡыраған әҙәби тәнҡит булды-булыуға, әммә ул заман тәнҡитселәре әҫәрҙең соцреализм талаптарына тап килеү-килмәү принциптарынан сығып ҡына эш итте. Әйткәндәй, әҙәбиәттәге “конфликтһыҙлыҡ теорияһы” ла шундай тәнҡитселәрҙең эшмәкәрлек һөҙөмтәһе бит. Икенсенән, ул заман тәнҡитселәре тәнҡит утына тоторға мөмкин булғандарҙы ғына “түпәләне”, әҙиптәр ошо юл менән власть һәм идеология өсөн “уңайлылар”ға һәм “уңайһыҙҙар”ға бүленде, халҡы, уның әҙәбиәте өсөн ысын мәғәнәһендә янып йәшәүселәргә тап шул осорҙа милләтселек ярлығы тағылды. Уның ҡарауы, уртаҡул әҫәрҙәр, уларҙың авторҙары “әҙәбиәт ҡаҙанышы” итеп билдәләнеп, күккә күтәрелде. Тимәк, был күренештең ысын әҙәби тәнҡит менән һис бер уртаҡлығы юҡ, һәм ул осорҙағы әҙәби тәнҡитте беҙ бер нисек тә объектив тип баһалай алмайбыҙ.

Партия диктатураһы хөкөм һөргән дәүерҙә “ҡыҙған табаға баҫтырыу” тигән бик елле күҫәк-термин була торғайны. Әҙәбиәт өлкәһендә ундай “ҡыҙған таба” функцияһын әҙәби тәнҡит башҡарҙы. Әҙәби журналдарҙа махсус рәүештә тәнҡит бүлектәре барлыҡҡа килде. Хәҙер иһә шундай урынлы һорау тыуа: ә ниңә фәҡәт “әҙәби тәнҡит” һуң? Сөнки әҙәби тәнҡит материалында теге йәки был әҫәрҙең уңышлы яҡтары ла, етешһеҙлектәре лә берҙәй үк әйтелеп үтелә. Шулай булғас, ул ниңә фәҡәт “тәнҡит” тип атала һуң? Ғөмүмән, “тәнҡит” һүҙе Совет власы, коммунистик идеология тыуҙырған күренеш түгелме? Кемделер, мотлаҡ рәүештә, “ҡыҙған табаға” баҫтырырға, тәнҡитләргә һәм ошо хаҡта кемдер алдында тәрбиә эше үткәреү хаҡында отчет торорға кәрәк булған өсөн генә

түгелме? Намыҫлы хеҙмәтсәндәр араһынан мотлаҡ рәүештә “халыҡ дошмандары” табырға кәрәк булған һымаҡ. Беҙ һаман да әҙәби тәнҡитте ошо формала күҙалларға тырышмайбыҙмы ла, башҡа төрлөһөн күрмәмешкә һалышмайбыҙмы икән?

Шуға күрә, кемгә нисектер, мин иһә, “әҙәби тәнҡит” һүҙенән ҡасып, әҙәби тәнҡитте “әҙәби баһалама” йәки “баһалама” һүҙе менән алмаштырыуҙы хуп күрер инем. Мостай Кәрим үҙенең киң билдәле “Ҡәләмдәш дуҫтарға хат”ын бер ҙә әҙәби тәнҡит тип атамаған, уға үҙенсәлекле “хат” жанрын биргән. Был әҫәрендә автор йәш шағирҙар Рәми Ғарипов, Рафаэль Сафин, Марат Кәримов, Абдулхаҡ Игебаев ижадтарының һөйөндөргән, берҙәй үк көйөндөргән яҡтарын да һанап үткән, бәғзеләренә арыу ғына “һоғондороп”та алған, әммә берәүҙең дә йөҙөнән алмаған. Шул уҡ ваҡытта был әҙиптәрҙе ул ошо хаты менән киләсәкле лә иткән, йәғни беҙ был әҙиптәрҙе һаман да Мостай Кәрим яҙғандағы һымаҡ итеп беләбеҙ. Был хат – әҙәби баһаламаның бына тигән өлгөһө, унда тәнҡиткә лә урын бар. Артабанғы осорҙа беҙ төрлө быуын яҙыусылары хаҡында Ғайса Хөсәйеновтың, Рауил Бикбаевтың, Ноғман Мусиндың, Тимерғәле Килмөхәмәтовтың, Мәүлит Ямалетдиндың, Суфиян Поварисовтың, Тамара Ғәниеваның, Фәнил Күзбәковтың, Таңсулпан Ғарипованың, Рәйес Түләковтың, Берйән Байымовтың, Рафаэль Аҙнағоловтың, Әнғәм Хәбировтың һәм башҡаларҙың әҙәби портреттарын, хаттарын, әҙәби баһаламаларын беләбеҙ. Әлбиттә, беҙ уларҙың барыһын да әҙәби тәнҡит материалдары тип атай алмайбыҙ. Шулай ҙа дөйөм әҙәбиәт ғилеме үҫешенә уларҙың яҙмалары йоғонтоһоҙ ҡалманы.

**Фәнил КҮЗБӘКОВ:**

**– Эш исемдә генә булһа икән дә... Есемдә шул бөтә хикмәт һәм шул есемдең асылын күрә алыуҙа, шул асылдан сығып булғанын баһалауҙа. Әҙәби тәнҡиттең иһә форма-жанрҙары байтаҡ ул: тәү сиратта, әлбиттә, мәҡәлә, унан ҡала рецензия, хат формаһы, баһалама (“отзыв”ҡа тап килә тип уйлайыҡ), күҙәтеү (тематик, проблематик, ҡайһылыр бер әҙип ижадына, билдәле ваҡыт арауығына, осорға бәйле ) һ.б. Әҙәбиәт мәсьәләләренә бәйле әңгәмәләр, интервьюлар, билдәле дәрәжәлә, әҙәби тәнҡит ролен «уйнауы» бар...**

**Әхмәр Ғүмәр-ҮТӘБАЙ:**

## Полемика мәҙәниәте

– Беҙҙең халыҡта “Үҙеңдән башҡаны әүлиә тип бел” һәм “Бүтәгәнән дә түбән бул” тигән киң мәғәнәләге әйтемдәр бар. Был әйтемдәр беҙҙең менталитет үҙенсәлегенә бәйле мәғәнәлә лә тыуғандыр. Тағы ла “Тураһын әйткән – туғанына ярамаған” тип тә әйтәләр. Был әйтемдәр ерле юҡтан тыумаған, әлбиттә. Уларҙың нигеҙендә милләтебеҙҙең элек-электән йәшәгән полемика мәҙәниәте үҙенсәлеге лә ята. Ошо күҙлектән ҡарағанда, милләттең иң тәүге “тәнҡитселәре” итеп сәсәндәрҙе, йырауҙарҙы атай алабыҙ. Улар, ил өсөн ниндәй генә сетерекле ваҡиғалар килеп сығыуға ҡарамаҫтан, кеше күңелен һаҡларға, аярға тырышҡан, хәҡиҡәтте һәр ваҡыт кинәйәгә, ишараға, образлы һүҙбәйләнешкә төрөп биргән. Кеше һүҙе кеше үлтерә, шуға күрә сәсәндәр һүҙ менән бик һаҡ эш иткән.

Күптәр хәҙерге әҙәбиәттә әҙәби тәнҡиттең булмауын йә тешһеҙ булыуын әҙиптәрҙең үҙ-ара полемика мәҙәниәте булмауы менән аңлатырға тырыша. Әҫәрен тәнҡитләгән өсөн хатта судлашып йөрөүселәр ҙә бар беҙҙә. Бәлки, бында мәсьәләне икенсе төрлөрәк ҡуйырға кәрәктер: полемика мәҙәниәтенең беҙҙең халыҡҡа хас үҙенсәлеге, тип. Был осраҡта барыһы ла урынына тора һәм беҙ,

Ким Әхмәтйәнов әйткәнсә, “аумаҡай тәнҡит” терминына барып сығабыҙ. Беҙҙең менталитетҡа ярашлы, беҙҙең әҙәби тәнҡит ишаралы, кинәйәле, образлы мөнәсәбәтле йәғни “аумаҡай” булырға тейештер ҙә. Үҙәк телеканалдарҙың ҡайһыһын ғына асып ҡарамағыҙ хәҙер, Рәсәйҙең билдәле шәхестәре, сәйәсмәндәре, яҙыусылары, чиновниктары бер-береһенә ҡаршы баҫып, бер-береһенең йөҙөнән алып, тураһын әйтеп бәхәсләшә, һүҙ атыша, әфлисун һуттары һибешә, ботинкалар менән ташлаша, бит сапсыша, йоҙроҡ ныҡлығын һынай. Улар шулай талашалар ҙа шундуҡ бергәләп байрам итергә китәләр, тиҙәр, йәғни бер-береһенә үс тотоп, асыу һаҡлап йөрөмәйҙәр, имеш. Ә беҙ иһә тура әйтелгән һүҙҙе бик ауыр кисерәбеҙ, йөрәгебеҙ менән ҡабул итәбеҙ. Сөнки атай-олатайҙарыбыҙ, әсәй-өләсәйҙәребеҙ беҙҙе бөтөнләй башҡаға өйрәткән, башҡаса тәрбиәләгән. Кем белә, бәлки, рәсми рәүештә матбуғатта әйтелгән тәнҡит һүҙҙәрен күтәрә алмауыбыҙ ҙа ошонан киләлер.

Ә үҙәктәге телеканалдарҙағы бәхәстәргә килгәндә, был, үҙенә күрә Рәсәй менталитеты. Шулай булғас, Рәсәй әҙәбиәтендәге “литературная критика”ла калька рәүешендә беҙҙә “әҙәби тәнҡит” булып та йөрөй алмайҙыр. Бәләкәй генә бер миҫал: әгәр ҙә урыҫ ғаиләһендә берәрһе донъя ҡуйһа, ҡатындар бар донъяға ишеттереп сеңләп иларға, буҙларға тотона, беҙҙекеләр күҙ йәшен генә сығара, эстән илай. Ә бына япондар иһә шатлана, шатлығын туғандарына, дуҫтарына ошо һүҙҙәрҙе әйтеп еткерә: “Ниндәй оло шатлыҡ, уның мең ғазаплы йәне ауырыу тәненән ҡотолоп, ниһайәт, һыҙланыуҙарҙан азат булды. Ул – бәхетле“ һ.б. Кеше үлгәндән һуң күп халыҡтар ҡаранан кейенеп, матәм көндәре уҙғара, Кавказ халыҡтары оҙаҡ ваҡыт һаҡал-мыйығын ҡырмай йөрөй, туйҙар, төрлө байрамдар уҙғармай. Шул уҡ ваҡытта яҡынының йәне ауырыу тәненән “ҡотолоу”ын” байрам иткән халыҡтар ҙа бар. Бер үк тойғоноң, кисерештең төрлө халыҡтар тарафынан төрлөсә ҡабул ителеүе һәм уларҙы тышҡа сығарыуы ла төрлөсә булғас, ҡайһылыр ерендең, холҡондоң һәм ижад емешенең сифаты хаҡында әйтелгән тәнҡит һүҙе лә төрлө халыҡтар тарафынан төрлөсә ҡабул ителеүенә лә аптырарға ярамайҙыр.

Беҙҙә әҙәби тәнҡиттең булмауының һәм үҫешмәүенең мөһим сәбәптәренең береһе, моғайын, ижад мөхитебеҙҙең үтә лә тар булыуындалыр ҙа. Бер үк ижади союз, бер үк дәүләт китап нәшриәте, бер үк әҙәби журнал йә гәзит булыуы яҙыусыларҙы ошо ойошмаларға мөнәсәбәтле булған йә унда эшләгән башҡа ижад әһелдәренә айырыуса мөнәсәбәтле итә. Әйтәйек, мин ысын тәнҡитсе булһам да, китап нәшриәте менән, союз, журнал менән, унда эшләүселәр менән яҡшы мөнәсәбәттә булырға тейешмен, шул арҡала унда эшләүселәрҙең әҫәрҙәре түбән кимәлдә булһа ла, объектив тәнҡитсе була алмайым. Сөнки миңә журналда – әҫәремде, нәшриәттә китабымды баҫтырып сығарырға, Яҙыусылар союзына ағза булып инергә кәрәк. Һәм ошондай ситуацияла мин түбән кимәлдәге әҫәрҙәрҙе, китаптарҙы маҡтаусыға, икенсе төрлө әйткәндә, күрәләтә “алдаҡсы”ға әүереләм. “Мулла менән талашһаң – динеңә тарлыҡ, хужа менән талашһаң – көнөңә тарлыҡ,” – тиҙәр  бындай осраҡта.

“Ни өсөн беҙҙә әҙәби тәнҡит комплиментар рухта?” тигән һорауға яуап бына ошонда яталыр. Миңә ҡалһа, беҙ һаман да “хаҡлыҡ, ғәҙеллек принциптары барыбер еңәсәк” тигән социализм осоро инерцияһы менән йәшәйбеҙ һымаҡ. Бәлки, шулай булыуыбыҙ яҡшығалыр ҙа, әммә тирә-яғыбыҙҙа мөлкәт, аҡса мөнәсәбәттәре хакимлыҡ иткән дәүерҙә быңдай хәләтебеҙ башҡалар тарафынан бер ҡатлылыҡ итеп баһаланыуын да танырға тейешбеҙ. Әҙәбиәт тулы ҡанлы тормош менән йәшәһен, унда ысын мәғәнәһендәге әҙәби тәнҡит булһын тиһәк, иң тәүҙә милләтебеҙ тулы ҡанлы тормош менән йәшәргә тейештер. Әйтәйек, милләттең буржуазия синыфы ныҡлап аяҡҡа баҫһа, улар күп һандағы шәхси нәшриәттәр, әҙәби журналдар аҫһа, тик шул саҡта ғына комплиментар рухтағы әҙәби тәнҡиттән

ҡотола алыр инек. Тимәк, мәсьәләнең тағы ла сөңгөлөнә төшөбөрәк уйланһаң, әҙәбитебеҙҙә ысын мәғәнәһендәге әҙәби тәнҡиттең булмауы һәр милләт ағзаһының үҙ-үҙенә, үҙенең булмышына, ғаиләһенең яҙмышына, киләсәгенә битараф булыуынан, тирә-яҡтағыларҙың тормошо менән сағыштырып, үҙ-үҙенә тәнҡит күҙлегенән ҡарай алмауынан да килә бит. Беҙ әлегә тиклем ниндәй әхлаҡ, ниндәй милли идея менән йәшәгәнебеҙҙе лә белмәйбеҙ хатта. Милләттең бай ҡатламы, икенсе төрлө әйткәндә, буржуазия синыфы ныҡлап аяҡҡа баҫмайынса тороп, тимәк, ундай әхлаҡ та, милли идея ла, әҙәбиәт тә, уның двигателе ролен үтәгән әҙәби тәнҡит тә булмаясаҡ, минеңсә. Ни өсөн тигәндә "Хәйерселек булған ерҙә әхлаҡ булмай, кеше әхлаҡ хаҡында түгел, икмәк хаҡында ҡайғыртып йәшәй" тигән бер аҡыл эйәһе. Юҡ, түгел, бар ул беҙҙең буржуазия синыфы, әммә ул әлегә ойошоп етмәгән һәм аҙ һанлы.

Әйтелгәндәрҙе йомғаҡлап, "Яңғыҙ йөрөп юл тапҡанға еңелме лә, күмәктәр менән бергә аҙашҡанға ҡыйынмы?" тигән һорауға яуап биреп ҡарайыҡ. Яуаптарҙы түбәндәгесә теҙергә булыр ине:

– яңғыҙ йөрөп юл тапҡанға ҡыйын, сөнки ул әле бер кем дә үтмәгән ерҙән, билдән кисеп ҡар яра, әммә ул юл табыуы менән бәхетле һәм хәҙер уға, үҙ юлы булғас, еп-еңел;

– күмәктәр менән бергә аҙашҡанға еңел, сөнки ул "эт сапҡанда бет сапҡан" принцибы менән йәшәй, әммә ул ғүмере буйы аҙашып йөрөүе, ысын тормошто белмәүе, ғүмерен заяға үткәреүе менән бәхетһеҙ;

– күмәкләп аҙашыусылар менән яңғыҙ йөрөп юл тапҡанды бергә ҡуйып: "Ҡайһы юл иң дөрөҫө?" тигән һорауҙы биреп, тауышҡа ҡуйҙырһаң, демократия ҡанундары буйынса, күмәктеке барыбер һүҙ булып ҡала һәм уларҙың ялған тормошо объектив ысынбарлыҡ итеп тәҡдим ителә.

**Фәнил КҮЗБӘКОВ:**

**– Ғөмүмән, кешеләр араһында ғәҙеллек булдырырға ынтылыуҙы социализм дәүере менән сикләргә ярамайҙыр. Кешелек үҙен белә-белгәндән алып ғәҙеллеккә ынтылған. Күпселек ғалимдар раҫлауынса, был – тормошҡа ашырыуы мөмкин булмаған хыял, әммә парадокс шунда: әҙәм балаһы барыбер ҙә социаль ғәҙеллек өсөн көрәштән туҡталмаясаҡ. Эйе, башҡорт менталитеты элек-электән ҡанатлы, кинәйәле, образлы һүҙҙе өҫтөнөрәк күрә... Әммә кәрәк икән, шул уҡ сәсән «ханға ҡаршы ут булған»! Тураһын әйтеүҙе йөҙ йыртыу тип баһалау ҙа уғата бер ҡатлылыҡтан һымаҡ. Ә бит-йөҙ тигәнебеҙ битлек (маска) булған осраҡтарҙа ни эшләргә? Әлбиттә, уратып-суратырға ла, төлкөләй үҙ эҙеңде һепереп үтергә лә мөмкин. Тик бындай «итәғәтлелек» шул уҡ күҙ буяуҙың, күҙ быуыуҙың бер төрө булыуҙан ары китмәйәсәк.**

**Әхмәр Ғүмәр-ҮТӘБАЙ:**

## Ике парадокс

– Бер мәл Әмир ағай Әминев шундай фекер әйтеп ысҡындырғайны: "Ни өсөн беҙҙә әҙәби тәнҡит юҡ, сөнки тәнҡитләрлек әҙәби әҫәр юҡ". Ошоға бәйле ике фекер тыуа:

1.Беҙҙә тәнҡитләрлек әҙәби әҫәр булмаған өсөн дә әҙәби тәнҡит юҡ.

2.Беҙҙә әҙәби тәнҡит булмаған өсөн дә күҙгә эленерлек әҙәби әҫәр юҡ.

Бик ҡыҙыҡ дилемма. Был шулай уҡ "Иң тәүҙә йомортҡа булғанмы, әллә тауыҡмы?" тигән һүҙҙәрҙе лә иҫкә төшөрә. Мәсьәләнең өсөнсө яғы ла бар: тик тәнҡитләргә, ниндәйҙер һүҙ алып барырға мөмкин булған әҫәр генә ысын мәғәнәһендәге әҙәби әҫәр була ала. Бында әҙәби тәнҡит терминының күп ҡырлы мәғәнәләргә эйә булыуын да күрәбеҙ. Тимәк, әҙәби тәнҡит – тәнҡит кенә түгел, әҫәрҙең ыңғай яҡтарын күреү ҙә, уны маҡтау ҙа.

Был парадокстарҙың тәүгеһе булһа, икенсеһе: беҙҙә ниндәйҙер әҙәби әҫәргә тәнҡит мәҡәләһе баҫылһа, уҡыусыла ул әҫәрҙе табып уҡыу ихтыяжы, ҡыҙыҡһыныу барлыҡҡа килә. “Шул тиклем итеп тәнҡитләгәстәре, тимәк, ул әҫәрҙең ғәҙәттән тыш кәмселеге булырға тейеш” – тип ҡыҙыҡһына уҡыусы. Был осраҡта әҙәби тәнҡит әҙәби әҫәрҙе рекламалай башлай. Ҡыҙыҡ был әҙәбиәт донъяһы…

90-сы йылдарҙың башында “Аҡ тирмә”лә үткән мәҙәни кисәлә шағир Рәмил Ҡол-Дәүләт үҙенең “Килен” тигән шиғырын уҡып башҡорт йәмәғәтселеген дер һелкеткәйне. Тап ошо кисәнән һуң Рәмил беҙ белгән Ҡол-Дәүләткә әүерелде. Йәғни уның шиғырҙарына әҙәбиәт ғилеме белгестәре, ғалимдар, тәнҡитселәр баһа бирмәне. Ул үҙенең ижадына тәүге ысын баһаны йәмәғәтселектән, йәғни ябай уҡыусынан алды. Бер генә уҡыусынан түгел, ә мең кеше һыйҙырышлы тотош залдан. Тимәк, был саҡта уның был шиғыры шунсама кешенең тәнҡит күҙлеге лә аша үтте тигән һүҙ. Икенсе бер шағирыбыҙ Буранбай Исҡужин 80-се йылдарҙа Әбйәлил районында йөрөгәндә халыҡ алдында:

*Тумырҙҡалар, тумырҙҡалар.*  
*Туҡ-туҡ һайрайҙар.*  
*Ағастарҙың тышын тишеп,*  
*Эсен ҡарайҙар, –*

тигән парадоксаль шиғыр юлдарын уҡып, унда сығыш яһаған бик күп исемле һәм погонлы ағайҙарҙың танауына сиртеп, халыҡ ихтирамын яуланы.

Иң дөрөҫ баһаны барыбер ҙә халыҡ бирәлер. Иң дөрөҫ тәнҡитте лә халыҡ әйтә. Әҙәби әҫәрҙең кимәле хаҡында ваҡытлы матбуғатта ниндәй генә маҡтау йә тәнҡит һүҙҙәре әйтелмәһен, халыҡтың күңел ихтыяжы барыбер беренсе урында тора, һәм ул бер үк ваҡытта, талант менән талантһыҙлыҡты айырып тороусы бизмән дә. Беҙ әҙәбиәтебеҙ тарихынан Назар Нәжмиҙең нисек итеп Рәшит Назаровтың Яҙыусылар союзының шиғриәт секцияһында “Йөрәк” шиғырын таң ҡалыуҙан аяғүрә баҫып тыңлауын да беләбеҙ.

**Фәнил КҮЗБӘКОВ:**

**– Һүҙ ҙә юҡ, халыҡтың ҡабул итеү-итмәүе – ғәҙел үлсәмдәрҙең береһе. Әммә хатта уны ла берҙән-бер үлсәм тип ҡарарға ярамай. Әгәр ҙә беҙ шундай юлды һайлаһаҡ, эш, бәлки, күпкә еңеләйер ине: аудиториялар йыйыр инек тә әҙиптәрҙе сәхнәгә сығарыр, кемдең-кем икәнен белер инек. Бар сәхнә өсөн яратылғандар, сәхнәнән төштөмө – үҙе лә, һүҙе лә юҡ. Бар билдәле бер осор шағирҙары – уларһыҙ осорҙо күҙ алдына ла килтереп булмауы бар, әммә улар шул осорҙа ҡалған. Бар әҙәбиәт тарихына инеп ҡалыусылар. Бар үлемһеҙҙәр, даһиҙар, халыҡ хәтерендә, халыҡ күңелендә йәшәүселәр…**

**Халыҡҡа, дөрөҫөн әйткәндә, даһиҙар ғына түгел, таҡмаҡсылар ҙа кәрәк. Ҡайһылыр бер дәүер таҡмаҡсыларҙы даһиҙарҙан яҡыныраҡ күреүе лә бар. Әммә улар араһындағы айырманы күрмәй икән, был инде милләт өсөн – фажиғә.**

**Уртаҡулдарҙың өҫтөнлөк итеүе – аномаль күренеш. Йәмғиәттең сәләмәт булмауын билдәләй ул. Йылғырлыҡтың эшҡыуарлыҡта булыуы – бер хәл. Ә ижадтағы, фәндәге йылғырлыҡ…**

**Аҡыл эйәләренең быуаттар һынауын үткән шундай күҙәтеүе билдәле: ысын талант тәнҡиттән ҡурҡмай, ул унан ота ғына. Эйе, яһалмалылыҡ ҡына юҡ-барҙан өркөүсән-тертләүсән ул, сөнки буяуҙар ҡубып төшөү менән кемдең кемлеге ап-асыҡ күренәсәк.**

## ҺӘҘИӘ ДӘҮЛӘТШИНАНЫҢ ШИҒРИ МИРАҪЫ

Ҡулына ҡәләм алған һәр йәш ижадсы кеүек, Һәҙиә Дәүләтшинаның да ижад итә башлауының тәүге йылдарында шиғыр яҙыуы билдәле.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, киң йәмәғәтселек әҙибәнең шиғри мираҫын белмәй. Был шиғырҙар әлеге көнгә тиклем тулыһынса бер ҡайҙа ла баҫылмаған.

Ғалим Марат Минһажетдиновтың үҙ мәлендә яҙыусының әсәһе Ильясова Гөлйәүһәр Арыҫлан ҡыҙында һаҡланған был әҫәрҙәрҙең ҡайһы берҙәрен анализлап, 1963 йылда «Совет Башҡортостаны» гәзитендә яҙып сығыуы ла мәғлүм.

1976 йылдың 26 – 28 ғинуарында ул осорҙа Бөрө дәүләт педагогия институтының (хәҙер Бөрө дәүләт социаль-педагогия академияһы) картиналар галереяһы мөдире Мөнирә Хәсән ҡыҙы Чурмаева Гөлйәүһәр Ильясова һәм Мәрғүбә Сынбулатованан Һәҙиә Дәүләтшинаның, башҡа әйберҙәре менән бер рәттән, яҙыусы үҙе машинкала баҫтыртып матбуғатҡа әҙерләгән 15 бит шиғырҙы ла алып ҡайта (был турала протокол һаҡланған). Һәҙиә Дәүләтшина музейы фондында 34 йыл һаҡланған был әҫәрҙәр түбәндәгеләр: “Ауыр хистәр эсендә”, “Ҡайнар сәләм” шиғырынан өҙөктәр, “Арыҫланбәк” шиғырының башы һәм аҙаҡҡы өлөшө, “Шатлыҡ тулҡындары” шиғыры баҫылған тәүге бит, С. М. Кировтың үлеменә бағышланған шиғырҙың өсөнсө бите, “Һандуғасһыҙ ҡалған алмағастай…”, “Өфөм һылыу минең…”, “Аңламаны” шиғырҙарының аҙаҡҡы юлдары, “Һатып алып булмай талантты…”, “Ишетергә кәрәк ил һулышын…”, “Бәхет донъяһында йәшәй кеше…” шиғырҙарының аҙаҡҡы строфалары, “Эй, Салауат, дуҫың Пугачев менән…”, “Зәлифәкәй” (шартлы исем – **Г.Ҡ.**) шиғырҙарының урта өлөшө. 2009 йылдың 13 апрелендә Мәрғүбә Сынбулатованың музейға машинкала баҫтырылған “Дача хәтирәһе” (1922), “Нурлы хәтирә”, “Ниңә минең эсем…”, “Барыһын да юғалтҡас” (1927), “Күңелһеҙ саҡтарҙа” (1928), “Бер ваҡытта мәсет эргәһендә…” (1934), “Семере атланы Зоя дар янына…” (1954), “Зарланыу” (1954) шиғырҙарын, “Аңламаны” (1954) шиғырының тәүге өлөшөн тапшырыуы әҙибәнең шиғри мираҫы тураһындағы һорауҙарға байтаҡ ҡына асыҡлыҡ индерҙе.

Һәҙиә Дәүләтшинаның Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәге архивында һаҡланған фондында шөғөлләнеү нигеҙендә “Шатлыҡ тулҡындары” (1934), “Ҡыш килде” (1934), “Уҡып ҡара яҙғанымды…”, “Байрам йырҙары” (1951), “Ҡәҙерле Россиянин!” (1954, шиғри мөрәжәғәт), “Кремлгә кергәндә” (1954), “Ҡыйыу аҙымлы һалдатты…”, “Юлда” (1954), “Таныу” (1954), “Май байрамдары менән!” (1954), “Рәхәт, тыныс йәшәй илебеҙ” (1951) һ.б. шиғырҙарының тулы варианттары асыҡланды. Һөҙөмтәлә әҙибәнең ҡырҡҡа яҡын шиғыры тупланды.

Авторҙың беҙгә билдәле шиғырҙарынан иң элек яҙылғаны – “Ауыр хистәр эсендә”. «Ҡыҙыл командир», «Һамар» гәзиттәрендә баҫылған ялҡынлы шиғырҙары менән танылып өлгөргән Ғөбәй Дәүләтшинға арналған был шиғырҙың

яҙылыу датаһы 1921 йылдың 12 ноябре тип билдәләнгән. “Ауыр хистәр эсендә” өс строфанан ойошҡан. Халыҡ гәүһәрҙәрен күңеленә әсә һөтө менән һеңдереп үҫкән йәш Һәҙиә 10-9 ижекле үлсәмде ҡулай күрә. Башҡорт халыҡ йырҙарындағы традицион образдар шиғырҙа уңышлы ҡулланылыш тапҡан:

*Ағиҙелкәйҙәрҙең, ай, буйында*
*Аҡ ҡарсыға, буғай, ҡағынған.*
*Беребеҙ генә унда, беребеҙ бында,*
*Мин булырмын һине һағынған.*

“Дача хәтирәһе” шиғыры Һамар далаларынан уйламаған-көтмәгәндә Мәскәүгә килеп юлыҡҡан йәп-йәш кәләштең кейәүенә булған изге хистәрен асып һалырға булышлыҡ итә. Ярата ла, яратыла ла белгән наҙлы лирик героиня бәхетенә кинәнә:

*Шул ваҡытта һыҙҙы йәш йөрәкте*
*Әллә ниндәй үткән саф көндәр.*
*Бәғерем Дәүлиемдән хаттар көтөп,*
*Айға ҡарап моңланған төндәр.*

Әлегә тиклем “Идеяларым бөйөк, күңелем ғали...” тип шартлы нарыҡланып йөрөтөлгән шиғырҙың яҙылыу йылдары тураһында матбуғатта төрлө ҡаршылыҡлы фекерҙәр осрай. Автор тарафынан “Барыһын да юғалтҡас” тип аталған шиғырҙың:

*Күп үтмәне, килде яуыз минут,*
*Бәхетемде ҡулдан алды инде.*
*Күп теләктәр менән күп өмөттәр*
*Әллә ҡайҙа алыҫ ҡалды инде, –*

тигән юлдары ҡайһы бер авторҙарҙы “әҙибә уны репрессия йылдарында ижад иткәндер” тигән яңылыш фекергә этәрә. Әммә архивта һаҡланған ғәрәп графикаһындағы төп нөсхәлә лә, Мәрғүбә Сынбулатова тапшырған машинка вариантында ла шиғырҙың 1927 йылдың 30 майында Ялтала яҙылып теркәлеүе был фекерҙе инҡар итә. Шулай уҡ Марат Минһажетдинов хеҙмәтендә шиғырҙың тәүге юлы:

*Идеяларым бөйөк, күңелем ғали,–*

рәүешендә уҡылыуы ҡайһы бер һорауҙар ҙа тыуҙыра, сөнки музей фондындағы шиғырҙа “идеяларым” һүҙе “идеалдарым” рәүешендә бирелә. Был мәсьәләнең сиселеше – ғәрәп графикаһындағы вариантта. 1927 йылда, яңы орфографияның әле нығынып етмәгән осоронда, Һәҙиә Дәүләтшина:

*Идеяларым бөйөк, күңелем ғали, –*

тип яҙа. Тимәк, Марат Минһажетдинов шиғырҙы ошо вариантта уҡыған.

“Барыһын да юғалтҡас” шиғырында лирик геройҙың артабанғы тормошонда бер генә лә ыңғай момент көтөлмәҫ кеүек. Сабыйҙарса самимилыҡтың, автор үҙе атағанса, “яуыз минуттар” кисереп, күңел трагедияһына дусар булыуы тетрәндерә. Лирик герой был фажиғәлә бер кемде лә ғәйепләргә ашыҡмай.

“22 йәшлек кенә Һәҙиә Дәүләтшинаны былдай юлдарҙы яҙырға нимә этәргән? Берҙән-бер улы Булатты юғалтыу ҡайғыһымы? Әллә теүәл 10 йылдан өҫтәренә ябырылыр фажиғәләрҙе тойомлаумы?” тигән һораузар килеп тыуа.

Ижадының башланғыс осоронда уҡ “Ауыр хистәр эсендә”, “Дача хәтирәһе”, “Нурлы хәтирә” шиғырҙары менән үҙен нескә күңелле лирик булараҡ күрһәтеп өлгөргән әҙибәнең үтә тәьҫирләнеүсән булыуын иҫәпкә алһаҡ, шиғырҙың ошо дәүерҙә яҙылыуы ғәжәп тә түгел, беҙҙеңсә.

“Ҡайнар сәләм”, “Арыҫланбәк”, “Шатлыҡ турҡындары”, “Ҡыш килде” һәм С.М. Кировтың үлеменә бағышланған шиғырҙары Дәүләтшиндарҙың яңы тормош төҙөү эшендә ҡайнап йәшәгән, Баймаҡ районы “Йылайыр” орлоҡсолоҡ совхозында эшләгән йылдарына тура килә. Әҙибә совхоз ударниктары Солонин, Ҡаһарманов кеүек реаль шәхестәр, Ҡара диңгеҙҙе хәтерләтеп тулҡынланған иген баҫыуҙары, “Урғаҙа аша Урал буйлап уйнап китеүсе” һалҡын елдәр образдары аша осорҙоң шанлы ла, данлы ла көндәренән үҙенсәлекле бер репортаж тыуҙырыуға өлгәшә. Шиғырҙарға оперативлыҡ, теремеклек, оптимистик рух хас. “Арыҫланбәк” шиғырында янып йәшәүсе, сәмләнеп эшләүсе Арыҫланбәк кеүек йәштәрҙең үҙенсәлекле тормош биографияһы айырым-асыҡ һынлана: “эҫе яландарҙа көтөү көтөп, янып үҫкән башҡорт балаһы”ның политбүлек тәрбиәһе һөҙөмтәһендә Әкрәм, Леон кеүек алдынғы хеҙмәтсәндәр менән ярышырлыҡ кимәлгә етеүе һүрәтләнә. Һәҙиә Дәүләтшина үҙ геройын айырым бер ихласлыҡ менән, үҙенсәлекле аныҡлаусылар менән һынландыра:

*Ҡояш нурҙарында янып үҫкән*
*Ҡара туры башҡорт балаһы,*
*Йөҙөп-йөҙөп ҡылъан араһында,*
*Гөлдәр яһай совхоз далаһын.*

1937 йыл ваҡиғалары талантлы прозаик булараҡ ил кимәлендә танылыу яулап өлгөргән, нескә хисле лирик һынында тәҫмөрләнә генә башлаған әҙибәнең тормош күсәрҙәрен ҡапма-ҡаршы йүнәлешкә бороп ҡуйҙы. “Аңғармаҫтан ауыр бәләгә ҡалғас, яҙыусы үҙенең ғүмер юлын күҙ алдынан үткәреп, тикшереп сыға. Ләкин үткәнендә ул, яҡты иҫтәлектәрҙән башҡа, выждан ғазабы кисерерлек, артҡа әйләнеп ҡарағанда йөҙ ҡыҙарырлыҡ ҡара таптар тапмай”, – тип билдәләне Марат Минһажетдинов, был осорҙа яҙылған бер нисә шиғырын анализлап.

“Онотолмаҫ” шиғырында Темников лагерҙарын үтеп ҡайтҡанда ла оптимистик рухын һаҡлап ҡала алған яҙыусының лирик геройын үткән матур көндәр, күркәм хәтирәләр солғанышында күрергә мөмкин:

*Кипаристың яҡут япраҡтары,*
*Лимон, йөҙөм, роза еҫтәре,*
*Йәшкелт тулҡындарын ярға бәргән*
*Ҡара диңгеҙ минең иҫтә әле.*

Ғүмеренең ауыр мәлдәрендә тормошта йәшәргә көс биргән яҡты көндәр иҫтәлеге артабанғы строфаларҙа ла сағылыш таба: Йән һаҡлағыс, серле талисмандай, // Иҫтәлектәр мине һаҡланы, – тип яҙа әҙибә. Был шиғыр менән танышҡандан һуң күҙ алдына әҙибәнең баҙыҡ характеры һынлана башлай.

*Йәш ғүмерҙең йәшел япраҡтарын*
*Әсе елдәр ҡаты ҡаҡманы... –*

рәүешле һығымтанан һуң тоннелдең бер башында башта шәйләнмәгән ут баҙлап киткәндәй тойола. Үҙенең хаҡлығын, йөрәгенең паклығын һәйбәт белгән авторҙың уй-кисерештәре конкрет характерҙа, уй-теләктәр ышаныслы яңғырай:

*Күпме генә болот ҡабармаһын,*
*Ниндәй ел-дауылдар ҡупмаһын,*
*Ҡояш сыҡмай ҡалмай көн һайын,*
*Тик һынмаһын бәхет тотҡаһы.*

1951–1954 йылдарға ҡараған “Байрам йырҙары”, “Ҡәҙерле Россиянин!”, “Семере атланы Зоя дар янына...”, “Эй, Салауат, дуҫың Пугачев менән…”, “Юлда”,

“Таныу”, “Рәхәт, тыныс йәшәй илебеҙ”, “Зарланыу” ише шиғырҙары “Ырғыҙ” романы өҫтөндә эшләгән осорҙа яҙылған. Һәҙиә Дәүләтшина уларҙың ҡайһы берҙәрен, атап әйткәндә “Байрам йырҙары”н, “Әҙәби Башҡортостан” журналына ла тәҡдим итеп ҡарай, әммә мөхәррир Сәғит Агиш: “Унда бер ниндәй ҙә яңылыҡ, образлы һүҙҙәр юҡ,” – тигән һылтау менән шиғырҙы кире ҡаға. “Йырлағы ла килә, тыңлағы ла килә //Әй йылғаһының йәмле буйҙарын” – тигән юлдар бар Үрге Ҡыйғыла яҙылған, яҡты хистәр менән һуғарылған был шиғырҙа. “Байрам йырҙары” яҙыусының үҙ исемен матбуғатта баҫылыуын күреү теләге менән яҙылған әҫәр булыуын аңлауы ауыр түгел.

Ғүмер шәменең елпелдәп һүнә барғанын тойған Һәҙиә Дәүләтшина үҙ әҫәрҙәренең ҡасан да донъя күреренә ышанһа ла, күңел төшөнкөлөгөнә лә бирелеп ҡуя. Был халәт уның бер строфалыҡ ҡына шиғырына һыйған: Һатып алып булмай талантты, – //Үтәп булмай шиғри талапты. //Юҡҡа ултырам, ҡулда ҡәләмем… //Төндәр үтте, алһыу таң атты.

“Семере атланы Зоя дар янына…” шиғыры тәү ҡарашҡа бары Зоя Космодемьянскаяның батырлығына бағышланған һымаҡ күренһә лә, хаҡһыҙ йәберләүҙәрҙе үҙ башынан үткәреп тә күңел юғарылығын һаҡлаған лирик геройҙың ижад һәм тормош кредоһын һынландырыуы менән ҡиммәт: Совет выжданыма тап төшөрмәй, //Атлап барам ғүмерем юлында.

Үлер алдынан Бөрө больницаһында тамамлаған “Аңламаны” шиғыры бөтөнләй таң ҡалдыра. Сикһеҙ оптимизм менән һуғарылған, шаян, уйнаҡ тел менән яҙылған шиғыр ул. Һәҙиә Дәүләтшинаның аяуһыҙ сирле мәлендәге ғәжәйеп күңел халәтен асып һала:

*Уткер уғын шаян Купидон*
*Йөрәгемә сәнскән урталай.*
*Һеҙҙә булмай уның дауаһы –*
*Бөтә барлығымды ут алған!*

Фажиғәле яҙмышлы әҙибәнең бөтә ижади ғүмерен ҡылыҡһырларҙай юлдар шиғырҙың аҙаҡҡы юлдарына һыйған: Бик һирәк ул – ысын “сир” – //Һуңғы тапҡыр дөрләп янайым.

Ғөмүмән, уның көслө рухлы икәненә шиғри әҫәрҙәре менән танышҡан һайын инана бараһың. “Кремлгә кергәндә” шиғырында башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарына ғына хас эске ғорурлыҡ, тыныслыҡ, рухи халәтенең саф килеш һаҡланыуы күҙ алдыбыҙға килеп баҫа.

Һәҙиә Дәүләтшинаның поэтик күңеле уй-кисерештәр солғанышында асып һалына. Әллә күпме ҡайғы-хәсрәт, хаҡһыҙ рәнйетелеүҙәрҙән һуң да эске көсөн, күңелен, юғары булмышын һаҡлап ҡала алыуы – һоҡланғыс күренеш. Ғөмүмән, был шиғри әҫәрҙәр яҙыусының ижади һәм шәхси биографияһын күҙ алдына баҫтырыуы менән дә ҡиммәтле. Ихтыяр көсөн, эске ныҡлыҡ тәрбиәләүҙә уның әһәмиәте баһалап бөткөһөҙ.

Тап ошо шиғырҙар Һәҙиә Дәүләтшинаның башланғыс ижады менән аҙаҡтан яҙып бөтөләсәк, камиллаштыраласаҡ “Ырғыҙ” романын тоташтырып килеүсе рухи күпер, әҙибәне артабанғы ижадҡа рухландырыусы сығанаҡ булыуы менән ҡәҙерле.

**Гөлнур ҠАСҠЫНОВА,**
**филология фәндәре кандидаты,**
**Бөрө дәүләт социаль-педагогия академияһының**
**башҡорт, татар һәм мари филологияһы**
**кафедраһының өлкән уҡытыусыһы.**

# РАМАҘАН ӨМӨТБАЕВ ХИКӘЙӘЛӘРЕНДӘ ЗАМАНДАШ ОБРАЗЫ

Заман проблемаһы һәм замандаш образы Рамаҙан Өмөтбаев ижадында киң сағылыш тапты. Был йәһәттән бигерәк тә "Автомат бисә", "Уйын ҡорбаны", "Яу ялмаған мөхәббәт" хикәйәләре иғтибарға лайыҡ. Уларҙың тәүгеһендә ғаилә-лә ир һәм ҡатын араһындағы мөнәсәбәттәрҙе һүрәтләү үҙәккә ҡуйылған. Әҫәр Яубаҫар Батырхановтың "быныһы — бисәләр шөғөлө, ә инде быныһы — ирҙәр хәстәре" тигән ҡараштан сығып йәшәүен һүрәтләүҙән башланып китә.

Бына шулай әҫәрҙең тәүге юлында уҡ тормош фәлсәфәһе, ғаиләлә ир һәм ҡатын мөнәсәбәттәре кеүек актуаль проблемалар күтәрелә.

Был тормош ҡағиҙәһен Яубаҫарға атаһы өйрәткән икән: "Улымды ысын ир итәм... башына кәпәс кейеп, иҙән һепереп йөрөгән кеше ирме ни ул, салбарлы бисә".

Гөлдәр — Яубаҫарҙың ҡатыны. Аҡыллы, эшкә уңған. Уҡытыусы. Ул бер ваҡыт-та ла "быныһы — ирҙәр йомошо, ә быныһы — ҡатын-ҡыҙҙар эше" тип тормай. Ә Яубаҫар иһә ирҙәргә тейгән өлөштө лә тырыш бисәһе елкәһенә һала. Ғаилә бала-сағалы булып киткәс тә, Яубаҫарҙың балалар тәрбиәһенә ҡатнашмауы Гөлдәргә ауырлыҡтар тыуҙыра. Атайҙың үҙ балаларын баҡсанан алып ҡайтмауынан да, "...мин мастер башым менән балалар ултыртып сана һөйрәп ҡайтайыммы?" тигән һүҙҙәренән дә ҡатын-ҡыҙға ҡарата мөнәсәбәтен аңларға була.

Әммә Яубаҫар эшендә "бөтә кешегә лә бик иғтибарлы, илтифатлы кеше". Шуға ла нисә йылдар фотоһы Почет таҡтаһынан төшмәүе, премиянан ҡалғаны булма-уы уны икенсе яҡлап асырға ярҙам итә.

Гөлдәрҙә ирҙәрсә тәүәккәллек, аҡыл менән бергә хәстәрлекле оло йөрәк, ҡа-тын-ҡыҙға хас наҙлы күңел йылыһы ла етерлек. Ошо сифаттар Гөлдәрҙе аҙаҡтан "һапһыҙ ҡара балта"ға әйләндерә. Ҡыҙы кейәүгә сыҡҡас та, ата-әсәһе менән йә-шәһә лә, әсәһенә ярҙам итмәй. Автор әҫәрҙә бала тәрбиәләү проблемаһын асыҡ сағылдыра. "Бала үҫтерһәң, буйын ғына үҫтермә, аҡылын да үҫтер" тип юҡҡа ғына әйтмәйҙәр икән.

Тормош йөгөн уртаға егелеп бер үҙе тартҡан ҡатындың аҙаҡтан тамам түҙем-леге бөтә. Иренең мыжыуына шундай һүҙҙәр әйтә ул: "былай ҙа көнө-төнө уты һүнмәгән машина һымаҡ сабам да баһа, шуны күрмәйһеңме ни? ...Беҙҙең өйҙә барыһы ла байҙар, ә хеҙмәтсе берәү генә — мин, автомат бисә". Яубаҫарҙың иһә "миңә һалҡын биреп торған автомат бисә кәрәкмәй, мине наҙлы итеп иркәләй, ысын йөрәктән ҡайнар һөйә белгән эҫе ҡанлы, йәне тере, һөйәр бисә кәрәк", тиеүе аша ғүмер буйы тырыш бисәһен күрмәүе, һөйөү, наҙ хистәре тоймауы, күңел донъяһы "китек" булыуы асыла. Күренеүенсә, ғаилә мөнәсәбәттәрендә бурыстарыңды автоматтай теүәл башҡарыу ғына ла етмәй, ә күңел йылыһы һалыу кәрәк икән.

"Уйын ҡорбаны" хикәйәһендә халыҡ хужалығы менән етәксләк итеүҙәге дө-рөҫ булмаған алымдар, ил үҫешен көрсөккә терәтеүсе зарарлы күренештәр, ижтимағи, социаль-иҡтисади, рухи өлкәләге хәл итеүҙе һораған киҫкен мәсьә-ләләр яҡтыртыла.

Әҫәр Көньяҡ Урал төбәгенең төпкөл районында вазифалы урында эшләгән Ғилман Уралбаевты мәркәзгә — ҙурыраҡ, яуаплыраҡ урынға күсереү менән баш-ланып китә.

Әҫәрҙең төп өлөшөн кеше, уның дәрәжәһе, шулай уҡ башҡаларға ҡарата, тыуған төйәгенә мөнәсәбәте тәшкил итә. Сөнки илдең яҙмышы, халыҡтың тормошо етәксегә, уның эшмәкәрлегенә ныҡ бәйле.

Кеше юғарынан кемдең дә булһа ҡушыуын ғына көтөп эшләргә тейешме? Ғилман Уралбаев, комсомол йәшенән яңы ғына үтеүенә ҡарамаҫтан, етәкселек иткән дәүерҙә районды алдынғылар рәтенә сығарыуы унда ойоштороу һәләтенең юғары булыуын, халыҡ менән эшләй алыуын, аҡыллы, белемле икәнен күрһәтә.

Проблемаларҙы кәңәшләшеп хәл итеүҙе хуп күрмәгән хужаһы Арыҫлан Зәйниевич Ғилман Уралбаевҡа ҡапма-ҡаршы ҡуйыла. Ул яңы вазифаға тәҡдим индерер алдынан Уралбаев артынан йәшерен рәүештә ышаныслы кешеһен ебәрә. Ғилманға бына ниндәй характеристика бирә ул: "...Уралбаевтың эшмәкәрлегендә һәм ойоштороу һәләтендә шик юҡ. Үҙе лә эшләй, халыҡты ла эшләтә белә. Белеме лә башынан ашҡан. Ләкин һөйләшеп фекер алышҡан, яҡындан белгән кешеләр уның холҡоноң тиҫкәре булыуын һөйләй, теләһә ниндәй етәксе лә уға барыбер, туп-тура әйтә торған ғәҙәте бар, үҙ фекеренән бер ҡарыш та сигенә торған әҙәм түгел. Уның өсөн үҙенән юғары етәксенең абруйы юҡҡа хисап". Арыҫлан Зәйниевичтың Уралбаевҡа ял көнө шылтыратып ҡаты итеп һөйләшеүе, "шаҡылдатып" трубканы һалып ҡуйыуы уның тәкәббер, үҙ һүҙле етәксе икәнен күрһәтеп тора.

Ғилмандың хөкүмәт дачаһында хужа менән бильярд уйнауҙары хәл-ваҡиғаларҙы киҫкенләштерә. Бильярдта Арыҫлан Зәйниевичты быға тиклем бер кем дә еңә алғаны булмай. Ләкин уны Уралбаев дүрткә бер иҫәбе менән ота... һәм дөрөҫ "уйнамау"ын аңлай.

Икенсе уйында инде ул махсус еңелә — "уйын ҡорбаны"на әйләнә. Бынан һуң инде ул "сәйәси" хата яһамаясаҡ, "кем менән үҙенде нисек тоторға, нисек һөйләшергә, кемдән отолорға, кемде мотлаҡ еңергә — барыһын да уйлап эш итәсәк".

Заман темаһына арналған проза әҫәрҙәренең күбеһендә көндәлек ваҡиғалар, геройҙарҙың уй-кисерештәре һәм, ғөмүмән, яҙмыштары ҡайһылыр бер яғы менән Бөйөк Ватан һуғышы йылдарына барып тоташа.

Р. Өмөтбаев ижады, һуғыш күренештәрен һүрәтләүҙән дә бигерәк, ут эсендәге кешене, һуғыштың шәхес яҙмышына яһаған йоғонтоһон, яугирҙың кисерештәрен сағылдырыуҙы иғтибар үҙәгенә ҡуя. Мәҫәлән, "Яу ялмаған мөхәббәт" хикәйәһе. Яҙыусы Иван Сухорученко образы аша илебеҙ кешеләренең һуғыш тарафынан тағы ла нығыраҡ асылған рухи йөҙөн, әхлаҡи бөйөклөгөн сағылдыра. Сухорученко һуғыш башланыу менән осоусылар әҙерләй торған училищеға ғариза бирә. Ә уның һөйгән йәре Надяның иһә хәрби комиссариат саҡырыуын көтөп ауылда ҡалыуы уларҙың юлдарын айыра. Был геройҙар оло гуманизм, һөйөү тойғолары менән кәүҙәләндерелә, ә эш-хәрәкәттәре эҙләнеүҙәр, табыштар, юғалтыуҙар, әрнеү-ғазапланыуҙар, ҡыуаныстар менән тығыҙ бәйләп бирелә. Надя яҙған "өскөл" хатты Сухорученконың түш кеҫәһендә һаҡлап йөрөтөүе, хатта ятланып, "һәр өтөрөнә ҡәҙәр нескә күңеленә" уйылып ҡалыуы — уның эскерһеҙ мөхәббәтенә ишара. Әҫәр батырҙарса һәләк булған яугирҙың улы атаһының юлын дауам итеүен, авиация генералы булып танылыуын — быуындар бәйләнешенең өҙөлмәүен ышандырырлыҡ асып һала.

Ғөмүмән, Рамаҙан Өмөтбаев әҫәрҙәре аша рухи ныҡлыҡтың кешегә ни тиклем кәрәкле булыуына инанаһың.

**Сәриә РАМАЗАНОВА,**
**БДУ-ның Сибай филиалы студенты.**

## «ҠУЯН ЙЫЛЫ»НА ЛА АЯҠ БАҪТЫҠ

Былтыр 30 ноябрҙә Федераль Йыйылышҡа мөрәжәғәт менән сығыш яһап, Рәсәй Президенты Дмитрий Медведев, тормоштоң барлыҡ өлкәләрен модернизациялау закондар сығарыу һәм башҡарма властарҙың 2011 йылға төп эшмәкәрлегенең береһе булырға тейеш, тип билдәләне. Бының өсөн күп йүнәлештәрҙә эшмәкәрлек алып барыла, тине ил башлығы. Мәҫәлән, атом энергияһын ҡулланыу буйынса туғыҙ блок төҙөлә. Ошондай проекттарҙы беҙ Һиндостанда, Иранда, Ҡытайҙа ғәмәлгә ашырабыҙ. Был федераль ҡаҙна мөмкинлектәрен шаҡтай дәрәжәлә тулыландырыу мөмкинлеге бирәсәк. Шулай уҡ Ватан фармацевтикаһында етештерелгән инновацион препараттарҙың дөйөм күләме яҡын арала 60 процентҡа еткереләсәк. Президент федераль хөкүмәткә экономияланған сығымдарҙы һәм өҫтәмә килемдәрҙең бер өлөшөн яңырыу сараларын ғәмәлгә ашырыуға йүнәлтергә ҡушты. Кремль башлығы фекеренсә, төрлө кимәлдәге ҡаҙналарға килемдәрҙе бүлеү принцибын да республикалар, өлкәләр, шулай уҡ урындағы үҙидара файҙаһына үҙгәртеү зарур. Төбәктәр башлыҡтарының 2011 йылдағы эшмәкәрлеге иң элек иҡтисадҡа инвестициялар йәлеп итеү, яңы эш урындары булдырыу һәләтенә ҡарап баһаланасаҡ. Дөйөм алғанда, технологик яңырыу 2020 йылға иҡтисадтың һөҙөмтәлелеген 40 процентҡа арттырырға тейеш, тигән ышаныс белдерә Дмитрий Медведев.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, мөрәжәғәттә 2010 йылда дәүләт органдарының эшмәкәрлегенә анализға урын булмай сыҡты. Быға тиклемге ике мөрәжәғәтендә ҡуйылған бурыстарҙың нисек үтәлеүе хаҡында ла юғары трибунанан бер ни ишетелмәне. Шул уҡ ваҡытта РФ Президентының 2008 йылғы мөрәжәғәтендә башҡарма власть органдарының эшмәкәрлегендә төп урындарҙың береһе һаналған төбәктәрҙә федераль органдар чиновниктарын ҡыҫҡартыу, ә уҙған 2010 йылды «Уҡытыусы йылы» тип иғлан итеп тә, был өлкәлә бер ни эшләнмәүен күрмәмешкә һалышыуҙы ыңғай баһалап булмай. Әйтергә кәрәк, уҙған йыл ил өсөн иң ауыр осорҙоң береһе булды. Бөгөнгө көн күҙлегенән ҡайһы бер мөһим проблемаларҙы яҡтыртыу ҡамасауламаҫ ине. Шуға күрә беҙ уның ҡайһы бер күренештәрен «Ағиҙел» уҡыусыларына еткерергә булдыҡ.

«Иң байҙар һәм фәҡирҙәрҙең килемдәре араһында айырманы 17 тапҡырға еткереп, Рәсәй үҙенсәлекле рекорд ҡуйҙы»,— тип хәбәр итә «Независимая газета». Белоруссияла был нисбәт — 5, Ҡаҙағстанда — 5,3, Украинала 9-ҙан артмай. Мәҫәлән, ил граждандарының иң бай 10 проценты барлыҡ килемдең 30,5 процентын үҙ ҡулында тотһа, иң фәҡир 10 проценты өлөшөнә килемдең ни бары 1,9 проценты тура килә. Ҡаҙағстанда йәшәү минимумынан да кәм

килемлеләр 8,2 процент булһа, беҙҙә ундайҙар 13 процент иҫәпләнә. Уртаса ғүмер оҙонлоғо буйынса ла беҙ элекке СССР-ҙың ике республикаһынан ғына алда барабыҙ. Эксперттарҙың күпселеге, Рәсәйҙә дәүләт сәйәсәте нефть-газ комплексы хужаларының мәнфәғәтен яҡлауға йүнәлтелгән, тип иҫәпләй һәм, дәүләт һәр кем тураһында хәстәрлек күрмәй тороп, хәл ыңғай яҡҡа үҙгәрмәйәсәк, тигән фекер белдерә.

Шулай уҡ илдә эш йәки лайыҡлыраҡ тормош урыны эҙләп күсеп йөрөү өсөн мөмкинлектәр булмау ҙа фәҡирлекте бөтөрөргә ҡамасаулай. Мәҫәлән, АҠШ-та берәй ҡалала эш таба алмаһа, кеше еңел генә икенсеһенә күсеп китә һәм шунда торлаҡ та таба, эшкә лә урынлаша. Сөнки Америкала торлаҡ баҙары бар, һәм ул ярайһы дәрәжәлә ҙур. Беҙҙә иһә башҡа урында эш табыу торлаҡ етмәү менән ҡатмарлаша.

9 ноябрҙә Мәскәүҙә Берләшкән Милләттәр Ойошмаһының «Халыҡтарҙың реаль байлығы: кешене үҫтереү юлдары» тип аталған докладын тыңлау күптәрҙең, хатта матбуғат сараларының иғтибарынан да ситтә ҡалды кеүек. Был документта социаль йәһәттән мөһим һаналған күрһәткес — теге йәки был дәүләттең кешелек потенциалын үҫтереү буйынса эшмәкәрлеге — индексы ла сағылыш тапҡан. Ошо индекс буйынса беҙ 169 дәүләт араһында 65-се урында торабыҙ. Индекс һаулыҡ, мәғариф, матди килем, белем һәм информацияға эйә булыу мөмкинлектәрен иҫәпкә алып төҙөлгән. Һуңғы егерме йыл эсендә был өлкәлә хәл үҙгәрешһеҙ ҡала, тип билдәләй «Новые известия» гәзите. 65-се урын ғүмерҙең оҙонлоғоноң 67,2 йыл, белем алыуҙың уртаса 8,8 йыл, йән башына тулайым эске продукттың (2008 йылғы хаҡтарҙа) 15,2 мең доллар булыуын күрһәтә. Индекс буйынса беҙ Румыния, Болгария, Сербия кеүек дәүләттәрҙән дә артта ҡалабыҙ икән. Иң алда барыусылар — Норвегия, Австралия, Яңы Зеландия. Албания, Перу һәм Коста-Рика таблицала Рәсәйҙең өҫкө күршеһе булһа, түбәнгеләре — Ҡаҙағстан, Әзербайжан, Босния.

Сеймал (нефть, газ, руда һ.б. ер аҫты байлыҡтары) рентаһын байҙар ҡулында ҡалдырыу рәсәйҙәр араһында фәҡирлекте көсәйтә, тип билдәләй белгестәр. Уңышлы үҫеш өсөн Рәсәйҙә технологик-иҡтисади, гуманитар-сәйәси мәсьәләләрҙе берәгәйле хәл итергә кәрәк. Был проблемалар бер-береһенә тығыҙ уҡмашҡан һәм тейешле закондар ҡабул итеү менән генә уларҙы еңеп сығыу мөмкинлеге юҡ кимәлендә. Быны өсөн «күләгәләге» иҡтисадтан, коррупциянан һ.б. йәмғиәттең социаль хәленә кире йоғонто яһаған сирҙәрҙән арыныу зарур.

Иҡтисадты яңыртыу өсөн инвестициялар, иң элек сит ил капиталын йәлеп итеү кәрәк, тип иҫәпләй Дмитрий Медведев. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, сит ил капиталы Рәсәйгә бер ҙә ашыҡмай. «Независимая газета» хәбәр итеүенсә, сит ил байҙарының беҙгә ышанысы юғала бара. Ғинуар — сентябрҙә, мәҫәлән, Рәсәй иҡтисадына һалынған сит ил капиталы 44,5 миллиард һум, йәғни 2009 йыл менән сағыштырғанда 13,2 процентҡа аҙыраҡ булған. Быны сәбәбен белгестәр Рәсәйҙә табыш алыу мөмкинлегенең ҡырҡа кәмеүе менән аңлата. БРИК (Бразилия, Рәсәй, Һиндостан, Ҡытай) төркөмөндә беҙ иҡтисадты үҫтереү буйынса иң артта, тип яҙа гәзит. Федераль статистика мәғлүмәттәре буйынса, өсөнсө кварталда Рәсәйҙең тулайым эске продукты 2,7 процентҡа артҡанда, Һиндостанда үҫеш — 8,8, Бразилияла — 8,7, Ҡытайҙа иһә 10,6 процентҡа

еткән. Инфляцияның йыл башынан тупланған индексы беҙҙә 7 процент булһа, Бразилияла — 4,7, Ҡытайҙа — 3,6, АҠШ-та — 1,1, Германияла — 1,3.

Финанс-иҡтисади кризис сит илдәргә капитал сығарыуҙың артыуына килтерҙе. Рәсәй банкы етәксеһе Сергей Игнатьевтың Дәүләт Думаһындағы сығышынан күренеүенсә, сентябрь-октябрҙә генә илдән 8 миллиард доллар сығарылған. Быны баш финансист сит ил инвесторҙарының беҙгә капитал һалырға теләмәүе, Ватан эшҡыуарҙарының милекте сит илдәрҙән һатып алырға (сөнки унда арзанраҡ — **М.Х.**) ынтылыуы менән бәйләй. Туғыҙ айҙа Ватан иҡтисадына хеҙмәт итеүҙән төңөлдөрөлгән капиталдың дөйөм күләме 21 миллиард долларға еткән. Үҙәк банк мәғлүмәттәре буйынса, дүртенсе кварталда сит ил инвесторҙарының Рәсәйгә 7 миллиард доллар капитал һалырға йыйыныуы тураһындағы фараздың, киреһенсә, 6 миллиард доллар сығып китәсәге тураһындағы менән алмашыныу хәүефе көслө. 2011 йылға прогноз менән Үҙәк банк былтыр шөғөлләнмәне, сөнки быны Дәүләт Думаһы ҡабул иткән ҡаҙна йөкмәткеһен үҙгәртеүгә килтереүе ихтимал, ти белгестәр.

Кризис бөтә донъяға әсе һабаҡ биреүгә ҡарамаҫтан, Рәсәйҙә унан тейешле һығымта яһаманылар — былтыр ноябрь баштарында йыйылған Иректә иҡтисади йәмғиәт ағзаларының фекере шундай, тип яҙҙы «Известия» гәзите былтыр «Секреты экономического чуда» тигән мәҡәләһендә. Инновациялар беҙҙә ерегеп бармай. Дәүләт Думаһының иҡтисади сәйәсәт һәм эшҡыуарлыҡ комитеты рәйесе Евгений Федоров, һуңғы 20 йылда беҙ ябай ғына баҙар иҡтисады ла ҡора алманыҡ, тип иҫәпләй. Һәр дәүләттә ярҙамсыл (прикладной) фәнгә аҡсаны сәнәғәт әһелдәре бер ниндәй тотҡарлыҡһыҙ бирә, әммә Рәсәйҙә генә был яҙылмаған ҡанун менән иҫәпләшергә теләмәйҙәр.

Атап үтелгән етешһеҙлектәрҙең сәбәптәре нимәлә? ЕврАзЭС-тың (Европа менән Азияның иҡтисади берләшмәһе) генераль секретары урынбаҫары академик Сергей Глазьев фекеренсә, Рәсәй иҡтисадына идара итеүҙә системалы ике етешһеҙлек күҙәтелә: макроиҡтисадҡа (тармаҡҡа идара итеүҙең иң юғары баҫҡысы) етәкселек итеүселәрҙең хатта үҙ хаталарында өйрәнергә теләмәүе һәм олигархик капиталдың макроиҡтисади сәйәсәтте эшләүгә ҡамасаулыҡ итеүе. Миҫалға Глазьев әлеге кризис күренештәрен бөтөрөү өсөн Европа илдәренең үҙ иҡтисадына ярҙамға тулайым эске продукттың 10 — 15 проценты күләмендә аҡса бүлгәндә, Рәсәйҙә уның 40 процентҡа еткерелеүен килтерә. Хикмәт хатта аҡсала ла түгел. Европа һалым түләүселәренең финанс ярҙамы модернизация һәм инновацияларға тотонолғанда, беҙҙә ул олигархик капиталды тағы ла байыҡтырыуға китте.

Академик раҫлауынса, берҙән-бер юл — иҡтисадты яңы заманса нигеҙҙә ҡороу. Ул — нанотехнологиялар, молекуляр инженерия, информацион-коммуникацион технологиялар. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, уларҙың тулайым эске продукттағы өлөшө бөгөн 3—5 процент самаһы ғына тәшкил итә.

Рәсәйҙе яңыртыу, Михаил Горбачевса әйтһәк, «үҙгәртеп ҡороу», «тиҙләнеш» кеүек идеялар сығып тора, ләкин ил бер ҙә ыратып алға китә алмай. Нимә (кем) ҡамасаулай һуң? Был һорау өҫтөндә, ваҡытлы матбуғатта хәбәр ителеүенсә, Кремль ҡарамағындағы Үҫеш институтында (ИНСоР) баш ватып ҡарағандар. Институт етәксеһе Игорь Юргенс фекеренсә, Рәсәйҙе модернизациялау тиҙлеге халыҡтың аңлап еткермәүе менән тотҡарлана. Йәнәһе, унда граждандлыҡ тойғоһо түбән, ә дәүләт елкәһендә йәшәргә теләү кәйефе,

киреһенсә, көслө. Бындай кәйеф, тип фараз йөрөтә Юргенс, 2025 йылға тиклем дауам итеүе ихтимал. «Ни өсөн 2025?» тигән һорауға яуап ябай: оло йәштәгеләр яҡты донъя менән хушлашып бөтәсәк.

Ғөмүмән, ИНСоР етәксеһе йәмәғәтселеккә ғәйепте мул ауҙара. Мәҫәлән, уныңса, илдә кешелек капиталы тарҡалыу дауам итә. Эш таба алмау арҡаһында ҡайһы берәүҙәр алған һөнәрен дә онота, түбән инстинктлы кешеләр күбәйә. Беҙ граждандар түгел, ә ниндәйҙер ҡәбилә, ти Юргенс. Президент менән Премьер-министрҙың ихтыяры көслө, тик кешелек капиталы ҡамасаулай. Үкенескә ҡаршы, ғалим ошондай осраҡта берҙән-бер һәм мотлаҡ ҡуйылырға тейешле «Ни өсөн?» тигән һорауға яуап эҙләп ҡарамаған. Ҡараһа, ул ғәйеп халыҡта түгел, ә идара итеү органдарында икәнлеген мотлаҡ шәйләр ине. Балыҡ башынан серей, тигән әйтем буш урында барлыҡҡа килмәгән.

Ләкин Юргенс кире юҫыҡта фекерләй. Уныңса, Уинстон Черчилль (Бөйөк Британияның 40-сы йылдарҙағы премьер-министры) менән Джон Кеннеди (АҠШ-тың 60-сы йылдарҙағы президенты) ҙа бындай шарттарҙа бер ни ҡыра алмаҫ ине, тигән фекере мәғәнәһеҙ һәм урынһыҙ, сөнки был категориялар сағыштырырлыҡ түгел. Етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү өсөн, ИНСоР ҡарашынса, сәйәси фирҡәләр менән профсоюздарҙың әүҙемлеген көсәйтеү зарур. АҠШ-тағы кеүек ике фирҡәле система (береһе — Д. Медведевтыҡы, икенсеһе — В. Путиндыҡы тип аңларға кәрәк) барлыҡҡа килә алһа, ғөмүмән, идеаль булыр ине, ти ИНСоР етәксеһе.

Әлбиттә, институттың бәхәсле фекерҙәре быны менән генә бөтмәй. Уның иң мөһимен «Правое дело» фирҡәһенән Борис Надеждин тотоп алған. Хикмәт Рәсәй халҡында түгел, ти ул. Барыһы ла етәкселәрҙең архаик тәртибенә бәйле. Надеждиндың, ошо тәртипһеҙлек менән айҡашып, йәмәғәтселек бик күп потенциаль энергияһын юғалта, тигән фекере ысынбарлыҡҡа ауаздаш. Сәйәси технологиялар үҙәге вице-президенты Алексей Макаркин быға коррупцияға ҡоролған мөнәсәбәттәрҙе һәм технологик артталыҡты ла ҡуша.

Ауыр хәлдән нисек сығырға? Был йәһәттән РФ Финанс министры Алексей Кудриндың ҡайһы бер фекерҙәре тураһында «Новые известия» гәзите яҙып сыҡҡайны. Хәйер, Ватан иҡтисадын структур яҡтан үҙгәртеү (Рәсәй Президенты телендә әйтһәк, «диверсификация», йәғни әҙер продукция етештереүҙе ҡырҡа арттырыу мөмкинлеге биргән тармаҡтарҙы үҫтереү — **М.Х.**) финанс минстрының фекере түгел. Уны ҡайһы бер ғалимдар, шул иҫәптән мәрхүм Егор Гайдар ҙа, 90-сы йылдарҙа уҡ күтәреп ҡарағайны. Ләкин федераль хөкүмәт был тәңгәлдә бер аҙым да яһаманы. Ҡайһы берәүҙәр, өҫтәлгән хаҡҡа (НДС) һалымды күтәреү иҫәбенә ҡаҙнаны тулыландырырға мөмкин, тип иҫәпләй һәм миҫалға Европала уның 88 процентҡа етеүен килтерә. Имеш, ул Рәсәйҙә 65 процент ҡына. Юғары иҡтисад мәктәбе белгестәре ҡарашынса иһә, хәҙерге мәлдә хеҙмәт етештереүсәнлеген арттырыу проблемаһы беренсе урынға сыға, сөнки ҡайһы бер тармаҡтарҙа уның айырмаһы 16 тапҡырға етә. Идара итеү өлкәһендә лә етешһеҙлектәр күп, сөнки дәүләт эшҡыуарҙарға үҙ сәйәсәтен аңлата белмәй, тип иҫәпләй сәйәси технологтар. Дмитрий Медведев йыш телгә алған диверсификация — оҙайлы процесс. Мәҫәлән, 70-се йылдарға тиклем башлыса баҡыр рудаһы иҫәбенә осон-осҡа ялғаған Мексикаға иҡтисадты икенсе рельстарға көйләү өсөн 15

йыл кәрәк булған. Ысынлап та, был процесс 90-сы йылдарҙа уҡ башланһа, ул бынан биш йыл элек тамамланған йәки тамамланыуға барған булыр ине.

Рәсәй иҡтисадын яңыртыу буйынса дәүләт тарафынан башҡарылған эштәрҙән Дмитрий Медведевтың Мәскәү өлкәһендә Сколково юғары технологиялар ижад итеү үҙәге ойоштороуын атарға мөмкин. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, был башланғыс йәмәғәтселек тарафынан дәррәү күтәреп алынманы. Ваҡытлы матбуғаттан күренеүенсә, юғары мәктәптәр ҙә үҙ тәҡдимдәре менән ашыҡмай. Кремль, эшҡыуарҙарға мөрәжәғәт итеп, инновацион проекттар һалым һәм льготалар бирәсәк, тигәс, 40-лап проект килгән, ләкин ваҡытлы матбуғатта хәбәр ителеүенсә, уларҙың бер нисәһе генә инновацион проект кимәленә яуап бирә. Илде модернизациялауға федераль хөкүмәт башлығы Владимир Путин да үҙенең шәхси өлөшөн индермәксе. Былтыр ноябрь урталарында Свердловск өлкәһендә булып, ул бында «Титан үҙәне» (АҠШ-тағы «Силикон үҙәне»нә оҡшатып әйтелә — **М.Х.**) ойоштороу идеяһы менән уртаҡлашты. Уралда табылған алюмин менән титан рудаһын сеймал килеш арзан ғына хаҡҡа һатып алған американдар, мәғлүм булыуынса, унан бик күп табыш һыға. Мәҫәлән, «Боинг-787» самолеты ҡанатының бер детален етештереү өсөн 98 килограмм саф титан да етә, тиҙәр. Ләкин американдар уның өсөн 260 килограмм титан рудаһы һатып ала һәм 262 килограмын «юнысҡыға әйләндерә». Ә бит титандың хаҡы алтындыҡына тиң тиерлек.

Путиндың күрһәтмәһенә ярашлы, Сәнәғәт һәм сауҙа министрлығы ике аҙна эсендә тейешле ҡарар проекты әҙерләргә бурыслы. Унан һуң АҠШ-ҡа һәм башҡа илдәргә саф титанды үҙ хаҡына һатырға мөмкин буласаҡ. Проектты ғәмәлгә ашырыу өсөн 65 — 67 миллиард һум талап ителә. Уны суднолар, энергия, атом машиналары эшләү, нефть химияһы предприятиелары бирә алыр ине.

Кремль илде яңыртыуҙың башҡа сығанаҡтарына ла мөрәжәғәт итеп ҡарай. «Коммерсантъ» гәзитендә донъя күргән «Государство обзаведется мозгами» тигән мәҡәләнән аңлашылыуынса, РФ Президенты хакимиәтенең беренсе урынбаҫары Владислав Сурковҡа Рәсәй фәнен үҫтереү өсөн сит илдәрҙән ғалимдар саҡырыу менән шөғөлләнеү бурысы йөкмәтелгән. Сит илдәрҙең «фән маяҡтары»на түләү өсөн 12 миллиард һум бүленгән дә инде. Бер кешегә биреләсәк гранттың хаҡы — 150 миллион һум! Рәсәй фәне өсөн көс түгергә медицина өлкәһендә Нобель, математика буйынса Филдс премиялары лауреаттары Фәрид Морад менән Сергей Смирнов (ул беҙҙә белем алып, Швейцарияла эшләй) килергә ризалыҡ биргән. Рәсәй Фәндәр академияһы ғалимдары аптырашта: ундай аҡса түләнһә, Ватан фәне хаҡына бил бөгөргә ашҡынып тороусылар үҙебеҙҙә лә етерлек. Биология фәндәр докторы Михаил Гельфанд фекеренсә, Рәсәйгә эшкә саҡырылыусылар араһында махсус комиссия ағзаларының таныштары ла булыу был кампанияның эскерһеҙлегенә шик тыуҙыра. Хәҙерге коррупция һәм башҡа насар күренештәр солғанышында бындай аҙымдың илгә ниндәй ҙә булһа файҙа килтерәсәгә ышандырмай, ти ғалим.

Билдәле, модернизация ниндәйҙер дәрәжәлә ҡаҙна сығымдарына ла мохтажлыҡ кисерәсәк. 2008 йылғы финанс-иҡтисади кризистың ил ҡаҙнаһын байтаҡтан күрелмәгән дәрәжәлә таҡырайтыуы һәр ҡайһыбыҙға ла мәғлүм. 2015 йылға ҡаҙна дефицитын бөтөрөү маҡсатын ҡуйған федераль хөкүмәт

быға өлгәшеү өсөн етди сығанаҡтар эҙләү менән мәшғүл. «Парламентская газета»ла донъя күргән «Бюджеты требуют жертв. Не от бедных» тигән мәҡәлә был мәсьәләгә бер аҙ асыҡлыҡ индерә кеүек. «Ҡаҙна дефицитын, — тиелә унда, — 2015 йылда бөтөрөү өсөн, белгестәр фекеренсә, толлингты (сит ил продукцияһын эшкәрткән предприятиеларҙы был закон өҫтәмә хаҡҡа һалым түләүҙән ҡотҡара — **М.Х.**) ғәмәлдән сығарыу ғына ла ҡаҙнаға тиҫтәләрсә миллиард һум килтерәсәк. Рәсәй Иҫәп палатаһы мәғлүмәттәре буйынса, 2006 — 2007 йылдарҙа ғына «Русал» компанияһынан федераль ҡаҙна 11,5 миллиард һумлыҡ саф килемгә һалым алып еткермәгән». Шулай уҡ толлингты һалым түләмәү өсөн бер көнлөк фирмалар ойоштороу юлы менән дә жуликтар әүҙем файҙалана. Яғыулыҡ-энергетика компаниялары оффшор зоналарға китеп тә күп аҡсаны һалымдан ҡасыра, ти Рәсәй Фәндәр академияһының Иҡтисад институты директоры Руслан Гринберг.

Яңырыу процесын уңышлы атҡарып сығыу өсөн Кремлгә сәйәси таяныс та кәрәк. Быны «Власть фирҡәһе» — «Берҙәм Рәсәй» үҙ елкәһенә һалырға тейеш ине кеүек. Ләкин был командала ундай шәхестәр күренмәй. Шул уҡ Сурков әйтмешләй, фирҡәлә хатта «иҫәр» генә фекер әйтеүсе лә юҡ. Быны Дмитрий Медведев та аңлай. 23 ноябрҙә ул, һуңғы осорҙа илдәге «тотороҡлолоҡта торғонлоҡ күренештәре» күҙәтелә башланы, тип белдерҙе. Уныңса, әгәр властарға ҡаршы көстәрҙең еңеүгә өлгәшергә ышанысы ҡалмай, ә даими еңеүсе еңелеүгә дусар ителмәй икән, улар әхлаҡи һәм рухи яҡтан тарҡала. Президенттың, беҙ демократик йәмғиәт ҡороу юлынан алға барабыҙ, тигән фекерен күптәр, был — Медведевтың үҙ теләген ысынбарлыҡ менән бутауы, тип ҡабул итте. «ИНДЕМ» фонды президенты Георгий Сатаров, был хатта торғонлоҡ ҡына түгел, ә тарҡала башлау, тигән баһа бирҙе. Унынса, Президент сәйәси фирҡәләр еңеүе өсөн шарттарҙы ҡайҙа күрә икән — аңлашылмай.

Ләкин торғонлоҡ тураһындағы фекер Рәсәй башлығының был мөрәжәғәтендә урын алманы. Күрәһең, ниндәйҙер йоғонтоло даирәләр уны урынһыҙ тип тапты һәм уның шулайлығына Кремль етәксеһен дә ышандырҙы. Сит илдәрҙә Дмитрий Медведевтың һуңғы мөрәжәғәтен президентлыҡҡа кандидат сығышы, хатта етеш тормошта йәшәгән ил граждандарына мөрәжәғәт тип ҡабул иттеләр. Эш урындары ойоштороу, торлаҡ, хоҡуҡ һаҡлау өлкәһендәге киҫкен проблемалар, мәҫәлән, документта тейешле иғтибарға алынмаған. Быны, моғайын, мөрәжәғәттең йылы кабинеттарҙа, Рәсәйҙе бөтөнләй томанлы күҙ алдына килтергән чиновниктар тарафынан ижад ителеүе менән бәйләргә кәрәктер. Ләкин документтың йөкмәткеһе икенсе төрлө һығымта яһарға мәжбүр итә: ил башлығы үҙе етәкселек иткән ил тормошон ысынбарлығында күҙ алдына килтереп еткермәй.

Икенсе күҙлектән ҡарағанда, Дмитрий Медведев ил башлығы булараҡ ҡуйған бурыстар, мәҫәлән, үҫеп килеүсе быуынды тәрбиәләү — һәр саҡ көн үҙәгендә тороусы мәсьәлә. Эш шунда: һуңғы егерме йылда илдә был хаҡта уйланған кеше табылманы. Бөгөн бар. Тик тәрбиәселәр бар яҡлап мохтаж, осон-осҡа саҡ ялғап йәшәгән ата-әсәләр икән, ул саҡта был хәстәрлек тулы булырмы?

Был һорауға мөрәжәғәттә ысынлап та яуап юҡ.

**Мәхмүт ХУЖИН.**

*Үткән йылдың ноябрендә баш ҡалабыҙ Өфөлә «Урал батыр» эпосының яҙып алыныуына 100 йыл тулыуға арналған халыҡ-ара фәнни-ғәмәли конференция булып үтте. Мәртәбәле йыйында ғалимдарҙың йөҙгә яҡын докладлы тыңланды, уларҙа мифология, этник мәҙәниәт, «Урал батыр» эпосын башҡа телдәрҙә нәшер итеү, сәсәнлек традицияларын үҫтереү, этнолингво-фольклористика фәненең заманға ауаздаш бүтән проблемалары күтәрелде һәм байтаҡ тәҡдимдәр инделде. Атап әйткәндә, 2011 йылды «Урал батыр» йылы тип иғлан итеү, 2012 йылда эпос һәм башҡа башҡорт ҡобайырҙары буйынса халыҡ-ара конгресс уҙғарыу, М. Бурангъоловҡа һәйкәл ҡуйыу, «Башҡорт эпостары геройҙары эҙенән» исемле туристик маршрут асыу тәҡдимдәре ҡаралды.*

*«Ағиҙел» уҡыусыларын халыҡ-ара конференцияла* ***Р. Т. БИКБАЕВТЫҢ*** *сығышы менән таныштырабыҙ.*

# ХАЛЫҠТЫҢ ХӘТЕР КӨСӨ

**Рауил БИКБАЕВ,**
**Башҡортостандың халыҡ шағиры,**
**филология фәндәре докторы**

Беҙҙең барыбыҙҙы ла бөгөн бында бөйөк Урал батыр йыйҙы. Нисәмә быуаттар, нисәмә мең йылдар буйына ул үҙенең ошо изге эшен дауам итә: халҡыбыҙҙы бергә туплай, яҡты уйҙар, яҡшы теләктәр менән кешеләрҙе яҡынайта, ил хаҡындағы уртаҡ хәстәрҙәр менән ватандаштарыбыҙҙы берләштерә.

Һуңғы йылдарҙа Башҡортостанда һәм унан ситтә йәшәүсе башҡорттар араһында рухи тамырҙарыбыҙҙы тәрәнерәк барлауға – шәжәрәләребеҙҙе тергеҙеүгә, милләтебеҙҙең тарихи хәтерен яңыртыуға һәм нығытыуға иғтибар бик ныҡ көсәйҙе. Уңыштар йылдан-йыл арта бара. Ошондай эҙләнеүҙәргә йәш быуындың дәррәү ҡушылыуы айырыуса ҡыуаныслы.

Күп кенә ырыуҙарҙың тамырҙары бай һәм ҡатмарлы тарихыбыҙҙағы билдәле шәхестәргә барып тоташа. Ә бит ентекләберәк байҡаһаң, һәр башҡорттоң рухи шәжәрәһе Урал батырҙан башлана. Беҙ барыбыҙ ҙа бер тамырҙан. Ниндәй генә дәүерҙә һәм ҡайһы ғына ерҙә йәшәһәләр ҙә, барса башҡорттар – Урал батырҙың вариҫтары. Былай булыу – беҙҙең оло бәхетебеҙ, хаҡлы ғорурлығыбыҙ һәм шул уҡ ваҡытта яҙмышыбыҙҙағы ғәйәт ҙур яуаплылыҡ.

Бынан йөҙ йыл элек башҡорт халҡының рухи тарихында ғәйәт ҙур ваҡиға булған, һәм уның тарихи әһәмиәтен, шулай уҡ ҡоласын ғалимдарыбыҙҙың яңынан-яңы быуындары тәрәнерәк төшөнә бара. Эйе, 1910 йылда Ырымбурҙағы «Хөсәйениә» мәҙрәсәһенең 22 йәшлек шәкерте Мөхәмәтша Буранғолов тарафынан хәҙерге Баймаҡ районына ҡараған Иҙрис ауылы ҡурайсыһы Ғәбит сәсәндән, ошо уҡ төбәктән Бәләкәй Этҡол ауылының ҡурай һәм һүҙ оҫтаһы Хәмит уҙамандан бөйөк «Урал батыр» эпосын ҡағыҙға яҙып алыуға – теүәл бер быуат. Мөхәмәтша шәкерт аҡһаҡалдар менән тәүҙә халыҡ һанын иҫәпкә алған саҡта таныша, сөнки ул перепись барышында тәржемәсе булараҡ ҡатнаша. Һуңынан арҙаҡлы драматург, башҡорт халҡының бай фольклорын арымай-талмай йыйыусы булып таныласаҡ Мөхәмәтша Буранғолов йыйындарҙа ҡурайсылар һәм йыраусылар ярышында ал бирмәгән Ғәбит сәсән ауыҙынан 1910 – 1912 йылдарҙа йәнә «Аҡбуҙат», «Күҫәк бей», «Батырша», «Ҡараһаҡал», «Салауат» һ.б. эпик ҡомартҡыларҙы ла дәфтәренә теркәй.

Хәүефләнеп уйлап та ҡуям: әгәр 1910 йылда Буранғолов атлы зирәк егет «Урал батыр»ҙы яҙып алманиһә, халҡыбыҙ үҙ телендәге ниндәй аҫыл хазинаһын юғалтыр ине, фажиғәле хәлгә тарыр ине. Ҡаты эҙәрлекләүҙәргә дусар ителеүгә ҡарамаҫтан, халыҡ хәтерен, халыҡ фольклорын күңелдәрендә йөрөтөүсе сәсәндәр менән уларҙың ижадын өйрәнеүселәр араһында ижади бәйләнештәр, милләтебеҙҙең оло бәхетенә күрә, өҙөлмәй. Шулай итеп, егерменсе быуат башында Ғәбит Арғынбаев (1856 – 1921) үҙенең фольклор һандығын – ҡиммәтле хазинаны Мөхәмәтша Буранғоловҡа (1888 – 1966) «аса», ә Ғәбит сәсәндең үҙенә заманында данлыҡлы Ишмөхәмәт сәсән Мырҙаҡаевтан (1781 – 1878) өйрәнергә, уға иһә легендар Байыҡ Айҙар сәсән менән аралашырға, унан һабаҡ алырға насип иткән. Мәғлүм ки, Байыҡ сәсән бөйөк Салауат Юлаевтың рухи остазы булған. Илһамлы эстафета бына ошолай быуаттан быуатҡа һуҙылған ваҡыт арауығынан ғибәрәт.

Ошондай мәшһүр шәхестәрҙең яҙмышын күҙаллаһаң, йөрәкте берсә ғорурлыҡ хисе елкендерә, берсә һыҙланыу уты өтә. Егерме генә йәшлек Салауаттың танау ярпыларын йолҡоп, маңлайына һәм сикәһенә ҡуҙлы келәймә баҫҡандан һуң, аяғын-ҡулын бығаулап, мәңгелек һөргөнгә оҙаталар – шағир һәм яугир ҡырыҫ Балтик зинданында егерме биш йыл ыҙа сиккәндән һуң күҙҙәрен йома. Ирек һөйөүсе Буранбай сәсән шөкәтһеҙ Себергә олаҡтырыла. Башҡорт азаматтары һөрөлгән каторгалар һәм төрмәләр Балтик буйҙарынан алып Яҡутстандың мәңге туң ерҙәренә саҡлы һибелешкән була бит. Ғәбит сәсән 1921 йылғы аслыҡта гүргә инә.

Мөхәмәтша Буранғолов биографияһында ла хәтәр мәлдәр бихисап. Ул биш мәртәбә ҡулға алына: 1918, 1920, 1929, 1937 йылдарҙа ултырып сыға, ә һуңғы тапҡыр «халыҡ дошманы» сифатында 10 йылға лагерға ебәрелә һәм Өфөгә бары тик 1956 йылда ғына ҡайтырға рөхсәт ала.

Миңә алтмышынсы йылдарҙа Мөхәмәтша ағай менән йыш аралашырға,

яҡташымдың өйөндә булырға, үҙен дә ҡунаҡҡа саҡырырға насип итте. Сәсәндең рухи ныҡлығы, үҙенең булмышына, талантына тоғролоғо мине гел һоҡландыра торғайны. Сәсән ғүмеренең һуңғы көндәренә тиклем үҙенең әҫәрҙәре өҫтөндә эшләне, ләкин егерменсе йылдарҙа уҡ башҡорт сәхнәһен шаулатҡан атаҡлы драматургтың пьесаларына театрҙарҙа һаман юл ябыҡ булды. 75 йәше тулыу айҡанлы «Ағиҙел» журналында уның ни бары ҙур булмаған ҡобайыры ғына баҫылып сыҡты. Һөргөндән имен-аман ҡайтһа ла, илдә Хрущев тарафынан сәйәсәт бер аҙ йомшарһа ла, әҙиптең үҙ уҡыусылары, үҙ тамашасылары менән аралашыу юлдары быуылды, сөнки драмалары сәхнәләштерелмәне, әҫәрҙәре ташҡа баҫылманы.

Шуныһы: Мөхәмәтша сәсән яҙып алған «Урал батыр» үҙе лә аяныслы яҙмышҡа тарый. Донъя әһәмиәтендәге фольклор әҫәре яңы заман замандаштарыбыҙға барып етә алмай һәм фәнни тикшереүҙән дә ситтә ҡала. Бары тик 1968 йылда ғына эпос «Ағиҙел» биттәрендә баҫылып сыҡты. Мәгәр бөйөк әҫәр тексын журналда уҡыу бәхете уны яҙып алыусы Мөхәмәтша Буранғоловҡа насип итмәй, сөнки был ваҡытҡа ул инде мәрхүм була.

Һуңғы ҡырҡ йыл – быны һис арттырыуһыҙ әйтәм – «Урал батыр»ҙың тантана кисереү осоро тип һаналырға хаҡлы. Беренсенән, әҫәр башҡорт фольклорының күп томлығына индерелде. Икенсенән, эпосыбыҙ рус, инглиз, немец, төрөк, абхаз һ. б. телдәргә тәржемә ителде. Өсөнсөнән, уның мотивтары буйынса спектакль ҡуйылды, фильм төшөрөлдө. Дүртенсенән, йыл һайын ҡобайырҙы төрлө телдә яттан һөйләүсе балаларҙың һәм үҫмерҙәрҙең республика конкурсы уҙғарыла. Бишенсенән...

Иң мөһиме, 1995 йылда баш ҡалабыҙ Өфөлә «Урал батыр» эпосын яҙып алыуға 85 йыл тулыу уңайынан төрлө фәнни-мәҙәни ойошмаларҙың тәүге төбәк конференцияһы уҙғарылды. Хәҙер иһә мәшһүр ҡомартҡының ҡатмарлы эстәлеген төрлө юҫыҡта донъя фольклористикаһы күҙлегенән тикшереү уңышлы дауам итә. Башҡортостандың халыҡ сәсәненең үҙенең әҙәби һәм фәнни мираҫын яңы томдарҙа нәшер итеү ҙә ҡыуаныслы хәл. М. Буранғоловтың юбилейына арналған тантаналар уның йәнтөйәге Ырымбур өлкәһендә лә, республикабыҙ баш ҡалаһында ла, ҡайһы бер район үҙәктәрендә лә үткәрелеп тора.

Бөгөнгө халыҡ-ара конференция «Урал батыр» һәм донъя халыҡтарының рухи мираҫы» тип атала. Бындай киң ҡоласлы фәнни-ғәмәли йыйын изге маҡсаттарға әйҙәй һәм иңебеҙгә яңы бурыстар ҙа йөкмәтә.

Шуны иғтибарға алыу ҙа етә: һуңғы йылдарҙа тикшеренеүселәр «Урал батыр»ҙағы һәм донъяға танылған шумер эпосы «Гилгәмеш», шулай уҡ «Авеста», «Ригведа» кеүек мәшһүр әҫәрҙәрҙәге образдар системалары араһында бик ҡыҙыҡлы параллелдәргә юлыға, төрлө халыҡтар фольклорындағы идеялар берҙәмлеге, мотивтар уртаҡлығы күҙәтелә. Быларҙың бөтәһе лә, һис шикһеҙ, фәнни эҙләнеүҙәрҙең ҡоласын һиҙелерлек киңәйтә һәм тәрәнәйтә. Хәлбуки, ғәзиз эпосыбыҙҙа һынланыш тапҡан ҡайһы бер ҡабатланмаҫ ҡаҙаныштар, анығыраҡ әйткәндә, эпоста донъяның

философик образдарҙа сағылышы, башҡорт халҡының тормошҡа ҡарашы һәм яҙмышының эволюцияһы, халҡыбыҙ үҫешенең тарихи этаптары һ.б. мәсьәләләр ғәйәт мөһим тип иҫәпләйем.

Йәгеҙ әле, ҡобайырҙағы ваҡиғаларҙың йомғағын һүтеп ҡарайыҡ. Хикәйәт дүрт кешенең – Йәнбирҙе менән Йәнбикәнең, уларҙың улдары Шүлгән менән Уралдың көнитмештәрен һүрәтләүҙән башлана. Уларҙың донъяһы, йәғни йәшәү мөхите – бөтә тарафтан да һыу менән уратып алынған кескәйерәк утрау. Эпостың хронологик асылы һәм географик ҡиблалары ла ифрат ҡыҙыҡлы: ваҡиғалар туфан ҡалҡҡанда ҡуйыра, шул яғы менән «Урал батыр» иң боронғо донъя мифологияһы әҫәрҙәре сафына ҡарай. Артабан география байтаҡҡа киңәйә, Урал менән Шүлгәндең яҙмышы бихисап кешеләр һәм ҡәүемдәр яҙмышы менән тығыҙ бәйләнә. Геройҙар ер аҫты батшалыҡтарына төшә, йыһан киңлегендәге тереклектәр менән аралаша, һөҙөмтәлә донъяны танып белеү даирәһе лә ҙурайғандан-ҙурая. Әҙәм балаһы ҡулына суҡмар йәки таш бысаҡ тотҡан ябай һунарсынан ҡәҙимге көтөүсегә әүерелә, тимерҙән сүкелгән ҡоралға – хәнйәргә эйә була. Урал батыр Ҡатил батшаның яуыз үгеҙен еңеүгә лә ябай ғына алышта өлгәшмәй бит. Был еңеү – кешелектең үҫешендә яңы баҫҡыс, ул – кейектәрҙе эйәләштереү, йәғни кешенең малсылыҡҡа өйрәнеүе, йәмғиәт эволюцияһында яңы күтәрелеш. Батырыбыҙ арыҫлан арҡаһынан Аҡбуҙатҡа – ҡанатлы толпарға күсеп һыбайлана. Эпостағы ошондайыраҡ моменттар етерлек дәрәжәлә өйрәнелмәгән әле, минеңсә.

Тәүтормошта – дүрт кенә кешенең утһыҙ-усаҡһыҙ торлағы, ахырҙа – ойошҡан ил, тәүәккәл, булдыҡлы халыҡтың етеш тормошо. Эпоста халыҡтың үҫеш юлы бына ниндәй! Үлемһеҙлек эҙләү халыҡтың үлемһеҙлеге өсөн ғәзиз йәнтөйәктә ғәҙел эштәр атҡарыу зарурлығына, изге эштәрҙең мәңге ҡәҙере буласағына ышаныс менән тамамлана.

Шул уҡ ваҡытта йәшәү менән үлемдең сиратлашыуы бәхәсһеҙ икәнлеге хаҡында ниндәй ҡыҙыҡлы фекерҙәр менән туҡылған эпос! Әҫәрҙә ошо юҫыҡтағы аҡыллы һынамыштарҙың бөгөнгө философик ҡараштарға ауаздаш булыуы ла хайран ҡалдыра.

Милли эпосҡа эйә булыу – халыҡтың олуғ ғорурлығы һәм ҡаҙанышы, даны ул. Хатта ки, бәғзе халыҡтар боронғо ауыҙ-тел ҡомартҡыларының туҙышҡан ярсыҡтарын да һаҡларға һәм шуларҙы яңынан ҡоршарға тырыша, шуның нигеҙендә эпостарын нисек тә тергеҙергә йә иһә ҡабат яҙырға ынтыла. Ошондай нәзәкәтле эште ун туғыҙынсы быуатта Ленрот бойомға ашырҙы – уның тарафынан карелофиндарҙың «Калевала» эпосы өр-яңынан яҙылды. Ә Крейцвальд исемле ғалим эстондарҙың «Каленвипоэг» эпосын ҡабаттан ижад итте. Уларҙы, шулай итеп, үҙ милли эпостарының авторҙашы һымаҡ ололарға хаҡлыбыҙ.

«Урал батыр» иһә егерменсе быуат баштарына тере сәсәндәр башҡарыуынса төп нөсхәлә, бөтөн теүәллегендә һәм камиллығында килеп еткән. Ул кешеләр хәтерҙәренә һибелгән берәм-һәрәм юлдарҙан теҙеп тупланмаған, ә халыҡ зиһенендә, халыҡтың тере хәтерендә, тере телендә

аҫылташ рәүешендә һаҡланған. Әгәр шумер теле күптән юғалған һәм ошо телдә ижад ителгән «Гилгәмеш»те бары тик балсыҡ таҡтасыҡтарҙа ғына уҡырға мөмкин икән, башҡорт «Урал батыр»ын иһә – ихтимал ул «Гилгәмеш»тән боронораҡ та тыуғандыр – эйе, ҡобайырыбыҙҙы бөгөнгө быуын да кинәнеп уҡый, яттан һөйләй. Был факт үҙе үк башҡорт хәтеренең үҙенсәлеген – һамағының, тел-лөғәтенең ғәжәйеп ҡөҙрәтен, борон-борон замандарҙа булып уҙған көндәрҙе, ваҡиғаларҙы һүрәтләрлек һәләтен асыҡ дәлилләй.

2008 йылдың март айы аҙағында ЮНЕСКО-ның Париждағы штаб-квартираһында «Башҡортостан: Рәсәй менән 450 йыл бергә» исемендә республикабыҙ презентацияһы ҙур уңыш менән уҙҙы. Шунда Бөтөн Донъя башҡорттары ҡоролтайының башҡарма комитеты рәйесе Румил Аҙнабаев менән миңә, Эйфель башняһына күтәрелеп, данлы ҡаланың хозур күренештәренә һоҡланырға яҙҙы. Ирекһеҙҙән күңелебеҙ елкенде, 1814 йылдың мартында Парижға ингән еңеүсе рус ғәскәрҙәренең алғы сафтарында атлы башҡорт яугирҙарын да күҙ алдына баҫтырҙыҡ. Һәм бына ике быуаттай ваҡыт уҙғандан һуң атаҡлы ҡурайсыбыҙ Юлай Ғәйнетдинов ЮНЕСКО алдына ҡоролған тирмәбеҙ янында «Кутузов», «Бонапарт» марштарын һыҙҙырып ебәргәйне, олатайҙарыбыҙ походта сығарған, күңелендә һаҡлаған аһәңде зауыҡлы француз тамашасылары дәррәү алҡышланы.

«Порт-Артур» йырын иҫкә төшөрәйек. Егерменсе быуат башында тоҡанған Рус-япон һуғышында ниндәй генә халыҡтарҙың кемдәре генә ҡан ҡоймай, мәгәр нәҡ башҡорт яугирҙары ошо хәтәр алыш хаҡында йыр сығара һәм уны ана шуларҙың ейәндәре, бүләләре бөгөн дә йырлай. Ә «Шайморатов генерал» һуң? Ҡайһы халыҡ Бөйөк Ватан һуғышында үҙенең генералына арнап йыр ижад итте әле? Иң һоҡландырғаны – ул йыр әле лә йәшәй, көрәшә һәм тәрбиәләй. Һис шикһеҙ, бындай миҫалдарҙы күп килтерә алам, иң мөһиме, уларҙың һәр береһе «Урал батыр» кеүек ҡобайырҙарҙан илһам, һут алғанын билдәләмәү мөмкин түгел.

1995 йылда беҙ Нияз Мәжитов һәм Әхмәт Сөләймәнов менән өсәүләп Ҡырғыҙстанда «Манас» дастанының 1000 йыллығына арналған иҫ китмәле халыҡ-ара тантанала ҡатнаштыҡ. Байрамдың уртаһында Сыңғыҙ Айытматов йөрөнө, осрашыуҙарҙың береһендә бөйөк яҙыусы: «Манас» – беҙҙең пирамидаларыбыҙ ҙа, Микеланджелобыҙ ҙа ул» – тине. Ниндәй урынлы сағыштырыу!

«Урал батыр»ҙы башҡорттоң әлмисаҡтан яҙылған энциклопедияһы, милләттебеҙҙең хәтернамәһе, әхлаҡ кодексы тип тә икеләнмәй ололарға мөмкин. Ләкин был ғына аҙ. Эпосыбыҙ ЮНЕСКО тарафынан халыҡ-ара кимәлдә билдәләнерлек донъя гәүһәрҙәре исемлегенә индерелергә тейеш һәм ул быға һис шикһеҙ лайыҡ. Йәнә бер теләк: һөйөклө Өфөбөҙҙө йәмләп, Урал батыр майҙанын асыу хаҡында ла уйлашырға кәрәк. Майҙанда, әлбиттә, Урал һәйкәленән тыш, бөйөк сәсәндәребеҙҙең һындары ла ҡуйылырға тейеш. Амин, шулай булһын, шулай булырына ышанам.

---

# ХӘҘЕРГЕ ҒАИЛӘНЕҢ СОЦИАЛЬ-ФИЛОСОФИК НИГЕҘҘӘРЕ

Ниһайәт, беҙҙә донъяла үҙ хакимлығын урынлаштырырға ынтылған АҠШ-ҡа ҡаршы тороу өсөн ғаилә институтын нығытыу кәрәклеген аңлай башланылар. Сөнки шунһыҙ “бишенсе империя”ның ғәйәт ҙур биләмәләрен тотоп торорлоҡ граждандар тәрбиәләп булмаясаҡ. Илдә социаль йүнәлешле дәүләт ҡороуҙа ла ғаиләнең роле бик ҙур. Кешелек донъяһы тарихында ғаилә-көнкүреш мәсьәләләренә иғтибар етмәү сәбәпле тәрбиә өлкәһендә килеп тыуған етешһеҙлектәрҙең артабан йәмғиәттең социаль йөкмәткеһенә реформалар үткәреүгә кире йоғонто яһауы тураһында миҫалдар күп. Ошоларҙы иҫәпкә алып, 2008 йыл “Ғаилә йылы” тип иғлан ителгәйне.

Йәмғиәтте өйрәнеү тарихында, иң элек философияла, Ҡытайҙың бөйөк аҡыл эйәһе Конфуцийҙан башлап ғаиләнең граждандар тәрбиәләүҙәге урыны һәм роле тураһында махсус тикшеренеүҙәр үткәрелгән XX быуатҡа тиклемге ике мең ярым йыллыҡ араны үҙ эсенә алған күптәнге традициялар бар. Боронғо Грецияла, мәҫәлән, был эшмәкәрлек менән бөтә донъяға билдәле философтар Платон, Аристотель шөғөлләнгән. Уларҙың раҫлауынса, патриархаль ғаилә йәмғиәттең “күҙәнәге” булып тора. Бының менән ғалимдар, «ғаилә – йәмғиәттең төп нигеҙе», тигән фекер үткәргән. Патриархаль ғаилә, Аристотель фекеренсә,– кешеләрҙең тарихи яҡтан тәүге һәм берҙән-бер берләшмәһе.

Урта быуаттарҙа кешелек йәмғиәтендә ғаиләнең урыны һәм роленә ҡарата традицион ҡараш йәшәгән. Христиан дине тәғлимәте буйынса, ғаиләнең барлыҡҡа килеүенә һәм йәшәүенә Аллаһы Тәғәлә үҙе фатиха биргән. Христиан диненең тәғлимәттәренә таянып, был замандың дин әһелдәре, ғаиләләге татыулыҡ шәхестең үҫешенә лә йоғонто яһай, тип өйрәткән. Яңырыу һәм яңы тарих дәүерҙәрендә йәшәгән фекер эйәләре ғаиләгә социаль институт булараҡ иғтибар бүлеп, уның тәбиғәтен ир менән ҡатын араһындағы мөнәсәбәттәрҙе анализлау ярҙамында өйрәнә. Һәр яҡлап үҫешкән шәхес тәрбиәләүгә татыу ғаилә шарттарында ғына өлгәшергә мөмкин икәнлеген аңлап һәм өлгөлө ғаилә ҡорорға ҡамасаулаған сәбәптәрҙе өйрәнеп, идеаль ғаилә ҡороу буйынса үҙ тәҡдимдәрен дә әйтә. Яңырыу дәүерендә был өлкәлә айырыуса Ф. Бэкон, Г. Гоббс, Д. Юм, Ж.Ж. Руссо, Д. Локк һ.б. уңышлы эшләй. Англия философы һәм педагогы Джеймс Локкты башлыса баланы ғаиләлә тәрбиәләү проблемаһы борсоған. “Тотош халыҡтың етеш көнкүреше, – тигән ул, – балаларҙы дөрөҫ тәрбиәләүҙән тора”.

Ғаилә һәм никах проблемаларын өйрәнеүҙә немец классик философияһы вәкилдәре И. Кант, И. Фихте һәм Г. Гегелдең хеҙмәттәре айырым урын биләй. Уларҙың ижтимағи мөнәсәбәттәрҙә ғаиләнең урынын һәм ролен юғары баһалауы тураһында был хеҙмәттәрҙә ғаилә-никах мәсьәләләренә ҙур урын бирелеүе лә әйтеп тора.

Ваҡыт үтеү менән ғаилә мәсьәләһенә ҡараш та үҙгәрә. Мәҫәлән, XIX быуаттың икенсе яртыһында Чарльз Дарвиндың эволюция концепцияһына эйәреп, тарих үҫешендә никах һәм ғаилә формаларының үҙгәреүе тураһында теория ижад ителә. Был ҡараш, ғаилә тарих дауамында үҙгәреш кисереүгә ҡарамаҫтан, социаль институт булараҡ үҙ бурыстарын үтәүҙән ситләшмәй, тигән һығымта яһарға мөмкинлек бирә. Ошондай методологик ҡарашҡа нигеҙләнеп эш иткән ғалимдар араһында Шотландия философы Ф. Мак-Леннан фәндә айырыуса мөһим урын биләй. Ғаиләне йәмғиәт “күҙәнәге” булараҡ өйрәнеү барышында ул, хәҙергә патриархаттан элек матриархат булған, тигән фекергә килә. Ғаилә һәм никах мәсьәләләрен өйрәнеүҙә Л. Моргандың, философияла дидактик материализмға нигеҙ һалыусыларҙың береһе Ф. Энгельстың һ.б. хеҙмәттәре барлыҡҡа килә. Моргандың фекеренсә, “ғаилә идея”һы бер нисә баҫҡыс үтеп, эҙмә-эҙлекле үҫеш кисерә. Һәр баҫҡыстың үҙ ғаилә-никах формалары булып, һуңғыһы итеп бер ир һәм бер ҡатын (моногамия) иҫәпләнә. “Ғаиләнең, хосуси милекселектең һәм дәүләттең барлыҡҡа килеүе” тигән хеҙмәтендә Ф. Энгельс ғаиләлә ир кешенең өҫтөнлөк алыуы иҡтисади үҙенсәлектәр һәм милеккә хоҡуҡ алыу менән бәйле икәнлеген ышандырырлыҡ итеп һүрәтләй. Энгельс фекеренсә, бер ҡатынлы никахҡа күсеүҙең төп сәбәбе булып иҡтисади фактор, йәғни тупланған милекте вариҫҡа ҡалдырыу зарурлығы тора. Был маҡсатты ғәмәлгә ашырыу өсөн атай кеше милкен үҙенең законлы улына ҡалдырыуын белергә тейеш. Ә бер ҡатынлы ғаилә иһә был маҡсатты ғәмәлгә ашырыуҙы ябайлаштыра.

XIX быуатта эволюцион ҡараш менән бергә функциональ алым да ҡулланыла башлай. Яңы алым социаль феномен булараҡ төп иғтибарын ғаиләнең социаль-мәҙәни яҡтарын, шулай уҡ никах, туғанлыҡ һәм ата-әсәлек менән бәйле ошо функцияларын ғәмәлгә ашырыуға йүнәлтә. Эволюцион алымға нигеҙ һалыусы социология фәненең башында тороусыларҙың береһе Э. Дюркгейм була. Б. Малиновский ҙа үҙенең тикшеренеүҙәрендә ошо уҡ алымды ҡулланып эш итә. Улар үҙ хеҙмәттәрендә ғаилә йәмғиәттең структур-фукциональ өлөшө булараҡ социаль мөнәсәбәттәргә ылыҡтырылыу һөҙөмтәһендә үҙгәрештәр кисереүен нигеҙләй. Патриархаль ғаилә формаларын өйрәнгәндә Малиновский мәҙәни ҡиммәттәр үҙләштереү үҫештең төп нигеҙе икәнлеген асыҡлай.

Ғаилә-никах мөнәсәбәттәре Рәсәй белгестәренең, иң элек педагогика менән философтарҙың иғтибар үҙәгендә тора. XIX быуатта был өлкәлә айырыуса А.И. Герцен менән Д.И. Писарев уңышлы шөғөлләнә. Улар нигеҙҙә крәҫтиән ғаиләһе проблемаларына иғтибар итеп, хеҙмәттәрендә төп урынды ҡатын-ҡыҙҙың ғаиләләге һәм йәмғиәттәге урыны биләй. Рус философияһының идеалистик йүнәлешенә ҡараған В. Соловьев та ғаилә-көнкүреш мәсьәләләренә битарафлыҡ күрһәтмәй. Уның философия буйынса хеҙмәттәрендә ғаиләлә әсә һөйөүе, ғөмүмән, кешеләрҙә мөхәббәт проблемаһы төп эҙләнеү сығанағы булараҡ тойомлана. Икенсе күренекле рус философы экзистенциалист Н. Бердяев ғаиләнең рухи тәбиғәтен өйрәнеүгә иғтибар итә.

В. Розанов та ғаилә мәсьәләләре буйынса ҙур белгес иҫәпләнә. Айырылышыуҙарҙы ҡырҡа тыйған православие диненең тәғлимәтәренә тәүгеләрҙән булып ҡаршы сыҡҡан был шәхес никах боҙоу азатлығын “ғаиләнең сәләмәтлеген һаҡлау хаҡына” рөхсәт итеү өсөн сығыш яһай. Рус социологтары Н. Михайловский, М. Ковалевский, П. Сорокин һ.б. ғаилә мәсьәләләрен өйрәнеүгә үҙ өлөшөн индерә. XX быуатта Ватан философтары араһында И.А. Ильинды айырыуса билдәләп үтергә кәрәк. Уның фекере буйынса, “ғаилә“ кешелек мәҙәниәтенең тәүге өлөшө кешенең шәхес булараҡ социаллашеүенең беренсе баҫҡысы булып тора.

«Советса йәшәү өлгөһөн раҫлау» осоронда ғаилә-никах мөнәсәбәттәрен өйрәнеү менән яңы ҡоролоштоң дәүләт эшмәкәрҙәре А.М. Колонтай, А.В. Луначарский әүҙем шөғөлләнә. Уларҙың тәүге осорҙағы хеҙмәттәренә һәм сығыштарына

ғаилә институтына, уның проблемаларына түбәнһетеп ҡарау тойғоһо хас. Йәнәһе, ғаилә – «боронғонан ҡалған», буржуаз йәшәү ҡалдығы. Ысынлап та, Совет власының тәүге йылдарында никахҡа инеү һәм айырылышыуҙар үтә ябайлаштырылып, ир менән ҡатындың донъяуи һәм сәйәси яҡтан тиң хоҡуҡлығы иғлан ителә, ғаиләне алмаштырған альтернатив йәшәү формалары индерелә. Балаларҙы тәрбиәләү – ижтимағи, коллектив эш, тип һанала башлай. Ләкин 30-сы йылдарҙа йәмғиәттә ғаилә институтына мөнәсәбәт ҡырҡа үҙгәреп, яңынан ғаилә – йәмғиәттең мөһим өлөшө, тигән ҡараш ныҡлы урынлаша.

Был ҡараштың барлыҡҡа килеүенә В.И. Лениндың А. М. Коллонтайҙың “бер стакан һыу” теорияһын тәнҡитләп сығыш яһауы сәбәп була. Теория авторы, енси мөнәсәбәттәргә “бер стакан һыу” эскән кеүек еңел ҡарарға кәрәк, тигән фекер үткәрә. В.И. Лениндың никах һәм ғаилә буйынса 20-се йылдар башында уҡ әйткән идея-фекерҙәре артабан совет ғалимдары тарафынан үҫтерелә. Уларҙың төп йөкмәткеһе мөхәббәткә нигеҙләнгән ныҡ һәм бер ир менән бер ҡатын йәшәгән ғаиләне яҡлауға ҡайтып ҡала. Ғаиләлә балаларҙы тәрбиәләүгә совет педагогикаһы фәненә нигеҙ һалған А.С. Макаренко, В. А. Сухомлинский, 70 – 80-се йылдарҙа А.Г. Харчев, С.И. Голод, Т.М. Афанасьева, Н. Я. Соловьева, В. Д. Попова һ.б. ҙур өлөш индерә.

Ғаилә һәм никах мәсьәләләре башҡорт педагогикаһын, социологтарын, философтарын да ҡыҙыҡһындыра. Проблеманы өйрәнеүгә иң ҙур өлөш индереүселәрҙән энциклопедист, яҙыусы, драматург һәм мәғрифәтсе, СССР-ҙың Үҙәк диниә назараты мөфтөйө Ризаитдин Фәхретдиновты атарға кәрәк. Ғаилә һәм үҫеп килеүсе быуынды тәрбиәләү мәсьәләләре уның “Сәлимә”, “Әсмә” исемле повестарында ла урын алған. Ғаилә педагогикаһы һәм этикаһы буйынса Р. Фәхретдинов бер нисә дәреслек, методик хеҙмәт, популяр брошюралар нәшер итеп сығара. Улар иҫәбенә “Тәрбиәле әсә“, “Тәрбиәле атай”, “Ғаилә” кеүек хеҙмәттәрҙе индерергә мөмкин. Дөйөм алғанда, ғалимдың тәрбиә мәсьәләһенә арналған 60-лап китабы һәм брошюраһы билдәле. Совет власы йылдарында традицион башҡорт ғаиләһен өйрәнеүгә З.З. Нафиҡов, С.И. Руденко, Д.Ж. Вәлиев, Н.В. Бикбулатов, Р.Ғ. Кузеев, Ә.З. Әсфәндиәров, З.Й. Рәхмәтуллина. Ф.Ф. Фәтихова, Л. И. Нагаевалар ҙур өлөш индерҙе.

Аталған проблема башҡорт яҙыусылары һәм шағирҙарының, иң элек Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәримдең, ижадында ла киң сағылыш таба. Ғаилә шарттарында гражданин тәрбиәләүҙең этнопедагогик тәжрибәһе айырыуса халыҡ шағирының “Оҙон-оҙаҡ бала саҡ” повесында күренә. Үҙенең бала һәм үҫмер саҡтарын һүрәтләгәндә автор башҡорт милли педагогикаһының асылын асып һала. Мостай Кәрим ижадын өйрәнеүгә күп көс һалған И.И. Вәлиев раҫлауынса, “ғаилә тәрбиәһе – ысынбарлыҡ ҡына түгел, ә йәмғиәттең бер фамилия менән берләшкән өлөшөнөң йәшәү өлгөһө. Шағир фекеренсә, был йәһәттән ғаиләнең ҡатын-ҡыҙҙары – өләсәй, әсәй һәм апайҙар ҙа үҙ ролен башҡара.”

80-се йылдарҙың икенсе яртыһында башланған социаль реформалар Ватан тормошоноң рухи өлкәһенә лә үҙ йоғонтоһон яһаны. Яңы шарттарҙа дәүләткә һалышып йәшәүгә ҡоролған (патерналистик) мөнәсәбәттәрҙең тормошсанлығы мөмкин түгеллеге күренде. Бындай шарттарҙа Башҡортостан социологтары, философтары һәм педагогик йәмәғәтселек ғаиләлә балалар тәрбиәләүҙә ҡатын-ҡыҙ – әсә роленә иғтибарҙы көсәйтте. Беҙҙең республикала, тотош Рәсәйҙә ғаилә-никах мәсьәләләренә ҡағылышлы ғилми-ғәмәли конференциялар уҙғарыла, ғилми мәҡәләләр яҙыла, брошюра һәм монографиялар нәшер ителә. Йәштәрҙе үҙ аллы тормошҡа, баҙар шарттарында хеҙмәткә әҙерләү, ҡатын-ҡыҙ шөғөлө, яңы шарттарҙа ғаиләне матди яҡтан тәьмин итеү, ғаиләлә ҡатын-ҡыҙҙы ҡыйырһытыу, кире күренештәрҙе иҫкәртеү һ.б. кеүек йүнәлештәрҙә ғаиләне өйрәнеү бөгөн дә дауам итә. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, Башҡоростанда ғаиләне, унда ҡатын-ҡыҙ ролен өйрәнеү буйынса фундаменталь хеҙмәттәр әлегә юҡ.

Хәҙерге ижтимағи фәндә, ғаиләнең бурыстары ғаиләнең йәмғиәттә башҡарған функцияларында сағылыш таба, тигән ҡараш йәшәй. Был репродуктив, йәғни балалар табыу, халыҡ иҫәбен арттырыу һәм социаль-тәрбиә мәсьәләләре. Һуңғыһының нигеҙен балаларҙы ашатып-эсереү, өҫ-башын, кейем-һалым менән тәьмин итеү, көнкүреш шарттарына әҙерләү, ғаиләне матди яҡтан тәьмин итеү кеүек бурыстар тәшкил итә. Балалар табыу һәм тәрбиәләү, Платон менән Аристотель фекеренсә, – ғаиләнең иң мөһим функциялары, сөнки йәмғиәттең үҫеше тап шулар менән бәйләнгән. Көнкүреште хеҙмәттән тыш күҙ алдына килтереү мөмкин түгел, һәм был ғаилә тәрбиәһенең иң мөһим бер өлөшө булып тора. Профессор М. М. Рубинштейн фекеренсә, халыҡтың элекке тәжрибәһе һәм традициялары хеҙмәт аша ғына бирелә. Хеҙмәт, өлгө булараҡ, кешене йәшәргә өйрәтә. Барлыҡ йәмғиәт тик хеҙмәт менән йәшәгәндә, ҡул ҡаушырып ултырыу бер кемде лә биҙәмәй.

Хәҙерге шарттарҙа ғаиләнең социаль роле төҫһөҙләнә. Бестужев-Лада был хаҡта түбәндәгеләрҙе яҙа: “Ата-әсәләр балалар тәрбиәләүҙе ауыр бурыс, кәрәкмәгән мәшәҡәт кеүек ҡабул итә. Был ата йәки әсәнең ғаилә шарттарындағы хеҙмәтен балалар өсөн йыраҡ булған завод йәки фабрикаға күсереү арҡаһында ғаиләлә хеҙмәт һәм тәрбиәнең айырымланыуы арҡаһында килеп сыға”. Әйтергә кәрәк, никах ғаилә ҡороуға йүнәлеш биргән ғөрөф-ғәҙәттәр һәм үҙ-үҙеңде тотоу өлгөләре быуаттар буйы ата-әсәләрҙән балаларға бирелә килгән. Ул саҡтарҙа ата-әсәләр өсөн телевидение һәм башҡа матбуғат саралары кеүек үҙенсәлекле “конкуренттар” булмаған. Ғаилә бергәләп эшләгән, ял иткән, ололар һүҙе, абруйы бәләкәйҙәр өсөн закон төҫөн алған. Ата-әсәһен һанламағандарға тирә-йүндәге кешеләрҙең ҡәһәре ябырылған. Бер һүҙ менән әйткәндә, йәштәргә тәрбиә хеҙмәт шарттарында бирелгән. XIX быуаттың икенсе яртыһында Рәсәйҙә традицион ауыл тормошонан ҡала тормошона күсеү, дөйөм алғанда, тамамлана. Уның үҙ проблемалары, айырыуса йәш быуынды тәрбиәләү өлкәһендә, килеп тыуа. Уҙған быуаттың һуңғы ун йыллығында Рәсәй яңы сифатҡа күскәндә, проблемалар айырыуса киҫкенләшә. 60 – 70-се йылдарҙа башланған ғаилә тарҡалыу процесы көсәйә, йәштәрҙе үҙ ғаиләһен булдырыуға өйрәткән ата-әсә ғаиләһе социаль институт итеп ҡабул ителмәй. Хәҙерге ата-әсә ғаиләһе балаларҙы, айырыуса үҫмерҙәрҙе тәрбиәләү бурысын атҡарыуға һәләтһеҙ. Егетлек ҡорона еткән йәштәр иһә ата-әсәһен һанламай. “Быуындар бәрелеше” йылдан-йыл киҫкенләшеп, ата-әсәләр баррикаданың – бер, ә йәштәр икенсе яғында булып сыҡты. Йәштәрҙең йәмғиәттә әлегә өҫтөнлөк иткән “ололар мәҙәниәте”нә ҡаршы “контр мәҙәниәте” тап шул хаҡта һөйләй. Бындай шарттарҙа ҡайҙа ул “ғаиләнең тәрбиә функцияһы” тураһында һүҙ алып барыу! Проблеманан сығыу өсөн хәҙерге ғаиләне элекке кеүек етештереү-хеҙмәт мөнәсәбәттәренә күсереп, тәрбиәүисоциаль функцияһын ҡайтарырға тырышыу эшкә ашмаҫлыҡ хыял кеүек ҡабул ителеүгә ҡарамаҫтан, башҡа юл юҡ. Технологиялар тулыһынса яңырған компьютер быуатында бындай хеҙмәттең көндәлеккә әүерелеп, йәш быуындың аңына һеңеп ҡалырлыҡ булһын. Хәҙерге ғаиләнең төп бурысы, минеңсә, шуға ҡайтып ҡала. Яңы заман шарттарында социалләштереү институты булараҡ ижтимағи институттарҙың әһәмиәте арта. Тәрбиә идара итеүгә мохтаж ижтимағи һәм дәүләт эшмәкәрлегенә әүерелә. Әйткәндәй, белгестәр араһында был социаль күренешкә ҡарата берҙәм фекер юҡ. Ҡайһы берәүҙәр хатта ғаиләләге бөгөнгө күренеште “алдынғы” тип тә баһаламаҡсы. Имеш, ул ижади ҡарашлы, юғары әҙерлекле шәхес тәрбиәләүгә булышлыҡ итә. Ләкин хәҙерге йәштәрҙә кешелек йәмғиәтенә борон-борондан хас игелек, миһырбанлыҡ кеүек сифаттарҙың юғала барыуы менән килешеп булмай.

Бындай сифаттар, әлбиттә, иң элек ғаиләлә тәрбиәләнә. Йәш быуын үҙ ғаиләһендәге эске мөнәсәбәттәр, әхлаҡи-психологик климатҡа ҡарап, ошондай сифаттарҙы үҙендә булдыра йәки кире осраҡта ул сифаттарҙан бөтөнләй мәхрүм ҡала.

Быны ғаиләнең күп быуатлыҡ тарихы кире ҡаҡҡыһыҙ итеп дәлилләй. Ыңғай сифаттарҙы тәрбиәләү башҡа социаль институттар өсөн ауырыраҡ. Яҡшы әхлаҡи-психологик климаттың тик тотороҡло ғаиләлә генә һаҡланыуы мәғлүм. Шулай уҡ тулы булмаған (атайһыҙ йәки әсәйһеҙ) ғаиләлә үҫкән балаларҙа ла кәрәкле ыңғай сифаттарҙың тәрбиәләнеп еткерелмәүе күҙәтелә. Йәмғиәттең башҡа институттарында был етешһеҙлекте бөтөрөү мөмкинлеге юҡ, шуға күрә тулы ғаиләләрҙе һаҡлау – бөгөн иң көн үҙәк проблема.

Хәҙерге шарттарҙа социаллләштереү ҡатмарлы һәм ҡаршылыҡлы. Һуңғы ун йылда Рәсәйҙә тәрбиәне ойоштороу менән бәйле төрлө фекерҙәр араһында конфликтлы хәлдәр ҙә тыуа, һәм был йәш быуынға үҙ йоғонтоһон яһамай ҡалмай. Социологик тикшеренеүҙәрҙән күренеүенсә, үҫмерҙәрҙең һәр етенсеһен ата-әсәләр менән аңлашылмаусанлыҡ борсой, балаларҙың 60 процентҡа яҡыны хатта ата-әсәләре менән ҡаты бәхәскә инә. Балалары менән бәхәс сыҡҡанда ололарҙың 61 проценты етди һөйләшеү ойоштора, 19-ы нимәнәндер мәхрүм итә, ә 6 проценты иһә ҡул күтәрә. Ғаиләлә унын ағзаларын бергә туплаған функциональ ҡиммәттәр булыуы уны тупларға ярҙам итә. Былдай ҡиммәттәргә, мәҫәлән, “Беҙ – татыу ғаилә”, “Беҙ яҡшы белем алырға ынтылабыҙ”, “Йәмғиәткә һәм дәүләткә файҙа килтергебеҙ килә” кеүектәрҙе индерергә мөмкин. Йәмғиәт өсөн файҙалы йәш быуындың барлыҡҡа килеүе өсөн ғаиләлә бына ошондай ҡиммәттәрҙең өҫтөнлөк алыуы кәрәк. Рәсәй йәштәре араһында ундай сифаттарға эйә булыусылар күренәме? Социологик тикшеренеүҙәр һөҙөмтәләрен файҙаланып йыл һайын сығарылған “Рәсәй Федерацияһында балаларҙың хәле” тигән докладтан күренеүенсә, үҫмерҙәр араһында ҡиммәттәр түбәндәгесә: 66 проценты татыу ғаиләле булырға, 38-е яратҡан һөнәр, 34 – күңел ятҡан эш, 31,5 – етеш йәшәргә, 24,5 – кешеләргә игелек ҡылырға теләй. Балаларҙың өстән бер өлөшө ата- әсәләренең ғаилә тормошон өлгө итеп ҡуя. Йәш быуындың өстән ике өлөшөнөң ғаиләгә ыңғай мөнәсәбәте, әлбиттә, оптимистик тойғолар уята һәм был күренеш йәштәрҙең артабанғы тормошонда ғаиләнең ҙур роль уйнауын аңлауын күрһәтә.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, һуңғы йылдарҙа үткәрелгән социологик тикшеренеүҙәрҙән күренеүенсә, ата-әсәләрҙең балалары менән аралашыуы һирәгәйә бара. 2005 йылда Өфөлә 2700 юғары класс уҡыусылары араһында үткәрелгән тикшеренеү һөҙөмтәләре буйынса, ғаиләләрҙең 5 процентында ғына ата-әсәләр балалары менән өҫтәл уйындары (шашка, шахмат, теннис, лото һ.б.) уйнай. 16 проценты иһә былдай уйындарҙы бөтөнләй ойоштормай. Ата-әсәләрҙең 52 проценты балалары менән саңғы йәки конькиҙа шыуа, 14 проценты – юҡ. Балаларҙың 5 проценты ғына йәйге каникулын ата-әсәһе менән үткәрә, 33 проценты ата-әсәһе менән ҡайҙа булһа ла бара. 4 процентына иһә былдай мөмкинлек бер ҡасан да эләкмәгән. Шул тиклем үк уҡыусыларҙың ата-әсәһе отпуск ваҡытында бер ҡайҙа ла бармай. Ата-әсәләр менән балалар араһында бәйләнештең йомшаҡлығын шул да күрһәтә: үҫмерҙәрҙең 14 проценты килеп тыуған проблемаларҙы үҙ аллы, ә 51 проценты дуҫтары ярҙамында хәл итә.

Илебеҙҙә татыу ғаиләләрҙең күберәк булыуы – көнүҙәк мәсьәлә, әммә уға өлгәшеү бик ҡатмарлы. Быға социаль тормоштоң барлыҡ өлкәләренә лә үтеп ингән “демократик” реформалар һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән кәртәләр етди ҡамасаулай. Етештереү сараларына хосуси милекселеккә таянған баҙар иҡтисады беҙ быға белмәгән проблемалар килтереп тыуҙырҙы. Бөгөн дәүләткә өмөтләнергә түгел, ә үҙ көсөңә таянып эш итергә кәрәк. Был хәл ватандаштарыбыҙҙың байтаҡ өлөшөндә өмөтһөҙлөккә бирелеү кәйефтәре тыуҙырҙы. Уларҙы ҡиммәтселек, аҡсаға мохтажлыҡ һәм реформаның башҡа күңелһеҙ мәшәҡәттәре айырыуса борсой. Яңы шарттарҙа йәш быуын үҙенә урынды тиҙерәк таба, ололарҙың үткән Совет тормошон һағыныу кеүек тойғоһон һирәк уртаҡлаша. Әхлаҡ, енестәр араһында мөнәсәбәт, ғәҙеллек һәм ғәҙелһеҙлек мәсьәләләрендә иһә төрлө быуындар араһында ҡапма-ҡаршылыҡлы ҡараштар урын алған.

Ғаиләгә килгәндә иһә, йәш быуын менән ололар араһында төпһөҙ бушлыҡ күҙәтелә.

Йәштәрҙең донъяға ҡарашы күпселек осраҡта Көнбайыш мәҙәниәтен ҡабатларға, уларға оҡшарға тырышыу һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килә. Ата-әсәләре йүнле тәрбиә бирмәгән балаларҙың киләсәктә ата-әсәләре тормошон ҡабатлаясағы – иң хәүефлеһе. Хәҙерге ваҡытта илебеҙҙә ғаиләләрҙең көнкүреше көслө кризис кисерә. Ирҙәр менән ҡатындарҙың айырылышыуы, мәҫәлән, йылдан-йыл арта. 1898 йылда 1000 никахлы пар араһында айырылышыу 0,06, 1913 йылда – 0,15, 1926 – 2, 7, булһа, 1989 йылда иһә 14,1-гә еткән. Статистарҙың мәғлүмәттәре буйынса, хәҙер 1000 никахтың 800-ө (Башҡортостанда – һәр икенсеһе) тарҡала. Балаларҙың атайһыҙ йәки әсәйһеҙ тәрбиә алыуы киләсәк быуындарҙа кире сағылыш табасағы шик түгел. Социолог З.Ф. Мөхәмәҙиева үткәргән тикшеренеүҙәр буйынса республикала 14-16 йәшлек үҫмер ҡыҙҙарҙың 64 проценты алкоголле эсемлектәр ҡуллана, ә 18 йәшлек һәм унан өлкәндәренең 17 проценты йыш эсә. Наркотик һынап ҡарағандарҙың 24 проценты быны ҡыҙыҡ күреп ҡулланыуын әйткән.

Фәхишәлек һәм енәйәтселектән йәмғиәт айырыуса ҙур зыян күрә. Социаль тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашҡан ҡыҙҙарҙың 20 проценты “Хоҡуҡ боҙоуҙа ҡатнаштығыҙмы?” тигән һорауға ыңғай яуап биргән. Был ҡыҙҙарҙың байтаҡ өлөшө ғаилә ҡороуҙан мәхрүм булып, кейәүгә сыға ҡалһа ла, оҙаҡ тора аласағы шикле. Бындай күренеш демографик хәлгә кире йоғонто яһаясаҡ. Рәсәйҙә ғаиләле булырға ынтылыш кәмей, 28 йәшкә тиклемгеләрҙең өстән бер өлөшө йә кейәүгә сыҡмаған, йә өйләнмәгән. 30 йәшкә тиклемгеләр араһында балаһы булғандар яртылаш кәмене. Күп ғаиләләрҙә балалар берәү генә. Никахҡа инмәй генә бала табыусы ҡатындар арта. Ғаиләләге бер генә баланың эгоист, холҡһоҙ булып үҫәсәген фаразлау кәрәкмәй. Атайһыҙ үҫкән балалар ҙа тейешле тәрбиәнән мәхрүм. АҠШ тикшереүсеһе М. Мид фекеренсә, “кешегә атайлыҡ – социаль ҡаҙаныш”, һәм был уны хайуандарҙан айырып торған билдә. Рәсәй социологы М.А. Титова ла “атай ролен башҡарыу – символик зарурлыҡ законының сағылышы” тип иҫәпләй. Тимәк, ғаилә – закон һәм уға кеше үҙ ихтыярын буйһондорорға мәжбүр.

Күп быуаттар буйы атай ғаиләне тәьмин итеүҙә хәл иткес роль башҡарған. XX быуат аҙаҡтарында ҡатын-ҡыҙ үҙен һәм балаларын үҙ аллы тәьмин итеү мөмкинлектәренә эйә булды. Тәү ҡарашҡа ғаилә ир-атһыҙ ҙа йәшәй ала кеүек. Әммә бер ниндәй социаль институт та атайҙы алмаштыра алмай. Был тезисты раҫлау өсөн миҫалдарҙы күп килтерергә булыр ине. Йәштәрҙең ғаилә ҡororға ынтылмауы матди мохтажлыҡ, торлаҡ етешмәү h.б. сәбәптәр менән бәйле. Ә бит ғаиләнең хәле ыңғай яҡҡа үҙгәрмәй тороп, уңышлы тәрбиә биреүгә лә өмөтләнеү урынһыҙ. Ҡыҙғаныска ҡаршы, ғаиләләрҙә “әхлаҡи-рухи фәҡирлек” өҫтөнлөк ала. Өфөнөң Дим районында уҙғарылған тикшеренеүҙәрҙән күренеүенсә, ата-әсәләрҙең 25 проценты әхлаҡ тураһында төплө фекер йөрөтөргә лә һәләтһеҙ. Ғаиләләрҙең яртыһында, әхлаҡи тәрбиә менән уҡытыусылар, балалар баҡсалары тәрбиәселәре шөғөлләнергә бурыслы, тигән ҡараш урын алған.

Үкенескә ҡаршы, ғаилә тарҡалыу процесы кисерә, һәм был киләсәктә лә дауам итәсәк. Америка ғалимы Д. Попеное, Рәсәй социологы И.А. Антонов быны дәлилдәр менән раҫларға тырышҡан. Улар фекеренсә, үҙ-үҙенде ғаиләнең бер өлөшө итеп күрергә тырышыу индивидуализм ҡиммәттәре менән алмашына, һәм был ғаиләнең юҡҡа сығыуы тураһында һөйләй. Әлбиттә, был күренештәрҙе туҡтатыу зарурлығы шик тыуҙырмай. Дәүләт һәм йәмғиәт был абруйлы бурысты башҡарып сығырға теләк белдерер, тип ышанғы килә.

**Миҙхәт САҘРЫЕВ,**
**Башҡорт дәүләт педагогия**
**университеты профессоры.**

# АҒИҘЕЛ БУЙЛАП ТӨШКӘНДӘ

– Венер Ғәзизович, һеҙҙе кадрҙар бүлегенә саҡырталар. – Операция залынан сыҡҡанда мине кафедра лаборанты шундай һүҙҙәр менән ҡаршы алды.

Ул саҡта минең доцент ставкаһы ике тапҡырға кәметелеп, үҙеңде профессор вазифаһын башҡарыусы итеп ҡуйғайнылар. Табиптың эш хаҡы таҡы-тоҡо: айына ике йөҙ доллар самаһы ғына. Институт тамамлағандарҙың, училищенан һуңғыларҙың да 80 проценты һайлаған һөнәре буйынса эшләмәй. Сөнки профессор, кафедра мөдире, хирургия буйынса юғары әҙерлекле белгес Мәскәүҙәге “Газпром“ идаралығындағы иҙән йыуыусыныҡы хәтлем генә эш хаҡы менән ҡәнәғәтләнергә мәжбүр. Ә һиңә, хөрмәтле медицина фәндәре докторы, профессор вазифаһын башҡарыусы баҫҡысын үтмәйенсә, профессор дәрәжәһе ғүмерҙә лә тәтемәйәсәк! Иҫәрҙәр йортондағылай йәшәйбеҙ инде һаман да.

Кадрҙар бүлегенә саҡырыу ике айлыҡ отпуск башланыр алдынан булғайны. Иреҡһеҙҙән, ялымды нисегерәк ойоштороу тураһында уйлана башланым. Башыма ниндәй уй төштө, беләһегеҙме? Сәйәхәт, йылғалар буйлап ағып төшөүҙән ҡыҙыҡлыраҡ тағы ни булһын!

Чусовая, Әй, Йүрүҙән, Инйәр, Еҙем йылғаларының арҡырыһын-буйын гиҙҙем, һәм, әлбиттә, муйынына йөҙ метрлыҡ бетон муйынсаҡ кейҙерелеп салҡан һалынған Ағиҙел һылыуҡайҙы ла айҡап сығылды. Йомағужа һыуһаҡлағысы төҙөү кеүек иҙелеүҙән ҡотҡармаған өсөн башҡорттарға ғына түгел, бүтән халыҡтарға ла быуаттар буйы рәнйей кеүек ул. Илһам сығанағы, риүәйәттәрҙә ҡалған, йырҙарҙа йырланған, бихисап картиналарҙа һүрәтләнгән Ағиҙел! Айҙағы көйәнтәле ҡыҙҙай, меңәр йылдар буйы Башҡортостан халҡына кәләш тә, әсәй ҙә, туйындырыусы ла.

Әммә бөгөнгө Ағиҙелде һүрәтләргә шағирҙың да, сәсәндең дә, тәбиғәт һөйөүселәрҙең дә теле бармаҫ. Ул хәҙер эргәһенә меңәрләгән ғаиләләрҙе, йырлы-бейеүле, шау-шыулы төркөмдәрҙе, пионер лагерҙарын йыймай. Бөгөн уның матур, таҙа ярҙары, туғайҙары, ялтыр ташлы, алтынһыу ҡомдары ҡаялар уртаһына саҡлы һыуға күмелгән. Һыуһаҡлағыс ағыуҙай йәшел төҫтәге бармаҡ ҡалынлығы планктон менән ҡапланған. Иң мөһиме, Бөрйән районындағы Ырғыҙлы ауылынан быуаға саҡлы – ә был һикһән саҡрым самаһы – палатка ҡуйыу түгел, сәй ҡайнатып эсеү өсөн дә урын юҡ.

Ҡыҙыныр ҡомлоҡтары ғынамы, йылғаның ҡабатланмаҫ фаунаһы, үҫемлектәре, донъяла һирәк осраған бөжәк-күбәләктәре лә юҡҡа сыҡты. Һыуһаҡлағыс төҙөр алдынан ғалим-биологтар, геологтар уны туҡтатырға, проектсыларҙы аҡылға килергә өндәп маташты ла, тик юҡҡа ғына. Фәндә лә, тәбиғәттә лә юғалтыу кисереүҙе ниндәйҙер сәскә, серәкәйҙәрҙе юҡ итеү кеүек күреп тыңламанылар. Республиканың үҫеш стратегияһын аңламайһығыҙ, йәнәһе. Быуанан йөҙ саҡрым түбәндә Ағиҙел бысраҡ һыу йыйылған канауға әйләнгән. Һыуһаҡлағыс

төбөндә – серегән ағас-ҡыуаҡтар, үлән һыу аҫтын ҡуйы, тығыҙ ҡалдыҡтар менән ҡаплаған. Улар йылғаның тәбиғи соҡорҙарын күмеп, меңәрләгән ылымыҡтар үҫеп сығыуына булышлыҡ иткән. Билдәле, ағым һыуға ла, балыҡтарға ла урын юҡ. Ҡайһы ваҡыт яр һаҫыҡ йәшел масса менән ҡаплана ла быуанан ағып сыҡҡан һыу йылынып та өлгөрмәй. Һаулығына зыян килеүҙән ҡурҡмағандар унда өс – биш минут ҡына тора ала. Өшөп, яман еҫкә түҙә алмай, сығып киткәнеңде һиҙмәй ҙә ҡалаһың. Шулай, Ағиҙел ярҙары хәҙер ҡунаҡсыл түгел.

Төҙөлөш етәкселәренең дәлиле ошондай: Күмертау, Мәләүез, Салауат, Стәрлетамаҡ, Ишембай ҡалалары 100 саҡрымдай ғына арала ятҡас, һыу етешмәүе сәнәғәт предприятиеларының эшен тотҡарлай, халыҡты ла йонсота. Әммә бер кем дә Ағиҙелдең тәбиғи һыуһаҡлағыс булыуын иҫкә алмай: һәр ике-өс саҡрым һайын – тәрәнлеге һигеҙ, киңлеге 50 – 70 метрға еткән, балығы мыжғып торған (ау менән бер юлы бишәр тонна тотҡандар) ятыуҙар. Ҡасандыр бында дүрт метр тәрәнлеккә саҡлы таштарҙы ғына түгел, ташбаш, алабуғаларҙы ла асыҡ күрергә мөмкин булған. Ағиҙел Белоретҡа саҡлы караптар йөҙөрлөк ине, унан металл тейәлгән баржалар аҡты, ә Стәрлетамаҡтан барып тоҙ алыу өсөн үҙйөрөшлө баржалар булды. Ағиҙелдең шишмәләй саф һыуын исрафламай ғына тотонғанда, бөгөн дә барыбыҙға ла етер ине. Кешегә тәүлегенә 200 литр һыу етә, тип кем уйлап сығарҙы икән? Хатта сит илдән килеүселәр, беҙҙең һыуҙы йәлләп, үҙҙәре менән раковина өсөн махсус бөкө йөрөтә. Иртән йыуынырға ике литрға ҡәҙәр һыу тотоноусылар хәҙер донъя буйлап эсәр һыу эҙләргә мәжбүр. Шундай көн килер: һыу нефттән дә ҡиммәтерәккә төшәсәк. Әммә был байлыҡ ике илдә: Канаданың Бөйөк күлдәре һәм үҙебеҙҙең изге Байкалда ғына булыр. Илле йыл да үтмәҫ, Европаға, Америкаға ошо илдәрҙән танкер, эшелондарға тейәп эсәр һыу ташыясаҡтар. Был хазинаны, бар тереклектең йәшәү нигеҙен тәләфләү (нефтһеҙ ғүмер итеп була, ә һыуһыҙ?) планета үлеменең башы булып тора. Шуны аңлағанлыҡтан, Рәсәйҙән башҡа бөтә цивилизациялы донъяла һыуға “Һеҙ“ тип өндәшәләр. Европала бөтә нәмә аҡыллы уйланылған – һыу ҡулланған завод йә фабрика төҙөгәң килә икән, проектлау ваҡытында власть бер генә шарт ҡуя: һыуҙы үҙеңдең ҡалдыҡтарыңдан бер нисә метр түбәнерәк алаһың, йәғни нимә ҡулланғанһың – шуны эсәһең. Шуға күрә, һыу таҙартыу ҡоролмаһы завод йә фабрика төҙөүгә киткән сығымдарҙың яртыһына тура килә. Директорҙың эш көнө крандан алынған, таҙартылған, ҡулланылған бер стакан һыу эсеүҙән башланып китә.

Йомағужа һыуһаҡлағысы Ағиҙелдең 1940 йылдарҙа уҡ башланған оҙайлы, аҡрын үлемен ахырына еткереп ҡуйҙы. Һуғыш, емереклек, аслыҡ арҡаһында Башҡортостан урмандарын ошо йылға аша ағыҙып сығарып, фашисты еңер өсөн бөтә илгә таратырға мәжбүр булалар. Меңәрләгән кешеләр бик ауыр шарттарҙа бүрәнә әҙерләп, ҡышҡы һыуыҡтарҙа ла тубыҡтан һыу кисеп уны Ағиҙелгә алып төшә һәм багорҙар менән оҙатып ебәрә.

Һалсы! Был һүҙ ҡара көҙгә саҡлы һалда, балагандарҙа йөрөп төрлө сирҙәр эләктергән, ҡайһы саҡта хәлдән тайып, ярты юлда ауып та ҡалған (улар урынына аслыҡтан үлмәҫ өсөн бер ус бойҙай урлап тотолған төрмә тотҡондарын ебәрәләр) өсөн ҡарғыш кеүек яңғырай ине.

Бәлә кешеләргә генә түгел, Ағиҙелгә лә ҡағылды. Йылғаға, ҡарағайҙан тыш, имәне, уҫағы, ҡайыны ла ташланды. Ә улар бер нисә саҡрым ғына аға ла, һыу һеңдереп, бата һәм һыуҙы тулыландырып торған меңәрләгән шишмәләрҙе күмә. Йылға яңы үҙән йыра, ваҡыт үтә килә, уныһы ла ағас менән тула. Әгәр илле йыл элек 5–10 саҡрым һайын атлап сығырлыҡ кисеүҙәр осрап торһа, бөгөн бөтә

йылға бирҙәм, аҙ һыулы кисеү һымаҡ ҡына булып ҡалған. Ағиҙел бер туҡтамай Камаға табан аға. Ул нисек барыбыҙға ла етһен инде?

Иманым камил, киләһе мең йыллыҡтарҙа Белореттан Стәрлетамаҡҡа саҡлы антрацит, йәғни иң ҡиммәтле ташкүмер сығанағы барлыҡҡа киләсәк! Һыуҙа бешеккән былдай ағас хаҡын төҙөүселәр ҙә, ағас эшкәртеүселәр ҙа яҡшы белә. Бөтә Ағиҙел үҙәнен таҙартыу, шишмә, ятыуҙарҙы асыу, йылғаны тағы тәбиғи һыуһаҡлағысҡа әйләндереү урынына Нөгөш һыуһаҡлағысын яһанылар ҙа ҡуйҙылар.

Мин – Ағиҙел балаһы, уның матурлығын бар бөтөнлөгөндә күреп өлгөргән бәхетлеләрҙең береһе. Ҡап уртаһында торған килеш таҙа һыуын эйелеп һемереү, аяҡты ҡытыҡлаған балыҡтары… Бигерәк тә ҡояш байығандан һуң ярға яҡын килергә хәүефләнә инек: ҙур балыҡтар, шаптырлап, ҡорбаны артынан бер туҡтауһыҙ һыу өҫтөнә һикерә. Йылға крокодилдар менән тулғанмы ни! Ни бары 50 йыл үтте, йылғабыҙ, кешеләрҙән рәнйетелеп, бахыр хәленә төштө.

Хәйер, кадрҙар бүлегенә саҡыртып, эш хаҡымды ике тапҡырға кәметкәндәре өсөн борсолмайым – үҙемә яңы шөғөл таптым. Биштәремә кәрәкле әйберҙәрҙе тултырып, ике урынлыҡ резина кәмәмде алдым да, АН-2 самолетына ултырып, Бөрйән районы үҙәге Иҫке Собханғолға остом. Унан тыуған ауылым Томансыға (Мәләүез районы – **В. С.**) саҡлы йылға буйлап ағып төштөм. Ә иптәштәремдең кемеһелер машинала, кемеһелер һуңғараҡ самолетта килергә тейеш ине. Тәүгеләрҙән булып, Мораҡ һәм Ырғыҙлы ауылдары аша, тоғро дуҫым Әмир килеп етте. Беҙ уның менән бала саҡтан таныш. Тәүге тапҡыр мин уны үҙем йөрөгән мәктәпкә яҡын ғына колхоздың ырҙын табағында күрҙем. Нәҙек муйынлы, ҡылған сәсле малайҙың төрлө ауырлыҡтағы герҙар менән эш итә алыуына һоҡланып ҡарай торғайным. Бәләкәйҙән ауыр эш башҡарып сыныҡҡанлығы күренеп тора. Уға бүрәнә ҡырҡырға, Ағиҙел буйлап һал ағыҙырға, утын ташып ярырға, йәй буйы бесән әҙерләргә, берҙән-бер һыйырҙарын көнө буйы көтөргә тура килә. Ун дүрт йәшендә Әмир ятағы ла, спорт комплекстары ла булмаған физкультура техникумына уҡырға инә. Шуға күрә мансардаларҙың иң арзан урындарында, коридорҙарҙа ҡунып йөрөргә мәжбүр була. Ғаиләнән ярҙам булмағас, техникум стипендияһына өҫтәмә булһын тип, профессор, артист кеүектәргә бала саҡтан үҙегенә үткән эш – утын әҙерләп бирә. Шулай тамаҡ туйҙыра ул.

Минең хеҙмәт кенәгәмдә ике генә яҙыу – Сибай ҡала дауаханаһы һәм Башҡорт дәүләт медицина институты, ә дуҫымдыҡы иһә берәү генә: Күмертау таумеханика техникумы! Ул – буласаҡ генералдарҙы ла, хакимиәт башлыҡтарын, ҙур-ҙур завод директорҙарын да, сенаторҙар, Дәүләт Думаһы ағзаларын да, төрлө кимәлдәге министрҙарҙы ла уҡытҡан кеше. Ҡатыны Зинаида Матвеевна (ул да ғүмер буйы техникумда фельдшер булды) менән ике бала тәрбиәләп, уларға табип һөнәренә эйә булырға ярҙам иткәндәр. Күмертау ҡалаһының иң абруйлы кешеләренең береһе тип аллеялағы таҡтаға Әмирҙең фотоһүрәтен дә элеп ҡуйғандар. Шуныһы ҡыҙыҡ: 50 йәшендә педагогия университетына ситтән тороп уҡырға инде лә 55-ен тултырғанда уны тамамлап та ҡуйҙы. Бер нәмә ғәжәпләндерә: спорттың күп төрҙәрендә (гимнастика, ауыр атлетика, көрәш буйынса кандидат) уңыштарға иреште, әммә береһе буйынса ла ныҡлы шөғөлләнеп, СССР-ҙың спорт мастеры нормаһын үтәмәне! Бының да сере барҙыр: Козьма Прутков әйтмешләй, тар махсуслашыу флюс, йәғни һыҙлаған теш кеүек, тик бер яҡҡа ғына киңәйә, ә тау техникумы – физик культура техникумы йә берәй спорт клубы түгел, уҡыусыларының һәр төрлө ҡыҙыҡһыныуҙары уны күп

яҡлы булырға мәжбүр итә. Саңғыһын, еңел атлетикаһын, боксын да камил белергә бурыслыһың.

Бына шундай кеше килеп ҡушылды минең компанияға. Беҙ аҙыҡ-түлек әҙерләп, туғандарға бесән сабырға ярҙам иткеләгәнсе, ун бер йәшлек ҡустыһын эйәртеп, Стәрлетамаҡтан филармонияның художество етәксеһе Фәйзрахман килеп төштө. Ысын мәғәнәһендә үҙ эшенең оҫтаһы, тыумыштан артист, йырсы, музыкант ул. Нимәгә тотонһа ла илһамланып башҡара, унын хатта балыҡ тотоу ҡоралдары ла бүтәндәрҙекенә оҡшамаған. Ҡыуалы еңел, нәҙек, ҡармаҡтары – ике ырғаҡлы. Кәмәһе һәр ваҡыт тәртиптә, тальк һибеүле. Фәйзрахман электрониканы ярата. Тәүгеләрҙән булып диктофон, магнитофон, һирәк осраған телевизорҙы таба ла һүтеп, киренән йыя, боҙолһа, үҙе йүнәтә. Башҡортостандың сәнғәт әһелдәре тураһында әллә күпме мәрәкә хәлдәр белә, тәфсирләп, артистарса килештереп һөйләй. Ләкин кемде булһа ла яманлап телгә алғанын хәтерләмәйбеҙ. Иптәштәренең "йомшаҡ" яҡтарына юмор менән ҡарай белә Фәйзрахман.

Унын ғаиләһе лә миңә яҡшы таныш. Аталары Абдрахман ағай һуғышҡа китеп, 1941 йылда уҡ яу яланында ятып ҡалғас, өс малай нужаның әсе һурпаһын бергәләп эсә. Асығыу, туңыу, ҡыҙылсанан саҡ исән ҡалыу… Был сирҙән ауыл һайын көнөнә бер нисә бала үлеп торған. Яҙ етеүе малайҙарға ғына түгел, берҙән-бер һыйырға ла оло өмөт сығанағы була. Аяғында саҡ баҫып торған мал сайҡала-сайҡала яланға сыға ла бер-ике аҙнанан шәбәйеп тә китә. Малайҙар ҙа, яҙғы витаминдарға туйынып, үлемдән ҡотолоп ҡала.

Аллаһы Тәғәлә балаларҙы тағы ла бер – тупраҡта ҡышлаған башаҡ ашап үлеүҙән ҡотҡара. Юғары зат был бәләнән мине лә араланы. Күрше ауылда йәшәгән инәйемдәргә бер көн алдараҡ барған булһам, башаҡ ононан бешерелгән икмәк ашап мин дә яҡты донья менән бәхилләшер инем. Ике туған ҡустыларым тап шул арҡала теге донъяға китеп барҙы. Аҙаҡ, мединститутта уҡығанда, агранулоцитар ангинаны ныҡлап өйрәндем һәм айышына төшөндөм.

Көҙгө уңышты йыйып алғандан һуң балалар, әбей-һәбей баҫыуға башаҡ сүпләргә сыға торғайны. Колхоз бригадирҙарының уларҙы таяҡ менән туҡмап ҡыуғанын, йыйып өлгөргән башаҡты ҡулдарынан тартып алып ергә һипкәнен (уларҙы барыбер сысҡан ашап бөтөр бит!), аҙаҡ штрафҡа тарттырып һуңғы табаһын, ямалған тасын, ҡышҡы һыуыҡтан ҡотҡарыусы берҙән-бер балтаһын тартып алғандарын, хатта "дәүләт милкенә ҡул һуҙған өсөн" төрмәгә олаҡтырыуҙарын һаман аңлап етә алмайым. Бындай мәғәнәһеҙ ҡанһыҙлыҡ күренештәрен беҙҙең быуын күп белә, шуға күрә коммунистар сәйәсәтен бер нисек тә "кешелекле" тип әйтә алмайым.

Бөгөн дә ҡойто ғына пенсияһын айыныҡын айға еткерә алмаған, ваҡытында медицина ярҙамы күрмәгән ололар, миллионлаған аҡыллы йәштәрҙең Нобель премияһы артынан сит илдәргә сығып китеүе, намыҫын юғалтҡан жуликтарҙың илде талап, байлыҡтарҙы ситкә сығарыуы, "закондағы бур"ҙарҙың үҙҙәрен хужалай тойоп йәшәп ятыуы, хирес чиновниктарҙың ҡомһоҙлоғо, енәйәттәрен йәшерергә тырышыуы ана шул замандағы бригадирҙар сәйәсәтенән әллә ни айырылмай ҙа.

Йәш президент Дмитрий Медведевтың үҙенең мөрәжәғәтнамәһендә ришүәтселеккә ҡаршы көрәште власть алдында торған иң төп мәсьәләләрҙең береһе тип билдәләүе юҡҡа түгел. Юғиһә, ришүәтселәр Рәсәй организмының йәшәү өсөн мөһим ағзаларын зарарлап, кәүҙәһен үлемгә дусар итеүе ихтимал. Кем –

кемде мәсьәләһе киләһе ун йыллыҡтарҙа уҡ хәл ителеүе бар, сөнки АҠШ-тың дәүләт сәркәтиптәре Генри Киссинджер, Збигнев Бжезинский, Мадлен Олбрайт, шул уҡ Кондолиза Райс та үҙҙәренең мемуарҙарында 2020 йылда Рәсәйҙең юҡҡа сығыуын күҙаллай.

Тиҙҙән Рәсәйҙә йәшәр кеше ҡалмаясағы ла ҡыуандыра уларҙы, сөнки үлем тыуымдан күберәк: бер йылда ғына ил халҡы миллионға кәмей. Президент менән премьер-министрҙың милли проекттар буйынса сәйәсәте генә аҡрынлап ҡына булһа ла тыуымды арттырып, айырманы тигеҙләргә мөмкинлек бирә. Үҙгәртеп ҡороу йылдарында һәм унан һуң да Рәсәйҙә асылған балалар йорттарының иҫәбе һуғыштан һуңғы йылдарға тиңләшә яҙғайны. Яңыраҡ ҡына илебеҙҙә 5 миллион бала подвал, вокзалдарҙа михнәт сигеп, мәктәпкә йөрөмәне. Шуға күрә беҙ БР Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтайҙа эшләгән саҡта әҙерләгән опекунлыҡ һәм попечителлек буйынса закон (ә Рәсәй Думаһы бындай законды 5 йылдан һуң ғына сығарҙы) миндә, комитет рәйесе булараҡ, оло ғорурлыҡ тойғоһо уята!

Бынан һуң байтаҡ балалар йорттары, интернаттар ябылды, меңәрләгән сабый ғаиләле, ата-әсәле булды һәм, ниһайәт, уларҙы сит илдәргә һатыу (60 мең долларға саҡлы!) кеүек күренештәр һирәгәйеп бара. Уллыҡҡа алынған балаларҙы, әйтәйек, Американа нисек тәрбиәләүҙәре хаҡында көн һайын тиерлек ишетеп, уҡып торабыҙ. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, был айсбергтың өҫкө өлөшө генә, ә иң ҡурҡынысы, дөрөҫлөккә тап килеп етмәгәнерәк имеш-мимештәр (утһыҙ төтөн сыҡмай) – балаларҙың эске ағзалары менән һатыу итеү.

Һуғыштан һуңғы йылдарҙа балалар йорттарында алыҫ туғандары булмаған үкһеҙ етемдәр генә була. Йортта ни тиклем аслыҡ, яланғаслыҡ хөкөм итмәһен, ике-өс туғанының балаһын да үҙҙәренә алып тәрбиәләгәндәр, үҙ балалары менән бер рәттән туйындырғандар, белем биргәндәр, хеҙмәткә өйрәткәндәр. Аслыҡтан миктәһәләр ҙә, властар өгөтләп, әрләп ҡараһа ла, Хәлисә апай улдары Фәйзрахман, Лотфрахман, Хәйбрахманды интернат йә балалар йортона бирмәй, үҙе тәрбиәләй. Үҫә килә егеттәр үҙҙәре лә ҡул араһына инә, йәшәү йылдан-йыл еңелләшә. Лотфрахман бухгалтер һөнәрен үҙләштерә, тәбиғәттән бирелгән һәләте арҡаһында иҫәп төймәләрен бөтөнләй ҡулланмай, колхоз иҫәп-хисабын ятҡа белә (хәҙер ундайҙарҙы “аяҡлы компьютер” тиерҙәр ине). Хәйбрахман иһә барыһын да аңға һыймаҫлыҡ хәтере менән таң ҡалдыра. Бер уҡыған нәмәһен ҡасан һораһаң да яттан һөйләп бирә. Ә Фәйзрахман сәнғәтте үҙ итә.

Ул, эш араһында тигәндәй, ете йыллыҡ мәктәпте, шунан ветеринария техникумын тамамлай. Студент сағында уҡ үҙешмәкәр театр түңәрәге ойоштора, шунда актер ҙа, режиссер ҙа була. Талантын һиҙеп, егетте сәнғәт училищеһына, артабан ГИТИС-тың режиссерҙар әҙерләү факультетына алалар. Егетебеҙ СССР-ҙың иң билдәле сәнғәт институтын уңышлы ғына тамамлап, Башҡорт дәүләт филармонияһына художество етәксеһе булып ҡайта. Минең тәүге саҡырыуымда уҡ Фәйзрахман Ағиҙел буйлап ағып төшөргә ризалашты.

Шулай итеп, йыйынып бөттөк, иртәгә иртән – тағы юлға. Әммә дуҫым, курсташым Рәхимйәнде күрмәйенсә ҡуҙғалғы килмәне. Ул тәүге көндән үҙенең Бөрйәненә тәғәйенләнеп, табиплыҡ эшен шунда башлағайны. Тәүҙә хирург булды, дауалау буйынса начальник урынбаҫары вазифаһын да атҡарҙы. Ул саҡта бик төпкөл һаналған район дауаханаһында эшләүҙе батша Рәсәйендәге земство врачы кеүек ҡабул итергә кәрәк. Хәҙерге кеүек ауырыуҙы төрлө белгестәргә йүнәлтеп булмай. Ебәрәм тиһәң дә, ауыл кешеһе 150 саҡрымдағы Белоретҡа йә унан да алыҫыраҡ Өфөгә бармаясаҡ та әле. Теләһә-теләмәһә лә, Рәхимйәнгә районда

киң профилле белгес эшен башҡарырға тура килә. Медицина оҫталарына күҙҙең насарайыуын белеү, конъюнктивит булғанда ниндәй дарыу тамыҙыу, ҡолаҡты ҡарап сайырын алып ташлау, радикулит диагнозы ҡуйыу бер ни тормай.

Рәхимйәндең сыҙамлығына гел һоҡландым, һәр ваҡыт уны өлгө итеп ҡуйҙым. Ниндәй генә осраҡта ла үҙенең намыҫын һәм ғорурлығын юғалтманы ул. Уҡығанда бер ауыр эштән дә өркмәй торғайны. Өфөләргә утын әҙерләшһенме, баржа, вагондар бушатһынмы, ер ҡаҙыһынмы, урам һеперһенме – тамаҡ туйҙырыу, кейенеү өсөн аҡса тапты. Уның үтә тәүәккәл бер ҡылығы беҙҙе, ҡала студенттарын, ныҡ аптыратҡайны. Яурынына ике кирбес икмәк, ботинкаларын (туҙып ҡуймаһын тип) элеп алды ла урман, йылғалар, Урал һырттары аша тыуған Бөрйәненә йәйәүләп ҡайтты ла китте. Йылдар үткәс кенә нисек ҡайтып етеүе хаҡында һораша алдым. Уҫаҡ сатыры аҫтында йоҡлап, шишмә һыуы менән икмәк, муйыл, ҡарағат, айыу еләге менән туҡланып, өсөнсө тәүлеккә өйөнә ҡайтып йығылған ул. Ошо юлдарҙан күп тапҡырҙар ғаиләм менән джипта елдереп барғанда Рәхимйән дуҫым тураһында һөйләмәйенсә үтә алмайым.

Иң мөһиме шул: Баймаҡтан Бөрйәнгә ялан аяҡлап ҡайтҡанында ул үҙенең бөйөк мөхәббәтен, яҙмышын, аҙаҡ ҡатмарлы, әммә бәхетле ғүмер итәсәк тормош юлдашын – Венера Ғәзизовнаны осрата. Икәүләп улдар тәрбиәләп үҫтерәләр, улар математик, табип булып китә. Хәҙер аҡыллы, матур ейәндәр менән һөйөндөрәләр. Рәхимйән ниндәй һунарсы булғандыр – белмәйем, ә бына балыҡ тотоуға ныҡ әүәҫ ине. Ҡасан саҡырма, йылдың ниндәй генә миҙгеле булмаһын, тиҙ генә йыйына ла килеп тә етә. Балыҡтарҙың ҡылығын Л. Сабанееванан хәртөрәк белмәйҙер ул. Ҡармаҡ менән тота, уха ғына ашай… Балыҡты ул бер ҡасан да аҡса эшләү, тамаҡ туйҙырыу сараһы тип күрмәне. Рәхимйән менән ҡыуанышып осраштыҡ, уны әлегә белмәгән Әмир менән Фәйзрахманды ла таныштырҙым. Шунан һуң дуҫым миңә: “Хирургияға һуҡыр эсәкле ирҙе килтерҙеләр, һине Хоҙай үҙе ебәргәндер, зинһар, ярҙам ит, “ – тине. Операция – табиплыҡ сәнғәтенең юғары нөктәһе, унда физик кенә түгел, психологик көс тә сарыф ителә. Шулай тим, сөнки хирург өс-дүрт сәғәт буйы Аллаһы менән бергә кеше ғүмеренең хужаһы була, бысаҡ осон үлем менән йәшәү араһында тигеҙләп өс килограмға саҡлы ауырлығын да юғалта (бындай хәл үҙем менән күп тапҡырҙар ҡабатланды).

Көтөлмәгән, айырыуса уңышһыҙ, ҡатмарлы әмәлиәттәр ваҡытында хирург менән шәфҡәт туташын психологик көсөргәнеш ҡармап ала ла уларҙы күҙгә күренмәҫ еп менән бәйләй, нисектер бер организмға берләшкәндәй булаһың. Операция залындағы тынлыҡта инструменттар сыңлауы һәм тын алыштар ғына ишетелә... Сестра бер ҡараштан, ымдан аңлап энә, тампон алып бирә, хирургтың һәр ишараһын аңлай. Телепатик аралашыу өсөн бирсәткәле ҡулдар һәм… күҙҙәр генә ҡала. Башҡаһы – битлек аҫтында.

Ах, ул күҙҙәр! Күк йөҙөндәйе, диңгеҙҙәй зәңгәре, муйылдай ҡаралары, йәшел хәтфәләйҙәре, Балтик йәшмәһендәй көрәндәре, ҙурҙары һәм бәләкәйҙәре, шатлыҡлылары һәм бойоҡтары, уҫалдары – ниндәйҙәре генә осраманы! Һәр береһенә шағир, рәссам илһамланырлыҡ, һәр береһе ғашиҡ иттererлек! Күҙҙәр – күңел көҙгөһө генә түгел, ә кешенең асылы ла, уға 90 процент мәғлүмәт биреүсе, бар организмдың компьютеры. Хәҙер төҫлө шекәрә ярҙамында кешенең сирен белеп була. Инде ул фәндә иғтибар объектына әйләнгәндән-әйләнә бара. Медицинала сирҙәрҙе диагностикалау, криминалистикала – паспортҡа чип, завод йә фабриканың видеокамераһына ҡарау – пропуск һымаҡ.

Мәскәүҙә аспирантура тамамлап ҡайтҡас, ниңәлер бар Өфө зыялылары мине дауалаусы табип итеп һайланы. Бөйөк Фәриҙә апай Ҡудашеваға ла операция яһаным, тормош иптәше, музыкант һәм композитор Бәхти ағай Ғайсинға ла. Минең ҡул аша ике тапҡыр рәссам Әхмәт ағай Лотфуллин үтте, уның коллегаһы Л. Круль, яҙыусылар Фәрит Исәнғолов, Әсғәт Мирзаһитов һәм Ғәйфулла Вәлиевтарға, актер Шамил Рәхмәтуллинға ла ярҙам итергә тура килде. Ошо шәхестәрҙең һәр береһенә арнап китап яҙырлыҡ, әммә был теләгем хыял ғына булып ҡалыр инде. Әсғәт ағайға килгән һайын уның аҡылы, тәрбиәлелеге, мөһабәтлегенә ҡарап һоҡланыр булдым. Иҫе китеп тәбиғәтте яратыусы булараҡ, Башҡортостандың күлдәре, йылғалары, бигерәк тә Ағиҙел тураһында һоҡланып, легендаларға һалып һөйләр ине. Икебеҙ ҙә бер фекерле: эйе, Ағиҙел – һылыуҡай ҡыҙ, кәләш, ҡатын, әсәй, өләсәй һәм Башҡортостандың иң бөйөк ҡатын-ҡыҙы! Уның меңәрләгән балалары – шишмәләр, үҙенең һутын биреп мөлдөрәмә тултырған. Был көс яҙғы ташҡын ваҡытында йылға-күлдәрҙе тултырып, кешеләрҙе, хайуан-йәнлектәрҙе ризыҡлы итә.

Ҡышҡы һыуыҡ айҙарҙа Ағиҙел үҙенең һыуын ҡыҙ һәм улдарына кире ҡайтарып бирә, күп һанлы шишмә, ятыуҙарын әсә һөтө менән туйындыра. Бөгөн беҙ – Әмир, Фәйзрахман, Илдус һәм мин йөҙөп төшөп барған Ағиҙел бына шундай ул! Минең өсөн атай-олатайҙарыбыҙҙың бер сере сиселмәй ҡала: ауылдар ниңә тик уң яҡ ярҙа ғына һәм мотлаҡ тау шишмәһе ағып төшкән ерҙә урынлашҡан икән?

Илдус әсәйемдең бер туған һеңлеһе – өләсәһенә Воркута ҡалаһынан ҡунаҡҡа килгән. Әсәһе менән үгәй атаһы шахтала эшләй. Малай ғына булыуына ҡарамаҫтан, олпат, өмөтлө, хатта бәләкәй генә кәүҙәле оло кешене хәтерләтә. Киң маңлай, һоро күҙҙәр, һыуҙа яҡшы йөҙә, ҡурҡыу – уға ят сифат.

Беҙҙең киләһе төнәү – Аҡбулат ауылы ятыуында. Тағы палаткалар, усаҡ, ухалыҡ балыҡ тотоу… Иртәгәһенә Шүлгәнташ мәмерйәһен ҡарар өсөн Ҡотан менән Ырғыҙлы ауылдары тирәһендә туҡтарға булдыҡ. Аҙыҡ-түлек запасын тулыландырып алырға ла кәрәк ине. Илдусты һаҡсы итеп ҡалдырҙыҡ та мәмерйә ауыҙына юлландыҡ. Был – төбөндә генә шаулы, саф шишмә аҡҡан ҙур, бейек зал. Ярым ҡараңғылыҡ тиҙҙән бөтөнләй төн төҫөнә инде. Тайғаҡ таштар араһынан шыуышып барып, йәбешкәк балсыҡ менән ҡапланған баҫҡысҡа ла килеп еттек. Ҡурҡыу тойғоһон көскә еңеп, тәүге майҙансыҡҡа еттек тә тағы тайғаҡ һарыҡташтар араһынан бысраҡ баҫҡыс буйлап икенсе галереяға күтәрелдек. Тоннелдең уртаһындағы ҙур таштар янында ниндәйҙер һоро нәмә ҡыбырҙап ҡуйҙы. Шунан илауға оҡшаш һулҡылдау ғына беҙҙе ҡотобоҙ алыныуҙан һаҡланы. Фонарҙы шул нөктәгә төбәһәк, ике малай төҫмөрләнде. Һыуыҡтанмы, ҡурҡыуҙанмы ҡалтырап илай ине улар. Мәмерйәне ҡарау ҡайғыһы китте, балаларҙы күтәреп тиерлек аҫҡа алып төштөк. Сәй эсереп, ашатып йылындырғандан һуң, нисек был мажараға тарыуҙары хаҡында һөйләп бирҙеләр.

Һаҡсының будкаһын бикләп, Ғәҙелгәрәй ауылына китеүен көтөп торалар ҙа (хәҙер генә ул Шүлгәндә тотош ҡаласыҡ, кафе, экскурсоводтар бар), берҙән-бер фонарҙарын тотоп, мәмерйә ауыҙына йүнәләләр. Тик берәүһе ялпаҡ таштан тайып йығыла ла берҙән-бер өмөт – яҡтылыҡ сығанағын вата. Бер тәүлеккә яҡын тынлыҡ. Ҡараңғылыҡ эсендә ултырыуҙың ни тиклем ҡурҡыныс икәнен һәр кем аңлайҙыр. Бигерәк тә – бала-саға. Сталагмит буйлап тамған һыу тауышы ниндәйҙер хайуан аҙымы кеүек, тын алышың – йылан ыҫылдауы, йөрәк тибеше – баҫҡыс буйлап күтәрелгән өрәк тауышылай. Айырыуса ныҡ ҡына һыуһай былар. Күпмелер сәғәт үткәс, йоҡолары килә башлай. Ярай әле, һәрмәнеп сығыр юл эҙләмәгәндәр, упҡынға ҡоларҙар ине.

Малайҙарға юлды дауам итергә ярамай ине. Һаҡсы уларға будкаһында йоҡлап сығырға рөхсәт итте. Ә беҙ Ҡотан ятыуына ҡарай ыңғайланыҡ. Үрҙәрәк билдәләп үтеүемсә, Ҡотан ауылы ла уң яҡ ярҙа урынлашҡан. Мәксүт иһә тау аҫтындараҡ ята, йылға ауыл уртаһынан аға. Яр буйында русса өс кенә һүҙ: “турист“, “удочка”, “жилка есть“ тигәнде генә аңлаған малайҙар. Аҙаҡҡа табан балыҡ тотоу өсөн ҡорамалдарыбыҙ самалы ғына ҡалды – барыһын да таратып бөттөк.

Арыраҡ, һыу инеү урынынан өҫтәрәк, бер ир, ҡулы менән ҡояштан ышыҡлана биреберәк, беҙгә ҡысҡыра:

– Э-э, ҡустым, һеҙ хирург Сәхәүетдинов түгелме?

– Эйе, ҡайҙан беләһегеҙ?

– Беҙҙә йүкә телефон шәп эшләй бит, – ти был. – Һеҙҙең был яҡтарҙа икәнде ишеткәйнек инде. Туҡтап ҡына китһәгеҙсе. Ҡатын ауырый, операция кәрәк, тинеләр. Ҡасаныраҡ яһатырға икән: ҡарап китегеҙ әле. Һуң булып ҡуймаһын тип ҡурҡам, биш балам бар бит.

Табиплыҡ бурысымды үтәмәй ары китә буламмы ни? Ҡарап, анализдары менән танышҡандан һуң, диагноз ҡуйҙым да көҙ Өфөгә операцияға саҡырҙым.

Киләһе йылдарҙа ла кәмәм йөҙә торған амбулаторияға әйләнде. Ағиҙел буйындағы унлап сирле Өфөгә ебәрелә торҙо.

Сәлиха апайҙың ауылса һыйынан һуң, Сабир ағайҙың солоғона киттек. Ул үҙенең серле алымдары менән бейек ағасҡа менде лә беҙҙең өсөн тип ике стакандай, донъяла һис бер тиңе булмаған ҡырағай солоҡ балын ҡырҡып бирҙе.

Киләһе туҡталыш – бөтәһе лә ятраҡан Аҡбулат ятыуы. Урғылып ятҡан ағым ыңғайына йөҙөп, стенаһы йышылып бөткән ҡаяға һуҡлыға торғас, кәмә ҡапыл Мәләүез йылғаһы тамағына килеп сыҡты. Уның балсыҡлы ярында дүрт-биш ихаталыҡ Аҡбута ауылы, өҫтәрәк шиғри исемле ауыл – Һөйөш, ул да дүрт-биш кенә йорттан тора. Ололарҙың һүҙенә ҡарағанда, Аҡбута 1905 – 1907 йылдарҙа барлыҡҡа килгән. Ерһеҙ татар ғаиләләре Ағиҙел буйлап өҫкә менә лә артель ойошторол ебәрә. Ағастан мискә, сана, дуға, йүкә кеүек көндәлек кәрәк-яраҡ эшләү менән булашалар. Үҙҙәренең сәсеүлектәре  юҡ, аҙыҡ-түлекте К. Маркс тәғлимәте буйынса,  йәғни тауарҙы тауарға алмаштырып табалар.

Һөйөш ауылы – Мәләүездең уң яҡ ярында, матур ялан уртаһында. Халыҡ бында ирәүәнләп көтөү көтә, бойҙай, һоло, тары сәсә алыр ине. Хатта ике ауылға бер магазин, башланғыс мәктәп тә булған. Әммә, йәштәр әкренләп “материк“ка күсенеп, тора-бара ауылда ҡарттар ғына тороп ҡала. Алты-ете йылдар самаһы үткәс, был ҡарттарҙы ла балалары цивилизациялы ҡалаға алып китә. Аҡбута ике метрлыҡ һыу аҫтында ҡала, ә Һөйөштә Ширғәле ағайҙың яланғас ҡыйыҡлы йорто ғына ултыра.

Ятыуҙың һул яҡ ярындағы болонда, ҡайынлыҡ араһына  урынлаштыҡ. Ҡаршыла ғына саф һалҡын һыулы шарлауыҡ үҙенең туҡтауһыҙ тауышы менән бәүетеп тынысландыра. Палатканы тиҙ генә ҡора һалып, балыҡ тоторға әҙерләндем.

Һәр балыҡсының үҙенә генә хас холҡо була. Әмир, балыҡлы урын эҙләп, яр буйлап сабырға ярата, Фәйзрахман үҙенә уңайлы ғына ер табып, йыйылмалы ултырғысына урынлашып ала ла, кәрәкле әйберҙәрен бер тәртиптә генә эргәһенә теҙеп һалып, тыныс ҡына ҡармаҡлауын белә. Ә мин сөңгөл башындараҡ уртаға берәй йөк – якорь ташлайым да һыу төбөнә бүрттерелгән иген, көнбағыш майы ҡалдығы, икмәк киҫәктәре һалынған кошель (ваҡ сетка) ырғытам. Шунан ҡояш байыр алдынан ғына, һуңғы туристар тауышы тынғас, кәмәм менән кәрәкле урынға йөҙөп килеп, ҡармаҡ ташлайым. Балыҡ йыйылғанын кошелдән тарттырылған йыуан ҡармаҡ ебе аша беләм. Кошель “йөрөй“ башлаһа, унан балыҡ

көтөүен сығарып алалар. Ғәҙәттә, бөтә балыҡсылар ҙа табышының ҙурлығын фәстереп һөйләргә ярата. Ә мин бер ҙә арттырмай әйтәм: бер төн эсендә утыҙ килограмға яҡын ҡорман, опто тотҡаным бар.

Иртән Фәйзрахман, беҙгә ҡулдарын киң йәйеп: “Ошондай ҙур суртан эләктергәйнем, кире ебәрҙем!” – тип шаяртты. Мин: “Йә, тағы бер күрһәт әле!“ – тим. Ул ҡоласын йәйеп ебәргәйне, беҙ ҡулын арҡан менән бәйләп ҡуйҙыҡ. Фәйзрахман был хәлдән оҫта сыҡты. Усын ныҡ итеп йәйҙе лә: “Ышанаһығыҙмы-юҡмы, унының күҙҙәре бынауындай ине!” – тине.

Ҡояш сығыу менән тынлыҡ идиллияһын арба шығырлауы, ат тояғы тауышы боҙҙо: үҙенең яңы ғына армиянан ҡайтҡан кесе улы, килене, ҡатыны менән Ширғәле ағай бесәнгә китеп бара икән.

Илдус, һыу алырға тип, шарлауыҡҡа китте. Әйләнеп килгәс: “Венер ағай, тегендә, шарлауыҡ ҡаршыһында, ниҙер һалынған банка ята, сумып алайыммы әллә шуны?” – тине.

– Унда тәрән бит, ағым да көслө генә. Бәлки, Әмир ағайың менән барырһығыҙ? – тип кәңәш бирәм.

Ул мине тыңлап та бөтмәй, йүгереп барып, Ағиҙелгә сумды ла ҡолас ташлап йөҙөп тә китте. Тиҙҙән ҡыуана-ҡыуана өс литрлы банканы ярға алып сыҡты. Ә унда йәш һарыҡ итенән бик оҫта итеп маринадланған шешлек ине. Ошонда туҡтаған туристар, һыуға төшөрөп ебәреп, төшөп алырға ҡурҡҡан, күрәһең. Шулай итеп, беҙ табылдыҡты өс көн буйы аш итеп тә, ҡурҙаҡ, шешлек яһап та ауыҙ итә аласаҡбыҙ!

Шешлек бар, балыҡты ҡайҙа ҡуйырға белмәйбеҙ. Мин – коньяк, Әмир менән Фәйзрахман Ермолаевҡа араҡыһын эстек тә йоҡларға яттыҡ. Төн уртаһында: “Брысь, бында һин генә ҡалмағайның!“– тип Әмир ҡысҡырып ебәрмәһенме! Өстәр тирәһендә унының һаҡ ҡолағы ҡашығаяҡ шылтырауын ишетеп ҡала. Фонарын алып, палатка ишеген аса ла, ут тоҡандыра. Өй бесәйенән ике-өс тапҡыр ҙурыраҡ һеләүһенден мин коньяк эскән рюмканы ялап торғанын күреп йығылып китә яҙҙыҡ. Һеләүһен иһә етеҙ хәрәкәт менән ҡараңғылыҡҡа һикерҙе. Валерьянканы хәтерләткән коньяк еҫе, бөтә һаҡсыллыҡты юғалтып, йыртҡысты феромон менән ләззәтләнергә мәжбүр иткән. Ошондай юл менән күршенең рекордсмен бесәйен һалдырып алырға, һунарсыларға һеләүһен йә һыуһар эләктерергә мөмкин. Валерьянка еҫе уларға ныҡ тәьҫир итә. Инстинкт тарта. Шулай ул, феромондар менән шаярырға ярамай.

Иртәнсәк Әмир, Фәйзрахман менән өсәүләп Ширғәле ағайға бесән сабышырға булдыҡ. Мине, ҡулға күптән салғы тотмаған кешене, юрамал бакуйҙың уртаһына төшөрҙөләр, артымдан хужаның улы Әмир баҫты. Ул тәү ҡарамаҡҡа ғына сибек күренгән икән, йәшлек үҙенекен итәлер – салғыһы минең үксә тирәһенән китмәне. Күпме генә киңерәк ҡолас алырға тырышһам да, бер аҙҙан хәлдән тайҙым һәм һыу эсеп алыу һылтауы менән ситкә сыҡтым да иң арттағылар рәтенә баҫтым.

Ширғәле ағай төшкө аш мәлендә шундай хәбәр һалды: “Все, был ерҙәрҙе хәҙер “Профессор яланы” тип атаясаҡбыҙ. Исеме мәңге шулай ҡалыр”.

Ҡыҙғаныска ҡаршы, “мәңге” тигәненең ғүмере ҡыҫҡараҡ булды, егерме йыллап ваҡыт үттеме-юҡмы, “Профессор яланы” Йомағужа һыуһаҡлағысы аҫтында ҡалды.

Кискеһен йылға батшаһы – йәйен аулап, бәхетте һынап ҡарарға булдыҡ. Ун ырғаҡлы бәрәмәттең һәр береһенә селбәрә, тәлмәрйен, табала ҡурылған турғай

элеп, ике яҡтан тарттырып ҡуйҙыҡ та, күстәнәс тотоп, Һөйөш ауылына ҡунаҡҡа киттек. Хужабикә беҙҙе бөтөн урман-яландарҙың хуш еҫен һеңдергән һалҡын ғына әсегән бал менән һыйланы. Был эсемлекте хәҙер теләһә ниндәй баҙарҙа табырға мөмкин, әммә ул, шәкәр менән туйынған ҡорт балынан ҡойолғанға күрә, былай уҡ иҫ киткес түгел.

Ысын балды шәкәрлеһенән айырыу ысулдары күп булғанға, аныҡлап яҙып тормайым. Ауылда минең дә үҙ умарталарым бар. Ҡатыным менән бер ҡағиҙәгә таянабыҙ: балды бер ҡасан да корпустан алмайбыҙ, сөнки был – ҡорттарҙың законлы келәте, оҙон ҡыш бауырына етерлек запасы.

Юғары сифатлы, тәүге сәскәләрҙән генә йыйылған бал менән туҡланған ҡорттар – дарыуһыҙ-ниһеҙ, тәбиғи иммунитетын теләһә ниндәй ҡушылмалар менән боҙмай, һирәк ауырыған солоҡ, ҡырағай ҡорттар кеүек көн итә. Ә умарта балы эсемлеген татып ҡараған кеше яҡшы белә: эсеүе еңел дә ул, рәхәтлек, ҡыуаныс тойғоһо аҡрынлап уяна, ә аҙаҡтан... аяҡтар тыңламай ҙа ҡуя. Улар мамыҡ кеүек тә, ауыр ҙа булып китә. Бала саҡта ҡунаҡтарҙың урынында ултырған килеш йә иҙәнгә йығылып төшөп йоҡлап киткәне иҫтә ҡалған. Беҙ ул хәлгә үк төшмәһәк тә, Фәйзрахман башлаған йырға ҡушылып, сайҡала-сайҡала өйөбөҙгә ҡайтып киттек.

Таң атты. Шул тиклем йылы, тыныс. Һыу өҫтөнә аҡ томан йәйелгән. Ҡапыл “Венер, ҡотҡар!” тигән тауыш ишетелде. Тау араһында өндәр көслө яңғырай, ни булды икән, тип палатканан сыҡһам, ҡаршы яҡ ярҙан егерме метр тирәһе аралағы һыу эсендә Әмир шапылдығын сыға ине. Арыраҡ – кәмәһе, ишкәктәре тырым-тырағай йөҙөп йөрөй. Ҡыуғынсының алтын ҡағиҙәһе ҡотҡарҙы: кәмә һәр ваҡыт өрөлгән, әҙер булырға тейеш. Бер нисә минуттан уның янында инем инде. Ярға сыҡҡас, йәйен аулаусының оҙон резина итектәрҙә, фуфайкала икәне күренде.

– Бәрәмәттәрҙе гел сисенеп ҡарай торғайның бит? Бөгөн көнө лә йылы, – тинем мин, аптырап.

– Үҙем дә аңламайым. Бәрәмәтте эләктерҙем дә бер нәмә юҡмы тип ҡарай башланым. Ҡапыл ауыр булып китте. Бүрәнә эләктеме әллә тип, күтәреп ҡараһам, үҙ күҙҙәремә ышанманы: һанап бөткөһөҙ һөлөк йәбешкән йәйен башы күренде. Ҡармаҡ өҫкө иренենә саҡ-саҡ ҡына эленеп тора. Бер яйһыҙ хәрәкәт – һәм йәйен юҡ буласаҡ! Эргәләге ҡармаҡты алып, тегенең аҫҡы иренենә сәнстем. Ҡапыл мине ҡойроғо менән бәреп осормаһынмы был! Үҙе һыуға сумды, кәмәм аҫҡа ағып китте, мин иһә һыулы итектәрем, фуфайкам арҡаһында бата башланым.

– Йәйен ҡайҙа?

– Ошонда ул, ҡармаҡҡа ныҡ эләккән.

Йәйенде илле алла ҡырҡ мулла менән тигәндәй саҡ сығарғас, Һөйөш ауылынан бизмән алып килдек. Егерме ете килограмм тарта ине йәйен! Үҙем менән бер буй йәйен эргәһендә төшкән фото эш кабинеты өҫтәлендәге быяла аҫтында һаман ята. Уның тарихы тураһында һөйләмәгән кешем ҡалмағандыр. Йәйенде күргәс, Ширғәле ағай 50-се йылдарҙа ошо ятыуҙа йылым менән 150 килограмға еткәндәрен тотоуҙары тураһында һөйләне. Эйе, булғандыр. Ағайға балта менән иң һимеҙ урындарын сабып, күстәнәс итеп тотторҙоҡ.

Йылға тормошо ғәҙәттәгесә аға бирҙе. Сәғәт һайын туристар төркөмө шарлауыҡ янында туҡтай, көләшәләр, гитара сиртәләр, кәмә йә катамарандарынан һикереп һыу инәләр. Ул саҡта Ағиҙел буйлап ағыу туристарҙың иң яраҡлы шөғөлө ине. Турбазаға Советтар Союзының һәр осонан йөнәлделәр.

Байып барған ҡояш бейек ҡаялар артына ышыҡланһа ла, ҡараңғы төшөүгә ваҡыт күп әле. Төрлө телдә һөйләшкән туристар эргәнән генә аға бирҙе. Фәйзрахман ҡапыл украин телендә аралашҡан кешеләрҙе шәйләп ҡалды һәм шул телдә бер ария һуҙып ебәрҙе. Кәмәлəгеләр шаҡ ҡатты. Үҙҙәре ғәжәпләнеп беҙҙең яҡҡа ҡараһа ла, мондоң ҡайҙан килгәнен аңламайҙар. Шунан рәхмәт әйтә башлайҙар, аҙаҡ осрашыр өсөн исем-фамилияны белешәләр.

Күпмелер ваҡыт үткәс, Фәйзрахмандың һаҡ ҡолағы белорус телендә һөйләшкәнде ишетеп ҡала ла ул саф белорус телендә йырлап ебәрә. Тегеләрҙән яуап – тағы ҡабатлауын үтенәләр. Латыштар менән дә шундай уҡ хәл килеп сыҡты. Грузиндар төркөмө иһә Фәйзрахмандың “Сулико” йырын ишеткәс, ярға һуғылмай булдыра алманы. Усаҡ яғып, бер-беребеҙҙе һыйлап, грузин, башҡорт телдәрендә йырлап, таңға саҡлы байрам иттек. Ҡояш ҡаяларға тәүге нурҙарын һибеү менән хушлашыр, адрестар алмашыр ваҡыт та етте. Күңелдәребеҙҙә милләттәрҙе берләштереүсе, ығы-зығыларҙы туҡтатыусы, ғүмерҙе оҙайтҡан, киләсәккә матур өмөттәр уятҡан бөйөк “Йыр”ға рәхмәт тойғолары менән таралыштыҡ. Туҡтаған урыныбыҙҙы бер ҡоро япраҡ ҡалдырмай таҙартып, киләһе туристарға бер өйөм ҡоро утын ҡалдырып, күренеп кенә торған урынға тау сәскәләре ҡуйҙыҡ та түбәнгә йөҙөп киттек.

Урындағы оҫта Булат Рәхимовты ҡытыршы, әммә яҫы ҡаяла Маркс, Энгельс һәм Лениндың баштарын төшөрөргә нимә этәрҙе икән? Үҙе менән күп тапҡырҙар осрашып һөйләшергә тырышһам да, килеп сыҡманы. Һүрәттәрҙең ҙурлығы хайран итә. Волейбол майҙанындай барҙыр улар. Күргән һәр кем фотоаппаратына йәбешә. Донъяла хәҙер әллә күпме кешелә һаҡланалыр был Ағиҙелдең ҡырағай тәбиғәтендәге әллә патриотизмды, әллә үҙебеҙ уйлап “алла”ларға мәжүсиҙәрсә табыныуыбыҙҙы сағылдырған иҫтәлектәр. Бер көҙ йәнһеҙ һыуһаҡлағыстың йәшкелт, һаҫыҡ тулҡындары өҫтөнән йөҙөп барғанда ҡатыныма был һүрәттәрҙең эҙен булһа ла күрһәтергә маташҡайным да, килеп сыҡманы. Порттреттар ҡояш, ел тарафынан ғына юҡҡа сығарылмаған, ул “алла”ларҙы хәҙер мәктәп уҡыусылары ла, хатта уларҙың ата-әсәләре лә белмәй.

Юлбашсылар ҡаяһында лагерь ҡороп ебәргәндәр. Ике йөҙ метр самаһы алыҫлыҡта ирҙәр төркөмө ял итә. Улар үҙҙәрен ошо ерҙең хужалары кеүек тота: ҡысҡырып һүгенәләр, әҙәпһеҙ шаяралар, алюмин канистранан ниҙер, моғайын, спирттыр, ҡойоп эсәләр ине. Төбө әйләндерелгән кәмә өҫтөндә битен төк баҫҡан, йөҙө һурылып киткән, эсе барабан һымаҡ күпкән утыҙ биш йәштәр самаһындағы ир ята. Иптәштәренең кәйефен төшөрмәҫкә булалыр инде, көсәнеп йылмайған була үҙе. Рюмка, һурпа йә сохари һуҙһалар, ҡул һелтәй ҙә күҙҙәрен йома.

Мин уның сирләп ятҡанын тойҙом. Һиҙгерлек тәжрибә аша киләлер инде. Былар Күмертауҙан икән. Ҡайһы берәүҙәре Әмирҙә, техникумда, уҡып сыҡҡан. Ул да, теге ир менән ниҙер булғанлығын һиҙенеп: “Ҡаянан ҡолаһы мәллә?“ – тип һораны.

– Юҡ. Өс көн инде эсе менән йонсой. Автобусыбыҙ ике көндән килеп етә, дауаханаға өлгөрөр.

Һыйҙан баш тартып, Әмир мине ауырыуы янына килтерҙе: “Венер, ҡара әле, бөтөнләй хәле юҡ бит бының”. Сирлегә бер күҙ һалыу етте – аҙған перитонит! Медицинала биш меңдән ашыу ауырыу булып, шуның һәр береһе тиерлек кешенең йөҙөндә сағыла. Студенттарыма һәр ваҡыт “ауырыуҙың йөҙө“ тип аталған төҫлө атласты һәм Гуго Глязер йыйып сығарған фотоһүрәттәрҙе ятлап алырға ҡушам. Уларға ҡарап зоб, һары ауырыуы, уремия, аҙ ҡанлылыҡ сирҙәрен хаталанмай ҡуйырға мөмкин.

Ирҙең эсен тотоп ҡарап, бер аҙ һораштырғас, Күмертау авиация предприятиеһының “алдынғы” инженерҙарына: “Һеҙ, зыялылар, медицинаны саҡ ҡына булһа ла белергә тейеш тә инде. Байрамығыҙҙы боҙорға ҡурҡып ятҡан иптәшегеҙҙә аппендициттан сыҡҡан эренле перитонит. Хәҙер үк уның кәмәһен тағып, яҡындағы ауылға ҡәҙәр йөҙөгөҙ ҙә, колхоз рәйесенән булһа ла машина алып, Мәләүез йә Күмертау дауаханаһына илтегеҙ. Йәһәтерәк, юҡһа, үлеме һеҙҙең намыҫта булыр”, – тип ҡаты ғына өндәшергә тура килде.

Табип – ул һөнәрҙән бигерәк йәшәү рәүеше. Медицина институты студенты диплом алыу менән бергә үҙен Рәсәй Федерацияһының Енәйәт кодексы рамкаһына индереп ҡуя. Ярҙамдан баш тартыу, эшкә һалҡын мөнәсәбәт һәм тағы бер нисә бурысты башҡармаған өсөн енәйәт яуаплылығына тарттырыу ҡаралған. Бында трахеотомия, ҡан ағыуын туҡтатыу, авария йә тән бешеүе кеүек киҫкен хәлдәрҙә ярҙам күрһәтеү күҙ уңында тотола. Табиптың “оноттом, ҡаушап ҡалдым, тәү тапҡыр тотондом, теләмәнем” һымаҡ аҡланыуҙары булырға тейеш түгел.

Аудиторияла берәй студенткаға күрһәтәм дә һәр ваҡыт былай тип һөйләйем:

– Бына ошо ҡыҙ уҡып бөткәс тә аҡыллы, бай кешегә кейәүгә сығыр. Бер нисә мең һумға туй күлдәге, фата һатып алырҙар. Шаулы, әселе-татлы туй бара. Ҡунаҡтарҙың берәүһе, тамағына ит киҫәге тороп, иҙәнгә ҡолай һәм иҫен юғалта. Туйҙағы берҙән-бер табип – кәләштең өс кенә минуты бар. Уға ошо арала трахеотомия эшләргә кәрәк. Йәғни, трахеяһын ҡырҡырға. Был – быяла киҫәге, маникюр наборы, бысаҡ менән яһарға мөмкин булған берҙән-бер операция. Уны табип дипломы булған һәр кем эшләй ала! Бәлки, ул бигүк дөрөҫ тә яһалмаҫ, әммә үпкәгә һауа инеү менән кеше яңылыш йотҡан нәмәһен йүткереп сығара һәм тын ала башлай. Терелә! Ҡалғаны – хирургтар ҡулында. Хоҙай ҡушмаһын, кеше үлеп ҡалһа, табип ҡыҙҙы һөйгән ире түгел, ә ...прокурор менән судья көтә.

Шулай уҡ һәр доктор бала табырға ярҙам итә, күршеләре, таныштарының киҫкен сирен билдәләп, белгестәргә ебәрә алырға бурыслы. Намыҫы булған һәр табип поезд вагонында ла, самолетта ла, автомобиль юлында ла үҙ ярҙамынан ҡалдырмай. Ҡайһы бер илдәрҙә руль артындағы докторҙың тәҙрәһендә ҡыҙыл тәре тора. Ул бер ниндәй ҙә авария йә һәләкәт янынан тыныс ҡына уҙып китә алмай!

Ә иртәгәһенә беҙҙе бөтә балыҡсыларҙың да хыялы – Йүкәлек ятыуы көтә ине. Шишмә эргәһенән уңайлыраҡ урын эләктереү өсөн, беҙ иртәрәк йөҙөп киттек. Был юлы өс һыу аҫты йөҙөүсеһе – ҡотҡарыусылар беҙҙең күршеләр булып сыҡты. Ятыуҙың төрлө урынына аҡ пенопласт ҡалҡыуыстар һалынғанлығын шәйләп ҡалдыҡ. Водолаздарҙың икәүһе ҡояш байымаҫ элек ятыуҙың бөтә тирә-яғын байҡап сыҡты.

Иртәнге аш ваҡытында шаҡ ҡаттыҡ: күршеләребеҙ һыу аҫты ҡоралдары менән унлаған йәйенде атып алған. Ҡалҡыуыс менән уларҙың йәшенеп ятҡан урындарын билдәләгәндәр икән. Сама менән 400 килограмлап табышты УАЗ прицебына тейәнеләр ҙә, ныҡ ҡына “йыуып“ алғас, урманға инеп киттеләр.

Бындай баш-баштаҡлыҡты мин яңыраҡ Интернеттың “Мобильный репортер, Юмагузино, водохранилище, рыбаки, браконьеры” сайтында күрҙем. Үткән йылдың февралендә браконьерҙар быуанан өҫтәрәк йылғаны кәртәләп (сайтта, Күмертауҙан 50 саҡрым алыҫлыҡта, тип яҙылған), бер көн эсендә ябай подсачек менән унлаған тонна суртан һәм алабуға (улар был ваҡытта йылғаның өҫ яғына ыуылдырыҡ сәсергә китә – **В. С.**) тотҡан. Етмәһә, видеоклипта үҙҙәрен исемләп атайҙар, ҡыҙыллы-йәшелле “Буран”дар күренә.

Был ваҡиғаға тиклем һыуһаҡлағыста һәр спиннингист көнөнә ун суртан тота ине (мин – ике тапҡыр күберәк – **В.С.**), ә һуңғы ике йылда балыҡсылар йылғаны арҡыры-буй гиҙә, уртаса ҙурлыҡтағы алабуға йә һыланан башҡа бер нәмә лә эләкмәй. Суртандар, динозаврҙар кеүек, үлеп бөткән, шуға күрә тиҙҙән Ағиҙел, Германия йылғалары һымаҡ, тере организмдарһыҙ, биологик яҡтан "саф" буласаҡ. Бындай "биологик яҡтан таҙа" Ағиҙелде мин һуңыраҡ күрҙем дә. Белореттан, уның металлургия комбинатынан, буғай, "эшкәртелгән" һыу сығарҙылар: унлаған, бәлки, йөҙләгән саҡрым йылға яры үлгән балыҡ менән ҡапланғайны! Уларға хайуандар, ҡоштар ябырылған, тирә-яҡ һаҫыған балыҡ еҫе менән тулған, шау-шыу. Ошонан һуң Ағиҙелдең балыҡ запасы кире тергеҙелмәне. Ташбаш, мәҫәлән, егерме йылдан һуң ғына күренә башланы.

Йүкәлек ятыуы беҙҙе лә буш итмәне. Бәрәмәткә ташбаш менән бергә һәр береһе 500-әр грамлыҡ игеҙәк ажауҙар эләкте. Беҙ уларҙы һуңғы туҡталышыбыҙ – Һыртлан ауылына саҡлы тере килеш еткерҙек. Сыҡыр алдынан бер аҙ "Митроха ташы"на (Митрошкин камень) тотоноп торҙоҡ. Бында, ғәҙәт буйынса, кемдер сәскә, шоколад йә шарап, араҡы ла ҡалдыра.

Легенда тарихын был урындарҙы бала саҡтан белгән Әмир һөйләне: ҡара көҙгә саҡлы Белореттан Стәрлегә күп һанлы баржаларҙа металл һәм руда ташығандар. Артабан уларҙы пароходтарҙа Рәсәй буйлап ебәргәндәр. Баржаны йылғаның иң ҡурҡыныс урынында лоцман (хәҙер шулай тип йөрөтөрҙәр ине) Митроха оҙатып барған. Бер ваҡыт Стәрлегә тиклем рудник хужаһы үҙе лә йөҙөп барырға булған. Ул яһиллығы, ҡыуғын ваҡытында эсергә яратыуы менән айырылып торған. Шулай, Митроха һүҙенә ҡолаҡ һалмағанмы, ағым көслө булғанмы – баржа ташҡа бәрелгән. Хужа барыһында ла егетте ғәйепләп, муйынына таш бәйләп һыуға ташларға әмер бирә. Ошо ваҡиғанан һуң был урынды "Митроха ташы" тип йөртәләр икән.

Һунғы пункт – Һыртлан ауылы, унда беҙҙе үҙенең машинаһында атайым – Ғәзиз көтә ине.

Бынан һуң да Ағиҙел буйлап бик күп тапҡырҙар төшөргә тура килде. Ҡыҙыҡ та, ҡыҙғаныс та ваҡиғаларҙың шаһиттары булдыҡ. Әммә тәүге сәйәхәтебеҙ иң үҙенсәлеклеһе булып иҫтә ҡалған. Ғүмер ҙә – аҡҡан һыу кеүек, күп нәмә үҙгәрҙе. "Герой"ҙарымдан – Рәхимйән, етмеште артылыуына ҡарамаҫтан, һаман үҙ районы дауаханаһында хирург йөгөн тарта. Һөйөштә бер үҙе ҡалған Ширғәле ағай, йорт һалып, Ырғыҙлыға күсенде. Күмертау дауаханаһы хирургы Джамал Мехтиев перитонитлы инженерҙы һауыҡтырыу өсөн күпме көс сарыф ителеүе хаҡында һөйләне: туғыҙ операция яһап, һигеҙ айҙан һуң ғына сығарғандар. Бәхеткә күрә, эшенә кире ҡайта алды. Илдус ун туғыҙ ғына йәшендә Төркмәнстанда хеҙмәт иткәндә мәрхүм булып ҡалды. Фәйзрахман алтмышын саҡ ҡына уҙып, инфаркт арҡаһында баҡыйлыҡҡа күсте. Лотфрахман, Фәйзрахман, Хәйбрахмандың ҡәберҙәренә йыш йөрөйөм.

Юғары көскә рәхмәт: беҙ Әмир менән етмеште лә артылдыҡ. Ййы сыҡҡан һайын ваҡытты бергә уҙғарырға, үткәндәрҙе хәтерләргә яратабыҙ...

**Венер СӘХӘҮЕТДИНОВ.**

## ХӘҘЕРГЕ БАШҠОРТ МАТБУҒАТЫ ҺӘМ ТЕЛ МӘҘӘНИӘТЕ

Һүҙемде хәҙерге милли матбуғатыбыҙ тураһында ҡыҫҡаса күҙәтеүҙән башлап ебәрмәксемен. Милли матбуғат – халҡыбыҙҙың тормошонда, рухи донъяһында, милли башҡорт китабы, милли мәғариф, мәҙәниәт, әҙәбиәт, сәнғәт, радио, телевидение менән бергә, асылда универсаль роль уйнаусы күренештәрҙең береһе ул. Улай ғына ла түгел, беҙҙә ваҡытлы матбуғатты элегерәк йәмғиәттәге дүртенсе власть тип йыш ҡабатлай торғайнылар. Был иһә ысынбарлыҡҡа ни тиклем яҡындыр, әйтә алмайым, әммә беҙҙең дәүерҙә милләтебеҙ яҙмышын һәм булмышын, унең бөгөнгөһөн һәм киләсәген милли матбуғатыбыҙҙан башҡа күҙ алдына ла килтереп булмайҙыр. Әле күптән түгел, ике тиҫтә йыл элек кенә, башҡорт телендә үҙ аллы баҫма булараҡ сығып килгән бер-ике генә гәзиткә – “Башҡортостан” гәзите менән “Башҡортостан пионеры”на (хәҙерге “Йәншишмә”гә) генә күҙ терәп торған булһаҡ, үҙ аллы башҡортса журналдар ҙа өсәү-дүртәүҙән артмаһа, бөгөнгө көндә беҙҙең кинәнеп уҡырлыҡ бихисап гәзит һәм журналдарыбыҙ бар. “Ватандаш”, “Шоңҡар”, “Аҡбуҙат”, “Башҡортостан панорамаһы”, “Тамаша”, “Йәшлек” – яңы дәүерҙә донъяға килгән яңы матбуғат баҫмалары. Районлар, ҡалаларҙың һәр береһендә тип әйтерлек башҡортса гәзиттәр сығарыу юлға һалынды. Шулар янына урыҫ һәм татар телдәрендә “Бельские просторы”, “Истоки”, “Толпар”, “Өмөт” кеүек баҫмалар өҫтәлде. Сыуаш, мари, удмурттар өсөн уларҙың һәр ҡайһыһының туған телендә гәзиттәр сығарыла. Фән донъяһында быға ғүмерҙә лә булмаған универсаль йөкмәткеле тиҫтәләрсә ғилми журналдар, ғилми яҙмалар нәшер ителә. Ә бына үткән йылда ғына элекке “Йәдкәр” журналы Рәсәйҙең көнсығыш өлөшө шәрҡиәтселәрен берләштереүсе “Шәрҡиәт проблемалары” (“Проблемы востоковедения”) тигән баҫма булараҡ донъяға сыға башланы. Көн тәртибендә – башҡорттар өсөн Рәсәй күләмендә урыҫ телендә дөйөм милли башҡорт гәзите сығарыу мәсьәләһе.

Күренеүенсә, матбуғатыбыҙ йылдам үҫеш дәүеренә аяҡ баҫты. Шул уҡ ваҡытта үҫеш, үҙгәреш процесы өр-яңы проблемаларҙы ла барлыҡҡа килтерҙе булһа кәрәк. Һәр хәлдә, матбуғат һан, күләм, темалар һәм проблемалар йәһәтенән бик ныҡ үҙгәрҙе, әммә журналистика өлкәһендә милли телебеҙҙең бөтөн нескәлектәрен белеп ижад итеүсе кадрҙарыбыҙ етәрлек кимәлдә әҙерләндеме һуң? Был иһә мәсьәләнең бер яғы булһа, икенсенән, әйтәйек, республика гәзит-журналдары редакцияларында, күпселеге башҡорт филологияһы өлкәһендә юғары белемле журналистар эшләгән хәлдә лә, туған телдең сафлығын һаҡлау, хаталарға юл ҡуймау, тел байлығын мөмкин тиклем тулыраҡ файҙаланыу йәһәтенән иғтибарһыҙлыҡ, тел мәҙәниәтенә ҡарата битарафлыҡ атмосфераһы урынлашып бара түгелме? Әгәр ҙә шулай булмаһа, гәзит биттәрендә урта мәктәп балалары

ла ебәрмәй торған хаталар тулып ятмаҫ ине. Бына, әйтәйек, ошондай элементар хаталарҙың береһе. “Башҡортостан” гәзитендә лә, “Йәшлек”тә лә йыш ҡына яңғыҙлыҡ исемдәрҙе (ер-һыу атамаларын, хатта ат исемдәрен, йәғни, ғөмүмән, зоонимдарҙы) тоталар ҙа тырнаҡ эсенә алып яҙалар. Бигерәк тә ипподромда, һабан туйҙарында үткәрелгән ат сабыштары тураһында яҙа башлаһалар, гәзит бите сып-сыбар булып тырнаҡтар менән тула ла ҡуя. Топонимияға арналған мәҡәләләр менән дә шул уҡ хәл ҡабатлана. Ғөмүмән, тыныш билдәләрен дөрөҫ ҡулланыу – матбуғатыбыҙҙа грамоталылыҡ йәһәтенән иң аҡһаған мәсьәлә. Ул инде һәр бер “тип” менән “тигән” һүҙҙәре алдынан ниңә өтөр ҡуяларҙыр – аңламаҫһың. Ҡағиҙә буйынса, ябай һөйләмдәрҙә эйә менән хәбәр араһында өтөр ҡуйыу шулай уҡ хата иҫәпләнә. Бына ошондай миҫалдарҙы тикшереп ҡарайыҡ: “*Мәғлүмәтле кеше, донъя менән идара итер”* тип яҙа гәзит авторҙарының береһе (“Башҡортостан”. 24.01.2007 ). Ябайҙан да ябай был һөйләмдә (ярай, ябай тарҡау һөйләм тип әйтәйек инде) эйә менән хәбәр араһында өтөр ниңә кәрәк булған икән? *“Әйҙә, телдәр өйрән, һөнәр ал, аҡыл тупла. Шунан тыуған төйәгеңә ҡайт та, халҡыңа хеҙмәт ит”* (“Киске Өфө”, 2010, №10, 1-се бит). Ғәжәп аҡыллы һәм фәһемле фекерҙәр. Әммә ләкин был ике һөйләмдә *“әйҙә телдәр өйрән”* һәм *“ҡайт та халҡыңа хеҙмәт ит*” тигәндә өтөр ҡуйыу бөтөнләй урынһыҙ. Башҡорт дәүләт академия драма театрында оҙаҡ ҡына ваҡыт “Әйҙәгеҙ танышайыҡ!” тигән бик шәп спектакль барҙы. Был әҫәрҙең исемендә лә бер ниндәй өтөр ҡуйыу кәрәк түгел. Ә инде икенсе һөйләмдә “ҡайт” һәм “хеҙмәт ит” – һөйләмдең тиң киҫәктәре. Ул ике һүҙ араһында “һәм” теркәүесе функцияһын үтәүсе “та” киҫәксәһе ҡулланылған. Тимәк, өтөр ҡуйыу урынһыҙ. Бөтөнләй кәрәкмәгән ерҙә өтөр ҡуйыу осраҡтарына йәнә бер миҫал: “Юртып килеп төшкән айғырҙы, боҙ күпер күтәрә алманы һәм емерелде” (“Башҡортостан”, 3.02.2010). Был шулай уҡ ғәҙәттәге ябай тарҡау һөйләм һәм, әлбиттә, “айғырҙы” тигәндән һуң бер ниндәй өтөр кәрәк түгел.

Матбуғат телендә һәм, ғөмүмән, әҙәби телебеҙҙә, ныҡ үҫешкән милли әҙәби тел булараҡ, һөйләмдең эйәрсән киҫәктәре бик киң ҡулланыла. Иғтибар итегеҙ: һүҙ һөйләмдең айырымланған эйәрсән киҫәктәре тураһында бара. Шул йәһәттән айырымланған хәл әйтеме ҡулланылған ошондай бер һөйләмде ҡарап үтәйек: *“Башҡорт егете Ирек Зарипов дүрт алтын миҙал яулап, Рәсәй данын ситтәргә танытты”* (“Башҡортостан”, 20.03.2010). Был һөйләм ҡайҙалыр мәҡәләнең эсендә түгел, ә бәлки, айырым бер баш булараҡ, иң ҙур гәзитебеҙҙең беренсе битендә ҙур хәрефтәр менән баҫылып сыҡты. Ләкин, үкенескә ҡаршы, редакцияла *“дүрт алтын миҙал яулап”* тигән хәл әйтемен ике яғынан да өтөр менән айыра белерлек бер генә кеше лә табылмаған. (Һөйләмде, тыныш билдәләренең дөрөҫ ҡулланылышын күрһәтеп, яңынан күсереп яҙайыҡ: “Башҡорт егете Ирек Зарипов, дүрт алтын миҙал яулап, Рәсәй данын ситтәргә танытты”.)

Һөйләмдә, һүҙбәйләнештәрҙә һүҙ тәртибе тигән үтә лә мөһим төшөнсә бар. Был эске законлылыҡ һәр телдең үҙе өсөн генә характерлы грамматик төҙөлөшө менән бәйле. Әммә беҙгә башҡорт теленең был эске тәбиғәте үҙ-үҙенә талапсанлыҡ күрһәтмәүсе журналистарыбыҙҙың, яҙыусыларҙың һәм, әлбиттә, мөхәррирҙәрҙең “эшмәкәрлеге” арҡаһында күҙгә күренеп боҙолғандан-боҙола бара. Шул уҡ бик йыш ҡулланылған *“булып тора”* тигән ҡылым формаһын ғына алып ҡарайыҡ. Был аналитик ҡылым формаһын икегә бүлеп ҡулланыу аҙым һайын осрай башланы хәҙер. Был хата хатта балалар матбуғаты теленә лә барып керҙе

быны. “Йәншишмә” гәзитенән (2.06.2010. 3-сө бит) түбәндәге һөйләмде уҡып ҡарайыҡ: *“Беҙҙең өсөн ойошманың ағзалары булып билдәле киноактерҙарҙың, йырсыларҙың тороуы ла яңылыҡ ине”*. Авторҙың, урыҫса уйлап, башҡортса яҙғанлығы күренеп тора. Әгәр һөйләмдә һүҙ тәртибен әҙәм рәтенә килтерергә кәрәк булһа, уны ошолай итеп мөхәррирләргә тейеш булыр инек: *“Беҙҙең өсөн билдәле киноактерҙарҙың, йырсыларҙың ойошмала ағза булып тороуы ла яңылыҡ ине”*.

Миәкә районынан бер уҡытыусының ғилми йыйынтыҡта баҫылған “Туған телгә һөйөү тәрбиәләйбеҙ” тигән мәҡәләһенән ошондай миҫал яҙып алдым: *“Уҡытыусының бурысы булып балаларҙы туған телдә уҡырға, һөйләргә, яҙырға өйрәтеү түгел, ә телгә ҡыҙыҡһыныу уятыу, үҙҙәре йәшәгән төйәккә, халыҡҡа һөйөү тәрбиәләү ҙә тора”*. Бында, һүҙҙе ҡыҫҡараҡ тотоп, иң элек түбәндәге һүҙбәйләнештең дөрөҫ яҙылышы ниндәй булырға тейеш икәнлеген күрһәтер инем: *“үҙҙәре йәшәгән төйәккә, халыҡҡа һөйөү тәрбиәләү ҙә уҡытыусының бурысы булып тора”* тиһәң, һөйләмдә һәр бер һүҙ үҙ урынына ултырыр ине. Икенсенән, “уҡытыусы балаларҙы туған телдә уҡырға, һөйләргә, яҙырға өйрәтеү түгел” тигәндә автор, моғайын, “өйрәтеү *генә* түгел”, “өйрәтеү менән *бергә*” тип әйтергә уйлағандыр, әммә, уның яҙыуынса, “уҡырға, һөйләргә, яҙырға” өйрәтеү кәрәкмәгән эш булып сыға түгелме һуң? Бының менән һис кенә лә килешеп булмай, әлбиттә.

Алда телгә алынған йыйынтыҡта танылған әҙәбиәт белгесенең “Манифестацион-публицистик шиғриәт һәм Аҡмулла шиғырҙары” исемле мәҡәләһендә шул уҡ *“булып тора”* тигән ҡылым формаһы бына нисек ҡулланылған: “Ошо әйтелгәндәрҙең шиғриәтебеҙ тарихындағы сағыу бер дәлиле булып күренекле мәғрифәтсе-шағир Мифтахетдин Аҡмулла ижады тора”. Ә бит был осраҡта һөйләмдә һүҙ тәртибе ошондайыраҡ булырға тейеш ине: “Күренекле мәғрифәтсе-шағир Мифтахетдин Аҡмулла ижады ошо әйтелгәндәрҙең шиғриәтебеҙ тарихындағы сағыу бер дәлиле булып тора”. “Булып тора” икән, булып торһон ине инде ул. Һөйләмдәрҙә, һүҙбәйләнештәрҙә урыҫ теленән һүҙмә-һүҙ күсереп тәржемә теле тыуҙырыу ауырыуы художестволы әҙәбиәткә, хатта шиғриәткә лә килеп керҙе. Бына “Башҡортостан” телевидениеһында күптән инде Альбина Фәйзуллина тигән журналист, һүҙ ҙә юҡ, бик күркәм тапшырыуҙар алып бара. Ә тапшырыуҙарҙы ул, билдәле бер шағирҙың шиғырынан алып, *“Яҙмыштарҙа ете йәйғор төҫө”* тип атаған. Ни өсөн “ете йәйғор төҫө”? Сөнки – был урыҫса “семь цветов радуги” тигән һүҙбәйләнештең туранан-тура тәржемә ителгән “өлгөһө”. Әмәлгә ҡалғандай, урыҫ телендә ул “семь” һүҙе менән башлана икән дә баһа. Шуның өсөн дә авторҙың, башҡортса дөрөҫ итеп, “йәйғорҙоң ете төҫө” тип әйтергә теле әйләнмәгәндер инде, күрәһең. Телебеҙҙе хөрмәт иткән, үҙ аллы фекерләй белгән кеше был тапшырыуҙы, үҙе өсөн өлгө итеп алған шағирҙың хатаһын ҡабатламайынса, “Яҙмыштарҙа – йәйғорҙоң ете төҫө” йә иһә “Яҙмыштарҙа – йәйғор төҫтәре” тип атар ине, моғайын. Юғиһә “ете йәйғор төҫө” тигәнде ҡабат урыҫ теленә тәржемә итеп ҡараһаң, *“цвет семи радуг”* булып сыға түгелме? Был инде – төптө мәғәнәһеҙлек. Үкенескә, Башҡортостан телевидениеһында тапшырыуҙар серияһының авторы ла, телевидениеның мөхәррире лә был мәғәнәһеҙлекте аңларға ла, төҙәтергә лә теләмәйҙәр.

Ҡатмарлы һөйләм конструкцияларында дөйөм бер мәғәнәгә эйә булған тоторoҡло һүҙбәйләнештәрҙе тарҡатып ҡулланыу осраҡтары ла ғәйәт йыш күҙәтелә.

Мәҫәлән, “Башҡортостан” гәзитендә (20.03.2010) 2010 йылда Бөтөн Рәсәй халыҡ иҫәбен алыуға әҙерлек эштәренә арналған кәңәшмә тураһындағы информация ошолай башланып китә: “Өфөлә БР Хөкүмәте ҡарамағындағы 2010 йылда Башҡортостан Республикаһында Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыуға әҙерлек һәм уны үткәреү буйынса комиссия ултырышы булды”. Һүҙ бында Өфөлә 2010 йылда Башҡортостан Республикаһында Бөтөн Рәсәй халыҡ иҫәбен алыуға әҙерлек һәм уны үткәреү буйынса *БР Хөкүмәте ҡарамағындағы комиссия ултырышы* тураһында бара. Тимәк, был һүҙбәйләнеште тарҡатып ҡулланыу урынлы булмаған.

“Аҙна” гәзитендә бер мәҡәлә (1-7.06.2010) “БР Хөкүмәтенең сираттағы ултырышы” тип әйтәһе урында “Сираттағы БР Хөкүмәте ултырышы” тип башлана. *“Сираттағы ултырыш”* менән “сираттағы БР Хөкүмәте” тигән һүҙбәйләнештәр араһында ер менән күк айырмаһы икәнлеген аңлатып тороу ҙа артыҡ булһа кәрәк.

Гәзит-журналдарыбыҙҙа, радио һәм телевидениела көн һайын тип әйтерлек һүҙҙәрҙең әйтелешен һәм яҙылышын күрәләтә боҙоу, дөрөҫ ҡуллана белмәү күренешенә тап булып торабыҙ. Мәҫәлән, муллаларыбыҙ, уҡымышлыларыбыҙ элек-электән *пәйғәмбәр* тип йөрөткән үтә оло мәғәнәле һүҙҙе әҙәби телебеҙгә “бәйғәмбәр” формаһында индереп ебәрергә тырышыусылар табылды. Урыҫса *караван,* башҡортсаһы – *каруан,* Ырымбурҙағы атаҡлы тарихи ҡомартҡыбыҙ ҙа – Каруанһарай. Был һүҙҙәр бик йыш ҡулланыла һәм – ғәжәп! – һәр ваҡыт тиерлек хата менән яҙыла. Бер күренекле шағир хатта “Ваҡыт карауаны” тигән китап та сығарҙы. “Каруанһарай” эстрада төркөмөнөң афишаларында ул атама “Ҡаруанһарай” булып китә. Әммә һүҙҙең һәм атаманың башҡортса дөрөҫ әйтелеше *каруан,* Каруанһарай булырға тейеш.

“Был тормошта уйламаған ерҙә... абынып-һөрөнөүең, йәберләнеүең, зыян күреүең ихтимал”, – тип яҙа “Йәшлек”тең әүҙем авторҙарының береһе (29.05.2010, 5-се бит). Әммә дөрөҫө абынып-һөрөнөү түгел, ә, бәлки, абынып-һөрлөгөү. Башҡорт шулай уҡ “йөҙөп эшләйем” тип һөйләмәй, ә *йөҙөп йөрөп эшләй* ул! “Донъя көтөү” урынына,– имеш, “тормош көтөү”, “бар” тип кенә әйтәһе урында – “юҡ түгел” тип һөйләү ҙә телгә иғтибарһыҙлыҡтан килә. Нәшерләү, тәржемәләү түгел, ауыҙ тултырып, *нәшер итеү, тәржемә итеү* тип әйтә торғайныҡ та баһа! Хәҙер *яҡын, бәләкәй, тәпәшәк, ауыр* кеүек сифаттар көндән-көн ҡулланыуҙан бөтөнләй төшөп ҡалыуға табан бара. Сөнки был һүҙҙәр “йыраҡ түгел”, “ҙур булмаған”, “бейек түгел”, “еңел булмаған” һымаҡ туранан-тура урыҫ телендәге “недалеко”, “небольшой”, “невысокий”, “нелегкий” һүҙҙәренең калькалары менән алмаштырыла. Матбуғатта әлдән-әле ҡабатланып торған хаталарҙы күреп, бөтөн ғүмерҙәрен башҡорт телен һәм уның һүҙ байлығын өйрәнеүгә, фән донъяһында юғары баһа алған башҡорт теле дәреслектәрен яҙыуға, лөғәттәребеҙҙе төҙөүгә арнаған бер нисә быуын атаҡлы тел белгестәребеҙҙең оло хеҙмәтен ҡәҙерләй белмәүебеҙ өсөн һыҙланып та ҡуяһың. Дәреслектәребеҙҙең, һүҙлектәребеҙҙең хәҙер ниндәйе генә юҡ! Теге йәки был ҡағиҙәне онотҡанһың йәки айырым бер һүҙҙең дөрөҫ яҙылышын белмәйһең икән, шул баҫмаларыбыҙҙы ҡулланып эш итергә тейешбеҙ ҙә инде, йәмәғәт! Ә инде ундай ҡулланмалар китап йәки гәзит мөхәррирҙәренең һәр ваҡыт ҡул осонда тороуы фарыз, тип әйтер инем.

Телевидениела “Яңылыҡтар” программаһын алып барыусы популяр дикторҙарыбыҙҙың береһе һуңғы ваҡытта “һуң” һүҙен “аҙаҡ” һүҙе урынында ҡулланып, бутап һөйләй башланы. *“Яңылыҡтыр һуңында* һауа торошо тураһында

сығарылыш тыңларһығыҙ”, – тип аптырата ул. Яңылыҡтарҙың *һуңы* булмай, ә *аҙағы* була. Йәки “Яңылыҡтарҙан һуң” тип әйтергә мөмкин. Ошондай уҡ хата “Башҡортостан“, “Йәшлек”, “Киске Өфө”, “Йәншишмә” гәзиттәренең теленә лә кереп китеп бара. *“Кисә һуңында уҡыусылар шағирҙар менән иҫтәлеккә фотоға төштө”*, – тип яҙа, мәҫәлән, “Йәшлек“ гәзитенең бер авторы (1.06.2010, 8-се бит) “кисәнән һуң”, “кисәнең аҙағында”, “кисә тамамланғас” тип әйтәһе урында. Әле иҫкә төшә: бер осрашыу ваҡытында билдәле бер шағирә, элекке Президентыбыҙ ҡулынан награда алғандан һуң, рәхмәт белдереп: “Һеҙгә һуңғы китабымды бүләк итәм”, – тип шул һүҙҙе әйтеүе булды, йор һүҙле Мортаза Ғөбәйҙулла улы: “Нишләп, һуңғы булмаһын инде ул”, – тип шағирәнең хатаһын төҙәтеп, көлдөрөп тә алғайны. Ысынлап та, “һуңғы китабым” тип әйтәһең икән, “бүтәнсә китабың сыҡмай” тигән мәғәнәгә лә урын ҡала ла баһа. Шулай, уйламай әйтеп, кеше үҙ юлына үҙе кәртә һалып та ҡуя ҡайһы саҡта. Һөйләй белмәгән ауыҙ алама нәмә тип юҡҡа ғына әйтелмәгәндер инде ул.

Башҡорт әҙәби телендә тағы ла бер мәғәнәһеҙлек хәҙер инде ныҡлап урын алды. Бөтөн тип әйтәһе урында *бөтә* тип яҙыу ғәләмәте килеп керҙе телебеҙгә. Йәнәһе, *бөтөн донъя (весь мир), бөтөн ил (вся страна), бөтөн халыҡ (весь народ)* түгел, ә бөтә донъя, бөтә ил, бөтә халыҡ тип яҙырға һәм һөйләргә тейешбеҙ. 2002 йылда, II Бөтөн Донъя башҡорттары ҡоролтайы алдынан, мин был хатаны төҙәтеү мәсьәләһен күтәреп ҡараным, ләкин телселәребеҙ араһынан был тәҡдимде яҡлаусы кеше табылманы. Хәҙер бына, имеш, “III Бөтә донъя ҡоролтайы” тигән булып, телде белгән, телде тойған ғәм халыҡ алдында үҙебеҙҙе көлкөгә ҡалдырабыҙ. Донъялағы утыҙҙан артыҡ төрки теленең береһендә лә бөтә донъя, бөтә ил тигән һүҙҙәр ҡулланылмай. Ул ҡаҙаҡта ла, татарҙа ла “бөтөн донъя”, “бөтөн ил”, “бөтөн халыҡ” формаһында йөрөй. “Бөтә донъя” тип яҙаһың икән, тимәк, Алла һаҡлаһын, урыҫса әйткәндә “мир кончается” тигән мәғәнәгә лә урын ҡала бит. Шуны аңлап, хатаны төҙәтергә ваҡыт та баһа. Әйткәндәй, “Йәшлек”, “Киске Өфө”, Ишембайҙа сығып килгән “Торатау” һымаҡ гәзиттәрҙең аҡыллы журналистары һәм мөхәррирҙәре был нескәлекте күптән аңланылар. “Бөтөн донъя”, “бөтөн ил”, “бөтөн халыҡ”, шулай уҡ, әлбиттә, “III Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы” тип яҙа ул гәзиттәр. Илебеҙ, йортобоҙ, халҡыбыҙ шулай берҙәм һәм бөтөн булып, инде IV Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайын да имен-аман ҡаршыларға насип булһын, иншалла!

Гәзит-журнал биттәрендә фактик хаталарға бик йыш юл ҡуйыла. Редакция хеҙмәткәрҙәренең иғтибарһыҙлығына, битарафлығына иҫең китерлек. Мәҫәлән, “Йәншишмә”нең III Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайына арнап сығарылған номерында (9.06.2010, 2-се бит) бер мәктәп уҡыусыһының “Үҙебеҙҙән үҙебеҙ оялмайыҡ” тигән тәрән патриотик йөкмәткеле мәҡәләһендә: “Тарихҡа байҡау яһаһаҡ, XVI быуатта уҡ ете ырыу етәкселәре Екатерина II менән урыҫ телендә фекер алышҡан”, – тигән һүҙҙәргә тап булдым. Йә, уйлап ҡарағыҙ, Екатерина II XVI быуатта йәшәгәнме лә Иван Грозный заманындағы ете ырыу башлыҡтары Екатерина II менән осрашҡанмы?

Быйыл “Башҡортостан” гәзите башҡорт “журналистикаһының яңы баҫҡысы” тип баһа алырҙай “Тарих яҙыр инем ташына” тигән интервьюлар серияһын ойошторҙо. Һүҙ ҙә юҡ, бик ваҡытлы һәм кәрәкле серия. Мин дә ҡатнаштым унда. Хәҙер ул “Китап” нәшриәтендә айырым йыйынтыҡ итеп баҫып та сығарылды. Әммә һис юғы ошондай яуаплы материалдарҙы әҙерләгәндә бер мискә балға бер ҡалаҡ дегет һалмайынса эш итеп булмаймы икән ни? Интервьюларҙың береһендә (30.04.2010) яҙылғанса, мәҫәлән, Минин һәм Пожарский

Мәскәүҙе поляк интервенттарынан азат итеү өсөн XII быуатта көрәшкә күтәрелгән булып сыға, 922 йылда хакимлыҡ иткән Болғар батшаһы Шилки улы Алмуштың исеме – Алтмыш, боронғо башҡорт ҡалаһы Немжан иһә – Нажман, Сәйет Садиров – Сәйет Сабуров, “зороастризм” һүҙе “зараостризм” булып киткән, ә “егеттәр, ҡыҙҙар” тип әйтәһе урынға “егет-ҡыҙҙар” тип яҙа журналист. Интервьюлар китапта баҫылып сыҡҡас, хаталар төҙәтелдеме икән, тип, әлеге текстарҙы сағыштырып ҡараным. Юҡ шул, бер генә хатаны ла төҙәтеүсе табылмаған. Ә инде ул “егет-ҡыҙҙар”, “ҡыҙ-малайҙар” тигән һүҙҙәрҙе нисек аңларға? Мин уны, ғәфү итегеҙ, ҡыҙтәкәләр тип аңлайым. Ә бит “егеттәр, ҡыҙҙар” “ҡыҙҙар, малайҙар” – нисек матур яңғырай ҙа баһа!

Ә бына *әйәле* тигән ырыуҙы беләһегеҙме? Башҡортса ундай ырыу ҙа, ҡәбилә лә юҡ, тиерһегеҙ. Әммә, “Башҡортостан” гәзитендә яҙылғанса, (8.06.2010, 3-сө бит) боронғо башҡорт-болғар шағиры Ҡол Ғәли *әйле* ырыуы түгел, ә бөтөнләй донъяла булмаған *әйәле* ырыуы вәкиле булған икән дә баһа. Мәҡәләне баҫып сығарырға әҙерләүселәр, иғтибарлыраҡ булһалар, ундай хатаны тотоп алырҙар ине лә бит ни, юҡ шул инде...

Телгә иғтибарһыҙлыҡ – матбуғатыбыҙҙа тел мәҙәниәтен күрәләтә түбәнгә табан һөйрәүсе түҙеп торғоһоҙ күренеш. Битарафлыҡҡа, наҙанлыҡҡа, ялҡаулыҡҡа юл ҡуйыла икән, туған телде яҡлау һәм һаҡлау, уны байытыу, камиллаштырыу мөмкинлеге бермә-бер сикләнә. Бик үкенесле хәл. Быға ҡаршы юғары кимәлдә һәм даими үткәрелә торған саралар системаһын эшләргә һәм ғәмәлгә ашырырға кәрәк тип иҫәпләйем.

Ошондай саралар рәтендә мин бер нисә тәҡдим индермәксемен. Беренсенән, **милли матбуғат, нәшриәт, радио, телевидение өлкәһендә эшләүсе журналистар, мөхәррирҙәр өсөн билдәле бер ваҡыт арауығында (әйтәйек, биш йыл һайын), грамоталы яҙыу һәм һөйләү кимәлен билдәләү маҡсатында, башҡорт теле буйынса аттестация үткәреү дөрөҫ** булыр ине. Икенсе тәҡдим: **“Башҡорт теле” тигән махсус журнал сығарыу –** өлгөрөп еткән мәсьәлә. Ундай махсус баҫмабыҙ булһа, тел мәҙәниәте мәсьәләләрен даими яҡтыртып барырға мөмкинлек тыуыр ине. Өсөнсө тәҡдим. Был – минең башҡорт телен белгән бөтөн ғалимдарыбыҙға, фәндең, белемдең бөтөн тармаҡтарында эшләүсе белгестәребеҙгә (шул иҫәптән иң элек тарихсылар, этнографтар, геологтарға һ.б.) мөрәжәғәтем. Әйҙәгеҙ әле башҡорт телендә ғилми һәи ғилми-популяр хеҙмәттәр, китаптар яҙайыҡ, милли әҙәби телебеҙҙең ҡулланыу сфераһын киңәйтә барыу өсөн ҡулыбыҙҙан килгәндең бөтөнөһөн дә эшләйек, туғандар!

**Рәшит ШӘКҮР,**
**филология фәндәре докторы,**
**профессор, Бөтөн Донъя башҡорттары ҡоролтайы**
**(конгресы) башҡарма комитетының тарих,**
**тел һәм рухи мәҙәниәт буйынса комиссия рәйесе.**

## ЯҘҒА ҺӘМ ЯҠТЫЛЫҠҠА ҒАШИҠ РӘССАМ



Таныштар миңә, атайың Борис Домашниковтың остазы булған икән, уның һинең менән күрешкеһе килә, тиһәләр ҙә, осрашыу оҙаҡҡа һуҙылды. Ваҡыт булманы, шулай ҙа, һуңлабыраҡ булһа ла шылтыраттым:

– Килегеҙ, – тине Борис Федорович, – Мин көнө буйы оҫтаханала.

Уның оҫтаханаһы Өфөнөң элекке Крупская паркы аръяғында Ағиҙел ярындағы 14 ҡатлы йортта, бик матур ерҙә, урынлашҡайны. Хәҙер парк Салауат Юлаев исемен йөрөтә. Яҡында ғына С. Т. Аксаковтың йорт-музейы.

Рәссамдың улы Виктор иркен, бейек түшәмле бүлмәгә индерҙе, һәм мине бәләкәй кәүҙәле, ябай кейемле рәссам ҡаршыланы.

Ул ғаиләбеҙ хаҡында һорашты, мин уға атайымдың фотоһүрәттәрен күрһәттем, ә ул остазы хаҡындағы хәтирәләре менән уртаҡлашты. Минең атайым, рәссам һәм педагог Николай Турицын, Пермь өлкәһенең Көнгөр ҡалаһында тыуып үҫкән. Заманы талабынса, яҡшы мәғәнәләге соцреализм стилендә яҙыусы рәссам ине.

Борис Федорович уның картиналарын күрергә теләне, әммә, үкенескә ҡаршы, әсәйемдә уның ике бөртөк кенә хеҙмәте һаҡлана ине.

Борис Федорович Домашников 1924 йылдың 5 апрелендә Иваново өлкәһенең Лушск районына ҡараған Кригоузово ауылында тыуған. Ябай крәҫтиән ғаиләһендә дүрт малай, бер ҡыҙ үҫә. Бала сағында уны рәссамлыҡ даирәһенә ылыҡтырыусы булмай. Мәктәпкәсә йәшендә үк ул ата-әсәһенең эштән ҡайтыуына ҡағыҙҙан йәнлектәр, ат һүрәттәре ҡырҡып өйҙәрен биҙәп ҡуйыуын хәтерләй.

1935 йылда Домашниковтар социализм төҙөлөшөнә Өфөгә килә. Атаһы менән әсәһе моторҙар төҙөү заводында эшләй башлай. Ҡаланан ситтәге Сиған яланындағы землянкала, һуңыраҡ аэропорт тирәһендәге (“Мир” фирмаһы районы) коммуналкала йәшәйҙәр. Байтаҡ йылдарҙан һуң Үҙәк баҙар эргәһенән фатир алалар.

Һуғыш ваҡытында Борис Домашников ҡала коммуналь хужалығының художество оҫтаханаһында хеҙмәт итә. Сағыу лозунгылар, плакаттарҙан тыш, уға ҡәбер таштарына яҙырға ла тура килә. Ул ауыр замандарҙа кешеләр күп ҡырыла, күбеһе – хәрби госпиталдәрҙәге яугирҙар һәм офицерҙар. Бәхеткә күрә, бындай сараһыҙлыҡ уның күңелен ҡатырмай. Үҙенең ҡасан да булһа рәссам булырына ышанысын юғалтмай.

Башланғыс художество белеме булмаған көйө Борис Домашников һуғыштан һуң художестволы театр училищеһына имтихандар тапшыра һәм декоратив-художество бүлегенә уҡырға инә. Ул заманда училищела 5 йыл уҡырға кәрәк була (әле 4 йыл). Уҡыуҙы 1950 йылда тамамлай һәм рәсем, һыҙма уҡытыусыһы итеп



*“Май. Ҡайынлыҡ”. 1960.*

мәктәпкә эшкә ебәрелә. Әммә уҡытыусы рәссамлыҡ хыялын ташламай. Көн һайын пленэрға сыға. Теләһә ниндәй һауа шарттарында, теләһә ниндәй яҡтылыҡта ла живопись тигән ҡатмарлы жанрҙың серҙәренә төшөнөргә тырыша.

“Азат рәссам” тормошо икмәк ашатмай, шуға ла ул йылдарҙа рәссамға матди ҡытлыҡ шарттарында йәшәргә тура килә. Моторҙар төҙөү заводында эшләүсе ата-әсәһе лә әллә ни мандый алмай ғына көн күрә. Әммә ул күңел төшөнкөлөгөнә бирелмәй. Киңлек, яҫылыҡ төшөнсәләрен киндер туҡымаға төшөрә лә төшөрә. “Художестволы пейзаж тәбиғәттең күсермәһе генә була алмай” тигән ҡағиҙәгә төшөнә рәссам.

Студент ваҡытында уҡ Домашниковтың “Паркта”, “Баркала” тигән картиналары 1949 йылда ойошторолған республика күргәҙмәһенә ҡуйыла. Ә 1953 йылда уға шәхси күргәҙмә күрһәтергә насип итә. Рәссамдың 50-се йылдар башында яҙылған “Өфө янында”, “Ҡыш”, “Сәскәләр” картиналары йәш оҫтаның сағыу һәләтен күрһәтеп тора. Был тәүге осорҙағы әҫәрҙәрҙә киңлек оҫталарса “ойошторола“, уларҙа төп теманан ситләштереүсе элементтар юҡ, күҙ күргән ландшафттың “фотографияһы” түгел, рәссам күңеле кисергән пейзаж уның картиналары аша тәбиғи күренеш итеп ҡабул ителә.

“Нимәнелер ижад итеү өсөн – үҙеңдең дә кемдер булыуың зарур”. Домашников – лирик кисерешле рәссам. Есениндың ижадын ярата, уның байтаҡ шиғырҙарын яттан һөйләй торғайны, 78 йәшендә лә хәтере һәйбәт, зиһене яҡты булды.

“Тыуған ил манзараһы” XIX быуаттың икенсе яртыһынан башлап Рәсәйҙә баһаланмай башлай. Сәбәбе рәссамдарҙа түгел, ә картиналар яҙҙырырға заказ биреүсе байҙар Италия пейзажын, Альп тауҙары тәбиғәтен һынландырыуҙы

талап итә. Был хаҡта А.К. Саврасовтың иҫтәлектәрендә лә телгә алына. Әммә ул замандаштарының иғтибарын тыуған тәбиғәт матурлыҡтарына йүнәлтеүгә өлгәшә. Күсеп йөрөүсе күргәҙмәләрҙең тәүгеһенә үк ул “Ҡарғалар ҡайтты” картинаһын ҡуйып, Рәсәйҙең милли пейзажы йүнәлешенә нигеҙ һала. Уның картинаһында сабыр тынлыҡ, аҡлыҡ, яҡтылыҡ бар. Пейзаж Рәсәй һынлы сәнғәтенең иң таралған жанрҙарының береһенә әүерелә. Шуға ла киләсәк быуын рәссамдары өсөн был төрлө живопись аша үҙ самимилығын танытыу еңел булмай.

Борис Домашников жанрҙы оҫталарса үҙләштерә. 1957 йылда ул “Ҡаланан ситтәге эңер” тигән картина яҙа, һәм ул Мәскәүҙә уҙғарылған Бөтә донъя йәштәре фестивале күргәҙмәһенә ҡуйыла. Был тәрән поэтика стилендә яҙылған әҫәр көмөш миҙал менән бүләкләнә, һуңынан картинаны Рус музейы һатып ала. 1955 йылда рәссамдар өсөн Урал буйлап ойошторолған ижади сәйәхәттән һуң Домашников “Көньяҡ Урал буйлап” тигән картиналар серияһын башлап ебәрә. Ул 1957 йылда “Кер сайҡайҙар” картинаһынан башланып, 1993 йылда “Ҡарт Урал” менән тамамлана.

1960 йылда ул беренсе тапҡыр Италияға бара. Унда “Аллаһ беҙҙең менән” исемле альбомы өсөн 1950 йылда “Донъяның Алтын миҙалы” менән бүләкләнгән данлыҡлы график, живопись оҫтаһы, коммунист Ренато Гуттузо менән таныша. Алтмышынсы йылдарҙа рәссам Рәсәй ҡалалары буйлай сәйәхәт итә. Бөйөк Ростов, Псков, Новгород ҡалаларының күренештәрен яҙа. “Псков ерендә” тигән картиналағы бейек һәм тәрән күк йөҙө, “Римдың Антонийы” полотноһындағы мөһабәтлек, “Август айындағы София”лағы аҡлыҡ-паклыҡ, “Боронғо ерҙәрҙә” картинаһындағы драматик кисерештәр – рәссамдың был осор хеҙмәттәре ана шундай күп яҡлы ритм һәм колоритҡа ҡоролған. Үҙе яратҡан лирик мотивтарҙан тыш, Домашников йәнә “героик пейзаж” темаһын да үҙләштерә. 1974 йылда ул “Урал хаҡындағы хикәйә” картинаһын яҙа, һәм унда Бажов әҫәрҙәрен иҫкә төшөрөүсе персонаждар барлыҡҡа килә. Тәнҡитселәр Домашников ижадының “әҙәбиле”генә иғтибар итә башлай.

70-се йылдар аҙағы – 80-се йылдар башында рәссам, күңеленә яҡын Өфө тирәһе, Йоматау манзараларынан тыш, илебеҙҙең героик уҙғаны хаҡындағы картиналар ижад итә. Мәскәүҙең Ҡыҙыл майҙаны хаҡында уның бер нисә картинаһы бар.

Рәсәй манзараһында һәр саҡ һағыш була. Был һағыш, ғәҙәттә, иркен киңлектәрҙән дә, тормошҡа ашмаған хыялдарҙан да бөркөлөп тороусан. Ә Домашников манзараларында һағыш юҡ, уларҙа лирик кисерештәр сағылышы бар. Уның оҫтаханаһы стеналарына яҙ күренештәре эленгән: “Өфө ситендә. Яҙ” (1954), “Апрель” (1954), “Вишерҙағы яҙ” (1961), “Йәнә яҙ килде” (1974), “Яҙғы уйланыуҙар” (1974), “Боҙ китеү” (1989), “Май. Кис” (1993).

Мин унан ҡайһы рәссамдарҙы яҡын күреүе хаҡында һорағаным булды.

– Левитан менән Бялыницкий-Бируля, – тип яуап бирҙе ул. Эйе, йәнеңә яҡын булғандарҙы үҙ күрәһең шул. И. И. Левитан, мәҫәлән, Саврасовтан һуң тәбиғәт манзараһы оҫтаһы булып танылa, уның аша кеше күңеленең һағышын тасуир итеүгә өлгәшә. Уның “Март”, “Мәңгелек тынғылыҡ”, “Владимирка” картиналарын иҫкә төшөрөү ҙә етә. Витольд Бялыницкий-Бируля ла – пейзаж оҫтаһы. “Боҙ ҡуҙғалыу”, “Йәш май кисе”, “Көҙ уйсанлығы” картиналарында Левитан йоғонтоһон күрмәү мөмкин түгел.

Башҡортостан рәссамдарынан Александр Бурзянцев, Владимир Пустарнаков, Алексей Кузнецов, Әхмәт Лотфуллин ижадын ярата ине Домашников, улар менән дуҫтарса мөнәсәбәттә булды. Бөгөнгө көндә киң танылыу алған Сергей Красновҡа ла хөрмәт менән ҡараны. Үҙе тәбиғи стилдә эшләүсе булараҡ, уның фантастикаһын бик үк ҡабул итмәне шулай ҙа.

Бер юлы бер нисә полотно өҫтөндә эшләй ҙә ала Домашников. Үҙенең аңлатыуынса, рәссам башлыса күләмле картиналар яҙыр була һәм бер төрлө генә эш

уны ялҡыта. Минең уйымса, уны һәр ваҡыт яңы идеялар әйҙәп торғандыр, шуға ла төп эше янына яңы киндер кереп, унда киләсәккә эшен тамғалай барғандыр.

Брежнев заманының күп ҡатлы йорттарының береһендә урынлашҡан өс бүлмәнән ғибәрәт оҫтахана уға, республика, СССР, Чехословакия, Франция күргәҙмәләрендә ҡатнашып, “РСФСР-ҙың халыҡ рәссамы” исемен алғандан һуң, 1979 йылда ғына, бирелә. 1982 йылда ул “СССР-ҙың халыҡ рәссамы” исемен яулай, 1996 йылда Рәсәй Художество академияһының ағза-корреспонденты итеп һайлана.

“СССР-ҙың халыҡ рәссамдары” тигән проект сиктәрендә Б. Домашниковтың портретын яҙыу эше Рәшит Хәбировҡа тапшырыла.

– Мине заказ шатландырҙы, – тип иҫләй Рәшит Солтан улы, – сөнки Борис Федоровичтың ижадын ярата инем. Эш барышында уның менән яҡындан аралашырға насип итте. Уға 65 йәш ине. Бөтә пейзаждарын да ул башлыса пленэрҙа яҙа торғайны, һуңғы йылдарҙа, йәйәү йөрөү ауырлашҡас, хәтерҙән оҫтаханаһында яҙыр булды. Портретын уның Салауат урамындағы оҫтаханаһында яҙҙым. Көн һайын сәғәт 9-ҙан төшкә саҡлым эшләнем. 10 – 15 сеанстан һуң портрет әҙер булды. Домашников оҡшатты. Хәҙер портрет Нестеров музейында һаҡлана.

Күргәҙмәләрҙең береһендә мин ул портретты күрҙем. Домашников ҡара костюмда, бик матур ҡиәфәтле һәм үҙенә ныҡ оҡшаған. Мин Рәшит Солтан улынан Домашниковты ҡайһы саҡта совет импрессионисы тип йөрөтөүҙәре хаҡында нимә уйлауын һораным. Ул фекер менән риза булыуын белдерҙе.

Импрессионизм – айырым илдең (1864 йылда Францияла тәүге күргәҙмә була) айырым бер осорондағы йүнәлеше ул. Был хаҡта импрессионистарҙың ижады яҡлы Камил Моклер “Импрессионизм. Его эстетика. Его мастера” китабында ентекле яҙа. Домашников – икенсе заман кешеһе, әммә импрессионистарҙың стилен ул яҡын күрә.

Әгәр тәүге осор ижадында Домашников нескә лирик булыуы менән танылһа, һуңғараҡ ул ваҡ ҡына һыҙаттар менән ҡырыҫыраҡ тонда яҙа башлай. Быны пуантилизм тип тә атарға мөмкин, әммә был “соцреализм”дан тайпылып, Европа стиленә күсеү тигән һүҙ түгел, әлбиттә.

Әҙәп, әхлаҡ төшөнсәләренә тоғро ғүмер итеүсе рәссамдың “үҙгәртеп ҡороу” осорондағы хеҙмәттәрендә әсенешле фажиғә мотивтары бар.

“Май. Ҡыҙыл майҙан” картинаһын ул 1991 йылда яҙа. Бәләкәй генә, йөҙ-ҡиәфәтһеҙ фигуралар хәрәкәттән туҡтап ҡалғандай. Ә төркөм өҫтөнә ауыр ҡара болоттар ишелеп бара. Картина ҙур күләмле, әммә күтәренке парад кәйефе унда юҡ, киреһенсә, кешеләр өҫтөнә ҙур бәләләр ябырылыуы хаҡындағы хәсрәт бар. Ил яҙмышы өсөн борсолоу уны һуңғы көндәренәсә ташламай. “Манаралы Өфө романсы”, “Ҡорамға юл” картиналарында ошо хис ярылып ята. Һуңғы йылдарҙа ул яҡтылыҡҡа, аҡ төҫтәргә йәнә әйләнеп ҡайтҡылай. Хәтер төбөндә һаҡланған тәбиғәт күренештәренә мөрәжәғәт итеп, 1993 йылда “Станцияла яҙ”, 1994 йылда “Яҙғы йыр” картиналарын яҙа. Аңлайышлы булғыһы килә рәссамдың. Тыуған ил, уның киңлектәре һәм тәбиғәте йырсыһы булып танылған Домашников яңы модаға эйәреп, яңы “изм”дар стиленә эйәрергә теләмәй. Рәссамдың картиналары бөтә донъяға билдәле. Улар Рус музейында, Третьяков галереяһында, Художество академияһында, Башҡортостандың И. В. Нестеров исемендәге художество музейында, Пермдәге Дәүләт картиналар галереяһында, Ульяновскиҙың Һынлы сәнғәт музейында, Кемероволағы картиналар галереяһында, Брянск, Омск, Тула музейҙарында, Рәсәй һәм сит илдәрҙәге шәхси коллекцияларҙа һаҡлана.

**Нина ТУРИЦЫНА.**

***

Төркиәнең баш ҡалаһы Анкарала төрки донъяһы әҙәби журналдарының III конгресы булып үтте. Уны «Төрксой» сиктәрендә Евразия яҙыусылар берлеге ойоштторҙо. Егерменән ашыу илдән килгән вәкилдәр әҙәби баҫмаларҙың, ғөмүмән, төрки телле халыҡтарҙың хәл-йәшәйешенә бәйле фекер алышты. Был сарала Башҡортостандан «Ағиҙел» журналының бүлек мөхәррире, филология фәндәре докторы Фәнил Күзбәков ҡатнашты һәм сығыш яһаны.

Сираттағы конгресс Ҡаҙағстанда (Астанала) үтергә тейеш.

***

С. Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаттары шағирҙар Ҡәҙим Аралбай, Ирек Кинйәбулатов, БДУ профессоры Тимерғәле Килмөхәмәтов, яҙыусылар Фәрзәнә Ғөбәйҙуллина, Рәшит Низамов, «Башҡортостан уҡытыусыһы» журналының баш мөхәррире Салауат Кәримов, Стәрлетамаҡтан Хәмит Ирғәлин, яҙыусы Ризуан Хажиев Ишембай ҡалаһының Зәки Вәлиди исемендәге 2-се республика гимназияһында, Көҙән ауылында бөйөк төркиәтсе ғалим Зәки Вәлидиҙең тыуыуына 120 йыл тулыуға арналған кисәләрҙә ҡатнашты. Ҡунаҡтар Көҙән ауылында бөйөк ғалимдың йорт-музейында ла булды.

Әҙиптәрҙе Ишембай районы хакимиәте башлығы Марат Ғайсин ҡабул итте һәм район тормошо менән таныштырҙы.

***

БДУ-ла шиғриәт кисәһе уҙҙы. Унда Ҡәҙим Аралбай, Хәсән Назар, Ирек Кинйәбулатов, Риф Тойғон, Риф Мифтахов, Фәнил Күзбәков, Мөхәммәт Закиров, Зөфәр Вәлит, Лилиә Һаҡмар, Радик Хәкимйән, Риф Әхмәҙиев, “Шонҡар” әҙәби-ижад берекмәһе ағзалары ҡатнашты. Бейеү, йыр-моң менән аралаш шиғри бәйге рәүешендәге кисәне Рәмил Йәнбәк менән Тәнзилә Дәүләтбирҙина алып барҙы. Кисә һуңынан әҙиптәрҙе ректор Мостафин Әхәт Ғәзизйән улы ҡабул итте һәм университеттың яҡын һәм алыҫ киләсәккә иҫәпләнгән эш пландары менән таныштырҙы.

***

Ауырғазы районы башҡорттары ҡоролтайы тәҡдиме буйынса Үтәймулла мәҙәниәт йортонда «Әсәләр көнө», йәғни әҙәби хеҙмәте менән хөрмәт ҡаҙанған ветерандарҙы хөрмәтләү кисәһе уҙҙы. Ауыл һәүәҫкәрҙәренән тыш, сараны Башҡортостандың халыҡ артисткаһы Роза Аҡкучукова – йырлап, ә БР Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтай депутаты, «Башҡортостан ҡыҙы» журналының баш мөхәррәре Йомабикә Ильясова, С. Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Ирек Кинйәбулатов, «Ағиҙел» журналы хеҙмәткәрҙәре Харис Сәғитов менән Сабир Шәрипов фәһемле сығыштары менән күркле итте.

Өфө ҡунаҡтарын район хакимиәте башлығы Марат Ишемғолов ҡабул итте.

***

Туймазы районының Соҡаҙыбаш, Ҡарамалы-Ғөбәй, Ҡандра ауылдарында Камил Йыһаншиндың 60 йәшлек юбилейы һәм «Алдан алтыны» китабының исем туйы уҙҙы. Өс көн дауамында барған сараларҙа автор мәктәптәрҙә, гимназияларҙа, китапханаларҙа халыҡ менән осрашты.

Авторҙың әүҙем ҡатнашлығында «Йәш ҡәләмдәр» положениеһы ҡабул ителде. Уға ярашлы, йыл һайын райондың йәш таланттары бер нисә номинация буйынса билдәләнәсәк һәм аҡсалата премия менән бүләкләнәсәк. Сараларҙа әҙиптең туғандары, ғаиләһе, ауылдаштары, дуҫтары ҡатнашты.

***

Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр театрында күренекле башҡорт яҙыусыһы, С. Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Рәшит Солтангәрәевтың тыуыуына 75 йыл тулыуға арналған Хәтер һәм ҡәҙер кисәһе булды.

Яҙыусының тормошо һәм ижады хаҡында Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе Рауил Бикбаев телмәр тотто, Р. Солтангәрәевтың ҡәләмдәштәре: «Ағиҙел» журналының баш мөхәррире, яҙыусы Әмир Әминев, шағир Ирек Кинйәбулатов сығыш яһаны.

Кисәгә яҙыусының күп яҡташтары, туғандары һәм замандаштары килгәйне. Көйөргәҙе районы хакимиәтенең мәҙәниәт бүлеге мөдире Илнур Туйгилдин, Таймаҫ ауыл биләмәһе хакимиәте башлығы Рәйсә Янбаева, яҙыусының бер туған апаһы, ветеран уҡытыусы Хәҙисә Кинйәбаева ҡыҙыҡлы иҫтәлектәре менән уртаҡлашты. Аҙаҡ Милли йәштәр театры артистары Р. Солтангәрәевтың «Татар һәм башҡорт» хикәйәһе буйынса (Рәлиф Кинйәбаев инсценировкаһы) спектакль күрһәтте. Режиссеры – С. Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, БР-ҙың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Гөлдәр Ильясова, рәссамы – БР-ҙың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Азамат Ғиләжев, ролдәрҙе БР-ҙың атҡаҙанған артистары Мәғәфүр Усманов, Вәкилә Ҡалмантаева, Нәғим Нурғәлин, артистар Альберт Шәрәфетдинов, Ратмир Абдуллин, Зөлфәр Әхмәтов, Илшат Салауатов һәм башҡалар башҡарҙы.

***

З. Вәлиди исемендәге Республика милли китапханаһында күренекле башҡорт әҙибе Аҫылғужа Баһумановтың (Аҫылғужа) тыуыуына 65 йыл тулыуға арналған Хәтер кисәһен Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе урынбаҫары Ҡәҙим Аралбаев алып барҙы. Артабан һағышлы иҫтәлектәре менән профессорҙар Әхмәт Сөләймәнов, Ғиниәт Ҡунафин, шағирҙар Ирек Кинйәбулатов, Риф Тойғон, прозаиктар Ринат Камал, Фәрзәнә Аҡбулатова, Сабир Шәрипов, ҡурайсы-педагог Юлай Ғәйнетдинов, Аҫылғужаның хәләл ефете Миңниса Баһуманова, БР Ҡатын-ҡыҙҙар йәмғиәте активистары һ.б. сығыш яһаны. Сарала китапханасылар махсус күргәҙмәләр ҙә ойошторғайны.

***

Ҡазан ҡалаһында Башҡортостандың, башҡорт шағирҙарының яҡын дуҫы, татар шиғриәте классигы, ТР-ҙың Ғ. Туҡай исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Хәсән Туфандың тыуыуына 110 йыл тулыуға арналған ҙур юбилей саралары уҙҙы. ТР Фәндәр академияһының Ғ. Ибраһимов исемендәге Тел, әҙәбиәт һәм сәнғәт институтында «Хәсән Туфан ижады һәм хәҙерге татар әҙәбиәте» тигән темаға төбәк-ара фәнни-ғәмәли конференция булды.

Пленар ултырышта ҡотлау һүҙе менән Башҡортостан яҙыусылары исеменән шағир Ирек Кинйәбулатов сығыш яһаны. Ул шулай уҡ Муса Йәлил исемендәге Опера һәм балет театрында уҙған «Ағыла ла болот ағыла» тип аталған шиғри кисәлә ҡатнашты.

Конференция эшендә шулай уҡ Өфөнән филология фәндәре кандидаты, БДУ доценты Рәүеф Иҙрисов ҡатнашты.